


6ЧЭ

# БИЙШЕВА

## ОЛО ЭЙЕК БУЙЫНДА



Зәйнәб
БИИШЕВА

# ОЛО ЭЙЕК БУЙЫНДА

*роман*

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1990

ББК 84 Баш
Б 43

БИ...И...ТЕКА
объед...
Уч...
фкоме...
Т

§

**Биишева Зәйнәб**

**43** Оло Эйек буйында. Роман.— Өфө: Башҡортоетан китап нәшриәте, 1990.— 288 бит.

15ВЫ 5-295-00589-5 (т. 2)

Башҡортостандыңхалыкязҙыусыһы,рес11убликанын.СалауатЮлаев исемендәге премияһы лауреаты Зәйнәб Биишеваныи «Оло Эйск буйында»романы — «Яҡтыға» трилогияһының икенсе китабы. Автор был әҫәрендә граждандар һугышыи, шул осорҙа ауылдарҙагы синфи көрэш, массаларҙың рухи һәм социаль яктан үҙгортеү картиналарын киңплаида һүрәтләй

**ББК** 84 **баш**

Б 5 8 9 0
**М 121(03)—90**
**15ВК** 5-295-00589-5 (т 2)
5-295-00638-7

Биишева Зәйнәб, 1990

## Беренсе бүлек

«Кеше йәшэү **өсө»** генэ уҙен үлем ҡурҡышысы аҫтына ҡуя»

*Фукидид*

I

Июль айыиыц ҡурмас кеүек ҡурылған ҡыҙыу көндәреЕр, күк тотош бер монарлы эҫелектән иҙрэп ял итә./Гүбәлэре болоттарға олғашҡан йөҙ йәшәр мөһәбәт ҡарайғайҙар, ҡолас йәйеп үҫкән ҡеүәтле имәндәр батшалығы бынауы ҡара урмандар ҙа, иреккә, иркенгә юл ярырға ашҡынып, бөгөл һайын шыңғырап аҡкан кескәй ағын йылғалар ҙа, берсә ағас* тарҙын. йәшел көмбәҙе аҫтына йәшеиеп, берсә текә, ҡаҡ түбәләргә үрелеп, алға, билдәһеҙ алыҫлыктарға үрмәләгән һикэл-» тәле ҡыҫыҡ тау юлдары ла, түбәһе ҡалай менән ябылған мәсетте һәм бер нисә хәлле хужаныц йортон иҫкә алмағанда ҡыйыҡһыҙ, тупаҡ ейҙәрҙән торған, алабута, дегонәк баҫкан буш урамлы кескәй ауылдар ҙа, былай ҙа ниҙәндер ҡото осоп ергә һыйынған ошо етемәк ауылдарҙы үҙснең бәйһеҙ көс-ҡәүәте менән бөтөнләй күмеп китсрҙәй булып, дауыл күтәргән дингеҙ тулҡындары шикелле шомло ишелеп яткан икһеҙ-сикһеҙ күк тауҙар ҙа'.. барыһы ла, барыһы ла ғәжәп бер рәхәт тынлыҡка талған.|Уларҙыц был ҡымшанмаҫ тыныслығын, татлы наҙын боҙбр көс юк ксүек донъяла. Әммә был бер ҡарауҙа ғына шулай. Асылда, хәҙер инде бында ла Ьуғыш ораны ерҙе тетрәтә. Шрапнелдэр ярылыуы, пулеметтар бышылдауы ойоп ултырған тирәк япраҡтарын әлдөн-әле тертлэтеп уята. Был яҡта ла бар булған ярлы-ялпы үҙенең йәш совет республикаһын һаҡлап ҡалыу өСөн ҡорал тотоп яуға күтәрелгән. Тыуған илдең яҙмышы — революция дошмандарына ҡаршы — был төпкөлдәрҙә лә аяуһыҙ көрәш йәйеп ебәреүгә бәйләнгән. һәм бына нисә ваҡыттар инде Каширин отряды тап ошо төпкөлдә ҡаты һуғыштар алып бара. һәр бөгөлөштө, һәр ҡаяны һуғыш менән яулап, күпте кисергән Урал һыртынын. иң бейек түбәһенә үрмәләй

Күпселегендә Яйык, һаҡмар буйы казачийҙарынан торған

һәм Иштуған, Әхәт, Айһылыу кеүек башҡа милләт вәкилдәре лә күп булған был отряд быҒаса Орск, Ырымбур далаларында, аҡ казактарға, дутовсыларға ҡаршы һуғышта сыныҒып, аңғармаҫтан оҫта, ҡыйыу һөжүмдәр менән күп уңыштарға өлгәшеп, халыҡ алдында күптән инде дан-хөрмәт ҡазанғайны. Иҫәнбәттә Илсеғол дружинасыларын төнгө ҡараҡ кеүек килеп баҫкан һатыбал бандаһын да, волость үҙәгендә ҡоторонған Федька Рябой бандаһын да ул шулай көтмәгәндә килеп тар-мар итте. һәм шунан һуң күп дружинасылар үҙҙәрен ҡырылып бөтөүҙән ҡотҡарып ҡалған был ҡыҙыл отряд сафына инде. Улар араһында элекке каторжник Тимербай ҙа, донъя һуғышында ике тапҡыр тимер тәре менән бүләкләнгән батыр һуғышсы Закир ҙа бар. Ләкин һуңғы айҙа каширинсылар, аҡ казаҡтарҙың, аҡ чехтарҙын, дәррәү ҡыҫырыҡлауы арҡаһында Урал төпкөлөнә сигенергә мәжбүр. Алда ҡыҙыл отрядҡа ышаныслы терәк булырҙай ерҙәр — Баймаҡ, Түбә рудниктары, Белорет ҡорос-баҡыр заводтары ята. Көньяҡ Уралдың металлургия үҙәге Белорет ҡалаһында эшселәрҙең көслө отрядтары тупланыуы хаҡында хәбәр алынған. Каширин отряды ла хәҙер, улар менән берләшеп, көстө ишәйтергә лә дошман ҡамауын йырып үтергә, ҡыҙыл ғәскәр частарына барып ҡушылырға ынтыла. Ә дошман ҡамауы һаман нығыраҡ ҡыҫыла, ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙән, төп көстәренә барып ҡушылыу мөмкинселеге һаман ауырлаша барыуға ҡарамаҫтан, отрядтын, боевой рухы күтәренке, аҙымы ышаныслы. Революция өсөн йән биреүҙән, мөҡәддәслегенә бөтә йәрәктән ышаныш, үҙ ирке менән ҡоралға тотонған был партизандарҙың күнелен ҡайтарырҙай, рухын төшөрөрҙәй көс тә, ҡаршылыҡ та донъяла юҡтыр һымаҡ. Хатта отрядтын. юлын быуырға, уны ошонда, Урал тауҙары араһында, юҡ итергә теләп, әленән-әле һөжүм итеп торған дошман көстәренең арта барыуы ла партизандарҙың ихтыяр көсөн ҡаҡшата алмай. Улар теләһә ниндәй шартта ла һуңғы һулыштарына хәтле көрәшергә әҙерҙәр. Азатлыҡ тигән бөйек маҡсаттан көс алып көрәшкә тотонған был батырҙар өсөн ҡурҡыу, сигенеү, икеләнеү кеүек ваҡ тойғолар ят нәмә. Шуға, ахыры, уларҙың һәр ҡайһыһы берҙәй үк яҡты сырайлы, уйынсаҡ һүҙле, теремек. Тик бына ошо арала нисектер Закир ғына үҙенең ҡайһы бер ҡылығы менән башҡаларҙан айырылып тора. Бер ҡараһаң, ул күнелле, уяу, илгәҙәк егет, батыр, оҫта һуғышсы. Пулеметтан үтә мәргән ата. Бәрелеш ваҡытында айырата һалҡын ҡанлы, етеҙ аҡыллы булып китеүсән. Икенсе ҡараһаң, бигерәк тә һуғыш булмаған саҡтарҙа бөтә кешенән ситләшеп, томһаланып йөрөй башлай. Бына ул бөгөн дә шулай бошоноп, ниндәйҙер күңелһеҙ уйҙарға бирелеп, эйәр ҡашағаһына тағылған ҡымыҙ турһығы шикелле, мәйелһеҙ һалпаңлап бара. Күрәһен мейеһендә лә осо-башы күренмәҫ шыҡһыҙ уйҙар, әсегән ҡымыҙ кеүек, ғыҙлай торғандыр...

Бөтә дала кешеләре һымаҡ ук, Закир ҙа икһеҙ-сикһеҙ ябай киңлектәргә, әрем, ҡылған еҫтәренә, шаян-теремек дала елдәренә, мул һыулы ташҡын йылғаларға ғашиҡ. Был мөһәбәт, һылыу һәм шомло тауҙар, йөҙ йәшәр ҡара урмандар, аҫылмалы ҡая тауҙар уға һис тә оҡшамай. Бәлки, шуғалыр, отряд Урал төпкелөнә тәрәнерәк үтеп ингән һайын унын. мейеһен тынғыһыҙ бер уй йышыраҡ бырауылай:

«Йә, ҡайҙа барабыҙ инде? Ниңә сигенәбеҙ?.. Нин.ә тегендә, үҙебеҙҙең далала, аҡ чехтарҙы енгәнсә һуғышманыҡ? Нинә үҙебеҙҙең яҡтарҙы улар ҡулына ҡалдырҙыҡ?..»

Ҡыҙыл Армиянын. төп көстәре менән бәйләнеш өҙөлөүе, дошманды тылдан ҡыйратып үтер өсөн революцион көстәрҙе туплау, сафтарҙы нығытыу кәрәклеге хаҡындағы анлатмалар униң аңына барып етмәй йәки төптө анларға теләмәй ул.

«Был тауҙар араһында мин нимә күрәм, кемде беләм?— тип ныҡыша ул күңеленән, тағы ла бошоноборак,— дуҫмы ул, дошманмы? Үҙ яғында, исмаһам, бөтәһе лә асыҡ. Баймы, ярлымы, яманмы, яҡшымы — алдан белеп тораһың. Әйләнәтирәндә дала... иркенлек... Ҡайҙа нимә әрбәндәгәне, йылтылдағаны ун биш-егерме саҡрымдан күренә... Ә бында.. Дошман, бәлки, ике аҙым ерҙә боҫоп яталыр — абайламаҫһын... Алйот кеүек алъюҫыҡҡа баш һалырһың...»

Бына ул, ҡапыл уянып киткән һымаҡ ҡалкынып, тирә-яҡҡа алан-йолан ҡара*нып алды. Улар, Нуҡай, Мораҙым, Ыуары кеүек тәбиғәттең ин, гүзәл ҡултыҡтарына һыйынып, наҙланып ятҡан кескәй генә матур ауылдарҙы уҙып, ин, текә, урманлы юлдарҙың береһенән Урал һыртына барып менгәйнеләр. Яҡ-яҡта ҡарағусҡыл тауҙар, ҡара урмандар, алда бер төрлө ҡаҡ яйла, ә унан ете-ят Урал арты кинлектәре, ҡырыҫ, күңелһеҙ яҡтар...

Закирҙын, күңеле генә түгел, бөтә тәне ҡурылып киткәндәй булды. Ул аптыраулы, һораулы ҡарашын үҙе менән йәнәш барған Иштуғанға күсерҙе. Егеттең илһамлы яҡты күҙҙәре алыҫ күк тауҙарға төбәлгән, дәрт бәреп торған баҙыҡ, йәш йөҙөндә бәхет нуры уйнай.. Закир униң ат аҙымы ыңғайына әкрен генә мөнгөрләп барған йырына ҡолаҡ һалды:

Ҡуҙғал, уян, ләғнәт ителгән
Ҡолдар һәм астар донъяһы

— һин һәр ваҡыт шул йырҙы йырлайһын,.. Башҡа йыр белмәйһеңме әллә, мырҙа?

Иштуған юл ситендәге кипкән үләндәргә ынтылып маташҡан атынын теҙгенен тарта биреп ҡуйҙы ла уйланып ҡына яуап бирҙе.

— Бүтән быңдай йырҙы белмәйем...
— Нисек быңдай?
— Өндәй, уята, әйҙәй торған..
Закир аптыранып Иштуғанға төбәлде:
— Өндәй... Уята... Әйҙәй...— тиһең, ә?.. Ә нимәгә? Ҡайҙа әйҙәй?

Үҙ күңелендәге оло ышаныс, яҡты өмөт менән ярһыған Иштуған ауылдашының был минутта үтә ҡараңғы сырайлы булыуын абайлай алманы. Шуға ахыры тағы ла дәртләнә төшөп:

— Көрәшкә!— тип ҡуйҙы.— Керәшкә әйҙәй, Закир ағай!

— Ни өсөн көрәшкә?— тип һораны Закир, тағы ла ҡомһары төшөп:— Нимә өсөн, тим?

— Ни өсөн булһын?! Йәшәү есөн. Ирекле, бәхетле булып, кеше булып йәшәү өсөн!

— Йәшәү өсөн тиһең инде, ә?,,,

— Әйе, тап шулай, йәшәү өсөн утка-һыуға инәбеҙ, ут-һыу үтмәй, бәхет килмәсен-беләбеҙ. Шулай бит, дөрөҫ бит, агай?

Закир өметһеҙ, тоноҡ тауыш менон үҙ алдына ғына:

— Әлләсе...— тине лә тынды. Юлдашынын. ирек, бәхет, көрәш хаҡында етди аңлап һөйләүҙон бигерәк йәшлек ярһыуы менән ҡанатландырылған татлы хыялға биролгәнгә оҡшаған артабанғы һүҙҙәренә бүтәнсә ҡолаҡ һалманы. Тағы баяғыса, эйәр әҫтөндә бәйһеҙ һалпанлап, буталсыҡ уйҙар иркенә бирелеп бара бирҙе.

Тауҙарҙа йәйге эҫелә лә кисен таш һалҡыны бәреп тора. Бөгөн уга һал кынса Себер еле лә ҡушылды. Бүтән ваҡытта Закир, моғайын, быға иғтибар ҙа итмәҫ ине, ә бөгөн әйләнә-тирәләге бар тәбиғәт, бөтә донъя уға кире яғы менән әйләнгән, бөтәһе лә уға ҡырын ҡарай, ҡаға, ситләшә һымаҡ тойолдо. Был уйҙан үҙенен. тыуған яҡтары, Оло Эйек буйынын. яцы бешкән икмәк шикелле йомшаҡ, йылы, хуш еҫле йәйге кистәре тағы ла яҡынырак, һөйкөмлөрәк куренә башланы. һәм ул, ницәлер, шунда ук Оло Эйектең кырсынлы шарлауығында сыр-сыу килеп һыу инеп йөрөгән тунан баш малайҙарҙы, оҙон сәсле, сағыу тауышлы арыҡ ҡыҙыҡайҙарҙы һағынып иҫкә алды. Ә һулда, ҡараһыу күк ҡаянын. осло түбәһенә төшөп, монарланып яткан үтә дәү, ҡыпҡыҙыл ҡояшҡа шомланып, томһайып ҡараны. Йәне кейеп, хатта уға эстән генә мыжып ҡуйҙы:

«Йә, һин дә нимәгә ығышып ҡалдың?.. Батһан, йәһәтерәк кенә бат та ҡуй... Юлсынын юлын күҙәтеп маташма! Иртәгә тағы ҡалҡырһың... Миллион-миллион саҡрымдар уҙып тағы көнсығыштан барып сығырһың... Л-әкин ни мәғәнә?.. Ни емөт, ни ҡыуаныс, ни йыуаныс алып килерһең һин кешегә... Ә минең кеүек зимак есөн юлдыц тоҡаны бер ул: кеше ҡулында. Кәрәк икэи — һүтә... Кәрәге бөттө — өҙеп ырғыта...»

Бормалы, һикәлтәле тау юлы сыбар йылан шикелле һығыла-бөгөлә һаман үргә, көнсығышҡа үрмәләнe. Закирҙын уйҙары ла, йә алыҫ үткәндәргә, йә булып яткан хәҙерге хәл-әхүәлдәргә ҡағыла-һуғыла, берсә дебет шәл бәйләгәндәге кеүек күҙҙең яуып алып торған биҙәктәргә әйләнеп, берсә үҙенең бер төрлөлөгө, ырамһыҙлығы менән йәнде биҙҙереп, өҙлөкһөҙ тарала-һүтелә барҙы. Уйҙарҙың ҡайһылары ук шикелле төҙ, үткер, икенселәре тау юлынан да бормаслыраҡ, һикәлтәлерәк... Бәлки, ғүмерендә тәүге, йә аҙаккы тапкырҙыр, ул үҙенең шаян бала сағын, тынғыһыҙ йәшлеген, ғөмүмән, йәненә ял, теләгенә таяныс тапмаған ҡыҫҡа ғына ғүмер юлын ентекләп күңел күҙенән үткәрҙе. Көтөлмәгән борсоулы һорауҙар алдында йыш-йыш аптырап ҡалды: «Кем ул, ни өсөн йәшәне? Алда уны нимә көтә?»

Шулай булды инде, Закир артыҡ тычлаусан да, ярау-сан да, тырыш та булманы. Артыҡ ирек һөйөүсән тынғыһыҙ ҡылыгы, үҙе лә, әйләнә-тирәһендәге кешеләр ҙә яҡшылап аңлап етмәгән төпсөнөүсән, белмәгән-күрмәгәнде белергә, төшөнөргә тырышыусан күңеле уны малай ғына сағынан уҡ ҡайҙалыр тартып, саҡырып ҡына торҙо. Ләкин үҙенең ҡылған эшенә, күргән нәмәһенә тулыһынса төшөнөргә нимәлер һәр саҡ ҡамасауланы. Бына бит әле лә үҙе ҡулына ҡорал тотоп аҡтарға ҡаршы һугышып йөрөй. Ҡыҙыл партизан. Ә үҙе һаман хаҡлыҡтың ҡайһы яҡта булы уына, әйләнә-тирәлә ниндәй ваҡиғалар булып ят.ыуына, үҙенән был көндә нимә талап ителеүенә һаман да ныҡлап ҡына төшенөп етмәгән. Бәлки, был уныц ғына ғәйебе лә түгелдер?.. Әйе, малай сағынан уҡ әллә нисек арҡа һөйәкһеҙерәк булды шул Закирҙың ҡылығы. Егәрлелек, аҡыллылыҡ менән генә түгел, ирҙәрсә көслө ихтыярлы, ҡаты ҡуллы булыуы, уландарын, килендәрен дер һелкетеп тороуы менән Илсеғолда «уҫал бейем» тип даны сыҡҡан Таиба әбей ҙә хатта унын был ҡылығы алдында күп ваҡыт көсһөҙ булып ҡала ине. Ҡайһы саҡта әсәһе, үҙ эшенән ҡәнәғәт булып, инде быны туҡмап тура юлға күндерҙем, инде был ихласлап эшкә тотондо, хәҙер инде был ни ҙә булһа алып барып сығарыр, тип өмөтләнергә өлгөрмәй, Закир, сығынсы ат һымаҡ үрһәләнеп, кире сигенә, ары һуғыла,

бире бәрелә йәки баш бирмәй бөтөнләй ситкә тартып алып китә. Таиба әбей генә түгел, хатта Закир үҙе лә аҙаҡ бынын ни өсөн шулай килеп сығыуына төшөнмәй тора һымаҡ. Бына бит уҡыу менән дә тап шулай булды.

Ул саҡта Илсеғолда бетә малайҙар ҙа, ҡара көҙ етеү, ҡыр эштәре бөтөү менән, Ғаббас муллаға уҡырға йөрөй башлай. Ярым емерек һалҡын мәҙрәсәнең туҙанлы ҡаҡ иҙәненә ялан аяҡтары күгәреп туңғанға хәтле йөгөнөкләп ултырып, әфтиәк, ҡөрьән уҡыйҙар. Күптәре егет булып еткәнсе әлепбейҙе лә өйрәнә алмай аҙапланып ғүмер уҙғаралар ине. Йәшләй тол ҡалған Таиба әбей ҙә, тигеҙ ғаиләләрҙән ҡалышмай, өс улын да мәҙрәсәгә йөрөттө. Арала иң тырышы, баҫалҡыһы уртансы улы Хисбулла булды. Ул арәһенең кәцәшен дә тынланы, мулланың һүҙен дә йыҡманы. Ғаббас мулланын, һүҙе менән әйткәндә, иң инсафлы, итәғәтле шәкерт булды. Был һәйбәт ҡылығына әҙ генә зирәклек тә өҫтәлһә, Хисбулла, мулла булмағанда ла, мәзинлеккә һис шикһеҙ яраҡлы кеше буласаҡ, ғалим-ғөләмә алдында шөһрәтле урынды аласаҡ ине. Әммә мулланың был күрәҙәлеге барып сыҡманы. Хисбулла етеп бөткәнсе мәҙрәсә тупһаһын тапаны, йәп-йәш көйө оҙон елән кейеп мәсеткә йөрөнө. «Хисбулла суфый» тигән исеме сыҡты, ҡарттар, ҡарсыҡтар хәҙерге «аҙғын» замана йәштәре араһында шундай тәҡүә егеттен килеп сығыуына ҡыуанып та, һоҡланып та бөтә алманы. Таиба әбейҙең дә күңеле ғорурлыҡ менән тулды. Ул хатта төштәрендә йыш ҡына мулла йәки мәзин әсәһе булған, имеш, ауылда иң ҡәҙерле, хермәтле байбисәгә әйләнгән, имеш, тип күргеләй башланы. Ләкин тормош үҙенекен итте. Хисбулла мәҙрәсәнән таптаҡыр итеп ҡырылған баш, килешһеҙ оҙон елән, килбәтһеҙ суфый ҡыланышынан башҡа бер нәмә лә алып сыҡманы. Хатта йүнләп уҡырға-яҙырға ла өйрәнә алманы. Инде өлкән улы Хаммат менән кинйә улы Закирға килгәндә, улар үтә зирәк булдылар. Әллә ни арала һәйбәт итеп уҡырға, яҙырға өйрәнеп алдылар. Унан мәҙрәсәне ташлап та сыҡтылар.

— Бай балалары, мулла уландары уҡыһын. Беҙ уҡып барыбер мулла булмабыҙ,— тине Хаммат.— Мин эшләрмен, һиңә донъя көтөргә булышырмын. Мәҙрәсәлә сереп ятыу һинең улыңа ҡул түгел, әсәй.

Шунан Таиба әбей уны ун биш йәшендә саҡта, көсләп, туҡмап тигәндәй өйләндерҙе. Ун өс йәшлек Өммөгелсөмдө алып бирҙе. Ике бала шулай итеп донъя көтеп китте...

Ә бына Закирҙы ул тота алманы. Закир башта, ҡырҡтартмасыға тамаҡ хаҡына ялланып, тартма күтәреп, «ил гиҙеп» сығып китте. Китап ярата ине Закир. Күп уҡығыһы, күп белгеһе килә ине. Ләкин әсәйҙән әрләнә-туҡмала йомортҡа урлап һатып алған китаптар менән алыҫ барып буламы ни? Ә бына ҡырҡтартмасыла күпме китап?! Ни хәтле теләйһен, шул хәтле уҡы. Ҡырыҡтартманы күтәреп ауылдан ауылға йөрөй торғас, арып ялға туҡталған саҡтарҙа иҫ киткес ҡыҙыҡлы ян.ы донъяға — китаптар донъяһына башкөллө инеп юғалаһың да тамаҡ ас, өҫ яланғас икәнде түгел, хатта ҡырҡтартма ҡайышы өйкәгән елкәнең, суғырмаҡланып ҡатҡан ялан аяҡтарҙың йөрәккә үтеп һыҙлауын да онотаһың... Ғәмһеҙ сабый саҡ. Ул бөтәһен дә күтәрә, бөтәһенә лә сыҙай. Тик һин унан донъянын, ғәжәп серҙәрен йәшерергә, тиңһеҙ кинлектәрен ҡапларға ғына тырышма!..

Шулай ул көҙгә хәтле ауылдан ауылға йәйәү ҡырҡтартма ташып йөрөне. Елдән ҡағылып, ҡояшта бешеп сүл ғәрәбе шикелле ҡарайған, ябыҡҡан, үҫкән малайҙы, көҙ көнө ҡайтып ингәс, әсәһе йоҙроҡтары талғансы, тал сыбыҡ һынғансы туҡманы. Закир бер ҡаршылыҡ та күрһәтмәне.

— Әсәй, күпме теләйһен, шул хәтле яр. Тик башҡа ғына һуҡма. Юҡһа йәй буйы күп ыҙалыҡ менән алған белемемде елгә ебәрерһең,— тип шаярҙы ғына.

— Тап шул башыңды туҡмап алйотлоғонды ҡыуырға кәрәк тә! Икенсе рәт аҡыллыраҡ булырһың! Өйҙән ҡасмасһыщ! Зимагор булмаҫһын!— тип туҡый-туҡый туҡманы әсәһе.

Ун биш-ун алты йәшкә етеп, Таиба әбей: «Бынынын да, Хаммат ағаһы шикелле, көсләп өйләндереп ҡуймаһам, сәпсим аҙып китер»,— тип йәтешле килен эҙләй генә башлағанда, Закир тағы өйҙән ҡасты.

— Ырымбурҙа йөрөй икән. Зимагор булып киткән икән,— тип һөйләнеләр Илсеғолда. Хаммат ағаһы, ысынлап та, уны Ырымбурҙан барып тапты. Өйгә ҡайтырға димләне. Закир был саҡта китап лавкаһы тотҡан бер татарҙа йомошсо малай булып йөрөй ине.

— Өйҙә нимә бар?— тип аптырап һораны ул ағаһынан.

— Ә бында?— тип һораны Хаммат та, аптырап.— Улайға ҡалһа, бында ла бер ни ҙә юҡ.

— Бар,— тип ҡырт киҫте Закир.— Китаптар бар. Беләһенме, лавкасы ағай китаптарын минән бер ҙә йәлләмәй. Уҡы, егет, күҙенде ас, ти. Китапты уны һата белеү есөн, ин. элек уҡый белергә, ә уҡый белер өсөн, китапты яратырға кәрәк. Һинән бынамын тигән китап һатыусы сығыуы мөмкин, ти...

Закир шул китеүҙән һуғышҡа хәтле ҡалала, илсе-ғолдарса әйткәндә, зимагор булып йөрөнө. Таиба әбей һүҙе менән әйткәндә, тынғыһыҙ башына урын таба алмай ыҙа сикте. Эйе, крәҫтиән булып ер-Һыуҙы һөйөп, оя ҡороп йәшәргә теләмәне, ә ҡала кешеһе булырға һөнәр ҙә бай-лыҡ та юҡ ине. Шулай ике уртала йөрөп үтте Закирҙың йәшлеге. Дөрөҫ, һуғышта, йәшәү менән үлем араһында аҫылынып торған фронт тормошонда, Закир ҙа бер аҙ үҙ-гәрҙе. Уйланырға, әйләнә-тирәгә иғтибарлыраҡ булырға өйрәнде. Йыш ҡына үҙенең үткән һәм хәҙерге хәле хаҡында етди генә уй йөрөтә башланы.

— Йәшәлмәгән!— тигән ҡырҡа һығымтаға килә ине ул былдай саҡтарҙа.— Йәше егерме бишкә еткән, ғүмер елгә киткән. Йә, ошоғаса йорт-ерен., бала-сағаң, эйәрле атың булмаһынсы әле?! Вот һиңә, пожалуйста! Бынауында, ете-ят ерҙә, ауып ҡалһаң, үҙевде иҫкә алыр кешен. дә юҡ бит! Ах зимак, зимак!

Был уйҙарҙан ҡайһы саҡ күцеле йомшарып китә, мон,-ланып зимагор йырҙарын да йырлап ебәргеләй:

Зимагор булдым йәштән —
Ҡулым туйманы эштән.
Йөҙөм ялтыр, өнөм ҡалтыр.
Тукып йәшойем эстән...

Ә ҡайһы саҡта тағы, ғәҙәтенсә, ярһыу, етеҙ, вайымһыҙ булып йөрөй, әсәһенә өметлө хаттар яҙа:

«Әсәй! Белеп тор, был ҡәһәр һуккыр һуғыш туктау менән ауылға ҡайтам. Зимак булып йөрөү етер,— ти.— һин унда, әсәй, үҙеңә берәй йәтеш килен дә күҙләп ҡуй, пожалуйста. Беләһец бит, Закирыц ет.сүҙән үтеп киткән. Ҡайтып, баш-ҡалар шикелле, гелдөр-гөлдөр гөрләшеп, донъя көтөп йәшәр-гә теләйем хәҙер...»,— тип өҫтәп тә ҡуя. Ләкин был хаттар бер ҡасан да Таиба әбейгә барып етмәй. Сөнки Закир яҙып бөтер-бөтмәҫтән икеләнә башлай: «Ниңә әсәйемде, бахырҙы, өмөтләндерергә әле?.. Кем белә донъяны... Иртән ҡалай булырынды, нимә теләрецде улай анһат ҡына ҡырҡып әйтеп булһа ине...»,— ти. Хатты йыртып ыргыта.

Таиба әбойгә иҫәнлек-һаулыҡ хаҡында, Закирҙын. һуғыш-та ла һаман шул монһоҙ-ғәмһеҙ зимак булып ҡалыуы хаҡын-да һөйләгән ҡоро, ҡыҫҡа ғына яҙмалар килгеләп тора. Хатта «Георгий крест» ордены менән наградланыуы — әсә кеше өсөн оло ғорурлыҡ булған ваҡиға хаҡындағы ха-тында ла уның үҙенә хас вайымһыҙлыҡ ярылып ята ине.

«Әсәй, һинең зимак улындын. түшенә, батыр һуғышсы тип, тимер тәре таҡтылар. Вот, мәҙәк! Кеше үлтереү ҙә булған икән бер батырлыҡ?!»—тип хәбәр итә ул.



Илгә ҡайтыу, тыуған ерҙә нигеҙләнеп йәшәү теләген За-кир әсәһенә яҙмаһа ла, батша төшөрөлгәндән һуң, күп тә үтмәй, ҡайтып килде. Уйынлы-ысынлы тауыш менән:

— Әсәй, зимак улынды ҡабул итеп ал, пожалуйста. Бы-нан ары ул һинең янындан бер аҙым да ситкә китмәйәсәк!— тип белдерҙе.

Таиба әбейҙең бәхете, яҙғы Оло Эйек шикелле, ярҙарынан ашып сыкты: бынан аҙна-ун көн элек кенә уның өлкән улы Хаммат -кайтып килгәйне. Хәҙер Закиры, төп йорттоң ниге-ҙен ҡоротмай һаҡларға тейешле кинйәһе, ҡайтып теште лә баһа!

— Ярабби... «Бирәм тиһә ҡолона — сығарып ҡуйыр юлы-на», тиҙәр бит! Йәсе, арыҫландай ике улын. ут эсенән имен-иҫән ҡайтып инһенсе!—тип һөйендө Таиба әбей.— Өнөмме-төшөммө тип, үҙ бәхетемә үҙем ышанмай торам хатта!..

Ысынлап та, уға, тормош ауырлығын етерлек кисергән янғыҙ ҡатынға, ҡарт көнөндә үҙ өлөшөнә төшкән ошондай оло ҡыуаныска ышаныуы ҡыйын ине. Был көндәрҙә ул тотош яҡтырып, йәшәреп киткәндәй булды. Ирҙәрсә ауыр, эре аҙым-дары еңеләйҙе, ҡарашы йомшарҙы, тауышы яғымлыланды. Бәлки, ул ғүмерендә тәү тапкырҙыр шулай әйләнә-тирәһен-дәге тормошҡа танымаҫлыҡ дәрәжәлә һоҡланып, яратып, ҡыуанып ҡарай ине. Нисек шулай булмаһын, уның мең ауыр-лыҡ менән үҫтергән уландары янында бит! Бнгерәк тә кесеһе. Закиры!.. Таиба әбейгә ул бөтә уландары араһында иң мату-ры, аҡыллыһы булып күренде. Унын. көнгә янып, елгә елһеп, ваҡытһыҙ оло сырай алған ҡакса йөҙөнә, сөм-ҡара мыйығы-на, оҙон сәсенә яратып, артыҡ ябыҡ кәүҙәлә таяҡҡа элгән кеүек һалынып торған иҫке генә һоро шиненәнә, туҙыуы еткән һалдат итегенә ғорурланып ҡараны. Тик бына улынын, элеккесә, малай саҡтағыса, үҙ һүҙлеләнеп, текә ҡарап тор-ған ҡуңыр күҙҙәре менән нык ҡымтылған ирендәре гснә әсәнең бәхетенә шик төшөргөләп ҡуя ине.

«Ай-һай, белмәйем шул, балаҡай, белмәйем... Элгәре саҡ-тағы кеүек, әҙ генә хәл йыйғас та, ҡала яғы тартып, аҙып сығып китмәһән, ярар ине лә бит!...»— Шулай ҙа улына ҡыуа-нып, өмөтлө яуап ҡайтара:

— Йә, ҡолонсағым, әйткән һүҙең фәрештәнең «амин!» тигән мәленә генә тура килһен... Бынан ары гел өйҙә генә йәшәргә яҙһын... Хужа булып... Донъя көтөп... Сыулатып уландар, ҡыҙҙар үҫтереп... Атандың нигеҙенә ҡот индереп... тигәндәй.

— Шулай булһын, әсәй. Шулай булыр,— тип раҫлай За-кир ҙа.— Беҙ әйткәс, шулай булырға тейеш тә ул!

Ләкин фронтовиктарға, шул иҫәптән Закирға ла, тыу-ған йорт йылыһында оҙаҡ ҡыҙынырға тура килмәне. Тор-

мош — тау йылғаһы шикелле шаулап алға тәгәрләне. Әйләнә-тирәлә ваҡиғалар өйөрмәһе ҡупты. Февраль ваҡиғаларын Октябрь көндәре күмеп китте. Граждандар һуғышының ҡеүәтле яңғырашы ксскәй Илсеғол урамдарына ла килеп инде. Ауыл ике дошман лагерына бүленде. Отрядтар төҙөлә башланы. Уның береһен Ташһарайҙа Собхан старшина улы һатыбал ойошторҙо. Шундай уҡ отрядты Мраковкала кулак Сергей Хитровтын, офицер улы Федька Рябой төҙөнө. Был кулак отрядтарына ҡаршы Ивановкала ла, Илсеғолда ла фронттан ҡайтҡан һалдаттарҙан дружинасылар отряды төҙөлдө. Күптән түгел фронттан ҡайтҡан Никита, Хаммат, Байгилде ағай дружинасыларҙың етәкселәре булып алдылар. Шулай булғас, Закирға ни ҡала? «Миңә лә ахыры бер ситтә ҡалырға тура килмәҫ. Әсәй янында ғына тороп тыныр саҡ түгелдер, моғайын»,— тип уйлай ул.— «Тик ҡайһы ҡабырғаға ятырға? Хаҡлыҡ ҡайһы яҡта? Башта шуны белергә ине...» — ти. Шунан бер кисте, әсәһенә лә, Хамматҡа ла әйтмәй, ат эйәрләп сығып та һыҙа.— «Туҡта, һатыбал отрядын күреп киләйем. Үҙ ҡолағын. менән ишетеп, үҙ күҙең менән күреп эш итергә кәрәк. Унда кемдәр йыйылған? Нимә теләйҙәр?..»— ти ҙә Ташһарайға саба.

һатыбал отрядында ике-өс көн булғас та үҙенең уларға юлдаш булмаҫын күрә: «Серҙәрен белеп, көстәрен һынап алайым да ҡасайым»,— ти. Ул ара булмай Хаммат ағаһы килеп уны бүре өңөнән алып сығып китә...

Эйе... Шулай башланыр был юл... Бынан һуң Закир, дружинасылар яғында тороп, һатыбал һәм Федька Рябой отрядтарына ҡаршы батырҙарса һуғышты. Ә унан Каширин отрядына ҡушылып китте.

Ауылдаштары — Иштуған, Әхәт, Тимербайҙар менән бер сафта булыуы өсөн ул башта бик ҡәнәғәт ине.

— Ну, хәҙер ҡаҙан ҡорһаҡ байҙар түҙеп кенә торһон. Арт һабаҡтарын уҡытасаҡбыҙ! һинен. быҒаулы аяҡ эҙенде һаҡлаған Себер юлы туҙанын, әйҙә, хәҙер байҙар үҙҙәре йотһондар!— тип сәмләнеп, бала шикелле ышанып һөйләргә ярата ине ул.— Шулай булыр бит, Тимербай ағай? Дөрөҫтө һөйләйем бит?!— тип үҙ һүҙләләнеп нығыша. Унан тағы ла ярһыбыраҡ:— Шулай булыр. Беҙ уларға Себер китеүҙең нимә икәнен татытырға тейешбеҙ!— тип еҫтәп ҡуя.— Хәҙер уларға нәүбәт етте!— ти.

Әммә унын, былдай ярһыу, һуғышсан сағы башта булды. Ә инде аҙаҡ отряд тирә-яҡтан һаман тығыҙыраҡ ҡыҫып килгән казактар, аҡ чехтар ҡамауы аҫтында көнсығышҡа, Урал ҡаялары араһына, төпкәрәк сигенгән һайын, уның был ҡыҙыу дәрте һүрелә барҙы, ахыр килеп инде бына бөгөн тамам һүнеп тә ҡуйҙы. Үҙенең ни теләүе, нимә эшләүе хаҡында ғәҙәттә артыҡ баш ватырға яратмаған Закир был юлы ла уйларға, баш ватырға тырышыуҙан бик тиҙ ялҡты. Яҡ-яғындағы тормошҡа аҙ ғына ла иҒтибар итмәй, баяғыса эйәр өҫтөндә мәйелһеҙ һалпанлап бара бирҙе. Юртаҡ саптар ҙа юл ситенән әрем-һәрем сүпләп, атлар-атламаҫ ҡына бара торғас, сафтан сығып, бер нисә саҡрымға һуҙылған обоздар араһында бутала башланы. Эңер етте. Бик дәү, ҡып-ҡыҙыл мендәр булып офоҡҡа төшеп ятҡан ҡояш, ниндәйҙер ғәжәп бер хәл көтөп байырға оноҡҡандай, ҡараһыу күк ҡая өҫтендә оҙаҡ эленеп торҙо. Тап ошо ваҡытта отряд, иң һуңғы текә үрҙе үтеп, Урал һыртынын. иң бейек, ҡаҡ түбәһенә килеп менде һәм ошонда төнгә ялға туҡтарға булды. Ял өсөн, тау өҫтөндәге икһеҙ-сикһеҙ кин. яйла өсөн бөтәһе лә шат ине. Тау өҫтө күп тауышлы, төрлө телле һөйләш-көлөш, арба шығырлау, ат ҡыуыу, бойороҡ биреү тауыштары менән ғөр килеп, йәнләнеп китте. Тын, ҡаҡ түбә быҒаса күрелмәгән берҙәм һәм күмәк тормош шауы менән йәшәргә керешге. Обоздар артында килгән Закир ҡапыл әллә ошо үҙенә ғәжәп мәғәнәһеҙ, вайымһыҙ тойолған йәнлелектән, әллә эңергә күк томанға күмелеп ятҡан тәрән үҙәкт/әрҙән таралған йәбешкәк елеҫлектән тәне сымырлап, тертләп уяныи китҡәндәй булып, артҡа боролоп ҡараны. Артта әле генә үтелгән баш әйләндергес текә тау юлы бормасланып ята ине. Ул, теҙгенен тарта биреп, күҙен ала алмай уға теклэп торҙо. Ҡасандыр башҡорттар йәйләүгә күскән ваҡытта ошо күс юлы текәһенән тәгәрмәстәрен тышап төшөүҙәрен хәтерләне. Егеттәрҙен-ҡыҙҙарҙың унан нисек ярыша-уҙыша һарҡыуға табан һыбай сабышып китеүҙәрен күҙ алдына килтерҙе.

«Ни өсөн миңә лә шулай сабып төшөп ҡарамаҫҡа?»— тип уйланы ул ҡапыл. һәм батып барғанда һаламға тотонған кеше шикелле, был быуынһыҙ фекергә сат йәбешеп тә ҡуйҙы. Үҙен аҡларға сәбәптәр ҙә тапты:

«Хаммат ағайым бальнистән сығып ҡына ҡалды... Ауырыу... Хәлһеҙ... Ауылды аҡтар килеп алһа, ул яңғыҙ нимә эшләр? Уны кем яҡлар?.. Ә мин, уларҙы ярҙамсыһыҙ ташлап, ҡайҙа китеп барам әле?!»

Ул сабырһыҙланып атын кирегә борҙо:

— Әйҙә, саптар, остоҡ!

Дәү ҡыҙыл ҡояш, үҙе әле генә һоҡланып ҡарап торған егетен бүтәнсә күрергә теләмәгәндәй, ҡабаланып тау артына йәшенде. Тыуған яҡҡа боролоуҙың нимә икәнен шунда уҡ һиҙеп алған саптар ат та, үҙенен дыуамал хужаһы шикелле, был үрҙәрҙе нисек ҡара тиргә төшеп, аҡ күбеккә мансылып, ҡаты ауырлыҡтар менән яулауын шунда уҡ онотоп, йән-фарман түбәнгә ҡарай сапты. һуғыша-һуғыша барып менгән мөһәбәт Урал һырты борсоулы ҡомһарып артҡа

сиғенде. Закир үҙенең йерәк тәңгәлен гимнастерка үтә ҡапшап, сирылып ҡуйҙы:

«hыҙлама, йөрә>к... Айырылғанды айыу ашар, боролғанды бүре ашар, тиҙәр ҙә бит... Ни эшләйһең... Ярар, хәйерлегә булһын...»

* *
*

Закирҙың юҡлығын Иштуған иртәнсәк, үҙенең пулеметсылар взводын барлаған сакта ғына абайланы...

«Ҡайҙа булды икән? Айыуға юлыҡтымы икән әллә?»— тип хафаланды.

— Закир, Закир! Закир ағай!..— тип йүгерә-ҡыскыр.а тирә-яҡты эҙләп сыҡты. Унан Тимербайға йүгерҙе:

— Ағай, Закир юғалды бит! Аты ла, үҙе лә юҡ!..— тип бошоноп хәбәр итте.— Нимә эшләйбеҙ?!

Тимербай, был ваҡытта арба аҫтына сәкмән түшәп, аяҡ бөкләп ултырған да ниндәйҙер тары бөртөктәрен сүпләп матап^а ине.

Аҡ hары, ҡыҙыл hары, ҡара hары тары бөртөктәрен hәр ҡайhыhын үҙенә башҡа айырып hалған. Иштуған килгәс, ул ҡабаланмай ғына тарыларҙың hәр төрөн үҙенә башҡа кескәй тоҡсайҙарға hала башланы.

— Мырҙа, хәтереңдәме икән, мин каторгала саҡта бер докторҙың мине художник тип атауын яҙғайным?

— Иҫемдә...— тине Иштуған, аптырап.— Мыяубикәләрҙе төшөрөп ебәргәйнең, ағай...

— Шәп төшөргәйнемме?

— Тере кеүектәр ине шикелле...

— Бына шул шул... Беләhеңме, Иштуған, мин, hуғыш бөткәс, hуңлабыраҡ булhа ла, шул юлда үҙемде hынап ҡарамаҡ булам әле... Теге доктор әйткән талант тигән нәмә әгәр ысынлап та миндә булhа...

Ул Иштуғанға hөйкөмлө текләп, уйлана биреп торҙо ла ҡыуаныслы тауыш менән:

— Беләhенме, мырҙа, мин был тары бөртөктәренән кемдең ҡояшлы йөҙен эшләмәк булам, ә?..— тип hораны.

Иштуған уға ни тип тә әйтә алманы, тик ғәжәпhенеп баяғы hүҙен генә ҡабатланы:

— Ағай, hин... ни, былай... Закир ағай юҡ булған, тим дә baha...

Тимербай ипләп кенә үҙенең биттәрен, күҙҙәрен hыпырғылап алды. Бәхетле йөҙөнә бошоноу сыҡты. Иштуғандың ошо минутта Тимербайҙы ярhытҡан оло бер теләкте аңларға ла, белергә лә уйламауы өсөн дә, Закирҙың шундай аҡылhыҙ юлға баҫыуы өсөн дә эсе бошто, күрәhең.



— Шулай тиhең шул,— тип тарҡау ғына яуап бирҙе.— Аты ла юҡ, тиhгең бит әле?

— Аты ла юҡ.

Тимербай әҙ генә уйланып торҙо.

— Былай булғас, ҡайтып киткән. Зимагор яғы еңгән дә башы hуҡкан яҡка сыҡкан да киткән...

— Нимә эшләргә, нисек командирға әйтергә инде быны?—тип көйөндө Иштуған...— Оят бит!.. Валлаhи, оят!

— Йә, үҙем hөйләшермен,— тине Тимербай тыныс ҡына.— Никита менән икәүләп барырбыҙ. Беҙҙең командир аңлай торған кеше күренә.

Иштуған, аптырап, икеләнеп, Тимербай янында тағы бер аҙ тапанып торҙо.

— Был Закир ағай бик ихлас hуғыша ине лә baha. Шәп пулеметчик ине. «hуғышабыҙ, шабаш! Мин hуғыштың ошондай ҡыҙыу сағын яратам. hуғышырға икән — hуғышырға, пожалуйста»,— тип янып йөрөй ине... Аптырайым...

— Ана шул шул. hуғышырға икән — hуғышырга, ти ул. Ә ни өсөн, кем өсөн hуғышырға икәнен артыҡ уйлап тормай. hуғышыр өсөн генә hуғышыу теләге менән оҙаҡ яиып буламы ни?

— hин уны ысынлап уҡ ҡайтып киткәндер, тип уйлайhыңмы, ағай?

— Ҡайтҡандыр. Синфи аңы етмәгәс, батыр hуғышсы булыу менәнме ни ул?.. Мяненсә, hуғышҡа былай ҡарағас, ул аҡтар яғында тороп та бик шәп hуғыша алыр... Бына нимә борсой мине, мырҙам.

Тимербай ашыҡмай ғыыа баяғы тары бөртөктәрен йыйырға кереште. Иштуған йәштәргә хас сабырhыҙлыҡ менән:

— Бына беҙҙе, ауылдаштарын, отряд алдында уңайhыҙ хәлдә ҡалдырыуы хаҡында ла уйлап тормаған бит,— тип кейөндө.— Етмәhә — пулеметчик!.. Беләhең бит, ағай, беҙгә мәргән пулеметчиктар ҡалай кәрәк?!

— Йә, бик көйөнмә,— тине Тимербай, мут ҡына йылмайып. Күҙ ҡыҫып ҡуйҙы.— Үҙем мәргән пулеметчик булырмын. Минең күҙ яҡшы! Өйрәтерhен бит, мырҙам?

Иштуғандың йөҙө асыла төштө:

— Өйрәтмәгән ҡайҙа ти ул! Тик hин, ағай, минән өйрәнеүҙе хупhын ғына...

Тимербай, hылтыҡлап баҫып, командирҙы эҙләп китте.

— Шулай булғас, көймә, мырҙам...

## II

Бик иртә әле. Йәйге аҡhыу офоҡта тан. hарыhы яңы ғына hыҙылып килә. Ләкин ғаилә күптән торған. Бына Емеш мырҙаhы hөйөндөктө күтәреп, иртәнге hалҡындан бөршәйеп,

тупһала баҫып тора, Хисбулла әллә арып, әллә иренеп, аһылдай-уһылдай рыдванға ат егеп маташа. Бибеш салғы, һәнәк, тырма әҙерләй, Таиба әбей аҙык-түлек һалынған ҡалай күнәкте рыдванға таға, йоҡоһонан шулай иртә уятҡанға үртәнеп, һейөндөк тынмай мыжый, Емеш үҙе лә уянып етә алмай ыҙалана. Сөнки уның да йоҡоһо туймаған. Был кескәй моңһоу ҡыҙ бер ҡасан да туйғансы йоҡлай алмай. Кистән уға йәшенә хас булмаған ауыр уйҙар йоҡо бирмәй. Тормош хаҡында, туғандары хаҡында, үҙен әйләндереп алған донъя хаҡында, йәшәү һәм үлеү хаҡында, мең төрлө аңлайышһыҙ һәм ҡурҡыныс уйҙарға бирелеп, ярһый-әсенә ярты төндө еткерә ул. Унан тамам арып, өмөтһөҙләнеп һаташыулы ҡаты йоҡоға сума. Ләкин инде оҙаҡламай таң ата. Кескәй ҡыҙға торорға, үҙен аҫраған, икмәк ашатҡан кешеләр алдында хәлдән килгәнсе йүгереп йөрөп эшләргә, хеҙмәт итергә кәрәк була...

— «Ҡасып китһәң дә — сәсеп кит» тигән боронғолар. Беҙ бит әле ҡасып китергә йыйынмайбыҙ. Бесән эшләргә кәрәк, балалар!

Емеш, Таиба әбейҙен, көр тауышын ишетеп, йоҡоһонан тамам айнып китә: «Әһә, бесән эшләй барабыҙ икән. Ҡуныпятып эшләргә барабыҙ...»—ти.

Таиба әбей туҡтап, көрһөнә биреп ала, зарлыраҡ тауышҡа күсә:

— Эй-й алла, донъялар бик боларып тора ла тороуын... Әллә нисек үтә боларып китте... Анларлыҡ булмай башланы. Шулай, балалар, донъяһының аҫты-өҫкә килеп ята ла бит... Бөгөн барһың, иртәгә юҡ... тигәндәй... Ни эшләмәк кәрәк... «Сыҡмаған йәндә өмөт бар» тигәндәй, әлегә тәнендә йәнен, булғас, һаман иртәнгене ҡайғыртмай булмай шул...

Ғәҙәттәгесә, Таиба әбейгә һүҙ менән дә, ым менән дә яуап ҡайтарыусы булманы. Оҙаҡламай Хисбулла менән Бибеш, Емеш менән һөйөндөктө лә алып, сабынлыҡ юлына сығып киттеләр. Еңел елдереп, Оло Эйек кисеүенә килеп еттеләр. Шағыр-шоғор килеп, таралып китергә торған рыдвандын, тимерһеҙ тәгәрмәстәре аҫтында, ҡашмау мунсағы шикелле күҙҙен, яуын алып торған төрлө төҫтәге ялтыр-шыма ҡырсынташтары төрлө тауышҡа шыңғырап, ишелеп ята, һөйләнсәк ағын кисеү, сағыу тауыш менән йырлай-көлә рыдванды ары-бире борғолай, йә тәгәрмәстәрен, йә араталарын шаҡарып ағыҙып алып китәм тип ҡурҡыта. Өлкәндәрсә булырға тырышып, аяҡтарын рыдван араталары араһынан һалындырып ултырған Емеш шаршы кисеү тәрәнәйгән, ишелеп күтәрелгән һайын ҡото осоп аяҡтарын үҙенә тартып ала, күҙҙәрен сырт йома ла үлергә йыйынып, яңылыша-тотлоға, иман укырға керешә: «Лә-илаһи илла-алла...»



Ахыр, имен-иҫән кисеүҙе сыҡтылар. Тәгәрмәсте күмерлек бейек, ҡуйы үлән баҫҡан тар туғай юлына барып инделәр. Оло Эйектең яҙ көнө иҫәпһеҙ-һанһыҙ һандуғастар сутылдашыуы менән тотош моңға сумып ойоп ултырған бөҙрә туғайҙары тынып ҡалған. Ләкин хәҙер уны күҙгә күренмәҫ, ҡолаҡка ишетелмәҫ, әммә һандуғас һайрауынан да көслөрәк йөрәккә дәрт, йәнгә аҙыҡ бирә торған яңы моң биләп алған. Ул йүкә, әлморон, муйыл, ҡарағат ағастарынан, туғай эсен баҫҡан мең төрлө сәскәләр донъяһынан таралған иҫ киткес хуш еҫтәр моңо. Был моң һинен, күкрәгеңә тығыҙлап инә, бөтә тәнеңде-йәнеңде биләп ала, һин ҡайһы саҡ үҙеңде, иң ябай бер йән эйәһе икәнеңде онотоп, ғәҙәти булмаған бәхеткә, үлемһеҙ тормошҡа лайыҡ итеп тоя башлайһың,- Емеш тә был юлға килеп инеү менән бетәһен дә онотто: иртә өҙөлгән татлы йоҡо ла, уларҙың иҫке рыдванынан йәнһеҙ мыҫҡыллап көлгән мәкерле кисеү ҙә — бөтәһе лә артта ҡалды. Уға ғәҙәттәге ҡыҙыҡһыныусанлығы ҡайтты. Бына ул инде бәхетле ғашиҡтар күҙе менән мөһәбәт тирәктәргә һоҡланып, көнләшеп ҡарай, имән, муйыл, балан ағастарының татыу һыйынышып үҫеүенә ҡыуана. Оло Эйек буйының үҙенә генә хас тиндәшһеҙ матур ҡыңғырау сәскәләренә, ҡыйғас ҡамыштарына һоҡлана, туҡран туҡылдатыуына, турғайҙар сырылдашыуына ҡолаҡ һала, апаһы менән еҙнәһенең аяҡтары рыдвандан оҙон булып һалынып төшөп, ысыҡлы үләндәрҙән йыуылып барыуына ҡыҙыҡһынып та, көнләшеп тә ҡарай: «Эй, хоҙай, ҡасан һуң ул да ҙурайыр? Ҡасан ул да тап бына улар шикелле ҡырт та итмәй ялан аяҡтарын үләндәрҙән йыуҙырып-һыҙыртып барыр?! Әле лә үлән остары унын, бармаҡ остарына тейгеләп ҡала ла ул... ысын, күп тә кәрәкмәй шул бына!..»

Ул рыдвандын арата ағастарына, үҙенсә, ныҡ итеп тотона ла ялан аяҡтарын нығышып түбән һуҙа: «Бына шулай.. саҡ ҡына...»

Шул минут баянан бирле үҙен арбап килгән оҙон үлән дәр араһына лап итеп йығылып та төшә. Рыдвандың артҡы бер тәгәрмәсе унын, балтырынан тапап уҙа. Емеш, ауыртыуҙан да бигерәк, яңғыҙ ятып ҡалдым, тип ҡурҡыуҙан ҡысҡырып ебәрә:

— Апай, апай!

— Атаҡ, Емеш ҡайҙа?— ти Бибеш.— Атынды туҡтат әле.— Ҡолап ҡалған шай...

Хисбулла таң ҡараңғыһында йүнләп күренмәгән юл буйлап артҡа китте:

— Балдыҙ, һин ҡайҙа? Ныҡ тапалдыңмы? Аяғың һындымы?

— Юҡ та ул...

БИБЛИОТЕКА

— Улай бултас, ниңә тормай ятаһың?

— Аяғым ауырта...

— Улай булғас, ниңә иламайһың?— тип, мәрәкәләп нығышты еҙнәһе.— Йә, ила әле! Ҡайһы ерең ауырта?

— Белмәйем...

— Былай булғас, тор. һынмаған. Әлдә һөйәгең ҡайыштан икән әле, балдыҙ,— тип көлдө Хисбулла.— Әйҙә, йүгерҙек! — Ҡыҙыҡай, аҡһай-туҡһай, еҙнәһе артынан эйәрҙе.

— Емеш булһа, бәләгә осрамай йөрөмәҫ,— тип орошоп ҡаршыланы Бибеш.— Кит, йүнһеҙ!..

Ысынлап та, һыуга ла батты, утта ла янды, әле килеп бына һиңә — тәгәрмәс аҫтында ятып ҡалды...

Унан көләмһерәп өҫтәп ҡуйҙы:

— Ярай әле бөтәһенән дә иҫән ҡотола. Бөркәнсектә тыуған ул беҙҙең, Емеш. Ҡарасәс инәй мәрхүм, ҡайһы бер бала ябай күҙгә күренмәҫ бөркәнсектә тыуа. Шул бөркәнсек уны бәлә-ҡазанан һаҡлай, тип һөйләй торғайны...

— Ярай әле беҙ рыдвандың алғы күсәрендә ултырғанбыҙ... Арт күсәр буш...— тип, йомшаҡ ҡына көлөп ҡатынының һүҙен бүлде Хисбулла.— Юҡһа «резина» һөйәк тә һыныр, «серле бөркәнсек» тә шартлар нне, моғайын...

Ҡояш сығыр алда улар сабынлыҡҡа барып еттеләр. һары томбойоҡ баҫҡан түңәрәк күл янындагы балан ағасы төбөнә туктанылар. Хисбулла башта ҡыуыш ҡороп, һөйөндөккә сәңгелдәк тағыл бирзе, ҡулаҡаҙан аҫырға өс таған яһаны. Унан кистән сүкеп ҡуйған салғыһын күңелле гем-ә сыңғыратып янып алды ла:

— Сәй ҡайнағансы бер һыуһын эшләп алайым,— тип ашыҡмай ғына сабынлыҡтың икенсе башына китеп барҙы.

Емеш, ҡулаҡаҙанда иртәнге сәй ҡайнатып йөрөгән апаһының ниндәйҙер үтә монло оҙон көйгә мәңрәүенә ҡолаҡ һала-һала, ҡыуыштa сәңгелдәк бәүетеп ултырҙы. Ул хәҙер күптән инде апаһы Бибештәрҙә йәшәй. Иштуған ағаһы китер алда уны үҙе бында алып килде. Шул саҡ Таиба әбей менән Иштуған араһында булған һөйләшеү әйтерһен. унын, мейеһенә утлы күмер менән яҙылып ҡалды:

— Емеш яңғыҙ ҡалды, тине ағаһы баҫалҡы ғына,— ҡыйынһынмаһағыҙ, ҡоҙағый, мин ҡайтҡансы, ул һеҙҙә йәшәп торһон ине...— Таиба әбей оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо. Унан ябай ғына итеп:

— һорап тораһын. тағы. — тип ҡуйҙы.— Үҙ апаһы янында ҡалмай, кескәй ҡыҙ бала ҡайҙа барһын? Ҡалыр, беҙҙә торор. Ул хаҡта кафаланма... Тик бына, ҡоҙа, ғәйепкә алмаһаң, һиңә бер һорауым бар...

— Ниндәй ғәйепкә алыу булһын, ҡоҙағый?

— Улай булһа, һин миңә әйт әле: һуғыш-ыҙғыш тип ил ҡыҙырып йөрөргә кем ҡушкан һиңә? Өйҙә ҡалһаң, донъя көтһәң, берҙән-бер ҡарындашыңды ҡарап үҫтерһәң булмаймы ни?

— Булмай шул, ҡоҙағый,— тип ҡырт киҫте Иштуған.— Ярамай.

— Ни өсөн?— тип аптыраны Таиба әбей. Иштуған тағы өҙеп:

— Көрәшергә кәрәк булған өсөн,— тип өҫтәне.

— Аңламаҫһың. Анлауы ҡыкын миңә был заман кешеләрен...— тип баш сайҡаны Таиба әбей.— Бына минең Хамматым да бит шулай тип башты ҡаңғырта. Нимәгә кәрәктер ул көрәш-мөрәш?! Нимәгә һуғыш?

— Йәшәү есөн. Кеше булып йәшәү өсөн кәрәк!— тип ҡыҙа барҙы Иштуған.— Кәмһетелеп, ҡыйырһытылып, үҙ ереңдә үҙен ҡол булып түгел, тау беркөтө кеүек ғорур, ирекле булып йәшәү өсөн кәрәк, ҡоҙағый!

Таиба әбей, күрәһен, Иштуғандың яуабын етди һөйләшеүгә иҫәпләмәне. Шуға хатта ҡарыулашып та маташманы. Тыныс ҡына көләмһерәп:

— Шулайҙыр, бәлки... Әммә мнн инде ундай оло һүҙҙәрҙе анлау, ысынға иҫәпләү йәшенән уҙғанмын шул инде...— тип көрһөнеп кенә ҡуйҙы.

— Нисек анламаҫҡа?!— тип аптыраны Иштуған.— Ирек өсөн, бәхет есөн, хаҡлыҡ өсөн тип, бынамын тигән күпме ирҙәрҙең баш һалыуын белмәйһенме ни һин, ҡоҙағый?! Беләһең. Йәмәлкә батыр, Салауат батыр хаҡында ишеткәнең юкмы ни һинен? Ана бит улар, ҡасан, ниндәй замандарҙа уҡ халыҡ бәхете өсөн, ирек есөн көрәшкә күтәрелгәндәр!. Дөрөҫ, улар керәш юлын бик үк нык төшөнөп тотонмағандар...

— Ә һеҙ?

— Беҙ беләбеҙ. Беҙҙең ғали юлбашсыбыҙ бар: Ленин!— тип ярһып китте Иштуған. Тауышы сағыуланды, күҙҙәрендә, әйтерһең, иң яҡты шәм тоҡанып китте.— Беләһеңме, ҡоҙағый, Ленин!

Таиба әбей ҡоҙаһына тағы бер тапҡыр тыныс, иғтибарлы ҡарап алды ла һүҙ бөткәнде белдергән тауыш менән

— Ҡарындашын, өсөн хафаланма,— тип ҡабатланы. «Ил еҫтөндә сәпсек үлмәҫ» тигән боронғолар...

Иштуған, үҙенен, урынһыҙ ярһыуынан уңайһыҙланған һымаҡ, ҡабалан ғына хушлашып тышҡа атылды:

— Рәхмәт, ҡоҙағый. Яҡшылығыңды мәңге лә онотмам!

Емеш ағаһының күҙ бәбәгевдә ҡара ҡурғаш кеүек ауыр йәш тамсыһы күреп ҡалгандай булды: бәлки, күҙ йәшен башҡалар күрмәһен өсөн ҡабаланғандыр ҙа... Шулай йүгереп сыҡты ла ҡапҡа төбөндә бәйле торған атына һикереп менде. Менде лә сапты... Ҡайҙа, ни өсөн сапты инде ул?!.

Ҡыҙ сәңгелдәктә ғәжәп рәхәт иҙрәп йоҡлап киткән һөйөндөккә ҡарап тағы бер аҙ тапанып торҙо. Унан ҡыуыштан сыҡты.

Ҡояш әле генә ҡалҡып килгән саҡ ине. Мең төрлө нәфис сәскәләр менән биҙәлгән сабынлыҡ, иҫ киткес татлы хуш еҫ бөркөп, яй ғына тулҡынып ята, сәскә таждарына ҡунған ысыҡ тамсыларында йәйғор семәкәйҙәре емелдәй, түңәрәк күлдә әрмәнделәр баҡылдаша, күл ситендәге мөһәбәт тирәктә һаҡаулана башлаған кәкүк саҡыра:

— Кәк-кәк-күк...

Һауа ғәжәп саф һәм туғай сәскәләренен, хуш еҫе менән тығыҙлап тулышҡайны. Емеш, һоҡланыуҙан юғалып ҡалыу дәрәжәһенә етеп, ҡыуыш янында туктап торҙо. Шул саҡ унын. күнеленә өлкәндәрҙән йыш ишеткән бер фекер килде:

— Әй-й, ҡалай ҙа матур был донъя! Ҡандай ғали!.. Ә кеше ниндәй бахыр, ҡыҙғаныс! — һәм шунда уҡ был кескәй ҡыҙ бөтә йәне-йөрәге менән ундай фекергә ҡаршы төштө: «Ни өсөн бахыр? Ни өсөн ҡыҙғаныс?!» Шул саҡ ул Иштуған ағаһынын. кемгәлер һөйләгән һүҙен хәтерләне: «Шундай матур донъяла кеше үҙен бәхетһеҙ тойһа, һәйбәтме ни? Түгел! Кәмһенеп, юҡһынып, зар-интизар булып йәшәһә, һәйбәтме ни? Түгел! Берәү гел рәхәттә, берәү михнәттә ғүмер итһә, нисек?!»— тип ярһып-ярһып һөйләгәйне ул. Моғайын, шундай ғәҙелһеҙлектәрҙе бетерөр өсөн көрәшкә киткәндер унын Иштуған ағаһы... «Кеше бәхетле булырға тейеш...» Дөрөҫ тә шул. Бер ҡараһаң, бәхеткә кешенән дә лайыҡ йән эйәһе бармы ни? Уны бит, кешене бит, алла үҙенә оҡшатып яратҡан тиҙәр... Иштуған ағайым дөрөҫтө әйтә: кеше бәхете өсөн көрәшергә лә, кәрәк икән хатта шул юлда үлергә лә хәләл... Шәһит үлә ундайҙар... Ундайҙарҙың урыны ожмахта... Атайым да бит кеше бәхете өсөн көрәш юлында баш һалды. Ул инде хәҙер ожмахта ғына йәшәйҙер... Уға рәхәт... Ә миңә...

Емеш, үҙенең үтә алыҫ киткән ҡатмарлы уйҙарынан айнырға тырышып, күҙҙәрен һыпырғылап, толомдарынан тартҡылап алды. «Бына тағы уйланып тик торамсы... Алйот... Йә, нинә инде шулай... Ана еҙнәм һаман бесән саба... Үҙе күренмәй... Салғы тауышы ғына ишетелә... Ҡайҙалыр ерән ат мыртлатып бесән сәйнәй... Бибеш апайым әкрен генә мөнрәййырлай һаман ҡулаҡаҙан янында бөксәңләй... Был арала ул үтә бошонҡо йөрөй. Мин беләм — илай. Керпектәре гел еүеш



була... Ул да, бәлки, минен, шикелле атайым, әсәйемде һағыналыр... Бәлки, Иштуған ағайымды йәлләйҙер... Әллә минең өсөн уға һүҙ тейәме икән?.. Әй-й, бер уйлаһаң, атайым үлгәнсе, мин генә үлеп ҡуйһам, ҡалай яҡшы булыр ине лә бит. Әммә бер ҙә генә үлге килмәй бит әле...

Шулай ҙа... Бибеш апайым нимә тип йырлай икән? Белһәң ине?!.» Ҡыҙ иғтибарын хәҙер тотош йырға йүнәлтте. Балан ҡыуағы аҫтындағы усаҡ яғынан иртәнге томанға ҡушылған күк төтөн шикелле тын ғына үрмәләп, моңһоу йыр ағылды:

Бүҙәнәкәй тигән, һай, аҫыл ҡош
Юрғалайҙыр тура ла юл менән.
Маклайҙарға яҙған хаҡ яҙмышын
һыпырып ташлап булмай ҙа ҡул менән

Емеш саяланып баш сайҡап ҡуйҙы:

«Дөрөҫ түгел!.. Был йыр, апай, дөреҫтө һәйләмәй!..— тип ҡысҡырып өндәшкеһе килде Емештең.— Иштуған ағайым әйтә: тырышып, көрәшеп яҙмышты үҙгәртеп була!—- ти.

Яҙмыш — ул кешенен. үҙ ҡулында!..»

Ләкин өндәшә алманы. Берҙән, күңеле тулды, илағыһы килде, икенсенән, тап шул саҡта, ҡарышҡандай, ялан аяғын үҙәккә үткәреп кесерткән саҡты, еүеш һалҡынлыҡ эйәртеп, аңғармаҫтан йүгереп килеп еткән таң еле йыртыҡ күлдәк үтә ҡуйынға үрмәләне. Ҡыҙ ҡапыл һүрелеп, өшөгән тубыҡтарын итәге менән урап, бөршәйеп кенә ҡыуышҡа һөйәлеп ултырҙы: «Бәлки, Иштуған ағайым әйткән оло өмөттәр беҙҙең кеүектәр өсөн түгелдер... Бәлки, Бибеш апайымдың йыры дерөҫтө һөйләйҙер?!.»

## Ш ,

Быйыл йәй ғәҙәттән тыш эҫе, ҡоро килде. Бигерәк тә һуңғы кәндәрҙә һауа айырата томороҡ булып китте. Кисен үләндәргә ысыҡ тамсылары ятманы, еләҫ тан. елдәре уянманы.

Дыуамал мөхәббәт ҡорбаны Сәлимә һалып ҡалдырған тән яраһынан да, йән яраһынан да аҙапланған Хамматтын. был эҫенән ғүмерҙә булмағанса тыны ҡурылды, хәле бөттө: «Әй Сәлимә, Сәлимә... Ниндәй саҡтан аяҡтан йығып һалдын, бит, ә... Үҙенде лә һис тә юҡҡа әрәм иттең... Киләсәк өсөн, үҙ бәхетебеҙ өсөн ҡырҡа өҙөшөр мәлдә генә бит...— тип һыҡтанып уйланды ла ул йыш ҡына:— Эйе, һөйөү бәхете бөттө... һунде... Шәхси бәхеткә өмөт ҡалманы... Ләкин халыҡ бәхете өсөн көрәш тигән оло маҡсат бар. Тимәк, йәшәргә, көрәшергә... Тик минең хәлдә нисек быны эшләргә... Нимәнән башларға... Янғыҙ... Дошман биләгән ерҙә.. Етмәһә, күкрәктә яра ла уңалып бөтмәгән бит әле...»

Ул, асыҡ тәҙрә тупһаһына мендәр һалып, яңаҡтарына таянып, тышҡа ҡарап ятты. Тирә-яҡҡа иғтибарлы ҡолаҡ һалды. Бөтә ерҙә тәбиғи булмаганса хафалы тынлыҡ хөкөм һөрә. Ситән башында сыр-сыу килеп йәнгә тейә торған турғайҙар ҙа ҡайҙалыр китеп боҫҡан. Әйтерһең, бар тәбиғәт тын да алмай ниҙер көтә, ҡото осоп шомланып көтә ине. «Тәбнғәт кенәме? Ә кешеләр? Әйләнә-тирәләге тормош?! Бөтәһе лә х-әл иткеһеҙ йомаҡтан ғына тора түгелме ни?! Бына, Өммекәйҙе генә алайыҡ... Мин бит күрәм... Аңлайым унын хәлен... Ләкин һис кенә лә ярҙам итә алмайым... һәр хәлдә, хәҙер генә... Был көндәрҙә... Кем белә, бәлки, киләсәктә мөнәсәбәттәр яҡшырыр... Ә ул кетә алмай... Өй тирәһендә әйләнә лә тулғана. Тәҙрә янында сәғәттәр буйы баҫып тора... Көтә... Унынса, бына Сәлимә үлде лә, Хаммат әйләнә лә уға ҡайта... Улай анһат ҡыма булһа, мөхәббәт тип атамаҫтар ине бит уны... Әлбиттә, Өммөкәй тоғро, һәйбәт ҡатын... Етмәһә, унда минең Байрасым бар... Хәҙер «янылышты» төҙәтеүҙән, Өммөкәйгә ҡайтыуҙан да дөрөҫ юлды табыуы мөмкин түгел һымаҡ... Ә йөрәк?! Ә мөхәббәт?.. Их Сәлимә, Сәлимә... һине шулай анһат ҡына онотоу мөмкинме һун?!.»

Таиба әбей бер нисә тапҡыр өйгә сыҡты, улына хафаланып ҡарап-ҡарап алды:— Сәй эскен. килмәйме, айран һыулап бирәйемме әллә, улым?— тип өндәшкеләп ҡараны. Бер яуап та ала алмағас, тағы ла ҡатыраҡ бошоноп аласыҡҡа үҙ эшенә ҡайтты. Улының үтә аҡһыу, ауырыу төҫкә инеп китеүе, унан да бигерәк ҡайгылы йөҙө бошондора ине уны: «Ҡалай теремек, илгәҙәк малай булып үҫкәйне,— тип, ҡайғырып уйланды Таиба әбей.— Сәлимәгә өйләнгәс, тағы ла теремегерәк, илгәҙәгерәк булып китте, йөҙө һәр саҡ айҙай балҡып торҙо... Әйтерһен, өйләнмәне, ә ҡанат үҫтерҙе... Төптө ҡайтанан тыуҙы. Тағы ла матурыраҡ, батырыраҡ, һәләтлерәк егеткә әйләнде... Хәҙер бына өнһөҙ-һүҙһеҙ, уйланып тик ята... Башҡаларын әйтмәйем, Хамматым әсәһен, «хәйерле иртә, хәйерле көн, хәйерлө кис, әсәй», тип сәләмләп тороуҙы бер ҡасан да онотмаҫ ине. Әле инде был һүҙҙәрҙе лә һирәк ишетәһең... Шулай ук өнө-һүҙе бөтеп ҡуйҙымы икән ни балаҡайымдын... Я алла!..»

Таиба әбей ауыр көрһөнөп, яулыҡ осо менән күҙ йәшен һөртөп алды, урҙанан эре биҙәкле йәшел кешмир шәлен алып, елкәһенә һалды: «Тукта, Бибисара абыстайға барайымсы... Берәй кәнәш бирмәҫме... Хамматымды элекке хәленә ҡайтарыуҙың берәй әмәлен тапмаҫмы?..»— тип ауыр атлап, урамға сығып китте. Ләкин күңелһеҙ уйҙар уны урамда ла тыныс ҡалдырманы:

«Әйтеп тораһы юҡ, ҡайғыһы бик ҙур баламдың...— тип тағы уйланырға кереште ул.— Шул баш бирмәҫ ҡатынды яратты ла ҡуйҙы шул, иҫен-аҡылын юғалтып яратты... бахырын... Ҡалай итәһеү.... ә уныһы тотто ла шул изге һөйөүгә бысаҡ күтәрҙе... Бөркөттөн, ҡанатын ҡайырҙы... Ә быныһы... Ҡайғыны япа-яңғыҙ кисерергә яраймы инде, йә?! һөйөү ҡайғыһын бит уны үҙ-үҙенде хәлдән тайҙырырлыҡ ҡаты эшкә егеп кенә еңеп була... Беләм... Үҙем дә әҙ кисермәгәнмен.. Әммә быны нисек уға әйтерһең...»

Хаммат, күп ҡан юғалтыуҙан аҡһыуланып ҡалһа ла, көрәшсегә хас көс-кеүәтен юғалтмаған тығыҙ беләктәренә башын һалып һаман шулай уйланып ятты. Яралы йөрәге дин,-геҙ тулҡындары шикелле берсә хәлһеҙ һүрелеп, берсә күкрәкте ҡыҫа-ҡыҫа, ярҙарынан урғылып сабырһыҙ һәм борсоулы туҡылдай-туҡылдай минуттар һананы. Ахыр кнлеп, йөрәкте һыҙлатҡан, өҙгеләгән, ярһытҡан мең төрлө уйҙарҙың ҡайнар яреыҡтарынан укмашып, берҙән-бер, ин, кәрәкле ҡарар килеп тыуҙы:

«Китергә кәрәк. һис кисекмәҫтән китергә. Нисек тә үҙебеҙҙекеләрҙе ҡыуып етергә. Тағы бер тапҡыр революция һағына баҫырға. Коммунислыҡ бурысын аҙағына хәтле үтәргә!»

Унын, ҡарарынын. дөрөҫләгән раҫлағандай, улының хафалы тауышы янғырап китте. Байрас өркөтөлгән турғай балаһы шикелле сырылдап өйгә атылып килеп инде:

— Атай, атай!

Хаммат һикереп тороп баҫты:

— Ни бар, улым!— Тыныс булырға тырышып, улынын. күҙенә йылмайып төбәлде.— Кем тейә?

— Яҡуп ауылын... волосты... аҡтар алған...— тип ашығып хәбәр итте Байрас.— Ни, атай, мин үҙем күрҙем... Теге Яҡуп ауылы янында... Оло Эйек күперендә... Уларҙың һалдаты һаҡта тора!..— тип, бөтә белгән-күргәнен бер юлы һейләп бирергә ашыҡты. Унан, атаһының һаман вайымһыҙ тороуынан тағы ла хафаланып:

— Атай, тим!..— тип ҡысҡырып ук ебәрҙе.— һиңә өйҙә ҡалыу ярамаҫ бит... Улар бында ла килеп етерҙәр! Ни һыбайлылар өсен ҡасҡан ерме ни Илсеғол?!

Хаммат улына тағы ла иғтибарлыраҡ теклэп торҙо:

— һин үҙен, күрҙеңме һун, уларҙы?

— Алешка әйтте. Мин күперҙәге һаҡсыны ғына күрзем.

— Ә-э, улаймы?.. Волосҡа ҡыҙыл отряд килгәндер бәлки?

Малай, атаһының анламауына йәки ышанмауына хәтере ҡалып, үпкәле тауыш менән:

— Юҡ! Аҡтар!—тип тағы бер ҡат өҙөп әйтте. Унан ҡабаланып аҡтарҙын, ҡыҙылдарҙың билдәһен теҙеп китте: — Ҡыҙылдар аттарының ҡойроғон ҡыҫҡа итеп ҡырҡалар. По-

гон ҡаҡмайҙар. Кәпәстәрендә ҡыҙыл таҫма була. Алеша әйтә, быларҙың оҙон ҡойроҡло, ти, үәт. Унан...

— Шулай-шулай...— тип, Хаммат ҡәнәғәт тауыш менән улынын, һүҙен бүлде.— Аңланым, һин дөрөҫ төҫмөрләгәнһең, Байрас. Миңә китергә кәрәк, тип тә дөрөҫ әйтәһең, Байрас. Китергә... Кисекмәҫтән китергә...

Ул аҙ ғына йөрөп, уйланып алды. Унан тағы улының ҡаршыһына килеп баҫты.

— Улым, хәҙер үк туры атты ҡырҙан эҙләп ҡайт. Кеше күҙенә бик үк салынмаҫка тырыш. Арт ҡапканы асып кит. Шунан ҡайтырһың... Унан беҙ атты кәрәк саҡта һә тигәнсе менеп сабырлыҡ итеп эйәрләп ҡуйырбыҙ,— тип иҫкәртте.— Аңлайһыңмы, улым?— тип ҡабатлап һораны.

— Бөтәһен дә һин әйткәнсә эшләрмен, атай!— тип, Байрас, командирҙың бойороғон үтәргә ашыҡкан һалдат шикелле, өҙә баҫып сығып китте.

«Шәп малай. Молодец егет буласаҡ!— тип, ҡыуанып ҡалды Хаммат.— Тик бына йәһәтерәк аҡтарҙы еңеп бөтөргә лә ауылға яңыса белем бирә торған мәктәп астырып ебәрергә ине... Уҡытырға ине ошо малайҙы... Атаһы шикелле беләк көсөнә таянып ҡына түгел, ә аҡыл көсөнә лә таянып йәшәй алһын ине ул...»

Көтмәгәндә башына килгән был татлы хыялдан көлөмһөрәп, Хаммат баш сайҡап ҡуйҙы.

«һай, ирен, тапты уйға бирелер саҡты!.. Аҡтар килеп баҫһа, бирерҙәр әле аҡыл көсөндө... Йәһәтерәк йыйынырға ла ысҡынырға кәрәк!..»

Ул, күкрәкте һыҙлатып торған яра тауышына ҡолаҡ һалмаҫка тырышып, йәһәт кенә һалдат гимнастеркаһын кейеп алды, билен яҫы ҡайыш менән быуып ҡуйҙы. Юл тоҡсайына шинелен, папахаһын һалды. «Йәйен тунынды ҡалдырма, ҡышын үҙен беләһен.» тигән бит ҡарттар. Шинелден дә кәрәк булыуы бар.

Ул әҙерләнеп бөтөүгә, йәшенә хас булмаған етеҙлек менән дөпөлдәтә баҫып, әсәһе Таиба әбей ҡайҙандыр ҡайтып инде. Ҡаты бошоноп:

— Тағы китергә йыйынаһын ахыры?— тип ҡуйҙы.— Әй-й, һис генә аңламаҫһың, берәүҙәре ҡайта, икенселәре китә. Болғана донъяһы, болғана Әй алла, ирҙәр илдә урын тапмай башланы ла баһа.

Хаммат, шөбһәләнеп, әсәһенә ҡараны.

— Кемдәр ҡайта, әсәй?

— Бына теге Собхан старшиналар, Әхмәтшаларҙы әйтәм, анауы көндө, ҡыҙылдар килер алдынан, ҡасып киткәйнеләр...

— Шунан, әсәй?

— Шул. Бөгөн төндә бөтәһе үҙ йорттарына ҡайтып ултырған, ти. Үҙебеҙҙекеләр, аҡтар, килә тип әйтәләр, ти, Собхан старшина үҙенең йортон һаҡлап торған Иҙристе, эт урынына тукмап, урамға ҡыуып сығарған, ти...

— Йә, ярар, әсәй,— тип, Хаммат иплэп кенә әсәһенең һүҙен бүлде.— Ул хаҡта аҙаҡ... Хәҙер, әсәй, сәй эсәйек тә, мин юлға сығайым...

— Шулай уҡ китәһең дәме ни, улым? Бынауы ауырыу көйөнә? Яралы көйөнә?! — тип, тағы ла ҡатыраҡ бошоноп китте Таиба әбей.— Янғыҙын, ҡайҙа бармаҡсы булаһың?!

— Аҡтар килһә, әсәй, яралы тип тормаҫтар бит. Үҙебеҙҙең байҙар уҡ һинен, күҙ алдында ботарлап ташларҙар.— һинен, күҙ йәшен дә, минең яралар ҙа уларҙын. күңелен йомшартмаҫ,— тине Хаммат уйсан ғына.— Шулай булғас, икенең бере: йә миңә хәҙер үк ауылдан сығып китергә, йә...

— Төшөнәм, балам төшөнәм... һөйләп тораһы ла юҡ инде,— тип әсә лә сараһыҙҙан был фекер менән килеште.— Үҙең беләһен,, мин бит былай ғына, хәлде анлаһам да, әсәйлегемә барып ҡына инде... Юллыҡ аҙыҡ-түлек әҙерләйем әле улай булғас, улым... Ярабби, үҙең биргәнде үҙен. тартып алаһыңмы- ни инде?.. һинең дә ҡайғы ҡуржынын. тулмаҫтай булды... Белмәйем, ни өсөн һин был хәтле ҡанығаһындыр инде үҙен, яратҡан меҫкен әҙәм балаларына...— тип аллаға һукрана-һукрана, ҡабаланып, юл тоҡсайына икмәк, ҡорот, эремсек кеүек аҙыҡтар тултырырға кереште.

— Асыҡҡанда аҙ-маҙ ҡапҡыларһың, балам!.

Хаммат әсәһен мөмкин тиклем тынысландырырға тырышты.

— Әсәй, һин ҡайғырма. Аҡтар килһә лә — тиҙ китер. Ә беҙ китмәҫкә ҡайтырбыҙ.

Таиба әбей үҙенең яратҡан һүҙен ҡабатланы:

— Ярабби, шулай ғына булһын... Әйткән һүҙең фәрештәнец амин тигән сағына тура килһен...— Унан күптән күнелендә һаҡлап йөрөткән бер уйын улына әйтеп ҡалырға ашыҡты:

— Улым, китәһең... Исмаһам, Өммөкәй киленгә берәй йылы һүҙ әйтергә лә өлгөрмәнең бит әле. Ә ул кеткәйне... Ҡалай көткәйне, бахыр... Ярабби... Ҡалай ҡыйын бит уға... Ярата бит ул һине... Ул бит һинен, тәүге ҡатынын,. Уны һис тә генә лә йәлләмәйһендер тип башыма ла килтерә алмайым шул...— тип, һейләнә-һөйләнә, үҙ ҡылығына хас булмаған сабырһыҙлыҡ менән өй эсендә ниҙер эшләп, өйөрөлөп йөрөнө. Шулай сабырһыҙ булып киткәне өсөн дә, киленен йәлләп ысын күңелдән өҙөлгәне өсөн дә Хамматҡа әсәһе ҡыҙғаныс тойолоп китте. Ләкин уны йыуатырлыҡ бер һүҙ ҙә таба алманы. Ни әйтһен? Йерәкте бойороп ҡына яраттырып буламы ни... Һәм ул һүҙҙе икенсегә борорға ашыҡты:

— Беҙҙең бесәнселәр ҡасан ҡайтыр икән, әсәй?

— Ə һип ҡасан китмәксеһең?— тип һорау менән яуаплаlы Таиба әбей, тағы ла ныҕыраҡ бошоноп:— Бик үк ашыҡмайһыңдыр ҙа баһа?!

— Энер төшкәс тә. Дошман күҙе төн ҡараһы менән бәйләнгәс тә...— тип ҡырт киҫте Хаммат.— Юҡһа һуң булыр.

— Уларҙы күрмәй китәһең икән шул. Кесаҙна кенде... Мунса инергә генә ҡайталар шул улар...— тип көрһөнөп ҡуйҙы Таиба әбей.— Хәйерле булһын инде, балам, хәйерле булһын...

Хаммат, күрәһең, әсәһен йыуатырға тырышып, элеккесә шат, яҡты итеп йылмайып:

— Минең хушлашыу сәләмен уларға, әсәй, һин тапшырһаң да бик еткән. Унан, әҙерәк уйланып, тынып торғас: — Әсәй, Бибеш киленгә әйт, Емеште үҙ балаһы кеүек яратып ҡараһын,— тип еҫтәне.— Ҡыйырһытмаһын...

— Әйтермен..

— Бына рәхмәт,— тип тағы ла күңеллерәк йылмайҙы Хаммат.— Инде, әсәй, сәй эсеп алайыҡ та, мин юлға сығайым... Күрәһең, энер ҙә яҡынлаша...

Ə көн, ҡарышҡан кеүек, үтмәне лә үтмәне. Монарлы ҡояш, әйтерһең дә, түбә өҫтөндә мәңгегә туктап ҡалды. Хаммат, Таиба әбей, Байрас өсәүләп, һәр бер ҡыштырлауға ҡолаҡ һала-һала, тып-тын ултырып ҡояш байыуын көттөләр Бәлки, ғүмерҙәрендә тәү тапҡырҙыр яҡты көндән биҙеп, ҡараңғы төндө, алдағы бик күп яҡты көндәрҙе күреү өсөн, тылсымлы күпер булып ятасаҡ хәл иткес төнде, һағынып, зарығып, теләп көттөләр. Ахыр бына ул яҡынлашты. һалмаҡ, талғын булып энер төштө. Кис етте. Хаммат хәҙер ауылдың ҡаты йоҡоға талыуын, тирә-яҡты ҡуйы ҡараңғылыҡ баҫыуын көттө. Ошо көтөү мәлендә үҙенең башында ҡыйыу бер план да тыуып өлгөрҙө. Уны тормошҡа ашырыу өсөн, кешенең генә түгел, бар тәбиғәттең татлы йоҡоға талыуы ла кәрәк ине. Ул әсәһе ни менәндер албырғап, ситкәрәк киткән арала, ашығып улының ҡолағына бышылданы:

— һиңә лә ат эйәрләргә кәрәк, Байрас! Мине әҙерәк оҙатырһың...

— Минең атым эйәрле,— тип, шулай уҡ бышылдап яуап ҡайтарҙы Байрас.

— һай, молодец!

— Мин дә һинең менән ҡыҙылдарға китәм, атай!..

Хаммат улының был ҡыйыу фекеренә ни тип яуап бирергә уйланып ҡалған арала, кемдер сабырһыҙланып ишек ҡаҡты: «Тук-тук! Тук-тук-тук-тук!»

— Аҡтарҙыр! тине Таиба әбей. Ҡурҡышынан бер торҙо, бер ултырҙы Хаммат стенала элеүле торған сукмарҙы



алып ишек төбөнә баҫты. Ҡаушап ҡалған Байрасҡа сая ҡарап күҙ ҡыҫып алды:

— Улым, асылмалы тәҙрәнен элгесен ысҡындырып ҡуй!.. Тәүҙә ингән беренең башын йәнсербеҙ... Унан...

Ҡағыу быныһында көслөрәк ҡабатланды.

— Ярабби... Баламды... Үлем тырнағынан көскә ҡотолған бөркөтөмдө...— тине Таиба әбей.— Ярабби, үҙең. һаҡла...

Күҙ асып йомған арала ниндәйҙер сихри бер көс Хамматтың күҙ алдына теп-тере Сәлимәне килтереп баҫтырҙы. Уның ал кесейә күлдәк кейгән һығылма билле зифа кәүҙәһе, тулҡынлы ҡара сәстәре, шоморт күҙҙәре йөрәкте әсе һыҙлатып тулҡындырып ебәрҙе. Уның йыр кеүек яғымлы, ярһыу бышылдауы ишетелгәндәй булды:

«Хамматым... Йәнем... Ҡайттыңмы ни?!» Февраль революцияһы булғас, фронттан ҡайтып ингән сағы, ғүмеренен. ин, бәхетле бер минуты нур тиҙлеге менән мейеһеи ярып үтте.

«Бына ул, Сәлимә, киндер һуғып ултырған еренән һикереп торҙо... Ептәренә урала-сырмала көрөҫ артынан сығарға тырышты... Ə ептәр уның һайын ныҕыраҡ сырмалдылар. Нәфис һыиыма һырпаланып, ебәрмәҫкә тырыштылар. Сәлнмә сабырһыҙланды... ярһыны... Ике бите ал янды... Ләкин ни саҡлы сабырһыҙланһа, тулҡынланһа, шул хәтле ептәр уны сеймәгерәк сырманылар... Шунан Хаммат уны, бала шиксл-ле иркәләп, көрөҫ артынан күтәреп алды... Тубығына ултыртты...

— Сәлимәкәйем, һылыуым!..

— Йәнем!.. Йәнсм, йәнем!..

һөйөп, һағынып сарсаган ике йәш йөрәк, әйтерһен, мәңгелеккә тагы бсрәүго әйләпде... Эйе, мәнгелеккә һымаҡ ине... Ə ҡандай гүмсрһсҙ булды ул бәхет...

Үмырз.ти нинэ үсэ икэи,
Я«аи кв1гэ сак.чы тормагас...

Шулай йырларға ярата ине Сәлимә... Их Сәлимә, Сәлимә... Тукта, минец ул мылтыҡ ҡайҙа икән һун әле?! һуғыштан, шул саҡ фрсжттан алып ҡайтҡан мылтыҡ! Сәлимәкәй мине мылтыҡлы көйө күргәс, ҡото осҡайны... Тагы һуғышҡа китәһеңме нн, ваҡытлыса ғына ҡайттыңмы нн, тип хәүефләнеп киткәйне... Кем белә... Бәлки, тағы ла тура килер, тип мәрәкәләгәйнем мин ул саҡта... Эйе, уйнап ҡына әйткән кеүек булғайным... Ə бына ул, баҡтиһән, һуғышаһы көидәр әле башлана ғына икән...

Ҡайҙа икән һун, ул мылтыҡ, ҡайҙа икән?! Хәҙер бит уныц самай кәрәк сағы...»

Мылтыҡ хаҡындагы уй ваҡытһыҙ хыялға бярелгән Хамматты бик тиҙ ысынбарлыҡҡа тартып сығарҙы. Ул, ҡабаланып, күҙе менән улын эҙләне:

— Байрас, һин белмәйһенме, ул мылтыҡ ҡайҙа?

— һин яраланғас... Больницаға оҙатылғас... Тимербай ағайҙар...— тип тотлоға-тотлоға һүҙ башланы Байрас. Курәһең, уға ул ҡайғылы минутты хәтергә төшөрөү еңел түгел ине. Хаммат улына ярҙамға ашыкты.

— Дружинасылар алдымы?

Байрас:

— Эйе,— тип баш ҡакты.— Уларға мылтыҡ етмәй ине бит.

— Яҡшы... Тимәк, миңә мылтыкты аҡтарҙан тартып алырға ғына ҡала...— Хаммат, тығыҙ аҡ тештәрен күрһәтеп, улына матур йылмайып ҡараны.— Шулай бит, улым?!

Байрас ни тип тә яуап ҡайтарырға өлгөрмәне, ишектә тағы ла сабырһыҙыраҡ дөбөрләү ҡабатланды. Унын, артынса үтә таныш, яғымлы тауыш та яңғырап китте.

— Әсәй, әсәй, тим! Йәнегеҙ бармы һеҙҙең, юҡмы?!

Әле генә тын да алмай, ҡолға кеүек ҡатып, мейес буйында баҫып торған Таиба әбей ҡапыл, быуындарының хәле бөтөп, урындыкка ултыра төштө.

— Аһа, Закир түгелме һуң? Закирымдың тауышы түгелме һуң был, балалар?!

— Мин, әсәй, мин!

Байраска ла йән инде.

— Закир ағайым шул!— тип, ҡыуанып ишеккә ташланды.— Асайым, атай!

Хаммат, Байрасты ишеккә ебәрмәй, арҡаһы менән юлды кәртәләне лә ҡоро ғына тауыш менән ҡустыһына өндәште:

— һин кем менән? Кем яғынан?..

Закир уйланыпмы, ғәҙәтенсә, шаярыпмы, әҙ генә тынып торҙо. Унан ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Вот ахмаҡ, кем менән булайым? Бер үҙем! Ас, ағай!

Хаммат элгесте ысҡындырҙы Шулай ҙа сукмарҙы ҡулынан төшөрмәне. Ишектән ситкәрәк тайшанып, көттө.

— Ағай, был ни эшен? Ниңә ҡустывды сукмар менән ҡаршылайһың?— тип аптыраны хәҙер Закир.

— Ни эшләп ҡасаҡ кеүек төндә йөрөйһөң? Ни өсөн йөрөгәненде кем белә?..— тип һаман ҡоро ғына яуапланы Хаммат.— Тукта, һин нисек әле кире боролдоң?

Закир бошонҡоланып түргә уҙҙы. Шинелен, юл тоҡсайын шап иттереп мөйөшкә ырғытты. Әйләнә-тирәлә нимә бар, бөтәһен бер юлы күрергә тырышып, күҙ йөрөтөп сыкты

— Ниңә шәм яндырмайһығыҙ? һуҡыр сысҡан кеүек ҡараңғыла ултыраһығыҙ. Әсәй, һин ҡайҙа?

— Мин бында, улым, ҡолонсағым...

Закир әсәһенең янына ултырҙы Яурынына ҡулын һалып, күҙенә ҡарарға тырышты:



— Ҡурҡыттым шикелле, әсәй?!

___Юҡ, балам, юҡ,— тине Таиба әбей, ҡабаланып. Ғәҙәтенсә, хәҙер һикереп тороп китергә, йүгереп йөрөп ниҙер эшләргә, аш-һыу әҙерләргә теләне.— Асыҡканһындыр... Сарсағанһывдыр ҙа баһа, балаҡай... Сәй яңыртып ебәрәйемсе...— тип өҙәләнеп һөйләнде. Әммә үҙе һаман ҡуҙғала алманы. Әле генә кисергән ҡаты хафаланыу өҫтөнә килеп тыуған көтөлмәгән ҡыуанысты күтәрә алмай, хәле бөтеп ултыра бирҙе. Хаммат әсәһен тынысландырырға ашыкты.

— Бирешмә, әсәй, һин бит ыласындар әсәһе!— тине ул инде ғәҙәттәге көр, күнелле тауыш менән. Унан һаман үҙ янында уралған улын еңел генә этәреп ебәрҙе.— Байрас, бар, тәҙрәләрҙе яҡшылап ҡорғанла. Шәм тоҡандырып, Закир ағайындын. нурлы йөҙөн күрәйек... Ниндәй ҡыуаныслы хәбәрҙәр алып ҡайтты икән ул беҙгә?— тип тә өҫтәне. Унан өрлөктә элеүле торған бишле лампаға ут ҡабыҙҙы ла, уйынлы-ысынлы һөйләнеп, ҡустыһының башынан аяғына хәтле ҡат-ҡат ҡарап сыҡты.

— Алыҫ юлдан килгәнгә оҡшайһын?..

— Алыҫтан. Урал артынан.

— Нисек ҡайттың, ни өсөн ҡайттын, тигәндәй... һөйләп ебәр. Тыңлайыҡ.

— Ҡасып ҡайттым, ағай.

Атаһы менән йәнәш баҫып ҡыҙылармеец кейемендәге ағаһына һоҡланып ҡарап торған Байрас аптырауҙан хатта ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Ҡасып?!

— Эйе, мырҙа,— тине Закир, вайымһыҙ келөргә тырышып.— Отряд төнгө ялға туктар алда тоттом да өйгә ҡарай һыҙҙым.

Хаммат, үҙе лә анламаҫтан, ҡапыл ҡустыһының яғаһынан бөрөп тотоп алды ла һелкетә тартып күҙенә теклəп ҡараны.

— һин нимә юҡты бытылдайһын, ахмаҡ?!

— Тукта әле, ағай, ашыҡма,— тине Закир, һаман ғәмһеҙләнеп.— Үҙе ҡасып барған отрядтан ҡасмай ни бар?

— Йә, ҡастың да, ти... Бында ни бар?

— Бындамы?...— Закир әҙ генә тотлоғоп торҙо.— Әсәйем. Һин... Ауылым...

Хаммат, ҡустыһының яғаһынан ҡыҫып, тағы бер ҡаты ғына һелкетте лә этәреп ебәрҙе.

— һай, ахмаҡ, сабый! Аҡтар, Собхан старшиналар бирер һиңә әсәйенде, ауылынды... Көтөп тор.

— Ауылда аҡтармы ни?!— тип юғалып торҙо Закир.— Мин бит белмәнем...

— Әлегә аҡтар юҡ,— тине Хаммат, инде бер аҙ һүрелегг.— Каширин отряды, үҙҙәрен бынан һөрөп сығарғас, кире килмәнеләр әле. Уныя ҡарауы Собхан старшина ла, Әхмәт шалар ҙа кире ҡайтты... Бөгөн-иртәгә аҡ чехтарҙың килеүен көтәләр... Әле бына Байрас Яҡуп ауылында ниндәйҙер аҡ отряд барлығын белеп ҡайтҡан

Ирҙәр, ҡара-ҡаршы баҫып, бик оҙаҡ һүҙһеҙ торҙолар, Ни әйтергә, ни уйларға белмәй йөҙәгән Таиба әбей әле бер улына, әле икенсеһенә төбәлеп ҡараны

— Ярабби... Йә, ултырып һөйләшегеҙ, исмаһам.. Сәй янында... Закир һыуһағандыр ҙа баһа Көнө лә, төнө лә ҡан дай томра бит. Сарсағандыр бөркөтөм

Хаммат ауыр ҡарашын тағы ҡустыһына төбәне,

— Отряд ҡайҙа йүнәлде икән? Белмәйһенме?

— Белоретҡа. Тау эшселәре араһына барабыҙ тиҙәр ине...

— Беҙгә хәҙер үк, бер минут һуңламай, улар артынан китергә кәрәк. «Ил яҙмышы ир яҙмышы»,— тигән борон ғолар. Ил яҙмышын хәл итеүҙе кемдәргәлер тапшырып, һи нең менән минең кеүек ирҙәр өйҙә ятыр саҡ түгел бит. Хәҙер сәй эсәбеҙ ҙә юлға сығабыҙ Аңлайһыңмы, Закир ҡустым?

— Аңлайым да ни... тип икеләнеп торҙо Закир. Унан: — Миңә ни барыбер ҙә ул,— тип ҡуйҙы — Тик бына әсәйем генә йәлке... Ҡарт кенөндә.. Мин ни иҫәр аҡылым менән: «Беҙ үҙ байҙарыбыҙҙы туҙҙырып бөттөк һатыбал, Федька Рябой отрядтарын туҙҙырҙыҡ Байҙарҙың ҡалғаны ҡасып бөттө. Был тау араһында йәшәүселор үҙ байҙары менән үҙ ҙәре һуғышһындар»,— тип уйлаған булып ҡайтып киткәй нем шул.. Баҡтиһәң, бында бөтәһе лә иҫкесә булырға тора икән...

— Ана шул шул, еңел уйлайһың, ҡустым. Бик еңел уйлап хәл итәһец,— тине Хаммат, әсенеп,— исмаһам, иптәштәрең, менән кәңәшләшер инен. башта

— Шундай холоҡ инде миндә...

Таиба әбей улдарынын, һөйләшеүен иғтибар менән тың лап ултыра бирҙе лә, бая Хамматты оҙатырға йөрегәндәге аҡыллы сабырлыгын онотоп, илаулап һүҙгә ҡатнашты

— Шуны әйтәм әле, балалар, һуғыштан ҡайтыуығыҙға ҡасан ғына? Инде тағы әсәйегеҙҙе ташлап китмәксеһегеҙ? Ярабби, ни өсөн миңә ошо керәшендәрҙе бирҙең икән?.. Исма һам, береһе генә лә ҡыҙ булманы бит.. Янымда торор ине ҡартайған көнәмдә яңғыҙымды ташлап китмәҫ ине... Ә бы ларға, керәшендәргә, әсәй нимә? Уларға һуғыш ҡына бул һын!.. Йә, нимә етмәй һеҙгә? Нимәгә шул һуғыш тип дөңкәйеп киттегеҙ әле һеҙ?!



— Әсәй, беҙҙең башҡорт ҡатындары уландарын һуғышҡа йәшһеҙ оҙаталар,— тине Хаммат иплэп кенә.— Бик һәйбәт ғәҙәт. Быны бит һин, әсәй, үҙең дә яҡшы беләһең.

— Белеү менәнме ни ул!.. Әле генә ҡайтып күҙеңә күренһендәр ҙә әле генә икеһе бер юлы төп күтәрә сыҡһын да китһендәрсе... Ҡалай итеп быға түҙмәк кәрәк?! Әсә йөрәген таш тип беләһегеҙме ни һеҙ?! Иламай бер оҙатаһың, ике оҙатаһын.... Күпмегә еткерергә кәрәк ул түҙемде? Ошо хаҡта уйлап ҡарайһығыҙмы һеҙ әҙерәк!

Әсәһен һәр саҡ түҙем, сабыр итеп күрергә өйрәнгән Закирға ла, Хамматҡа ла был үпкәне ишетеүе анһат булманы. Улар уйланып, тағы бер аҙ тынып ултырҙылар. Ахыр Закир ҡапыл сәй янынан тороп китте лә ағаһының ҡаршыһына барып баҫты.

— Бәлки, ысынлап та, миңә ҡалып торорға ярайҙыр? Аҙ һуғышманым бит. Көсләп мобилизовать итмәһәләр, ҡабат һуғышырға ниәтем дә юҡ,— тине ул.

Көтөлмәгән был тәҡдимгә Хаммат ҡапыл ғына ни тип яуап ҡайтарырға ла белмәне. Кисерелгән тән яраһы ла, йән яраһы ла, күрәһең, унық ҡаты ихтыярын нык ҡына ҡаҡшатҡайны. Шуға ахыры ҡустыһы:

— һин быға нисек ҡарайһың?— тип ҡабатлап һорағас:

— .Ярар,— тип бошонҡо ғына ҡул һелтәп үк ҡуйҙы. Унан тағы бер аҙ уйланып ултырғас:— Ҡалып тор булмаһа... Кем белә, бәлки, беҙҙен. ауылға аҡтар килмәҫ тә... һиңә теймәҫ тә... Бәләкәс ауыл бит...— тип тә өҫтәне. Шул саҡ Байрас, ҡурҡынып:

— Атай!— тип бышылданы.— Урамда ат тояҡтары тауышы ишетелә! — Бөтәһе л-ә шым булдылар. Ысынлап та, юртып килгән күмәк аттар тал уларҙың гәцгәлендә генә бейеп туҡталып ҡалды.

«Аҡтарҙыр... ыласындарымдың баштарын ашар өсөн килгәндәрҙер!..— тигән баяғы хафалы уй Таиба әбейҙен. йөрәк итен үтмәҫ бысаҡ булып тағы телгеләл үтте.— Китергә лә өлгөрә алманылар бит, исмаһам...»— тип, әле генә бер ҡайҙа ебәргеһе килмәгән уландарынын. өйҙә булыуына ҡайғыра башланы.

Бәхеткә ҡаршы, һыбайлылар оҙаҡ туҡтаманы. Килгәндәге кеүек юрттырып ары уҙҙылар. Хаммат ҡабаланып һикереп торҙо:

— Былар аҡтар булыр... Разведчиктарылыр, бәлки... Әлегә туҡталманылар. Әммә кире әйләнеп килеүҙәре бик мөмкин...— тине.— Йә, әсәй, хуш, һау бул,— тип ябай ғына иҫәнләште. Унан ҡаты ғына итеп Байрастың арҡаһынан ҡаҡты.— һ мине әҙерәк оҙатырһың...

Бындай иғтибарға лайыҡ булыу ғорурлығынан Байрас ҡайҙа баҫҡанын белмәй алдан сыҡты:

— Атай, мин хәҙер, һә тигәнсе аттарҙы лапаҫтан алып сығам!

Хаммат Закирҙы ситкәрәк тартып, ҡолағына шыбырланьг

— Мин Өммөкәй еңгәңде күреп һөйләшә алманым. һин әйт, һуғыш бөткәс тә, уның янына ҡайтырмын.. Байрастың әсәһе — минең өсөн ҡәҙерле ҡатын, тип әйтте, тиген.

Унан тағы бер ҡат әсәһе менән хушлашты:

— Әсәй, һау бул. Бирешмә. Мин тиҙҙән ҡайтырмын һуғыш оҙаҡ бармаҫ.

— Амин, шулай ғына булһын, иҫән ҡайтырға ғына яҙһын, балаҡайым,— тип, инде тыныс, етди хушлашты Таиба әбей.— Хызыр-ильяс юлдашың булһың, ыласыным

— Шулай булһын, әсәй,— тигән булды Хаммат та — һөйләшәһе һүҙҙәрҙе һөйләшеп бөттөк Тышта һөйләшмәйбеҙ. Тын ғына ҡарап ҡалаһығыҙ. Дошман ҡолағынын, бик һаҡ сағы,— тип иҫкәртте. Унан ишеккә йүнәлде Шул саҡ Закирҙың юл тоғонан ҡабаланып ниҙер алып маташҡанын күреп, кире боролоп килде.— һин нимә мыштырлайһың?

— Ағай, миндә бомба бар...— тип турайып баҫты Закир

— Бомба?!— тип ҡыуанып китте Хаммат — Ҡана, бирә һал! Ә мылтығың ҡайҙа?

— Ташлап ҡалдырҙым,— тине Закир, ярамаған шаянлыҡ эшләп тотолған малай шикелле күҙен түбән төшөрөп — Яңғыҙ кешегә юлда кем, нимә осрамаған тиһен- Атыш аҫтына эләгергә лә тура килде... Патрондар бөттө Патроны булмағас, ҡоралмы ни ул?.. Бына шулай, мылтыҡ юҡ..

— Ҡара әле, был хәтле лә ахмаҡ булырһың икән һин!— тине Хаммат, таман йәне үртәлеп.— Ә мин һине улай уктыр тип уйламай инем... Ошондай саҡта кеше ҡоралды ташлап китерме?! Патроны булмаһа ла, мылтыҡ — ҡорал да баһа ул! Уның штыгы бар ҙаһа!

— Йә инде, китер саҡта мырҙанды рәнйетмә инде, балам...— тип Таиба әбей кесе улын яҡларға ашыҡты.— Ташлаған бит инде, ни хәл итәһең...

Хаммат әсәһенә ҡарай бирҙе лә:

— Йә, ярар,— тип килеште.— Был ҡул бомбаһы, граната ғына ла бит. Барыбер ҡорал! Юҡһа мин бынау сукмар ярҙамы менән үҙемә мылтыҡ табырға самалап тора инем бит әле. Былай булғас ни, һи-и!. Булдырабыҙ уны!..

Ул көр тауыш менән бер көлдө лә, ҡустыһының яурын башынан дуҫтарса ҡағып, өйҙән сыҡты. Байрас, эйәрле ике атты етәкләп, тупһа янында тора ине Улар, аталы-уллы, бер юлы һикереп атҡа менделәр ҙә елдереп сығып та киттеләр



— Хушығыҙ.

— Хуш, һау бул, улым! Хәйерле юл!

— Хуш, ағай!.. Күрешкәнгә хәтле, хуш...

— Аһа, Байрасты бетөнләй алып китмәйҙер ҙә баһа! һай, иҫәүән, һорамай ҙа ҡалдымсы... Ҡасан ҡайтара икән һуң уны?

Таиба әбейҙең һуңға ҡалған һорауына яуап биреүсе бул маны

Улар, ат тояғы тауыштары тынып, тирә-яҡ һил булғансы, ниҙер көтөп, тағы ниҙер ишетергә өмөтләнеп, бик оҙаҡ тышта ишек төбөндә торҙолар. Ахыр Закир өметһеҙ ҡул һелтәне лә ейгә инеп китте.

— Әйҙә, әсәй, ял итәйек. Унан күҙ күрер...

— Хәйерле таң бир, ярабби...— тип, ауыр көрһенөп, Таи^ ба әбей ҙә улынын, артынан эйәрҙе.

Өйҙә, әсәһе янында, бер нисә көн күренмәй ятып ял иткәндән һун, Закир иртә үк тороп Өммөгөлсөмдәргә китте Ағаһының сәләмен еткерергә ваҡыт иие.

Көн кисәгенән дә томрараҡ, урам үлек кеүек тын. Илсе ғолда был көндәрҙә ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа күренмәй. Кеше^^ләрҙең күбеһе ҡыр эшендә. Ә эштә булмағандары, моғайын,
К берәүҙәре аҡтарҙын, икенселәре ҡыҙылдарҙың бына-бына ки-
,х леп баҫырын хәүефләнеп көтөп, урамға баш күрһәтмәй боҫоп
çу ята. Ә тегеләрҙен. береһе лә был кескәй ауылды килеп алырға ашыҡмай, күрәһең. Кисә төндә Хамматтарҙы ҡурҡыткан һыбайлылыр ҙа уҙып барыусы отряд ҡына булды, ахырыһы. Кем белә, бәлки, Хаммат кеүек ҡыҙылдарҙы эҙләп китеп барыусыларҙыр...

Закирҙың килеүе Өммөгөлсөм есөн һис тә кетөлмәгән хәл ине. Шуға, ахыры, ул ҡулындағы самауырын иҙәнгә лып ултыртты ла:

— Бәй-й!..— тип һуҙып торҙо. Унан, үҙенең шул тиклем ҡаушауына унайһыҙланып:—Тфу-тфу-тфу... Күҙемә күренә тип торам,— тип ҡыйыу, алсаҡ һейләшеүгә күсеп китте.— Аһа, был Закир ҡәйнеш, һин түгелме һун? һаумы, йә, күрешәйек...

— Шәпме, еңгә? Иҫән-һау ғына торҙонмо?

Закир еңгәһе менән еңелсә генә күрешеп түргә уҙҙы, арыҡ оҙон аяҡтарын ишеп һалып, урындыҡ ситенә, йеҙлөккә, ултырҙы. Тар балаҡлы байка салбарын тубыҡ тәцгәленән әҙ генә күтәреп, күк сатин күлдәгенец яғаһын ысҡындырып ҡуйҙы. Ҡырын тарап ҡуйған ялтыр ҡара сәстәрен, йәш, ҡаҡса биттәрен ҡулъяулыҡ менән һыпырып алды:

— Фу, шайтан, алғыры! Бед^щыеаДагдаЛ^гб^ЯВПУ^кән..

Ҡана, еңгә, айран һыулап эсер әле. Иллә һалҡын булһын. Йөрәктең ялҡынын һылап алғандай итһен, йәме!

— Эй-й, ауыҙымды асып, аңшайып тик торамсы. Үәт, алйот!— тип, йәштәрсә шыңғыратып көлөп ебәрҙе Өммөгөлсөм. Унан, баяғы самауырын күтәреп, әләгә-тәгәрәй, аласыҡҡа йүгерҙе.— Хәҙер, ҡәйнешкәйем, айраны ла, сәйе лә булыр... Әҙ генә сабыр ит... һиңә тигәндә, күгәрсен һөтөн табырға ла әҙермен хатта!

— һалҡын шишмә һыуы менән һыула, еңгә!— тип ҡысҡырып ҡалды Закир.— Сарсаным!

Өммөгөлсөмдөн шаян яуабы аласыҡтан килде:

— Аллаға шөкөр, байлығыбыҙ бар, ҡәйнеш: әсе ҡатыҡ та, шишмә һыуы ла етерлек. Эс күпкәнсе эсерлек!

«Ҡара һин уны, ҡалай теремек!..— тип, һоҡланып уйланды Закир.—Әйткәндәй, иреташлап китте, берҙән-бер ҡыҙы—Гөлсәсәге тиф ҡорбаны булды... Ә ул һаман Оло Эйектен, һары талы кеүек. һары талды ла бит ел-дауыл аяуһыҙ ҡағаһуға ергә бөгә, ташҡын йылға нескә талды йығыу, тапау, бөтөрөү ҡыуанысынан шашынып, көлә-көлә тәгәрләп аға... Ләкин дәһшәтле дауыл үтә, ташҡын ҡайта, тал, һығылма бил һары тал, тағы турайып, һылыуланып тороп ултыра. Дөрөҫ, ел-дауыл йолҡҡолағанда, ташҡын тулҡындар ергә, мәтегә хәтле эйелдергән саҡта, унын, ҡайһы бер ботаҡтары һынғылай... Ҡайһы ботаҡтарына тулҡын менән ағып килгән сүп-сар үлән, ылымыҡ һәрмәүестәре эленеп ҡала... мәте баҫа... Ләкин улар һары талдың ҡояшҡа һуҙылып үҫер зифа һынын ғәриплэй алалармы ни?.. Бына ҡояш ҡыҙҙырыр, ылымыҡтар ҡороп, ергә ҡойолор, ямғыр яуыр — тал һынына һырышҡан мәтеләр, ылымыҡтар йыуылып төшөр. һары тал тағы елеккесә ҡояшты, айҙы, йондоҙҙарҙы, бетә әйләнә-тирәне берҙәй үк һөйөп, яратып, сәләмләп баш эйә-эйә, көлә-шаяра ҡыуанып йәшәй бирер...

Их һары тал, һары тал... Йә, минен, шундай бер һары талым да КҮК бит, исмаһам...»

Закир, үҙенен. көтмәгәндә нескә уйҙарға бирелеп китеүенә уңайһыҙланып, һикереп торҙо. Ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, аяҡ остарына ҡарап йөрөп китте. Ләкин ишектән урындыҡҡа хәтле ике аҙым, яҡ-яҡҡа ес яҙым яһарға ғына мөмкин булған тар иҙән унын башын бик тиҙ әйләндерҙе. Ул, ишек төбендә туҡтап, сабырһыҙланып, аласыҡ яғына ҡарап ҡысҡырҙы:

— Еңгә, айранын. буламы һинең, юҡмы?

Тар көбөлә әсе ҡатыҡ бешеп торған Өммөгөлсөм шишмә һыуын ҡушҡас, тағы бер-ике гөбөрләтеп бешеп алды ла ҙур ағас туҫтаҡты мөлдөрәмә тултырып айран алып килде.

— Мә, ҡәйнеш, бисмилланды әйтеп кевә эсеп ебәр.



— Әгәр әйтмәһәм?—тип шаяртты Закир.— Ни булыр еңгә?

— һыуһынының ҡанмаҫ,— тип көлдө Өммөгөлсөм.— Айран еткереп булмаҫ.

— Улай ғына булһа, бәләһе бәләкәс икән дә,— тип һа* ман шаяра-көлә Закир тештәрҙе семләтеп торған һалҡын айранды төп күтәрә һемерҙе лә туҫтаҡты кире бирҙе.

— Айранын. ҡымыҙ кеүек, үҙең ҡыҙ кеүек... Былай булғас, еңгә, тағы бер туҫтаҡ эсмәй булмаҫ.

— Эсә генә күр, ҡәйнешкәйем. һинен. өсөн генә яһалған айран...— тип Өммөгөлсөм тағы аласыҡҡа йүгерҙе. Закир енгәһенең шундай еңел йөрөшөнә тағы ла нығыраҡ һоҡланып ҡарап ҡалды.

«Бына бирешмәҫ йән!.. Ҡайғы... ҡайғылар... Ә ул һаман теремек, һаман көләс... Төҫ тә һалмай... Тәнгә лә бирешмәй. Нимә йөрөтә икән быңдай кешеләрҙе? Өмөтмө?.. Мөхәб бәтме?.. Әллә бошонорға, ҡайғырырға һәләтһеҙлекме?.. Мо ғайын, мөхәббәттер... Ағайымды үтә лә ярата бит инде ул... Ағайым ҡалай бәхетле... Мин ниңә ундай бәхеттән мәхрүм?! Мин кемдән кәм?!»

Закирҙын. йөрәге быҒаса таныш булмаған ниндәйҙер тә рән үкенес менәп һыҙлап типте. Ул тагы ла ҡыҙыуыраҡ атлап ары-бире йөрөргә керсште.

«Мин кемдән кәм?. Мин ни есөн шундай ябай бер бәхет тән дә .мәхрүм?!—тип һаман-һаман сабырһыҙлана барҙы унын йөрәге.— Әллә мин үҙ бәхетем янынан күҙ йомоп үттемме? Әллә миңә тигән бәхетте башҡалар уптымы?!»

Өммөгөлсөм аласыҡтан тагы йүгереп килде.

— Мә, ҡәйнеш, бынығһын да төп күтәрә эсеп ебәр,— тип көлә-көлә Закирға тағы айран тулы туҫтаҡ һондо. Ә ҡәй неше, әйтерһен, был юлы туҫтаҡты түгел, еңгәһен дә күр мәгән һымаҡ һаман иҙән буйлап йөреүен белде. Өммөгөл сем, туҫтаҡ тотҡан килеш, аптырап, ишек төбөндә оҙаҡ ҡына көтөп торҙо. Күңеленә бер-бер артлы хафалы уйҙар килә башланы. Йөрәге тарһылдап, бит остары ал яиып китте, күҙ ҙеренә әсе йәш томаны һирпелә башланы. Әле генә ғәмһеҙ шатеңгә булып күренгән Әммөгөлсөм, бойоғоп, нисектер тә пәш, ҡураныс һәм ҡыҙғаныс төҫкә инде:

«Аһа, бая абайламағанмын да... Бошонҡо икән дә ул. Әллә, хоҙайым, Хамматтан берәй ауыр һүҙ алып килдеме икән?! Эйе, шулайҙыр, Хаммат ебәргәндер... Өмөт итмәһен.... Көтмәһен, тип әйтергә ҡушҡандыр... Башҡаса... үҙе килер ине...»

Үҙ зарына бирелеп, ишекле-түрле йөрөп яткан Закир ҙа еңгәһенең хәлен абайламаны. Күтәрелеп тә ҡарамай, ниндәй Ҙер ҡоро, ҡырыҫ тауыш менән:

— Еңгә!— тип өндәште.— һиңә ағайымдан сәләм...

Өммөгөлсөм мөлдөрәмә тулы туҫтаҡты, сайпылта-түгә көлдөксәгә алып барып ултыртты. Ҡайтанан һорарға ла, берәй һүҙ әйтергә лә хәле етмәй, тағы баҫҡан ерендә тапанып торҙо:

«Нимә ти ул?! Әй хоҙайым, әллә яҙа ишеттем инде? Хамматтан сәләм, ти түгелме һун?!»

Закир һаман йөрөүҙән туктамай, еңгәһенә ҡарамай, шул уҡ ҡоро тауыш менән хәбәр итте:

— Ағайым ҡыҙылдарҙы эҙләп китте. һуғыш бөткәс, туптура үҙ йортома ҡайтырмын. Көтә алһа, көтһөн, тине...

Инде ниндәйҙер иҫ киткес тылсымлы көс Өммөгөлсөмдө усаҡ алдынан бәреп сығарҙы. Ул, дауыл осорған ҡауырһын шикелле, еңел кәйелеп, ҡәйнешенен, алдына килеп баҫты.

— Нимә тинең, ҡәйнеш?!—тип, йондоҙ кеүек балҡып, күҙҙәренә төбәлеп ҡараны.— Ысын шулай тинеме?.. Көтһөн, тинеме ни, ҡәйнеш?! Йәсе инде... Төптө шулай тип әйтеп китте тигенсе, ә?!

Ул, үҙ-үҙен онотоп, һейләнә-көлә, иҙән уртаһында бейеп әйләнде. Унан:

— Уй, ни ҡыланам?!— тип, уңайһыҙланып, лып итеп урындыҡҡа барып ултырҙы. Унан йәнә торҙо, йәнә бейене.— Көтә алһа, көтһөн, тип әйтте тиген, ә?! Әй хоҙайым, көтә алһа, тиһенсе, ә?.. Минең уны ғүмер буйы көтәсәгемде, хатта ҡабат янһыма ҡайтмаҫын, миңә күңеле сәпсим һыуыныуын белә тороп та, көтәсәгемде белмәйме ни инде ул?! Эй-й, әгәр уны көтөү бәхетем булмаһа, мин әллә ҡасан һарғайып үлгән булыр инем. Эй хоҙайым, ай көтөргә, йыл көтөргә, ғүмер буйы көтөргә риза. Тик ул иҫән-һау ғына булһын, ҡайҙа булһа ла имен йөрөһөн... Ул ерҙә йәшәгән өсөн генә был донъя ҡәҙерле бит миңә, ҡәйнеш!.. Әй-й...

Ул шулай оҙон итеп әсенеп һуҙҙы ла, тыны өҙөлгәндәй, бер аҙ тынып торҙо. Унан Закирға тағы ла яҡтыраҡ йылмайып ҡараны:

— Ҡәйнеш, был изге сәләмең өсөн һиңә ниндәй генә рәхмәттәр әйтһәм дә аҙ булыр. Ҡыуанысымдын, ҙурлығын тел менән әйтеп бирерлек һүҙ таба алмайым. Әгәр бер хоҙайым тел аҫҡысы биреп, буҙ турғай булып һайрай алһам, бәлки, йөрәгемдә янғанды әҙ генә булһа ла аңлата алыр инем һин.ә... Бына шулай инде... Тик шуны ғына әйтә алам: ағайынды күрһәң, әйт, үҙен һаҡлаһын. Берҙән-бер балаһы — Байрасы есөн иҫән ҡайтырға тырышһын. Минә ҡалһа... ул белә инде... Минең онотоорға ла, кетмәҫкә лә хәлемдән килмәй...

Закир еңгәһенен. тағы ла йәшәреп, алһыуланып киткән йомро, һылыу йөҙөнә, сикһеҙ мөхәббәт нуры бәркөлгән шоморт ҡара күҙҙәренә һоҡланып, хатта бер аҙ көнләшеп ҡараны Был яҡшы күңелле, көслө рухлы ҡатынды бала шикелле ҡосаҡлап, күкрәгенә ҡыҫаһы, сәстәренән һыйпап иркәләгеһе, һис юғында ниндәй ҙә булһа бик яғымлы, йылы һүҙ әйтеп йыуаткыһы килде. Ләкин бая бында килеп ингәне бирле үҙенең башынан сыҡмаған бер уйҙы ҡысҡырып әйтеүҙән башҡа һүҙ таба алманы:

— Их, әгәр мине шулай өҙөлөп яратыусы, көтөүсе булһа, енгә...

Өммөгелсөм, сикһеҙ ғәжәпһенеп, ҡәйнешенә төбәлде: «Көләме әллә был минән? Мыҫҡыл итмәк буламы әллә? Юҡ. Уның сырайы бошонҡо бит! Яңғыҙлығынан ысын зарланалыр, бәлки?!» Ул ҡыйыуланып, Закмрҙың янына уҡ барып баҫты:

— Ҡуйсы, улай тимәсе, ҡәйнеш. һине лә һөйөп, һинең өсөн янып-кейөп йөрөүселәр барын мин дә беләм бит әле.. Ә мин белмәгәндәре ни хәтлелер... Тик һин үҙең генә күрмәйһең дә белмәйһең бит уларҙы...

— Бармы, еңгә?!

Өммегөлсөм, ҡалала йөрөп үтә батыр, матур булып үҫкән ҡәйнеше менән шулай күҙгә-күҙ ҡарашып, асыҡтан-асыҡ тәү тапҡыр һөйләшә ине. Шулай ҙа быға уны осратҡанда оялыу, тартыныу, хатта бер тиклем ҡурҡыу тойғолары кисерә торған ғәҙәтен инде нисектер тойманы. Шуға, ахыры, әле Закирҙын. шаян йылмайып, «бармы, еңгә?» тип төбәп ҡарауынан һис тә ҡаушамай:

— Атаҡ, булмай ни,— тип яуап ҡайтарҙы.— Эй-й, ҡыҙҙарҙың бынамын тигәненен, башын әйләндерер сағың бит әле һинең, ҡәйнеш. Сиртеп ҡарап, өлгөрөп еткәнен, өҙөлөп тешөргә торғанын һайлап йөрөп алыр сағың,— тип мәрәкәләп тә ҡуйҙы.

Еңгәһенең шулай ҡыйыу, аҡыллы булып һөйләшергә тырышыуы Закирға ла оҡшаны, ул ихлас күңелдән кинәнеп көлдө.

— Ысынмы, еңгә? Әйт, ҡайҙа ул ҡыҙ? Мин уны нисек белмәйем?

— һеҙҙең күҙегеҙгә хәҙер һуғыш-ҡырылыштан башҡа нәмә күренәме ни?— тине Өммөғөлсөм, тағы ла ҡыйыулана төшөп.— һуғыш тигәс тә, ҡыҙҙар етеүҙән туктап тормай бит, ҡәйнеш!.. Мөхәббәт ҡошо ла йоҡлап ятмай...

— Уныһы дөреҫ. Йә, еңгә, ҡайҙа ул ҡыҙ? Кем ҡыҙы? Үҙең әйтмешләй, әйтә һал! Мин хәҙер үк күрергә теләйем! Аңлайһыңмы, еңгә, бөгөн үк!..

— Үәт, һиңә бик анһат!.. Улай «һукты ла күпте» генә булалыр шул.

— Була! Булһын! Вот шулай, еңгә!

Өммөгөлсөм, шаян йылмайып, урамға ымлап, керпек ҡаҡты.

— Ана, ҡара! Әмәлгә ҡаршы, хоҙай үҙен юлына сығарып баҫтырҙы...

Закир ҡабаланып тәҙрәгә боролдо. Унда ҡолонсаҡ шикелле шыма, йылғыр һынлы, һары сәсле һылыу бер ҡыҙ, зәңгәр күнәктәрен бәүелтә-бәүелтә, яй ғына үрге оска, йылғаға табан уҙып бара ине.

Алтын алҡаларын ҡояш нурына мансып, наҙланып үҫкән көнбағыш шикелле сағыу, һары томомло, нәфис аҡ йөҙлө был ҡыҙҙы Закир, әлбиттә, һалдаттан ҡайтҡаны бирле йыш күрә. Яулыҡ аҫтынан балҡып ҡалған асыҡ зәңгәр күҙҙәрен дә хәтерләй. Ләкин ҡыҙҙың. уға, утыҙға яҡынлап килгән егеткә, ниндәй ҙә булһа берәй етди тойғо менән ҡарау ихтималы унын башына ла инмәй ине. Ауыл ҡыҙҙарының һәр бер ситтән ҡайтҡан ҡара мыйыҡлы егеткә ғашиҡ булырға, шынғырлатып көлә-көлә, үҙенең был ғишҡы хаҡында әхирәттәренең ҡолағына быш-быш һөйләргә, ғишыҡ утында янған булып уфылдап көрһөнөргә яратыуҙарын белмәйме ни инде ул?! Был бит улар өсөн яҙ көнө, ала ҡар ваҡытында, кәртә башына менеп сыпаяҡ уйнатыу шикелле үк мәрәкә уйын гына... Ә мөхәббәт хаҡында етди уйлар сағы еткәндә, улар инде эллә ҡасан бала әсәһе булалар...

— Эйе, сцгә, беләм! һылыу ҡыҙ...— тине Закир, төшөнкеләнеп.— Тик бына ниңә ул бүтән ҡыҙҙарға оҡшатмай кейенергә тырыша? Аяҡта бейек үксәле, сәмсәле ситек, билендә сигелгән аҡ алъяпҡыс... Ал ебәк яулыҡ... Беҙҙә, енгә, ҡыҙҙар унын. йәшендә ялан баш йөрөй түгелме һун?

Өммөгөлсөм тыйнаҡ ҡына көлөп ҡуйҙы.

— Ғаббас мулла үҙенен. берҙән-бер һылыуын наҙан халыҡ ҡыҙҙары кеүек кейендереп йөрөтмәҫ инде...

— Бая ук шулай тиһәң, мин ҡарап күҙ талдырмаған булыр инем.

— Ниңә?

Закир ҡулдарын саяланып салбар кеҫәһенә тыҡты ла ҡыҙыу-ҡыҙыу иҙән буйлап йөрөп китте.

— Ғаббас мулланың ҡыҙы булып сыҡты ла баһа!

Унын. был яуабын Әммөгөлсөм бай ҡыҙын һоратырға баҙнат итмәү тип аңланы. Ҡалымға мал юҡ, тип...

— Ңиңә, ҡәйнеш, улай тиһең? Хәҙер бәльшәүниктәр буржуйҙарҙы ҡурҡытып бөткәс, Ғаббас мулла ла баҫылды бит ул. Элекке кеүек түгел... Әгәр һин алам тиһәң, ҡыҙын ҡуш ҡуллап бирер әле... Әгәр ҙә мәгәр ниәтен, булһа, балаҡты итек тышынан һалып алам да хәҙер үк яусы булып барам..,

Закир еңгәһенең был һүҙен әйтерһең ишетмәне лә. Ауыр уйланып иҙәнде арҡыры-буй тапауын дауам итте. Өммөгөлсөм хатта шикләнеп ҡуйҙы: «Әй хоҙайым, ярамағанды, артыкты бытылдап ташланыммы икән әллә?! Асыуландырҙым шикелле ҡәйнеште...» Шулай ҙа тиҙ генә кире сигенергә уйламаны. Тағы шул уйынсаҡ, теремек тауышы менән һүҙ башланы.

— Гөлйыһан беҙгә килеп йөрөй... Еңгә, ҡәйнешеңә димлә, унын өсөн үҙәгем өҙөлгәнен әйт, тип йәнемде алып бара..

Закир, ҡапыл туктап, еңгәһенең күҙҙәренә төбәп ҡараны

— Бушты һөйләйһең бит, еңгә?!

— Тәүбә — әстәғәфирулла, ниңә бушты һөйләп торайым!— тине Өммөгөлсөм, аптырауҙан бигерәк асыуланып китеп.— Килешмәгәнде ни, ҡылығымда булмағанды ни.. Икмәктер, тоҙҙор, валлаһи-биллаһи, дөрөҫтв әйтәм!

Закир, ниндәйҙер өмөтһөҙ саялыҡ менән ҡул һелтәп

— Бөттө, һүҙенде әрәм итмә, ецгә. Миңә Ғаббас мулланың ҡыҙы кәрәкмәй!— тип өҙөп әйтте лә атылып өйҙән сығып ук китте.

Өммөгөлсөм, был көтөлмәгән һөйләшеүгә, бигерәк тә унын көтөлмәгәнсә өҙөлөүенә тамам аптырап, бер аҙ иҫәңгерәп торғандан һуң, йүгереп тәҙрә янына барҙы. «Әллә ҡыҙ артынан йүгерҙеме шаян?!»

Закир бер ерҙә лә күренмәй ине. Ул ауыр итеп көрһөнөп ҡуйҙы:

«Рөлйыһан, бахыр, ҡыҙ бала, уны, зимагорҙы, үлеп яратҡан була тағы!.. Ярата шул. Бер күрергә йән ата, бахыр.. Ә был?! Эй-й, ирҙәр, йәнһеҙҙәр, яратҡандың ҡәҙерен беләме ни улар?»

Хаммат, Оло Эйек кисеүен сыҡкас, унға, туғай эсенән уҙған берләм юлға, боролоп инеп китте.

«Ниңә ул яҡҡа? Алда Яҡуп яуылы... Унда аҡтар...— тип хафаланып уйланды Байрас.— Был атайым нимә эшләй?!» Ләкин был уйын ҡысҡырып әйтергә, төнгө тынлыҡты боҙоп тауыш сығарырға баҙнат итмәне Хатта аттар ҙа, ҡурҡыныс барын тойғандай, һаҡ ҡына башҡырынып, тос тояҡтарын йомшаҡ баҫырға тырышып барған һымаҡ бит! Ә Хаммат был ваҡытта үҙен суҡмар тотоп бүре ҡыуған һунарсы кеүек тоя ине. Ҡалай итеп аҡтарҙың һиҙгерлеген томалау, ҡулға нисек мылтыҡ эләктереү уйы биләп алғайны уны. Күнелгә береһенән-береһе ҡыйыуыраҡ пландар килә, ҡыҫҡа ваҡытлы киҫкен алыштың төрлө күренештәре күҙ алдынан үтә. Иң мөһиме — ниндәй генә хәлдә лә ул үҙе енеүсе булып сыға ине. Алдына алған эштең барып сығыуына шикләнеү-икеләнеү, ҮҘ көсөнә ышанмау ҡылығы ят ине уға. Бәлки, унын йәштән

үк «Батыр Хаммат» булып танылыуының төп сәбәбе лә ошондалыр? Икеләнмәй, ышанып тотоноуҙалыр, бәлки, уңыштын. башы?!

Атаһынын, тыныслығы, ҡыйыулығы ахыр Байрасҡа ла күсте. Ул да бара-бара үҙен батыр командир артынан дошманға ҡаршы атакаға ташланған һалдат кеүек ҡыйыу тоя башланы. Хатта, ғорурланып, башын юғары күтәрә биреп ҡуйҙы. Нисек шулай булмаһын, атаһы бит уны хәтәр юлға юлдаш итеп алған! Былай булғас, Байрас та ир етте. Ул да, ҡулына мылтыҡ тотоп, революцияны һаҡларға әҙер! Тик быңа атаһы уны ысынлап та үҙе менән бергә алып китерме икән? Әллә, әҙерәк кенә оҙатҡас та, ҡайтарып ебәрерме икән? Ҡайтырға ҡушһа, нисек итер икән Байрас?!

Әлбиттә, был тынғыһыҙ һорауҙарын Байрас хәҙер үк атаһына әйтергә, үҙенең дә революция һалдаты булғыһы килеүен тағы бер ҡат белдерергә теләй. Ләкин атаһы бит бая унын. был һүҙенә бер ни тип тә яуап ҡайтарманы, хәҙер өнһөҙһүҙһеҙ барырға бойорған. Ә һалдат булаһы кеше бойороҡто тәүәл үтәргә тейеш. Байрастың атаһына әйтер һүҙәре бынан башҡа ла бик күп. Ул бит бөгөн иртәнсәк, Бәйембәт буйында ат эҙләп йөрөгән саҡта, теге большевик Никитанын улын, дуҫы Алешканы осратты. Ул да, елкәһенә йүгән аҫып, алан-йолан ҡаранып, Яҡуп ауылы яғынан килә ине. Байрасты күргәс тә, ул йәһәт кенә уның ҡулынан эләктереп алды ла тал араһына тартып алып инде. Ҡабаланып:

— һинен атайың өйҙә ятамы?— тип һораны.— Өйҙә ятһа, бар, йүгер. Тиҙерәк ҡайтып әйт: волоста аҡтар! Унда мәхшәр. Аталар, киҫәләр... Беҙҙекеләр башҡарма йортона аҡтарҙы яҡын ебәрмәй «максимка»нан атып яталар...— тип ҡабаланып теҙеп китте.— Беләһеңме, Байраска, бөтә йыуан ҡорһаҡтар унда. Ҡыуанышып, сабышып йөрөйҙәр. һеҙҙең ауылдан Ғаббас мулланың улы ла, урядник Алексейҙын. улы ла шунда, беҙҙен. Ивановка тирмәнсеһе Мартышкин да улы менән... Тағы әллә кемдәр һөрәнләй-ҡысҡыра урам тулып сабышып йөрөйҙәр. Ысынды әйтәм... Атайымдар, Каширин отрядына ҡушылып, юҡҡа ғына Урал аръяғына китеп барҙылар. Вот хәҙер бынауҙарҙын, өҫтөнә ябырылырға ине. Мин ҡараным, аҡтар ул хәтле күп тә түгел... Их! Пытыр-пытыр һиптерергә ине максимканан! Эйе бит, Байраска?!

Алешка шулай ажарланып китеп, пулемет булып бытырлай ғына башлағайны, кемдер тал араһынан:

— Стой!— тип асыулы ҡысҡырып ебәрҙе. Малайҙар ендәре быуылып ҡатып ҡалдылар. Ул арала булмай, ҡуйы таллыҡтан мылтыҡ тоҫҡап бер һалдат сыҡты.— Ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ!— тип бойорҙо.— һеҙ ҡайҙан? Нимә эшләп йөрөйһөгөҙ бында?



— Беҙ ҡайҙан?.. Ни эшләп йөрөйбөҙ? Ха-ха-ха!— Алешка сағыу тауыш менән ҡысҡырып келеп ебәрҙе.— Күрмәйһенме ни? Беҙ — малайҙар, ат эҙләп йерөйбөҙ. Был малай Илсеғол ауылынан, Собхан старшина малайы.

һалдат ауыҙын ҡыйшайтып мыҫҡыллап йылмайҙы.

— Оҡшаған, бик оҡшаған старшина улына!

— Улы түгел — малайы, батрагы,— тип аңлатты Алешка.

— Ә һин!— тип тағы ла мыҫҡыллыраҡ көлдө һалдат.— һин ниндәй бай улы?

— Бынауы күпер аръяғында яткан Мраковка ауылынан мин,— тип тағы ла күңеллерәк һәм ҡыйыуыраҡ тәтелдәне Алешка.— Унда Сергей Хитров тигән бик шәп бай бар. Мин уның ат ҡараусыһы, вот, белдеңме? Беҙ икебеҙ ҙә аттарҙы Бәйембәт буйына, туғайға илтеп ҡуйҙыҡ. Аңланыңмы?

— Нинә һин генә бытылдайһын? Был ҡара малай телһеҙме ни?—тнп Байрасҡа асыулы төбәлде хәҙер һалдат.— Унын. ауыҙын шаҡарып, телен еҙөп алырға кәрәк!— тип екерҙе. Унан тоҡ-томалға малайҙын. яңағына тондорҙо.— Быиа шулай!— Байрастың күҙ рлдында ут сәсрәне. Ләкин ул өндәшмәне. Башы әйләнеп китте — йығылманы. Алешка түҙемһеҙләнеп араға төштө.

— Ағай, һалдат ағай, тукта, ул бит башҡорт малайы. Русса һөйләшә белмәй. Бер ни ҙә аңламай... Ағай, һин беҙгә күперҙән сығып, ҡайтып китергә рөхсәт ит, зинһар. Юҡһа беҙҙе оҙаҡ йөрөгән өсөн байҙар орошор...

һалдат, ҡара малайға ҡағылғанға ерәнгән һымаҡ, осло йоҡа устарын сабырһыҙ һелкә-һелкә, күпергә табан атланы.

— Теле һөйләй белмәһә лә, күҙе бөтәһен әйтеп тора ҡырағайҙың!.. Нисек күрә алмай ул беҙҙе!.. У-у... быуып ҡына үлтерергә лә бүрегә ташларға ине көсөктө!..

— Ағай, беҙгә күперҙән уҙырға рөхсәтме?— тип ендәште тағы Алешка.— Беҙгә ҡай...

— Йә, үтегеҙ, үтегеҙ! Йәһәтерәк күҙҙән юғалығыҙ! — тине һалдат, һаман сырайын һытып.— У-у-у... ҡырағайҙар!..

Алешка менән Байрас тос ялан аяҡтары менән күперҙән тыпырлап йүгереп уҙҙылар. һалдат малайҙар ауылға инеп күҙҙән юғалғансы үңәсен һуҙып ҡарап ҡалды. Ул ҡаҙыҡ кеүек тәҙ, нәҙек ботло, нәфис ҡуллы, ҡыҙҙар шикелле алһыу йөҙлө йәш егет ине.

— Ошо тирәләге берәй бай малайылыр,— тине Байрас.— Күренеп тора, дары еҫен еҫкәмәгән...— тип, атаһынан йыш ишеткән бер фекерҙе өҫтәп ҡуйҙы.— Ҡоралһыҙ малайҙар алдында әтәсләнеү өсөн кес кәрәкме ни? Эйе, бит, Алешка?!

Алешка иплән кенә уның еңенә тотондо.

— Байраска, мине атайымдың дуҫы, фронтовик бер ағай

ебәргәйне... Волостағы хәлдәрҙе белеп ҡайт, тигәйне... Хәҙер мин Ивановкаға сабам, һин Илсеғолға йүгер. Хәлде һөйләйек. Аңланыңмы?

— Аңланым.

— Аңлаһан, шул. һинең менән миңә лә ҡоралға тотонорға ваҡыт. Беләһең бит, бала түгелбеҙ. Аллаға шөкөр, икебеҙҙең йәште бергә ҡушһаң, егерме биш була. Ә ул йәш кешенек иң көслө сагы, тиҙәр. Белдеңме?

— Шәп бер һалдат булыр инек,— тине Байрас.— Анауы ебсгән һалдат кеүек түгел, эйе бит?

— Дөрөҫ, беҙ унын кеүек малайҙар туҡмап йөрөмәбеҙ. Мә биште!

Алеша Мраковка аша Ивановкаға шылды, ә Байрас Оло Эйек буйлап үҫкән ҡуйы таллыҡҡа сумды... Унан тап ошо, атаһы менән икәү барған берләм юл буйлап, йән-фарман Илсеғолға ҡарай йүгерҙе...

Ошоларҙың бөтәһе хаҡында атаһына бәйнә-бәйнә һөйләп биргеһе килде хәҙер Байрастың. һөйләгеһе, Алешл менән икеһе бер һалдатҡа торош итеп кенә булһа ла, революция дошмандарына ҡаршы һуғышырға теләүҙәрен белдергеһе, атай кешегә еткән улын аҡтар килгән яҡта ҡалдырып китеүҙен. килешмәүен төшөндөргөһө килде.

Тукта әле, был ни ғәжәп, алдан һөйләшеп аңлашып ҡуйған һымаҡ, унын, атаһы тап бая, иртәнсәк, Байрастар аҡ һалдат менән осрашҡан төбәккә килде лә туктаны ла баһа!.. Эйе-эйе, ана тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалып ниҙер тыңлай... Өҙәңгегә баҫып, үрелеп күпер яғына ҡарай... Бына, бесәй шикелле, еңел генә һикереп аттан төштө, теҙгенен Байрасҡа тотторҙо.

— һин, улым, төшмә. Ошонда тор... Ҡуҙғалаһы, өндәшәһе булма, ишеттеңме, улым?.. Атыу-шартлау тауышы ишетһән, дә ҡурҡма... Мин оҙаҡламай әйләнеп килермен...— тип бышылданы.

Байрас, күҙҙәрен кәпеслә тә биреп, һаман бер һүҙ ҙә өндәшә алмай ҡатып тик торҙо. Ошо ваҡыт унын, хәтеренә, ниңәлер, атаһынын, уны санала көтөргә ҡалдырып, Ташһарайҙан һатыбал отрядынын ҡоралын баҫып алырға китеүе килеп төштө. Унда ла, тап ошолай, Байрастың тәнен һалкын боҙ тамсылары сәнскеләй, ҡыҫа башлағайны. Унда ла атаһына, йә тигәнде белдереп, көскә-көскә баш ҡына ҡаға алғайны Бер һүҙ өндәшә алмай теле көрмәлеп ҡалғайны... Унда бит әле Байрас яңғыҙ түгел ине... Санала Хәлим ағай менән икәү ине улар... Ә хәҙер япа-яңғыҙ... Ух, ҡалай ҡурҡыныс! Байрастың бөтә тәне боҙло һыуға сумған кеүек ҡалтырай... һәр бер секунд йыл һымаҡ оҙаҡ үтә. Әммә ул ҡуҙғалмай, тын да сығармай көтә.

«Бер ҙә ҡурҡмай торған кешеләр буламы икән? Атайым



бер ҙә ҡурҡмайҙыр?! Әллә дошманды һис шикһеҙ ецергә тигән уй унын ҡурҡыуын баҫамы икән? Юҡ, атайым ҡурка белмәйҙер ул. Их, мин дә шулай батыр булһам ине...»

Байрас шундай ярһыулы һәм хәүефле уйҙарға бирелеп, күрәһең, атаһынын. китеп юғалыуын да тоймай ҡалды. һиҫкәнеп китеп тирә-яҡҡа күҙ һалды. Айһыҙ томороҡ ергә таң алды ҡараңғыһы яткан. Яҡын-тирәлә бөтә ағастарҙан бейек булып ҡапырайып ултырған ҡарт тирәктән башҡа бер нәмәне лә абайлап булмай. Тик яҡында, ҡуйы таллыҡта, йоҡоһоҙ ҡоштар ғына сутылдаша, тарбаҡ имән ҡыуышында супай ынғыраша. Аҡлан ерҙәге сабылған бесән араһынан бүҙәнә, тартай тауыштары килә. Меһәбәт ер наҙлы тан, менән ҡауышыу сәғәтен көтә... Иҫ киткес гүзәл, моңһоу, серле тан. килә...

Таш йөрәктәрҙе лә иретерлек тан. симфонияһы тирбәлгән ошо гүзәллек эсендә ниндәйҙер һуғыш, тартыш, үлтереш хаҡында уйлау һис тә күнелгә ятмай, хатта кеше тигән бөйөк йән эйәһенә бындай эштәр һис тә хас түгел һымаҡ...

Байрас, малайға хас булмаған был нескә уйҙарҙы ҡыуырға теләп, башын ҡаты һелкеп алды: «Тукта, атайым ҡайһы яҡҡа китте һуң әле? Ниңә унан бер тауыш-тын да ишетелмәй? Башҡа ваҡытта елһеҙгә лә елпелдәшә торған тирәк япраҡтарына хәтле шымып ҡалған бит әле был төндә... Эйе, шылт иткән тауыш та юҡ... Хатта турғайҙар ҙа талдан талға һикереп, сырылдашмай, һығылма ботаҡтар ҙа тын ғына тирбәлеп йоҡлай һымаҡ була башланы... Tереме икән атайым! Бәлки, ул дошман ҡулына эләккәндер?! Бәлки, уға ярҙам кәрәктер?!»

Байрас, аҡтыҡ сабырлығын юғалтып, аттан һикереп төштө. Әмәлгә ҡаршы, тап шул саҡта бик-бик яҡында ғына ҡолаҡ ярғыс шартлау янғыраны. Малай ҡапыл ҡурҡыуҙан хатта ҡолап китте. Бер аҙға хәтле тора алмай тарбаңлап ятты. Ә теле тауыш-тынһыҙ ғына:

— Атай, атай, атай!— тип ҡабатланы.

Шул саҡ бер үҙенә ике мылтыҡ күтәреп, киткәндәге кеүек үк өнһөҙ-һүҙһеҙ, Хаммат килеп сыҡты.

— Улым!

Байрасҡа йән инде. Уҡ кеүек атылып һикереп торҙо.

— Ә, нимә тиһең, атай?!

— Атыңа атлан, улым! Юл унды... Ҡорал булды...

Байрасҡа атаһынын. тауышында әҙ генә ҡалтыраыыу, ашығыу өндәре ишетелгәндәй булды. Уңыш еңел килмәй шул. Дөрөҫ план барып сыҡты, юл унды. Күперҙә ҡарауыл алмашынған саҡ ине. Закир биргән бер граната ике һалдатты юҡ итте. Әммә разводящий ҡасып өлгөрҙө. Биш саҡрым ара нимә? Ул хәҙер Яҡуп ауылына барып етер, ғауға күтәрер...

Етмоһә, эргәлә малай бар. Ашығырға, борсолорға тура к-илә шул. Хаммат мылтыҡтың береһен йәшереп сыҡты.

— Күрәһеңме, анауы тирәк төбөнә күмдем. Закир ағайың аҡтарға ҡаршы ҡабат көрәшкә тотонорға булһа, әйтерһең. Шул мылтыҡты алыр,—• тине. Унан икенсе мылтыҡты үҙенен, иңенә тағып алды ла тейен етеҙлеге менән һикереп атҡа менде.— Йә, остоҡ!

«Мин дә, атай, һинең менән... Миңә лә мылтыҡ бир»,— тип әйтергә теләне Байрас. Ләкин ул арала атаһы атын елдереп туғай эсенә инеп тә юғалды.

— Саптыҡ, улым.

Байрасҡа тағы өнһөҙ-һүҙһеҙ атаһы артынан эйәрергә генә ҡалды. Улар шулай Оло Эйек кисеүенә хәтле сабышып килделәр. Яр ситенә, ҡырсынға төшкәс, Хаммат шып туҡтап тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалып торҙо. Унан ғәжәп тыныс һәм хатта шаян тауыш менән:

— Байрас, ишетәһеңме, аталар,— тип ҡуйҙы.— Ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығылды. һиңә тиҙерәк ҡайтырға, миңә шылырға кәрәк. Йә, хәҙергә хуш. Ҡолағың ишетһен, әсәйеңдә һиңә ышанып тапшырам, һаҡла!— тип өҫтәне. Унан, Байрас ни әйтергә, ни уйларға ла өлгөрмәне, атына шарт һуғып, сабып сығып та китте.

«Әсәйеңде һаҡла?! Әсәйеңде һинә ышанып тапшырам!.. Тукта әле, был ҡалай килеп сыҡты һуң әле!.. Былай булғас, мин революция өсөн көрәшмәҫкә тейеш буламмы икән ни? Алешка бит әйткәйне... Беҙ бәләкәс түгел, тигәйне... Ә атайым?.. Әсәйем...»

Ләкин Байрасҡа хәҙер үҙенең әсенеүле был һорауын бирергә лә, уға яуап көтөргә лә урын ҡалманы. Ул, иламаҫ өсөн, яңаҡтары ауыртҡансы тешләнеп, кисеүҙе сыҡты, үрге туғайға алып барып атын тышаны, унан арт ҡапҡанан ғына өйгә ҡайтып керҙе.

Әсәһе ишекте япмай, түшәккә ятмай көтә ине уны.

— Байрас, ҡолонсағым, ниңә былай оҙаҡ йөрөнөң? Ҡайҙа булдың? Мин бит һине кетә-көтә хәлдән тайҙым!..

Бөгөнгө төндөң ғәҙәттән тыш кисерештәре, ҡатмарлы уйҙары баҫымында етди һәм үтә баҫалҡы кеше булып елгөргән Байрас ирҙәрсә сабыр, ауыр атлап түргә уҙды. Бошонҡо тауыш менән:

— Әсәй, һин һорашма. Мин әйтмәйем. Дөрөҫәрәге, әйтә алмайым,— тине.— Минең төндә ейҙә булмағанды ла һинән башҡа бер кем дә белергә тейеш түгел.

— Ярар, ҡолонсағым, ярар,— тип килеште Өммегөлсөм.— Берәй нәмә ашайһыңмы? Ҡатыҡ менән икмәк бирәйемме?



— Бер ни ҙә кәрәкмәй. Шәм яндырма. Мин арығанмын. һин дә мине көтөп арының. Йоҡлайыҡ.

Ул, ысынлап та, хәҙер, ейгә ҡайтҡас, үҙенең бик ҡаты йонсоғанын тойҙо. һәм урынға ятыу менән, һаташа-баҫлыға,» ҡаты йоҡоға ла сумды. Өммегөлсөм, вмөтле-өмөтһөҙ уйҙарға батып, керпек ҡаҡмай төн уҙғарҙы.

«Таң да һыҙыла. Тағы алланың бирмеш көнө килә. Хәйере менән генә килһен, илгә — именлек, әҙәмгә еңеллек килһен ине был көндә...» тигән изге теләк менән таңдың алһыу нурҙарын ҡаршыланы. Әммә оҙаҡ та тормай алыҫтан, ер аҫтынан килгән һымаҡ булып гөрһөлдәү ишетелде, атыш тауыштары яңғыраны. һуғыш-ҡан ҡойош фажиғәләрен күҙ алдына килтереп, унын йөрәге ҡыҫылып китте. Күңеле шикшөбһә менән тулды:

«Эй аллам, Хамматымды ғына һаҡла, Хамматымды...— тип ыңғырашып ҡуйҙы ул. Янынан ҡарашын ғәмһеҙ йоҡлап ятҡан улына күсереп:— Байрасымдың атаһын...»— тип өҫтәне. Ә атыш тауышы тулҡын ҡаҡҡан һымаҡ бер яҡынайып, бер алыҫлашып һаман дауам итте. Күрәһең, ҡайҙалыр ваҡ отрядтар йәки айырым кешеләр араһында һуғыш бара ине.

## VI

Еңгәһе янынан сыҡҡас, Закир, ишкәксеһен юғалтҡан кәмә шикелле, ҡайҙа барып төртөлөр ер тапмай, урамда арыбире һуғылып йөрәй бирҙе лә, ҡапыл боролоп, Оло Эйек буйына китеп барҙы. Ҡараһыу йәшкелт төҫкә инеп уймаҡланып ятҡан тымыҡ урында талғын ғына йөҙөп йөрөгән суртандарға ҡарап, ҡыҙыл яр башында баҫып торҙо. һауа хәҙер иртәнсәккенән дә томраҡ ине.

«Хисбулла ағайыма бесән эшләү өсөн һәйбәт тә бит... Ә миңә? Бесән эшләйһе лә булмаған кешегә нисек?! Әллә һыуға сумып алаһымы икән?!»

— Закир ағай, һаумы?

Ул, һиҫкәнеп, артына боролдо. Үҙенең. янына уҡ килеп баҫҡан Гөлйыһанды күреп, хатта әҙ генә ҡаушап ҡалды.

— Ә, был һин икән дә, һылыу... Нимә эшләп йөрөп ятыш?— тип төптө урынһыҙ һорау биреп ташланы.

— Мин шул... Күрәһен. бит, һыуға килгәнмен...

Гөлйыһан, ап-аҡ ҡулдарын кейәнтә өҫтөнә һалып, күнәктәрен бәүелтә-бәүелтә уға иркә көлөп ҡараны:

— Беҙҙә бәгзе бер ҡыҙҙар шулай... һыу ташырға ярата-ла р ул, Закир ағай...

«Ҡайһы бер түгел — бәгзе бер, имеш! Ҡара һин уны! Мулла ҡыҙы икәнлеген һүҙе менән үк белдереп тора!..»— тип, екһенеп уйлап алды Закир.

— Унан тағы нимә яраталар, һылыу?

— Тағымы?— Гөлйыһандың былай ҙа алһыуланып торған бит остары eлəк кеүек бешеп китте.— Тағы ни, бына, Закир ағай, һинең кеүек матур егеттəрҙе яраталар...— тип әйтеп һалды ла шыңғыратып көлə-көлə ярҙан түбəн йүгерҙе. Юл ынғайы, дегəнəк төпһəһенə сөрсөнөп күнəктəрен көйəнтəнəн ысҡындырып ебəрҙе... Күнəктəр ҙə уның менəн бергə ҡыуанғандай, күңелле шалтырап, тəкмəслəй-тəкмəслəй түбəн тəгəрлəнелəр. Гөлйыһан уларҙы яр аҫтына төшкəс ке^э ҡыуып етте. БыҒаса бер нəмə ҡаршыһында ла аптырап-алйЬт ҡалыуҙы белмəгəн дыуамал Закир, быуындары йомшарып киткəн һымаҡ булып, яр ситенə ултырҙы, күлдəк яғаһын ысҡындырҙы.

— Фу, шайтан алғыры!.. Ҡалай томра һуң əле бөгөн!..

Ҡыҙ, бер баҫаһы урынға биш баҫып, яр ситендə йүгереп йөрөнө. Мөлдөрəмə тултырып, күнəктəренə һыу алды. Сулпыларын сылтырата-сылтырата, йылғаға эйелеп, ҡулын-битен йыуҙы. Унан, егет яғына шаяра-көлə ҡарай-ҡарай, əкрен генə ярға күтəрелə башланы.

«Əйлəнеп ҡарар... Берəй йылы һүҙ өндəшер...»— тип көттө. Лəкин Закир əйлəнеп ҡараманы. Йылға өҫтөнə теклəп тик ултырып ҡалды. Гөлйыһандың эсе ут янды. «Əй аллам, ннңə һин ҡатын-ҡыҙҙы шулай кəм итеп яраттың икəн?.. Етмешкə етеп, теше төшөп бөткəн ҡарттар ҙа, эшкинмəгəн генə егеттəр ҙə телəгəп бер ҡыҙға яусы ебəрə ала. Ə ҡыҙ меҫкен... Сəскə кеүек көйөнə, берəй итек башындай егеттең һоратыуын көтөп, үҙе һайлағанды əйтергə ҡурҡып ғүмер итə. Йə, шулмы ғəҙеллек?!»— тип, əсенеп уйлана-уйлана, ҡайтып китте. Закирҙың уйҙары ла еңелдəн түгел ине. Был минутта ул, бəлки ғүмерендə тəү тапҡырҙыр, зимагорлыҡта уҙған ғүмере өсөн ысын күңелдəн үкенде. Етмəһə, шул саҡ, үс иткəндəй, йəшлектə эшлəгəн бер мутлығы хəтеренə килеп был үкенесте түҙеп торғоһоҙ əсенеүгə əйлəндерҙе. Əллə ҡасан булған хəл дə бит. Онотолоп бөткəн тип əйтерлек... Иҫкə төшкəндə лə хəҙерге кеүек выждан ғазабы менəн түгел, ə мəрəкə итеп: «Йə, юҡҡа иҫең китмəһен. Сусҡанан да бер ҡыл тиҙəр бит, пожалуйста. Уларға ла гел һыйланып ҡына йөрөргə түгел. һыйлап та ҡарау яҡшы,— тип көлөп кенə ҡуя торғайны.— Ə хəҙер?!. Ниңə һуң əле былай үкендерə?..»

Закир, ваҡытһыҙ хəтергə килгəн был бəйлəнсек уйҙан ҡотолорға телəп, иғтибарын тартырҙай нөктə эҙлəп ҡараны. Бына бер көтөү аҡ ҡаҙҙар, аушаң-тыушаң баҫып, ҡаңғылдаша-ҡаңғылдаша килделəр ҙə йылғаның ин, тəрəн еренəн ҡукырайышып талғын ғына йөҙөп киттелəр. Ана, ҙур эсле, йомро башлы бер көтөү малай түбəнге ҡырсында сыр-сыу килеп һыу инə... Кемдендер бер һылыу ҡыҙы, тубығынан ала һыу кисеп, йылғаның иң ағын ерендə кер сайҡай... Ə теге



ваҡиға Заклрҙың хəтеренəн китмəй ҙə китмəй. Улай ғына ла түгел, бөтə ваҡ-төйəге менəн һаман асығыраҡ күҙ алдына килеп баҫа бара. Дөрөҫөн əйткəндə, ваҡиға ла түгел инде ул, Иҫəр бер мутлыҡ шунда... Беренсе донъя һуғышының икенсе көҙөндə ине шикелле... Закир ул йылдарҙа Ырымбурҙа, он заводында, йөк ташыусы булып эшлəй ине. Унын, ҡалала йəшəү, китаптарға яҡын тороу, һис юғында китап лавкаһында һатыусы булыу тураһындағы татлы хыялы күптəн селпəрəмə килгəйне. Хəҙер ул ошо эште табыуы өсөн дə ҡəнəғəт ине. Аҙаҡ был эштəн дə оҙаҡламай уға ҡолаҡ ҡағырға тура килде. Он заводы хужаһы, һуғыш ауырлыҡтарына һылтанып, күптəрҙе эштəн сығарҙы. Ҡыҫҡартыуға Закир ҙа элəкте. Шунан һуң ул бик оҙаҡ эшһеҙ йөрөнө. һəр көн иртəнəн кискə тиклем эш эҙлəп ҡала урамын тапаны. һуцгы аҙыала хатта баҙ ҡаҙыу, утын ҡырҡыу кеүек ваҡытлы эштəр ҙə табылмай башланы. Ə тамаҡ — ҡунаҡ түгел. Ашарга таптыра. Лəкин ул нисек кенə тырышмаһын, эш эҙлəү тағы ла нығыраҡ арыу, асығыу менəн генə тамамланып тора.

Шундай үтə йонсоу көндəрҙəц береһендə уға повестка тапшырҙылар. «Мəрхəмəтле» батша хəҙрəттəре уны ла «шəфҡəтле» ил-əсəне һаҡларға саҡыра. Иртəгə иртүк, бер мнутҡа ла һуңламай, ул призыв пунктында булырға тейеш.

«Aha, минен. эшһеҙ ыҙа сиккəнде күргəн-белгəн кеше юҡ ине... һалдатҡа алынып саҡ етеүен, баҡтиһəн, бик теүəл иҫəплəп торалар икəн дə ба.ha был əфəнделəр?— тип көлдө генə Закир, һис тə бошонманы. Киреһеисə, тыугапы бирле ҡуйыр урын тапмаған тынғыһыҙ башына «ышаныслы» урын табылғанға хатта ҡыуаиды. «Исмаһам, ашау — байҙаи, үлем — хоҙайҙан булыр...»

Закирҙың ҡарамағында бетөн бер тəүлек ваҡыт бар ине əле. Ул «иректе» иҫтə ҡалырлыҡ һəйбəт уҙғарыу хаҡында егет, əлбиттə, уйлай ҙа алмай. Шулай ҙа: «һис югы туйғансы бер ашарға ине бит əле... һай, эсең көйгөрө, ҡалай итергə икəн?!»— тигəн маҙаһыҙ уй унын, мейеһен быраулап кына торҙо. Шунан ул, заводта эшлəгəн саҡта, берəй ваҡыт ауылға ҡайтып, ҡыҙҙарҙын. йөрəген яндырып кейеп йөрөү ниəте менəн алып ҡуйған арыу кейемдəрен кейенеп, хатта ниндəйҙер кəкре таяҡ тотоп, байҙарҙың үҙҙəренə оҡшатмағанда ла, һис юғы, приказчиктарына оҡшатырға тырышып, бормас баҫып, урамға сығып китте. «Бəлки, берəй ауылдашты осратырмын. Əсəйемə сəлəм əйтеп ебəрермен... Бəлки, йомарты тура килһə, һалдатҡа китəһе кешене һыйлап та ҡуйыр,— тип өмөтлəнеп баҙар ягына йүнəлде.— Беҙҙен, яҡташтар, ҡалаға кнлһə, ҡарбуз-ҡауын ашар өсөн ин, элек «Йəшел баҙар»ға йəки алам-һалам һатып алырға тип толчок баҙарына бара торған...»— тигəн уй уны ицəлек «Йəшел баҙар»ға алып

барҙы. Унан һуң толчокка китте. Беләктәренә төрлө сепрәк-сапраҡ элеп, дебет шәл, аҡ шәл тотоп, быткашып йөрөгән йыуан ботло, майлы битле бисәләр, иҫке итек-ситек, төпһөҙ салбар, һыңар еңе өҙөлгән тиртун йәки сабата тоткан ас яңаҡлы, юлбаҫар ҡарашлы иҫерек ирҙәр менән тулы толчокты этешә-төртөшә бер-ике әйләнеп сыкты. Тик бер генә таныш йөҙ ҙә осратманы. Аслыктан һығылып торған быуындар менән бормас баҫып, ғәмһеҙ, бай булып кыланып йөрөргә лә ҡыйын була башланы. Ахыр ул: «Йә, бығаса астан үлмәгәнде, бер тәүлеккә ҡалғас, ни булыр тиһең?.. Ҡайтырға ла иртәнгә хәтле йоҡларға»,— тигән ҡарарға килде. Был мәлдә ул элек үҙе менән он заводында бергә эшләгән рус грузчигында фатирҙа тора ине.

— Фатир хаҡы ла һорамайым. Әйҙә, эш тапҡансы йәшә,— тигәйне уға дуҫы. «Кеше хәлен кеше белмәй, үҙ башына төшмәһә...»— тип йырлайҙар бит йырҙа ла. Ә уның рус дуҫы үҙе лә йыш ҡына эшһеҙлекте татыған кеше ине.

Ул шулай, ауылдаштарын осратыуҙан тамам өмөт өҙөп, инде тирә-яҡҡа ҡарамай, эҙләнмәй, башын хәлһеҙ эйеп, толчоктың иң батҡаҡ урамдарының береһенән китеп барған саҡта, яҡында ғына:

— Ҡара әле, кем мулла, бынауы тар балаҡты!.. Таиба әбейҙең теге зимагорына оҡшаған түгелме һуң?— тигән тауыш ишетеп ҡалды.

— Ах, хәсис, тап үҙе, шул үҙе лә баһа был!

Закир үҙ дәрәжәһен аңлаған тыныс ҡиәфәт менән ҡабаланмай ғына тауыш килгән яҡҡа бороддо. Толчок янындағ.ы әүеш-мәүеш тәҙрәле, тубыктан батҡаҡ эсенә һеңешеп ултырған кеше төшөрөү йорто алдында Кәзә Мәзин менән Ғаббас мулла уға бик нык ҡыҙыкһынып ҡарап тора ине.

«Әһә, килгәндәр икән...»—тип уйлап алды Закир. Бер туя ашау мөмкинлеген тойоп, ирендәрен ялап ҡуйҙы. Ул Илсеғол хәллеләренең йылына бер тапҡыр, көҙ көнө, ҡалаға бал, май, ҡиммәтле йәнлек тиреләре алып килеп һатып, байып ҡайта торған ғәҙәттәре барын яҡшы белә ине: «Әгәр мин төптө иҫәр булмаһам, бегөн арыу ғына һыйланырға тейешмен...»— тип ҡарар итте ул. Һәм асыҡ сырай, илгәҙәк төҫ менән байҙар янына килде. Ғәйәт түбәнселекле һәм татлы йылмайып, башта муллаға, унан мәзингә ҡуш ҡулын һуҙҙы.

— Дөп-дөрөҫ. Был — мин. Тап үҙе — Закир. һауғынамыһығыҙ? Имен-иҫән генә килеп еттегеҙме. уҙамандар? Баласаға, йорт-ер именме? Кәсеп уңдымы? Ҡуржын тулдымы тигәндәй, эйе, ә-ә, кәйеф-шәрифтәрегеҙ нисек, ғалим-ғөләмәләр,— тип ҡала зыялыйҙарына оҡшатырға тырышып, тәтелдәргә кереште. Мулла ла, мәзин дә уның ҡырын һыйпалған оҙон сәсенә, тар салбарына, яғаһы яндан уйып, сигеп



эшләнгән күк сатин күлдәгенә, билен быуған тар ҡайышына күҙ йөртөп, был «тар балаҡтың» ысынлап та Закирмы, түгелме икәнлегенә төшөнөргә тырышты. Ул арала булмай, егет ҡарттарҙың икеһен бер юлы ҡултыҡлап уҡ алды.

— Әйҙәгеҙ. хөрмәтле уҙамандар, үҙегеҙҙе бер һыйлап сығарайым. Минең, буйҙаҡ кешенең, әлбиттә, өйгә алып ҡайтып һыйлар рәт юҡ. Ә бына трактирға алып инеп, бик шәп һыйлай алам. Рәхим итегеҙ, пожалуйста!

һый тигәндә ялындырырға ғәҙәтләнмәгән мулла менән мәзиндең йөҙө, яңы ғына бешеп сыҡҡан ит бәлеше кеүек йылтырап, алһыуланып китте. Закир уларҙы шунда яҡында ғына торған бәләкәс кенә бер трактирға алып инде лә, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, иң түрҙәге өҫтәлдәрҙең. береһенә уҙғарып ултыртты.

— Йә, хөрмәтле уҙамандар, әйтегеҙ, күнелегеҙ ни теләй, бөтәһен дә алып ашатам. һыйланығыҙ, пожалуйста,— тип аштарҙың исемдәрен теҙеп сыҡты.

Ҡунаҡтар, тирә-яҡ өҫтәлдәрҙә иҫерешеп, насар һүҙҙәр менән әрепләшеп ултырған кешеләргә ҡарап үҙҙәренең шәриғәткә хилаф булған быңдай урынға инеүҙәре есөн үкенергә лә өлгермәнеләр, алъяпҡыс бәйләп, усында батмус уйнатып, һары сәсле һылыу бер йәш ҡатын килеп тә баҫты.

— Нимә ашарға теләйһегеҙ, әфәнделәр?—тип мөләйем йылмайып өндәште. Тегеләр майлы күҙҙәрен йылтыратып ҡатынды баштан-аяҡ ҡарап сыҡтылар.

— Беҙме, фәрештәкәй, беҙ нимә теләйбеҙме?— тип, Ғаббас мулланын. теле тәтелдәп асылып китергә генә торғанда, Закир:

— Өсәр өлөш Себер билмәне, ҡурылған ҡуй ите, ит бәлеше, сәй...— тип теҙҙе лә һалды. Муллаға, кәзә һаҡалын һыйпап, мыйығын семеткеләп ҡуйырға ғына тура килде.— һыйларға икән һыйларға, рәхим итегеҙ. Шулай бит, уҙамандар? Пожалуйста!

Ҡарттар тағы урындарында килбәтһеҙ генә ҡуҙғалышып алдылар. Ғаббас мулла, кәзә һаҡалын семеткеләп, теге һылыу ҡатындың. килерен сабырһыҙланып көтөргә кереште

— Элек быңдай ерҙә бисәләр эшләмәй ине. Был ни ғәләмәт икән? Ахыр заман ғәләмәте түгелме икән?— тип хәүефләнеп тә алды. «һай, ҡара һин уны, шундай һылыу бисәнен, ҡулынан аш ашау бәхете насип булһынсы»,— тип эсенән генә ҡыуанып та ҡуйҙы.

— Ирҙәр хәҙер һалдатҡа китәләр, мулла ағай. Бисәләрҙе эшкә алыу хужаға файҙалыраҡ та. Күп эшләтә, аҙ түләй,— тип аңлатты Закир,— һуғыш ваҡытында тәртиптәр аҙыраҡ боҙола инде ул, мулла ағай.

— Шулай... шулай... Я алла, шайтан хөсөтөнән үҙең һаҡла мосолман бәндәләрен...

Ә Кәзә Мәзинде бөтәһенән элек һый ҡыҙыҡһындыра ине.

— һай, бәрәкалла, бәрәкалла, ни, Закир ҡустым, йомартлыҡ тигән нәмә пәйғәмбәрҙәрҙән ҡалған ғәҙәт ул. Йомартлыҡты ҡөрьән бик маҡтай,— тип үҙенсә фәлсәфә һатты. Оҙаҡламай аш ташыусы ҡатын тәрилкәләрҙе өймәләм итеп билмәндәр алып килде.

— Йәгеҙ, аштан рәхим итегсҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар, пожалуйста,— тине Закир, ғәҙәттән тыш илгәҙәк һәм мөләйем йылмайып.— Ашты һыуытмайыҡ...

Үҙе, аҡ ҡаласты умыра тешләп, аслығын йәшерергә көсө етмәй, һогаланып билмәнгә тотондо. Мулла менән мәзин дә, күрәһең, баҙарҙа оҙаҡ йөрөп арыу ук асыҡкан булғандарҙыр, ҡы<;татмай тәрилкәгә эйелделәр. Билмән артынан ҡурылган ҡуй ите, майы ағып торған ит бәлештәре килде. Закир ҡунаҡтарын:

— Рәхим генә итегеҙ, һыйҙы ҡабул итегеҙ, уҙамандар,— тип ҡыҫтай-ҡыҫтай ашатты. Үҙенең янаҡтары кына түгел, ҡолаҡтарына хәтле бер өҙлөкһөҙ ялпылдап ҡына торҙо. Ахыр, ит бәлешенец дә осона сығып, Ғаббас мулла, һыйлаусының күцеле булһын өсөн, ныҡ ҡына кикереп, ирен еҫтөндо нәҙек кеиә булып һыҙылып торған һирәк мыйыгын ҡулының һырты менән һыиыргылан алды.

— Йә, ху-уш... Әлхәмдөлилла!— тип, ныҡ кәйефләнеп, турайып ултырҙы.— Бик ҡаты һыйлап ташланың да баһа, кем, Закир ҡустым. Атайыңа оҡшап, мул ҡуллы икәнһең... Ул да, мәрхүм, урыны ожмахтын түрендә булғыры, йор һүҙле, мул ҡуллы кеше ине... Бөгөн булһа, иртәгеһен уйлап торор ғәҙәте юҡ ине мәрхүмдең... Диуана кеше ине... Донъяны әсә үҙе күтәр ине. Ә ул... эйе, һәйбәт кеше ине. һин атайыңа оҡшағанһын..-- Атайын, да шулай ағай-энене йыйып, ҡунаҡ һыйлап, ҡурай уйнатып, йыр йырлатып ултырыуҙы бәхет һанар ине...

— Дөп-дөрөҫ. Бик егет кеше ине. Аш-һыуға иҫәпһеҙ мул булыр ине,— тип, Кәзә Мәзин дә мулланын. һүҙен ҡеүәтләне. Үҙе былай байып киткән Закирҙын ҡайҙа хеҙмәт итеүе хаҡында баш ватты. «Моғайын, берәй байҙа брикашшик булып торалыр.... Брикашшиктар бит улар гел шулай тар балаҡлы, оҙон ботло, мут күҙле булалар. Бынауы яңы ғына һыҙылып сыҡкан ҡара мыйығына хәтле шуларҙыҡына оҡшаған...»

— Ниңә тынып ҡалдығыҙ әле, остаздарым? Ашағыҙ, һыйланығыҙ, рәхим итегеҙ, пожалуйста,— тип, Закир, тағы ла мөләйемерәк өндәшеп, мәзиндең уйын бүлде.

— һинең хаҡта баш ватып ултырам әле, ҡустым,— тине мәзин, илтифатлы ғына йылмайып.— Ни, кем, Закир ҡустым



нindәй байҙа кем булып эшләй икән, тим. Былай өҫ-башы ла йүн генә, кеҫә яғы ла мул ғына булғас, берәй арыу байҙалыр, тим... Ғәни байҙамы әллә? Хөсәйеновтарҙын. брикаш шиктары һинең кеүек ҡалын кеҫәле була, тип һөйләйҙәр.

— Бәй,— тип аптырап киткән булды Закир ҙа.— һин, мәзин ағай, ошоғаса, минең ҡайҙа эшләгәнде ишеткәнең дә юҡмы ни әле?

— Юҡ шул, ҡустым,— тип уцайһыҙланып ҡуйҙы Кәзә Мәзин.— Мин ни, кеше араһына ул хәтле сығып йөрөмәгәс ни...

Закир оҙон сәстәрен эре генә һыпырып алды:

— Улай булғас, белмәһәң — бел инде, ағай. Мин приказчик бит! Күптән. Борадәран Хөсәйеновтарҙың оло лафкаһында. Аңлайһығыҙмы!— тип эре генә һуктырҙы. Хатта, ҡуҡырайып, урынынац тороп ук китте. Өҫтәл янында бер-ике зыр әйләнеп алды. Арыҡ оҙон бармаҡтарын тырпайтып, салбар кеҫәһенә һуға биреп ҡуйҙы. Хатта, теш араһынан ғына осортоп, төкөреп иә ебәрҙе. Йәнәһе, «донъяһының артына тибеп йәшәйбеҙ!..»

Ҡунаҡтар, был килешһеҙ ғәҙәтте күрмәмешкә һалышып, кем уҙарҙан:

— Бик хуп. Бик шәп. Афарин!— тип ултырҙылар. Ул арала теге һылыу ҡатын алты стакан лимонлы сәй алып килде Закир ғәйәт түбәнселекле тауыш менән:

— һеҙ, уҙамандар, яйлап ҡына сәй эсә тороғоҙ. Минец аштан һуң аҙ ғына төтәтеп ала торған ғәҙәт бар шул инде Ҡалай итәһең...— тине.— һеҙҙең алда, хөрмәтле остаздарым алдында, төтәтеү әҙәпһеҙлек булыр, тип ҡурҡам бит әле. Иң яҡшыһы — мин анауы тартыу бүлмәһенә инеп кенә төтәтеп сығайым. һеҙ мине бер генә минутка янығыҙҙан кит кән өсөн ғәфү итерһегеҙ бит?!—тип ҡат-ҡат эйелеп-һығылып алды. Ауылдаштары был тиклем әҙәпле «аҙғынға» иҫтәре китеп:

— Сығып ыҙаланмаһаң да ярар ине лә,— тип тыныс ҡына һөйләнеп ултырып ҡалдылар. Закир тағы бер ҡат «пожа луйста»ны әйтеп, бормас баҫып, «тәмәке тартыу бүлмәһенә» инеп китте.

Ҡунаҡтар, унын тамам аҙыуы, тәмәке тартыуы, бөтә ҡиәфәте менән руска оҡшап тороуы хаҡында ысын күнелдән ҡайғырышып һөйләшә-һөйләшә, ашыҡмай ғына сәй эстеләр Унан, күп ашауҙан ауырайып, оҙаҡ ҡына йоҡомһорап ултырҙылар. Бер аҙҙан теге һылыу ҡатын, инде ҡулында батмус уйнатмай ғына, улар янына килде.

— Рәхим итегеҙ, аҡса түләгеҙ, әфәнделәр,— тип, Ғаббас мулланын. күҙенә төбәп ҡараны.— Өсөгөҙҙән фәләнсә һум аҡса тейеш,— тип, аштың бик оло ғына хаҡын да әйтеп •һалды.

Мулла ҡатындың яҡты зәңгәр күҙ нуры аҫтында иреп китеп, өндәшмәй генә йылмайып ултырҙы. Хатта уға аҙ ғына ишара яһап, күҙ ҡыҫып алғандай ҙа итте.

Ҡатын асыулы һәм аптыраулы ҡарашын мәзингә күсерҙе.

— Матур туташ, ҡәләм ҡаш, беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙылар,— тине Кәзә Мәзин, эре генә тамаҡ ҡырып.— Эйе, йәғни мәҫәлән, Хөсәйеновтарҙын, брикашшигы һыйланы беҙҙе. Ул беҙҙең ауыл егете, үәт. Ул түләй һиңә аҡсаны...

— Тап шулай!— тип күтәрелеп китте мулла ла.— Күрҙең бит теге тар салбарлы, ҡыҙыл ауыҙлы егетте. Йомарт зимак... Эй, янылыш әйтәм, йомарт брикашшик!..

— Ҡайҙа һуң ул үҙе?— тип ғәжәпләнде ҡатын хәҙер. Ҡунаҡтар Закир инеп юғалған ишеккә күрһәттелер.

— Ана тегендә... Тәмәке борҡота...

— Эйе, хәсис, төтәтергә ейрәнгән!..

Ҡатын йүгереп барып ишекте асып ҡараны ла шунда уҡ боролоп килде.

— Унда бер кем дә юҡ. Ул бит ихатаға сыға торған ишек. Тимәк, һеҙҙең, «бай приказчик» ихата аша сығып тайған!..— тип белдерҙе. Унан баяғы мөләйем ҡатынға һис тә хас булмаған тупаҫ тауыш менән:

— Ах, һеҙ, мошенниктар! Аҥра һарыҡтар!.. Сусҡа кеүек тығындығыҙ ҙа хәҙер түләмәй ҡасырға йыйынаһығыҙмы ни әле? Бына мин һеҙҙе... полиция саҡыртып...— тип ҡысҡырынырға кереште. Ғаббас мулла менән Кәзә Мәзин, зимагор Закирҙы ете быуынынан тешөп әрләй-ҡарғай, һыҙлана-ҡалтырына, аш хаҡын түләп сыҡтылар. Ә Закир был ваҡытта, оҙаҡ аслы-туҡлы йөрөү арҡаһында ҡыҫылып бөткән ҡарындың ҡапыл күп ашауҙы күтәрә алмай сәнсешеүен кинәнеп тыңлай-тынлай, фатирына табан яй ғына китеп бара ине. Туҡтамай һибәләгән йонсоу ямғырҙы ла, аяҡҡа сат йәбешеп ятҡан ҡуйы мәтене лә абайламай, хатта алда торған һуғышүлеш ҡурҡынысы хаҡында ла иҫкә алмай ине ул хәҙер. Унын, йөҙөндә йәш аралаш әсе йылмайыу сағыла, күңелендә: «Бына Закир зимак та үҙен һуғышҡа һыйлап оҙатты! Былай булғас, яҙмышҡа ҡалай зарланаһың?»— тигән мыҫҡыллы бер уй ғына ҡабатлана ине.

Бына шул ғына. Бер уйлаһаң, буш нәмә. Ә Закирға ул бөгөн тауҙай ауыр ғәйеп булып күренде: «Алма кеүек ҡыҙын шундай зимакка бирергә Ғаббас мулланың башына тай типкәнме ни? Миңә, ҡасандыр үҙен һемәйтеп ҡасҡан аҙғынға?!»—тип, үҙ-үҙен кәмһетеп, өҙгөләнеп уйланды ул. Ә инде ҡасан, Гөлйыһан да беләләр әле был хаҡта, тигән һығымтаға килгәс, унын күңеле бетөнләй ҙә һүрелде. Ул, әлбиттә, мулла менән мәзиндең кеше көлкөһөнә ҡалыуҙан ҡурҡып, ул ваҡиғаны ауылға ҡайтып һөйләмәүен белмәй ине.



Был тынғыһыҙ уйланыуҙан Закирға кен тағы ла эҫеләнә төштө. Ҡуйы сәс араһынан түгелеп сыҡҡан тоҙло тир тамсылары күҙгә төшеп аяуһыҙ ышҡый башланы.

— Фу, шайтан алғыры! — Ул һикереп тороп, бая Гөлйыһан йүгергән һуҡмаҡтан яр аҫтына票 тештө, кейем-һалымын ашығып ҡаҙ үләне өҫтөнә ырғытты. Саяланып, текә ярҙан һыуға һикерҙе. Был ерҙә йылға тымыҡ, тәрән, аръяҡ ярға барып етмәйенсә унын төбөн табыу, аяҡҡа баҫыу мөмкин түгел. Закир һикергән ынғайға сумып китеп һыу тебөндә бик оҙаҡ юғалып торҙо ла, унан ҡолас ташлап арғы яҡҡа барып сыҡты. Ҡояш нурҙары аҫтында гәүһәр-яҡут шикелле йәшелле-ҡыҙыллы нур сәсеп емелдәгән ҡырсын таштарына табанын яндыра-яндыра бөҙрә талдар күләгәһенә, йомшаҡ һары ҡом өҫтөнә һуҙылып ятты. Тәбиғәттең гүзәл ҡосағына һыйынып, кәрәкһеҙ уйҙарҙан арынырға теләне. Ләкин үҙенә хас вайымһыҙ тыныслыҡ килмәне.

«Сейә кеүек бешеп еткән был Гөлйыһан!.. Аҡыллы ла һымаҡ... Ҡыйыу ҙа күренә... Хатта «яратам» тип туп-тура әйтергә батырсылыҡ итә!.. Ҡара һин уны!..— тип тағы баяғы уйына ҡайтты.— Яратма, һылыу, мине, зимагорҙы!..— тип хатта ыңғырашып уҡ ҡуйҙы.— Мин бит үҙем дә иртәгә ҡайҙа булырымды, нимә эшләремде белмәйем... Белмәйем шул. Бына, әйтәйек, төрлө яҡлап аҡтары, чехтары ҡыҫып килә. Бөгөн-иртән бында ла килеп етерҙәр... Ул саҡта миңә нимә булыр? Белмәйем. Хаммат ағайым менән китмәй ҡалдым. Яҡшығамы, яманғамы был? Белмәйем. Ҡыҙ һөйгөм килә. Башҡалар шикелле тыныс ҡына донъя көткөм, бала-саға үҫтереп йәшәгем килә.. Ләкин оҙон ғүмерле булырмы мин-ең был теләгем? Белмәйем. Их Гөлйыһан, Гөлйыһан... Донъянын, бер генә мөйөшөндә лә мин тотоноп туҡтап ҡалырҙай тотҡа юҡтыр, күрәһең... Бәлки, ундай тотҡа бөтөнләй булмайҙыр ҙа... Әгәр булһа, бар донъяһы шулай аҫты-өҫкә түңкәрелеп, әйләнеп ятыр инеме ни!.. Ана бит, һәр кем ниҙер эҙләй, ниндәй ҙә булһа ныҡ бер тотҡаға тотоноп туҡтарға, турайып баҫырға теләй... Әммә тотҡа һурылып, кеше ауып ҡына тора..

Фу, өтә генә ҡояш, өтә!..»

Закир, япрайып үҫкән дегәнәк япрағын еҙөп алып битен ҡаплап, салҡан әйләнеп ятты. Унын, уйҙары һаман шул ҡыҙ тирәһендә әйләнде. Ә йерәге бер өҙлөкһөҙ: «Гелйыһан, Гөлйыһан!..»— тип тибә һымаҡ ине. Нисек шулай булмаһын, ул ҡалай ғына инҡар итергә, аңламаҫҡа тырышһа ла, бына бер йыл бит инде, һуғыштан ҡайтҡандан бирле үҙен эҙәрләгән, йөрәгенә үрт һалған ошо зәңгәр күҙҙәр тағы ла асығыраҡ, сафыраҡ зәңгәрләнеп, унын ҡаршыһына килеп баҫты бит..

Закир йөрәгенең үтә сабырһыҙ тулап китеүенә сыҙай алмай тороп ултырҙы. Ҡояшҡа берсә ҡабырғаһын, берсә арҡа-

һын ҡуйҙы. Күнеле баҫылманы: «Их, анламаҫҡа, күрмәҫкә тырышыу менән генә буламы ни ул!..» Ул тағы һыуға һикерҙе. Сума-йөҙә тағы уң яҡ ярға барып сыҡты. Артыҡ ярһыуҙан аяғын салбар балағына тура килтерә алмай, һыңар аяҡҡа бейей-бейей, ашығып кейенергә тотондо. Ул арала әле генә башында тыуган түҙемһеҙ уйҙар дауыллы өйөрмәгә әйләнде.

«Китергә! Бөгөн үк, хәҙер үк!.. Белорет яғына китергә, үҙемдең отрядҡа, Каширин отрядына барып ҡушылырға! Атмаҫтар, бер юлға ғәфү итерҙәр әле... Юҡһа был Ғаббас мулла, ерән төлкө, ҡыҙының миңә күңеле төшкәнен һиҙеп ҡалһа... Шунда уҡ башҡа етер... Башҡа етеүе бер хәл. Гөлйыһанға минен. теге мутлыҡты бығаса һөйләмәгән булһа, хәҙер һөйләп бирер. «Сепрәк баш, кемгә кұҙен. төшкән бит, хәсис! Ул бит зимагор! Ул бит жулик!»— тиер. Минең йәшлек тилелеге менән эшләгән бер хатаны, ҡот осорлоҡ итеп, мен, тапҡыр арттырып һүрәтләр. Юҡ, юҡ, һөйләмәһен. Гөлйыһандын, гонаһһыҙ сабыйҙың, тәү бөреләнгән саф тойғоһона ундай ҡара тап булып төшөргә теләмәйем мин... Теләмәйем!

Их, үҙенде кемдер, ҡайҙалыр яратып иҫкә алыусы барын ТОЙОУ ҡандай ҙур бәхет икән дә баһа... Бындай бәхет өсөн утҡа-һыуға инеү ҙә, үлеү ҙә татлы буласаҡ! Китәм, ҡайтанан һуғышҡа, алышҡа китәм! Иҫән ҡайтһам, еңеп ҡайтһам... Кем белә, бәлки, ул саҡта беҙ Ғаббас мулланан һорап та тормабыҙ...»

Закир, бөтә йәнен-йөрәген дауыллатып ебәргән был ҡыйыу ҡарарҙың һыуыныуынан ҡурҡҡан һымаҡ, үтә ҡабаланып тағы Өммөгөлсөмдәргә йүгерҙе: «Енгәмә әйтеп китэйем, Гөлйыһан мине көтһөн! Мин уны яратам!..»

VII

«Урман кейекһеҙ булмаҫ» тиҙәр бит. Хәҙер был мәҡәлде «урман кешеһеҙ булмаҫ» тип үҙгәртеү ҙә бик дөрөҫ булыр ине. Хәйер, элек тә, тыуған йортта йәшәр әмәл ҡалмағанда, илде, халыҡты иңрәткән яуыҙлыҡҡа ҡаршы көрәшкә ойошорға кәрәк булғанда, урманда кеше күбәйеүсән, бығаса бер кем аяҡ баҫмаған төпкөлдәргә, өндәү, саҡырыу көтмәҫтән, ирҙәр йыйыла башлай торған булған бит. Йыйыла, көс туплай, кәңәшә-һөйләшә, үҙ араһынан юлбашсылар билдәләй, унан хәрәкәткә күсә... Ҡара батшалыҡтын, аяуһыҙ тархандарҙың тамырын күп тапҡырҙар дер һелкеткән данлы күтәрелештәр, ҡыйыу алыштар, ҡанлы бәрелештәр ана шулай башланған. Эйе, башҡорт халҡында был борон-борондан килгән ғәҙәт. Ниңә һун, әле Хамматҡа ла ошо ғәҙәттән файҙаланмаҫҡа? Ҡыҙыл армияны яңғыҙ-ярым көйө ҡаса-боҫа эҙләп киткәнсе, ниңә отряд йыйнап һуғыша-ҡыйыша юл ярып уҙмаҫҡа?!.



Мен, төрлө ваҡ йоморсаҡ ҡырсынташтары араһынан ғәҙәтенсә шат, йәш сылтырап ағып яткан Оло Эйек менән унын янында бошоноп тынып торған улы менән хушлашҡанда, Хаммат ошо хаҡта уйланы. Унан ҡапыл атын көнсығышҡа, боронғо башҡорт йәйләүҙәренә табан борҙо. Юл ыңғайында Ивановкала туҡталды. Тирмәнсе Мартышкинда йөк ташыусы булып эшләгән фронтташ ике иптәшен осратты Улар ҙа үҙҙәренә ауылда артабан да ҡалыу хәҙер хәтәр булыуын әйттеләр. Шунан улар ошо төндә үк, өсәүләп, юлға сыҡтылар. Ҡалын ҡара урмандар, бейек тауҙар менән уратып алынған, үлән баҫып бөткән тау-урман юлдары ғына бара торған был ерҙәргә аҡтарҙын. да, чехтарҙың да инергә баҙнат итмәҫенә, Урал батырҙарының илбаҫарҙарҙы хас дошман күреүен, изге ергә еңел генә аяҡ баҫтырмаҫын уларҙың белеүенә якшы төшөнә ине улар. Шулай уҡ дошманға ҡаршы көрәшергә ҡәһәт иткән һәр бер кешенең әлегә, һис шикһеҙ, урманға йәшенергә мәжбүр булыры ла уларға асыҡ ине. Ул тап шулай булды ла. Ҡаҙмаш йәйләүенә барған көндө үк Хаммат көрәштәш дуҫы Шаһиморатты осратты. Унын аты ла, мылтығы ла бар.

— Бәй, һине Каширин отрядына ҡушылып киткән, тип ишеткәйнем дә баһа мин?!— тип Хаммат һынаулы ҡараш таш-ланы.— Каширин отряды Иҫәнбәттә һатыбал бандаһын туҙҙырғандан һун,—.

Шаһиморат уңайһыҙланып башын түбән эйҙе. Оҙаҡ ҡына бер ни тип тә яуап ҡайтарманы. Улар ат юғалырҙай ҡуйы, һутлы үлән менән ҡапланған йәйләү уртаһында, тауҙан ауып төшөп яртылаш ергә һеңгән ҙур гранит ярсығы өҫтөнә барып ултырҙылар. Уларҙан алыҫ түгел, ҡуйы үләндәр, сәскәләр араһынан боронғо бер усаҡ урыны сукайып күренә. Емерек усаҡ өҫтөндәге киң һуйыр ташта, ҡускар кеүек йомарланып, йыуан сыбар йылан ҡояшта ҡыҙынып ята. Күрәһең, якында берәй солоҡ умарта барҙыр — сәскәнән сәскәгә ҡунып бал ҡорттары безелдәшә, ҡоштар йәмле йәй йырын йырлай. Көн шул хәтле тын, эҫе. Ҡара урмандар менән ҡапланған сусаҡ тауҙар уртаһында тымыҡ йәшел күл һымаҡ күренгән был кескәй уйһыулыҡта йән иреткес рәхәт шиғри тормош дауам итә. Әммә йән тыныс түгел. Хаммат ҡалын ҡара ҡаштарын ауыр күтәреп тағы Шаһиморатҡа ҡарай:

— Дөрөҫ булманымы ни? Бушты һөйләгәндәрҙер шул?.

Шаһиморат, үҙ хәлен аңлатыр һүҙ тапмағандай, тағы бер аҙ аҙапланып ултырҙы. Унан үкенесле тауыш менән:

— Киткәйнем дә... Ҡананикульскиҙан кире боролғайным л,—тип ҡуйҙы.

«Закирҙың иҫәрлеген һин дә ҡабатлағанһын. икән...— тип уйлап алды Хаммат.— Их-х, егеттәр...» ләкин өҫтәп бөтән һүҙ әйтмәне. Шаһиморат, итек остарына ғына ҡарап, бошонҡо тауыш менән артабан һөйләне:

— Аҡтар беҙҙең яҡҡа килеп етмәҫ бәлки, бала-саға янында әҙерәк йәшәп булыр, тип уйлағайным... Үҙең беләһең, герман һуғышы башлаған көндән алып өҫтән шинель, ҡулдан мылтыҡ тешкәне юҡ та баһа!..

Һуғыш башланған көндә атайым мәрхүм донъя ҡуйҙы... Ә мин уны ҡабалан ғына ерләнем дә фронтҡа киттем... Минең атайымды, һөнәрсе Шәһит ҡартты ишетеп һин дә беләһен,- дер әле, Хаммат ағай?

— Беләм. Ишетеп беләм. Байгилде ағай һөйләгәйне...

— Һай-й, ниндәй кеше ине бит ул?! Минен. атайым... Ҡулынан ниндәй генә эш килмәҫ ине... Арба, сана, көрәк-һәнәк, туҫтаҡ, тәпән... ижау, ҡалаҡ... Бер туҡтамай юнып-йышып эшләп торор ине, мәрхүм...

Шаһиморат әкрен генә көлөп алды:

— Үлерҙән саҡ ҡына алда тороп ултырған да әсәйемдән усаҡ өҫтендә элеүле торған иләкте һорап алған.

— Бир әле, ҡарсыҡ, иләгенде янырткып, ситләп бирәйем, юҡһа, туҙа башлаған шай...— ти икән. Әсәйем:

— Я хоҙай, тик кенә ятһаң, ял итһән, булмаймы, эш тип йәнең сыкты бит ғүмергә,— тип һуҡрана-һуҡрана алып биргән иләкте.

— Улай тимә, әсәһе. Ошо эш кенә йәшәтте лә мине,— тигән атайым. Иләккә бик һәйбәтләп яңы тирәс ҡуйып биргән.

— Мә, әсәһе, урынына элеп ҡуй. Ипләп йөрөтһәң, он иләгәндә бармаҡтарын. менән матҡып тотмаһаң, оҙаҡҡа түҙер,— тигән дә һуҙылып төшөп ятҡан. Әсәйем иләкте элеп әйләнеп ҡарағансы йән дә биргән... «Ну илла үҙенде ҡыҙыҡ иттем бит, әсәһе!..»— тип шаярған шикелле мут ҡына йылмайып, рәхәт тынып ята ине ул, мин ҡулыма повестка тотоп ҡайтып ингәндә... Шундай яҡшы күнелле, тимер түҙемле кеше ине минен атайым.

Бына шундай атайҙың баш осона таш ултыртып, ҡәберен кәртәләп ҡуйырға ла ваҡыт тапкан юҡ бит... һуғыш та һуғыш...

Һатыбал, Федька Рябой бандаларын бөтөрҙөк, инде тыныслап йәшәйбеҙ икән тиһәк, аҡтары, чехтары ҡалҡып сыҡты... Аңламаҫһың был донъяны! Беҙҙен. ғүмергә генә шулай ауыр килдеме икән? Әллә элгәре лә кешеләр инрәп барып донъя ҡуйҙымы икән?

Шаһиморат ауыр көрһөнөп уйланып ҡалды. Ул арала Хамматтын, иғтибары ҡаршылағы ҡуйы йүкәлеккә йүнәлде. Йәйләүҙә елден, эҙе лә булмаһа ла, бер урында йәш ботаҡтар һығылғылап, тирбәлеп ҡуя ине. «Айыу eләк ашап йөрөймө икән? Әллә дошман шымсыһы беҙҙен эҙгә төштөмө икән?..— Хаммат ашығып янында яткан мылтығына үрелде.— Кем булһа ла, ҡулдан ысҡынмаҫҡа тейеш!.. Айыу ит булыр, ә дошман...»

Тап шул минутта йүкәлектән, ҡуңыр йөҙөнә нур бөркөп балҡып торған аҡ тештәрен йылтыратып, көлә-йылмая йәш бер егет килеп сыҡты. Йәйге селлә булыуға ҡарамаҫтан, унын өҫтөндә билен шәлкем йүкә менән быуған һоро тула сәкмән, башында йолҡоноп бөткән ҡуян бүрек, аяғында сарыҡ...

— Ҡара, ниндәй айыу килеп сыҡты!— тип көлөп ҡуйҙы Хаммат.— Кем икән был, ә?

Шаһиморат, ашыҡмай ғына, Хаммат ҡараған яҡҡа борола:

— Ә... Был . беҙҙең Иҫәнбәт егете... Сәғит . «ут күҙ» Сәғиҙулла... Ҡормош байҙа йылкы көтә ине. Хәҙер бына Совет власын яҡлап көрәшкә тотонорға булған.

Сәғит өлкәндәр алдына бер күнәк eләк алып килеп ултыртты.

— Ер еләге... Бынау сауҡа артындағы аҡланда ҡыҙыл сәкмән кеүек түшәлеп ята. Ашағыҙ, ағайҙар.. — тип, баҫалҡы йылмайып, үлән еҫтөнә ултырҙы.— Шул хәтле унған еләкте йыйыр кеше лә юҡ бит хәҙер...— тип, тын ғына көрһөнөп алДы.— Еләккә лә, йәйләүгә лә, кешегә лә һан бөттө һымаҡ..

— Сәғит тигән егет тиһең, ә?— тип, уйсан ғына йылмайып еләккә үрелде Хаммат.— Нисектер, бик таныш исем һымаҡ... Сәғит... Сәғиҙулла... Кемдер, ҡасандыр, тап бына хәҙерге кеүек, был Сәғит тигән егет... Көтөүсе...— тип таныштырғайны һымаҡ.. Ҡайҙа, кем ине һун. әле ул?

— Белмәйем,— тине Шаһиморат.— Әллә мин түгел.

Егет унайһыҙланып башын эйҙе. Ныҡлы сығынҡы яцаҡтарын эре тир бөрсөктәре ҡапланы. Шулай бер аҙ тынып ултырғас, оялсан ғына йылмайып, Хамматҡа күтәрелеп ҡараны. Үтә теремек, яҡты ҡара күҙҙәрендә ҡыуаныслы ут балҡытып:

— Эй, ағай, хәтерең бик тә һәйбәт икән дә... Ул хәл бит төндә булғайны... һин ул төндә хатта мине күрмәгәйнен. дә шикелле...

— Улай булғас, ҡайҙа күрҙем һуң мин һине?

— Ташһарайҙа...

Хаммат көсле ихтыярлы кешеләргә генә хас ҡалын күкрәк тауышы менән ҡыҫҡырып көлөп ебәрҙе:

— Ә-ә, теге, һатыбал отрядынын. ҡорал складын һаҡлаған егет Хәтерләнем. Һин унда беҙгә уларҙың складтан

ситкә йәшергән пулеметтарын да табып биргәйнец... Шулай бит? Эйе, яҡшы ярҙам иткәйнен, һин унда беҙгә!.

— һеҙ башта минен. ауыҙға бейәләй тығып, ҡул-аяҡты бәйләп ташлағайнығыҙ,— тип ҡыйыуһыҙ ғына өҫтәп ҡуйҙы егет.— Байгилде ағай танымаһа, беҙҙең эш һәләк ине. Байгилде ағай башта Сәхиулла ағайҙы таныны, унан мине... Шунан һеҙ бөтә ҡоралдарҙы тейәп алдығыҙ, беҙҙе лә үҙегеҙ менән алып киттегеҙ. Юҡ, һин, Хаммат ағай, беҙҙе оҙаттын. да үҙен, тороп ҡалдын... Байгилде ағай, Тимербай ағай һинең өсөн юл буйы көйөнөп ҡайттылар...

— Был Хаммат бүре өйөрө араһына бер үҙе барып инеп ни ҡылмаҡ була икән!— тип аптыранылар.. Мин әле булһа белмәйем, ағай, һин ни өсөн унда яңғыҙың тороп ҡалдын, да нисек ҡотолдон, икән?

— һай, хәйләкәр! Бетәһен дә хәтерләйһен. Бөтәһен дә белергә теләйһең!— тип, тағы ысын йөрәктән ҡыУанып көлдө Хаммат — Тимәк, һин бушҡа ғына аҡтарға ҡаршы көрәшкә сыҡмағанһын.

— Шулай булмайса. Юҡһа мин бында ни эшләп килеп сығыр инем!— тип инде арыу уҡ ҡыйыуланып яуап бирҙе егет — Мин, Хаммат ағай, яҙмышҡа, ул мине һеҙҙен, менән тағы осратҡаны өсөн, бик ҡәнәғәтмен,— тип тә өҫтәне.

— Шулаймы?! Ҡара һин уны!— тип, тағы ла нығыраҡ ҡыҙыҡһынып, күңелле йылмайып ҡараны уға Хаммат Был тәү ҡарауға оялсан, ҡыйыуһыҙ ғына күренгән асыҡ сырайлы, ҡаҡса егет арыу уҡ һөйләнсәк булып сыҡты ла баһа! Уға ҡарап Хаммат күптән түгел булып үткән ваҡиғаларҙы ла ҡайтанан кисереп алды. Хәтәр һәм ҡыйыу аҙым яһағайнылар дружинасылар ул төндә Йәш Совет власына ҡаршы көрәшкә йыйылып яткан һатыбал бандаһының ҡорал складын анғармаҫтан баҫып алғайнылар. Шунан ул, Хаммат, бер үҙе бандиттарҙын. араһына йырып инеп мырҙаһы Закирҙы алып сығып киткәйне... Нисектер, береһе лә уға атырға ла, тоторға ла баҙнат итмәй тороп ҡалғайнылар тегеләр... һау, көслө сағы ине шул Хамматтың. Октябрь революцияһы көндәрендә Петроградта эшселәр менән бер сафта тороп енеү яулаған дәртле, батыр һалдат сағы... Сәлимәһе лә тере ине уның..

Әҙ генә уйланып, онотолоп торған Хаммат, енелсә көр һөнөп, маңлайын һыйпай биреп алды ла баяғыса көр, асыҡ тауыш менән тағы егеткә өндәште:

— Ә Сәхиулла ағайың ҡайҙа һуң? Ниңә ул һинең менән бергә түгел?

— Сәхиулла теге Иҫәнбәттәге төнге һуғышта һәләк булып ҡалды,— тип, егет өсөн Шаһиморат яуап бирҙе Байгилде ағай менән улар һатыбал бандаһының ҡорбаны булдылар... Бик ваҡытһыҙ сафтан сыҡтылар... Их-х, был донъя..



Йәшәү өсен көрәшкә тотонғанда ғыиа йыкты ла һалды шул егеттәрҙе!..

— Эйе, бына тигән иптәштәрҙе юғалттыҡ. Әле күпме юғалтаһы барҙыр...— тип ауыр ғына көрһөнөп алды Хаммат та.— Әммә шуныһы асыҡ — хаҡлыҡ та, енеү ҙә беҙ һайлаған юлда буласаҡ. Ин, мөһиме шул — ҡорбандарҙың ҡаны бушҡа түгелмәне.

Бөтәһе лә тынып ҡалдылар. Бөтәһе лә оҙаҡ ҡына тынып ултырҙылар. Ахыр Хаммат, ваҡытһыҙ баҫып килгән уй ҡоршауҙарын өҙә һуҡкандай итеп, ҡулдарын ҡырҡа һелтәп ебәрҙе лә таш өҫтөнән тороп китте, еңел-енел баҫып, йәһәтләп йөрөп алды, унан киң йәйләүҙә үҙен яңғыҙ хужа һанап, һаман әле ҡояшта ҡыҙынып ятҡан сыбар йыланды ҡулындағы ҡайыш ҡамсы менән урталай өҙә һуҡты.

— Агыулы йылан! Анғармаҫтан ҡойроғона баҫып сагылыуын. бар...

Йыландын, башы-койроғо һәр ҡайһыһы үҙенсә һыгылабегөлә, уҫаҡ өҫтөнән үлән араһына ауып тештө.

Урман төпкөлө был арала ысынлап та бик кешеле булып сыҡты. Бер нисә көн үтеүгә Хамматтар төркөмө ҡайһы мылтыҡлы, ҡайһы мылтыҡһыҙ урманға ҡасҡан ун икс кешенән тора ине инде.

• — Бер отрядлыҡ була яҙҙыҡ та,— тине Хаммат ҡәнәғәт тауыш менән. «Бөтәбеҙ ҙә тип әйтерлек һуғыш уты үткән һалдаттар. Былай булғас, аҡтар менән алыша башларга ла була... Тик бына ҡорал ғына аҙыраҡ. Ете генә мылтыҡ.. Аҙ-аҙ... Дошмандын үҙенән тартып алып ҡоралланырга тура килер. Шулай бит, иптәштәр?

— Ҡорал кәрәк. Ҡоралһыҙ керәшеп буламы ни.

— Ләкин аҡтарҙан ҡорал алыр өсөн дә ҡорал кәрәк бит әле,— тиештеләр иптәштәре.

— Бәлки тәү башта аҡыл һәм ҡыйыулыҡ та етеп торор, ә?— тип, мут ҡына йылмайып ҡуйҙы Хаммат. Унан:— Ҡоралланып алырға ла һуғыша-һугыша ҡыҙылдар яғына юл ярып уҙырға тотонорға кәрәк инде. Беҙ бит бында, урман төбөндә, бәхетте ҡуҡтән көтөп ятыу өсөн йыйналмағанбыҙ,— тип һүҙҙе етди йомғаҡлап ҡуйҙы.

Улар был ваҡытта эңер елә́слеге төшкән йәйләү уйһыулығында, әлеге ҙур гранит ярсығы тирәһендә, үләндә ултыралар ине. Әйләнә-тирә һаман бында улар тәү килгән кендәге кеүек: уйһыулыҡ тымыҡ йәшел күл булып томорап ята, әйләнә-тирәләге сусаҡ тауҙарҙағы йөҙйәшәр ҡарағастар иҙрәп ойоп тынып ҡалған, бал ҡорттары һаман шулай ажарланып сәскәләргә һарыла... Тик теге үлән баҫҡан боронро

уҫаҡ өҫтөндә тәгәрмәсләнеп, ҡояшҡа ҡыҙынып ятҡан ҡара сыбар йылан ғына күренмәй.

— Ағай,— ти Сәғит иплəп кенə,— теге йыландың урыны буш...

•— Йыландын, береһенең билен өҙә һуҡһаң, икенсеһе унда килмәй ул,— ти Хаммат, һалмаҡ ҡына йылмайып.— Бына беҙ аҡтарҙың билен дә шулай өҙә һуҡһаҡ, улар түгел, бүтән эттәр ҡойроҡтарын бот араһына йәшерер ине..

VIII

— Ецгə!— тип атылып килеп инде Закир.— Еңгә!.. Өммөгөлсөм, күҙен шаян уйнатып таҡмаҡлай-таҡмаҡлай, уның ҡаршыһына баҫты:

Ҡәйнешкәйем, беләһенме,
Беҙҙә ҡунаҡ ҡыҙы бар...
Ҡунаҡ ҡыҙын күргең килһә,
Ҡурай ал да беҙгә бар.

— Бәй-й... Гөлйыһан ҡарындаш та бында икән дәһә,— тип уңайһыҙланып ҡына келөмһөрәне Закир.— Ни.. еңгә.. мин...— тип әйтер һүҙен онотоп торҙо.

— Нимә булды һиңә, ҡәйнеш? Кем тейә?— тип һаман мәрәкәләне Өммөгөлсөм.— Сәпсим ҡотон, алынған да баһа, ҡәйнеш!

Гөлйыһанды бында осратырмын тип уйламағанға ахыры, Закир, ысынлап та, ҡапыл-ғара ҡаушап ҡалған һымаҡ булды. Хатта, өнө быуылғандай, күлдәк яғаһын ысҡындырып ебәрҙе.

— Фу, томра... ҡана, еңгә, тағы айран һыулап бир әле

— Шунын. өсөн генә аһылдап, йүгереп килеп инденме ни, ҡәйнеш?— тип ныҡышты Өммөгөлсөм — Ай-һай, айран өсөн генәме икән?!— тип бармаҡ янаған булды.

— Бәй, сарсағас ни... көнө ниндәй бит,— тип күңелһеҙ генә ҡарыулашты Закир.— Өтөп алып бара лаһа!

— Ә беҙ, ҡәйнеш, был тиклем йүгереп килгәс, балағына ут ҡаптымы икән әллә тип, ҡотобоҙ осҡайны. Шулай бит, Гөлйыһан?— тип, еңгәһе лә һаман мәрәкәләне.

— Йә, еңгә, телеңә һалышма — лучше һалҡын айран биреп, ҡәйнешенден, йерәк утын йәһәтерәк баҫырға тырыш,— тип, Закир ҙа шаярыуға күсте.— Юҡһа, күрәһен, бит, дөрләп тоҡанып китергә торам... Абай бул, ялҡыным, ейөңдө ялмауы мөмкин!..

— Ҡуйсы, ҡәйнеш, янмай тор. Хәҙер айран һыулап алып инәм,— тип, Әммөгөлсөм уйнай-көлә аласыҡҡа китте Ниңәлер, баяғы, һыу буйындағы, ҡыйыулығын юғалтып, ни әйтергә, күҙен ҡайҙа йәшерергә белмәй ҡыҙарына-бүртенә түрбаш яҡта баҫып торған Гөлйыһан да, күрәһең, өйҙә егет менән икәүҙән-икәү тороп ҡалыуҙы яҡшыһынмай, Өммөгөлсөм артынан эйәрҙе. Ләкин еңгә кеше уны ишек төбөндә туктатты.

— Бикәс, һин дә ошонда ғына кетөп тор, һиңә әйтәһе һүзе дә бар. Китмә, йәме,— тине.

«Ҡара һин уны, Өммөкәй еңгәм дә шаян ғына була белә икән дәһә... Әллә был шаянҡай Гөлйыһан менән, ысынлап та, серҙәш инде?!»—тип уйлап алды Закир. Үҙе ике ҡулын кеҫәһенә тығып, иҙән буйлап ҡыҙыу-ҡыҙыу йереп китте. Гөлйыһан, керпектәрен түбән төшөрөп, аҡ мейес янында, унан да аҡ, ҡупшы булып, күҙен генә көлдөреп тора бирҙе. Ахыр Закир, йерөп киткәндәге шикелле үк йәһәтләп, унын, ҡаршыһына килеп баҫты.

— Ҡара әле?!— тип үтә ғәжәпләнгән төҫ менән ҡыҙҙың ярһыу дәрт менән балҡыған зәңгәр күҙҙәренә текләп ҡараны.— Ҡайһы арала үҫеп еттен. әле һин, ҡарындаш?

Ҡыҙ инде шыңғыратып көлөп ебәрҙе:

— һеҙ һуғышып йөрөгән арала, Закир ағай!

— Ҡара һин уны... Үҫеп тә еттең, егет һөйөргә лә өлгөрҙөн. инде, ә?!— тип, Закир уйынлы-ысынлы ғәжәпләнеп һораны. Гөлйыһан, тирләп-бешһә лә, бирешергә теләмәне. Ҡыйыу итеп:

— Өлгөргәнмеидер шул, күрәһең...— тип яуап бирҙе.

— Шулай укмы?— тип, ысын күцелдән шаяртты хәҙер Закир.— Белергә ине. Кемде, ҡарындаш?

Закирҙын, юрый, ҡарышҡан һымаҡ, йәш айырмаһын һәр һүҙҙә белдертеп, «карындаш» тип алыҫлаштырып тороуына, бер тапҡыр ҙа «һылыу» тип әйтмәүенә Гөлйыһандың үтә кәйефе китеп, бер аҙ ваҡыт өндәшә алмай торҙо. Уның нәфис йөҙенә берсә ҡуйы ҡыҙыллыҡ, берсә аҡһыулыҡ бөркөлдө.

— Көтәм,— тине Закир сабырһыҙланып.— һинең яуабың минен, артабанғы яҙмышымдын, хакимы буласаҡ, һылыу!..

Гөлйыһан, тертләп киткән һымаҡ булып, егеткә күтәрелеп ҡараны. Уның яҡты, зәңгәр күҙҙәрендә ҡырҡыу саялыҡ балҡый ине.

— Закир ағай,— тине ул ишетелер-ишетелмәҫ тауыш менән.— Йә инде, үҙен, белмәйһеңме ни инде?! Мин яратам бит... Күптән... Әллә ҡасандан бирле... һине...

Уның тауышы әкренәйә барып, нәҙек кенә булып өҙөлөп туктаны. Закирҙың башы әйләнеп, тыны тағы ла нығыраҡ ҡурылып киткән һымаҡ булды. Үҙенең яратҡан ғәҙәтенсә, вайымһыҙ мыҫҡыллы тауыш менән: «Эй иҫәркәй, иҫәркәй! Булмаҫты һөйләйһең бит һин, ҡарындаш!»— тип мәрәкәләп кенә ҡотолорға теләне. Ләкин теле әйләнмәне. Ул, алыҫтан ярһып сабып килгән арғымаҡ шикелле сабырһыҙ тулап киткән йөрәген ауыҙлыҡларға тырышып, иҙән буйлап тағы ла

ҡыҙыуыраҡ йөрергә тотондо Ә йөрәк баҫылманы. Киреһенсә, тағы ла ныҒыраҡ һөйөндө, кейөндө, ҡабынды, һүрелде Бөтә булған бәхет һәм бәхетһеҙлекте бер юлы кисереп шатланды, һыҡтанды. Күңел менән ул ҡыҙҙы берсә көсле беләктәренә һалып, наҙлы, нәфис һүҙҙәр әйтеп, һөйә-үбә ҡояшлы болот тар араһында осто, берсә ҡараңғы, һалҡын баҙға йығылып төштө, берсә тағы аллы-гөллө сәскәләр эсендә наҙланды

Гөлйыһан да, сихырланған кеүек, егеткә текләп, аҙ ғына ым, кескәй генә ишара була ҡалһа, бетәһен онотоп, сабылған тал сыбыҡ шикелле, унын, көслө күкрәгенә ауасағын тойоп тирбәлеп торҙо. Егет менән ҡыҙ ғына түгел, хатта әйләнә-тирәләге барлыҡ донъя ла, ниндәйҙер мөғжизә, ғәжәп бер хәл көткәндәй, һулыш алыуҙан туктап, тынып ҡалғайны шикелле был минутта. Эй, ҡабатланмаҫ тылсымлы бер минут! Кемдәрҙе генә һин бәхетле йәки бәхетһеҙ итмәнен?! Үҙе өҙөлөп ауыҙға тешөргә торған шул тылсымлы минуттың мәңгелек йәшәү һутын татып ҡарарға ҡыйыулығы етмәү арҡаһында кемдәр генә ғүмергә ауыҙ тәменән мәхрүм ҡалма ғандыр... Йәки кемдәр генә, ер еләге тип, ҡаразирә йәки тилебәрән орлоғо ҡабып, йәндәрен ғүмерлеккә талымһыҙ яһамағандыр...

Бәхет һәм бәхетһеҙлек, һөйеү, һайөлөү хаҡында тик өмөт һеҙ генә уйларға өйрәнгән Закир ҙа ғүмерендә тәү тапҡыр осраткан бына ошо саф, керһеҙ мөхәббәт алдында әҙ генә, бер генә минутка ҡаушап, икеләнеп ҡалды Шунын. менән бөтәһе лә юкка сыкты. Ҡабатланмас бәхет ҡошо осоп китте..

— Булды, мә, ҡәйнеш, боҙҙай һалҡын айран,— тип, шат һөйләнеп Өммөгөлсөм килеп инде.— Мә, мөлдөрәмә тулы туҫтаҡ!

«Тукта әле, ни өсен һун, әле был туҫтаҡ?!»Закир, тамам аптырап, берсә ихлас көлөп торған еңгәһенә, берсә күҙҙәренә йәш тулган Гөлйыһанға ҡараны

— Үҙен. һораған һалҡын айран. Эсеп ебәр, ҡәйнеш!

Еңгәһенеы, һүҙҙәре Закирҙын. анына көскә барып етте Ул, айранлы туҫтакты ике ҡуллап тотоп, ауа-түнә урындыҡка барып ултырҙы ла йөрәген көйҙөрөп килгән өмөтһеҙ һәм үкенесле тойғоларҙы һалкын айраи меиән йыуырға кереште Гөлйыһан, ҡауырый шикелле еңел осоп, өйҙән сығып китте Закирға унын:

— Ағай, хуш!..— тигән һыктаулы тауышы инде бик алыҫтан, ҡош осоп етмәҫ ерҙән килгән кеүек ишетелде.

«Хуш, Гөлйыһан... һылыу...»

Өммөгелсөм ҡәйнешенә ғәжәпһенеп ҡараны. Был минутта Закирҙын, күҙ ҡарашы ла, уйҙары ла бында түгеллеге уға асыҡ ине. Шулай ҙа малай ғына сағынан үҙенең дыуамал башына урын таба алмаған ҡыйыу, сая ҡәйнешенен, былай ҡапыл уйсан, бойоҡ, ҡыйыуһыҙ булып китеү сәбәбенә һис тә төшөнә алманы. Закир айранды оҙаҡ ултырып, яйлап, йотомлап ҡына эсеп бөттө лә бошонҡо тауыш менән:

— Айраның өсөн рәхмәт, еңгә... Бигерәк тә Гөлйыһан өсөн...— тип уйланып торҙо. Унан ғәҙәттәге ҡыйыу, баҙыҡ ҡиәфәтенә күсеп:— Мин Хаммат ағай юлынан китәм. Ҡыҙыл Армия яғына... Актарҙы ҡыйратып, һуғышты тиҙерәк бөтөрөп ҡайтырға кәрәк. Шунһыҙ беҙгә бәхет тәтемәҫ — тип өҫтәне.

— Шулай булмаған ҡайҙа ул, ҡәйнеш! Был ҡәһәр һук-кыр актар ҡаңғыртты бит инде, ҡәйнеш, ҡацғыртты...— тине Өммөгөлсөм дә, ҡайғылы тауышҡа күсеп.— Шулар килеп сыкмаһа, ағайың да китмәҫ ине, исмаһам...

— Гөлйыһан бик матур ҡыҙ,— тип кетмәгәндә унын һүҙен бүлде Закир.— Үҙе акыллы ла күренә... Енгә, һин әйт уға, яратыуы ысын булһа, көтһөн. Мин дә уны яратам, тип әйтте тиген, йәме, ецгә...

— Әйтермен, ҡәйнеш, әйтермеи. Әйтмәгән генә ҡайҙа ти инде ул...— тип ҡыуанып китте Өммөгелсөм.— Әй-й, был һүҙенде ишеткәс, Гөлйыһанын күбәләк булып осоп төшөр, бахырҡай!..

— Көтһөн!

Закир йүгереп ейҙән сыкты. Күкрэгендә быҒаса бер ҡасан да булмаған ташҡын ярһыу, ҡаҡшамаҫ ихтыяр көсө тойоп, ҡарсыға һымаҡ ҡанатланып, ҡайтыу яғына ашыкты: «Бөгөндән, хоҙерҙән үк, ауылға актар килмәҫ элек, ат эйәрләргә лә китергә. Үҙебеҙҙец отрядты эҙләп, Белорет ягына китергә... Йән аямай һуғышырга... Арыҫлан кеүек һуғышырға... Актарҙы йәһәтерәк бөтөрөргә лә... ҡайтырга.. Гөлйыһанды юғалтмаҫ элек ҡайтырға...»

Был ҡәтги ҡарар егеттең аҙымына ышаныс, күнеленә кутәренкелек өҫтәне. Ул, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, ҡапканан атылып килеп инде, нешк алдында үҙен көтөп, шамбы ауыҙын ҡарпыш колағына хәтле йырып, татлы йылмайып торған кешене лә абайламай, аҙбар яғына йүгерҙе. Аты, эйәре, йүгәне һарайҙа әҙер ине унын: «Донъянын, ниндәй хәле юҡ...»— тип, кәрәк саҡта менеп сабырға әҙер тота ине ул атын. Ошо минутта үҙ күнелен биләп алған сая уйҙан башҡаны онотҡан Закир:

— Әссәләмәғәләйкү-үм... һаумы, Закир ҡустым!— тигән татлы тауышты ишетеп һиҫкәнеп китте, ҡаушап артҡа сигенде, биленән наган урынын ҡапшап ҡуйҙы.

«Бына һинә кәрәкһә! Ҡорал да юҡ... Ә алда... дошман!.. Эйе, был ул — Хөснөлхаҡ! һатыбал отряды сафында Илсеғол дружинасыларына ҡаршы һуғышып йөрөгән, Иҫәнбәттә булған мәкерле төнгө ябырылыуҙа күп дружинасыларҙың

башына еткән Хөснөлхаҡ теп-тере, тып-тыныс унын ҡаршы hында баҫып тора Хатта hап-hары эре тештәрен күрhәтеп йылмая ла шикелле!.. Был ни ғәләмәт?! Кейеме лә элеккесә, мәғзүмсә... Ҡара кәзәкей, хәтфә түбәтәй.. Унhыҙ ҙа оҙон үңәсен тағы ла элмәйтеп күрhәткән киң яғалы аҡ күлдәк.. Уға бында ни бар икән?!»

Закирҙың көтмәгәндә ҡаушап ҡалыуы Хеснөлхаҡҡа та быш ҡына булды. Ул, ихлас хихылдап, hынар ҡулын hуҙҙы

— Күрешәйек, ҡустым. Хәл белешәйек.. Иҫән-hау йөрөйhөңмө?— тип, ике арала бер ни булмаған кеүек итеп дуҫтарса йылы итеп өндәште

Осрашыуҙың шул хәтле көтмәгәндә булыуынан да, Хөс нәлхаҡтың, hис тә уйлап тормай, уға килеп ҡул бирергә баҙнат итеүенән дә тамам аптырап ҡалған Закирҙың күрешеүҙе кире ҡағырға көсө етмәне Ситкә ҡарап, күңелhеҙ генә яуап ҡайтарҙы:

— hаумы

— Мин hине күрергә килгәйнем әле, Закир ҡустым,— тип, hаман баяғыса алсаҡланып hөйләнде Хөснөлхаҡ.— Беҙ гә hөйләшергә, аңлашырға кәрәк ине..

Ахыр Закир hөйләшерлек хәлгә килде Ҡоро, ҡырыҫ та уыш менән.

— Ниндәй телдә?— тип hораны Мылтыҡ телендәме, пулемет телендәме, пожалуйста Мин әҙер

Хөснөлхаҡ үтә яhалма тауыш менән ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

— Хи-хи-хи-хи! Ну үҙең бер ҡатлы ла кеше икәнhен, hин, Закир ҡустым. Уйламағайным.. Етмәhә, үҙе Таиба инәй кеүек аҡыл эйәhе ҡатындың улы Хи-хи-хи!

Закир, ҡаштарын асыулы төйнәп, бер аҙ өндәшмәй тора бирҙе лә ҡул hелтәп тағы аҙбар яғына ынтылдыг

— Ярар. hау булып тор Ваҡытым тар..

Хөснелхаҡ ярғанат шикелле тауышhыҙ осоп унын юлын быуҙы:

— Тукта әле, Закир, балаланма Беләhеңме, hиңә мин бик шәп бер яңы хәбәр алып килдем бит!.. Белмәйhен, шул, хи-хи-хи!.

Закир, тағы ла нығыраҡ аптыранып, туктап ҡалды Хөснөлхаҡ, йәнәhе, тамам hыны ҡатып көлә-көлә, hейләй алмай ыҙаланған кеше булып ҡыланды ла, тирә-яҡҡа шикле ҡаранып, йәшерен тауышҡа күсте.

— Теге ҡыҙҙы әйтәм, минең, ҡарындашты.. Гөлйыhанды... Ах, иҫәүән... Хи-хи... ха-ха-ха!

Ул йәнәhе көлөүҙән hыны ҡатып, тағы бер аҙ хихылдап торҙо. Үҙе күҙҙәрен ҡыҫып ҡына Закирға ҡараны. Гөлйыhан исемен ишеткән саҡта егеттең ҡушылып үҫкән ҡалын ҡара



ҡаштарының күбәләк шикелле тертләп осоп клтеүе лә, көнгә янған оҙонса яңаҡтарына ҡыҙыу ҡан тулҡыны бәреп сығыуы ла мәғзүмдең иғтибарынан ситтә ҡалманы.

«Әhә, тимәк, егеткәй, hинең менән hөйләшергә мөмкин икән!..»— тип кинәнеп уйлап алды. hәм тағы ла яhалмараҡ илгәҙәк тауышҡа күсте.

—Беләhеңме, кйсә ҡыҙға яусы килгән... Атай ҡарт бирергә риза булған. Нимәhе, ҡыҙ еткән. Ун алты менән бара. Кейәү булаhы егет тә тегеләй-былай елғыуар түгел... Уҡымышлы... Яҡшы нәҫелдән... Иҫәнбәт ауылынан Әхмәҙулла мулланы ишеткәнең барҙыр бит? Бик ғалим, бик шөhрәтле кеше... Шунын. улы Сәрүәретдин мәғзүм...

Закир түҙмәне:

— Мине муллаларҙың хәл-әхүәле ҡыҙыҡhындырмай. Пожалуйста, hин быны, бар, ҡарсыҡтарға hөйлә,— тип ҡырт киҫеп әйтте лә, Хөснөлхаҡтың ҡолаҡ төбөнә тондорғоhо килеп йомарланған йоҙроҡтарын көскә тыйып, китергә йыйынды.— Бар, бар, үҙ юлыңда бул!

Тегеhе тағы юлға арҡыры төштө:

— Тукта, hүҙҙең айышын көт, иҫәүән!.. Айышы hиңә барып тоташа бит, аңра hарыҡ!..

Закир тамам түҙемен юғалтты, әйләнә килеп мәғзүмден. яғаhынан ҡыҫып алды.

— Нисек? Нимә тип минән көлмәксеhен,! Әйтеп ҡал, ерән төлке, бытылдауыңдың айышы нимәлә? Юҡhа...

— Ебәр. Быуаhын. бит, ҡустым!..— тип лыҡылданы хәҙер Хөснөлхаҡ.— Айышы шул — Гөлйыhан, иҫәр ҡыҙ, hине, анра hарыкты, ярата, имеш!..

Әле генә был әҙәм аҡтығының башын йәнсергә йыйынған тимер ҡыҫҡыс кеүек ҡаты ҡулдар, ҡапыл хәлhеҙләнеп, hалынып төштө. Закир, нисектер, тотош йомшарып, ауыр йөк тартып килеп туктаған эш аты hымаҡ туғарылып ҡалды. Ә Хеснөлхаҡ, шырышҡан күлдәк яғаhын рәтләп, муйынын борғолап, төҙәткеләнеп алды ла бер ни булмаған шат, ярамhаҡ тауыш менән тағы көлөргә кереште.

— Хи-хи-хи... Шул иҫәүән ҡыҙҙы, Гөлйыhанды, әйтәм әле... «Мин Закир ағайҙы ятатам, өҙөлөп ятатам,— ти бит.— Мәғзүмгә көсләп бирhәгеҙ, кәүҙәмде Оло Эйек төбөнән табырhығыҙ»,— ти. Үәт, hин уны, ә? Их, элекке заман булhа!.. Заманы икенсе шул. Атайым ҡыҙын көсләп бирергә баҙнат итмәне. Яусыға отказ hукты. Тешөндөңмө? Ғаббас мулла Әхмәҙулла мулланың яусыhын кире ҡайтарҙы! Йә, булған хәлме был?! Бына, төшендөңмө хәҙер?.. hине, аңра hарыкты, фәрештә кеүек ҡыҙ ярата!.. Хи-хи-хи! Нимә өсөн, йә? Бына бит, hин хатта әҙәм төҫлө ҡыуана ла, келә лә белмәйhең! hөм-

һөрөндө ҡойоп, ҡашыңды емереп тик тораһың. Мин.тағы һине ҡыуандырайым тип эҙләп килгән булам.

Закир, ҡаты аптырап, ни уйларға, ни әйтергә белмәй, Хөснөлхаҡ алдында тағы бер аҙ тапанып торҙо ла ҡырҡа ҡул һелтәп тағы аҙбар яғына боролдо:

— Йә, юлыңда бул, пожалуйста!

Мәғзүм был юлы эйәрмәне. Ерән мыйыҡтарын һыйпаштырып, бөйөрөнә таянып, тарбайып тороп ҡалды. Ләкин оҙаҡҡа түгел. Бер генә минутҡа. Унан үҙ маңлайына үҙе шап һуғып, тағы егет артынан эйәрҙе.

— Туҡта әле, кем, ҡустым!

Закир әллә ишетмәне, әллә ишетһә лә, ҡабат һөйләшергә теләмәй, атлауын тиҙләтте. Хөснөлхаҡ уны аҙбар ҡапҡаһын асҡан саҡта ҡыуып етте. Тап шунда Закирҙы аты укранып көтөп тора ине.

— Туҡта әле, ҡустым, мин һүҙҙең иң кәттәһен әйтмәй ҡалдырғанмын... Төшөнәһеңме?..— Ул тағы күҙҙәрен майландырып алды.— Атай ҡарт бит ҡыҙҙы һинә бирергә ҡаршы түгел!

«Миңә?! Ни өсөн миңә? Бер ни аңламайым?!— тип ҡыс-ҡырып әйтеп ебәрә яҙҙы Закир.— Мин уны һоратканым да юҡ таһа әле!..» Ләкин әйтмәне. Тик күлдәк иҙеүҙәрен елпетеп:

— Фу, ҡалай томра, шайтан алғыры!— тнп кенә ҡуйҙы.

Егеттен. шулай көтөлмәгән яңылыҡтан алйып торған сағы Хөснөлхаҡҡа тағы табыш булды. Ул ҡорбанын акға килмәҫ элек мәкер ауы менән бөтөнләй сырмап ташларга ашыкты:

Их, алмагастың алина
Былбыл ҡунган талнна.
Егете алһын, ҡыҙы барһын
Йәне һөйгән ярина,—

тип йырлайҙармы? Йырлайҙар. Бына мин дә, атайым да хәҙер шул йыр яҡлы. Төшөндөнмө, аңра һарыҡ, ҡыҙ һинеке булаcаҡ!..

— Нимә бытылдайһың һин, ерән төлкө? Кемде алдамаҡсы булаһың? Ни өсөн?!—Закир ярһыуын тыя алмай тағы мәғзүмден, яурынынан маткып тотоп алды, күҙҙәрен күрергә тырышып, төбәлеп ҡараны.— Ысынды һөйләйһеңме һин, ерән?!.

Ләкин «ерән төлкө» күҙҙәрен күрһәтмәне. Ҡарашын аяҡ остарына төшөрҙө. Меҫкенләнеп, хатта тауышын да бошонҡолатып ебәрҙе.

— Ысынлығын ысын да, тик бер шарты бар шул...

— Ниндәй шарт? Әйтә һал, нимә ҡарап тораһын?!

, — Әйтеүҙән ни файҙа? һин барыбер ул шартҡа риза булмаҫһың,— тине Хөснөлхаҡ, хәҙер тағы ла төшөнкөрәк тауышҡа күсеп. Ул Гөлйыһан исеменең егеткә нисек тәьҫир итеуен хәҙер яҡшы төшөнөп алғанлыҡтан, ашыҡмай-ҡабаланмай, алдан уйланған-һөйләшелгән планды тормошҡа ашырырға йыйына ине. Ысынлап та, мөхәббәттән тамам башы әйләнгән Закир был ауҙы күрерлектән уҙғайны. Ул һаман ярһый, сабырһыҙлана ғына барҙы.

— Әйт, шартывды әйт!— тип ныҡышты ул, хәҙер ҡабаланып.— Кеше үтәмәҫ шарт түгелдер ҙә баһа?!

— Ни эшләп үтәмәҫлек булһын?! һинен. кеүек егеттәр үтәмәҫтәй эш бармы ни был донъяла?

— Шулай булғас?! Теге әкиәттәге кеүек бер төн эсендә алтын һарай һалдырырға, Ете диңгеҙ үтеп, Ҡаф тауына етеп тере һыуы алып ҡайтырға, йәки ер аҫты батшалығынын, ҡанатлы аҡ толпарын урларға тигән шарт ҡуйырға уйламайһығыҙҙыр бит?!

Хөснөлхаҡ һүҙе нисек тә йылыраҡ, егетте өркөтмәҫтәйерәк итеп тамамлау хаҡында уй йөрөтә хәҙер.

— Йә?!—тине Закир, инде тамам сабырһыҙланып.— Пожалуйста, мин шартыңды тыңларға әҙер. Әйҙә, бынауында ултырып һөйләшәйек булмаһа... Ул саҡырылмаған ҡунаҡҡа нигеҙ буйынан урын күрһәтте. Унда барып йәнәш ултырып алғас, Хөснөлхаҡтың тауышы дуҫтарса ғына түгел, хатта туғандарса яңғырай башлаған һымаҡ булды.— Ни, ҡустым, Закир, үҙең, беләһең, донъя бик боларҙы. Кешеләр Зҡтарға, ҡыҙылдарға бүленеп ҡырылышырға тотондо...— тип иплэп кенә һүҙ башлап китте.— Хатта беҙ, Илсеғол егеттәре лә, ҡасан ғына һун, әле, шул ағымға эйәреп, берәүҙәребеҙ Һатыбал яҡлы, икенселәребеҙ Тимербайҙар яҡлы булып, яғаға-яға килешеп алдыҡ... Шулай бит?!

Закир был һүҙгә ни әйтер икән тип, Хөснөлхаҡ аҙ генә тынып торҙо. Унан тағы шул уҡ яҡшылыҡсан тауыш менән артабан һөйләп китте.

— Йә, шунан нимә сыҡты? Нимәгә ирештек? Мин һинән һорайым, ҡустым, нимә яуланыҡ?!

«Әле генә ҡыҙ... Әле инде һуғыш хаҡында бытылдай... Аңламаҫһың быны... Ни хәйлә ҡора? Нимәгә ирешмәксе була?..»— тип екһенеп уйланды Закир. Өндәшмәне.

— Белә белһәң, ҡустым, бына нимәгә ирештек: Башҡортостанды дошмандар баҫып алды. Чехтар, дутовсылар, колчактар, аҡтар... Бөтә ҡоҙғон бер майлы ҡалъяға талаша... Ә һеҙ ышанған ҡыҙылдар ҡайҙа? Ниңә улар башҡорт ерен яҡламайҙар? Беҙ тиҙҙән үҙ тыуған илебеҙҙә — илһеҙ, атабабабыҙ ҡан менән йыуып һаҡлаған төбәктә — ерһеҙ булып ҡаласаҡбыҙ! Тешөнәһеңме һин быны, Закир ҡустым?!

Закир, ғәжәпләнеп, яурынын һикертте.

— Төшөнөү менән мин ни эшләй алам?

Хөснөлхаҡ халыҡ яҙмышы өсөн йәне-йөрәгенән әсёнгән кеше ҡиәфәтенә инеп һүҙен дауам итте:

— Үлеп-ҡырылып бөтәсәк беҙҙең халыҡ! Ер-һыуынан, мал-тыуарынан мәхрүм ҡалғас, бөтмәй ҡайҙа барһын?! Етмәһә, беҙ үҙебеҙ, бай ҙа ярлы тигән булып ҡырталашабыҙ. Беҙгә, байына, ярлыһына берләшеп, бер туған булып, автономия өсөн генә көрәшергә ине лә бит башта...

— Ә унан?!

— Автономия алғас, үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булғас, күҙ күрер ине әле. Унан һуң да үҙ-ара талашҡа өлгөрер инек... Хәҙер беҙгә үҙ-ара түгел, ә башҡорт автономияһы өсөн көрәшергә кәрәк. Төшөнәһеңме һин быға, Закир?

— Ниңә һин үҙең шул автономия өсөн көрәшмәйһең һуң әле?— тине Закир, ахыр тынысланып.— Ниңә һин беҙгә, ярлы-ябағаға, ҡаршы күсәк күтәреп сығаһың?..

— Ул минең бер хатам ғына булды,— тип Хөснөлхаҡ ауыр көрһөнөп алды. Ҡаты үкенеү белдергән тауыш менән:— Хаталыҡ булды, ҡустым,— тип ҡабатланы.— Әммә мин хатамды төҙәттем, ысын, дөрөҫ юлға баҫтым. Мин хәҙер башҡорт милли автономияһының бер вәкиле, ҡаһарман башҡорт ғәскәрҙәренен, ябай бер һалдаты...— тип инде ҡабарына биреп һөйләп китте.— Әле бында, Илсеғолда, мин үтеп барышлай ғына туҡталдым... Бына шулай, ҡустым, ағайын, хәҙер аҡтар яғында ла, ҡыҙылдар яғында ла түгел, башҡорт иленең азатлығы өсөн көрәшеүсе Башҡорт хөкүмәте, башҡорт ғәскәрҙәре яғында! Беҙҙең, ҡаһарман башҡорт милләте...

— Ҡайһы арала шулай үҙгәреп киттен. әле һин? Аптырайым,— тип бүлдерҙе Закир уны.— Әле ҡасан ғына... Хәтерләйһеңме икән, батша төшөрвлгән... Ваҡытлы хөкүмәт ҡолатылған мәл... Ләкин беҙҙең яҡта иҫке тәртиптәр йәшәп ята... һин Ташһарайҙа старшина улы һатыбалға алданған һалдаттар алдында бөтөнләй икенсе төрлө һөйләгәйнең,-.- һатыбал отрядына ул саҡта мин дә барып ҡушылғайным... Бер өс көнгә...

— Нисектер иҫләмәйем...

— һин һөйләп төшөүгә Хаммат ағай килеп ингәйне... һеҙҙең күҙ алдығыҙҙа мине үҙе артынан эйәртеп алып сығып киткәйне... һалдаттарға:— һеҙҙе бында алдайҙар. Совет хөкүмәте, большевиктар ғына һеҙҙең ысын дуҫығыҙ! Дөрөҫлөк улар яғында ғына!..— тип оран һалғайны... Волость башҡарма комитеты башына оялаған кулак Феропант Хитров менән һин:

— Тотоғоҙ! Атығыҙ!—тип сәрелдәп ҡысҡырып ебәрҙегеҙ. һатыбал тороп наганына тотондо. Ә һалдаттарҙын, береһе лә большевик Хамматты тоторға ла, атырға ла ашыҡманылар... Хәтерләйһендер... ундайҙы онотоу мөмкин түгел. Үтә лә олпат килеп сыҡҡайны ул күренеш... Бер яҡта тотош бер отряд, икенсе яҡта яңғыҙ бер большевик — Хаммат... Эйе, ҡабатланмаҫ күренеш ине ул... Шунан беҙ ағайым менән аттарға атланып Илсеғол яғына ҡарай саптыҡ... Шуныһы ҡыҙыҡ — арттан ҡыуып сығырға баҙнат итеүсе лә булманы... Бына бит ул хаҡлыҡтың көсө ҡайҙа...

Көрәш башындағы ҡыйыу бер ваҡиғаны шулай ҡайтанан кисереп, онотолоп ҡалған Закирҙы Хөснөлхаҡтың:

— һин бының менән нимә әйтмәксе булаһың, ҡустым?— тигән һорауы аңға килтерҙе.

— Ә, эйе...— тип әҙ генә туҡталып торҙо ул. Унан, етди төҫ алып:— Дөрөҫ, ситкәрәк сығып киткәнмен. Мин бит һиңә мәғзүм ағай, һин ул ваҡытта бөтөнләй икенсе йыр йырлай инең, тип әйтмәксе инем бит әле. Эйе, тап шулай, ул сығышың шул көйө минен, иҫемдә. Сөнки мин ул саҡта һәр бер оратор ысынды ғына һөйләй икән, тип ышана инем. Дөрөҫөн әҙләп йөрөгәнгә, һәр ораторҙы иғтибар менән тыңлай ҙа инем...

— Иҫләмәйем, ни һөйләгәнмендер ул саҡта... Әммә хәҙер ул үткәндең ни әһәмиәте бар?— тип мығырланды Хөснөлхаҡ ғәйепһеҙ тауыш менән.— Хәҙер, бөгөн ни һөйләүем мөһим, минеңсә...

— Әһәмиәте бар,— тип киҫеп раҫланы Закир.— Бөгөн һөйләгәндең хаҡлығына ышанып өсөн уҙғанда һөйләгәндәргә сағыштырып ҡарау кәрәклегенә төшөнә башланым шикелле мин...

— Йә, улайһа, әйтеп ҡара, нимә һөйләгәйнем икән мин ул саҡта... Иҫкә төшөрөү миңә лә зыян итмәҫ,— тип килеште тегеһе. Закир уға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла:

— һин ул саҡта, ағай кеше, башҡорт тигән милләт юҡ ул,— тигән бик оло бер фекер әйткәйнең,— тип ихлас көлөп ҡуйҙы. Унан, Хөснөлхаҡтың үҙ тауышына оҡшатырға тырышып, ҡулын болғай-болғай:— Бөйөктатар милләтененҡырағай бер өлөшө генә ул беҙҙең башҡорт! Бәс, шулай булғас, нимәгә беҙгә — башҡортҡа — автономия?! Урал — Иҙел буйын берләштергән бөйөк милли республика есөн көрәшәләр аҡыллы кешеләр,— тип, һаман Хөснөлхаҡ булып һөйләп китте. һүҙенең аҙағын:— һалдаттар, башҡорт ҡәрҙәштәр, бына ниндәй оло маҡсат өсөн көрәшергә тейешбеҙ беҙ!— тигән өндәү менән бөтөрөп ҡуйҙы.— Бына шулай һөйләнең, ағай кеше. Ә хәҙер килеп бына, башҡорт милли автономияһы өсөн көрәшәйек, тиһең. Ысын булһа, мине генә түгел, бөтә халыҡты шул маҡсат өсөн көрәшкә күтәрелергә өндәмәксеһең. һине нисек аңларға рөхсәт итәһең, мәғзүм ағай?!

Хөснөлхаҡ, Закирҙың боронғоса ололап, мәғзүм ағай тип

өндашеүендә хәҙер әсе мыҫкыл яңғырауын асыҡ төшөнөп-торһа ла, һаман һалҡын ҡанлылыҡ һаҡларға тырышты. Ул Закир шикелле тимерҙе ҡыҙыулай бөгөүселәрҙән түгел, ә һиҙҙермәй генә, түҙемлек менән генә тутыктырып һындырыуҙы хуп күреүселәрҙән ине.

— Ни, ҡустым, үҙен. уйлап ҡара, мин дә бит кеше...— тип меҫкенләнеп кенә Закирға сирылып ҡараны Хөснөлхаҡ.— «Мулла — ҡатаһыҙ булмаҫ, бәндә — хатаһыҙ булмаҫ»,—• тигән бит боронғолар. Мин дә хаталанғанмын, тимәк...

— Ул фекерен, хата булған тимәксеһең?!.

— Әлбиттә, әлбиттә... Минен дә бит әле генә күҙ асыла башланы... Заманы бит ҡайһылай!.. Теге кем әле, ошо заман тыуҙырған йәш башҡорт шағиры бар бит әле... һин бит йыршиғыр яратаһың. Беләһен. һин ул шағирҙы... һай, хәтеренә эт төкөргөрө...— тип аптыранып торған кеше булды.

Закир:

— Бабичты әйтәһеңме әллә?— тип һорағас, шиғыр укыу был егет менән үҙ араһын яҡынайтыуға тагы бер сара булаһына кинәнеп:

— Эйе, эйе!— тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:— Тап үҙе. Шул Бабич әйткәндәй:

Күктэ алла,
Ерҙә иблес,
Мин — малаи, •
Береһе --«дин» тип,
Береһе «м>ш> тип
Тарткылан.
Белмәйем:
Әллә алла,
Әллә иблес
Алдалай?!—

тип аптырап йөрөргә генә ҡалды инде хәҙер. Аптыранған малай булып ҡыланды...

Хөснөлхаҡ үҙенен. уралтып-әйләндереп һаман бер нөктәгә сүкегән хәйләкәр һүҙе егеткә нисек тәьҫир иткәнен күҙ ҡырыйы менән генә күҙәтә-күҙәтә дауам итте:

— Шулай бит, ҡустым? Бер уйлаһаң, заманды уйлап та, аңлап та өлгөрөп булмай хәҙер. Шундай заманда, бынауынан, ҡараңғы төбәктән, Илсеғолдан көскә ҡуҙғалып сыҡҡан кешегә хәл-әхүәлдең айышына төшөнөү, хаталанмау мөмкин дә түгел шул...— тип тағы меҫкенләнеп алды.— Шулай бит, дөрөҫтө әйтәм бит, ҡустым, еңел түгел бит?— тип ныҡышты.

«Дөрөҫөн дөрөҫ... Тик һиңә, ерән төлкөгә, ҡарата түгел... тип екһенеп, уға төбәлеп ҡараны Закир ҙа.— Дөрөҫ, еңел түгел... Тик һинә түгел, ә минә... быҒаса тормош хаҡында



етди уй йөрөтөргә өйрәнмәгән кешегә ецел түгел... Йыллап, айлап түгел, ә сәғәтләп, минутлап үҙгәреп, ожмахҡамы, тамуҡҡамы ашҡынып осоп барған был заманға эйәреү ҙә, унда аҡты ҡаранан яҡшы айырып, үҙ урыныңды табыу ҙа еңел түгел...» тип ауыр уйға батып торҙо. Ләкин Хөснөлхаҡҡа баҙыҡ, хатта бер тиклем мыҫҡыллы тауыш менән мөрәжәғәт итте:

— Башҡорт ерен чехтар баҫып ала башлағас ҡына аңлай башланыцмы ни? Аңлау ғына түгел, аңлатыу эшенә лә тотонған күренәһең!..

Хөснөлхаҡ унын, был сәнскеле һорауын да ҡолаҡ янынан ғына уҙғарып ебәрҙе. һәм баяғыса баҫалҡы тауыш менән:

— Мин, туған, быға ана теге Иҫәнбәттәге һуйыштан һуң... Үҙ-ара һуғыштын мәғәнәһеҙлеген аңлағас... Милли азатлыҡ өсөн көрәшеү — үҙ-ара тартыштан юғары тороуына төшенгәс...— тип, өҙөп-өҙөп теҙә башлағайны ла, Закир сабырһыҙланып унын, һүҙен бүлде:

— Ул милли автономия өсөн кем менән, ҡайһы яҡ менән берләшеп көрәшер һуң башҡорт ғәскәре?

— Ҡайһы яҡ менән тип ни...— Хөснөлхаҡ әҙ генә уйланып алды ла:—Ҡайһы яҡ беҙгә автономия бирергә риза, шул яҡ менән берләшеп, әлбиттә...— тип ялтартып яуап бирҙе.— Кем беҙгә үҙ илебеҙҙә үҙебеҙгә иркенләп йәшәүгә ирек бирмәй, шуға ҡаршы...— тип тә еҫтәне.

Закир аптыранып, был ерән төлкөнөң мутлығына төшөнөргә башы етмәй, өмөтһөҙ ҡул һелтәп ҡуйҙы:

— Аңлауы ҡыйын... Минең баш етер эш түгел был, Хөснөлхаҡ ағай. һәм кәрәкмәй ҙә. Сәйәсәт минен, эш түгел ул.. Мин һалдат кеше.

— Унын, нимәһен аңламаҫҡа?—тип ғәжәп ябай бер ҡатлы тауыш менән көлөп алды Хөснөлхаҡ. Унан мәкерле ауын артабан үрҙе:— Бына, әйтәйек, ҡустым, Закир, һин үҙ халҡыңдын азат булыуын, үҙ ерендә үҙе хужа булыуын теләйһеңме?

— Үҙ халҡының азат булыуын кем теләмәҫ?— тип һорау менән яуап бирҙе Закир.— Тик бына ул азатлыҡты ысын яҡлаусылар кемдәр, ҡайҙа? Был тәңгәлдә мин ни хәҙер, һи нец менән һөйләшкәс, бөтөнләй ҙә буталып ҡалдым.

— Дөрөҫөн әйткәндә, Закир ҡустым, мин үҙем дә бик үк төшөнөп етмәйем. Сенки үҙең беләһең, мин дә был эштә яңы кеше,— тип хәйләкәр көрһенеп дауам итте Хеснөлхаҡ.— Теләһәң, әйҙә минең менән... Унда башҡорт милли ғәскәренә һинең кеүек утты-һыуҙы үткән һалдаттар бик кәрәк... Барырһың, танышырһың, оҡшамаһа, үҙ юлыңа китерһең...

— Мин һуғышҡанмын инде. Етер,— тине Закир, еҙп—••••"
Бер ҡайҙа ла китмәйем.

— Ҡуйсы, балаланма,— тине Хөснөлхаҡ, ихлас көлөп.— *' һине, әзмәүерҙәй егетте, өйҙә яткырып ҡуялармы һуң? Бына, бөгөн-иртән чехтар килеп етер, мобилизация иғлан итер. Иң яҡшыһы башҡорт ғәскәре сафында үҙ урынынды табыу инде, ҡустым...

Закир, башы тамам ауара булып, Хөснөлхаҡҡа иғтибар менән төбәп ҡараны.

— Был — мине үҙемден. Хаммат ағайыма ҡаршы һуғышҡа саҡырыуың буламы ни инде?! Хаммат ағай бит, үҙен, беләһең, большевик. Ҡыҙыл ғәскәр яғында...

— Я алла!— тип аптыраған булып, ҡулдарын йәйеп ебәрҙе Хөснөлхаҡ.— Былай ҙа аңламаҫ кеше булырһың икән. Хамматтар ҙа халыҡ өсөн көрәшә, беҙ ҙә. Йәғни Башҡорт хөкүмәте лә халыҡ өсөн, башҡорт милли автономияһы өсөн. Шулай булғас, ҡаршы була тиме ни?! Йә, үҙен. уйлап ҡара! Кем белә, бәлки, унда һин Хаммат ағайындың үҙен дә осратырһың... Әйттем дәһә, кем беҙгә автономия бирә, беҙ шул яҡлы, тип. Бәлки ҡыҙылдар бирер ул автономияны!

— Ҡыҙылдар булмай, һиңә батшаны тәхеткә ҡайтарыу өсөн һуғышҡан Дутов менән аҡ чехтар бирер тип беләһеңме әллә?

— Шулай булғас?! Ә мин нимә тим?!

Хөснөлхаҡтын, шул хәтле иғтибарлы, эскерһеҙ тауыш менән һөйләшергә тырышыуына ҡарамаҫтан, Закирҙың күңеленән ниндәйҙер бик үк таҙа булмаған эшкә ҡулы тейеүҙән ерәнеү һымаҡ ауыр тойғо китмәне. һәм ул бошонҡо ғына итеп:

— Ҡайҙа һун, ул башҡорт ғәскәре!— тип һорап ҡуйҙы.— Ҡайҙа урынлашҡан?

— Ырымбурҙа. Башҡорттарҙын. төп төйәгендә! Төшөндеңмө, ҡустым?

Закир, оҙаҡ уйланып, тынып ултырҙы. Әле бая ғына ҡәтғи ҡарар булып тыуған уйҙары хәҙер нигеҙһеҙ кеүек тойола, ул тағы шикләнә, икеләнә башланы.

Ырымбур. Был униң күңеленә үрелеп үҫкән ҡала.

«Ысынлап та, Ырымбур яғына сығып китеү ҡулай булмаҫмы? Ниндәйҙер ят яҡҡа, Белорет яғына киткәнсе... Азатлыҡ өсөн ҡайһы ерҙә һуғышһан, да бер түгелме һуң әле... Унан, үҙен, иҫәрләнеп, ташлап ҡаскан отрядҡа кире барыу ҙа әллә нисегерәк бит әле... Ҡалай ҡаршы алыуҙарын алдан әйтеү ҙә ҡыйын. Дезертирҙы кем яҡшы ҡаршылаһын?!. Их дезертир... Ахмаҡ, дезертир...»

Закирҙың икеләнеп, бошоноп ултырыуы Хөснөлхаҡты кинәндерҙе. Ул тағы, тәүге осрашҡандағы көр тауышҡа күсеп, хихылдап көлөп алды:

— Төшөнәһенме, ҡустым, Гөлйыһан һылыуҙы әйтәм, ул бит һине көтәсәк. Харап үҙ һүҙле ҡыҙ ул. Атайым уиы көсләп кейәүгә бирә алмаясаҡ. Бына, ағайым әйткәйне, тиерһен...- Төшөнәһеңме, тим, ҡустым, бына шул, бечзе көткән һылыуҙарҙы оҙаҡ тилмертмәҫ есөн, башҡорт ерен дощмандан йәһәтерәк таҙартырға кәрәк беҙгә... Йә, ҡасан китәбеҙ?

Закир бошонҡо ғына мығырланды:

— Иртәгә әйтермен...

Хөснөлхаҡ нигеҙ буйынан еңел һикереп торҙо:

— Булды. Шәмгә ут алғас, тағы килеп сығырмын әле... Китеү мәлен билдәләрбеҙ...

Ул бер ҡулын бөйөрөнә таянып, икенсе ҡулы менән һирәк ерән мыйығын һыпыра-һыпыра ҡорбанына тағы бер аҙ ҡарап торҙо ла ашыҡмайынса ҡапканан сығып китте. Ул үҙ эшенән ҡәнәғәт ине, берҙән, атаһының: «Ошо тар балаҡты нисек тә алыҫыраҡ олаҡтырырға ине... Юҡһа, анауы ахмаҡ ҡыҙ... Үҙең беләһең инде... Ғаббас мулла тоҡомона зимагор ҡанын ҡатнаштырып хур итеүе мөмкин... Бөтәһе лә мөмкин... Бөтә нәмәне көтөргә мөмкин был заманда...» тип, кинәйәләп биргән ишараһын еренә еткерҙе. «Закирҙын. башы әйләнеп ҡайтмаясаҡ хәҙер... Ҡайтһа ла, әгәр ҡыҙылдар еңһә, үҙенә урын тапмаясаҡ. Сенки... Ул аҡтар яғында булған!... Советҡа ҡаршы һуғышҡан!.. Ха-ха!..»

Хөснөлхаҡтын. майлы ҡыҫыҡ күҙҙәрендә зәһәрле осҡон баҙлап китте: «Икенсенән... икенсенән... Бына тигән һуғышсы бер һалдатты ғына булһа ла ҡыҙылдар яғына ебәрмәй тотоп ҡалыу ҙа ярайҙыр ул?!.»

Ул тыныс, олпат атларға тырышып, ашыҡмай ғына атаһының йәшел ҡапҡаһынан инеп китте: «Ҡартты ҡыуандырайым. Беҙҙең тоҡомға зимагор ҡаны ҡатнашмаясаҡ!..»

## IX

Был таңды улар күптән түгел Каширин отряды һуғышаһуғыша йырып үткән Ыуары тауында ҡаршыланылар. Башҡортостандын. көньяғынан көнсығышына табан, Урал һыртының ин бейек урындарынан үткән был боронғо күс юлы хәҙер иң йәнле һуғыш юлына әйләнде. Бына әле бөген иртә үк аҡтарҙын бик ҙур отряды ошонан көнсығышҡа үтте. Күрәһен,, Көньяҡ Урал партизандарына ҡаршы һуғышыусы частарына өҫтәлмә көс кәрәк булған. Әле лә бәләкәйерәк теркемдәр менән үтеп-һүтеп торалар. Улар инде был ерҙәрҙә үҙҙәрен, күрәһең, тамам еңеүселәр итеп иҫәпләйҙәрҙер. Ғәмһеҙ шаулашып, хатта ҡайһы саҡта йырлашып та уҙалар. Әйтерһен, һуғышҡа түгел, ә парадҡа баралар. Хатта юлдың бер яҡтан текә тау, икенсе яҡтан бик текә ҡырҡылып төшкән, шыр урманлы тәрән йырғанаҡ араһынан уҙған хәтәр

урынында ла уларҙыц күнеленә шик төшмәй һымаҡ. Ә тап шул хәтәр юл ап-асыҡ күренеп торған тау үркәсе өҫтөндә бер төркөм партизандар уларҙы һағалап яталар бөгөн.

— Их-х, «максимка» булһа, ошонан ғына һыпыртып ятырға!— тип бышылдай Шаһиморат,— позиция ҡалай шәп бит!

— Беҙҙең мылтыҡ та, патрон да һанаулы ғына... Ҙур отрядҡа ата башлау — иҫәрлек, бер генә патронды ла яҙа ятыу — енәйәт буласаҡ!—тип иҫкәртте Хаммат, ҡаты итеп.— Беҙ көрәште, берәм-һәрәм дошманды атып йығып, ҡорал йыйнауҙан башларға тейеш. Ҡорал булғас, аҙаҡ күҙ күрер...— тине. Унан, оҙаҡ ҡына тынып торғас, кире ҡаҡ-ҡыһыҙ етди тауыш менән:— Кем отрядҡа мылтыҡ менән килгән — дошманға тәүге атыуҙы шуларға ышанып тапшырам,— тип өҫтәне.

Мылтыҡлылар тау үркәсенең сусайышып үҫкән гранит таштары араһынан һәр ҡайһыһы үҙенсә йәтешле урын һайлап, юлға ҡарап боҫоп ятты.

Хаммат, ҡоралһыҙлыҡҡа кәйефһеҙләнеп, шымып ҡалған иптәштәренә, шундай уҡ ҡәтғи етди тауыш менән:

— Мылтыҡһыҙҙар, йығылған бер дошмандың ҡоралын, кейемен һалдырып алырға, атына атланырға әҙер тороғоҙ!— тип бойорҙо.— Мәйетте йырғанаҡ төбөнә ырғытырға, юлда эҙ ҡалдырмаҫҡа... Тауыш-тынһыҙ, йылдам эш итергә онотмағыҙ!— Унан, алда торған бурыстың еңел түгеллеген аңлаған һәр күңелдә уянасаҡ борсоулы тойғоно йомшартырға теләп ахыры, мут ҡына йылмайып алды.— һеләүһен кеүек... Беләһегеҙ бит һеләүһенде? Нисек аңғармаҫтан ағас башынан йомшаҡ ҡына һикереп ҡорбанына ташлана. һеҙ тау башынан шулай һикереп, ә?!.

— Була ул!

— Булдырабыҙ уны!— тиеште партизандар һәм, мылтыҡлылар менән йәнәш таш араһынан урын һайлап, юлға ҡарап яттылар. Сәғит кенә, күрәһең, ағайым үҙ мылтығын миңә бирмәҫме, тигән өмөт менән баҫҡан еренән ҡуҙғала алмай тора ине. Хаммат уны үҙ янына саҡырып алды:

— һин, мырҙам, тау үркәсенең анауы иң бейек ташына мен дә тирә-яҡты күҙәт. Берәм-һәрәм аҡтар күренһә, беҙгә йүгереп килеп хәбәр итеп тор.

Арыҡ, кәңгер кәүҙәле булғанға, ахыры, үтә ҙур күренгән йомро башлы, сығынҡы яңаҡлы, ут күҙле йәш егет ине Сәғит. Ул әле һуғышта ҡатнашмаған. Ләкин Хамматтар, Байгилделәр, Шаһимораттар йоғонтоһонда көтөүсе Сәғиткә лә үҙ бәхете өсөн көрәшергә кәрәклекте аңлай башлаған, уның үҙен генә түгел, ата-әсәһен дә аяуһыҙ иҙгән Ҡормош байҙар мәнфәғәтен яҡлаусы аҡтарға ҡарата күңелендә



ҡаты асыу, үс тойғоһо уянғам егет ине ул хәҙер. һәм тап шул ан эйәртеп алып килгәйне лә-уны бында. Тик әлегә мылтығы ғына юҡ уның. Әгәр ҡулына ҡорал килеп эләкһә, ҡалай һуғышырға белер әле ул Сәғит. Бер ҙә икеләнеп, өркөп тормаҫ та ине. Ҡормош байҙар уны аяныумы ни?! Ун нке йәшенән бирле алһыҙ-ялһыҙ уға эшләп яҡты йөҙ күрмәне, яҡшы һүҙ ишетмәне бит ул? Үҙенән арткан һөйәктек дә итлерәген этенә ырғыта бит улар! Ә һин тәләһә нисек йәшә, тик эшлә генә. Көндө лә, төндө лә белмәй, арыу-талыуҙы һиҙмәй эшлә генә. Эшләмәйһең икән — йәшомәйһен, астан, яланғаслыҡтан үләһец нкән — ул һинең эш. Кем һинең есен көйенөр?! Их, уларҙын үҙҙәрен шундай ауырлыҡта йәшәтеп ҡарарға ине хәҙер... Белһендәр нне, түҙеп ҡараһындар ине шундай тормош•ҡа!

Сәғит, шундай уйҙарға бирелеп, таш араһынан бик оҙаҡ юлды күҙәтеп ятты. Көн яман ҡыҙҙыра, гранит таштар ҡулды, битте көйҙөрөп бара, ауыҙҙа төкөрөк кибә, ирендәр ҡанһырап сатнай... Әм.мә домъянын. әсеһен-сөсөһөн етерлек татыған Сәғиткә ул нимә? Егет ҡымшанмай ҙа, юлдан күҙ ҙә алмай: «Дошман күренһен генә!»

Сәғит тигән исеме генә түгел, «Ут күҙ Сәғиҙулла!» тигән ҡушаматы ла бар бит уның һәм ул ҡушамат уға бушҡа гына тагылмаган да. Янып торған сөм-ҡара күҙле булғаны өсөн генә лә түгел. Ә көндөҙ йондоҙ күргәне өсөн! Вот! Дөрөҫ, унын көндөҙ йондоҙ күрә алыуына күптәр ышанмай: «Булмаҫ. Бушты һөйләйһең. Маҡтанаһын.!»— тиҙәр. Нимәгә маҡтанырга! Күргәс— күрә шул. Күҙҙе бына ошолай ҡыҫа бирәһен дә крпектәр араһыан ғына күккә текләйһең... Күренә! Таң Сулпаны биғерәк тә асыҡ күренә. Әлбиттә, төндәгенән тоноғораҡ, ә шулай ҙа күренә...

Сәғиҙулланың көндөҙ ҙә йондоҙҙар күреүенә ышанған бер генә кеше булды. Ул да — атаһы мәрхүм ине. Бер саҡ, тап ошондай эҫе июль көнөндә, йылҡы өйөрөн улар һыулауға ҡыуып төшөрҙөләр. Көн сикһеҙ томра Йылҡылар күгәүен тешләүенә сыҙамай арҡа буйҙарына ҡойроҡтары менән һуға-һуға, билдәренән ала һыуға инеп торалар. Сәғиҙулланың атаһы аяҡ бөкләп ултырып ҡулағаҙанда сәй ҡайната. Ә Сәғиҙулла ҡыҙыу ҡом өҫтөндә салҡан төшөп күккә текләп ята. Йондоҙ эҙләй. Ә күргәс, ҡыуанысынан ҡыҫҡырып ебәрә:

— Атай, мин көндөҙ ҙә йондоҙ күрәм! Ана, көнбайышта, офоҡҡа яҡын ғына йымылдап тора. Валлаһи-биллаһи күрәм, атай. Ә малайҙар миңә ышынмайҙар!..

Атаһы ҡабаланмай ғына сәй ҡайната, көлгә күмеп бешерелгән ҡап-ҡара тәмле сөсө икмәкте йоҡа ғына итеп телемләп ашъяулыҡҡа һала... Унан ипләп кенә, уға боролоп ҡарамай ғына:

— Кил, улым, тамаҡ ялғап алайыҡ,— ти. Сәғит бошо-ноп ҡына сәй янына килә: «Былай булғас, атаһы ла ышанмай икән?! Ә ул алдамай! Ысынды һөйләй ҙә баһа Сәғит!»

Һөйләшмәй генә берәр сынаяҡ сәй эсеп алалар. Әлморон сәскәһе, ҡарағат япрағы ҡатыштырып бешергән хуш еҫле сәй, кипкән тамаҡты еботеп, сыныҡкан тәнде иретеп ебәргәс, атаһы ауыр ғына көрһөн&п:

— Мин дә шулай осҡор күҙле инем,— тип ҡуйҙы.— Көн-дөҙ йондоҙҙар күрә торғайным... Тик бер кемгә лә быны әйт-мәй инем...— тип бошонмай ғына һөйләп китте.— Ниндәйҙер бер көтөүсе малай көндөҙ йондоҙ күргәнгә кем ышанһын? Көлөрҙәр генә. Әгәр быны етмеш йәшлек һуҡыр мулла йә бай әйтһә, ышанырҙар, уларҙы хатта әүлиәгә, пәйғәмбәргә һа-нарҙар ине. «Мөғжизә! Мөғжизә!»— тип һөрән һалырҙар, уға табына башларҙар ине... Шулай ул донъя, улым!.. Йондоҙ-ҙо көндөҙ ҙә күрә алыу түгел, уны кемден. күреүе әһәмиәтле был донъяла! һин дә, улым, был хаҡта бер кемгә лә һөйләмә. Үҙең күр ҙә, үҙен. бел дә йөрөй бир. Унан һуң, йондоҙ бит ул, улым, бик алыҫ... Уны күреүҙән ни мәғәнә?! һин, улым, ергә иғтибарлыраҡ ҡара, ерҙәге тормошто шулай осҡор күрергә тырыш...

«Ерҙәгене осҡор күрергә тырыш...»— тип ҡабатлап ҡуй-ҙы Сәғиҙулла хәҙер. Йөнө ҡырылып бөткән бәрэн бүркен күҙенә баҫыбыраҡ кейеп, ҡояшҡа ҡарап алды.— Эңер яҡын-лаша, ә улар, аҡтар, беҙ көткәнсә йөрөмәй ыҙалайҙар бит әле, яуыздар... Гел ҙур отрядтар менән генә уҙалар... Ә беҙгә бер унлағаны ғына осраһа ҡалай шәп булыр ине...»

Сәғиттең шулай уйлауы булды, әкиәттәге кеүек, алыҫта, тау аҫтында, ете һыбайлы ла күренде: тәүҙә баштары, кәүҙә-ләре, унан аттары... Эйе, былар һыбайлы ғәскәр булып сыҡты. «Мылтыҡтары, ҡылыстары бар... Ҡулдарында ҡамсы... По-гонлылар... Шундай эҫелә баштарында папаха!..— тип ашы-ғып уйлап алды Сәғит.— Йәһәтерәк барып әйтергә кәрәк!»

Ул кеҫәртке шикелле тауышһыҙ шыуып таш өҫтөнән төш-тө лә имгәкләп Хаммат янына йүгерҙе.

— Ағай, аҡтар! Ете һыбайлы! Уларҙан артта бик алыҫҡа тиклем күҙәттем, бүтән бер кем дә, бер нәмә лә күренмәй.

— Ярар, бар, тағы күҙәт,— тине Хаммат юлдан күҙен алмай ғына.— Тағы хәбәр ит!..

Сәғит ҡайтанан күҙәтеү урынына килеп ятҡанда, һыбай-лылар баяғыса ашыҡмай ғына тауға үрләй башлағайнылар: «Ҡара һин уларҙы!.. Был ерҙен, төп хужаларымы ни?! Ҡалай иркенләп йөрөйҙәр!»

Ул, аҡтарҙың икешәр-икешәр теҙелеп, аттарын матур бе-йетеп килеүҙәренә һоҡланыуын йәшерә алмай, йотлоғоп ҡарап торҙо. Иң алда яңғыҙ үҙе килгән казактың үҙенән



биғерәк ҡойоп ҡуйған кеүек ҡупшы кәүҙәле; йылтыр йөнлө ҡара күк аты уны бетөнләй сихырлағандай итте. Аттың йөрөшө, тояҡтары, ялы, ҡойроғо, ҡолаҡтары, хатта һылыу ҡыҙҙар шикелле наҙлы, ғорур ҡарашлы сөм-ҡара күҙҙәре — бөтәһе лә камиллыҡтың аҡыл етмәҫ кәүҙәләнеше булып күренде уға: «Их, шул юртаҡты ҡулға төшөрһәң ине! Ҡылыс, мылтыҡ тағып, кәпәскә, шинелгә ҡыҙыл таҫма баҫып, шул куксәйҙе бейетеп, Иҫәнбәт урамынан бер елдереп үтһәң ине!..»

Сәғит бөтә донъяны онотоп, казактың артынан башҡа бер ни күрмәй, бер ни иҫләмәй ҡатып ҡалған арала, күрәһең, аҡтар партизандар һағалап ятҡан тәңгәлгә килеп еттеләр. Бына бер саҡ, әйтерһең, ҡапыл ғәрәсәт ҡупты, мылтыҡтар таҡылдап телгә килде, уға аттар сыйнашҡан-сабышҡан, кешеләр ҡысҡырған, ыңғырашҡан тауыштар ҡушылды. Ана бер ат әсе сарылдап, ал аяҡтарын үргә күтәреп, туп-тура баҫып торҙо ла, ҡурҡыуҙанмы, ауыртыуҙанмы күҙҙәре тышҡа атылып сыҡкан, тештәре яман ыржайған һалдаты менән бер-гә, текә йырғанаҡҡа ауып төшөп юҡ булды, теге яңғыҙы алда барған аҡ казак та ҡапыл сайҡалып, ҡулдарын сәйер болғап, эйәр өҫтөнә йөҙ түбән ауып төштө, унан, аттың ялына тото-норға теләгәндәй, тырмаша-тырмаша ҡабырғаға ауҙы, ахыр бер аяғынан ғына өҙәңгегә эләгеп бауланып ҡалды... Ә теге, Сәғитте тамам сихырлаған һылыу ҡара күк ат, үрле-ҡырлы һикереп кешнәй-сыйылдай, берсә артҡа, берсә алға боролоп, бер алдын, бер артын һикертеп ҡотороноп сапты ла сапты. Аяғынан өҙәңгегә аҫылынған казак берсә юл ситендәге ҡая ташҡа, берсә йөҙ йәшәр ҡарағай ботаҡтарына бәрелә-һуғыла аттын. ҡабырғаһында бауланып йөрөй торғас, бер бөгөлдәге тарбаҡ имәнгә эләгеп ахыры, өҙәңгенән ысҡынып, ергә ауып ҡалды. Ә күк ат һаман сырылдап-ҡотороп сабыуын белде. Шул саҡ Сәғит, үҙ-үҙен онотоп, илек етеҙлеге менән таштан ташҡа һикереп, йәне-йөрәге менән шул ат артынан эйәрҙе. Ахыр, ҡырағай саялыҡ менән, тау яңғыратып:

— Килә! Боролдо!— тип ҡысҡырып ебәрҙе лә тәгәрмәс шикелле тәгәрләп тау аҫтына атылды. Был ваҡытта, ысынлап та, күк ат, күрәһең, һуғыш майҙанында хужаһын ташлап ҡал-дырыуҙы яҡшыһынмай, кире боролоп саба ине.

Уҫал аттарҙы нисек тоторға ла, йән-фарман сабып барған атҡа нисек һикереп менергә лә биш-алты йәштән алып ат өҫтөнән төшмәгән егетте өйрәтеп тораһы юҡ ине. Ул, әйтер-һең, ҡая башынан туп-тург ат өҫтөнә һикерҙе. Шулай күҙ асып йомған арала булды был хәл. Сәғит ҡотороноп сабып барған аттың ялына тотоноп, арҡаһына менеп ултырҙы.

— Тыпру, хайуан!

Аҡыллы ат ҡаты ҡулды тиҙ тойоусан була тиҙәр. Еғет-

тең ялдан йүгәнгә тотоноп, атты тау текәһенә тартыуы булды, күксәйҙең ҡотороноуы ла баҫылды. Улар бәреләһуғыла баш урынында ҡанлы ит кенә ҡалған мәйет янында туктанылар. Сәғит, аттың теҙгенен ҡулдан ебәрмәй генә, мәйетте юл ситенә,' үлән өҫтөнә сығарып һалды. Әғүҙе-бисмилла укып уға бер аҙ ҡарап торҙо. Унан тере кешегә өндәшкәндәй итеп:

— һинә хәҙер барыбер ҡорал кәрәкмәй,— тине.— Килешенә ҡарағанда, йәш кенә, малай ғына күренәһең. Бер байҙың ҡәҙерле улыһыңдыр әле. Өйөңдә әсәндең тәмле-татлы һыйын ашап тик кенә ятһаң булмай инеме һиңә?— тип асыуһыҙ ғына шелтәләй-шелтәләй казактын. мылтығын, ҡылысын, наганын тағып алды.— Бына шулай, һин үҙең, советҡа ҡаршы булһаң да, атың,, ҡоралың хәҙер советҡа хеҙмәт итер... Шулай булғас, һинең халыҡ алдындағы гонаһың да бер ҡәҙәр кәмер...

Сәғиҙулла, атыш туктап, ҡапыл үтә тын, буш булып ҡалған тирә-яҡҡа күҙ ташлап, тертләп китте:

«Тукта. мин ҡайҙа торам һуң әле? Беҙҙекеләр ҡайҙа? Ни өсөн мин бер ни ҙә күрмәйем... Ишетмәйем... Үлек менән сафсата һатып маташам... Әллә был күксәй төрлө һүрәткә инә торған дейеү ҡыҙы булдымы? Шуға ҡанатлы аҡбуҙ ат булып күренәме әллә минең күҙемә?! Мине шул арбап посымдан тартып төшөрҙөмө икән әллә... Мин, ҡая башынан тирә-яҡты ҡыйғыр күҙәтеп, дошман күренһә, хәбәр итеп торорға тейешле кеше, ни өсөн бында?!»

Сәғиҙулла илай яҙып. тағы бер әғүҙе-бисмилла укып, тирә-яҡҡа төкөрөнөп алды. Унан сая һикереп атҡа атланды:

«Йә, ярай, дейеү ҡыҙы булһаң — бул. Тик беҙҙекеләр яғына ел!» Шул саҡ уның ҡолағына сабышып килгән күмәк ат тояғы тауышы ишетелде. Арттан, ауыл яғындағы бөгөлдән килә ине был тауыш. «Беҙҙекеләрме икән? Шулай ук мин уларҙан күп алға һикерҙемме икән ни? Аҡтар булһа ни эшләрмен?..»

Сәғит ашығып мылтығын алды, затворын асып ҡараны, йөҙө яҡтырып китте:

— Патрондары етерлек! Тик уңайлы позиция ғына һайлап өлгөрөргә кәрәк!

Ул ялт-йолт ҡаранып йәтешле урын эҙләгән арала, саң туҙҙырып елеп килгән һыбайлылар ҙа күренде. «Ут күҙ» Сәғиҙуллаға уларҙын. кемлеген шунда ук белеп алыуы бер ни ҙә түгел ине: «Үҙебеҙҙекеләр. Иң алда Хаммат ағай!— тип ҡыуанып китте ул.— Бөтәһе лә һыбайлы!.. Бөтәһенең арҡаһында мылтыҡ!.. Былай булғас, теге аҡтарҙың барлыҡ аты, ҡоралы беҙгә күскән!

— һай, егетең, күрәһегеҙме, нисек ҡоралланып алған!— тип, шаян йылмайып ҡараны уға Хаммат.— Тап офицерҙың үҙенең атын, ҡоралын эләктергәнһең бит, мырҙа! Мөлодец! Шәп һалдат булмаҡсыһың!

Сәғиҙулла, эре, тығыҙ тештәрен күрһәтеп, ҡыйыуһыҙ ғына йылмайҙы.

— Офицер булдымы икән ни, ағай?

— Шулай булмайынса! Ана, погонын ҡара! Йә, уның кейемен дә systereп кейеп ебәр әле!

Сәғиҙулла уңайһыҙланып күҙен ситкә борҙо:

— Ҡуй әле, ағай... Ул бит яланғас ҡала...

Партизандар көлөп ебәрҙеләр.

— Вот, һиңә маҡтаулы һалдат... Мәйеттән ҡурҡа!

— Ул бит әле һеҙҙең кеүек һуғыш утын күреп ҡатып өлгөрмәгән,— тине Хаммат, етди тауышҡа күсеп.— Өйрәнер. Бына тигән батыр һуғышсы булыр,— тип өҫтәне. Унан ҡарашын үҙе менән йәнәш торған Шаһиморатҡа күсерҙе.

— һин уның кейемен ал әле. Беҙгә погонлы офицер кейеме кәрәк булыуы бар...— тине, уйланып.— Йәһәтерәк бул. Бында оло юлда оҙаҡ ҡалырға ярамай,— тип иҫкәртте.— Төнгә үҙебеҙҙең төбәккә ҡайтып өлгөрөргә кәрәк. Артабан ни эшләргә, унда һөйләшербеҙ.

Хөснөлхаҡ киткәс, Закир башын тотоп нигеҙ буйында бик оҙаҡ уйланып ултырҙы:

«Был нисек булды һуң әле?.. Ҡалай килеп сыҡты һун. әле был?.. Тукта, нимә тине әле ул: Гөлйыһан һине ярата, тиме? Ҡайҙан белә һалып алған, ерән төлкө?! Ницә уларға әйтергә? Их-х, аҡылһыҙ ҡыҙ... Инде нимә эшләргә?! Атайым ҡаршы түгел, тип тә әйтте түгелме һуң әле ул? Эйе, тап шулай тине. Нисек ҡаршы түгел, ни өсөн ҡаршы түгел?! Ғәжәп... хәйер, кем белә, заман менән бергә, бәлки, ул да үҙгәрәлер?.. Ғаббас мулла тоҡомо ла, бәлки, беҙҙен. кеүек ярлы-ялпы менән килешеп йәшәүҙе артыҡ күрә башлағандыр?.. Атай ҡарт та риза... Тик шарты бар...— тип ыҡ-мыҡ итте бит әле ул!..— Еңеп ҡайтҡас...— тине.— Тукта, кемгә ҡаршы һуғышып, кемде еңеп ҡайтҡас?!»

Закир ҡара тиргә төшөп һикереп торҙо. һаташҡан кеше шикелле тирә-яҡҡа ялт-йолт ҡаранып алды. Ут дүңгәләге эсендә ҡалған кеҫәртке шикелле ҡайҙа ырғып, ҡайҙа йүгереп ҡотолорға урын тапмай ҡатып ҡалды. Шул саҡ аласыҡ ишегенән Байрас менән Таиба әбейҙең үҙенә ғәжәпһенеп тә, шелтәләп тә ҡарап тороуҙарын күреп, асыуланып ҡашын төйҙө:

— Ниңә һеҙ унда шымсы кеүек йәшенеп тыңлап тораһығыҙ?

Таиба әбей бошоноп ҡына улының янына килде, ҙур, эҫе устары менән иркәләп, арҡаһынан һыйпап алды.

— Тынлау өсөн түгел, анау һөмһөҙҙө күрмәç-күренмәç өсөн аласыҡтан сыҡмай торҙоҡ,— тип, улының тынысһыҙ ҡаҡса ҡуңыр йөҙөнә, үтә сабырһыҙ емелдәгән сөм-ҡара теремек күҙҙәренә иғтибар менән текләп ҡараны: «Малай сағында, берәй ярамаған эш эшләр булһа, ошондай төçкә инә торғайны... Ата бесәй кеүек һырт йөнөн торғоҙоп, сәкәләшергә әҙер булып...» — тип, эстән генә йылмайып ҡуйҙы. Шулай ҙа хафаланып:

— Нимә еçкәнеп йөрөй ул мәғзүм? Уға бында нимә бар?— тип һорамай булдыра алманы. Унан:— Аллаға шөкөр, уландарым бығаса ундай йылғырбайҙарға юлдаш булманылар... Шуға ҡыуанам... Юҡһа, уларҙың бит теленең осонда бал, тел төбөндә ағыу... Ҡайҙа алып барып, башыңды аҙҙырып, ҡасан, ҡайһы ерҙә сағып йәнеңде алырын белеп буламы ни уларҙың... Беҙгә, ябай кешегә, ундай мең ҡатлыларҙан алыçторған хәйерле...— тип, ситләтеп-уратып, үҙенең хәҙерге мөнәсәбәтен дә белдереп ҡуйҙы. Байрас та был ваҡытта, ағаһына тишерҙәй булып ҡарап, өләсәһе янында тора, ул да үҙенсә ошо минутта үҙен ҡаты бошондорған бер һорауға яуап эҙләй ине: «Хәҙер минә нимә эшләргә? Атайым бит теге тирәк төбөнә күмелгән мылтыҡты Закир ағайыңа бирерһең, тигәйне. Әле тап ошо хаҡта уға әйтергә тип йүгереп килгәйнем. Чехтар етеп килә, Закир ағайым өйҙә ятып ҡалмаç, ҡыҙылдар яғына китер, уға ҡорал кәрәк булыр, ти бит әле... Ә ул, бахтиһәң, бынауы оҙон үңәс Хөснөлхаҡ менән һөйләшеп тора! Хатта уға эйәреп ҡайҙалыр китергә риза булды шикелле. Былай булғас, мылтыҡты уға бирергә яраймы ни? Ағай кеше булһа ла, ярамай шул. Кем байҙарға ҡаршы көрәшә — мылтыҡ шунын, ҡулында булырға тейеш. Ә Закир ағайым... Етмәһә, үҙе ҡалай һылыу егет бит әле...— Байрас, бер ҡулын кеçәһенә тығып, икенсеһе менән ҡуйы ҡуңыр сәстәрен һыйпай-һыйпай, яуапһыҙ торған ағаһына хатта асыу менән ҡарай башланы.— Ниндәй матур һын... Төҙ, оҙон боттарға килешеп торған тар ҡара салбар, яғаһын ысҡындырып, еңдәрен терһәккә хәтле төрөп ҡуйылған килешле күк сатин күлдәк, тарамыштары ишелеп торған көслө, йөнтәç беләктәр... ҡоростан ҡойоп эшләнгән кеүек, ҡаҡса, ҡеүәтле йөҙ... Тик был матурлыҡ нимәгә? «Ҡыҙҙы — матурлыҡ, ирҙе — батырлыҡ биҙәй», ти бит өләсәйем. Закир ағайға ана шул батырлыҡ етмәй, күрәһең... Унын, өсөн кем нимә әйтһә, шул дерөç, күрәһең... һай, аумаҡай!..

Ә бит ул, Байрас, Хеснөлхаҡтың волоста аҡтар штабында йөрөгәнен белә... Алеша күргән уны, аҡтарҙың волоста нимә эшләүен белер өсөн барған саҡта... Ошо хаҡта әйтергәме икән әллә хәҙер уға...»



Закир, ҡапыл ҡысҡырып көлөп, мырҙаһыныщ яурынынан матҡып тотоп алып, үҙенә тартты.

— һай, ҡарағош! Ниңә һин ағайыңа шулай, йоторҙай булып, төбәлеп ҡалдың?! Белә белһән, мырҙам, кешегә улай текләп ҡарау әҙәпһеҙлек була! Аңланыңмы?

— Аңлайым да ул...— тине Байрас бошонҡо ғына...— Әммә, ағай, исмаһам, һинең күҙенә текләп булһа ла, еләсәйемде борсоған һорауға яуап алғы килә лә... Унан үҙемдең дә һинен, менән һөйләшәһе һүҙем бар... Шуға килгәйнем...

— Ҡара һин уны!—тип, тағы ла ҡысҡырыбыраҡ көлдө Закир, малайҙың яурынынан тағы ла матҡыбыраҡ тотоп. Күҙенә яҡын уҡ килеп төбәлеп ҡараны. Унан:— Күпте белһәң — тиҙ ҡартайырһың, мырҙам!— тине лә, уны ҡапыл үҙенән ситкә этәреп, күҙен йәшерергә ашыҡҡандай, йәһәтләп аҙбар яғына китеп барҙы.

«Бына, аңла һин уны...— тип, баш сайҡап торҙо Таиба әбей, улының артынан ҡарап.— Кисәнән бирле аты кәртәлә бәйле тора... Хамматым булһа:— Улым, ниңә атынды ҡырға ебәрмәйһең? Ҡайҙа китергә йыйынаһың?— тип һорар инен. дә белер инен... Йәнен. тыныр ине... Эй алла, Закирҙан баҙнат итеп һорай һалып та булмай шул... һорағас та, әллә яуап ала алаһың, әллә юҡ бит әле... Эй улым, улым... Шулай уҡ һөйләшергә, кәңәшергә лә яраҡһыҙ кеше булып ҡалдымы ни инде әсәйең?! Бейек үçтең шул... Әсәй тәп-тәпәш булып ҡалды...» тип әсенеүле-үпкәле уйҙарға бирелеп алды. Шулай ҙа, әсәгә генә хас ғәфү итеүсәнлек менән:

— Закир, улым, тиҙҙән аш өлгөрә. һин яратҡан, ҡаҡлаған ҡаҙ бешә. Өйҙә тор,— тип, яратып һәм борсолоп өндәшә һалды.— Хисбулла ағайындар ҙа оҙаҡламай ҡайтырҙар. Ҡарат төбәгендәге бесәнде бөгөн кәбәнгә һалып бөтөргә тейештәр ине... Ҡарағураға төшөр алдынан ҡайтып, мунса инеп, ял итеп алырҙар, тип уйлайым...— тип уфтанып алды.— Ана бит, тирә-яҡҡа ниндәй тәмле аш еçе таралған... Бигерәк тә һәйбәт итеп ҡаҡлағайным шул иттәрҙе быйыл... Уландарым йәйге эш ваҡытында кинәнеп ашаһын тигәйнем... Әллә һеҙгә ашарға насип була, әллә юҡ инде тип көйөнәм хәҙер...— тип, үҙенә хас булмағанса оҙаҡ, күп итеп һөйләнә-һөйләнә, аласыҡ яғына китте. Ә Байрас, Закир ағаһы үҙен эшкинмәгән малайға иçәпләгәне есөн дә, уны яңылыш юлға баçыуҙан ҡурсап ҡалырға үҙенең көсө етмәүе өсөн ғәрләнеү, сәмләнеүҙең сигенә етеп, урамға атылып сыҡты ла, өйгә ҡайтып та тормаçтан, Ивановкаға, дуçы Алеша янына йүгерҙе:

«Кем буржуйҙарға ҡаршы һуғыша — мылтыҡты шуға бир,— тине бит атайым.— Алеша менән кәңәшергә кәрәк:

**кемгә** бирәбеҙ?Туған, тип Хөенөлхаҡ яҡлы кешегә биреп булмай ҙа баһа уны!..»

Алеша яңы ғына ҡаҙып алған картуфтарҙы зыңғырлап торған тишек күнәккә һалып маташа ине.

— Картуф әле сәскәһен дә ҡоймаған. Ниңә ҡаҙаһың? һулытаһын, бит!

Байрастын, иҫәнлек-һаулыҡ та һорашып тормаҫтан, унын шәхси эшенә тығылып маташҡан был һүҙе Алешаға оҡшап етмәне. «Картуфты өлгөрөп етер-етмәҫтән ҡаҙып ашай башлауҙың һәйбәт түгеллеген Алеша белмәйме ни? Әммә ләкин өйөндә бер тәғәм аҙыҡ булмаһа, картуфтын өлгөргәнен көтөп торор әмәлен. ҡалмаһа?!»

Шулай ҙа Алеша дуҫына был үпкәле уйын әйтмәне. Ни өсөндөр, аҡланған тауыш менән:

— Мин бит уны һабағы менән өҙөп алмайым,— тип кенә ҡуйҙы.— Бына ошолай ҡулымды тығып, эреһен генә юллап алам. Ваҡтары артабан үҫә. һулымай ул. Төбөн соҡоп йомшартҡылагас, тағы ла шәбәйеп кенә китә. Ә һин...

Өс саҡрым араны тотош тигәндәй йүгереп үткән Байрас, ҡапыл быуындары һығылып киткәндәй булып, түтәл янына ултырҙы. Ҡулын күнәккә тығып, ер еҫе анҡып торған дымлы картуфтарҙы сабырһыҙланып, берәм-берәм тотҡолап ҡараны. К-рце арҡаһы шикелле шырт, үтә тығыҙ сәстәре араһынан шыбаҡшып аҡкан тирҙәр унын. ҡарағусҡыл ҡыҙыл йөҙөнә, борсоулы ҡарашлы асыҡ яҡты күҙҙәренә ниндәйҙер уйсанлыҡ, өлкәнлек өҫтәй һымаҡ ине. Эйе, һүҙе, хәрәкәте картуфҡа бәйле булһа ла, уйы тыныҫыҙ һәм алыҫ ине унын.

— Нимә бар?— тип, төбәп ҡараны Алеша.— Берәй хәл булдымы?

— Атайым ҡыҙылдарға ҡушылырға тип китеп барҙы,— тип бышылдап ҡына хәбәр итте Байрас.

— Беләм,— тине Алеша.— Ул бында килеп китте. Беҙҙен ауылдан да бер нисә кеше уға ҡушылды.

— Ҡайҙа табан киттеләр икән? Хәҙер бөтә ерҙә аҡтар тиҙәр бит.

— Улар киткәндә, Стәрле, Өфө беҙҙекеләр ҡулында, тиҙәр ине әле. Шул яҡҡа юл алдылар, буғай.

Малайҙар, утлы көл кеүек ҡыҙған тупраҡ өҫтөнә аяҡ бөкләп ултырып, бер-береһенә ҡарамай ғына, һүрәнке тауыш менән оҙаҡ ҡына серләштеләр. Ахыр Байрас түҙмәне, йөрәгендә һаҡлаған ауыр үпкәһен әйтеп һалды:

— Ә мине алмаған булды...

— Кем?

— Атайым.

— Мине лә алмаиы. Әсәйеңде кемгә ташлап ҡалдыраһың?— тине.

— Безгә ҡул ҡаушырып тик ятырғамы инде? Тирә-яҡта аҡтар, байҙар ҡоторона.

— Ни эшләй алабыҙ һуң?

Алешаның был һорауы Байрастың бетәү яраһын асып тоҙ һипкәндәй булды. Ул хатта үҙенең ҡайҙа, ниндәй ваҡытта һөйләшеп ултырыуын да онотҡандай:

— Ни эшләй алабыҙ, ни эшләй алабыҙ!— тип йәне көйөп, ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.— Күрәшә алабыҙ, вот! Беҙ бәләкәсме ни?

Алеша тупраҡлы бармаҡтары менән тирле битен һыпырғылап, уйланып ултырҙы. Унан мыҫҡыллы тауыш менән:

— Ҡоро ҡул менәнме?— тип һораны.

Байрастың киң асылған күҙҙәрендә сая ут баҙлап китте:

— Мылтыҡ бар! Беләһенме, мылтыҡ бар, тим!

Хәҙер Алешаның яҙғы күк кеүек тыныс зәңгәр күҙҙәре лә йондоҙ булып тоҡанды:

— Ҡайҙа, ниндәй мылтыҡ? Ысын мылтыҡмы?

— һалдат мылтығы!— тине Байрас, һаман ярһый барып.— Штыгы ла бар, вот!

— Ә һин унан ата беләһеңме?

— Белмәйенсә... Атайым һуғыштан тап шундай мылтыҡ алып ҡайтҡайны бит... Атырға өйрәткәйне... Мин бит былай ҙа, һунар мылтығынан да мәргән атам, беләһең... Иҫеңдәме, былтыр көҙ, мин һунарҙан ҡайтып ингәндә, беҙҙә ултыра инен,... Нисегерәк ҡайтып ингәйнем, ә?— Байрас ғорур йыл-майып дуҫына ҡараны.— Ысын һунарсыларҙан кәмме ни, ә?

Алеша ла, кинәнеп:

— Эйе,— тип ҡуйҙы.— Өс урғуяны!

— Ә һуң сүрәгәй өйрәктәр, ала-сыбар һуна өйрәктәр атып алғанды күргәнен. юкмы ни?

— Бар.

— Шулай булғас... Ниңә минең ата белеүгә шикләнеп ҡарайһың?

Алеша инде өлкәндәрсә баҫалҡы ғына:

— Шикләнмәйем дә ул...— тип ҡуйҙы.— Шулай ҙа, һуғыш — һунар түгел бит тимәксемен генә...

— Минеңсә, һуғышта кем мәргән ата, кемден, ҡулы ҡалтырамай — шул еңә,— тип ҡырт киҫте Байрас.— Мылтыҡ була тороп, икебеҙ ҙә мәргән ата белә тороп...— тип, тотлоға-ярһый, уйынын. хаҡлығын раҫларға кереште.

— Йә, йә, әкренерәк...— тип, үтә һаҡ бышылдап, Алеша унын һүҙен бүлде.— Йә, ҡайҙа ул мылтыҡ? Ҡасан, нисек уны эшкә егәбеҙ?

— Тап шул хаҡта һөйләшергә килдем дә бит...
— Йә, һөйләшәйек һуң...
Дуҫтар бер-береһенә тағы ла яҡыныраҡ һыйынып ултырҙылар. һөйләшеү ымға, бышылдауға күсте.

Сәрбиямал ғүмерлек ҡыҫыр ҡатын булды. Байгилде ағайҙар ғаиләһендә Емештән һуң бала булманы. Шуға ахыры Емеш йәш баланы яратыу, иркәләү, уға ҡарап ҡыуаныу, кинәнеүҙең ни икәнен дә белмәй үҫте. Ул бесәй балаһын, кәзә бәрәсен, ҡаҙ, тауыҡ себешен үлеп ярата, ҡолонсаҡ күрһә, яратыу-һоҡланыуҙан телһеҙ ҡала, уларҙың һәр бер хәрәкәте, ҡыланышы, уйыны, ашауы, йоҡлауы бөтәһе-бөтәһе уға иҫ киткес таныш һәм яҡын күренә, ә бына кеше балаһы унда екһенеү, эс бошоу тойғоһонан башҡа бер ниҙә уята алмай ине. Элегерәк, Шәүрәнең мырҙаһы Хәсән атламаған саҡта әле, Емеш уға ҡарап:

«Йә, нимәгә кәрәк инде был күпкән эс! Аран ауыҙ!»— тип эстән генә әрләп ҡуя. «Кеше үҙенә быңдай ыҙаны нинә тыуҙыра икән. Быңдай илаҡ, имгәк йәндәрҙән башҡа ла йәшәү еңел түгел дә баһа!»— тип аптырай. Хатта: «Былай асығa-илай ыҙаланып, кеше аҙаплап йәшәгәнсә, үлеп кенә ҡуйһасы был йәш бала тигән нәмә! Ожмах ҡошо ғына булып йәшәр ине бит,— тип тә уйлап ҡуя.— Юҡһа бит шулай ыҙаланаыҙалай үҫер ҙә, бер рәхәт күрмәй йәшәр, етмәһә, әллә ниндәй гонаһтар эшләп үлер ҙә теге донъяла ла тамуҡҡа төшөр... Ана бит, ҡалай ямаҡ! Етмәһә, апаһының елкәһенә атланып ала ла, ашарға таптырып, илай-ҡысҡыра манҡаһына буялып бөтә. Йә, ул булмаһа, Шәүрә менән беҙ икәү ҡайҙарҙа ғына йүгереп уйнамаҫ инек...»— тип ауыр көрһөнөп ҡуя... Эйе, шундай ине Емеш бәләкәс саҡта... Унынса, донъяла иң йәмһеҙ, иң кәрәкһеҙ йән эйәһе ул — кеше балаһы ине... Ә хәҙер?!. Хәҙер уның үҙенең дә мырҙаһы бар — һөйөндөк. Хәҙер ул үҙе лә тап ул саҡтағы Хәсән кеүек күпкән ҡорһаҡты йөкмәп йөрөй... Тик унын, мырҙаһы ҙурыраҡ та матурыраҡ... Ләкин барыбер был йөк өсөн уның күңеле ҡыуанып тормай. Бына бөгөн дә улар иртәнсәктән бирле урамда, ҡойма янында бошоноп ултыралар. Аҫта күпереп яткан йомшаҡ ҡаҙ үләне, түбәлә сағыу ҡояш... Барыбер эс боша.

Бесәндән кисә кисләтеп кенә ҡайттылар, берәй көн ял итергә булдылар. Бибеш тандан тороп мунса яҡты, хәҙер аласыҡта икмәк бешерә. Әйләнә-тирәгә яңы бешкән икмәк, ҡомалаҡ еҫе тарала. Был тәмле еҫ, хатта урамға сығып, Емештең танауын да ҡытыҡлай, ауыҙына текерөк йыйылдыра. ӘммәЕмеш уға иғтибар итмәй, моңайып урам буйына, әхирәте Шәүрәләр яғына ҡарай: «Әй-й, йүгереп китһән, ине 1лә, барьт етһәк ине... Шәүрә менән уйнай-көлә һыу инә төшһәң ине... Көнә ҡалай эҫе бит эле...»

һөйөндөк, йәш ярымлыҡ ҡына булһа ла, харап зиһенле малай. Ауыҙы тулы аҡ үткер тештәрен күрһәтеп, әленән-әле апаһына матур итеп яратып йылмайып ҡарай, күпереп торған йомшаҡ ҡына ҡулдары менән унның сәсенән, танауынан гарта, күгәрсен кеүек гөрләй-тәтелдәй уның иғтибарын яутарға тырыша. Күрәһең, был өндәшмәҫ кескәй ҡыҙ менән уға рәхәт түгел — малай, әсе-әсе ҡысҡырып, илаштырып та ала. Ә Емеш?.. Дөрөҫ, ул хәҙер һөйөндөккә ҡасандыр Хәсәнгдән екһенгән кеүек ҡырыҫланып уйланмай. Киреһенсә, хәҙер ул йәш баланы әҙерәк ярата ла, йәлләй ҙә башлаған. Уның матур, ирмәк яҡтарын да күргеләй ул хәҙер. Шулай ҙа, күп ваҡыт үҙе бала янында булһа ла, күҙе лә, күңеле лә ситтә була шул. Әле лә ул бына, йәшел үлән өҫтөнә түшәлеп, бик оҙаҡ Оло Эйек яғынан күҙен алмай ятты: «Бөгөн нимә булған һуң унда? Бөтәһе лә йылға яғына йүгерәсе!..» тип аптырап уйланды. Ахыр сабыры етмәй һикереп торҙо:— Әйҙә, мыртый, беҙ ҙә барайыҡ әле!..

— Тү-тү-түәй? Тү-әй-й,— тип ҡыуанып бытылданы һөйөндөк.— Тәүәй балабыҙ!

— Эйе тү-әй барабыҙ, тү-әй!—тине Емеш тә. Мырҙаһының тығыҙ, йомро боттарынан ҡыҫып күтәреп алды.— Йүгерҙек!

Ләкин тос кәүҙәле, мыҡты баланы күтәреп йүгереү еңел түгел. Ҡыҙҙың арыҡ ҡына кескәй ҡулдары бик тиҙ талды, ҡуйы сәс араларынан шыбыҡшып тир аҡты. Оҙаҡламай улар ҙа яр башына килеп еттеләр. Йылға буйы, ысынлап та, бөгөн, ҡыуғын ваҡытындағы кеүек, йәнле, яр башы тулы халыҡ ине. Киң яғалы, оҙон итәкле аҡ күлдәк, аҡ ыштан өҫтөнә биш билле оҙон ҡара кәзәкей кейгән, ялан аяҡтарына калуш йәки ҡата эләктергән, түбәләренә тиргә ҡатҡан, теҫһеҙ түбәтәй ултыртҡан үтә арыҡ, йонсоу бер тиҫтер ҡарттар, кәзә паҡалдарын кәшкәйтеп, йылғаға ҡарап торалар. Тарамыш ҡулдарын берсә ҡаш өҫтөнә ҡуйып, берсә артҡа ҡаушырып, әленән-әле әкрен генә һөйләнеп ҡуялар. Берәүҙәре:

— һай афәт! һай һәләкәт!— тип шомлана. Икенселәре:

— һаҡ булығыҙ, уландар. Упкын ер был. Үҙегеҙ убылып ҡалмағыҙ!— тип иҫкәртә. Өсөнсөләре шунда уҡ үткәндә булған хәлдәргә күсеп китә:

— Эйе, анауы ярман һуғышы башланған йылды шулай бер егет, һыуға баткан ҡыҙҙы ҡотҡарам тип, үҙе лә тап ошонда үлеп ҡалды бит... Йә, кем ине әле уның исеме, һай, хәтерендә эт ашағыры...

— Ә-ә, теге тимерсе малайын әйтәһеңме? Булғайны ундай хәл... һәйбәт малай ине... Тыңлаусан... Эшсән... ҡыйыу егет...

һин әйткән ҡыҙ шул еғет-ееен үҙ-үҙенГупҡынға-ташлаған... Шул егетте яратҡан. Ә атаһы уны ҡарт байға бирергә булған.....Кемгә икәнен үҙегеҙ беләһегеҙ инде...

— Нисек белмәҫкә... Бына шулай... Аҙаҡ уларҙы таптылар... Упкын төбөндә, теп-тере кеүек, ҡосаҡлашып ҡына сүкәйеп ултыралар, ти... Үәт ниндәй хәл булғайны унда...

— Эйе, дөп-дөрөҫ... Шулай булды... Мәкерле урын был... Күптәрҙе йотҡан сөмөкәй ул...

Ҡарттарҙан саҡ ҡына арыраҡ, текә ярҙан аяҡ һалындырып ҡарсыҡтар ултыра. Төрлө-төрлө ебәк таҫмалар менән иҙеүен, итәктәрен биҙәп тегелгән кин, оҙон күлдәк, биш билле ҡара кәзәкей кейеп, баштарына аҡ таҫтар урап алған был ҡарсыҡтар ҙа, тап ҡарттар шикелле үк, сабыр, баҫалҡы һәм әкрен генә тауыш менән өҙөп-өҙөп, бошоноп ҡына һөйләшкеләп алалар. Әленән-әле аллаға мөрәжәғәт итәләр, ярҙам һәм яҡшылыҡ теләп ялбаралар:

— Я алла! Ҡөҙрәтле, шәфҡәтле алла! Йыһанда берҙән-бер, сикһеҙ-тиңһеҙ, үлемһеҙ аллаһы тәғәлә... Бәндәләреңә афәт килтермә! Бәлә-ҡазанан һаҡла!

— Сабырлыҡ бир, раббым, Бибекәйгә сабырлыҡ!.. Шәфҡәтеңдән, ярҙамыңдан мәхрүм итмә бисара етемде!..

Балыҡ күҙ Бибекәй әбей ҙә улар янында ултыра. Уның ҡулында йәш бала кеүек биләнгән ниндәйҙер сепрәк төйөнсөк. Шул төйөнсөктө ул күкрәгеиә ҡыҫа ла бала кеүек итеп бәүелтә лә бәүелтә. Ә уның ҡасандыр бик матур, яҡты булған ҙур түнәрәк күҙҙәренән бер өҙлөкһөҙ йәш аға, күгәреп кипкән ирендәре тик бер һүҙҙе ҡабатлай:

— һай, баламды, ҡолонсагымды, бәпкәмде!..

Емеш аптыранып алыҫтан насар күргән күҙҙәре менән әленән-әле йылға өҫтөнә ҡарай, ҡарттарҙын., ҡарсыҡтарҙын, һүҙҙәрен йотлоғоп тыңлай, йөрәге өҙөлөп Бибекәй әбейгә оҙаҡ-оҙаҡ теклэп ала. Шулай ҙа һис тә генә төшөнөп етә алмай: «Кемгә, нимә булған һун.?!» Шул саҡ унын. янына бөтә нәмәгә алдан өлгөрөүсән әхирәте Шәүрә йүгереп килеп етте, Емеште етәкләп-елтерәтеп яр аҫтына, йәштәр, бала-сағалар сыулашып йүгереп йөрөгән ергә алып төшөп китте:

— Әхирәт, нимә булған? Кем батҡан? Әйтә һал, зинһар!— тип ялына Емеш.— Йә, әйт инде!

Ә Шәүрә, әхирәтен юрый түҙемдән сығарырға теләгәндәй, һөйөндөк менән булаша:

— Тайт, суҫка малай! Үәт, күпкән эс, килеп тә еткән! Бына мин һине төкөйөм әле!— тип, малайҙың яланғас эсенә һөҙә. һөйөндөккә мәрәкә: ул ҡыҙҙын. сәсенән магкып тотоп тарта, үҙе һөрән һалып ҡыҫҡырып көлә.

— Кит, килешмәгәнде ни!— ти Емеш, унайһыҙланып.—



Таптығыҙ көләщөр саҡты!... Үҙе, хәле бөтөп, яр ситенә ултыра. Шәүрә лә, әхирәтен ҡосаҡлап, унын янына ултыра.

— Бесәндән ҡасан ҡайттығыҙ, әхирәт! һағынып бөттөм һине!..

Әхирәтенең ниндәй генә хәлдә лә ғәмһеҙ-вайымһыҙ булып ҡала ала торған сабыр ғәҙәтен белһә лә, был юлы Емеш уға, ысынлап та, йыл күрмәгәндәй аптырап ҡараны:

— Шәүрә, йәнһеҙ, бында ниндәй хәл булған тим дәһә! Берәйһе һыуға батҡанмы ни?!

— Атаҡ, ишетмәнеңме ни эле һин?— тине Шәүрә һаман иҫе китмәй генә.— Ана, Заһиранын, әсәһе, Шәмсиә еңгә, үҙүҙен һыуға ташлаған ти бит!

— Уй-й, бахырҙы!..

Емеш ҡайғылы ҡарашын Заһираға күсерҙе. Ә ул бер ни булмаған төҫ менән аяғын ярҙан һалындырып болғай-болғай тып-тыныс ултыра.

«Кит, буштыр... Шәүрә юрый әйтәлер... Ана ла баһа, Заһира иламай ҙа, көйөнмәй ҙә... Әгәр минең әсәйем булһа, ул һыуға батып үлһә... Уй, йөрәгем ярылыр ине минең!.. Әле бит үҙем күреп белмәгән әсәйем өсөн нисек үҙәгем өҙөлә... Эй-й, шулай булмайынса... Әсәй бит ул!..» Емеш аптыраулы ҡарашын тағы әхирәтенә йүнәлтте:

• — Китсе, Шәүрәкәй, ниңә шулай юҡты бытылдайһың һин?!

— Үәт, биғәләш!— тип инде Шәүрә әхирәтенә ғәжәпһенеп ҡараны.— Күрмәйһеңме ни, ана, яр аҫтында Шымбай олатай, Әхмәтша ағай ҡуҙға баҫҡан бесәй кеүек йөрөйҙәр... Ана, Ғәйшә инәй, арты икмәк һалып, ҡаҙан йөҙҙөрөп ебәрҙе.

— Ниңә икән?!.

— Ҡаҙан һыуға батҡан кеше тәңгәленә барып өйөрөлөп тора ти ул, үәт. Ана бит ағайҙар алмаш-тилмәш сумып торалар... Улар ҙа эҙләйҙәр... Хәҙер бына ҡаҙан өйөрөлгән тәңгәлде сумып эҙләйәсәктәр...

Емеш ошо хәтле ҙур фажиғәне ябай бер хәл итеп ҡабул итә алған бер ҡатлы әхирәтенә, йәшкелтләнеп ятҡан тымыҡ һыу өҫтөндә талғын ғына тирбәлгән ҙур суйын ҡаҙанға алмаш-тилмәш ҡарай-ҡарай телһеҙ ҡалып торҙо.

«Заһиранын әсәһе, Шәмсиә еңгәй үлгән!.. һыуға батып үлгән!..»— тип, Шәүрәнең һүҙен эстән ҡабатлап, айышына төшөнөргә тырышты. Ләкин быны һис тә башына һыйҙыра алманы. Әле ҡасан ғына теп-тере йөрөгән, йәп-йәш, матур бер еңгәнең хәҙер, ошо сәғәттә, ҡайҙалыр һыу төбөндә ятыуын, бынан һун, бер ҡасан да тере булып ерҙә йөремәйәсәген күҙ алдына килтереүе лә йөрәк тетрәткес ине.

— Ни өсөн, ниңә һыуға батты икән ул, әхирәт?!—тип

шыбырланы Емеш, тыны бөтөн.— Йөҙә белә ине лә баһа ул!,.' Мин үҙем күргәнем бар ине... Ошо иң сөмөкәй ерҙә аҡкош кеүек аҡ күкрәген ҡалкытып/йгатур итеп йөҙөп һыу ингәнен күргәнем бар ине...

— Йөҙә белһә лә батҡан шул, ҡалай итәһең. Шымбай олатай әйтә, ул үҙен-үҙе һыуға ташлаған, ти, Әхмәтша ағайҙы Сәрбиҙән көнләшеп, ти, үәт... Ана, Бибекәй инәйҙе күрәһецме? Ҡыҙының күлдәген ҡосаҡлап илап ултыра! Шәмсиә еңгә уны яр башында сисеп ҡалдырған, ти, үәт...

Емеш, шундай аяуһыҙ һалҡынлыҡ менән хәбәр ителгән был ҡайғылы ваҡиғаның тәьҫиренән юғалып, әхирәтенә һаман өнһөҙ текләп ултырҙы. Ә Шәүрә уның һайын белдекләләнеп:

— Ысынды әйтәм. Ни, Шымбай олатай әйтә, үҙен-үҙе үлтергән кеше кафыр үлә. Уны йәлләргә лә, уның өсөн ҡайғырырға ла ярамай, ти, үәт,— тип өҫтәне.— Ана бит, күрмәйһеңме, шуға, моғайын, Заһира иламай ҙа, бошонмай ҙа... Ә теге һорнайған Моратшаны күр, бер ни булмағандай таһырайып, яр ситендә баҫып тора...

Емеш Шәүрәнән һынаулы һәм аптыраулы ҡарашын ала алмай йөҙәне:

«Был ни? Хуплаумы, ғәйепләүме?.. Нисек инде йәлләмәҫкә? Нисек ҡайғырмаҫҡа?! Кеше үлгән дәһә?!»

Шәүрә уның ҡабырғаһына ғәмһеҙ төртеп алды.

— Күрәһеңме, ҡаҙан бер сөмөкәйҙә өйөрөлөп тик тора! Ана, шул урынды сумып эҙләйҙәр... Үәт хәҙер алып сығалар инде...

Емеш ҡапыл һикереп торҙо.

— Мырҙам асыҡты. Ҡайтайым әле.

— Үәт, бифәләш, көтөп тор! Алып сыҡҡандарын күр,— тине Шәүрә, һаман шул ябай бер ҡыҙыҡһыныуҙы аңлатҡан тауыш менән.— Ана бит, ҡаҙан һаман бер урында ейөрелеп тора... Шәмсиә еңгәй шунда, төптә ултыра инде ул... Юрый йәшенгән кеше кеүек, сүкәйеп кенә тик ултыра, ти, ул батҡан кеше... Харап мәҙәк була, ти...

— Кит, йәнһеҙ! Таптың мәҙәкте!

Емештең тауышы ҡалтырап китте. Керпек остарына ауыр йәш тамсылары ҡунды. һәм ул мырҙаһын нык итеп күкрәгенә ҡыҫты ла йәһәт кенә ҡайтыу яғына боролдо:

«Был Шәүрә әллә төптө йәнһеҙ, әллә юрамал йәнһеҙгә һалыша?!»

— Үәт, бифәләш,— тип ҡыскырып ҡалды Шәүрә. Уның ваҡ ҡына һоро һипкел баҫҡан үтә нәфис ҡаҡса йөҙөндә лә, йондоҙ кеүек йымылдаған сөм-ҡара теремек күҙҙәрендә лә, ысынлап та, мәҙәк эҙләүҙән башҡа бер ни ҙә күренмәй



ине —Мин мәйеттётапҡанды көтәм. Аҙаҡ һиңә һөйләрмен, йәме!

Емеште өйҙә лә, күрәһең, бик үк күңелле хәбәр көтмәй ине. Ишек алдында, нигеҙ буйында, Таиба әбей менән Өммөгөлсөм бойоғошоп ҡына тынып ултыра. Икеһенең дә йөҙө ҡайғылы, күҙҙәре йәшле һымаҡ. Ни булды икән тағы? һыуға батҡан Шәмсиә еңгәне йәлләп илайҙармы икән? Әллә тағы бүтән берәй ҡайғылы хәбәр бармы икән?

һөйөндөк ишек алдына килеп инеү менән, ҡыуанып: — Өләсәй, өләсәй!— тип тәтелдәп ҡараһа ла, Таиба әбей әллә күрмәне, әллә күреп тә иғтибар итмәне. Емеш мырҙаһын күтәреп аласыҡҡа уҙҙы.

— Ницә улай оҙаҡ йөрөнөц? Бала сарсап бөткәндер ҙәһә!— тип, еңелсә генә шелтәләп ҡаршы алды Бибеш. Ул, моңһоу ғына меңрәп, оло ҡаҙанда эркет ҡайнатып йөрей ине.

— Әгәр эркетте бөгөн ҡайнатып бөтөп, һарҡытып өлгөрһәм, иртәнсәк, бесәнгә киткәнсе, ҡорот яһап, ылышҡа һалыр инем, исмаһам...— тип, бошонҡо ғына һөйләнеп, Бибеш улын күтәреп алды, күкрәгенә ҡыҫып, тыпылдатып һөйҙө.— Бәпесемде сарсатып, асыҡтырып бөткәндәр, шаҡшылар... Хәҙер ашатырмын, йоҡлатырмын бәпесемде,— тип иркә тауышҡа күсте.— Бәү-бәү-бәү итермен... Әлли-бәлли булыр һөйөндөгөм минең...

һөйөндөк тә әсәһенән ҡалышмай тәтелдәне:

— Әсәй... мәмәй... тәтәй...

Емеш әсә менән баланың бәхетенә һоҡланып ҡарап тора бирҙе лә ипләп кенә хәбәр итте:

— Апай, Шәмсиә еңгәй батып үлгән...

— Беләм.

— Ҡоҙағыйҙар ҙа шуға илашаларҙыр ахыры?..

— Үҙ ҡайғылары ла етерлек...

— Ниндәй ҡайғы, апай?!

— Закир ҡоҙаң Хөснөлхаҡҡа эйәреп сығып киткән бит... Үткән төндә...

— Өммөгөлсөм еңгә лә шуға илаймы?

— Ул Байрасы өсөн...

— Байрас өсөн тиһеңме? Уға ни булған һуң, апай?!

Емеш, үҙенең шулай ҡапыл тертләп, ҡыскырып уҡ ебәреүенән уңайһыҙланып, үҙ алдына мығырланып ҡуйҙы: — Аһа, һәтәү, әллә ниңә ҡотом осоп тик торасы...

Кинәнеп һөйә-иркәләй бала имеҙеп ултырған Бибеш һеңлеһенә күтәрелеп ҡарамай ғына:

— Байрас та бөгөн иртәнсәк волосҡа сығып киткән,— тип хәбәр итте.— Унда аҡтар ниндәйҙер ике большәүникте

тотоп алыл килгәндәр, ти, Сигенеп барған ҡыҙылдарға ҡушылырға тпг: китеп барғандар, имеш, ти.

Был көндәрҙә ниндәй ҙә булһа фажиғә артынан фажиғә килеп кенә тороуҙан күңеле ҡурҡып бөткән ксскәй ҡыҙ тағы ла түҙемһеҙләнде.

— Шунан?!—тип, сабырһыҙ бышылдап, апаһына төбәлде.— Кемдәр икән улар, апай?!

— Кемдәр икән? Атайымды тотоп килтермәгәндәрме икән?— тип, белешергә киткән шул Байрас та...

— Шунан?

— Шунан ни, Өммөкәй енгәй хәҙер бына икеһе өсөн дә ут йотоп ултыра...

— Ҡасан ҡайтыр икән ул Байрас?! Берәй хәл булып ҡуймаҫмы икән уға, апай?!

— Кеше ҡайҙа, нимә булып ятканын ултырған еренән белә алһа ине... Ерҙә был тиклем бәхетһеҙлектәр ҙә күп булмаҫ ине, бәлки... Ҡара әле, мыртыйың ҡалай арыған... Имеп тә туймай йоклап китте...

Емеш апаһынык да тап баяғы Шәүрә кеүек тарҡау, вайымһыҙ ғына һөйләшергә тырышыуына аптырап, артабан бер. һүҙ ҙә өндәшә алмай уйланып ҡалды. Шул саҡ уныи хәтеренә, ҡасандыр, Ҡарасәс инәйҙән ишеткән бер мәҡәл килде: «Үҙ ҡайғыһы — үҙәктә. Кеше ҡайғыһы — кештәктә».. Йәки шулай уйлаған булып, ғәмһеҙ булып тырышыу ғына-. мы был? Ысынлап та, әллә кеше ҡайғынан сыра шикелле. дөрләп янып китмәҫ өсөн шулай тотамы үҙен? Шулай ҡыланмаһа, түҙемде оҙаҡҡа еткереп булмайҙыр ул бәлки...

Бибеш, аптырап, ҡатып ҡалған һенлеһенә бүтәнсә иғтибар итмәй, бәпесен күтәреп өйгә инеп китте.

— Йоҡла, бәпесем, рәхәт йоҡла!..

Емеш, нигеҙ буйында һаман баяғыса иламһырап ултырған ҡоҙағыйҙары яғына ҡарамаҫҡа тырышып, әкрен генә тагы урамға сыкты, ҡойма буйындағы йәшел үләнгә һуҙылып, күккә ҡарап ятты:

«Әй-й, ошо ятыуҙан тормаһан, ине... Бейеккә-бейеккә, зәцгәр күккә, ожмахҡа ҡарай аҡ күгәрсен булып осһа ине йәнек-.»

Ул, ҡыҙыу ҡояш аҫтында рәхәт иҙрәп, бик оҙаҡ онотолоп ятты. Бына бер саҡ ер ысынлап та яй ғына тирбәлеп, аҡ болоттар биҙәгән ҡараһыу-зәңгәр күк диңгеҙендә йөҙөп киткән һымаҡ булды. Шундай талғын, рәхәт ойоп йөҙҙә Емеш «Бәлки, был ысындыр... Уның йәне күккә ожмахҡа табан осоп баралыр... Ана бит унын. ҡуйы керпектәре араһынан төпһәҙ тәрән зәнгәр күк менән көнбағыш баш ҡояш та аҡ болот селтәрҙәре генә күренә... Ә ул үҙе йомшаҡ йәшел бишеге менән бергә оса.. һай, ҡандай хозур!.. Ожмахҡа табан ғына



шулай рәхәт осоп булалыр ҙа...» Ләкин оҙаҡҡа булманы был рәхәтлек. Яҡында ғына дөпөлдәгән тос, кескәй ялан аяҡ тауышы уны тағы бәхетле хыял донъяһынан тартып сығарҙы.

«Кем булыр? Моғайын, Шәүрәлер. Унын аяғы шулай тос баҫа торған...— тип иренеп кенә уйланды Емеш.— Йә, ниңә уятты инде... Бәлки, минен, теләгем ҡабул булыр ҙа... Шулай рәхәт кенә мәңгегә йоклап та китер инем».

Емештең тойоуы дөрөҫ булды. Был — Шәүрә ине.

— Ҡара оятһыҙҙы, ҡалай кинәнеп йоклап ята! Ә мин , яр буйынан әле генә ҡайтып киләм,— тине ул, ғәҙәтенсә, шаян көлөп.— Беләһеңме, таптылар!..

Емеш ҡабаланып тороп ултырҙы:

— Тереме?!

— Үәт, биғәләш, кисә төндә батҡан кеше бөгөн тере була тиме ни? Түбәндә, Мраковканан ары бер шаршы ерҙә, өҫтә йөҙөп барған еренән, урыҫтар тотоп алған...

Үҙе, әйтәм бит, теп-тере кеүек... Ап-аҡ, һылыу булып, ҡаштары ҡыйылып ята. Әйҙә, барып күрәһеңме? Әле яр буйында...

— Тере булмагас, табыуҙан ни файҙа?—тине Емеш. һүрелеп кире ятты.— Ҡарамайым, ҡурҡам.

Шәүрә тирә-яҡҡа шикле ҡарап алды ла ҡабаланып Емештек ҡолағына бышылданы:

— Тере кеүек тим дәһә. Бер ҙә ҡурҡыныс түгел. Бибекәй инәйем, бахыр, ҡыҙын ҡосаҡлай ҙа:— Ҡыҙым тереләй һыуға ташланмаған. Тереләй ташланһа, үҙен-үҙе һыуға ырғытһа, һыу йотоп күбенеп бөтөр ине... Былай һылыу булып ятмаҫ ине... Ҡыҙым, ҡолонсағым, уян, һөйләп бир, ниндәй яуызы һине үлтереп һыуға ташланы?!— тип, һөйләмеп-аҙарынып илай...

— Алйыған ҡарсыктын. һүҙенә ҡолаҡ һалмағыҙ, йәмәғәт!— тип ҡыскыра Шымбай ҡарт.— Ҡыҙы ла үҙенә оҡшап иҫәүән ине. Шул иҫәүәнлегенән үҙ-үҙенә ҡул һалған! Кафыр үлгән!— ти. Ә тегеһе, Әхмәтша ҡарағы, бер ни өндәшмәй, һөҙөп ҡарап тик тора... Әсәйем әйтә, аҡтар енеп барғас, тағы ҡалай шашынып киттеләр, ти...

— Уй, ҡурҡам...— тип, Емеш, ҡобараһы осоп, тороп баҫты.— Шәүрә, һин нисек ҡурҡмайһын,?!

— Үәт, биғәләш,— тип, ғәҙәтенсә, һаман ғәмһеҙ көлөргә тырышты Шәүрә. Шулай ҙа ул да хафаланып һикереп торҙо, әхирәтенә ғәжәпһенеп ҡараны.— Нимәнән ҡурҡаһын,-дыр, белмәйем!..

— Үҙем дә белмәйем,— тине Емеш, шыбырлап.— Тик ҡурҡам... Ҡурҡыныс. Уй, ҡалай ҡурҡыныс... Был донъя ла, теге донъя ла ҡурҡыныс... Эйе бит, әхирәт?

Ҡыҙҙар, ошо минутта күңелдәрен тотош биләп алған бил-

дәһеҙ шик-шөбһәнән дерелдәп, тынып ҡалдылар, ҡайҙалыр бик алыҫтан, Урал артынан һымаҡ, тоноҡ гөрһөлдәү ище-,-телде:

— Бер, ике, өс... биш...— тип әкрен генә һанап торҙо Шәүрә.— Туп аталар!

Емештең үтә аҡһыу булып киткән ҡаҡса йөҙөнә ҡыҙыл-лыҡ йүгерҙе.

— Был ҡыҙылдар аталарҙыр!.. Иштуған ағайымдар әйлә-1 неп ҡайталарҙыр?!

— Ҡайҙан ағайымдар булһын... Аҡтар инде беҙҙең ерҙе тотош баҫып алып баралар,— ти әсәйем,— тип бошоноп ҡына хәбәр итте Шәүрә.— Беҙҙен ауылды бәләкәс тип һанға һуҡмай ғына тораларҙыр әле... Килһәләр, беҙгә көн булмаҫ... Шымбай ҡарттар, «бына былар ҡыҙылдар яҡлы» тип төртөп күрһәтеп, шунда уҡ башты ашатырҙар ти...

— Ә миңә ағайымдар һуғыша-һуғыша, еңә-еңә ҡайтып киләләрҙер кеүек тойола башланысы...

— Шулай ғына булһа ярар ине лә бит... Ҡайҙа һуң!.

Улар, ялан аяҡтарын күлдәк итәктәренә урап, тағы үлән өҫтөнә ултырҙылар. Ә гөрһөлдәү бер алыҫлашып, бер яҡы-найып һаман дауам итте. Башҡортостанды, Уралды солғап алған ҡаты һуғыштарҙың шауҡымы шулай дәһшәтле гөр-һөлдәү булып һәр көн тиерлек Илсеғолға ла ишетелеп тора ине был көндәрҙә.

Хисбулла менән Бибеш хәҙер ҡарағуралағы сабынлыҡ-та эшләйҙәр. Яҡында, йылғанын, бирге яғында булғас, ир-тәнсәк китеп, кис ҡайтып йөрөйҙәр. Шуға күрә һөйөндөктө лә өйҙә ҡалдыралар. Емешкә рәхәт була: күпме теләйһең, шул хәтле уйланып, моңайып ултырырға мөмкин. һөйөнд^к уға бик үк ҡамасаулай алмай. Бына әле лә ул мырҙаһын яны-на ултыртҡан да, урам яҡ ҡойма буйында, ҡуйы йәшел үлән өҫтөндә һуҙылып ята. Был унын. элек-электән ин, яратҡан ғәҙәте. Ҡойма буйын ҡояш һәр саҡ көслөрәк ҡыҙҙырып тора, ел-елкенсәк ҡоймаға ҡаҡлығып, ситләп үтә, ә ишелеп үҫкән ҡаҙ үләне шундай йомшаҡ, наҙлы... Теләйһең икән аяҡтарың-ды бөкләп, сәғәттәр буйы тирә-яҡҡа ҡаранып ултыр, теләһән, салҡан төшөп ят та ҡояшты, болоттарҙы күҙәт, осар ҡоштар-ҙы күҙҙән юғалғансы оҙатып ҡал... Ала ҡойроҡ ҡарлуғастар-ҙың һауала себен тотоп сыбалыуҙарын, көтөү-кетөү сәүкәләр-ҙең, ҡарғаларҙың «яуын теләп», түбә өҫтөндә сыр-сыу әйләнеүҙәрен ҡара... Әй-й, һөйләп тә, күреп тә бөтмәҫлек тылсымлы донъя асыла бит уға зәңгәр күк кембәҙендә...

Ә ҡарайып, ярылып ҡатҡан табандарынды ҡояшҡа күр-һәтеп, йөҙ түбән әйләнеп ятһаң һуң?!. Я хоҙай, Емештең күҙ күреме еткән ашъяулыҡ ҙурлыҡ ҡына ерҙә лә тотош бер ғә-



жәп донъяяла ла баһа!.. Бынаҙур башлы ерән ҡырмыҫҡалар, үҙҙәренән ҙур аҡ «тоҡтар» күтәреп, ҡайҙалар йүгерәләр... Ҡаҙ үләне араһынан хатта уларҙың таҡырланып бөткән юлдары ла бар икән дәһә... Ҡалай күмәктәр... Ә бына нәҙекей билле ваҡ ҡына ҡара ҡырмыҫҡалар уларҙан да күберәк. Улары теге ерән ҡырмыҫҡаларҙан аҡ «тоҡтарҙы» тартып алмаҡсы булып сыуалалар шикелле... Бәлки, теге ерәндәр был бахырҙарҙың йоморткаларын талап-тартып алып ҡасып бараларҙыр? Бәлки, уларҙа ла донъя көслөләр ҡулындалыр?

Инде килеп, ҡара нөктәле көмрө ҡыҙыл сапан кейгән бынауы күсмәнделәрҙе ҡарасы! Йә, нимә тип был шыҡа кипкән ҡылғандың иң осонда йығыла яҙып бәүелеп тора инде ул? Әллә унын да минен, кеүек бейектә-бейектә, болоттар, йондоҙҙар араһында осоп йөрөгөһе киләме икән? Әй-й, ба-хырҡай, ундай зәғиф кенә, көмрө ҡанаттар менән бейек осоп буламы һуң инде...

һөйөндөк, апаһының иғтибарын яуларға тырышып, ҡыс-ҡырып илап, төрлөсә мыжып ҡараны. Йомшаҡ матур ҡул-дары менән унын күлдәгенә, сәсенә йәбешә-йәбешә итәгенә менеп ултырҙы. Яны ғына сыҡҡан үткер һырлы аҡ тештәрен күрһәтеп, иҫ киткес һөйкөмлө йылмайып, апаһын ҡосаҡлап алды, хатта мәк сәскәһендәй нәфис, ҡыҙыл ирендәрен унын битенә тейгеҙеп үпкәндәй ҙә итте. Күренеп тора, баланын, уйнағыһы, һөйләшкеһе, йөрөгөһө килә ине. Ләкин кеше бала-һына кәрәкһеҙ бер мәшәкәт, ыҙа тип кенә ҡарарға күнеккән Емеш бының береһен дә күрмәне лә, аңламаны ла. Етмәһә, был ваҡытта унын бөтә иғтибарын ҡыуышып-әрләшеп йөрө-гән ике ҡатын биләп алғайны. Береһе, хихылдап, үртәп кө-лә-көлә, көйәнтәләп урамдан һыуға уҙып бара. Икенсеһе йүгереп сығып унын артынан бер һоҫҡо көл һибеп ҡала.

— Шыҡырыҡлап йөрөмә, кәнтәй, артыңа көл! Беҙҙең урамдан уҙма!

— Уҙырмын. Асыуыма тейһәң, абышҡанды тартып алыр-мын да, өйөндә лә йөрөрмөн, үәт!

— Йәненде йәһәннәмгә ебәрермен!

— Йәһәннәмгә абышҡанды ла алып китермен, хи-хи...

— Үәт, мәрәкә, әйе бит, әхирәт!

Емеш тертләп, артына боролоп ҡараны:

— Уй, Шәүрә?! һин нисек шулай гел аңғармаҫтан ғына килеп сығаһың ул?!

— Киреһенсә, һин үҙең әллә йоҡлап, әллә ҡолағың то-ноп, мин килгәнде гел шулай абайламай ҡалаһың.

— Бәлки шулайҙыр ҙа...

Шәүрә әхирәтенә яҡынырак шылып ултырҙы. **Ҡатын-**дарҙың береһе йылға яғына, икенсеһе өйөнә инеп **китте.**

— Эй мәрәкә. Ҡайтҡандз тағы әрләшерз^р әле,— тип Шәүрә кинәнеп көлөп ҡуйҙы.— Әсәйем әйтә, улар йәш кенә саҡтан бирле шулай әрләшеп йәшәйҙәр. Килдебикә әбейҙең бит инде үҙенән көл ҡойолоп тора, ҡартының теше төшөп бөткән. Үҙе һаман көнләшеп әрләшеүен ҡуймай, ти. Бәлки, хәҙер көнләшмәйҙер ҙә, әлеге-баяғы, эш юҡта эш булһын тиҙер инде...— ти.— Өс улы һуғышта ятып ҡалды, хәҙер ни, бабай ҙа үҙе шул... Эсе бошалыр,— ти.

Емеш, был мажараны күптән үк ишетеп белгәнгә, артыҡ иғтибар менән тыңламаны. Етмәһә, был ваҡытта урам осонан Байрас менән бер ят малай килеп сыҡты. Өлкәндәр шикелле яйлап ҡына һөйләшә-һөйләшә баралар. Ниндәй малай икән тегеһе...

Бөтә нәмәне алдан белеүсән Шәүрә был юлы ла аптырап ҡалманы:

— Ҡара әле!.. Байрас бер урыҫ малайы менән килә! Бәй, был бит, теге, һинен, атайындын, Микита тигән белеше бар ине бит. Бальшәүник Микита? Шуның улы ла баһа!... Иҫеңдәме, бер саҡ, беҙ Оҙонғол башынан быҙау алып ҡайтып килгәндә, бер көтөү урыҫ малайҙар тал сыбыҡ тотоп беҙҙе ҡыуған саҡта... Күргәйнек бит үҙен...

Эйе, Емештен. хәтсрендә ине был күренеш. Улар ашығалар ине... Көтөү төшөр саҡ еткән... Быҙауҙарҙы йәһәтерәк алып ҡайтырға кәрәк... Ә улар ҡарышалар, ҡасалар, ҡыҙҙар быҙауҙар артынан йүгерәләр... Ә бит быҙау имеп имсәген йыуып, йомшартып бирмәһә, һыйыр һөт бирмәй ти бит... Шулай булғас...

Был саҡ Емеш яңы ғына тифтән торғайны... Быҙауҙар артынан йүгерергә хәле етмәй ине... Етмәһә, шул саҡ Оҙонғол башына бер төркөм рус малайҙары килеп сыҡтылар ҙа тал сыбыҡ болғап ҡыҙҙарҙы ҡыуа башланылар...

Асылда был ике төркөм ялбыр балаларҙын, осрашҡанда сыр-сыу килеп талашып-ҡыуышып мәҙәк яһап алыуы ғәҙәткә инеп киткән эш. Уны бер яҡ та ысынға алмай. Тик былай, мәҙәк өсөн генә... Ләкин нескә тойоусан Емештең ул көндө бигерәк тә ҡото осто. Йүгереү түгел, урынынан ҡуҙғалырға ла хәле етмәне. Шул саҡ арыҡ, оҙон буйлы һары малай тал сыбығын хәтәр болғай-болғай уға табан йүгереп килә башланы. Ҡурҡыуҙан Емештен. быуындары тағы ла ныҒыраҡ хәлһеҙләнеп китте. Ә теге малай килеп етте лә... һуҡманы!? Керпек тә ҡаҡмай текләп тик торҙо. Малайҙың күҙҙәре зәп-зәңгәр, сәсе арыш һаламы төҫлө, ә танауында эре-һары һипкелдәр... Үҙе бер ҙә уҫал һымаҡ түгел... Хатта матур итеп йылмайып та тора һымаҡ... Эйе, шулай булғайны ул саҡта...



Шәүрә һаман телһеҙ ултырға» әхирәтенен, **теломонан:** тартты:

— Йә, иҫләнеме, ниңә өндәшмәйһең? .. . • .

Малайҙар, ҡыҙҙарға һис тә иғтибар итмәй, һөйләшә-һөйләшә уҙып киттеләр.

— Ул да хәҙер бошонҡо...— тип көрһөнөп ҡуйҙы Емеш,

— Кем? Нимә һөйләйһең,?— тип шынғыратып көлөп ебәрҙе Шәүрә.— Әллә, әхирәт, һаташа башланың инде?

— Байрасты әйтәм...

— Ә-ә, ул бит ике бальшәүникте атып үлтергәндә күргән...— тип Шәүрә, ғәҙәтенсә, еп-еңел икенсе темаға күсеп тә китте.— Иҫеңдәме, теге көндө, Шәмсиә еңгәйҙе һыуҙан эҙләгән көндә... Байрастын, әсәһе түгелеп илап йөрөгәйне... Ана шунда Байрас волоста булған... Аҡтар теге бахырҙарҙы, баҙар майҙанына сығарып, бөтә кеше күҙ алдында атҡандар, ти. Шундай йәштәр, матурҙар, ти. Бер ҙә ҡурҡманылар. Үлер алдынан, бөтә майҙанды яңғыратып:

— Буржуйҙар бөтһөн! Йәшәһен иптәш Лилин!— тип ҡысҡырҙылар, ти, үәт...

— Лилин тимәгәндәрҙер... Ленин тип әйтә торғайны шикелле Иштуған ағайым...

Шәүрә, әхирәтенең төҙәтеүенә ҡолаҡ та һалмай, артабан һөйләне.

— Майҙанға килгән күп кеше шул ҡыҙылдарҙы йәлләп иланы, ти. Илаған кешеләрҙе аҡтар ҡамсы менән туҡманы, ти...

— Атаһын күрмәгәнме икән Байрас?

— Юҡ, ти. Хаммат ағайҙын. эҙен таба алмайҙар, ти аҡтар... Ул да ошо тирәлә касып йөрейҙөр, табып тотоп үлтерергә кәрәк, тип әйтәләр, ти.

— Байрас үҙе һөйләнеме быны, Шәүрә, һиңә?

— һөйләне ти.— Шәүрэ, ҡабарынҡы ирендәрен бүлтәйтеп, мыҫҡыллы йылмайып ҡуйҙы.— Байрасты һөйләтерһең, һөйләтмәй ҙә ни... Өммөкәй еңгәй әсәйемә һөйләгән.— Бына шул аҡтарҙың яуызлығын күреп ҡайтканы бире улым танымаҫлыҡ булды ла ҡуйҙы. һөйләшмәй ҙә, тамағына йүнләп ашамай ҙа, өйҙә лә тормай... Хаммат өсөн генә түгел, Байрасым өсөн дә ҡурҡа башланым инде, тип әйтә, ти, Өммөгөлсөм еңгәм...

Емеш күлдәгенә йәбешкән үләндәрҙе ҡаға-ҡаға торогг баҫты:

— Уй алла, ҡалай эҫе булып китте... Мырҙам да бошаланып бөттө... Уға һөт эсереп, йоҡлатып сығайым әле.

— Таиба инәй ҡайҙа?

— Бибекәй инәйҙен. хәлен белә киткәйне... .. -, ..

— Ул бит мәрттән ҡайтҡан! .. .

— Ҡасан?

— Бөгөн таңда ти...

— Шулаймы ни...

— Ете көн йоҡланы бит инде. Ул бит, Шәмсиә еңгәйҙе һыуҙан табып сығарғас, һөйләнеп-илап ултырған-ултырған да мәрткә киткән дә барған. Ҡыҙын күмгәнде лә күрә алмаған,— тип тағы белмешләнеп һөйләп китте Шәүрә.— Мәрткә изге йәндәр генә китә ти ул. Изге йән булғанға, теге донъяны барып күреп ҡайтҡан, ти, Бибекәй инәй, үәт!..

Аҙна буйына һуҙылған тәбиғи булмаған был йоҡо ла, мәрткә китеү тигән аңлайышһыҙ һүҙ ҙә Емешкә йөрәк тетрәткес шомло һәм ҡурҡыныс тойолдо. Ә Шәүрә, ғәҙәтенсә, мәҙәк итеп, ишеткән-күргәнен теҙә бирҙе:

— Бибекәй инәй мәрттән ҡайтҡас та һаман шул бер һүҙҙе һөйләй, ти: «Ҡыҙым үҙе һыуға ташланмаған, ә үлтереп ташлағандар»,— тип әйтә, ти.

— Шунан һуң нимә?

— Шунан ни, мәрттән ҡайтҡан кешегә кем ышанһын? Алйыған әбейҙең. Һүҙенә кем ҡолаҡ һалһын, ти әсәйем...

Емеш берсә ағарынып, берсә ҡыҙарынып тағы бер аҙ телһеҙ ҡалып тора бирҙе лә әкрен генә өй яғына китте.

Ә Шәүрә, мәрткә киткән кешеләрҙе ҡайһы саҡта үлгән икән тип яңылышып күмеп ҡуйыу хәлдәре булыуы, теге кешенең ҡәберҙә уянып ҡысҡыра башлауын ишеткән кешелер барлығы хаҡында шул көләкәс, вайымһыҙ тауыш менән теҙә-теҙә, унын, артынан эйәрҙе.

Байрас ысынлап та был арала бик бошонҡо ине. Сәбәптәре лә етерлек ине шул: берҙән, яраткан Закир ағаһы Хөснөлхаҡҡа эйәреп ҡайҙалыр сығып китте. Йә, кемгә юлдаш булды инде ул?! Етмәһә, Хөснөлхаҡтың бынауы бешмәгән ҡарындашын — Гөлйыһанды яраткан була, имеш! Юҡ, Закир ағаһы унын, атаһына оҡшамаған! Ә атаһы бит унын ниндәй тәүәккәллек менән мылтыҡ тапты! Ҡыҙылдар яғына ҡабат китергә теләһә, Закир ағайына бирерһең, тигән булды... Хәҙер ул мылтыҡ, иң кәрәк саҡта, тирәк төбендә тутығып ята! Йә, шулмы эш?!

Аҡтарҙың йыртҡыслыҡтары ла Байрасҡа тынғы бирмәне. Тынғы бирмәне генәме?! Уларҙын, тирә-яҡ ауылдарҙан фронтовиктарҙы, ҡыҙылдар яҡлы кешеләрҙе эҙләп-эҙәрләп йөҙәтеүҙәрен, атыуҙарын күргәндән һуң, у.нын, күңелендә әсе нәфрәт, аяуһыҙ үс алыу тойғоһо дөрләп ҡабынып китте. Ләкин нисек? Ҡасан? Ҡайҙа?!

Әле бая, Алеша менән икәү Емештәр янынан өлкәндәрсә тыныс тоҫ менән уҙып барғанда ла, ошо нәфрәт утында дөрләп янып, иң сигенә еткән, һис кисекмәҫтән ниндәйҙер үтә ҡыйыу бер аҙым яһар хәлгә килгән саҡтары ине уларҙың. Һүҙ бигерәк тә теге ваҡытта Хаммат күмеп киткән мылтыҡты эшкә ҡушыу хаҡында бара ине. Малайҙар Байрастарҙа ла туҡтамай, Оло Эйек буйына үттеләр, түбәнге туғайға төшөп, ҡарт өйәңке башына менеп ултырҙылар. Улар икеһе лә бейек-бейек ағас баштарына менергә, тейен кеүек ботаҡтан ботаҡҡа һикереп уйнарға яраталар ине. Ә был юлы ағас башы серләшеү өсөн иң уңай урын булды. Тирә-яҡ тотош күренеп тора, һөйләшкәнде кеше ишетеү ҡурҡынысы юҡ.

— Аҡтар волостан ҡайҙалыр китте. Кисә бетә обоздары, пушкалары, пулеметтары, һыбайлылары дөбөр-шатыр килеп урамдан бик оҙаҡ үтеп торҙолар. Көнсығышҡа ҡарай юл алдылар шикелле...— тип ярһып хәбәр итте Байрас.— Мин Батыйма тутайҙын, кеше төшөрөү йорто тәңгәлендә, урамда, соҡор туп уйнаған малай булып йөрөнөм...

— Бер ҙә ҡалмай китеп бөттөләрме икән?— тип ҡыҙыҡһынды Алеша.

— Бөтәһе лә булырға тейеш. Беләһеңме, Оло Эйек күперендә хәҙер уларҙын. һаҡсылары тормай. Мин барғанда кисеүҙән сыҡҡайным. Ҡайтҡанда юрый күперҙән уҙҙым. Бер кем дә мине туҡтатманы.

— Шәп!— тине Алеша, ҡыуанып.— Бәлки, ҡасып киткәндәрҙер, ә?

— Кемдән? Һинең меыән минәнме ни?— тип көлде Байрас.— Һин дә уйлап таптың, имеш!

— Дөреҫ, беҙҙекеләр алыҫ сигенделәр шул... Хәҙер тирәяҡҡа атыш тауыштары ла ишетелмәй башланы бит...

Малайҙар, бойоғоп, оҙаҡ тынып ултырҙылар. Унан Байрас бошоноп ҡына тағы һүҙ башланы.

— Уларҙың ни эш көйлө хәҙер. Эш башына байҙарҙы ултыртып, артты нығыттылар ҙа ҡыҙылдарҙын, артынан төштөләр инде... Мин күрҙем, волоста йыуан ҡорһаҡлылар тулып йөрөп ята... Беҙҙен. Собхан старшина ла, Мраковканан Хитров та... Һеҙҙең Ивановканан Мартышкин да...

Алеша, зәңгәр күҙҙәрендә сая ут уйнатып, Байрасҡа яҡынараҡ шылып ултырҙы:

— Бына шуларҙы... Буржуйҙарҙы... Берәм-берәм... теге мылтыҡ көбәгенән үткәрә торһаҡ, ә?!.

Байрас, оҙаҡ ҡына тынып ултырғас, ҡалын ҡара ҡаштарын өлкәндәрсә ҡаты төйнәп, уйланып ултырҙы. Унан ҡапыл ҡыуанып дуҫына шундай итеп төрттө, уныһы ағас ботағынан саҡ-саҡ ҡына ҡоламай ҡалды.

— Ну үҙендә баш, әй! Тап кәттәһен уйлап таптын, бит, Алешка!



4 Заказ 761

— Һин һағыраҡ ҡылан!— тине Алеша, ситкә шылыша биреп.— Юҡһа һинең менән бәләгә зләгеүен, дә бар...

Байрас сая ҡарашын дуҫынан ала алмай уға тағы ла яҡыныраҡ һыйынды:

— Ниңә, булдыра алмабыҙ тиһеңме ни? Беҙ бәләкәйҙәр әле тимәксеһеңме әллә? Йә, дуҫҡай, әйт, ниңә кире сигенергә булдын,? һүҙенде кире алаһыңмы ни?— тип ҡыҫтап алып китте ул дуҫын.— Беҙ булдыра алмаҫ эш түгел дә ул. Йә?!

Алеша, айырата ҡыҙып-ярһып киткән дуҫын бер аҙ ауыҙлыҡлар өсөн, һалкын тауышҡа күсте.

— Тик нык уйлап, уңай минутты һайлап... Былай дөрләп кабынып түгел... Аңланыңмы, дуҫ!..

Байрас, бер ни ҙә әйтә алмай, дуҫына аптырап ҡараны: «Үҙе әйтте лә — кире ҡайтты. Был ни эш була инде?!»

Алеша өлкәндәрсә унын, яурынынан ҡаҡты:

— Иҫенде йый, дуҫ!

Улар икеһе бер юлы өйәңке башынан ергә һикерҙе:

— Кискә хәтле?— тине Алеша, етди итеп.

— Кискә хәтле,— тип яуап бирҙе Байрас та өҙөп.

Унан береһе Илсеғол, икенсеһе Ивановка ягына атланы.

Эҫе йәйҙец был тацын малайҙар Оло Эйек күпере янындағы ҡарт тирәк башында ҡаршыланылар. Ҡеүәтле, ҡуйы ботаҡтарын ғорур киреп, як-яҡтағы бөтә ағастарҙан бейек булып үҫкән алты-ете ҡолас йыуанлыҡтағы был мөһәбәт тирәк башынан күпер өҫтө бик якшы күренеп тора, унан, кем ҡайҙа үтә, бөтәһен алдан билдәләп була. Тирәктең айырата ҡуйы япраҡлы, иң бейек осонда кемдер йәшенеп, күҙәтеп ултырыр, атып йығыр тип, әлбиттә, бер кемдең дә башына килмәй. Ә таңды унда ҡаршылаған ике малай, күперҙән күҙ алмай, көндө кис итте. Хәҙер күпер аша байҙар, буржуйҙар өҙлөкһөҙ үтеп-һүтеп кенә тора: шундай һауалылар, ҡәнәғәттәр... Күрәһен, улар инде эшсе-крәҫтиән власын тамам ҡолаттыҡ, тип ышанғандар... Бына кырандасына ҡырын ятып, Сергей Хитров та, аҡ толпарын бейетеп, Собхан старшина ла, тирмәнсе Мартышкин да волость яғына уҙҙы.

— Их, шуларҙы берәм-берәм атып йығып ҡына тоторға ине,—: тип бышылдай Алеша, түҙемен юғалтып,— ошонан... Хәҙер үк!..

— Сабыр ит, тағы әҙерәк күҙәтәйек әле,— ти Байрас.— Ыңғай минутты һайлап... тигәйнең бит үҙен,-..

Ләкин был көндө лә малайҙарға ыңғай саҡ тура килмәне. Улар асығып, тамаҡтары кибеп, йығылыр .хәлгә килгәнсе



тирәк башында ултырҙылар. Төн еткәс, ауа-түнә көскә өйгә ҡайттылар. Шунан тағы бер нисә көн уйланып-икеләнеп үтте. Ә байҙар уйланып-икеләнеп торманы. Был ваҡыт эсендә, Собхан старшинанын, бойороғо буйынса Байрастарҙын, берҙәнбер атын тартып алдылар. Сергей Хитровтың иҫерек Апанасы Алешанын, әсәһенә килеп бәйләнеп йөрөнө:

— Һин бит алтын сәсле һыу һылыуы! Большевик Никита тиң түгел һиңә! Ахмаҡ булмаһаң, мин һине алтынға күмермен!— ти ул, теле көрмәлеп.— Яратам!— ти. Алешаның әсәһе ухыуат менән башына тондорғас, нагандан ата-ата сығып ҡасты. Шунан бирле Алешаның әсәһе ауырып ята. Ҡурҡып ауырыған...

Алеша менән Байрас бынан һун. тағы ла көслөрәк үс алыу тойғоһонан яныып-көйөп йөренөләр. Күп уйландылар, кәңәшләштеләр, тағы тирәк янына килделәр, тағы унын башынан күперҙе күҙәтеп ултырҙылар. Эйе, үс алыр өсөн ошонан да уңайлы урынды табыу мөмкин түгел ине. Малайҙар күҙәтеүҙе дауам иттеләр. Алешанын, бөтәһенән элек Апанасты атып йыкҡыһы килә ине. Әммә ул күренмәне.

— Моғайын, аҡтарға ҡушылып киткәндер. Йәки волоста берәй түрә булып сыкмай ултыралар,— тип көйөндө Алеша.— Их, нисек кенә уны осратырға икән?!

Ә Байрас өсөн Апанас та, Сергей кулак та, Собхан старшина ла берҙәй үк яман. Улар һәр ҡайһыһы әле генә түгел, бөтә ғүмер буйы халыҡты ҡан илатып килгән буржуйҙар. Шундайҙарҙан илде таҙартыу өсөн революция булған бит! Уларҙы бөтөрмәй тороп, ярлы-ялпы рәхәт көн күрмәйәсәк. АҮаһы уға шулай тине бит.

Бына июль ҡояшы, ҡыҙыл керпектәрен асыулы киреп, ашыҡмай ғына офоҡҡа яҡынлашты. Эңер төштө. Әммә күперҙә йөрөү һирәгәймәне. Байҙар бөгөн, ниңәлер, айырата ҡайнашып торалар. Бына, ғәҙәтенсә, кырандасҡа ҡырын ятып, Мраковка яғынан Сергей Хитров килеп сыкты. Ә бына волость яғынан Собхан старшина һыбай ҡайтып килә. Бына улар күпер янында, тап Байрас теҙәгән мылтыҡтың мушкаһы еҫтөндә генә, туктап ҡалдылар. Күрәһең, хәл белешәләр, эйе, бына Хитров фуражкаһын ҡалкыта биреп кейҙе.

«Иҫәнләштеләр... Хушлашалар... Китәләр...— тип дөпөлдәне Байрастың йөрәге.— Ах, китмәй торһондар!..»— Ул мылтык курогына ҡалай баҫҡанын да тоймай ҡалды. Ҡаты шартлау булды. Шул ыңғайға Байрас үҙе лә тирәк ботаҡтарын һындыра-һындыра тәкмәсләп йығылып төштө.

Алеша ла, ҡото осоп, дуҫы артынан ергә ырғыны:

— Ни булды? Ауырттымы? һындымы?!

— Мылтыҡ яурынға тибеп ебәрҙе бит...— тине Байрас, тыныс булырға, хатта йылмайырға тырышып. һәм шул саҡ

ерҙә ятҡан мылтығын күргәс, ауыртыныуын онотоп, һикереп торҙо.— Алеша! Уны тирәк башына мендереп япраҡ араһына йәшер!

— Старшинаны ҡолаттың шикелле...— тип бышылданы Алеша.— Мәргән аттың!

Байрас ҡул ғына һелтәне.

— Йәһәтерәк бул!

Алеша, турғай аулаған бесәй шикелле еңел үрмәләп, тағы тирәк башына менеп төштө.

Баҙыҡ һөйләшһә лә, дер ҡалтырап, урынынан ҡуҙғала алмай торған дуҫын етәкләп алды.

— Йәшерҙем. Һыҙайыҡ бынан! Килерҙәр, эҙләрҙәр...

Малайҙар күҙ асып йомған арала ҡуйы ҡыуаҡ араһына инеп юғалдылар.

Был көндәң иртәгеһенә ауыл берсә ҡыуаныслы, берсә хәүефле хәбәр менән тулды:

— Старшинаны дөмектөргәндәр! Донъяны мәңге үҙ ҡулында тоторҙай булып, яҡшы кешеләрҙен. Һөйәгендә бейеп ғүмер иткәйне...

— Анауы Хитров тигән ҡаруны саҡ ҡасып ҡотолған, имеш, ти. Уныһының да йәне йәһәннәмгә китһен ине.

— Яҡуп күперендә ҡыҙылдар отряды һөжүм иткән, ти, уларға. Хәҙер аҡтар тирә-яҡтағы бөтә урманды һөҙөп эҙләйҙәр, ти, уларҙы! Әгәр ошо тирәлә йәшәүсе халыҡ үҙе табып, тотоп бирмәһә, һәр ауылдан ике-өс кешене тотоп аҫасаҡбыҙ, тип әйтәләр, ти...

Бер нисә көндән Илсеғолда унан хәтәрерәк хәбәр таралды:

— Төндә Хәлим ҡарт менән Хисбулланы алып киткәндәр: береһенен, ағаһы, икенсеһененең улы ҡыҙылдар яғында. Старшинаның үлеме өсөн улар яуап бирергә тейеш,— тип донос биргән, ти, Шымбай ҡарт...

Тик бер Байрас ҡына был һүҙҙәрҙең береһен дә ишетмәне. Старшинаға атыу ваҡиғаһынан һун, өйгә көскә ҡайтып йығылғайны һәм хәҙер һаташып, онотолоп, ҡаты ҡыҙыулыҡ менән ауырып ята ине.

— Был арала тамағына аш бармай ине. Йоҡлаһа, һаташып ыҙалана ине. Сырхап йерегән икән, балаҡайым,— тип һыҡтаны Өммөгөлсөм.— Тифтер. Мине яңғыҙ баламдан да мәхрүм итер өсөн тиф килеп ингәндер өйөмә...

Ейәненең маңлайына әлдән-әле һалҡын һыуға мансылған таҫтамал һалып, ирендәрен сылатып, аҙабыи еңеләйтергә маташҡан Таиба әбей килененә асыуланып ҡараны:



— Ауыҙыңдан ел алһын, яманға юрап ултырма! Был ниткән сабырһыҙлыҡ? Уйлап ҡара, минен, хәсрәтем һинекенән еңәлерәкме ни?!

## XIII

Урал тәбиғәте ҡырыҫ ҡылыҡлы һылыу ҡатын кеүек инде ул. Әле генә салт аяҙ, зәнхәр күге, ҡайнар һулышлы ҡояшы менән күнелдәрҙе иркәләп, иырға, моңға, уйға дәртләндереп торған июль көнө һә тигәнсе ҡорос тынлы төн менән алмашынды. Хатта йылғалар ҙа ҡорос тауышы сығарып сылтырай, төн ҡоштары ла ҡырыҫ ҡурғаш тауыш менән сутылдай һымаҡ бында. Тимербай был үҙгәрешкә һис тә иғтибар итмәй, «максимка»һын бер һүтеп, бер йыйып, оҙаҡ-оҙаҡ тачанка янында сыуалды. Ахыр пулеметтың тимер арҡаһына шапылдатып бер һуҡты ла ҡәнәғәт төҫ менән турайып баҫты, өшегән ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, тирә-яҡҡа иғтибарлы ҡараш ташлап, тынып торҙо. Көньяҡ Уралдың ҡорос ҡойоусылар үҙәге Белорет көсөргәнешле тынлыҡ һаҡлай. Эс бошорғос бер төҫ һоро бүрәнә өйҙәрҙен ябыҡ тәҙрәләре үтә ҡыҫыла-өҙөлә нәҙек кенә ут яҡтыһы һуҙыла, һирәк-һаяҡ таҡта ҡапҡаларҙын шөбһәле шығырлауы ҡолаҡҡа сағылып ҡала, әлдән-әле һыбайлылар, йәйәүлеләр уҙып тора, Көньяҡ Урал партизандар армияһының штабы урынлашҡан йорт яғынан һәйләшкән-йүгерешкән, ҡырҡыу команда биргән тауыштар ишетелеп ҡала, тынғыһыҙ төнгә һуҡранып, сәүкәләр сәңкелдәшә...

«Иштуғандар ниңә оҙаҡланы? Үткән төн разведкала булғас, был төндә йоҡлап алырға кәрәк ине бит уларға,— тип атайҙарса ҡайғыртып уйлап алды Тимербай.— Йәштәр шул, арыу-йонсоуҙы еҫел кисерәләр...»

— Ағай, һин һаман бындамы ни әле?

— Ағайым тачанкаһын ҡалдырып китә аламы ни ул?!

Тимербай был хәтле һиҙҙермәй, икеһе ике яҡтан килеп баҫҡан Иштуған менән Әхәткә алмаш-тилмәш ҡарап алды:

— Әллә ер аҫтынан юлығыҙ бар инде һеҙҙең, егеттәр?

— Ер аҫтынан юлы ла булмағас, ниндәй разведчик була ул?— тип, тағы ла шаярып яуап ҡайтарҙы Иштуған.

— Ағай, һин ысынлап та баянан бирле пулемет янында сыуалдыңмы?— тип ҡыҙыҡһынды Әхәт,— әллә тачанканы ҡосаҡлап йоҡларға ла әҙерһең инде?

— Йоҡлаһаң да хәләл. Пулеметты биш бармағың кеүек белеп алырға кәрәк бит, мырҙа,— тине Тимербай, инде баҫалҡы ғына көлемһерәп.— Уның менән дуҫлашҡанға бик әҙ ваҡыт үтте бит әле.

— Ваҡыт әҙ үтһә лә, һин уның энәһенән ебенә тиклем белеп бөттөң инде, ағай,— тип Иштуған тағы һүҙгә ҡатыш-

ты.— Башта икәүләп һүттек, йыйҙыҡ, аттыҡ, унан үҙең... Ә һуң өсөнсө көнгө һуғыштан аҙаҡ Каширин иптәш һалдаттарға һине нисек маҡтап һөйләне?

— һөйләне лә ул...— тип тағы баҫалҡы ғына йылмайып ҡуйҙы Тимербай.— Шулай ҙа белгәнде тағы белеп, барлап ҡуйыу зарар итмәй, мырҙа. Ҡоралын — йөрәгең кеүек яҙлыҡмай эшләп торорға тейеш, тип уйлайым мин.

— Ҡоралын.— йөрәгең кеүек тоғро, мәргән булһын, ә! — тип, кинәнеп ҡабатланы Әхәт.— Бер өҙлөкһөҙ, һуңғы һулышына, һуңғы тамсы ҡанына тиклем, яҙлыҡмай эшләргә, ә? Шәп әйттен., ағай!

Иштуған шаян йылмайып Тимербайҙың яурынынан ҡыҫып ҡосаҡлап алды:

— Беҙҙең ағай шулай шәп булмаһа, командир маҡтар инеме ни? «Тимербай каторга һурпаһын етерлек татыған кеше шул. Анлап, ни өсөн, кем өсөн икәнен белеп һуғыша. Шуға ул оҫта пулеметсы ла, мәргән наводчик та»,— тине бит!

— Иштуған мырҙа, бынын, өсөн һицә лә рәхмәт белдерҙе бит ул; үҙ урынына бына тигән пулеметсы әҙерләне, тип ебәрҙе. «Бына тигән»,— тип әйтеү, әлбиттә, минен өсөн айырата ҙур. Ул маҡтауҙы, рәхмәтте ғәмәлдә аҡлайһы бар әле...

— Дөрөҫ, ағай.

— Йәге.ҙ, ҡайгайыҡ... Ял итәйек...

Улар есәүләп, әкрен генә һөйләшә-һөйләшә, урам буй> лап киттелор.

— Хәлдәр нисек әле беҙҙен? Белешмәнегеҙме?

— Штабтағы бөгөнгө кәңәшмә бик бәхәсле булды, тиҙәр... Үҙебеҙҙец Никита Ивановичты күргәйнем. Ул әйтә: «Кисә һеҙ алып ҡайтҡан разведка материалы күп фекер уятты. Верхнеуральскиҙы һуғышып алып, ҡыҙыл ғәскәргә барып ҡушылырға уйлай беҙҙен. Каширин. Ә Блюхер, төньяҡҡа табан хәрәкәт итергә кәрәк, Ҡыҙыл Армия частары шул тирәлә ҡаты һуғыштар алып бара булырға тейеш, ти...»

— Шунан, нисек хәл ителде икән?

— Кашириндын. планы ҡабул ителгән. Ырымбур, Верхнеуральск, Баймаҡ отрядтарының командирҙары барыһы ла унын, планын хуп күргәндәр шикелле..

— Тимәк, алда ҡаты һуғыштар тора, мырҙалар?

Иштуған тағы еңелсә мәрәкәләп һөйләшеүгә күсте:

— Шулай, ағай, пулеметындын, дарыһын ҡоро тот!

— Беҙ ҙә ҡылыстарҙы сарлап ҡуйҙыҡ!—тине Әхәт тә, шаярып.

Тимербай оҙаҡ ҡына уйланып барҙы:

«һуғыш йәшәүҙе лә, үлемде лә тиҙләтә... Малайҙы һә тигәнсе ир итә, ирҙе батыр яһай, исемһеҙҙе — үлемһеҙгә әйләндерә... Тукта, ҡасан, кемдән ишеттем әле мин был фекерҙе? Әллә хәҙер генә үҙ башыма килдеме? Йә, ҡалай ғына булмаһын, был фекер менән килешмәй булмай. Бына бит, ошо ике егеткә генә ҡара! Ҡасан ғына һун, әле күрәш уйы менән янып та, уға нисек тотонорға белмәй йөрөгән үҫмерҙәр ине... Ә хәҙер һалкын ҡанлы батыр һуғышсылар. Етмәһә, һине, каторжан ағаларын, пулеметтан мәргән атырға өйрәтергә лә хәлдәренән килә!..»

Ул, ҡәнәғәт йылмайып, әкрен генә баш сайҡап ҡуйҙы:

«Мин каторганан ҡайтҡас, Илсеғолда итек тегеп ултырған мәл... Эйе, текә ҡарашлы ике үҫмер, һуғышырға йыйынған ике әтәс шикелле көҙөрәйешеп килеп инде. Үпкәләйҙәр, көрәшергә өйрәтмәйһен, беҙҙе малайға һанайһын, тиҙәр. Бәлки, хаҡлы үпкәләгәндәрҙер? Мин урынһыҙ һаҡлылыҡ күрһәткәнмендер бәлки ул саҡта... Хәйер, Собхан старшина, Шымбай каштан кеүектәр һағалап торғанда, һаҡһыҙ эш итеп, ауыҙ бешкәйне бит инде минең... Бер ғәйепһеҙгә төрмә, каторга... Их-х... Ярай әле һаташыулы төш кеүек булып артта ҡалып бара ул көндәр...»

Егеттәр, тынып ҡалған ағайҙарын ҡайтанан әңгәмәгә тартырға тырышҡандай, һаман шул һуғыш-алыш хаҡында уйынлы-ысынлы бәхәс алып барҙылар: ниндәй төр ғәскәр иң әһәмиәтле? Пехотамы, кавалериямы йәки артиллериямы? Әхәт, үҙе Иштуған шикелле үк сая кавалерист булһа ла, һаман сат йәбешеп артиллерияны яҡланы.

— Артиллерияны — һуғыштың атаһы тиҙәр уйы, белдеңме?

— Атаһы түгел, аллаһы тиҙәр уны. Ниндәйҙер ҙур рус полководецы әйткән шикелле ул һүҙҙе,— ти Иштуған.

— Улай тигәидо бигерәк то шәп сыга икән! —ти Әхәт, тағы ла ярһый биреп.

— Әммә мин барыбер кавалерияға ғашиҡ,— тип ҡарыулашты Иштуган һалмаҡ ҡына.— Булат ҡылысыңды ялтыратып баш осоңа күтәрәһең дә: «Ур-ра!»—тип дәррәү һөрән һалып дауыл шикелле дошман өҫтенә ябырылаһың... Ҡыуып етәһең, сайланып уҫа-һулға һелтәнә-ҡыра алға, еңеүгә юл яраһың... Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, ләкин дошманды күрәһең... Ҡурҡыу ҙа, йәшәү ҙә, үлем дә, хатта асыу ҙа онотола, бөтә тәнеңде, йәнеңде ниндәйҙер ҡоторонҡо ярһыу, сая дәрт солғап ала! Үҙең, ел-дауылға, йошенгә әйләнәһең... Их, әлдә Тимербай ағай тачанкала минен урынды алды. Юҡһа командир мине кавалерияға ҡайтармай ыҙалай ине.

— һай-й, ахмаҡ, пулеметсы булыуға ни етә?— тип тағы сайланып ҡаршы төштө Әхәт.— Берәй йәтеш кенә ергә боҫаһың да ҡотороноп килгән дошманды тәкмәстерә атып тик ятаһың! Шулай бит, Тимербай ағай?

— Их, Иштуған дуҫ, әгәр мин һинең кеүек пулеметты белһәм, валлаһи ҡылысҡа тотонмаҫ инем. Тик минең баш ҡына етмәй ундай һөнәргә...

Һүҙ һуғыш ҡоралынан атҡа күсеп киткәс, йәштәрҙең әңгәмәһе тағы ла йәнләнде. Бында инде уларҙын араһында бәхәс булманы.

— Минең саптарға һоҡланмаған һалдат юҡ,— тип башлап ебәрҙе Иштуған был әңгәмәне.— Йомро тояҡлы, ҡылыс ҡолаҡлы, бәйге ярышына яратҡан юртаҡ кеүек киң күкрәкле, нәҙек эсле бит ул минең саптар! Буйға ла бәләкәс кенә... Ә саба-юрта башлаһа, артынан ел етмәй. Бигерәк тә тау-таш араһында уға тиң юҡ. Башҡорт аты тоҡомонан шул ул... Тау-таш араһында тыуып үҫкән нәҙекәй бил...

— Ә минең кир айғыр һуң? Ат түгел — аҡыл эйәһе,— ти Әхәт, күңелле көлөп.— Күҙенә генә ҡара һин унын... Кешенән дә аҡыллыраҡ икәнен сразы күрерһең. Хәтерләйһеңме, былтыр Ҡарғалы янындағы бер һуғышта... Мин аяҡтан яраланып йығылдым, һеҙ казактарҙы ҡыуып киттегеҙ, ә кир айғыр, санитар килеп алғансы, минең янда илап торҙо. Ысын, иланы шул, ерҙе сапсай ҙа мине еҫкәй, тилмереп миңә текләй... Күҙҙәрендә йәш... Яраның һыҙлауынан бигерәк, атымдың күҙ йәше өҙҙе йөрәкте... Бахыр, санитар күренгәс, кешнәп тауыш бирә бит әле. Йә, шуны аҡыл эйәһе тимәй, ни тиһең?

Моңһоу ярты ай янында айырата сағыу балҡыған эңер сулпанына ҡарап һылтыҡлай-һылтыҡлай һаман тауыш-тынһыҙ барған Тимербай эстән генә көрһөнөп ҡуйҙы:

«Их, рәссам булырға тигән маҡсатҡа ирешергә ине... Ошо ике егеттең портретын яҙырға ине... Тыныс саҡта сабый бала шикелле бер ҡатлы, әҙ менән ҡәнәғәт, бәхетле булып йәшәй белгән, һуғышта үҙе өсөн дан да, дәрәжә лә там итмәй, иле есөн аямай йәнен бирер ғәйәр иргә әйләнә торған бәләкәс, ләкин ғәжәп оло йөрәкле халыҡтың үлемһеҙ һыны булып ҡалырлыҡ портрет яҙырға ине уларҙан... Шундай иғтибарға бик тә хаҡлы ла баһа улар... Ләкин...»

Иштуған, Тимербайҙың изге уйын аңлағандай, яратып, тағы яурынына ҡулын һалды:

— Ҡайтып еттек, ағай!

— Еттек тәме ни?— тип ҡуйҙы Тимербай, һиҫкәнеп.— Ух-х, ешөтөп киткән һымаҡ булдысы... Әллә ҡартайта ла башланы инде...

— Оло Эйек буйының яңы һауған һет шикелле йылы, йомшаҡ һауаһын ҡайҙан алаһың һуң?!.

— Урал төнө ҡырыҫыраҡ икән шул...

— Осоро ла шундай булғас...



XIV

Ул көндәргә айҙан ашыу ваҡыт уҙып киткәйне инде. Көньяҡ Урал партизандары, дошман ҡамауында өҙлөкһөҙ һуғыштар менән меңәр саҡрым юл үтеп, ҡырыҫ Урал урмандарын, Алатау һырттарын артта ҡалдырып, Сим, Ағиҙел, Ҡариҙел буйҙарына килеп еткән саҡтар ине. Симдән Ҡариҙелгә хәтле һуҙылған күп меңле армия тау йылғаһы шикелле бөтә һикәлтәләрҙе, кәртәләрҙе ватып-емереп алға бара. Инде тағы бер ҡырҡа ынтылыш, бер нисә хәл иткес алыш, унан партизандар дошман эҙәрләүенән ҡотоласаҡ, нисә айҙар буйы хыял иткән, шул хыялға ирешеү өсен үлемесле көрәш юлы үткән ҡыуаныслы көн тыуасаҡ, улар Ҡыҙыл Армияның төп көстәренә барып ҡушыласаҡ.

Сентябрь тыуыуға ҡарамаҫтан, һауа ғәжәп йылы, ҡояшлы ине был көндө. Айҙар буйы ҡара урмандар, текә ҡаялар араһынан, туптар, йәҙрәләр аҫтынан ҡаты һуғыш менән юл ярып, йонсоп, талсығып сыҡҡан партизандарҙы ҡунаҡсыл башҡорт ҡатыны шикелле ихлас йылмайып ҡаршыланы был көн. Далаларҙан көйгән әрем, өлгөргән арыш еҫтәре бөркөлөп йәнде ҡыуандырҙы. Һуғыш-тартыш, үлеш-ҡырылыш эсендә нескә тойғоларҙы оноторға, тупаҫланырға өлгөргән күңелдәрҙә ҡайтанан татыу, тыныс хеҙмәткә мөхәббәт, йәшәүгә дәрт уятты. Бында, ҡояшлы иркен дала ерҙәрҙә, ниңәлер, тыуған йорт та, тыуған ер ҙә айырата нык иҫкә төшә, арығанлыҡ, йонсоғанлыҡ та нығыраҡ һиҙелә башлаған һымаҡ ине. Ләкин партизандарҙың ундай нескә тойғоларға ҡолаҡ һалырға ваҡыттары ғына юҡ. Алда торған иң ауыр, хәл иткес һуғыштарҙа ла еңеүсе булып сығырға кәрәк. Бының өсөн армияны ғына түгел, халыҡты ла әҙерләргә, ойоштороға кәрәк.

Блюхерҙын. партизандар армияһы үҙенен. айҙарға һуҙылған ауыр походында күпселектә башҡорт ауылдары аша үтте тиһән, дә хата булмаҫ. Шулай уҡ армияла ла башҡорттар күп, хатта улар утыҙ-ҡырҡ процент тәшкил иткән отрядтар ҙа бар ине. Партизандар армияһы урындағы халыҡҡа бик яҡын тора, һәр ерҙә улар менән һөйләшеп, кәңәшеп эш алып бара. Күп урында халыҡ менән митингыны Блюхер үҙе үткәрә ине.

Халыҡ та уларҙы — илгә именлек, иҙелгәнгә ирек яулап яу сапҡан уландарын — һәр ерҙә хөрмәт менән ҡаршы ала. Аҡтыҡ малын һуйып булһа ла, ит ашата, мунса индерә, кәрәк икән, юл төҙәтешә, күпер һалыша, мылтыҡ тоторҙайы атын эйәрләп, отрядҡа ҡушылып китә. Бөгөн дә тап шулай булды. Отряд ауылға килеп инеү менән, халыҡ эркелеп урамға сыҡты, төркем-төркөм булып һалдаттар янына йыйылды. Блю-

хер, ҡыҫҡа ғына митинг яһап, уларға йәш совет республикаһынынәске-тышҡы хәлен, партизандар армияһы алдында торған бурыстарҙы, ауыл халҡынан ниндәй ярҙам кәрәклекте аңлатты. Актарҙың һис шикһеҙ еңеләсәген, хаҡлыҡ тантана итәсәген өҙөп әйтте. Уның ҡыйыу, баҙнатлы тауышы тыңлаусылар күңелендә еңеүгә ныҡлы ышаныс уятты.

Баһадир кәүҙәле, ҡуйы ҡара мыйыҡлы, һылыу бер башҡорт егете главкомдың һүҙен тәржемә итеп биргәс, тыңлаусыларҙың йөҙө тағы ла яҡтырып китте.

— Был егет бит Блюхерҙың ординарецы, тиҙәр.

— Ҡалай үҙебеҙсә теле телгә йоҡмай һөйләй бит әле.

— Кейеме менән үҙе төптө урыҫ булһа ла...— тип һоҡлана-кинәнә тыңланылар уны.

Василий Константинович дала башҡорттары араһында ҡурай уйнаусылар хәҙер аҙ булһа ла, ҡурай моңон тыңлар өсөн, уларҙыц да мәсет ташлап йүгерә торған ғәҙәте барын ишетеп белә ине ахыры. Шуға күрә, урындағы халыҡ менән айырата яҡынлашырға кәрәк саҡта, ҡурайға ла һүҙ биргеләп ҡуя ине.

— Тимербай, һин бер һыҙғыртып ебәрһәң, ауылдың йәшеҡарты хәҙер йыйылып килә. һин улар менән ҡурай аша оҫта һөйләшәһең. Уларҙы үҙебеҙҙең яҡҡа ауҙараһың да ҡуяһын,,— ти ине ул. Хатта ҡайһы саҡта:— Эйе, халыҡтын, йерәк ҡылын сиртергә өйрәнмәй тороп, уны үҙ артындан эйәртеүе ҡыйын шул ул,— тип тә ҡуйғылай.— Дөрөҫ, ҡурай уйнап түгел, муйынына еп һалып та беҙҙең арттан эйәртеү мөмкин булмағандары ла барҙыр улар араһында. Эйе, бар. Беҙгә ышанмай, ҡырын ҡарап, ситтәрәк йөрәүселәр ҙә күренә. Моғайын, улары байҙарҙыр. Йәки төрлө имеш-мимеш менән өркөтөлгән кешеләрҙер. Әммә ундайҙар — аҙсылыҡ. Революциянын. яҙмышын улар хәл итмәй. Ә һин, Тимербай, молодец. һин халыҡтың үҙ улы...— тип тә өҫтәй. Тимербай, тыйнаҡ ҡына йылмайып:

— һеҙ, иптәш командир, революция — халыҡтың бөтә рухи байлығын үҙендә туплағанда ғына көслө, тиһегеҙ бит. Шулай булғас, беҙҙең халыҡтың тылсымлы рухи байлығы булған ҡурай ҙа әйҙә революцияға хеҙмәт итһен,— тип яуап ҡайтара.

— Шулай итһен,— ти Блюхер,— беҙгә, дошман тылында хәрәкәт иткән армияға, халыҡтың ышанысы, ярҙамы бигерәк тә кәрәк...

Әле лә ул, ординарецының һүҙе бетөүгә, үҙенән алыҫ түгел халыҡ төркөмө араһында торған Тимербайға йылмайып ҡараны.

— Йә, Тимербай, дуҫтарҙы ҡурай менән һыйла^ ә улар һине һарыҡ ите менән һыйлар.



— һай-й, ҡурайсы ла бар икән дәһә! Үәт, ғәләмәт!..

— Уйна, мырҙа, уйна! Беҙҙән эш ҡалмаҫ,— тип күтәреп алды халыҡ,— әле самай һарыҡ һимергән саҡ!..

— Уйна,— тип ҡабатланы Василий Константинович,— йыр, мондо большевиктарҙың ҡалай баһалауын халыҡ белһен. Уйна, тик ваҡыттын, тарлығын, хәлден, етдилеген генә онотоп ебәрмә. Ҡурай ул, әлбиттә, һуғыш осорона бик үк хас уйын ҡоралы түгел, үҙең беләһеи,...— тип тә өҫтәне.

Тимербай тачанкаһынан йышылып бөткән ағас ҡын алды. Уның эсендә Белорет эшселәре ҡойоп бүләк иткән — янып торған еҙ ҡурай ине.

— Уйнап ебәрәйек булмаһа,— тип, ҡуйы ҡара ҡаштарын төйөп, тығыҙ аҡ тештәренә еҙ ҡурайҙы терәне.

— «Ашҡаҙар»ҙы һыҙҙырып ебәрсе!

— «Пировский»ҙы!

— «Әрме»не,— тигән тауыштар ишетелде.

— «Урал»,— тине Тимербай өҙөп, һәм шуның артынса таш йерәктәрҙе лә тетрәтерлек мөһәбәт, ғәйәр моң һыҙылып китте.

Бөтәһе лә тынып ҡалды: кешеләр ҙә, Ҡариҙелдең текә ярын ҡаплаған ҡарт ҡарағайҙар ҙа, хатта мәтрүшкә, әрсм баштарын ҡаҡҡылап далала елеп йөрөгән елбәгәй ел дә бер генә минутҡа онотолоп, туҡталып торҙо, ажарланып, үксәгә баҫып килгән һуғыш-үлем ҡурҡынысы ла, был илаһи моң. алдында уңайһыҙланып, артҡа сигенде һымаҡ...

«Ул тачанкаһында һәр саҡ ике ҡумта йөрөтә. Береһендэ ошо тылсымлы ҡурай. Икенсеһеыдә нимә икәи?— тип уйлап алды Иштуған. Ул да тәү ишеткән кеүек ҡурайсыға онотолоп текләп тора ине.— Ни хәтле дәрт, көс, ҡеүәт был кешелә. Ҡоростай саф күңел. Эйе, эйе, каторга дәһшәте лә тутыҡтыра алмаған уның яҡты күңелен!..» Ғөмүмән, Иштуган уға үҙенен. һоҡланмай ҡараған сағын хәтерләмәй. Малай гына сағында уҡ Тимербайҙың һәр һүҙе, эше, ҡылығы унда ниндәйҙер әйтеп биргеһеҙ тәрән хөрмәт тойғоһо уята ине. Яҙгы йыуа ваҡыттарында уның ҡурай уйнап йәштәрҙе бейетеүен, йәки Оло Эйек буйын яңғыратып йырлап ебәреүен сикһеҙ ҡыуаныс, хатта бер тиклем көнсөллөк тойғоһо менән тыңлай ине ул: «Их-х, уның кеүек булһаң ине!..»

Ә унын, старшинанын. йылҡыһын көткән саҡта, йондоҙло йәйге төндәрҙә, берәй аҡланда ултырып, үҙ янына йыйылып килгән йәштәргә һөйләгән хикәйәттәре һуң... үлемһеҙ батырҙар, яман, яҡшы кешеләр, хәйлә-мәкерле яуыз ҡылыҡтар хаҡындағы гүзәл хикәйәттәр...

Ул хикәйәттәр ҙә Иштуғандың күңелендә бала саҡтың, йәшлектец үҙе кеүек үк гүзәл иҫтәлектәр булып мәңгегә яҙылып ҡалмағандармы ни?! Эйе, ул үҙенең сәсән әсәһе Ҡарасәс

инәй шикелле үк, тормоштоң иң ҡатмарлы, хатта ҡайһы саҡта хәл иткеһеҙ ауыр яҡтары хаҡында ла ҡыҙыҡлы һәм күңелле итеп һөйләй белә торғайны шул... Унын, ай нурҙарына үрелеп, йондоҙҙарға етеп сынлап ергә ҡайта торған берсә йөрәк тетрәткес моңло, берсә яҙғы ташҡын кеүек шат йырҙары, старшина Шымбай каштан кеүек яман кешеләрҙән әсе келгән шаян таҡмаҡтары әле булһа Иштуғандың ҡолағында яңғырап тормаймы ни?!

Бына шулай, бәлки, үҙе лә белмәҫтән, Иштуғандарҙың йәш йөрәгенә бик иртә ут яҡты, тоғролоҡҡа, намыҫлылыҡҡа, батырлыҡҡа ғорур бирелгәнлек тәрбиәләне...

Аҙаҡ, ғәйепһеҙ ғәйепләнеп, Себер ебәрелгәс, уны иң ныҡ юҡһыныусыларҙың береһе лә, моғайын, Иштуған булғандыр. Эйе, ҡанаты һынған ҡарсыға кеүек тойғайны Иштуған үҙен.

Һуңынан, Февраль революцияһы булғас, каторганан ҡайтып, Илсеғолда Иштуған кеүек йәштәрҙең йөрәгенә революцион ут яҡҡан, ҡанатландырып көрәш майҙанына осорған тәүге кеше лә ул булды бит. Әле инде бына улар төптө фекерҙәш, көрәштәш...

Ҡурай тауышы кешене уйға, моңға тартыусан. Иштуған да, күрәһең, был минутта шундай уҡ хәлде кисерә ине. Тик унын уйҙары ниңәлер был юлы Тимербай ағаһы тирәһенән ары уҙманы: «Аҡһаҡ аяҡлы, ялҡын йөрәкле һалдат,— тип яратып уйлап алды ул тағы.— Ниндәйерәк тә һалдат бит әле!..» Шул саҡ унын күҙ алдына Белореттан төньяҡҡа ҡарай оло походҡа сығыр алда булған ҡаты һуғыштың кескәй бер күренеше килеп баҫты. Ғәжәпкә ҡаршы, был күренеш тә Тимербайға бәйле ине. Верхнеуральскиҙан аҡтарҙы бәреп сығарырға тигән изге теләк менән башланып та, уңышһыҙлыҡҡа осраған һуғыш ине был. Шуға ахыры уны иҫкә алыуы ла еңел түгел. Күпме партизандар баш һалды унда!.. Ә мәғәнә булманы...

Бына шундай еңелеүгә осраған һуғышта ла ул бит ысын ҡаһарманлыҡ өлгеһе күрһәтте! Көс һәм ҡорал яғынан бик күп өҫтөн торған аҡтар ҡыҫымы аҫтында сигенергә мәжбүр булған партизандарға ябырылған дошманға пулеметтан мәргән ут яуҙырып, Яйыҡ ярында туҡтатып ҡалыусыларҙың береһе ул булды бит! Һуңғы патронына хәтле һуғышты. Аҙаҡ, уны һәләк булғандыр тип ҡаятырышып торғанда, әллә ниндәй әҙәм йөрөмәҫ туғай юлдары аша имен үтеп, отрядты ҡыуып етте.

— Быиа тигән һуғышсы икәнһең һин, Тимербай,— тип маҡтаны уны Каширин.— Һинең менән, һис тә икеләнмәй, утҡа ла, һыуға ла инеп була икән.



— Нисек иҫән ҡалдың, ағай? Нисек ысҡындың? Патрондарың да иҫәпле генә ине бит...— тип аптыраны Иштуған.

Тимербай, кибеп, сатнап торған ирендәрен ялай биреп:

— Эйе, мырҙам, патрондар ҙа һанаулы ине... Әммә бер генә бөртегө лә елгә османы,— тип тыйнаҡ ҡына йылмайып, һылтыҡлай-һылтыҡлай, һаман ниҙер эшләп, тачанкаһы янында сыуалды.— Ничего, мырҙам, бирешмәбеҙ. Һәй-й-й, аҡтарҙын арт һабаҡтарын укытырбыҙ әле беҙ! Шулай бит, мырҙам?..

Эйе, ул саҡта шулай булды... Инде бөгөн... Иң ауыр, хәл иткес һуғыштар алда тора... Унда ла ҡаһарман һуғышсы булып, енеүсе булып сыҡһаң ине һин, Тимербай ағай... Их-х, һинең кеүек кешеләрҙе үлемдән һаҡлап алып ҡала торған берәй сара булһын ине лә бит!.. Нисек булһын? Ундай кешеләр үҙ-үҙҙәрен онотоп, ин. алдан, иң ауыр урындан ут эсенә ташланалар бит...

Ҡапыл ҡурай тауышын да, Иштуғандын. тыныс уйын да ҡырт киҫкән ҡеуәтле команда яңғырап китте:

— Ҡоралға!

— Атакаға!

Иштуған, һикереп атҡа менгәс, күҙ асып йомған арала ғына Тимербай яғына тағы бер күҙ ташларға өлгөрҙө. Ул, халыҡ алдында ғәфү үтенгән төҫ менән, тыйнаҡ ҡына йылмайып, ҡурайын ҡынына һалды:

— Ничего, туғандар, һуғышты бөтөргәс, иркенләп уйнарбыҙ әле ҡурайҙы...

Ә бер минуттан унын тачанкаһы тигеҙһеҙ юлдан ырғый-Никерә туғай эсенә инеп юғалды.

— Хуш бул, ағай!— тине Иштуған күнеленән. Унан үҙе лә һиҙмәҫтән:— Бәхил бул!— тип тә өҫтәне лә тертләп китте: «Ниңә теленә килде был шыҡһыҙ һүҙ?!.» Ул, ҡәһәрләнеп, атынын, һырт буйына ҡамсы менән тондора-тондора, отряд артынан сапты. Киҫкен минуттарҙа иң алдан яуға ташланыуы, аңғармаҫтан дәррәү ябырылып, дошманды бик тиҙ паникаға ҡалдырыу оҫталығы менән дан тоткан Каширин һыбайлылары күҙ асып йомғансы аттарға атланып, дошман йырып үткән төп оборона яғына йән-фарман оса ине был ваҡытта.

## XV

Ҡыҙҙар, Оло Эйектен, һул яҡ туғайы буйлап ҡарағат тирә-тирә торғас, алыҫҡа үрләп, уң яҡтағы ҙур ҡырсын тәңгәлендә ярға барып сыҡтылар. Туғайҙа, муйыл, тал, балан, ҡарама ағастары ярышып үҫкән шырлыҡта, үҙҙәренән бейек кесерткәндәрҙән сағылып, еҙәй, әлморон, билсән энәләренән сыйылып бөткән аяҡ-ҡулды ял иттереп алырға ла мөмкин ине

хәҙер. Ҡайын туҙынан семәрләп эшләнгән моҙғалар мөлдөрәшеп ятҡан ҡара ҡарағат бөртөктәре менән өймәләм тулғайны.

— Аһа, көн кисләп тә килә икән дә!— тип аптырап китте Шәүрә, туғайҙан сыҡҡас.— Әхирәт, ҡайта һалайыҡ! Ауыҙ асыуға ҡарағатты алып ҡайтып етергә кәрәк тәһә!

— һыу инмәйбеҙме ни?

— Битте-ҡулды ғына йыуайыҡ та, йүгерәйек,— тине Шәүрә, тағы ҡабаланып. Моҙғаһын ҡырсынға ултыртты ла, күлдәк итәген күтәреп, һыуға төштө. Емеш тә уның артынан эйәрҙе. Улар йылғаның ҡырсынташтарҙы шауҙырлатып быуып-ағыҙып торған шарлауығында, кесерткән саҡҡан урындарҙың дыулауына түҙмәй, әле бер, әле икенсе аяҡтарын ҡаулы шикелле үргә күтәреп, оҙаҡ ҡына тапанып торҙолар. Һалҡын һыу менән бит-ҡулды сылатҡас, хәл дә ингән кеүек булды. Шунан улар йылғаның ситенән, ҡояшҡа эҫеп ятҡан һыуҙы кисә-кисә, бик оҙаҡ һөйләшмәй барҙылар. Ғәҙәттә бер нимәгә лә иҫе китмәгән вайымһыҙ Шәүрә лә бегөн бошонҡо, баҫалҡы күренә. Шулай ҙа ул, ғәҙәтенсә, һирәк-һаяҡ булһа ла һөйләйһе һүҙен әйткеләп барҙы:

— Әй-й ҡарагат унған да инде быйыл, эйе бит, әхирәт?! Ботаҡтарын күтәрә алмай яталар бит! Балан һуң, балан! Ҡайһылай баҙырайышып, туҫтаҡтай тәлгәшләнеп үҫкән! Бешеп еткәс, ҡалай булыр әле? Эйе бит, әхирәт! Бөлдөргәндәрҙе күрҙеңме?! Хатта-хатта талдарға үрмәләп китеп сукланып ултыра бит! Бөлдөргән бешкәс, гел ошонда, үрге туғайға ғына килербеҙ әле, йәме, әхирәт!

«Ни есөн «бөлдергән» икән, «бөрлөгән» түгел?»— тип уйлай Емеш. Әммә өндәшмәй. Шәүрә, бара торғас, бөгөн инде нисәнселер тапҡыр был көндәрҙә ике ғаиләнең дә йөрәгендә таш булып ятҡан ауыр һорауға тотона:

— Емеш, һин нисек уйлайһың, үлтерерҙәрме икән ни уларҙы? Мин дә, һинең кеүек, атайһыҙ ҡалырмынмы икән ни? Уй, алла һаҡлаһын! Нимә һейләйем, биғәләш! Ауыҙымдан ел алғыры! Эйе бит, әхирәт?!

Емеш уға әллә аптырап, әллә йәлләп ҡарап ҡына ҡуя. Нимә әйтә алһын ул быңдай ауыр һорауға?! Емеш менән Шәүрә уйлап хәл итә торған һорауҙармы ни былар? Улар бит әле ҡайғыра, илай ғына беләләр... Уҙа барһа, үлә алалар... Башҡаса нимә?!

— Әсәйем әйтә,— тип тағы бошоноп һүҙ башлай Шәүрә,— һинең еҙнәң менән минең атайымды ғына түгел, башҡа ауылдарҙан да бик күп кешеләрҙе тотоп бикләп ҡуйғандар, ти. Собхан старшинаны кем үлтерҙе, штобы әйтегеҙ, әйтмәһәгеҙ, үҙегеҙҙе үлтерәбеҙ, тип әйтәләр, ти, үәт...



Унан үҙ ҡылығына һис тә хас булмаған бошонҡолоҡ менән ауыр итеп көрһөнеп ала:

— Минә бигерәк тә мырҙам йәлке... Хәсәнде әйтәм, бәләкәс бит әле ул, аңламай, икмәк һорап йөҙәтә. Шунан әсәйем йәне көйөп китә лә уны туҡмай.

— Атайын, үлгәнсе, һин үлһәңсе!— ти. Кисә мин мырҙамды йәлләп:

— Әсәй, атайым да үлһә, Хәсән дә үлһә, үҙеңә бигерәк тә ҡыйын булыр ҙа баһа!— тип иплэп кенә әйткәйнем:— һин дә үл!— тип, мине лә туҡманы ла ташланы. Әсәйемден, дә йәне көйөп китә шул бахырҙың. Нимә эшләһен? Элек бит ул беҙҙе бер ҙә һуҡмай-туҡмамай ине... Ҡалай көләкәс, матур ғына бисәкәй ине бит ул минең әсәйем, эйе бит, әхирәт?!.

Шәүрәнен. был һүҙҙәренән Емештен, йәрәге генә түгел, әйтерһең, бөтә күк йөҙө тетрәп китте. Ҡайһы аралалыр, Янбашай тауы артынан ослайып аҡһыл күк тау булып күтәрелеп сыҡҡан ямғыр болото ҡапыл ер һелкетеп күкрәп ебәрҙе, йәшен салғылары болот битен асыулы телгеләргә тотондо, оҙаҡламай ҡурғаш кеүек тос ямғыр тамсылары һыу өҫтөн семәрләй башланы. Әле генә иркә, келәс булып йымылдап ятҡан йылға еҫтө ҡапыл асыулы, ҡырыҫ теҫ алды.

Быға са үҙ уйҙарына бирелеп ямғыр болото ҡалҡып сығыуын абайламай ҡалған ҡыҙҙар сабырһыҙланып киттеләр:

— Уй, ҡурҡам!— тип бышылданы Емеш.— Урманга 'ҡасайыҡ!..

— Әгүҙс-бисмилла!—тип Шәүрә тиҙ-тиҙ генә үҙенең ҡултыҡ аҫтарын һыпырғылап алды.— Әхирәт, һин дә шулай ит! Юҡһа, ҡултығыц аҫтына шайтан йәшенер ҙә, йәшен, шайтанды атам тип, яцылыш һине атып ҡуйыр!— тип өйрәтте.

Ҡыҙҙар бер өҙлөкһөҙ дөһөрләү, йәшнәү менән ҡайнап киткән күккә ҡоттары осоп ҡарай-ҡарай йылға буйынан туғайға ҡарай йүгерҙеләр.

— Яиғыҙ ағас төбөнә йәшенергә ярамай, ти әсәйем. Ҡарама төбөнә лә ярамай... Имән тебөнә лә... Уларға шайтан йәшенә ти... Шуға уларҙы йәшен йыш ата, ти...— тип, ғәҙәтенсә, һейләнә-өйрәтә йүгерҙе Шәүрә. Улар, туғайҙың ин шыр төпкөлөнә инеп, муйыл, миләш, балан ағастары ишелеп сатыр һымаҡ булып үҫкән ергә сүгәләп ултырҙылар. Ямғыр яман дөһөрләп, ҡотороноп яуҙы-яуҙы ла уҙып та китте, ҡыҙҙарҙы еүешләй ҙә алманы. Улар йүгерешеп ағас-сатыр аҫтынан сыҡтылар. Емеш ямғырҙан һун, айырата яҡты балҡыған киске ҡояштын. офоҡҡа таралған алтын бәхрәмәләренә, тал япраҡтарында йымылдашҡан йәйғорло тамсыларға һоҡланып ҡарап ҡуҙғала алмай торҙо:

— Әй-й! Донъя ҡалай ҡыуанып, яҡтырып киткән!

— Бәлки, ул үҙенә тау артына йәшенер, асығыуҙан, сар-

сауҙан интеккән кешеләргә ауыҙ асыр саҡ еткәнгә ҡыуана-лыр шулай,— тине Шәүрә лә, ихтыярһыҙ туҡталып.— Ул бит хәҙер рамазан айы булыуын, бөтә мосолмандар ҙа ураҙа икәнен белмәй булмаҫ та.

— Кем? Кем хаҡында һөйләйһең һин, әхирәт?— тип аптыраны Емеш.

— Ҡояш хаҡында,— тип яуап бирҙе Шәүрә, һис тә аптырамай ғына.— Башҡа кем һун, һаман батмай кешеләрҙе интектерә?!

Унан бошоноп еҫтәп ҡуйҙы: «Барыбер һуңланыҡ инде... Ауыҙ асыуға ҡарағат йыйып алып ҡайтып, әсәйемде ҡыуандырайым тигәйнем...»

— Йүгерәйек әйҙә! Өлгөрөрбөҙ!

Ҡыҙҙар, йылы боҫо сығып ятҡан еүеш **комға ялан аяҡ**тары менән ваҡ ҡына нәфис мөһөрҙәр **баҫа-баҫа, кисеүгә** табан йүгерҙеләр.

* *
*

Шәүрәләрҙең кескәй генә алама өйө, ҡаршылағы ҙур яңы өйҙән — Сәрбиямалдын, үҙе һымаҡ эсен һауалы кәпәйтеп, урамдың уртаһына уҡ сығып баҫҡан өйөнән — тартынған һымаҡ, урамдың иң осонда, эскә генә боҫоп ултыра. Ҡыҙҙар кисеүҙе сыҡҡас та бер туҡтамай йүгереп, уның янына килеп еткәндә, ҡояш, офоҡта һирәк кенә ал вәлен ҡалдырып, теләмәй генә тау артына йәшенеп бара ине.

— Өлгөрҙөк!— тине Шәүрә, ҡыуанып.— Хуш-һау булып тор, әхирәт.

Емеш уны өйҙәренә инеп юғалғансы күҙе менән генә оҙатты ла, эңерге урам буйлап яйлап ҡына яңғыҙ үҙе китте. Уның инде йүгерергә лә хәле ҡалмағайны. Бөгөн иртәнсәк бер һыныҡ икмәк менән бер сынаяҡ һөтлө сәй генә эскәйне шул ул. Шунан бирле йылдай оҙон көн үтте лә баһа! Хәйер, Емеш өсен был яңылыҡмы ни? Аслы-туклы йөрөүгә күптән күнгән бит инде ул. Хатта ул үҙенен, асыҡҡанлығы, ашарға кәрәклеге хаҡында уйларға ла оноткан һымаҡ. Был кескәй генә арыҡ ҡыҙҙың уйҙары һәр саҡ бит бик алыҫта, тормоштон, балаға хас булмаған ҡатмарлы яҡтарында йөрөй. Үҙ хәле тураһында уйларға ваҡыты бармы ни уның? Уйлап та, ул ни эшләй ала?! Ә донъя, әйләнә-тирәләге тормош — һәр береһе бер йомаҡ. Ни хәтле теләһәң, шул хәтле уйлап була. Барыбер осона-башына сыға алмайһың. һәм шунда аслыҡ та, ялан-ғаслыҡ та онотола.

Әйткәндәй, ураҙа айында уға айырата ҡыйын була шул. Ҡарындың бушлығы, теләйһеңме-теләмәйһеңме, үҙе хаҡында иҫкә төшөрөп кенә тора. Сөнки өлкәндәр сәхәрҙә ныҡ ҡына ашап ураҙа тоталар, ә ул сәхәрһеҙ... Сәрбиямалда йәшәгән саҡта бигерәк тә шулай була торғайны. Сәрбиямал сәхәргә ит бәлештәре, майлы ҡоймаҡтар, ҡаймаҡлы сәйҙәр әҙерләй. Тәмле аштың еҫе танауға ингәс, ас бала, теләһә-теләмәһә лә, уянып китә. Ләкин уға, бәләкәс кешегә, сәхәр ашау, ураҙа тотоу фарыз түгел. Ә көндөҙ өйҙә сәй ҡайнамай, аш та бешмәй, Емештең донъяла барлығы үгәй әсәйҙең иҫенә лә төшмәй... Ә ул ҡурҡаҡмы әллә үтә һауалымы... Өндәшмәй. Түҙә. Шулай итеп күп ваҡыт тәүлеккә бер тапҡыр — өлкәндәр кис, ауыҙ асҡанда ғына уның да ауыҙына аш тейә...

Бибеш апаһында йәшәй башлағас та был ураҙа айы уға еңелгә килмәй. Бигерәк тә хәҙер, өйгә ҡайғы килгәс, Хисбулла еҙнәһен аҡтар тотоп бикләп ҡуйғас... Бибеш апаһы Емеште түгел, һөйөндөгөн дә күрмәгән һымаҡ, күләгә шикелле өнһөҙ-һуҙһеҙ, өҙлөкһөҙ ниҙер эшләп, нимәлер рәтләп, хәлһеҙ генә ҡыбырлап йөрөй. Ҡашы төйөлгән, оҙон керпектәре һәр саҡ еүеш... Уға ҡараған һайын Емештең кескәй генә йөрәге өҙөлөп һыҙлап китә. Үҙенең ашау ҡайғыһын да, йәшәү ҡайғыһын да онота. Нисек, ҡасан ғына һуң ул был кескәй йөрәк кеше ҡайғыһы менән генә йәшәргә өйрәнде икән?!. Бәлки, шулай үҙ хәле хаҡында онотторға, кеше хаҡында ғына уйларға өйрәнгән өсөн дә бер нимәгә лә бирешмәй йәшәйҙер ул? Бәлки, йәшәмәйҙер ҙә... Күптән үлгәндер ҙә... уйҙары ғына йәшәйҙер, бәлки, уның...

Емеш көтмәгәндә башына килгән был шыҡһыҙ уйға аптырапмы, ҡурҡыпмы, ҡапыл һирпелеп урамға ҡараны. Саң, туҙан туҙҙырып, үкереп-мөңрәп, үргә остан көтөү ҡайта ине.

Ҡатындар ауыҙ асҡансы һыйыр һауып, мал ҡарап ҡалһын өсөнмө әллә көтөүсе бабай ҙа ваҡытында ауыҙ асһын типме, был көндәрҙә көтөү ҡояш байымаҫ элек үк ҡайта ине. Бына ҡатын-ҡыҙ, бала-саға йүгерешеп көтөү ҡаршыларға сыҡты. Урам:

— Бәрә-бәрә! Бәрәс-бәрәс!

— Кәзә-кәзә-кәзә!

— һәү-һәү! һәүкәш-һәүкәш!

— һәш-тьюбүгә!— кеүек сыр-сыү килгән төрле тауыш менән йәнләнеп китте. Әммә Емешкә ул барыбер ғәҙәттәгенән моңһоу ҙа, йоҡоло ла, хәлһеҙ ҙә тойолдо.

Ураҙала ауыл уға һәр саҡ шулай моңһоу тойола. Дөрөҫ, тәүлегенә бер генә тапҡыр өйҙә лә, урамды ла йәнләндереп, йәшәртеп ебәргән бер мәл була, ул — ауыҙ асыу ваҡыты яҡынлашыуын хәбәр иткән аҙан мәле... Бына ҡарттар йәшел таяҡтарға таянып, арыҡ, бәләкәс баштарына дәү сәллә кейеп, йәшел ҡарышлауыҡтар шикелле бөгөлә-һығыла мәсет яғына ығыша... Намаҙ бөткәс, улар шул уҡ ҡарышлауыҡ аҙымы менән йәшелгә буялған мәсет ҡапҡаһынан йәшел үлән

баҫкан урамға һибелә... Ошо тантаналы минутты йәһәтерәк алып ҡайтып еткерергә ашҡынып, урамдз, йәшел үлән өҫтөндә көтөп яткан балалар сыулашып өйҙәренә йүгерә:

— Йәстүҙән сыҡтылар!

— Ауыҙ асыр саҡ етте!

Әммә бөгөн ундай йәнле минут та тыумаҫ, ауыл өҫтөн баҫып алған йән ойоткос моңһоулыҡтың, хәлһеҙлектен, игесиге булмаҫ төҫлө тойолдо хәҙер Емешкә. Бигерәк тә уларҙың өйөндә...

— һай, йүнһеҙ, тағы оҙағыраҡ йөрөһәңсе!— тип асыуһыҙ ғына шелтәләп ҡаршыланы уны апаһы. Күрәһең, ул һыйырын һауып та өлгөргән — бер күнәк һөт күтәреп, аласыҡҡа инеп бара ине. Емеш тә унын артынан эйәрҙе. Моҙғаһын апаһына һондо.

— Ауыҙ асырһығыҙ...

Бибеш туҙ моҙгала сөм-кара булып, күҙ йәшендәй мөлдөрэшеп яткан ҡарағаттарға йотлоғоп теклэп тора бирҙе лә:

— Үәт инде... ҡарағат та бешеп сткән... Йәй ҙә үтеп бара...— тип ауыр һулап ҡуйҙы. Унан, ҡабаланып, моҙғаны кире һцлеһенә тотторҙо.— Бар, өйгә алып ин. Ҡоҙағыйына бир. Хәҙер ауыҙ асыр мәл етә.

Емеш, апаһының гәҙәттә бешкән сейә шикелле карағусҡыл ҡыҙыл булып торған матур ирендәренең әле алһыуланып, кибеп тороуын күргәс, әсенеп ҡуйҙы:

«Исмаһам, бер генә бөртөгөн алып ҡапһасы... Ярамайҙыр шул... Үгәй әсәй бит ураҙала ла ишекте эстән бикләй зә сәй эсә лә ҡуя... Ксше күрмәһә, ярай ул, ти торғайны... Ә былай ни, көн буйы бер тамсы һыу ҙа йотмай... Бынау хәтле эҫелә... Эш тә, ҡайғы ла, ураҙаһы ла бер юлы бит әлс.Нисек кенә күтәрә икән, бахыр апайым...»

Бына ҡарттар йәстү ыамаҙынан сыҡты. Ауыҙ асыр саҡ етте. Был көндө Таиба әбей Бибисара абыстайҙы, Бибекәй әбейҙе, Зөбәржәт еңгәйҙе, Өммөкәй киленен ауыҙ асырға саҡырғайны. Ҡунаҡ өйөнә табын әҙерләнде. Ҡаҡлаған йылҡы итенән бешерелгән бишбармаҡ та, майлы сөсө ҡоймаҡ та, ҡаҡ, ҡорот та, хатта Емеш алып ҡайткан ҡарағат та табынға ҡуйылды. Ҡуыаҡтар башта берәр бөртөкләп кеиә ҡарағат ҡабып ауыҙ астылар, һыуһынға берәр сүгәтә айран эсеп алдылар, унан, ғәҙәттәгесә, әкрен-һалмаҡ ҡына һөйләшә-һөйләшә ашыҡмай-кабаланмай ғына ашҡа тотондолар. Емеш тә



ахыры аҙыҡҡа ас күҙләнеп, һоғаланып-ҡомһоҙланып ташланыуҙы ғәйеп иткәнде белеп үҫкәнгәме әллә кеше яҙмышы, әйләнә-тирәләге тормош тураһында һүҙ барғанда үҙен онотоп ебәреүсән ғәҙәтё булғанғамы, әллә ниҙә бер ҡалаҡ һурпа ҡабып, һалмаларҙы берәр бөртекләп кенә тел өҫтөндә иретеп, бәләкәс кенә бер сүгәтә бишбармаҡты бик оҙаҡ ашап бөтә алмай ултырҙы. Әйтерһең, ул һис тә сәхәр эсмәй үк ураҙа тоторға мәжбүр булған кескәй ҡыҙ түгел, ә кеше көйөгө менән көйөклө булған ил әсәһе ине.

Бик оҙаҡҡа, ярты тен уртаһына хәтле тип әйтерлек һуҙылған был ауыҙ асыу мәжлесе — ғәҙәти дини бер йола булыуға ҡарағанда, ҡайғылаш кешеләрҙен, зарлы йыйынына оҡшай ине. Гәүге һүҙ Бибекәй әбейҙең ауыр ҡайғыһын уртаҡлашырға, Шәмсиә мәрхүмгә ожмахтың түрендә урын теләүгә арналды. Был һүҙҙең аҙағына:

— Ураҙала, ҡәҙер кисәһендә теләгән теләк ҡабул булмай ҡалмай, ти, ул. Алла бирһә, ожмаҡ ишеге һис шпкһеҙ асыҡ булыр Шәмсиә һылыуға,— тип раҫлап ук ҡуйҙы Бибисара абыстай.— Унын, атаһы, Тулыбай суфыйҙы әйтәм, торғаны менән бер изге йән ине бит. Был фани донъяны ҡыумаҫ, теленән алла-бисмилланы төшөрмәҫ ине, мәрхүм. һии үҙең дә бит, Бибекәй ҡорҙаш, шундай кеше... Изге йәндәргә генә бит ул мәрткә барыу бәхете тейә... Шундай ике изге йәндән тыуған керһеҙ баланы хоҙай тәғәлә ярлығкамай булырмы?! Ярлыҡар, ярлыҡар, имшалла...

(Ҡасандыр сағыу йәшел сатин булғанлығы саҡ-саҡ ҡына теҫмөрләнгән иҫке ғена күлдәк, шундай ук иҫкелеге етеп, ҡырылып бөткән ҡара бәрхәт еңһеҙ камзул кейеп, башына аҡ таҫтар урап ҡуйған үтә арыҡ, ҡураныс тәнле Бибекәй әбей хәҙер айырата ҙур булып киткән түцәрәк күҙҙәрен бала шикелле өнһөҙ мөлдөрәтеп ултыра-^Унын, үтә аҡ түңәрәк йөҙе лә, сәнсә баҫып, күлдәк итәге менән ҡаплап ҡуйған осло тубығында яткан күк тарамышлы арыҡ ҡулдары ла үтәнән-үтә күренеп тора һымаҡ.

— Мәрткә барған кеше теге донъяны күреп ҡайта, ти, бит ул. Ожмахта кинәнеп йәшәгән йәки тамуҡта аҙап сиккән таныштарын да осрата, ти,— тип, үҙенә хас ҡоро тауыш менән дауам итә Бибисара абыстай.— Бына шундай оло сәйәхәттә булған өсөн, ундай кешене изге йән тиҙәр... Ҡәҙерләйҙәр... Хәйер-саҙаҡа бирәләр. Шунан уға был донъяла йәшәүе лә еңелерәк булып китә... Тик бына һин, Бибекәй ҡорҙаш, ни есөндөр, бер ни ҙә һөйләмәйһең. Тешенде ҡыҫып тик йөрөйһөң. Моғайын, унда, ожмахта, Тулыбай суфыйҙы ла,

башҡа яҡшы кешеләрҙе лә күргәнһеңдер ҙә баһа?! Тамуҡтағы яуыз йәндәр ҙә күренмәй булмағандыр... Өндәшмәйһең шул...

Йә бит, мәрттә күргән-белгәндәреңде һөйләп йөрөһән, үҙеңә лә рәхәт булыр ине лә баһа! Изге йән тип, бөтәһе лә ҡәҙер-хөрмәт итеп, һыйлап ҡына йәшәтерҙәр ине үҙеңде... Аслыҡтан, яланғаслыҡтан ҡотолор инең, бәлки...

Емеш тә, йөрәге атылып сығырҙай булып дөпөлдәп, Бибекәй әбейгә төбәлде:

«Эйе шул, һөйләһәсе, хәҙер үк бөтәһен дә һөйләп бирһәсе!.. Бәлки, ул ожмахта минең атайымды ла күргәндер әле. Һуғышта үлгән кеше шәһит үлә — туп-тура ожмахҡа китә ти, бит... Шулай булғас... атайым да ожмахта инде ул... Ҡарасәс инәй ҙә... Ниңә һөйләмәй икән?!.»

Ләкин Бибасара абыстайҙың, өгөтө лә, Емештең ярһыпяныП көтөүе лә бушҡа ғына булды. Бибекәй әбей табындағы һәр кешегә күптән күрмәгән, һағынған ҡараш менән бала һымаҡ ҡыйыуһыҙ, йыуаш ҡына йылмайып, берәм-берәм ҡарап сыҡты ла әлеге бер һүҙҙе генә ҡабатланы:

— Минең Шәмсиәм кафыр үлмәгән... Үҙ-үҙенә ҡул һалмаған... Унының — яла! Баламдың, башына яуыздар етте, яуыздар...

Унан тағы үҙ эсенә бикләнде. Башҡа бер генә һүҙ ҙә өҫтәмәне. Уның хатта йоҡоһоҙлоҡтан ҡыҙарынып кипкән йәшһеҙ күҙҙәре лә хәҙер тышҡа, әйләнә-тирәгә түгел, ҡайтанан эскә, йөрәгенә утһыҙ яндырып торған әсе хәсрәтенә төбәлгәйне.

«Яуыздар?!. Кемдәрҙе әйтә икән һуң ул яуыздар тип?..»

Емештен, был тауышһыҙ һорауына ла яуап булманы. Өлкәндәрҙең иғтибары инде урындыҡтың ун, яҡ ситендә аш-һыу тәрбиәләп йөрөүсе Бибешкә ҡаршы ултырған Өммөгөлсөмгә күсте.

— Улын. ни холдә әле, килен? Арыуланамы?— тип, иң түрҙә, мамыҡ мендәр өҫтөндә, Бибекәй әбей менән бер ҡатар ултырған Бибисара абыстай башлап ебәрҙе был һүҙҙе лә...

— Мин дә бөгөн инеп хәл белешә алманым. Байрастың хәле һаман шул кейөмө, килен?— тип, Зебәржәт еңгә лә көйөнөп һүҙгә ҡатышты.— Шундай ҡыҙыу эш мәлендә, бесән эшләп ҡалыр саҡта, берҙән-бер улың да ауырып йығылһынсы инде? Был хоҙай тәғәләһе лә, әйтер инем, илгә афәт, кешегә михнәт ебәреүҙән башҡаны белмәҫ булып китте...

— Ҡуй, килен, кефөр һәйләмә,— тип ҡурҡып китте Бибисара әбей.— Аллаға һүҙ тейҙерергә яраймы ни?!. Тәүбә тигән, тәүбә!

Уның иҫкәртеүенә яуап биреүсе булманы. Өммөгөлсөм Байрастың хәле арыулана башлауын, эҫелеге кәмеүен, һаташыуы баҫылыуын әйтте.



— Тик бер ни ҙә ашамай әле. һаман сарсап ҡына тора,— тип зарланды. Улының бигерәк тә төндәрҙә «Алеша, Алеша... мылтыҡ... патрон... атам... үлтерҙем...» кеүек әллә ниндәй шомло һүҙҙәр һөйләп һаташыуы әле бөтмәүен, Алеша тигән урыҫ малайының төндә бер-ике килеп китеүен, унының да әллә нисек бик шомло итеп: «Байрасҡа Хисбулла ағаһының ҡулға алыныуын әйтмәй тор. Ауырыуы көсәйеп китер»,— тип ҡат-ҡат киҫәтеп китеүен һөйләп бирмәксе, эсендә янғандарҙы әҙерәк бушатмаҡсы булғайны ла, Бибисара абыстай, ниңә улыңды кафыр малайы менән ҡатнаштыраһың, тип ғәйепләй башлар тип шикләнеп өндәшмәне. Байрас хаҡындағы һүҙ Таиба әбейҙең:

— Хәҙер тиф менән ауырымаған кеше һирәк. Барыһы ла үлеп бөтмәй. Беҙҙең Байрас бығаса ауырыу күрмәне, ныҡ булып үҫте. Алла бирһә, тифте лә еңер, бирешмәҫ. «Сыҡмаған йәндә өмет бар», ти. Өмөт итәйек. Бынамын тигән һау, ғәйәр егет булып китер әле, насип булһа...— тигән өмөтлө һығымтаһы менән тамамланды.

— Шулай булһын.

— Өмөтһөҙ,— шайтан, ти. Өмөт итәйек.

— Яҡшыға, бәхеткә юрайыҡ,— тиеште башҡалар.

Бынан һун. һүҙ һуғыш хәлдәренә күсте. Был һүҙҙе лә, күрәһең, табында иң хөрмәтле кеше абыстай булғанғамы әллә ҡыҙы менән кейәүе ҡыҙылдар менән киткәнгә һуғыш хәлдәре үҙен айырата борсоған әсәләрҙең береһе булғанғамы, серле бышылдап, тағы Бибисара әбей башлап ебәрҙе.

— Ыуары тауында ҡыҙылдар пәйҙә булған, ти, бик ҡыйыу, бик көслө һуғышалар, ти. Атаһы кисә баҙарҙан ишетеп ҡайтҡан. Аҡ казактарҙың. тауға берәм-һәрәм барып менгәнен бәреп төшөроп кенә торалар, имеш, ти... Әллә ҡайҙан, тау-таш араһынан һағалап ҡына яталар ҙа икән... ата ла йығалар икән, ти... Беҙҙең балалар Каширин отряды менән шул яҡҡа киткәйне бит... Атаһы әйтә, шул балаларҙың мутлыгы түгелме икән был, ти...

Аҡтар хәҙер ул юлдан яңғыҙ-ярым түгел, бәләкәй отрядтар менән үтергә лә баҙнат итмәй башлағандар имеш, ти...

Аҡтар, чехтар тотош биләп алған был ерҙә ҡайҙандыр «пәйҙә» булған ҡыҙылдар хаҡында Зөбәржәт еңгә тағы ла күберәк белә булып сыҡты:

— Ул ҡыҙылдар хаҡында кисә мин дә ишетеп ҡайттым әле. Харап шәп һуғышалар, ти,— тип, ниндәйҙер эске ҡәнәғәтлелек менән хәбәр итте ул. Унан тирә-яҡҡа ҡаранып, ҡолаҡ һалып алғас, тауышын яртылашҡа баҫты.— Ошо арала ғына Ҡыҙыл Мәсеттәге, унан Ермолаевкалағы аҡтарҙы пыран-заран килтереп ҡырып ташлағандар, ти. Тегеләрҙең Штод баярҙың имениеһында иҫерешеп, бер ни белмәй

типтереп яткан сактары булған, ти. Әйтәм бит, харап шәп һуғышалар, ти. Аңғармаҫтан ғына килеп баҫалар ҙа ҡыралар, шунан ҡайҙалыр китеп юҡ та булалар, ти. Аҡтар ни хәтле эҙләп маташһалар ҙа уларҙың эҙенә төшә алмайҙар, ти. Ергә һеңгән кеүек юҡ була ла ҡуялар, ти, бына! Теге Ташлылағы, Тимаш баяр имениеһын һаҡлап яткан аҡтар ҙа, хатта Ырымбурҙың үҙендәге чехтар ҙа дер ҡалтырап тора, ти, хәҙер! «Был бандиттар, (йәнәһе, үҙҙәре яҡлы булмаһас, бандиттар була) көсәйгәндән-көсәйә барып, бер саҡ беҙҙе лә ҡаҡшатып ҡуймаһалар ярар ине»,— тип ҡурҡалар, ти. Ә улар, шул ҡыҙылдарҙы әйтәм, көсәйә бара, ти, шул...

Моғайын, аҡтарҙан иңрәгәндәр уларға юлды табалыр! Һәр төн тип әйтерлек, ауыл һайын биш-алты кеше ҡайҙалыр китеп юҡ булып ҡына тора, имеш, ти. Мраковканың, үҙенән генә лә иллеләп кеше шулай аты-эйәре менән бер төндә китеп юҡ булған, ти...

— Ҡара һин уны!

— Илдә уҙаман ирҙәр бөтмәгән икән әле...

— Әйҙә, башҡорт ере илбаҫарҙарҙан, килмешәктәрҙән тапатыр ер түгеллеген нығыраҡ төшөндөрһөндәр уларға! — тип, башҡалар унын, һүҙен күтәрмәләп тыңланылар. Зөбәржәт еңгә, һирәк-һаяҡ ҡына ит, һалма ҡабыштырып, һүҙен дауам итте:

— Кмсә иртәнсәк мии, әлеге-баяғы шул, атаһын күреп, һөйләшеп булмаҫмы тип, тағы йәйәүләп-ялпылдап волосҡа барып сыҡтым...

— Йә, күрҙеңме һуң?

— һөйләшә алдыңмы?

— Йә, нисек булды?— тип сабырһыҙланып китте башҡалары. Зөбәржот еңгә:

— Ҡайҙа ул! Күрһәтерҙәр, күрһәтмәй ни!— тип ҡул ғына һелтәне лә:— Ҡайтышлай Метрей белештәргә индем... Мраковкала торһа ла, ул бит хәҙер волоста конторҙы ҡараусы булып эшләй. Ана шул Метрей белештән ишеттем был хаҡта...— тип артабам һөйләп китте. Унан ҡапыл туҡтап:

— Әй-й, алйот!— тип һуҙып торҙо.— Йә инде, Метрей белеш, был һүҙҙәрҙе үҙен. бел дә тын. Бер кемгә лә ләм-мим әйтмә, тип ҡат-ҡат киҫәткәйне лә баһа! Ә мин асыҡ ауыҙ!.. Йә инде...

Таиба әбей уны тынысламдырырға ашыкты:

— Ярар, килен, беҙҙән һүҙ сыҡмаҫ. Ҡатын-ҡыҙ телендә йөрөр һүҙ түгел бит был.

— Тәүбә-тәүбә... Уны һөйләп йөрөргә башыбыҙ ике түгел дә беҙҙең,— тип курҡып китте Бибасара абыстай.

— Алла һаҡлаһын...— тип кенә ҡуйҙы Өммекәй.

Унан Таиба әбей:



— Волоста тағы ни хәлдәр бар? Хәлимде тәки күрә алмағанһың, икән!—тип был хәүефле һүҙҙе икеисе яҡҡа бороп ебәрҙе.

— Күреү ҡайҙа ул!—тип, тағы ҡайғырып китте Зөбәржәт еңгә.— һөйләшмәйҙәр ҙә, ҡыуалар ғына... Ҡарауылда торған һалдаттары улай уҡ яман күренмәй, һөйләшеп тә булыр ине, бәлки, әммә, бер ҡуян күҙ әфисәр ишараһы бәйҙәге эт кеүек сәңкелдәп, ботоңдан тешләп алырға ғына тора:

— Яҡын юламағыҙ, атам! ти. Наган тоҫҡай, кәтмәйгән. Әй-й, мин әйтәм, шул ир ишараһының артына тибеп кенә ебәрәһе ине! Артына бер типһән, ҡуян күҙҙең квлө күккә осорға тора ла бит... Наганы бар шул...

Бөтәһе лә әкрен генә келешөп алдылар.

— Батыйма тутайҙын. таш келәтен нышып тултырғандар инде,— тип, тағы ла көйөнөбөрәк һөйләп китте Зөбәржәт еңгә.— Ә аҡтарҙың үс ҡуржындары һаман тулмаған, ти, эле. Көн дә кемде лә булһа тотоп алып килеп ябып ҡына торалар, ти. һаман шул әләге-баяғы бер һүҙ, ти:— Собхан старшинаны кем үлтерҙе, әйтегеҙ!—тип ныҡышалар, ти... Йә, шул яуызды ниндәй тилеһе атты икән? Унын, урынын шунда уҡ икенсе яуызы биләрен белмәнеме икән ни, алйот! Ана бит, хәҙер Собхаидан да яманыраҡ Сәргәй ҡа[)т старшина булып алған!

— «Ҡарға ҡарғаның күҙен сукымаҫ», «Ҡарға үлгән тип, унын ояһын ҡарсыға биләмәҫ», тиҙәр бит...— тип һалмаҡ ҡына әйтеп, Зөбәржәттең һүҙен бүлде Таиба әбей.— Бында ла шул инде... Әммә, ҡыуаныс та, яҡшылыҡ та һуңлап килер, шулай ҙа китмәҫкә килер тигән һүҙ ҙә бар бит... Яҡшыны, ҡыуанысты өмет итәйек, килен!..

— Муллаһына хәтле яман булғас, ҡайҙан, кемдән яҡшылыҡ көтмәк кәрәк?!—тип, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы Зәбәржәт енгә.— Ҡартымды алып киткәс, иң элек бит мин уға йүгереп барҙым. Мулла ағай, тим, атаһын, бәлки, парукаға алырһың, тим. Балта оҫтаһы Хәлим бөтәгеҙгә лә кәрәк тәһә! Ана бит үҙенә яңы өй бурап йөрөгән еренән алып киттеләр. Башлаған эшен кем бетәрөр? Бер ғәйепһеҙ икәнен үҙең дә белеп тораһың бит, ағай, тим. Парукаға алһаң, өйөндө хәйер йөҙөнән буш эшләп бирер ине, тим. Ялынам, илайым. Ул хатта ҡырт та итмәй, күҙе таҫрайып, ишетмәгәнгә, аңламағанға һалышып тик ултыра... «Я алла, я алла, гонаһлы бәндәләренә үҙең ярҙам ҡулынды һүҙ, аллам»,— тип мығырланып, башын төптө иҫәргә һалып булаша.

— Беҙҙең шундай мәкерле, ҡанһыҙ муллабыҙ иҫәргә әйләнде тигенсе, ә?— тип аптырап китте Бибисара әбей ҙә.— Күрәһең, ҡартайыуы еткәндер. Юҡһа йәш сағында ул бит

үҙенең ҡуетыһы Хәбир батырҙың башына ҡалай еткәйне! Һин бит хэтерлэйһеңдер, Таиба ҡоҙағый!

— Хәтерләмәгән ҡайҙа ти ул…^ тип Таиба әбей ҙә ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы.— Ул хәҙер ҙә кеше башын ул саҡтағынан кәм ашамаҫ ине лә… Ә бына ярҙам итеүҙе булдыра алмай… Теләмәй… Үҙенең ҡомһоҙ ҡорһағынан ары бер ни ҙә күрергә теләмәгән кеше бөтә тархан алдында ла яҡшы тиҙәр бит...

— Шулай уҡ яҡшынан-ямандан бер һүҙ ҙә әйтмәнеме ни, килен?— тип һаман аптыранды Бибисара абыстай.— Бер кәңәш тә бирмәнеме, исмаһам?..

— Юҡ, тим бит. Ул төптө алйотҡа һалышты. Ә мин ҡул һелтәнем дә илай-илай сығып киттем. Үәт, тим, кемгә ышанып йөҙ һыуымды түгеп йөрөйөм бит, иҫәркәй мин, тим...

— Мин дә бит уға барғайным,— тип сер асып, Зебәржәт еңгәнең һүҙен бүлде Таиба әбей.— Һин, мулла, минең Хисбулламды, иң, яратҡан, иң инсафлы, итәғәтле шәкертем, ти торғайның. Хәҙер, ул нахаҡ бәләгә юлыҡҡан саҡта, бәлки, яҡлап берәй һүҙ әйтерһен... Һинән башҡа һүҙ әйтер ҙә, һүҙе үтер ҙә кеше юҡ бит хәҙер ауылда, тим мин дә...

— Ә ул?

— Бальшәүник ғаиләһенә ярҙам ҡулы һуҙып, аллаһы тәғәлә ҡаршыһында гонаһлы булыр башым юҡ,— ти.— Нисек һин мине шундай гонаһҡа юлыҡтырырға баҙнат итеп килден,?— ти.— Бар, ҡайт, аллаға ғибәҙәт ҡыл, бальшәүник Хамматтын, гонаһ шомлоғо өсөн Хисбулламдан үс алма, тип ялбар. Аллаһы тәғәләнен. шәфҡәте бик киң... Бәлки, ялынысынды ишетер,— ти...

Зөбәржәт еңгә ауыр көрһөнөп күңелһеҙ генә һуҙып ҡуйҙы:

— Әй-й... Кешегә көнөң ҡалмаһын, ялынысын. төшмәһен икән ул... Ялынысың төшһә, быға дуҫ тигәнең — дошман, әүлиә тигәнең шайтан булып сыға икән ул... Хәҙер мин быға ныҡ төшөндөм...

— Шулай...

Ҡатындар оҙаҡ ваҡытҡа тынып ҡалдылар. Өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡунаҡ хөрмәт итеп йөрөгән Бибештең оҙон керпектәре осонда әленән-әле йәш тамсылары йымылданы.

Кескәй генә бер сүгәтә ашын һыуыта-һыуыта көскә ашап бөткән Емеш, түрбаш яҡҡа барып, ҡараңғы мөйөштәге мендәргә һейәлеп ултырҙы. Көсле ихтыяры, ҡыйыу, шат ҡарашы, ирҙәрсә ҡеүәтле кәүҙәһе, йерөш-торошо, кешегә булған ғәҙел мөнәсәбәте менән үҙ күңелендә һәр саҡ тәрән хөрмәт, ысын һоҡланыу тойғолары уята торған Таиба әбейҙең дә шулай өметһеҙләккә бирелеп, ҡайғылы тынып ҡалыуын күреү Емештең күңеленә һөйләп биргеһеҙ шом, хәүеф өҫтәне. Уныц инде был ауыр күренеште артабан күҙәтергә лә, ни ҙә булһа уйларға ла хәле ҡалманы. Талған керпектәр үҙенән-үҙе йомолдо, талсыҡҡан кескәй тән ойоп һығылып төштө...

Ул ҡапыл уянып күҙен асҡанда, ерләктә шул уҡ аҫылмалы бишле лампа, урындыкта ла шул уҡ сәй урыны ине. Тик сәй янында ҡунаҡ әбейҙәр генә юҡ. Унда, балаларса йыуаш, баҫалҡы ҡарашын берсә әсәһенә, берсә ҡатынына күсереп, Хисбулла ниҙер һөйләп ултыра... Уның кемрө эсле аҡ самауырҙа сағылған кеүек булып яңаҡтары эскә инеп, оҙонсаланып киткән битен, осло эйәген ерән һаҡал баҫҡан... Яурындары ҡуранысланып, ҡулдары арыҡ, оҙон булып киткән һымаҡ. Ә күҙҙәрендә ниндәйҙер ҡыуаныс балҡый шикелле... Бибеш апаһынын, күҙҙәрендә лә быҒаса бер ҡасан да күренмәгән иркәлек, көләслек... Бына ул әленән-әле итәгендә ултырған улын тупылдатып һөйә лә иркә тауыш менән:

— Һейөндөктөң атаһы ҡайтты!— ти.— Бар, улым атайыңдың алдына ултыр...

Еҙнәһененң ауыҙы ҡыуаныстан киң йырылып, ҡарпайыбыраҡ торған ҡолаҡтарына хәтле барып етә:

— Кил, улым, кил. Мин бит һине бик-бик һағындым...— ти. Ә һөйендөк ҡабарынҡы матур ҡулдары менән атаһының оҙон булып үҫергә өлгөргән ерән һаҡалынан тотоп тарта[#] ла:

— Ҡойҙоҡ!— ти.— Әсәй, ҡала әле бесәй ҡойҙоғо!— тип шарҡылдап көлә...

«Ҡалай мәрәкә төш күрәм!..— тип уйлай Емеш.— Эйе, теш күрәм шул... Йә инде, өн генә булһасы...»— Үҙе һаман ҡуҙғалмай.

— Аллага шөкөр... Улым имен-иҫән ҡайтты,— тип ҡыуана Таиба әбей.— Хоҙай тәғәлә зарыбыҙҙы ишеткән икән!.. Тап сәхәр ваҡытына ғына ҡайтып етеүең үҙе бер мөғжизә бит әле... Бына бит, бергәләп ҡыуанышып сәхәр ашап ултырабыҙ... Йә, ошонан һуң, донъяла мөғжизә тигән нәмә юҡ тип әйтеп ҡара инде?!

«Төштә ҡоҙағый ҡалай һейләнсәк икән дәһә... Ә апайым менән еҙнәм төштә лә барыбер шул... Ауыҙҙарынан һүҙ сыҡмай...»— тип уйлай Емеш. Үҙе уяныуҙан ҡурҡып хатта тын да алмай һымаҡ.

— Аҡтар үҙҙәре үк килеп ҡотҡарып ебәрҙеләр тиһең бит әле? Нисек шулай булды һуң был, улым? Ниңәлер быға һис тә баш етмәй тора бит әле,— тип Таиба әбей, улының һүҙенә лә, уны күреп ултырған үҙ күҙҙәренә лә ышанмаған кеүек, ҡабат-

ҡабат һорап ала.— Төптө үҙҙәре сығарҙы ла ебәрҙе тигенсе?! Хаталанмайһыңмы икән, улым? Бәлки, ҡыҙылдарҙыр? Улар ошо тирәлә һуғышып йөрейҙәр тигән һүҙҙәр йөрөй ҙә баһа!..

— Әсәй, ул тиклемен тикшереп, төпсөнөп торманым да мин. Келәттен. биген асып:

— Сығығыҙ! Һеҙ иректә! һеҙҙе бер ғәйепһеҙгә бикләп тотҡандар!— тип ҡысҡырған үтә яғымлы, хатта бик таныш бер тауышты ғына хәтерләйем... Уның аръяғы тептө иҫемдә юҡ... Хатта келәттән ҡалай йүгереп сығыуымды ла, нисек ҡайтыу юлына төшеүемделә иҫләмәйем... Күрәһең, көтөлмәгән ҡыуаныстан әҙерәк алмашынып киткәнмен, әсәй...

— Яғымлы тауыш, тиһеңме?—тип ҡабатлап һорай тағы Таиба әбей.— Таныш та тиһең бит әле... Иҫләргә тырыш әле... Шулай ҙа, нисегерәк булды һуң был?

— Эйе, әсәй. Яғымлы ғына ла түгел... Хатта-хатта... бик яҡын, таныш тауыш һымаҡ булды шул... ысын, әле булһа ҡолағымда яңғырап тора, әсәй!—тип, Хисбулла һөйләгән һайын ашыға, хатта үҙенә һис тә хас булмаған ярһыуға күсә барҙы ла, ҡапыл ҡото осоп, серле бышылдауға күсте.— Аһа, тап Хаммат агайҙың тауышы һымаҡ булды шикелле был, эсәй?! Бымы нисек анларға?! Ысын-ысын, кәүҙәгә лә уның шикелле бик елле кеше ине! Күҙемә шулай салынып ҡалғайны һымаҡ... Әллә... Бәлки, ул, әсәй... Тегеләрҙен. кейемендә...

— Ҡуй, беҙҙе ҡурҡытып бушты һөйләп ултырма әле, атаһы,— тип, Бибеш уның һүҙеп бүлде.— һаташма!

Таиба әбей тын да алмағандай улына оҙаҡ теклэп ултырҙы. Унан ҡаты итеп:

— һин был шигенде берәйһенә әйттецме?—тип һораны.

— Юҡ, әсәй. Әле генә башыма килде бит был уй!

— Улай булһа, онот,— тип, тағы ла ҡатыраҡ иҫкәртте Таиба әбей.— Ҡабат ундай алйот һүҙҙе теленә түгел, башыңа ла килтермә. Аҡтар һеҙҙе үҙҙәре ҡайтарып ебәргәндәр. Рәхмәт уларға. Ишетәһеңме?!

— Ишеттем, әсәй,— тине Хисбулла, тағы элеккесә тынлаусам балаға әйләнеп. Ләкин, күрәһең, йөне тынманы. Оҙаҡламай тағы шул һүҙгә ҡайтты. Уйлап, яйлап, күҙ алдына килтереп ентекләп хәтерләй-хәтерләй, тағы һөйләргә кереште.

— Әсәй, Хәлим ағайҙың белеше, волоста конторҙа эшләгән теге Метрей ҡарт та шулай тигәйне лә ул. Аҡтар үҙҙәре коткарҙы, тигәйне. Уға бөгөн өйөнә ҡайтып, тамағына алып килергә рөхсәт иткәндәр икән. Ул һыбай беҙҙе ҡыуып етте лә, бөгөнгө хәлде мәҙәк итеп һөйләп китте.— Бына бер саҡ, бөгөн, кискә табан ғына, Ырымбур яғынан бер эскадрон аҡтар волоска килеп инде, ти. Бөтәһе лә шәп аттарҙа, шәп кейемдәрҙә. Штыктары, шашкалары ялт итеп тора. Офицерҙары бигерәк тә шәп, ҡаты ҡуллы, баһадир кәүҙәле кеше икән, ти. Беҙҙең старшина Сергей Хитров уның ҡаршыһында күпкән "корһағын ҡапайтып, тура баҫырға тырышып ҡына торҙо, ти, көлә. Ә теге офицер, ти, башта волостағы тәртипте һорашты, халыҡтын актарға ярҙамы нисек, һинән, бындағы беҙҙең власть вәкиленән, халыҡ ризамы, ти. Сергей ҡарт, халыҡты ҡулында нисек дер ҡаҡшатып тотоуы менән маҡтанмаҡсы булып, келәттә бикле ятҡандар хаҡында һөйләй генэ башлағайны, теге офицер:

— Бир әле ҡарайыҡ, ниндәй эттәр икән улар?— тип исемлекте һорап та алды. Мин, тегене-быны йыйыштырған булып, туҙан-муҙан һөртөп, шунда, конторҙа йөрөп булашам. Үҙем күҙ осо менән генә ҡарайым. Сергей ҡарт өҫтәленән оҙон ҡағыҙ сығарып бирә, ти. Үҙе бик шәп кеше булып:

— Бына ул эттәр. Уларҙың бөтәһен дә ошо арала бүләмиттән уҙғарырға, тип торабыҙ,— тип әйтә, ти...

— Әй алла, ни өсөн!— тип калтыранып китә Таиба әбей.— Ни өсөн шул хәтле ҡанһыҙлыҡ?!

— Ҡандай ҡурҡыныс!..— тип башылданы Бибеш, иламһырап. Хисбулла шул уҡ тыныс йылмайыулы тауыш мснән артабан һөйләй:

Офицер исемлеккә оҙак ҡарап торҙо ла шундай ҡоро уҫал тауыш менән:

— Быларҙын. ғәйептәре нимәлә?— тип һораны, ти.

— Аллаға шөкөр. Күрәһең, яҡшы күцелле офицер булгандыр.

— Күрәһең, бөтә аҡтар ҙа йән ҡыйгыстар түгелдер...

— Шунан, ти, Сергей ҡарт ни әйтергә белмәй тапанып, елкәһен тырнап торҙо, ти. Нимә әйтһен, ыҡ-мыҡ итә, яуап таба алмай. Бер старшинаны илле кеше атҡан, тип раҫлап булмай бит инде, ти. Теге офицер өндәшмәй генә исемлекте үҙенен кеҫәһенә һалып алды ла Сергей ҡартка аяҡ тибеп ҡысҡырҙы, ти.

— һин старшина түгел, ә кеше үлтереүсе! һин халыҡты беҙгә — аҡтарға ҡаршы аяҡландырыусы провокатор! Хәҙер үк был ғәйепһеҙ кешеләр бикле яткан келәткә мине алып бар!— тип әйтте, ти.

— Офицер әфәндем, бөгөн һун бит, ҡараңғы төштө. Иртәнсәк барырбыҙ. Хәҙер, әйҙәгеҙ,, минә ҡунаҡка рәхим итегеҙ,— тип мығырлана, ти, Сергей Хитров.— Аллаға шөкөр, һый-хөрмәт етерлек. «Зәм-зәм» һыуы ла бар... Ә теге офицер уға:

— Молчать! Ҡушҡанды үтә!— тип тағы ла ҡатыраҡ ҡысҡыра, иҙән емерә яҙып аяҡ тибә, шунан ҡартың, суска шикелле мышҡылдап, йүгереп китә, ти...

һеҙҙе, тотҡондарҙы, сығарғанды офицер үҙе ҡарап, барлап торҙо. Тотҡондар китеп бөткәс, Сергей ҡартҡа:

— Әгәр тағы шулай халыҡты нахаҡҡа ыҙалаһаң — һинен, үҙенде атасаҡбыҙ,— тип иҫкәртте.— Беҙгә тылды дошманға әйләндереп яткан старшина кәрәкмәй. Аңланыңмы, һимерткән сусҡа!—тип екерҙе, ти.

— Аңланым, бик аңланым, офицер әфәндем,— тип бейей, ти, Сергей ҡарт. Үтә ҙур ҡорһағын эскә тартып, тура баҫмаҡ булып маташа, ти. Ә теге, дошман, ҡаҙан ҡорһаҡ, ҡарышҡан шикелле ыжламай ҙа, унын, һайын ҡапайыбыраҡ алға сыға, ти, Метрей. Рәхәтләнеп көлә... Шундай мәҙәк ҡарт икән ул Метрей...

Быға са тауыш-тынһыҙ тыңлап ултырған ҡатындар, ахыры түҙемдәре бөтөп, икеһе бер юлы һорап ҡуйҙы:

— Шунан?

— Артабан нисек булды?!

«Ҡалай мәрәкә төш!..— тип уйлай Емеш.— Өнөмдә булһасы...» Унан күҙҙәренең нисек йомолғанын да тоймай, ҡаты йоҡоға сума.

— Шунан,— тип тағы яй ғына дауам итә Хисбулла,— теге офицер волостағы аҡ һалдаттарға:— Бында тыныс халыҡ менән булашып тик ятыу етәр һеҙгә. Хәҙер үк аттарығыҙға атланығыҙ. Минең командала Каширин отрядына ҡаршы һуғышҡан частарға ярҙамға китәбеҙ!— тип белдерҙе, ти. Бындағы һалдаттарҙың офицеры, сержантмы, старшинамы шунда, ниҙер әйтеп ҡаршы төшмәксе булғайны ла, теге офицер уны шул ерҙә атып йыҡты, ти. Ҡалған һалдаттар тауыш-тынһыҙ яцы офицерҙың бойороғон үтәнеләр, ти.

Офицер китер алда старшинаға тағы бер тапҡыр ҡаты иҫкәртергә онотманы, ти.

— Халыҡты рәнйетмә! Тылды йомшартма! Әгәр бойороҡто үтәмәһәң, мин икенсе килгәндә һине лә ошо эт кеүек итеп атып китермен. Ишет!— тип әйтте, ти.

Сергей Хитров эсен тажмайтып:

— Тыңлайым, офицер әфәндем,— тип, честь биреп тороп ҡалды, ти.— Шулай итмәй хәле юҡ шул, теге бәһлеүән офицерҙың бер сиртеүенән һытылырға тора бит старшинаң!— тип кинәнеп килә ҡарт. Метрей ҡартты әйтәм әле, үҙе, нисектер, төптө йор һүҙле, көләс йөҙлө булып киткән һымаҡ. Әллә, әсәй, был ваҡиғала, ысынлап та, берәй сер барын беләме икән ул? Әллә теге офицер тигәнебеҙ...

— Төрле хәл булыуы мемкин,— тип, хафаланып, улының һүҙен бүлде әсәһе.— Әммә был тилереп-ҡыйралып яткан донъяның хәлдәренә төшөнергә беҙҙең кеүек ябай кешеләрҙең башы етерлекме ни... Шуға күрә, өндәшмәүҙән яҡшыһы юҡ инде... Беләһең бит, боронғолар ни әйткән? «һүҙ утыҙ



ике тешен. араһынан сыҡтымы — оето! Тота алмайһың», тигән. Шулай бит... «Әйтер һүҙен. көмөш булһа, тик тороуың — алтын», тип тә әйткәндәр... Ошоларҙы иҫендә тот та тын... Иҫән-һау ейгә ҡайтканың өсөн аллаға ғибәҙәт ҡыл... Беҙгә хәҙергә шул бик еткән... Йәгеҙ, аллаға шөкөр тип әйтәйек тә, телде тешләйек...

Бөтәһе лә тынып ҡалды. Таң етеп килеүен белдереп, тауыҡ кетәгендә әтәстәр ҡысҡырырға тотондо.

## XVI

Дошман был тәцгәлгә иң ҙур көсөн туплағайны. Партизандар армияһы Ҡариҙел аша сығыу есән уңайлы тип һайлаған урынға ин, якын мөһим оборона һыҙығы ине был. Бер өҙлөкһөҙ команда — атака артынан атака... Артиллерия, пехота, кавалерия... Әйтерһен, ер-күк бергә ҡушылып, тотош бер шартлау, геүләүгә әйләнгән бегөн... Ә артта ярһыу тау йылғаһы Ҡариҙел менән һуңғы көрәш бара. Халыҡта күпме ат, арба бар — бөтәһе бүрәнә, ағас-таш ташырға егелгән. Ауылдын, ун биш йәшлек малайы ла, алтмыш йәшлек ҡарты ла үҙе теләп бүрәнә күтәргән. Сапсын ат кеүек ҡулдан ысҡынырға, һәр ҡаҡҡан свайҙы тартып-һурып алып ҡасырға маташҡан мәкерле ҡара тулҡындарҙы нисек тә йәһәтерәк ауыҙлыҡларға ҡәһет иткән саперҙар, кес еткеһеҙ бүрәнәләрҙе еңел күтәреп, ҡырмыҫҡа кеүек ҡайнашалар. Арыу-талыуҙы ла, ауыртыуҙы ла тоймайҙар, түбә өҫтендә шартлаған шрапнелдәрҙе лә, зыйылдап, гөрһөлдәп яуып торған пуляларҙы, сиарядтарҙы ла ишетмәйҙәр һымаҡ... Улар өсөн был минутта донъяла бер генә маҡсат йәшәй, бер генә тойғо уларҙы хәрәкәткә килтерә. Ул — Ҡариҙел аша күпер һалыу. Күперҙе бер тәүлектән дә оҙаҡҡа һуҙмай һалып бөтөргә, күп меңле армияны уң яҡ ярға сығарыуҙы тәьмин итергә!— Баш командующийҙың бойороғо шундай. Партизандар армияһының артабанғы яҙмышы ошонда, Ҡариҙел ярында хәл ителә хәҙер... Ә бит ул яҙмыш — ил яҙмышы менән бәйләнгән!

Партизандар дошман ҡыҫымын бер-бер артлы кире ҡағып, ҡаты оборона һуғыштары алып бара. Бигерәк тә үҙенен тачанкаһы менән бер түбәләс өҫтөнә йәтеш урынлашып алған Тимербай тирәһендә үлемесле һуғыштар бара. Сөнки был төҙөлөп яткан күпергә иң якын оборона һыҙығы. Аҡтар, ошо тәңгәлдә партизандар оборонаһын өҙөп, күпергә уҙырға, партизандар армияһын ҡоторонҡо ҡара тулҡындар ҡосағына ташлап тар-мар итергә тырышалар.

Бына инде көн кискә һарыҡты. Иҫәбе-һаны булмаған атакаларҙынтағы береһе кире ҡағылды. Партизандар ҡыйыу маҡсатҡа тағы ла яҡыная төштөләр: күпер өлгөрәсәк. Улар тиҙҙән, уң яҡ ярға сығып, дошман эҙәрләүенән ҡотоласаҡ!

Дошман пехотаһының нисәнселер атакаһын кире ҡаҡкан арала Тимербай:

— Булмаҫ! Үтә алмаҫһың, әфәндем!—тип ажарланып ҡысҡырып ебәрҙе лә тере ҡалған берҙән-бер ярҙамсыһына йылмайып ҡараны:— Шулай бит, Иван браток!

Аяғынан яраланған йәш сыуаш егете, ҡуйы керпектәрен һирпелтеп, Тимербай янында ятҡан патрондарға ымланы:

— Лента ла шул ғына... Граната ла икәү генә...

— Ничего, туған. Ул да ҡорал... Ә һин яранды яҡшыраҡ бәйлә лә ситкәрәк, уңайлыраҡ урынға ышыҡлан... Был патрондарҙы атып бөтөр өсөн бер кеше лә етә...

Йәш егет үҙ һүҙләнеп баш һелкте:

— Мин йәшенмәйем. Уцдағы пулемет янына китәм. Теге түбәләс артындағы тынды бит. Бәлки, патрондары ҡалғандыр... Бәлки, яралыларға ярҙам кәрәктер...

— Аяҡһыҙмы?

— Шыуып була...

Тимербай, манлайынан, сәс араларынан ағып төшкән һөрөмлө тир тамсылары аша ҡаты ыҙаланып, әммә сая ныҡышып шыуа-шыуа үҙенән һаман алыҫлашып барған егеткә йәлләпме *әллә* күңелдән бәхилләшепме, бер аҙ ҡарап торҙо ла ҡайтанан пулеметына эйелде. Тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалып, байҡап алды. Күҙ күреме етерҙәй бөтә аҡлан аттар, кешеләр мәйете менән тулған. Яҡ-яҡта гөрһөлдәгән туп, пулемет тауыштарына яралыларҙың шомло ыңғырашыуы ҡушыла...

«Их-х... патрондар ғына әҙерәк шул...— тип ауыр ғына көрһөнөп алды Тимербай. Ләкин шунда уҡ, үҙ күцелен үҙе күтәрер өсөн, сәмләнеп өҫтәп ҡуйҙы:— Ничего, беҙ һуғышырбыҙ әле!.. Аҡтарға партизандарҙың кем икәнен тағы-тағы танытырбыҙ әле. Шулай бит, ә, Иван? һуғышырға, еңергә! Главком нимә тине? Өҫтәлмә патрондар көтмәгеҙ... Өҫтәлмә көскә иҫәп тотмағыҙ... Артта — дошман. Алда — Ҡариҙел... сигенер урын юҡ... Шулай тине бит баш командующий?! Шулай булыр. Сигенмәбеҙ. Уҙармабыҙ дошманды!.. Эйе бит, туған?! Ишетәһенме, Иван, беҙҙекеләр, блюхерсылар нисек аталар!»

Тимербай пулеметын тағы ла уцайлыраҡ позицияға күсерҙе, грана.таны йәтешләп үҙ янына һалып ҡуйҙы, һалҡын ҡан менән һуңғы алышҡа әҙерләнде. «Тағы бер ныҡ ҡына алышып алырға була әле!..»—тип сая йылмайып ҡуйҙы. Был минутта уны үҙенән ни кәтелгәнде тулыһынса аңлап үлемгә барған батырҙарға ғына хас ҡыйыу тыныслыҡ солғап алғайны.

Дошман оҙаҡ көгтөрмәне. Күрәһең, бынан алда пехота, кавалерия көсө менән яһалған атакаларыныц уңышһыҙлыҡҡа осрауын иҫкә алып, артиллериянан башларға булды. Инде былай ҙа сафтары һирәгәйеп, бер нисә пулемет нектәһе генә иҫән ҡалған кескәй аҡланға бик оҙаҡ снарядтар, шрапнелдәр, пулялар яуҙырып торҙо. Бер аҙҙан был ҡолаҡ тондорғос канонада ҡапыл мәкерле тынлыҡ менән алмашынды. Оҙаҡламай ҡылыс күтәреп, ҡысҡыра-үкерә еабып килгән һыбайлылар күренде. һөлөктәй шыма ҡара юртаҡ менгән йәш бер офицер, айырата сая һөрәнләп, баш осонда ҡылыс уйнатып, йән-фарман сабып килә, сағыу, йәш тауыш менән бер өҙлекһеҙ:

— Ур-ра! Атакаға!— тип ҡысҡыра.

«Был ниндәй таныш ҡиәфәт? Ниндәй таныш тауыш?!— Тимербай ашыҡмай ғына пулеметын төҙәй.— Яҡынырак, яҡыныраҡ кил, әфәндем... Күрәйем, кем икәнеңде беләйем... Бая ла бер нисә атакаға шулай килден,..- Нинә минең пуля һине аяны икән? Ғәжәп... Күрәһең, ҡасҡанда ла алдан сабаһыңдыр һин, әфәндем?!»

Тимербай дошманды тағы ла яҡыныраҡ ебәрергә самалап торған арала, ун. яҡтағы пулемет сая бытылдап дошман теҙемен киҫкеләй башланы.

— Молодец, Иван! һай-й, мырҙам, былай булғас ни!..

Дошман кавалерияһынын. айырата ажарланып өҫкә менеп килгән төркөмөнә төҙоп, инде Тимербай ҙа пулеметтан ут асты. һулдан да пулемет тауыштары йышайҙы.

«һай-й, әле беҙ... мырҙам!..»

Дошман кавалерияһы киҫешкән ут эсендә был юлы ла ҡаушап ҡалды. Аттар, кешеләр тағы өҫтө-өҫтөнә ауҙы, шартлау, гөрһөлдәү, ыцғырашыу тауыштары бөтәһе бергә •Ҡушылып, даланы йәһәннәм утына әйләндерҙе, зәңгәр күкте ҡара һерәм баҫты... Шулай ҙа көстәр тиң түгел ине. Кылыс күтәреп, йән-фарман ябырылып килгән һыбайлыларҙың иҫәбе-һаны юҡ һымаҡ ине. Ә патрондар?.. Улар бөтөнләй кәмене. Бына теге һылыу, йәш офицер һаман ҡылыс болғап, аҡланда йән-фарман сабып йөрөй, һөрән һалып һалдаттарын алға әйҙәй... Тукта, ни өсөн һун. әле минең пулям уны алмай?

Тимербай ажарланып пулеметынын. рычагына баҫты:

— Мә, әфәндем, ал!

Ләкин пулемет был юлы бер тауыш та сығарманы: «Ах, бер патрон да ҡалмаған икән!..» Тимербай ҡабаланып граната ырғытты: «Ялтанып өлгөрҙө, яуыз...»

Тимербай һуңғы гранатаһын алып тороп баҫты:

— Йә, кемдең үлгеһе килә — яҡыныраҡ килегеҙ, әфәнделәр!

Шул саҡ уныц ҡолағына бик таныш бер тауыш сағылды:

— Тереләй алығыҙ, тереләй! Ҡыҙыл батырҙы күрәйек!

Шул уҡ ваҡытта, яҡындан ғына сабып үткән баяғы офицерҙы күреп ҡалды: «Ах, яуыз... Был бит теге... беҙҙен...»

Тимербайҙың башына килгән был һуңғы уй ҡаты шартлау менән өҙөлдө. Ул үҙен тереләй тотоп алырға тип төрлө яҡтан шыуышып килеп еткән аҡ һалдаттар менән бергә үҙен граната менән шартлатҡайны.

* *
*

Тимербайҙар һаҡлаған оборона һыҙығын өҙөп үткән аҡтар йыртҡыс тауыштар менән ҡысҡыра-үкерә алға сапты:

— Күпергә барып етергә! Партизандарҙы тар-мар итергә!..

Ләкин һуғыштың иң ауыр, хәл иткес урынына йылдам ярҙамға килеп етеүсән Каширин һыбайлылары бында ла аҡтарҙың юлын быуҙы. Яҙғы ташҡын шикелле ҡеүәтле ябырылып килгән был данлыҡлы отрядтын. аңғармаҫтан килеп сығыуы аҡтарҙың ярһыуын бик тиҙ баҫты. Күптәре ҡыҫымды күтәрә алмай кире боролдо. Тик баяғы Тимербай күргән йәш, йылғыр офицер һәм уға эйәргән бер төркөм ҡыйыу һалдаттар ҡылыстарын зәһәр йылтыратып, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй, ҡысҡыра-һөрәнләй алға сапты. Аралар йәшен тиҙлегендә яҡынайҙы, күҙ асып йомғансы ике ғәскәр йөҙгә-йөҙ килеп бәрелешсе, сәнсеш-киҫеш, үлтереш китте. Ҡул һуғышына оҫталыҡта ике яҡ та бер-береһенән ҡалышмай ине. Берсә өйкөлөшөп, берсә таралышып-ҡыуышып, далаға һыймай һуғыштылар. Тирә-яҡты ат сырылдаған, ҡоростар сыңлаған, ҡысҡырған, ыңғырашҡан тауыштар баҫып китте.

Күпме шулай дауам иткәндер был сая һуғыш, уныһын бер кем дә белмәне. Ләкин дошмандың тамам паникаға бирелә башлауы ине. Башта берәм-һәрәм, аҙаҡ күпләп кире әйләнеп сабыуҙар һаман йышая барҙы. Ахыр килеп, тик бер урында ғына ҡаты һуғыш бара ине. Үҙ янында дошман һирәкләнгән бер арала Иштуғандың иғтибары ла шул яҡҡа йүнәлде:

«Әһә, теге алдан сабып килгән офицер унда икән... Беҙҙең Каширин да... Командирға ярҙамға барырға кәрәк!..»— тип уйлап алды ул. һәм тап шул сая йәш офицер менән йөҙгә-йөҙ килеи алышырға ниәтләп, һуғыштын, ин, ҡыҙған урынына дөрөп инеп китте һәм ҡылысын аяуһыҙ һелтәп, юл яра-яра, офицерға яҡын барырға тырышты. Ә ул йылан шикелле йылғыр, хатта уйнап-шаярып ҡына һуғыша һымаҡ ине. Ахыр килеп бына ул офицерҙың юлына арҡыры төштө. Ҡылысҡа-ҡылыс бәреп, ике тигеҙ көс береһе лә өҫтөнлөк ала алмай, бер урында ат бейетеп торҙо, берсә ҡыуышып елде, осҡондар сәсрәтеп, ҡылыстар бәрелеште. Бара торғас, Иштуған ниндәйҙер бер арала, әйләндерә һелтәп, офицерҙың ҡылысын осора һуҡты.

Шул саҡ офицер, ҡурҡыуҙан бигерәк аптырауҙан:



— Иштуған!—тип ҡысҡырып ебәрҙе.— Был һинме?! Унан күҙ асып йомғансы кире боролоп сапты.— Отряд, минең арттан!

Аҡтарҙын, ҡалдығы уның артынан эйәрҙе.

«Был Закир булды ла баһа!— тип ҡуйҙы Иштуған да, ғәжәпләнеп.— Бына һин уны, иблесте!..» һәм ҡабаланып атып ебәрҙе. Закирҙың аты, ал аяҡтарын күтәреп, үрә баҫып торҙо, арт аяҡтарында йәһәт-йәһәт тыпырсынып бейеп алды, унан тәкмәсеп ергә йығылып төштө. һалдаттар, ауып ҡалған офицерҙарына әйләнеп тә ҡарамай, ары саптылар.

«Ах, елкәнһеҙ карап... Йә, ни өсөн, кем өсөн булдын, харап?!.— тип көйөнөп алды Иштуған.— Ни хәтле алйотлоҡ!..» Ул, аҡтар яғында бер башҡорт полкы хәрәкәт итеүен ишетеп белһә лә, Закир унда булыр, үҙенә уны атып йығырға тура килер тип, әлбиттә, бығаса башына ла килтермәй ине. һуғышта ниндәй генә көтөлмәгән хәлдәр булмай бит...

Иштуғанға Закир ауған ерҙе барып ҡарарға ла, был хаҡта бүтәнсә уйларға ла тура килмәне. Ҡорбан булғандарҙы күмеп блгөрөргә, тағы яңы һуғыштарға әҙерләнергә кәрәк ине.

Оҙаҡламай Ҡариҙелдең текә яры өҫтөндә ҙур бер уба барлыҡҡа килде. Оло Эйек буйынын ярһыу йөрәкле, изге теләкле батыр ир-егете Тимербай ҙа шунда ятып ҡалды.

Уның тачанкаһынан Иштуған ике әйбер алды. Уның береһе — ағас ҡынға һалынған баяғы еҙ ҡурай ине. Ул инде ҡомартҡы ҡурайҙы әле бер, әле икенсе ҡулына алып әҙ гснә уйланып торҙо: «Бына бит инде, ҡурайсыһыҙ ҡалғас, ҡурай ҙа енһеҙ шул... Әллә уны эйәһенен, ҡәбере өҫтөнә һалып ҡалдырайыммы?! Әллә алып китәйемме?!. Юҡ, тыуған яҡҡа алып ҡайтайым... Оло Эйек буйы ҡурайсылар тыумаҫ ср түгел бит... Тимербай ағайҙан ҡалған еҙ ҡурайҙың тел аҫҡысын табырҙай егеттәр үҫер әле унда ла...»

Иштуған ҡурайҙы ҡынына һалып үҙенең бнл ҡайышына тағып алды. «Бынан ары үҙем менән йөрөрһең. һинен, тел аҫҡысынды белмәһәм дә, йөрәгенде аңлайым бит мин...»

Икенсе ҡумта йоҙаҡлы ине: «Үҙе енел генә... Нимә икән эсендә?.. Тукта әле, теге ваҡыт, Закир ҡасып киткәндә белгәс, мин Тимербай ағайға йүгереп барғайным. Ул ошо ҡумтанан кескәй генә тоҡсайҙарға һалынған тары бөртөктәре алып, таратып ҡарап ултыра ине. Нимәгә кәрәк булды икән улар? Ниңә һораманым икән шул саҡта?! Бына бит кеше ниндәй ул! Тере саҡта бер-береһенең ҡәҙерен белмәй, һөйләшер һүҙен дә һөйләшмәй... Ә үлгәс, үкенгән була... Илай...

Ә мин хатта илай ҙа алмайым... Күнел таш булып ҡатты ла ҡуйҙы... Их-х... Тимербай ағай, Тимербай агай... Ер тырнап эҙләһәң дә ҡайтарып булмай инде һине...»

Иштуған, күҙен йома биреп, тағы бер аҙ хәлһеҙ бәүелеп торҙо: «Мин бынауы һатлыҡ Закир ҡаскын өсөн көйөнгән булып, ул сакта Тимербай ағайға иғтибар ҙа итмәгәнмен бит, ахмаҡ! Эйе, эйе, бөгөнгөләй хәтеремдә, ул миңә ниҙер әйтмәксе, үҙ күңелен нурландырып торған изге серен һөйләмәксе ине шул саҡта... Нурлы күҙҙәрен ҡалкып килгән ҡояшҡа төбәп: «Беләһеңме, мин быларҙан нимә эшләргә уйлайым?!»— тип, бөтә йәне-йөрәге менән яҡтырып торғайны... Ә мин әҙ генә лә иғтибар итмәгәс, унын, йөҙө һүренкеләнеп киткән һымаҡ булғайны... Их, ташбаш... Тимербай ағайҙын, ғали йөрәгенә төшөнөрлөк аң бармы ни миндә?..

Асҡысы ҡайҙа икән был ҡумтанын,? Асып, унын серле хазинаһын күрергә ине бит әле... Хәҙер мин уны нимә елкеидереүенә төшөнә лә алыр инем, бәлки...»

һәм бына, бөгөн нисәнселер тапҡыр, Иштуғандын, тарҡау уйҙарын ҡырт киҫеп, тағы хәүефле һуғыш ораны яңғырап китте.

— Аттарга!

Егеткумтанытиҙ ғенәэйәр ҡашағаһына бәйләне лә, уктай атылып, алга сапты.

— Елдек, саптар!

Арыу ҙа, һағышлы уйҙар ҙа булмаган кеүек юҡҡа сыҡты. Николай Каширин үҙенең һуғышсан һыбайлыларын ярһыу Ҡариҙел кисеүен штурмларга алып китте. Отряд был ваҡытта баш командующийҙан, уң яҡ ярга сығып, плацдарм яуларға, аҡтарҙы партизандар армияһынын юлынан алып ырғытырға тигән ашығыс бойороҡ алгайны.

## XVII

Хаммат ауыр, тыныcһыҙ йоҡонан ҡара тиргә батып уянып китте. Ниҙер, кемделер эҙләгәндәй, ҡабаланып яҡ-яғын ҡапшап алды. Бөтәһе лә ғәҙәттәгесә ине: Аҫта, түшәк урынында бесән, баш аҫтында — шинель... Аяҡ та, баш та ағас таяуға терәлгән. Шик юҡ, ул ҡыуышта ята. Ашыҡ-бошоҡ ҡына һупаланған ҡыуыш, ҡалай ятһа ла, уға тар. Баш та, аяҡ та йә таяуға барып төртөлә, йә ҡыуыштан артып сыга. Әлбиттә, бесәй кеүек йомарланып ятһан,, ҡыуышҡа һыйырга була. Ләкин шундай дәү кәүҙә менән, етмәһә, йән дә, тән дә бик үк тыныс булмағанда, йомарланып күпме ятаһыщ...

Ул, йөрәгенең күкрәккә һыймай тупылдауына ҡолаҡ һалып, уйланып ятты: «Йөрәк ярылырҙай төш бнт!.. һай-й, Сәлимә, Сәлимә... Нинә төш кенә булып ҡалдын. икән?! Эйе... Төш кеиә... таң алдында күренеп ҡалған татлы һәм ғазаплы төш кенә...»

Ул, башҡаларҙы уятмаҫ өсөн, әкрен генә тороп ҡыуыштан сыҡты. Тирә-яҡҡа моңһоу ҡараш ташлап, оҙаҡ ҡына ҡыуыш алдында торҙо. Иртәнге шәфәҡ ҡыҙыл атлас ҡанатын тотош офоҡҡа йәйеп, наҙлы иҙрәп ятҡан мәл ине. Кеше ҡулы теймәгән ҡуйы, бейек үләндәрҙә ысыҡ ынйылары емелдәй, тауҙар, урмандар мен төрлө сәскә, үлән еҫе менән тулышҡан, күгелйем томан менән күмелгән, тан. ҡоштары изге ҡояшҡа мәдхиә йырлай. Йөҙ йәшәр ҡарағастар, мөһәбәт имәндәр донъяла һалҡын ҡыш барлығын да, үҙҙәренен, күп ботаҡтары ҡороп-һынып төшөүен дә онотоп, ошо илаһи моң аҫтында рәхәт ойоп тынып ҡалғандар... Эйе, ергә таң һылыуы килә. Тантана, ҡыуаныс! Ләкин Хаммат, гүйә, быларҙың береһен дә күрмәй ҙә, тоймай ҙа... Ҡулдарын артҡа ҡуйған да, ҡайҙа, ни өсөн атлағанын белмәй, таң һыҙылған яҡҡа табан яй ғына бара ла бара. Ул әле һаман шул бая күреп уянған йөрәк тетрәткес төш әсирлегендә. Унын күҙ алдында һаман әле тере Сәлимәһе баҫып тора, уйҙарында төштөң хәүефле күренештәре кабатлана: «Бына улар Сәлимә менән икәү, Тимаш баярга бесән эшләп, Көплө урманы буйында яталар... Икеһе лә йәштәр, матурҙар, бәхетлеләр... Йәйҙең ҡыҙыу мәле... Сәлимә бөтөилəй йәш кенә бала кеүек... Ялан аяҡ, ялан баш йүгереп йөрөй. Унын өҫтөндә йоҡа ғына алһыу кесейә күлдәк... Тулҡынлы ҡалын ҡара сәстәрен һүтеп ебәргән... Ә күҙҙәре... моңһоу ҙур ҡара күҙҙәре Хамматты берсә иҫ киткес . һөйөү-яратыу, саҡырыу менән иркәләйҙәр, берсә ниндәйҙер үпкәсел, йә йөрәк өшөткөс ят, ҡырыҫ ҡараш менән ситкә тибәреп аҙаплайҙар...

— Сәлимәкәй, һылыуым!— ти Хаммат, өҙөлөп,— килсе... Бер генә һөйәйемсе үҙекде!

— Йәне^м!— тип бышылдай Сәлимә унын, ҡолаҡ төбөндә.

— Йәнем, йөрәгем минең!..

Иҫ киткес татлы наҙ, тел менәп әйтеп биргеһеҙ оло бәхет солғап ала Хамматтын. бөтә тәнен.

— Сәлимәкәйем, һылыуым!..—тип ҡабатлай ул эстән генә. Ҡайнар ҡосағына алып һөйгәнен иркәләргә теләп, ҡулдарын һуҙа. Ләкин Сәлимә унын ҡул аҫтынан шыуып китә лә, төптө икенсе урындан шаян йылмайып, тағы баяғы тылсымлы һүҙен ҡабатлай:

— Хамматым, йәнем! Өҙелөп һөйгән йәрем минең!..

— Туктаптор...Ҡасма, һылыуым!..Мин һине хәҙеркыуып етәм...— ти Хаммат. Бәхеттән ярһып, унын артынан йүгерә. Ә Сәлимә уйнай-көлә тағы ары ҡаса... Шулай ҡыуыша-ҡыуыша улар ҡара урмандар, түбәләре күккә олғашҡан осло ҡаялар донъяһына барып инәләр. Тирә-яҡта бүреләр өйөрө

олой, ҡот осҡос эре айыуҙар имәндәрҙе йыға баҫып үкерешеп йөрөй, аяҡ аҫтында ағыулы йыландар ыҫылдап шыуыша, ҡарағас ҡыуыштарынан супайҙар таҫрайып ҡарап тора, һалҡын, еүеш ҡанаттары менән битте-ҡулды сирҡандырғыс һыйпап, ярғанаттар оса... Сәлимәгә былар бер ни ҙә түгел. Ул һаман шулай көлә-шаяра, таштан ташҡа, ағастан ағасҡа һикереп бейеккә, ҡара урманлы ҡая тауға үрмәләй... Хамматтың күңелен хәүефле, шомло тынысһыҙлыҡ биләй бара: «Берәй йыртҡыс өҙгөләп ташламаһын... Йылан сағып ҡуймаһын... Тау артында аҡтар сатыр ҡороп урынлашҡан... Аҡтар Сәлимәне тотоп алһа... Мыҫҡыл итһә... Йәһәтерәк ҡыуып етергә, тотоп туҡтатырға кәрәк».

— Ах, һин шаян ҡыҙыҡай!... Ниңә ҡасаһың һин минән?.. Туҡтасы!..—тип ҡысҡырмаҡсы була ул тағы. Ләкин был уйын ҡысҡырып әйтә алмай, өнө быуыла, Сәлимәһен ҡыуып та етә алмай, быуындарының хәле бөтә, ә Сәлимә һаман уйнай-көлә, күбәләк шикелле еңел осоп, һаман бейеккә күтәрелә. Ахыр бына ул баш әйләндергес бейек ҡара ҡаянын, ин, осона менеп баҫты, сәстәрен бөҙрә болоттарға һирпелтеп, түбәнгә, Хамматҡа йылмайып ҡараны ла ашығып ҡысҡырып ебәрҙе:

— Йәһәтерәк бул, йәнем!..

— Ах, шаян бала! Хәҙер менеп етәм, тотоп алам. Бынан ары минең ҡулдан ыҫҡына алмаҫһың, ҡыҙыҡай!— тип Хаммат та был юлы ярһып ҡысҡырып ебәрә.— Әҙ генә көт, йәме!.. Менеп етәм, күтәреп алам... Ишетәһеңме, һылыуым?..

Тап шул саҡта Сәлимә иренә тағы бер тапҡыр сикһеҙ мөхәббәт, иркәлек менән төбәлеп ҡарай ҙа:

— Бәхил бул, йәнем!—ти. һәм шыңғыратып көлөп ҡая башынан упҡынға ташлана. Әйләнә-тирәләге бөтә тауҙар, урмандар, сәскәләр ҙә, гүйә, Сәлимәнең һуңғы һүҙен ҡабатланылар:

— Бәхил бул, йәнем! Бәхил бул...

Йөрәгенең әсенеүенә сыҙай алмай, Хаммат йоҡоһонан уянып китте.

Әле инде ул ошоларҙын, бөтәһен дә тағы бер ҡат күңеленән кисереп: «Аһ, Сәлимә...— тип ыңғырашып ҡуйҙы.— Йә, ниңә инде һин шулай үҙеңде һәләк иттең?.. Мине...»— Ул һалҡын тир баҫҡан маңлайын һыпырып алды. Был ваҡытта ул, үҙе лә аңғармаҫтан, ҡыуыштарҙан бик алыҫта, аҡлан ситендәге һылыу сыҡ ҡайынға һыйынып тора ине. «Аһа, әллә, иҫәрләнеп, уяу көйө төш күрә башланым инде?!. Был ниткән хәл? Йомшара башланды, ахыры... Ярамай, ярамай... Иртә әле, иртә!» Ул ауыр башын ҡаты һелкеп ҡуйҙы, унан ашығып ҡыуыштарға табан бороолдо: «Бәлки, ошо таңда Шаһиморат разведканан ҡайтҡандыр. Сәғитте лә табып алып ҡайтҡандыр.--»—тип өмөтлө уйға ла күсергә теләне. Әммә күңелде алдап буламы ни? Күнел, ни өсөндөр, Сәғиттең тере булыуына ла ышана алмай ине. Нисә тәүлек уҙҙы бит. Разведкага киткән кеше ни эшләп улай оҙаҡ юғалып торһон? Эйе, ниҙер һиҙенгәндәй, уны был юлы бер ҙә ебәргеһе килмәгәйне шул Хамматтың...

Уның булдыҡлылығына ышанмаған өсөн түгел, әлбиттә. Сөнки, был ут күҙле, мут һүҙле егет үҙен яҡшы разведчик итеп танытырға өлгергәйне инде. Уның разведка мәғлүмәттәре арҡаһында бит Ҡыҙыл Мәсеттә, Ермолаевкала, Яҡуп ауылында унышлы операциялар үткәрелде. Егеттең күҙе үткер, ҡолағы һаҡ, башы яҡты ине шул!

Шулай ҙа Хамматтын, Троицк, Ташлы, Ҡарғалы яҡтарына разведка яһау планы ла айырата етди ине. Шунда, Ырымбур тирәһендә, һуғыш алып барырға тейеш булған Ҡыҙыл Армия частарын осратып булмаҫмы, тип тә өмет итә ине. Шуға күрә был юлы разведкаға тәжрибәле һалдатты — Шаһиморатты ебәрергә булғайны. Ул яҡта аҡтар гарнизоны ла ҙур булыр. Сәғит йәш кеше, аҡтар ҡулына ҡабыуы бар. Язалап, отрядтың ҡайҙалығын әйттереп ҡуйыуҙары мөмкин... Беҙгә бит партизан отрядын мөшкөл хәлгә ҡуйыу ярамай... Көрәшәһе-алышаһы, еңәһе бар бит әле, тип уйлағайны. Ә Сәғит балаларса үпкәләне. Быны үҙенә ышанмау тип ҡабул итте. Урманға, тауға сығып ҡурай яһап алды ла көн буйы моңланып, ҡурай һыҙҙырып ултырҙы.

Хаммат уны, үҙенең Байрасы кеүек күреп, ярата ине. Уны киләсәк бәхетле тормош өсөн һаҡлап ҡалырға ла теләй ине. Ләкин Сәғит үҙ һүҙенән ҡайтманы.

— Мин бит шул яҡ кешеһе, юлдар ҙа, кешеләр ҙә таныш. Күрермен, һорашырмын, һөйләшермен...— тип ныҡышты.— Ут күҙ Сәғит кенә булып түгел, мен, күҙле Сәғит булырмын, ағай,— тип көлдөрҙө. Ахыр, Хаммат енелде:

— Ярар, бар, мырҙа, уңыш теләйем,— тине.

— Бер тәүлектә һеҙҙең янда булырмын, ағай,— тине егет. һәм Ыуары тауында булған тәүге һуғышта аҡ офицерҙан яулап алған йылғыр юртағына атланып, энер төшкәс, юлға сығып та китте... Шунан, ике тәүлек аҙаҡ, шул уҡ юл менән Шаһиморат китте. Уның китеүенә лә бер тәүлек... Ҡайтырға тейеш...

Хаммат аҙымын тиҙләтте. Үҙе лә һиҙмәҫтән, алыҫ уҡ китеп барған икән. Партизандар ашыҡ-бошоҡ яһап урынлашҡан ҡыуыштар ергә һырышҡан иртәнге томан эсендә күкһелләнеп, бик алыҫта һымаҡ, тоноҡ ҡына күренеп ята ине.

Был көндөң кисендә Шаһиморат разведканан ҡайтты. Киске шәфәҡ яҡтыһында, партизандарға ул йәш разведчик хаҡындағы фажиғәле ҡиссаны һөйләне.

Сәғиткә бары ун алты йәш кенә ине әле. Шулай ҙа әллә киң яурынлы, мыкты кәүҙәле, сығынкы яңаклы булғанға, оллә ҡыҫынҡыраҡ ҡуңыр күҙҙәренән етди, теремек аҡыл һирпелеп торғанға, үҙ йәшенән күп өлкән күренә ине шул. Уға йәш үҫмер итеп түгел, ә өлгөрөп еткән ҡыйыу егет итеп кенә ҡарап була ине. Эйе, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн бүккәнсе татып, йәшенән алда етешкән егет ине Сәғит. Шуға ла, күрәһең, ҡыҙыл партизандар сафында үҙенен. урынын тапҡайны ла ул. Дошман тылында барған партизан хәрәкәтендә үҙен ҡыйыу һуғышсы итеп танытырға ла өлгөргәйне. Шулай ҙа ҡайһы саҡта үҫмерлек тәүәккәллектәре лә ецеп китә торған булғандыр уны... Бына бит, аҡ офицерҙын, күкбуҙын уйнаҡлатып, кәпәскә, күкрәккә ҡыҙыл таҫма тағып, Иҫәнбәт урамынан бер генә үтһән ине тигән теләк һис кенә лә тынгы бирмәне. Бирмәне генә түгел, ә ниндәй ҙә булһа берәй мөмкинлек сығыу менән дөрләп ҡабынырға, егетте үҙе артынан эйәртеп алып осорға әҙер генә торҙо. һәм ул мөмкинлек килеп тә сыкты: Ташлы, Ҡарғалы, Ырымбур яҡтарына юл Иҫәнбәт аша үтә бит. Шулай булғас, ниңә унда тукталып, исмаһам, бер геиә тапҡыр булһа ла урамдан күкбуҙҙы юрғалатып үтмәҫкә! Әйҙә, ут күҙ Сәгиттең көндөҙ йондоҙ күреүенә ышанмаған малайҙар иартизан Сәғиткә күҙҙәрен таҫрайтып, телһеҙ ҡатып ҡалһындар! Уларҙын төм^өнә лә инмәй бит бындай юрға!

Согит, Оло Эйек кисеүенә килеп еткәс, ҡуйы таллыҡка боҫоп, кис етеүен көттө. Әгәр ауылда аҡтар булмаһа, ҡарацғы төшмәҫ элек урамдан бер елдереп үтергә лә Троицк, Ташлы яғына юл тоторға ине униц иҫәбе. Бөрлөгән ашап тал араһында йөрөгән малайҙарҙан һорашып, ауылда аҡтар юҡлығын белгәс, ул күптәнән бирле кеҫәһендә һаҡлап йөрөткән ҡыҙыл таҫмаларҙы алып күкрәгенә һәм бүркенә тағып алды. Унан тал төбөнэ салкан төшөп ятты ла татлы хыялдарга бирелеп, кисте көттө. Бына ул ағын кисеүҙән атына һыу эсерә-эсерә ашыҡмай ғына аръяҡка сыға, күкбуҙ юрғаны бейетеп, тыҡрыҡтан үтә, урамға барып инә, бер остан икенсе осҡа елеп уҙа, бүркендәге, күкрәгсндәге ҡыҙыл таҫмалар энерге ҡояш нурында мәк сәскәһе кеүек баҙлап яналар... Ин, элек сәүектәр, малайҙар, ҡыҙҙар урамға сыулашып сығалар...

— Аһа, был Сәғит тә баһа!

— Ут күҙ Сәғитте ҡарағыҙ әле!

— Эйе, ҡайһылай бәһлеүон еғет булып ҡайтҡап!

— Аты һуң, атын ҡарағыҙ! Ҡанатлы аҡбуҙ атҡа менеп алған даһа?!.



Әкренләп өлкәндәр ҙә урамға сыға. Шикле-шөбһәле ҡараш менән оҙаталар уны.

— Аҡтар күрһә, бирерҙәр әле аҡбуҙ атты!

— Ахмаҡ, тапҡан ҡыҙыл сепрәк тағыр саҡты!..

— Йәшәүҙән туйғандыр был!

— Юҡһа башы икеме ни кешенең...

Сәғит уйының ошо урынында, тәне сымбырлап китеп, торои ултыра: «Ысынлап та... Башым икеме ни минең... Ҡуй, ауылға инмәйем... Ҡараңғы төшөү меиән Ташлыға ҡарай һыҙам... Тегендә Хаммат ағай сабырһыҙланып көтөр... Таңға төйәккә ҡайтып етергә кәрәк...»

Аҡылы шулай дөрөҫ кәңәш бирҙе. Ләкин йөрәк?!. Йөрәк үҙенекен итте. Етмәһә, егеттең күҙ алдына ҡыйғас ҡашлы, нәҙекәй билле бер һылыуҙы ла килтереп баҫтырҙы. Был Сыуаҡай әбейҙең ейәнсәре Мәхмүзә ине. Ниңәлер уны күргән һайын күргеһе ғенә килеп тора ине Сәгиттең... Әммә ләкин күрһә, уны төрлөсә төртмә һүҙ әйтеп үсектереүҙән башҡаны белмәй ине.

— Мәхмүзәкәй, ниңә һине кәзә төкөй?

Мәхмүзә лә һүҙ керәштерергә әҙер генә тора.

— Кеше тип торам, ут күҙ Сәғит икән!

— Ут күҙ Сәғит түгел, ут йөрәк Сәғит тиген!

— Әй, ҡарпыш ҡолаҡ! һиңә ҡалған ти ут йөрәк булырга!

— Ҡарама ҡарпыш ҡолаҡҡа, ҡара ҡуш йөрәккә!

— Ҡуш йөрәкле егет көтөүсе булмай!

— Кем була?

— Үҙен. уйлап бел!..

Сәгиттең йөрәге өҙөлөп-һулкылдап һыҙлап китә: «Кем булырга һуң уға, был сәсән ҡыҙҙыи йөрәген яулар өсөн? 0 бына хәҙер Мәхмүзә ни әйтер икән? Ҡыҙыл партизан, разведчик Сәғиҙулланы күреп ҡараһын әле!»

Был уйҙан егеттең күңеле осар ҡоштай ярһып китте. Ошо минутта ул үҙенен. был телдәр ҡыҙҙы үтә лә һағыныуын да тойҙо. Уның иркә муйыл күҙҙәрен күргеһе, хатта хәтер ҡалдырырҙай «Ҡарпыш ҡолаҡ!» тигән һүҙен булһа ла ишеткеһе килде. Әмәлгә ҡаршы, таллыҡка киске дым тарала ла башланы. Егет һикереп тороп атына менде:

— Аллаға тапшырҙыҡ. Әйҙә, күксәй, алып бар. Хәтәр эш килеп сыҡһа, аҡбуҙ атҡа әйлән дә алып ос!!

Ауылдаштар менән осрашыу Сәғит хыял иткәндән дә йәнлерәк, күңеллерәк булды. Башта уны йылғала һыу инеп йөрөгән малайҙар күреп алды. һәм үҙенә, атына ҡарата терлөсә маҡтау, һоҡланыу, ғәжәпләнеү һүҙҙәре әйтә-әйтә, шау-гөр килеп униң артынан эйәрҙе. Малайҙар оҙатыуында атын ғорур юрғалатып урамға килеп ингән Сәғит көтөү ҡаршыларға сыҡкан ҡатын-ҡыҙҙың, мәсет юлындағы ҡарт-ҡоронон, һы-

наулы ҡарашы аҫтына барып инде. Һәм ул: «Олатай, нихәл?», «Инәй, һаумы?», «Еңгә, шәпме?»— тип һәр кемден. йәшенә ҡарап һаулаша-һораша үрге осҡа, ҡасандыр атаәсәһе йәшәгән ситән өй яғына уҙҙы. Бүркен алып өй янында әҙ генә туҡтап торҙо. Унан күкбуҙҙы юрғалатып, ҡыҙыл таҫмалы күкрәген кирә биреп, түбән яҡҡа үтте. Сыуаҡай әбейҙәр ҡапҡаһына барып туҡтаны. Ә унан, һоро турғай шикелле еңел елпелдәп, Сыуаҡай әбей килеп сыҡты, ҡартлыҡтан да, ҡайғынан да күреүе насарая төшкән күҙҙәрен ен, остары менән һерткөләп, һыбайлыға күтәрелеп ҡараны. Аҡтарҙан һалдырап алған яҡшы итектә, яңы шинелдә һәм ҡара күк папахала ҡупшы, матур егет булып алған Сәғитте таный алмай торҙо:

— Кем тип әйтәйем, балам...

— Аһа, Сәғиҙулла бит, өләсәй! Ҡара әле!..— тип аптырап, Мәхмүзә лә шунда тора ине.

— Улай булғас, әйҙә, рәхим ит, ин, улым... Беҙгә төшмәй ҡайҙа бараһың... тигәндәй, ҡайтып инер ҡыуышың юҡ бит, балам,— тип Сыуаҡай әбей иламһырап алды.

Сәғиҙулла етеҙ һикереп эйәрҙән төштө лә атын лапаҫ аҫтына бәйләне.

— Әҙ генә туҡталып китмәй булмаҫ.

— Ниңә әҙгә? Самауыр әҙер. Ана борҡоп ҡайнап ултыра,— тине Сыуаҡай әбей ҡалтыранған ҡарт тауыш менән. Сәхиуллаһының ҡайғыһынан һуң ҡапыл ныҡ ҡартайып киткәйне ул. Хатта Сәғиҙулланың ҡайҙа йөрөүен, ҡайҙан килеүен һорашыу ҙа уның башына килмәне. Улар өйгә инделәр. Сәғиҙулла сисенмәй генә түргә уҙҙы, Сыуаҡай әбей ҙә уға текләп ҡаршы ултырҙы. Мәхмүзә мейес буйында һөйәлеп туҡтап ҡалды. Уның көмөш суҡлы сулпы таҡҡан оҙон толомдары, нәҙекей билле, оҙонса һынына үтә килешеп торған йоҡа ғына ситса күлдәге, нәфис ҡулдарына кейгән суҡлы беләҙектәре, кескәй генә ялан аяҡтары — бөтәһе лә Сәғиткә хәҙер бигерәк тә яҡын һәм матур күренде. Тик Мәхмүзәнең ғәҙәттә үткер ҡарашлы шаян күҙҙәре генә хәҙер нисектер моңһоу, ҡайғылы ҡарайҙар ине. «Атаһының ҡайғыһынан ул да күп илағандыр, шуға күҙҙәре үҙгәреп киткәндер»,— тип уйлап алды Сәғит. Һәм ҡапыл тертләп һикереп торҙо: «Уларға мин тағы ҡайғы өҫтәп ҡуймайым!..»

— Ниңә ҡуҙғалаһың? Китмә әле, китмә! Әҙ генә ултыра бирсе!— тип Мәхмүзә, ҡыҙарынып, оялып егеттең ҡаршыһына килеп баҫты. Иплән кенә уның, түшендәге, бүркендәге ҡыҙыл таҫманы һыйпаны.

— Ниңә уны таҡтың?

— Ҡыҙыл булған есөн...— тине Сәғиҙулла, ғорур йылмайып.— Ҡыҙыл партизан булған өсөн, һылыу!.. Сәхиулла ағайым есөн аҡтарҙан үс алырға ҡәһәт иттем мин, инәй!

Мәхмүзә һоҡланып та, яратып та Сәғиттән күҙен ала алмай телһеҙ ҡалып торҙо. Ә Сыуаҡай әбей, бөтә сабырлығын юғалтып, хәлдән тайып, ултырған ерендә ары-бире сәбәләнде.

— Эй улым, улым... Улай булғас, ниңә япа-яңғыҙың бында, бүре өйөрөнә килеп индең? Белмәйһеңме ни Ҡормош бай, һуҡыр Сапый, Әхмәҙулла мулла тоҡомдары беҙҙең ярлы-ялпыны нисек күрә алмауын?! Һағалап ҡына торалар бит улар. Инде бынан нисек ҡотолорһоң... Бынауында, биш саҡрым Троицкиҙа ғына ята бит ул аҡтар тигәнең!..

Йәштәр, күҙгә-күҙ ҡарашып, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, айырылышып та китә алмай, иҙән уртаһында торҙолар. Сыуаҡай әбейҙең, дә инде сәй урыны әҙерләргә ҡулы барманы, «йә, улым, иҫән саҡта китә һал!» тип иҫкәртергә теле бармай аптыранып, тынып торҙо. Ә байҙар аптыранманы. Мәсеттән ҡайтып барышлай Сәғиҙулланы күреп, танып ҡалған Әхмәҙулла мулла, өйөнә лә инеп тормай, һуҡыр Сапыйҙарға йүгәнәлде.

— Теге Ҡормош байҙың. көтөүсеһе Сәғит ҡыҙыл булып алған икән, иблес!— тип хәбәр итте ул ишектән инеү менән.— Беҙҙең белештен, Червяктың офицер улының, күк юртағына атланып алған!.. Ҡыҙыл таҡҡан, урамда сабып йөрөй...

— Ҡайһы улының тиһен?

— Теге, Ырымбурҙа тәүҙә гимназияла, унан корпуста уҡып йөрөгән улы бар ине бит... Тукта, кем һуң әле уның, исеме? Хәтерҙән сыҡҡан... Беләһен дә, бик шәп бисер ине. Бер саҡ теге мөртәт Байгилде өҫтөнән беҙгә прошение ла яҙып биргәйне... Шунан, хи-хи... Байгилденен. көлө күккә оскайны, хи-хи... Егерме дүрт сәғәт эсендә ауылдан ғына түгел, волостан да олаҡтырғайнылар...

— Ә, теге егетме... Уны аҡтарҙа бик шәп офицер булған, Ыуары тауын уҙғанда, ҡыҙылдарҙың засадаһына осрап, үлеп ҡалған, тип һөйләгәйнеләр... Шуның атымы икән ни?..

— Шул-шул. Червяк белештен, тамғаһын танийым бит мин...

— Улай булғас, Сәғиҙулла үлтергән була бит офицерҙы!

— Мин ни әйтәм?

— Улай булғас, хәҙер үк малайҙар Троицкиға сапһын! Һинең улың, Сәрүәретдин мәғзүмде әйтәм, теллерәк. Минеке теремегерәк. Әйҙә, икәүләп елһендәр...

— Дөрөҫ. Һай баш һиндә, ҡорҙаш! Юҡҡа ғына һиңә закон тип, адвокат тип ҡушамат бирмәгәндәр шул...

— Ярар, маҡташыу Червяктан мәгәрис эскән саҡҡа ҡалһын.

— Амин, шулай булһын...

Был мәкерле һөйләшеүҙән һуң, ике һыбайлының Әхмәҙулла муллаларҙың арт ҡапҡаһынан сығыи, Троицк һыртына табан сабып китеүен бер кем дә абайламай ҡалды. Оҙаҡламай бер взвод аҡтар Сыуаҡай әбейҙең өйөн килеп баҫты. Күҙ асып йомған арала ҡот оскос ҡанлы фажиғә булды. Сәғиҙулланы, аңғармаҫтан килеп инеп тотоп алдылар ҙа өҙөп-йолҡоп туҡмарға, типкеләргә керештеләр. Уны араларға маташҡан Сыуаҡай әбейҙе лә тапап-иҙеп ташланылар. Ҡото осоп ҡысҡырып илаған Мәхмүзәне лә тибеп осорҙолар. Иҫтән яҙган Сәғиҙулланы һөйрәкләп алып сыҡтылар ҙа:

— Бына шулай. һин һепертке булырға тыуғанһың. һепертке булып ул!— тип йәмһеҙ ҡысҡырып көлә-көлә күкбуҙ аттың ҡойроғона аяҡтарынан бәйләп ҡуйҙылар.

— Уй, балалар, был ни эшләүегеҙ! Кешене, баланы, шулай язаларға яраймы ни?! Кеше былай ҙа бик аҙ йәшәй ҙәһә! Ниңә шул хәтле газап? Ниңә үлем, я алла! Туҡтагыҙ, етемде харап итмәгеҙ!.— тип үҙсисә һөйләнә-ялбара Сыуаҡай әбей тағы араға төштө.

— Тынын, сыҡмаһын, алйыған ҡарсыҡ!— тип екерҙе аҡ офицер. һәм яман һелтәнеп, ҡылыс менән арҡа буйына һуҡты. Ул хәҙер Сәғиттең атына атланып алғайны.

Сыуаҡай әбей йән әсеүенән ауыртыуҙы ла топмай:

— Уй, балалар, ҡуйығыҙсы, етемде, кешене һәләк итмәгеҙсе?!.— тип теле көрмәлеп һөйләнә-ялбара аҡтар артынан ауа-түнә урамға эйәреп сыҡты ла ҡапка төбөнә ауҙы. Аҡтар Сәғиҙулланы һөйрәлтке кеүек итеп, ат ҡойроғона тагып, туҙан туҙҙырып һырт яҡҡа саптылар. Был ҡот оскос күренештән тамам юғалып ҡалған Мәхмүзә бик оҙаҡ тын да алмай торҙо. Унан:

— Уй аллаҡайым! Өләсәйем! Инде ни эшләйбеҙ! Ҡалай итәбеҙ!— тии йөрәк өҙгөс тауыш менән ҡысҡырып илап өләсәһенең өҫтөнә ауҙы.

Тауышҡа ҡатын-ҡыҙ, әбей-һәбей йыйылып китте. Кемдер Сыуаҡай әбейҙең беләгенән тотоп, күкрәгенә башын ҡуйып ҡараны:

— Үлгән... Вафат булган, бахыр...— тине. Бөтәһе лә өнһөҙ тынып ҡалды. Оло йөрәкле, кескәй генә тынғыһыҙ кешенең изге ғүмере шулай өҙөлдө. Ә Сәғиҙулланы тирә-яҡтан тотоп алып килеп атылған йөҙләгән кеше ташланған дөйөм соҡорға ырғыттылар.

— Күмегеҙ, баштарынан ашҡансы ер бирегеҙ ҡыҙыл эттәргә! Ер, тип теңкәгә тейҙеләр бит! Ха-ха!

Күмәк көрәк бер юлы телгә килде. Ботай-сатай ырғытылған мәрхүмдәр еҫтөнә терлө яҡлап тупраҡ яуа башланы. Ауыҙынан ҡан һарҡырап ятҡан Сәғиҙулла, уң ҡулын күтәреп, иплэп кенә маңлайына баҫты. Уны терелэй күмделәр...

Ташлыла булып ятҡан хәлдәр ҙә Иҫәнбәт фажиғәһенән кәм түгел ине. Унда ла батша төшөрелгәс ҡыуанған, революцияны хуплап ҡайҙалыр ниндәйҙер һүҙ әйткән, баяр ерен биләүҙә ҡатнашҡан йәки кеме лә булһа ҡыҙылдарға иректе ҡушылып киткән кешеләрҙе эҙләп табып, атып-ҡырып яталар, тыуған ер йән өшөткөс законһыҙлыҡ аҫтында ҡанһырай ине. Шаһиморат, төндә әҙ генә ут баҙлағанға барып ингән кескәй генә бер өйҙә шул фажиғәнең иң ҡот оскос кәүҙәләнешенә осрауын хәтерләп, бик оҙаҡ ендәшә алмай ултырҙы.

...Иҙәндә мейеһе аҡтара сабылған мәйет ята. Унын, янында ҡайғынан ҡара кейгән бер ҡатын ултыра. Арыҡ ҡулдары менән, мәйеттең ҡайырылған түбә ҡапҡасын ябырға, ағып сыҡкан мейеһен туҡтатырға тырыша. Үҙе, кипкән ирендәрен көскә ҡуҙғатып, тик бер һүҙҙе ҡабатлай:

— һөйөклөм... һөйөклөм минең, Андрюшам! Ни эшләттеләр һине, ни эшләттеләр?! О, ләғнәт төшкөрҙәре!

— Еңгә,— тип өндәшә Шаһиморат иплэп кенә.— Ксм үлтерҙе иренде? Ни өсөн?! Берәй ярҙам кәрәкмәймс, еңгә?

Ҡатын уны күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә, үкһеп илап мәйет •өҫтөнә ауа!

— О, был аҡ шайтандарҙы ер йотһон ине... һинең өсвн хоҙай уларга иң ҡаты язаһын ебәрһен иые! Ярабби, ниңә был ҡанһыҙлыҡтар, ниңә?!

Шаһиморат, был аянкслы хәлдәрҙе һөйләп тормаҫтан, үҙе булган урындарҙа аҡтарҙың хәрби көсө, һаны хаҡында һөйләүгә күсә. Аҡтар гарнизонында күпселек һалдаттар, офицерҙар ошо тирә байҙарының уландары булыуын, шуга күрә һәр кемде белеп-күреп, айырата йыртҡыстарса эш итеүеи әйтә.

— Аҡтарға яза ебәреүҙе алланан ялынып һорай халыҡ. Миненсә, ярҙамды улар беҙҙән көтһөндәр, беҙгә ышанһындар. Аҡтар үҙҙәре лә бында халыҡтың үс алыусылары — партизандар барын тойоп торһондор. Хәүеф-хәтәрһеҙлектән шашыимаһындар. Партизанлыҡ көрәшен көсәйтергә кәрәк...

— Дошманды тылдан тороп ҡаҡшатыу юлы Наполсон һуғышында ла киң ҡулланылған,— тип, унып һүҙен өлкәнерәк йәштәге бер һалдат күтәреп алды.— Динис Давыдов тигән рус полководецы ҡулы аҫтында башҡорт полктары партизанлыҡ һуғыштары алып баргандар.

— Үҙебеҙҙең Оло Эйек буйының Хәбир батыр көрәше лә беҙгә елгө була ала,— тип, икенсе бер партизан да һүҙгә ҡушылды.— Ана бит ул ниндәй осорҙа, ниндәй яңғыҙлыкта тигәндәй, байҙарҙы, баярҙарҙы дер һелкеткән! «Үсбай» тигән яҙыуҙы күреү йә ишетеү менән генә лә байҙар ҡойолоп төшөр булған... Ә ярлы-ялпы кинәнгән. Бергәләп көрәшер өсөн «Үсбай» янына йыйылған...

Әгәр бер хата аҙым яһап, Хәбир батыр үҙе барып ҡапмаһа, кем белә... Бәлки, ул да батша тәхетен тетрәтерлек көс йыйып алыр ине...

Бына шул «Үсбай» кеүек дан ҡаҙанып алырға кәрәк беҙгә йәһәтерәк. «Партизан» һүҙен ишетеү менән дошман ҡалтырап, дуҫтар шатланып торһон тигәндәй...

— Минең атайым мәрхүм: «Халыҡ ул, егеттәр, яуызлыкты ғәфү итмәй, яҡшылыҡты онотмай»,— тип ҡабатларға ярата торғайны.

— Ирмен тигән ир халыҡ күңелендә һаҡланып ҡалырҙай яҡшылыҡ, егетлек эшләргә тейеш...— тип Шаһиморат тағы һүҙгә ҡатышты. Унан ҡәнәғәт тауыш менән:— Беҙҙең эштәр хаҡында йөрөгән ҡиссалар ҙа «Үсбай» мажараһынан кәм түгел хәҙер... Ишетеп ҡайттым...— тип өҫтәне.

Хаммат тарҡаулана барған һөйләшеүҙе төйөнләргә ашыҡты.

— Беҙ үс алыр өсөн генә түгел, ә йәш Совет власын яҡлар, һаҡлар өсөн, үҙебеҙ теләп көрәшкә күтәрелгән кешеләр. Беҙ үҙебеҙ һайлаған юлдың хаҡлығына, еңелмәҫлегенә ышанып, ҡоралға тотонғанбыҙ, шуға күрә лә беҙҙең. бер һалдатыбыҙ аҡтарҙын, күпселеге алданып йыйылған ун һалдатына торош итә,— тип башлап, Хаммат партизандар алдында торған бурыстарға күсеп китте.— Беҙҙең ҡыҙыл партизан отряды көндән-көн үҫә бара. Беҙгә уны йәһәтерәк боевой полкка әйләндерергә, көрәш майҙанын киңәйтергә кәрәк. Беҙгә ҡорал, ҡорал кәрәк. Ә ул — аҡтар ҡулында. Тимәк, аҡтарҙан уны баҫып алыуҙы көсәйтергә кәрәк... Аҡтарҙың бер генә яуызлығы ла язаһыҙ ҡалмаҫҡа тейеш! Хәҙергә бында халыҡты яҡлаусы ла, һаҡлаусы ла беҙ.

Ҡыҙыл Армия Өфенө лә ҡалдырған тигән һүҙҙәр йөрөй. Ләкин беҙ ышанабыҙ — был ваҡытлы хәл. Революцияны быуыр көс юҡ. Сөнки ул — халыҡ. Сөнки ул — диңгеҙ. Диңгеҙҙе кем быуа ала?! Бына шул, иптәштәр, беҙ Ҡыҙыл Армияға бынан, тылдан тороп ярҙам итер өсөн ҡоралға тотонған партизандар икәнбеҙ, һәр ҡайһыбыҙ шул исемгә тап төшөрмәҫлек булайыҡ.

Был кисте партизандар оҙаҡ кәңәштеләр. Фронт хәлдәре лә, үҙ хәлдәре лә, көрәш пландары ла ентекләп тикшерелде. Улар киске офоҡ батҡан, ҡоштар йоҡоға талған саҡта ғына ҡыуыштарға таралыштылар.



## XVIII

Аҡтарҙың «ирекле» полктар менән командовать итеүсеһе — ҙур мыйыҡлы генерал Закирҙы мыҫҡыллы тауыш менән ҡаршыланы:

— Әһә, бәһлеүән, килеп тә еттеңме? Һин булдыңмы ни бөгөн ҡыҙылдарҙан һырт биреп ҡасҡан ҡыйыу «офицер»?!. Һөңгө менән ҡылыстан бүтән ҡоралы булмаған бер төркөм алам-һалам бандиттарҙан еңелгән «батыр»?! Ха-ха... Ҡурҡаҡ! Их-х, ҡырағайҙар, һеҙме һун, ысын һалдаттарса һуғышыр кешеләр?! Ҡуян, төлкө ҡыуып, һайһайлап сабышырға ғына эшкинәһегеҙ бит һеҙ, сүл бүреләре!...

Генералдың һәр һүҙгә һалған хурлау, мыҫҡыллау, түбәнһетеү өндәренән бигерәк, мыйығы шикелле үк ҡуйы, ялбыр керпектәре араһынан сикһеҙ күралмау, асыу, хатта ерәнеү менән үҙенә төбәлгән күҙҙәре Закирҙы, әйтерһен, эстән дә, тыштан да үтеп алды.

«У-лай... Тимәк, еңгәндә генә беҙ тин,?!. Еңелһәк — ҡырағай?.. һәр мылтыҡлы атып, үлтереп, ҡырып бетөргә тейешле сүл бүреһе?!»

Закир, Иштуған атып ебәргәс, ат башы аша тәкмәсләп барып төшкәндә йәнселгән ҡабырғаһы бик ҡаты ауыртһа ла, ҡымшанмай, керпек тә ҡаҡмай генералға текләп смирно баҫҡан килеш тора бирҙе. «Тимәк, һеҙ, генерал әфәнде, автономия бирәбеҙ, тип беҙҙе алдап файҙаланаһығыҙ?!»

Генерал, әллә был «ҡырағай» башҡорттон, ҡайын ҡуҙы шикелле сағыу баҙлап янған сөм-ҡара күҙҙәренең унан һис тә кәм түгел асыу, нәфрәт һәм күралмау менән үҙенә төбәлеүен анлап, әллә быңдай киҫкен ваҡытта әле был «ҡырағайҙар» полкын ситкә тибәреүҙең файҙаһыҙ булыуыы хәтерләп, баҫынҡыраҡ тауышҡа күсте.

— Беҙ бит һеҙҙе батыр һуғышсылар тип беләбеҙ. Шуға ла ин, мөһим урынға ебәргәйнек. һеҙ шунан йырып үтергә, ҡыҙылдарҙың юлын быуырға тейеш инегеҙ... Ул саҡта еңеү, һис шикһеҙ, беҙҙең яҡта була ине. Ә хәҙер...

Генерал тағы сабырлығын юғалтты:

— Ә хәҙер улар ун, яҡ ярға сығып һыҙасаҡтар! Аңлайһыңмы һин быны, болван?! Уң яҡта, аңлайһыңмы һин, ҡурҡаҡ йән, ҡыҙылдар! Хәҙер улар ҡыҙылдарға ҡушылып, яңы көс алып, беҙҙе туҡмарға киләсәктәр!

Закир, үҙ түҙеменең дә һуңғы сиккә еткәнен яҡшы тойһа ла, баҫалҡы, ләкин йән өшөтөрҙәй һалҡын тауыш менән:

— Һеҙ мине әрләргә саҡырҙығыҙмы, генерал әфәнде?— тип һораны.— Әрләп бөттөгөҙмө? Китергә мөмкинме инде?

— Һин ғенерал алдында үҙеңде тота ла белмәйһең бит!— тип екерҙе генерал, уға тағы баштан-аяҡ мыҫҡыллы ҡараш ташлап.— Ниндәй офицер һин? Ҡурҡаҡ!

— Һеҙгә билдәлелер, генерал әфәнде, мин офицер түгел. Мин һалдат!—тип белдерҙе Закир, тағы ла һалҡынырак тауышҡа күсеп.— Батша хеҙмәтендә күкрәгенә Георгеевский крестар тағып ҡайтҡан һалдат. Полкташтарым ғына бында мине үҙҙәренә баш итеп һайланылар.

— Һине беҙ офицер иттек!

Генерал инде бөтөнләй түҙемен юғалтып, аяҡ тибеп ҡысҡырып ебәрҙе.— Беҙ һинән эш талап итәбеҙ! Аҡламаһаң—хәрби трибуналға бирәсәкбеҙ!

— Талабығыҙҙы әйтегеҙ, генерал әфәнде!

Генерал хәҙер, ошо урында был «ҡырағайҙы» атып йығырға теләү тойғоһон тыя алмай, сабырһыҙ һикереп торҙо, билендәге ҡара маузерына тотона биреп ҡуйҙы, унан тос аҙымдар менән сабырһыҙ йөрөп китте. Әйтерһең, иҙәндәре һығылып-бөгөлөп ятҡан кескәй ауыл өйөн үҙенең мыҡты дәү кәүҙәһе менән тотош биләп алды. Закир һаман смирно баҫҡан хәлендә ҡалды. Генерал, күрәһең, йөрөп бер аҙ тынысланғас, тәҙрә яғынараҡ барып, Закирға ҡабырғаһы менәнерәк әйләнеп торҙо ла:

— Талабығыҙҙы әйтегеҙ, тиһең, ә?— тип тагы мыҫҡыллап һораны. Унан ҡаты итеп:—Талап шул: хәҙер үк полкың менән Ҡариҙелде йөҙөп сығаһың. Партизандарҙың юлын быуаһың!— тип өҫтәне.

— Ун меңле берҙәм армияның юлын — өҙгөләнгәнйолҡҡоланган бер полк менәнме?

Закирҙың һорауында әсе мыҫҡыл ишеткән генерал тағы ла асыулыраҡ ҡысҡырып ебәрҙе:

— Молчать! Уныһын тикшереү һинең эш түгел!

Закир был юлы өндәшмәне. Бүлмәлә оҙаҡ тынлыҡ урынлашты. Бер аҙҙан генерал тағы тыныслана төштө, ахыры, өҫтәл янына барып ултырҙы:

— Беҙҙән — ирекле полктарҙан — айырата күп талап итеүҙәр,— тип инде ҡысҡырынмай ғына һүҙ башланы.— Әгәр башҡорт полкы тәүге аҙымды уңышлы башҡарһа, башҡа ирекле полктар ҙа шунда уҡ йылғаны йөҙөп сығып уға ярҙамға ташланасаҡ! Аңланыңмы, болван!— тип белдерҙе.

«Ирекле полктар, имеш... Алдау, көсләү юлы менән йыйылған полктар тиһәң, дөрөҫөрәк булмаҫмы, генерал әфәнде?»— тип ҡарыулашҡыһы килде Закирҙың. Ләкин, кирећенсә, үтә баҫалҡы, баш эймәкле тауыш менән:

— Тыңлайым, генерал әфәнде. Бойороғоғоҙҙо үтәү өсөн бөтә көсөмдө һаласаҡмын,— тип яуап ҡайтарҙы.

— Бына шулай һөйләшергә кәрәк,— тине генерал, риза тауыш менән.— Бар, бойороҡто үтәргә кереш!

Закир әҙ генә туҡталып торҙо:

— Ҡул пулеметтары, патрондар күберәк кәрәк булыр, генерал әфәнде... Юҡһа...

— Белэм,— тип бүлдерҙе уны генерал. Ҡуйы ҡаштарын ҡаты төйнәп, бер аҙ уйланып ултырҙы. Унан блокнотынан бер бит ҡағыҙ йыртып алып, хәрефтәрҙе смирно баҫып торган һалдаттар шикелле тигеҙ, матур теҙеп, ниҙер яҙҙы ла Закирға һондо:

— Мә, был яҙыу һиңә өҫтәлмә ҡорал алыр өсөн. Ҡара, был юлы ла һынатһаң, һикә капут! Трибунал! Аңланынмы?!

— Тыңлайым, генерал?!— тине Закир. Ҡулын маңлайына күтәреп һом ысын офицерҙарса өҙә баҫып сыгып китте.



Ҡапыл алыҫтан, Ҡариҙел өҫтөнән көслө ялҡын күтәрелеп сыҡты. Күҙгә төндөң ҡара шәлен аяуһыҙ йыртҡылап, тирә-яҡҡа ут көлтәләре ырғыта-ыргыта, бейеккә, һоро болоттарға, үрмәләй башланы.

«Күрәһең, партизандар армияһы уң яҡ ярға сыгып бөттө... Үҙ арттарынан күперҙе үртәп китте...— тип билдәләне Закир күңеленән.— Әйҙә, хәлендән килһә, уның юлын быуып ҡара хәҙер!..»

Был ваҡытта ул үҙенең полкы менән янғындан бер нисә тиҫтә саҡрым түбәнгә, йылғаның ат йөҙҙөрөп сығырға мөмкин тип иҫәпләнгән йыуашыраҡ урынына, килеп туҡтағайны. Ул, сихырланған шикелле, ялҡын яғынан күҙен ала алмай, йылга ситендә оҙаҡ ҡына атын бейетеп торҙо. Өйкөлөшөп һыу ситендә үк туктап ҡалған һалдаттар араһынан ризаһыҙ тауыштар ишетелеп ҡалды:

— Үәт, кәһәр һуҡҡырҙар, туп-тура үлемгә ебәрәләр бит, ә? Йә ташыу йылғаға батып үл, йә партизандарҙын. пуляһы аҫтына инеп ҡырыл,— тип һуҡрана бер ҡарлыҡҡан, тамағына һалҡын тейгән тауыш.— Уйлап ҡарағыҙ, йә, ни тип беҙ үлемгә барабыҙ? Ни өсөн? Кем өсөн?!

«Был Ғимранов тауышы,— тип уйлап ала Закир.— Ул һәр саҡ һалдаттар араһында шулай һүҙ алып бара...»

— Буржуйҙар өсөн,— ти икенсе бер сағыу тауыш.—

«Эт саба, тип,— бет саба» тиҙәр бит... Бай малайҙары саба, тип, беҙ ҙә сабып маташабыҙ инде...

— Ахмаҡтар беҙ...

— Ирек бирәләр. Автономия вәғәҙә итәләр бит беҙгә! Ха-ха!..

— Егеттәр, ни тиһәгеҙ ҙә хәҙер һуң инде... Алда төпһөҙ ағын йылға... Артта пулемет, мылтыҡ төҙәгән аҡ «дуҫтар»... Ҡайһы үлем һ-эйбэтерәк? һайлағыҙ... хи-хи...

— Йә-йә, етер, телегеҙгә һалышмағыҙ! һалдаттармы һеҙ әллә бисәләрме?!

— һөйләшергә лә ярамаймы әллә?

һалдаттарҙың тынын яҡшыраҡ белеү ниәте менән һөйләшеүгә ҡолаҡ һалып торған Закир һүҙҙен, дауамын көткәйне лә, ҡабат һүҙ башлаусы булмағас, әкрен, ләкин кире ҡаҡҡыһыҙ тауыш менән:

— Минең команданы тыңлағыҙ! Ҡоралдарҙы аттарға йөкмәтергә. Үҙегеҙ эйәргә тотоноп йөҙөргә! Тауыш-тын сығармаҫҡа! Аръяҡҡа сыҡҡас, минән команда булмай тороп, урындан ҡуҙғалмаҫҡа!— тип бойороҡ бирҙе лә үҙе иң алдан ҡара тулҡын эсенә ташланды.— Минен. арттан!

* *
*

Тан. атыуға полк ун яҡта, ҡуйы өйәңкелек араһындағы кескәй бер аҡланда урынлашҡайны. Бөтәһе лә муйындан ала еүештәр, өшөгәндәр, ҡалтыранғандар... Үҙҙәре лә, аттары ла, ҡоралдары ла теүәл... Тик бер генә нәмәне инде бөтөнләйгә юғалтҡандар. Был — күҙҙәрҙәге өмөт, ышаныс... көрәш дәрт-ç...

Закир, ҡаштарын ҡайғылы төйнәп, ниндәйҙер фажиғәле хәл көткәндәй, борсоулы тынып ҡалған был һоро төркөмгә оҙаҡ һәм иғтибар менән ҡарап торҙо. Уның үҙенен, дә йәне тыныс түгел ине. һүҙҙе лә тоноҡ ҡына тауыш менән башланы:

— Яҡташтар, дуҫтар...— тигәндән һуң, артабан ни әйтергә белмәгәндәй, тамағын ҡырғылып, туктап торҙо. Унан ҡулын ҡырҡа һелтәп,— мин һөйләй белмәйем. Әммә һеҙгә әйтәһе һүҙем бар,— тип һалды.

— һөйлә.

— Ни әйтерһен, икән?

— һөйләр урын ҡалдымы ни әле...— тип, һүрәнке генә әйткеләшеп алды һалдаттар.

— Беҙҙе алданылар!— тине баяғы ҡарлыҡҡан тауыш.— Беҙҙең урын, белә-белһәгеҙ, ҡыҙылдар яғында! Унда — иптәш Ленин!



— Ул яҡта Ленин?!—тип ҡабатлап һорап ҡуйҙы Закир.— Ғимранов, һин беҙгә әйт әле, һөйләп бир,— Ленин беҙҙе белерме, анлармы?

— Ленин ул, туған, башҡорт халҡының ни теләүен, уға нимә кәрәк булыуын һинән-минән яҡшыраҡ белә,— тине Ғимранов, ҡыйыу итеп.— Әгәр беҙгә автономия, ысынлап та, бик кәрәк икән, уны тик иптәш Ленин, большевиктар ғына бирәсәк.

Закир был яҙыҡ маңлайлы, кин, яурынлы һалдатҡа, тәү күргәндәй, иғтибар менән оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Уның бер-береһенән алыҫыраҡ урынлашҡан киренке ҙур ҡара күҙҙәре, танау аҫтында ике баҫым ғына ҡалдырып ҡырылған ҡара мыйығы, арыҡ аҡһыл йөҙө нисектер бик яғымлы ла, ышанырға лайыҡлы ла тойолдо. һалдаттын, төҫө-һыны, үҙен тотоуы, ан,лы, уҡымышлы кешене төҫмөрләтә ине.

«Йәше лә, минән кесе булмаһа, оло булмаç... Шулай ҙа үҙе донъя күргәнгә оҡшай»,— тип уйлап алды Закир.— . Улай булғас, ни өсөн һин был яҡта?— тип аптырап һораны.

— Шулай көтөлмәгән бәлә арҡаһында килеп ҡабылды был хәлгә,— тип ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы Ғимранов.— Тиф менән ауырып үҙебеҙҙекеләр менән китә алмай ҡалдым. Унан аҡтар мобилизовать итте,— тине.

— Әйтәм, һуғышыуындын, ерле рәте юҡ ине. Етмәһә, гел һалдаттар араһында сыуала инең,— тип асыулы сәрелдәп Хөснөлхаҡ һүҙгә ҡушылды.— Баҡтиһәң, тарҡатыу эше алып барған икән дәһә, һай, ябалаҡ!

— Мин ябалаҡ түгел — һалдат!— тине Ғимранов, шаян йылмайып.— Ә бына һин ала ҡарға! Үҙеңә ҡайһы төҫ килешкәнде лә белмәйһең!

Ғимранов янында торған йәш һалдат ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

— ХЗ-ха! Ала ҡарға! Ҡалай йәтеш кенә килеп тора үҙенә!

Кемдер әсенеүле тауыш менән:

— Йәгеҙ, булмаһа үҙ-ара күҙҙәрҙе сукышып алайыҡ! Барыбер бөтөргә бит!— тип шаярырға тырышты.

Закир Ғимрановҡа тағы бер ентекләп ҡарап алды:

— Ҡыҙылдар беҙҙе ғәфү итерме һун? Беҙҙё — бер-ике ай буйы аҡтар яғында йөрөгән ғәскәрҙе, тим?

— Итер, көтөп тор!— тип Хөснөлхаҡ тағы араға төштө.— Бетәбеҙҙе лә ҡырып һаласаҡтар. Иң элек, әлбиттә, һине атасаҡтар, Закир!

— һин, ағай, үҙен. өлкән кешеһең, ә бала кеүек һөйләшәһең,— тип асыуланды уға Закир.— Илдец, халыҡтарҙың яҙмышы хәл ителгәндә, бер кешенең яҙмышы ни-

мә ул?! Мин был минутта үҙ хаҡымда уйламайым... Уға, халыҡҡа, ҡайһы яҡта яҡшы булыр, тим...

— Әлбиттә, ҡыҙылдар яғында,— тип ышаныслы тауыш менән яуап бирҙе Ғимранов.— Ҡыҙылдар иҙелгән, кәмһетелгән халыҡ яҡлы. Ә беҙ — шундай халыҡ түгелме ни?

— Әлбиттә, шундай халыҡ,— тип раҫланы был һүҙҙе Закир.— Беҙҙең күпселегебеҙ ярлы башҡорт балалары. Беҙ үҙебеҙҙен. ирек һөйөүсән халкыбыҙға азат тормош яуларға тип күтәрелгән Салауат тоҡомдары. Кем беҙҙе кәмһетмәй, кем беҙҙе алдатмай, беҙ, шул яҡта тороп, әсәбеҙ, Рәсәй ерен үлгәнсе яҡларға әҙер...

Ул һалдаттарға берәм-берәм тағы бер ҡат ҡарап сыкты. Унан ҡырҡа өҙөп:

— Ғимранов дөрөҫ әйтә: аҡтар беҙҙе алданы,— тип белдерҙе.— Батша беҙҙән үҙе тартып алған азатлыҡты батша генералдарынан өмөт итеү ахмаҡлыҡ икәнен беҙ үҙебеҙ ҙә аңларға тейеш инек... Әммә ни эшләйһең... Бөтөнләй һуҡыр булып ҡалғансы, һунлабыраҡ булһа ла, күрә башлау яҡшыраҡтыр тип уйлайым... Бынын шулай...

Закир ышаныслыраҡ тауыш менән дауам итте.

— Инде ни эшләргә, ҡыҙылдар беҙҙе ғәфү итерме, беҙгә ышанырмы тигән һорау тора... Мин быға шулай яуап бирер инем:

— һуҡырҙар, юлды һәрмәнеп эҙләгәндә, ҡайһы саҡта яҙлығып китәләр икән, бынын. өсен уларҙы бер кем дә ғәйепләмәй... Беҙ ҙә бит ысын азатлыҡ юлын һәрмәнеп эҙләүсе «һуҡырҙар»...

Ул, әсе йылмайып, Хөснөлхаҡ ягына күҙ ташлап алды:

— Етмәһә, беҙҙе етәкләп, юрый яҙа юлга баҫтырыусылар ҙа юк түгел... Шулай булгас, мин уйлайым, ҡыҙылдар беҙҙе ғәфү итер, ышаныр... һүҙебеҙҙен. хаҡлығын беҙ һуғыш майҙанында раҫларбыҙ...

— Дөрөҫ!

— Хаҡ һүҙ!

— Күптән шулай уйлау кәрәк ине!— тип күтәреп алды һалдаттар. Хөснөлхаҡ, тамагы ярылырҙай булып ҡысҡырып, уртаға сығып баҫты:

— Егеттәр, Закирга ышанмағыҙ! Ул большевик! Унын ағаһы Хаммат та бит большевик! Ул һеҙҙе ҡыҙылдарға һатып дан ҡаҙанмаҡ була!

Ғимранов ашыҡмай ғына Хөснөлхаҡтын, яурынынан маҡып тотоп алды ла тыныс, әммә ҡырҡа тауыш менән:

— һин, мәғзүм, шаулама! Күрәһеңме бына быны?— тип, сүместәй йоҙроғон уныц танау осонда уйнатты.—



Беләһенме, һинең урының ҡайҙа? Мәсеттә!— һалдаттар дәррәү көлөшөп алдылар. Ғимранов һаман тыныс ҡына:— Ә революция, һуғыш ул — халыҡ эше. Аңланыңмы инде, бар!— тип еҫтәне лә уны артҡа алып ырғытты.

— һүҙ бөттө,— тип белдерҙе Закир.— Кем ҡыҙылдар яғына сығырға риза, минен янға йыйыла. Кем ҡаршы — Хөснелхаҡ ағай яғына...

Аҡланды ҡапыл көсөргәнешле тынлыҡ солғап алды: Закир ҙа бүтән һүҙ өҫтәмәне. Унын, янына тәүҙә үк Ғимранов килеп баҫты. Унан икенсе, өсөнсө, унынсы... йөҙөнсө... һалдат сыкты. Бер нисә минут ваҡыт үтеүгә тотош полк Закир яғында тора ине. Хөснөлхаҡ янында унлаған гына һалдат ҡалғайны.

— Тимәк, күпселек менән хәл иттек — ҡыҙылдар яғына сығабыҙ,— тип белдерҙе Закир. Унан:— Ҡаршы яҡты ҡоралһыҙландырырға!— тип бойорҙо.

һалдаттар, Ғимранов етәкселегендә, бойороҡто үтәргә ашыҡты:

— Йә, әфәнделәр, ҡоралдарҙы бирегеҙ!

— Йәһәт булығыҙ!

Күҙ асып йомған арала булып үткән был эш, күрәһең, ҡаршы яҡты тамам аптырауҙа ҡалдырҙы. Улар, кәртәгә ҡыуып индерелгән һарыҡ көтөүе шикелле, мәғәнәһеҙ мығырланып, өйкөлөшөп торҙолар.

— һалдат иптәштәр, был әфәнделәргә ни хөкөм итәбеҙ?— тип һораны хәҙер Закир.— Уларҙы ни эшләтсрғэ?

— Беҙҙең юлға баҫмай икән — тимәк, дошман. Ә дошманды нимә эшләтәләр?— тип һорау меиән яуап бирҙе Ғимранов. Унан, үҙе үк:—Аталар!—тип яуап бирҙе.

һалдаттар төрлө тауышҡа шаулашып алдылар:

— Дөрөҫ. Расходка сығарырға!

— Уларҙың ҡулына эләкһәң, бер ҙә аяп тормаҫтар..

— Үҙ яйҙарына ебәрергә кәрәк. Теләһәләр ҡайҙа китһендәр.

— Аҡтарға китерҙәр. Ошонда бөтөрергә кәрәк!.

Закир, уларҙын, һүҙенә ҡолаҡ һалып, бер аҙ уйланып торғас, етди итеп:

— Теләһәләр улар яғына китһендәр,— тип ҡуйҙы.— Беҙ бит хаҡлыҡ эҙләп юлға сыҡҡан кешеләр. Уларҙың хаҡлығы, минеңсә, шул яҡта. Аҡтар бит байҙарҙын. мәнфәғәтен күҙәтә. Ә былар, күренеп тора, ярлы-ялпы балалары түгел.

— Кем ҡайһы яҡта теләй — шул яҡта йөрөһен булып сығамы ни, былай булғас?— тип ҡаршы төштө Ғимранов.— Принципһыҙлыҡ була түгелме был, командир иптәш?

Закир, уға ни тип яуап бирергә белмәгәндәй, тағы бер аҙ тынып торҙо. Унан ҡырҡыу итеп:

— Ҡоралһыҙ кешеләрҙе үлтерергә выжданым ҡушмай. Пленға ла алырға теләмәйем. Беҙгә улар кәрәкмәй. Бигерәк тә хәҙер, үҙ хәлебеҙ асыҡ ҡына билдәле булмаған саҡта,— тип белдерҙе. Унан үҙенә ҡот осҡос асыу менән төбәлгән Хөснөлхаҡҡа тауыш күтәрмәй генә:— Әгәр беҙҙең менән ҡыҙылдар яғына сығырға теләмәйһегеҙ икән — дүрт яғығыҙ ҡибла!— тине.

— Ҡыҙылдар үҙеңде тотоп аҫҡанда был иҫәрлегең өсөн үкенерһең дә — терһәгенде тешләй алмаҫһың!—тип ҡысҡырҙы Хөснөлхаҡ.— Тфү, ахмаҡ!

— Йәһәтерәк, һыҙығыҙ! Юҡһа...— Закир ҡабаланып ҡул пулеметына тотондо.— Йә?!.

Тегеләр дауыл осорғандай юҡ булды.

— Артҡа йүгерҙеләр... Аҡтар яғына сығасаҡтар, их-х...— Ғимранов ризаһыҙ баш сайҡап ҡуйҙы.— Ошонда ғына эштәрен бәтөрөргә ине.

Закир яуап бирмәне. Ул, ғәҙәттән тыш һил, тын булып ҡалған тирә-яҡты байҡап, төплө бер ҡарарға килергә тырыша ине. Атыш тауыштары һирәгәйә барып, тынып уҡ ҡалды. Тимәк, партизандар аҡтар эҙәрләүенән ҡотолдо. Тиҙҙән Ҡыҙыл Армияның төп көстәренә барып ҡушылырҙар... Улар бәхетлеләр — еңделәр...— тип ниндәйҙер изге көнсөлөк менән уйлап алды,— их-х... беҙгә — ике уртала ҡалғандарға ауырыраҡ шул...

— Ашығырға, ҡыҙылдар яғына сығырға ҡарар итеүебеҙҙе командованиеға йәһәтерәк белдерергә кәрәк!— тип сабырһыҙланып уның уйын бүлде Ғимранов.— Юҡһа, аңлашылмау ҡорбаны булып ҡуйыуыбыҙ бар...

Закир уға тағы бер иғтибар менән ҡарап алды ла:

— Беҙҙең арала коммунистар юҡмы?— тип һорап ҡуйҙы.

— Бар. Мин коммунист. Фронтта саҡта уҡ ингәйнем,— тине Ғимранов, өҙөп. Унан ниндәйҙер ғәжәп яҡты ҡәнәғәт ҡыуаныс менән:— Бына бында, эске кеҫәлә һалдатский депутат икәнлекте белдергән ҡағыҙ ҙа ята,— тип өҫтәне. Закир ҙа ҡәнәғәт йылмайып ҡуйҙы:

— Тимәк, Хөснөлхаҡ әйтмешләй, ҡыҙылдар яғына сығырға һалдаттарҙы «ҡотортоусы» ла һин булдың,?

— Уларға аҡты ҡаранан айырырға ярҙамлашыу — минең коммунислыҡ бурысым ине бит, иптәш командир. Ләкин мин түгел, ә хәҙерге тарихи хәл алып килде уларҙы был ҡарарға... Тарихи өлгөрөш... Аңлайһыңмы... ул һине лә бит...

— Йә, ярар-ярар... Афарин.. Рәхмәт...— тип уның һүҙен бүлде Закир. һәм үтә етди тауышҡа күсеп, ашығыс бойороҡ бирҙе:

— Иптәш Ғимранов, хәҙер үк атҡа атлан. Үҙеңә юлдашҡа иң ҡыйыуҙарҙан ун һалдат һайлап ал... Ҡыҙылдар



менән һөйләшергә беҙҙән парламентер булыу бурысы Р лә һиңә.

— Була ул, иптәш командир,— тине Ғимранов, тағы ла йәнләнеп.— Был дөрөҫ фекер.

— Шулай булырға тейеш,— тип раҫланы Закир. Унан ошо минутта үҙ башында тыуған ҡыйыу теләктәрен әйтеп ҡалырға ашыҡҡан һымаҡ теҙеп китте:— Мин улар Өфө янында ҡаты һуғыштар алып бара икән тип ишеткәйнем. Теге генерал... Шулай тигәйне... Штабтарын эҙләп тап. Үҙебеҙҙен, шартты әйт: плен итеп түгел, ҡыҙыл полк итеп ҡабул итһендәр. Ҡоралһыҙландырмаһындар. Революция өсөн, Ленин яғында тороп һуғышырға ҡарар иттек, тиген. Ошо изге теләгебеҙҙе һуғыш майҙанында ҡан менән, йән менән аҡларға рөхсәт итһендәр...

Ул шинелдәренән һыу тамсылары һарҡырап торған йонсоу һалдаттарына тағы бер күҙ йөрөтөп сыҡты. Уларҙын. бөгөлөп төшкән яурындары турайып, күҙ ҡараштарына йән, өмөт инеп киткәндәй тойолдо уға: «Тимәк, ҡарар дөрөҫ булған»,— тип уйлап алды. һәм яғымлы, йәш тауыш менән:

— Шулай бит, туғандар!— тип һораны.

— Дөрөҫ!

— Шулай!

— Тап беҙ уйлағанды әйттең!—тине һалдаттар.

Закир һынаулы ҡарашын инде Ғимрановҡа йүнәлтте, ә ул был ваҡытта парламентер булараҡ юлға сығырға әҙерләнә: атыныц ялын һәйбәтләп тарай, ҡойроғон буденновсыларса ҡыҫҡартып маташа ине.

— һин, туған, унда, штабта һөйләшкәндә, ярлы-ялпы халҡынды һәр саҡ күҙ уңында тотоп һөйләш инде. Беҙ бит халыҡҡа тағы ла ҡатыраҡ ауырлыҡ, бөлгөнлөк төшөрөр өсөн түгел, ә азатлыҡ, еңеллек килтерер өсөн тип ҡорал күтәреп сыҡҡанбыҙ.

— Быны миңә ҡабатлап аңлатып тороуҙыц кәрәге булырмы икән?— тине Ғимранов, эшенән туктамай ғына.— Коммунистар бит үҙҙәре тап ана шул иҙелгәндәргә, кәмһетелгәндәргә азат, бәхетле тормош яулап алып бирер өсөн оло көрәшкә күтәрелгән кешеләр ҙә баһа!

— Йә, уңышлы юл!— тине Закир, инде көр тауыш менән.— Әйҙә, елдер!

Унан йөҙөндә арығанлыҡ һәм бер тиклем борсолоу сағылһа ла, ҡәнәғәт, өмөтлө йылмайып, ҡалған һалдаттарға ҡараны:

— Ә һеҙ хәҙер ял итегеҙ. Кейемдәрегеҙҙе киптерегеҙ. Аттарығыҙҙы, ҡоралдарығыҙҙы тәртипкә килтерегеҙ. Бегөндән алып һеҙ рухығыҙ менән ҡыҙыл армеецтар. Уға достоин булығыҙ!

## Икенсе бүлек

Ерем, һуҡырһыц һин, етэклзйем, киттек,
Күҙең асылырга тейешле.

*Р. Ғаҙизатов*

### I

Бында өйҙөң эсен икегә бүлеп йөрөтәләр. Түрьяҡ — ҡунаҡ һәм ғаилә башы, ғөмүмән, өлкәндәр өсөн. Түрбаш — аш-һыу бешереү, бала-саға, йәш-елкенсәк өсен. Был ике яҡ, ғәҙәттә, таҡта йәки шаршау менән бүленә. Шаршау уңайлыраҡ. Сөнки уны кәрәге булмағанда күтәреп, өйҙө иркенәйтеп ҡуйырға мөмкин.

Бибештәрҙең гаиләһендә шаршауга мохтажлыҡ юҡ тип әйтерлек, уларҙын ҡунаҡ өйө айырым, етмәһә, ғаиләлә өлкән ир заты ла юҡ. Шулай ҙа шаршау, гәҙәт буйынса, үҙ урынында тора. Төрлө-төрлө кизеләр менән мөһөрләп, семәрләп һуғылған шау биҙәк ҡыҙыл һары был шаршау юғары күтәреп урҙаға яҙып элеп ҡуйылған. Былай ғына, матурлыҡ һәм тәртип өсөн генә. Шулай ҙа берәй өлкән ир заты янылышып был өйгә килеп инһә, уны ялт иттереп төшөрөп тә ҡуялар. Бибеш шаршау төшөрөлмәгән саҡта ла, килен булараҡ, түрбаш яҡта ултырырга ғәҙәтләнгән. Сөнки уның урыны, эше, хатта бала сәцгелдәге лә түрбаш яҡта. Бына әле лэ ул шумда иҙроп китсп бала имсҙеп ултыра. Туп шикелле йоморсаҡ, көләкәс Йәнеш, йә нәфис бармаҡтары мепэы әсәһенең тығыҙ, аҡ күкрәген маткып тотоп, йотлоғоп имә, йә һөткә мансылған ирендәрен уймаҡ хәтле генә итеп матурлап бөрә лә;

— У-уа, у-уа!.. Уғ-ға, ға-ға, геү-геү...— тип үҙенә генә билдәле булған ҡыуаныс тойғоларын һирпелтеп, геүелдәргә керешә. Унаи, ҡыҙыл тәпәйҙәрен тыпырсындырып, көләкелә, яткан ереиән «йүгереп» китә. Күренеп тора, әсәһенең иғтибарын тотош яуларға тырыша бәпес. Әсәһе уның, ғәҙәттәгесә, уйсан, баҫалҡы. Уның тәрән, аҡыллы ҡараштары берсә итәгендә ҡояш кеүек балкып ятҡан бәпесендә, берсә түрьяҡта кескәй көҙгө алдында кейеиеп-яһанып маташҡан һеңлеһе Емештә оҙаҡ-оҙаҡ тукталып тора. Алһыу йөҙөнә йә сағыу ҡыуаныс, йә тәрэн бошоноу күләгәһе йүгерә.

«Йәнеш һылыуымдың иҫтәлеге итеп, уның нсемен бирҙем бит мин һиңә!..— тип уйлай ул, бәпесенә һөйөп ҡарап.— Яҙыҡшың менән дә уның кеүек булмаһаң ярар ине... Юҡ, юҡ!.. Алла бирһә, һин оҙон ғүмерле, оло бәхетле Йәнеш булырһың... һине бәхетле итеү өсөн мин йәнемде, йөрәгемде бирермен... һинең өсөн генә йәшәрмен мин... Ишетәһеңме, һннең өсөн генә, бәпесем!..»

Ул, үҙенең үҫеп еткән бик һылыу, үтә бәхетле шул ҡыҙын әле үк күргәндәй, билдәһеҙ алыҫлыҡка төбәлеп, кинәнесле йылмайып, тынып ултыра.

Емеш һаман әле, бая апаһы бүләк иткән үҙенең тәүге байрам кейемдәрен бер кейеп, бер сисеп, һыланып-һыйпанып маташа. Әйтерһең, бының өнмө-төшмө икәнлеген айыра алмай аҙаплана. Бибештең ҡарашы ла, уйҙары ла хәҙер уға күсә: «Хәтеремдә, бер саҡ Ҡарасәс инәй мәрхүм, сәй янында, бәлки, үғәй әсәйгә үс итептер... Емеште йырлай-көйләй маҡтарға керешеп китте: «Ул бөгөлөп торған оҙон керпектәр, һөрмәле түп-түнәрәк ҡара күҙҙәр, Оло Эйек тулҡыпдары шикелле дүкгәләкләнеп ятҡан бөҙөркә сәстәр... Ул ҡыйылып киткән ҡалын ҡара ҡаштар...— ти.— Тик бына күҙ ҡараштары бигерәк аҡыллы ла, моңло ла шул. Бәхетһеҙ йәки гүмерһеҙ генә булмаһа ярар ине...»,— тип тә ҡуйҙы... Уй, әгәр Ҡарасәс иинәй күрәҙә булып ҡуйһа?!.— Бибештец йероге сабырһыҙ дөпөлдәп типте.— «Уй, әгәр ул алдан күргән булһа?!. Алла һаҡлаһын... алла һаҡлаһын...»

Ул, иғтибарын икенсе яҡка борорға тырышып, Емештец буйын-һынын ентекләп күҙәтергә кереште: «Быйыл ул ҡапыл һонолоп үҫеп китте шул... Кәүҙәһе лә еНел, йомро һөйәкле, ҡупшы гына булмаҡсы... Байрам кейемдәрен кейгәс, апарыу еткән ҡыҙ булды ла ҡуйҙы ла баһа!..» Бибешкә һеңлеһе ысынлап та үтә һылыу ҙа, үҫеп еткән дә булып күренә башланы:

Буйын зифа талдай, йөҙөн айҙай...
һы.чыу, һаҡ бул, күҙ теймәһен, ай-һай!..—

тигән ниндәйҙер йыр юлдары күңеленә килде. Хәйер, бында, Оло Эйек буйында, шиғыр, йыр, әйтем менән уйлаунөйләү һәр кем өсөн хас нәмә инде. Уға бында бер кем дә аптырамай. Сөнки тәбиғи күренеш. Бибеш һаман-һаман нескәрәк тойғоларға бирелә барып, һеңлеһенән ҡыуаиыслы ҡарашын ала алмай оҙаҡ текләп ултырҙы. Ул һуңғы ваҡытта, әллә янында ҡалған берҙән-бер туғаны булғанға, Емеште нык ярата ла, уның өсөн ҡыуана ла, көйөнә лә. Матур йөрөтөргә лә тырыша ине.

Емеш бөгөн, ғүмерендә тәү таптыр тип әйтерлек, баштан-аяҡ байрамса кейенгәйне. Бибеш үҙе кейендергәйне уны.

Эйе, башта ул бынауы — күп итәк һалып тегелгән өр-яны күк сатин күлдәкте бирҙе.

— Ҡыҙ сағымдан ҡалған берҙән-бер күлдәк... Мине кейәүгә биргән саҡта кейҙергәйнеләр... Мин уны бер-ике генә кейеп һалғанмындыр... һандыҡ төбөндә ятты шунда... Башта күңелем төшмәне... Аҙаҡ үҫеп киттем... Бәләкәс булып ҡалды... Ә һинә ул хәҙер тап-таман... Күрәһең, кейәүгә биргән саҡта мин һинең хәтле генә булғанмын...—~тип тағы моңһоу ғына көрһөнөп алды. Бошонҡо ғына йылмайып, тағы һоҡланып, һеңлеһен баштан-аяҡ ҡарап сыҡты.

«Ҡара һин уны... Арыу кейенгәс, төптө еткән ҡыҙ булды ла ҡуйҙы ла баһа. Бөрлөгән хәтле генә булып түшкенәһе лә ҡалҡып килгән була бит әле... еткән ҡыҙ, еткән. Бүтәнсә ни әйтәһең инде уға?!»

Емештең ҡолонсаҡ тояғындай йомро аяҡтарына ҡарап та һоҡланмаҫлыҡ түгел ине бөгөн. Хисбулла еҙнәһе бүләк иткән, бөтә Илсегол ҡыҙҙарының хыялынан сыҡмай торған бейек күтәрмәле, еҙ дағалы ҡара күн итек тә уның төп-төҙ кескәй аяҡтарына бик килешеп тора. Бының өҫтәүенә Бибеш апаһы уга үҙенең сәс тәңкәһен дә, алмиҙеүен дә, сулпыһын да бирҙе. Таиба ҡоҙағыйы биш билле ҡыҙыл соға камзул тегеп кейҙерҙе. «Ағас күрке япраҡ, әҙәм күрке сепрәк»,— тип, боронғолар белмәй әйтмәгәндәр шул...— Бибеш һеңлеһенә һоҡланып та, бошоноп та тағы бер ҡарап алды: — Ҡарасәс инәй әйтмешләй, бәхетһеҙ йәки ғүмерһеҙ генә булмаһа ярар ине. Эй-й, матур булыу менәнме ни ул... Мәһәрһеҙ — етем ҡыҙ ниндәй бәхеткә өмөт итә ала?!

Емеш, ғәҙәттә булмағанса, шат яктырып апаһының алдына килеп баҫты.

— Кейенеп бөттөм, апай. Килешәме?

Бибеш уны йәнә баштан-аяҡ ҡараи сыҡты. •

— Бик килешә.

— Ҡыҙҙар янына сығайыммы инде, апай?

— Бар, һылыу, танһығыц ҡанғансы уйнап ҡайт.

Емеш ҡыуанып, сәс тәңкәләрен сыңғырлатып, ишеккә йүгерҙе.

— Киттем, апай!— Ләкин шунда уҡ күңелһеҙләнеп кире боролдо.— Әй, әллә нисек уңайһыҙ бит әле...

— Нимәнән уңайһыҙ тағы?— тпп аптыраны Бибеш.— һин шундай матур булып киттең...

— Яны кейемдәрҙән... Мин хәҙер үҙем кеүек түгелмен һымаҡ...

— Кит, бушты һөйләмә. Бар, әйткәс, тыңла. Ваҡыт барҙа уйнап-көлөп ҡал!— тине Бибеш, инде ҡырҡыу итеп. Үҙе эстән тағы әсенеп ҡуйҙы. «Эй алла, алама кейемгә күнегеп бөткәс ни, яцы кейем ят булып тора шул инде.».



Ләкин эш, Бибеш уйлағанса, кейемдә генә лә түгел ине. Емештен, кескәйҙән үк үҙенең эске һәм тышҡы донъяһына саманан тыш нығ иғтибар итеү, кеше араһында көлкө йәки кыҙғаныс булып күренеүҙән сикһеҙ ҡурҡыу ҡылығы бар. Шул ҡылыҡ уны һәр саҡ кеше араһынан ситкә тарта, ғәҙәттән тыш оялсан һәм ҡыйыуһыҙ яһай. Бөтә йөрәге менән кеше араһына ынтылып торған, кеше араһында үҙен дә тиң һәм тигеҙ күреп, иркен, тыныс, ышаныслы тотоу теләге менән янған Емеш өсөн үҙенен. был ҡылығы, аҙаплы тышауға әйләнеп, аяғына уралып ята. Бөтә донъя тик уға ҡарап, уны ғына күҙәтеп тора һымаҡ, әгәр саҡ ҡына яҙа баҫтыңмы, ярамағанды ҡыландыңмы, хәҙер бөтәһе бот сабып келә башлар, шул көләү менән уны тамам тапап-иҙеп ташлар кеүек тойоу арҡаһында тыуған был ҡылыҡ ысынлап та кескәй Емештең шатлығын быуып тора ине.

Урамда Емештен, үҙе кеүек үк аллы-гөллө кейенгән бер төркем ҡыҙҙар, күптән инде күцелле шаулашып, өйҙән өйгә йүгерешеп йөрөй. Емештен. дә хәҙер осоп төшөп улар араһына барып ингеһе, уйнап-көлгеһө килә, әлбиттә. Ләкин ул, ғәҙәтенсә, тағы икеләнеп, үҙҙәренец ҡапка төбөндә туктап ҡала. «Эй, әллә нисек бит әле...»

Ғәҙәттә, сабыр холокло Таиба әбей был юлы, байрам көн булыуға ҡарамаҫтан, пыр туҙып ҡайтып керҙе.

— һай, был әҙәм тигәнең, һинен. ҡасан, ҡалай яҙа баҫырынды кетөп кснә тора! Эйе, ысын. Саҡ ҡына янтай, шунда уҡ төртөп осорор. Әһ тип әйтергә лә өлгөрмәҫһен... Ярабби, кешенең йөрәк яраһына осраған һайын тоҙ һибеүҙән тәм табыусыларҙан арыныр әмәл генә ҡалманы ла баһа инде! — тип, төрлө көйгә һөйләй-көйләй урындыҡҡа — тәҙрә янына уҡ менеп, тубыҡ сәнсеп ултырҙы. Хатта бына нисә йылдар инде ҡунаҡҡа барганда ғына кейеп, ҡайтҡас та сисеп, тәңкләп, һандыҡ төбөнә ҡәҙерләп һалып ҡуя торған кейемдәре хаҡында ла, күрәһең, онотто. Башына ябынған шау биҙәк зәигәр кешмир яулығы, терлө ебәк таҫмалар баҫып, билдән бөрөп, мул итеп тегелгән һары сатин күлдәге, укалы ҡыҙыл бәрхәт камзулы менән ул хәҙер хужа ҡатынға түгел, ә ҡунаҡ ҡоҙағыйға оҡшап уҡ тора. Әммә борсоулы йөҙөндә һис тә байрам, ҡунаҡ төҫө юҡ ине.

Бына ул, күкрәгенә һыймай атылып килгән асыуҙы кемгәлер, нимәгәлер йәһәтерәк ауҙарырға теләгәндәй, ҡарт бөркөттөке шикелле тынысһыҙ ҡыйғыр ҡараштарын ейҙөн, бөтә мөйөшөнә йөрөтөп сыҡты.

Түрбаш яҡта килене Бибеш, боҫорап-бышылдап яткан

сей усаҡ ярҡаларын тоҡандыра алмай, усаҡҡа өфөлдәп өрөп маташа. Ишек төбөндә улы Хисбулла бүкәнгә атланып ултырып алған да бик тырышып бысаҡ ҡайрай. Өс йәшлек ейәне һөйөндөк ҡағыҙ ҡарға осороп уйнай. Әле генә имеп туйған кескәй Йәнеш сиртмә менән өрлеккә беркетелгән сәңгелдәктә тәпәйҙәрен ике ҡуллап тоторға тырышып геүелдәп ята. Ҡыҫҡаһы, өйҙә кәйефте ебәрерлек, бәйләнерлек бер ни ҙә юҡ һымаҡ. Шулай ҙа Таиба әбей тапты.

— Йә, эшлекһеҙ бисәгә оҡшап, өфөлдәп торма! Ҡоро сыра, туҙ һалып тоҡандырһаң булмаймы ни?!— тип килененә екерҙе.

— Өләсәй, күстәнәс апҡайттыңмы? Бауырһаҡ... Йыуаса, манпас...— тип һырпаланған ейәнен:

— Кит әле, ҡамасаулама! Бында һиңә күстәнәс ҡайғыһы!—тип ситкә тибәреп ебәрҙе. Унан тағы:—Эй-й!...— тип көйөнөп китте.— Эй-й, был әҙәм тигәнең... Йә, йөрәгенде ярып сыҡҡан йәндәй ғәзиз баланды, үҙ-үҙенә ҡул һалған, иманһыҙ киткән, тип йән ҡыйғыс хәбәр тараталар ҙа баһа...

Таиба әбейҙең һәр саҡ тыныс, аяҙ йөҙөнә әсе хәсрәт һөрөмө ятты. Ҡасандыр, ирҙәр менән ярышып, кәбән, эҫкерт һалып йөрөгән көслө беләктәре ҡапыл сыбырткыланып, түҫәрәк яурындары емерелеп төшкән һымаҡ булды. Ошо минутта үтә ҡарт, хәлһеҙ булып күренгән итләҫ, олпат кәүҙәһе буйлап өнһөҙ һулҡылдау йүгерҙе. Ләкин ул иламай ине. Бөтә гүмерен ауыр эш, йәшәү өсөн тынгыһыҙ көрәш менән үткәргән ҡаты тәбиғәтле, көслө ихтыярлы Таиба әбей илауҙы белмәй торған йәки белеп тә оноткан ғорур кешеләрҙең береһе ине. Илап кем бәхеткә ирешкән?!

Шулай ҙа, һәр бер әсә үҙенен ҡыҙын матур мтеп, улын батыр итеп күрергә теләй, тиҙәр бит. Нисек кенә көслө ихтыярлы, етди ҡатын булмаһын, Таиба әбейгә лә был йомшаҡлыҡ ят түгел ине. Әс улын да батыр, дан ир итеп күрергә теләнә ул да. Ә инде кинйә улының — Закирының матур ҙа, батыр ҙа булыуына һис тә шик тотманы. Баҡтиһән,, бына ул ҡалай булып сыҡты!.. Актар яғында атаман булып алған, имеш, тип һөйләйҙәр ҙә баһа! Үҙ ағаһына, Хамматыма ҡаршы һуғыша имеш, ти... Үәт гонаһ шомлоғо... Ике балан, ике яҡта бер-береһенә ҡаршы һуғышып йөрөһөнсө инде... Әй Закир улым, аҡылға ултырманың һин, ултырманыц... Байҙар есөн баш һалырға йөрөмәҫ инен, һин, аҡылың булһа...

Бибеш ҡәйнәһенә бошоноп ҡарап алды:
«Тағы шул Закир хаҡында берәй яман һүҙ ишеттергәндәрҙер инде... Былай ҙа.унын, өсөн көйөнә-көйөнә был арала үтә лә ҡартайып китте бит инде ул...»

Бибеш тәүҙә, килен булып төшкән йылдарҙа, бейеменән(, ни хәтле ҡурҡһа, хәҙер уны шул хәтле тәрән ихтирам итә. Уның ғәзел, ҡыйыу йөрәге, эшсән, талапсан ҡылығы алдында һүҙһеҙ генә баш эйә, үҙе лә һнҙмәҫтән, бөтә яҡтан уға эйәрә, оҡшай бара ине. Шуға әле бына бейеменең Закир хаҡында йөрөгән төрлө күңелһеҙ хәбәрҙәрҙе тагы ишетеп ҡайғыға тарыуын аңлап алгас, ниндәйҙер йылы, тылсымлы һүҙ әйтеп уны йыуатҡыһы, ҡыуандырғыһы килә ине унын. Ләкин ҡайҙа һуң?! Әсә йөрәгенә бала һалган ҡайғыны һыйпап алырҙай һүҙ бармы ни донъяла?!

Ишек төбөндә, бүкәндә, һа.ман бысаҡ ҡайрап маташҡан Хисбулла ла: «Йә, мырҙа, Закир, яҙа юлға баҫырҙан алда, исмаһам, әсәнде иҫкә төшөрөр инең!.. Ысын булһа, был бит нәҫел-нәсәптә булмаған хәл...» — тип, һукраныуҙан башка һүҙ таба алманы.

Таиба әбей, тирләп тонған тәҙрә быялаһы үтә ниҙәрҙер күрергә теләгән һымаҡ, бик оҙаҡтышҡа ҡарап.тынып ултырҙы. Ул арала Бибеш тә ҡаҙан аҫтына ут яғып ебәрҙе. Бик ҙур агас табаҡҡа ун биш йоморткa һытты ла, бер ҙә һыу, һет өҫтәмәй, аҡ ондан сөсө ҡамыр баҫырға тотондо. Ул байрам ашыиа бауырһаҡ, ҡолаҡ бсшерергә йыйына ине. Ә Хнсбулла салғы һынығышан яһалган ағас һаплы ҙур бысаҡты, үҙенен. ярылып ҡаткан керле бармак битсиә тейҙереп, үткерлеғси -карай-ҡарай, һаман ҡайраны ла ҡайраны. Ахыр, Танба әбсй, күрәһең, ҡайгылы уйҙарҙы нпсек тә еңеп, тағы балаларыиа әйләнеп ҡарапы. Был ва кытта унын. йөҙөнән көҙгө болот үт кән, аяҙлы күк ҡалҡкаи тип әйтсрлек ине.

— Йә,— тиме ул, яулыгын ҡырка артка ташлап.— Кеше . һүҙе кешс үлтеро, тиҙәр бит. Умдай һүҙҙәргә бирешеп торһац, үлсрһец до. Ә мипец әле йәшогем килә... Улдарымдын, һугыштан ҡайтыуыи, ейондәремдең, ейэпсәрҙәремден. үҫкәнен күреп ҡыуапым ултыргым килә... Эйе, йәшәгәндә йәшәргә корок оле... Алламың ҡөҙрәтенән килмәгәнде там итмә.. Кешене үлемһеҙ, ҡайғыһыҙ итә ал.май ҙа ул... Гел-гел ҡыуаныс менән генә йәшәп булалыр шул!.. Ысынлап та, бер ҡайғы-хәсрәт күрмәй йәшәргә ммн алланың ҡашҡа тәкәһеме ни?!•— тип һөйләнә-һөйләиә, сәцгелдәк янына шыуып ултырҙы:

— һайт, сәбәкә ҡыҙыҡай, йә әйт әле, дөрөҫтө һөйләйме ҡәртсән?-- Кескәй Йәнеш, ҡәртсәһен күргәс, ҡыуаныстан сиҡылдап көлөп ебәрҙе, аяҡ-ҡулын тыбырсындырып уға ынтылды:— Ал мине, ал!— тигәнде аңлатып, ҡояштай яҡтырып ҡараны. Ҡәртсәһе күтәреп алгас, кескәй тәпәйҙәренә баҫып һикерергә-кирелергә теләнс.

— Ҡыҙыҡайымды, ейәнсәремде, сәрелдәтеи, сәңгелдәккә һала ла"ку'ялар, сәбәкәләр. Уйнатмайҙар ҙа, һикертмәйҙәр ҙә. Улай кеше ҡалайтып үҫһен!— тип һөйләнә-кинәнә Таиба әбей баланың арҡаһын, аяҡтарын һыпырҙы. Йәнеш,

кинәнеп, аяҡ-ҡулдарын тарбаңлатып кирелде. Тешһеҙ ауыҙынан һөтлө телен күрһәтеп, матур итеп көлдө. Таиба әбейҙең ҡайғыһы таралып киткәндәй булды. Ейәнсәрен хатта таҡмаҡ әйтеп һикертә лә башланы:

— Үҫер был ҡыҙ, үҫер. **Шәп** булыр.
Тира-тира, тиратай,
Тиҙ кейәүгә бир, атай,
Аксалары булмаһа,
Көтәсэккә бир, атай,—

тип таҡмаҡлап, бейеп тә йөрөр.

Ҡәйнәһенең йөҙө яҡтырып, бәпес һөйөргә керешкәс, Бибешкә лә рәхәт булып, ҡулдары еңеләйеп, етеҙләнеп киткәндәй булды. Был саҡта ул сөсө ҡамырҙы һағыҙландырғанса баҫып бөтөп тора ине. Хәҙер унан бауырһаҡ өсөн бик күп нәҙек оҙон тигеҙ бауҙар яһарға ла, ҡолаҡ өсөн йоҡа ғына йәймәләр йәйергә лә мөмкин. Ә унан инде ҡаҙанда һары майҙа ҡайнатып бешереп алырға ғына ҡала. Шулай ҙа оҙаҡ, мәшәҡәтле эш был. Унын ҡарауы матур, тәмле байрам ашы була.

Хисбулла һаман әле бысаҡ ҡайрай ине. Ул бөгөн ғүмерендә тәү тапҡыр һарыҡ һуйырға, ҡорбан салырға йыйына. Быға саҡ уларға малды һәр саҡ Шәүрәнең атаһы Хәллм ағай һуйып бирә; Таиба әбей, яҡшы күңелле кеше һуйған ит тәмле, йомшаҡ була, ҡаты бәғерле кеше һуйһа — ҡаты, тәмһеҙ була, тип ышана. Шуға күрә быға саҡ Хәлим ағайҙан башҡа кешенән мал һуйҙырмай ине. Ләкин был юлы ул: «Хисбулла ла яҡшы күңелле, йомшаҡ холоҡло кеше бит. Унын, ҡулы ла һәйбәт булыр,— тигән фекергә килде.— Гел-гел Хәлимде ыҙалап тороу ҙа яҡшы түгел. Элек, балалар йәш саҡта, һәр саҡ ярҙам итеп килде. Рәхмәт. Хәҙер Хисбулланың үҙен өйрәтергә ваҡыт...»

Шулай итеп, Хисбулла, ике бала атаһы булып, йәше утыҙға етеп килгәндә, әсәһенең алдында тағы бер һынау үтергә тырышып ултыра бөгөн. Ләкин унын, был «тырышлығы» Таиба әбейҙең теңкәһенә бик тиҙ тейҙе.

— Йә, Хисбулла, һин, ахыры, кендө бысаҡ ҡайрап уҙғарырға булдың? Ҡорбанды тиҙерәк салып, бишбармаҡ бешереп, күрше-күләнде саҡырып алырбыҙ тигәйнек тә баһа,— тине ул ахыр, сабырлығын юғалтып.— Былай ни беҙ ҡасан өлгөрөрбөҙ?!

Хисбулла өндәшмәй ҡайрауын белде. Бер аҙҙан Таиба әбей тамам түҙемен юғалтты:

— Булмаҫ бынан,— тип ҡул һелтәне. Килен, бауырһағыңды бешереп бөт тә Хәлим ҡайнағаңа бар. Килеп, ҡорбан салып бирһен. Юғиһә, был бәпес, күрмәйһеңме: «Йәндәренә



нығыраҡ тейһәм, берәйһенән салдырырҙар әле»,— тип ығышып ултыра бит ул.

Ҡәйнәһенең һүҙен Бибеш ҡоро ғына кире ҡаҡты:

— Бер ҡайҙа ла бар.майым, бер кемгә лә әйтмәйем. Үҙе салһын. Өйрәнһен. Ошо йәшенә етеп, һарыҡ та салмағас, ул ниндәй атай?

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ ине. Таиба әбей тынды. Хисбулла тағы бер аҙ ҡайрағын сырылдатып ултыра бирҙе лә иренеп кенә урынынан торҙо. Ишек башындағы ҙур ағас сөйҙә эленеп торған ҡолаҡсын бүркен алып, оҙаҡ ҡына әйләндереп, һыйпаштырып торғандан һуң, теләмәй генә башына кейҙе.

— Йә, мин киттем.

— Килен,— тине Таиба әбей, инде йомшағыраҡ итеп.— Бар, аҡ һарыҡты тотошоп бир шуға.— Быйыл тыу ҙа йерөнө, һимеҙ булыр. Уландарымдын, һаулығы өсөн аҡ ҡорбан салырмын тигән әйтеүем бар ине... Аҡ ҡорбан салырмын тип нәҙер әйткәйнем...

— Аҡ һарыҡты, ти, әйтерһен. дә башҡа төрле һарыҡ бар... Бер һарыҡһыҙ ҙа ҡалабыҙ ҙа баһа, бейем,— тип, Бибеш ҡыймай ғына ҡаршы төштө.— һарыҡ тоҡомо сәпсим өҙөлә лә баһа.

— Ярар, нәҙер әйткәнмен, үтәмәһәм, әйтеүем башыма төшөр,— тине Таиба әбей, ҡырт киҫеп.— Баш һау булһа һарыҡ табылыр әле,— тип тә ҡуйҙы.

Бибеш бешереп бөткән ҙур бер табаҡ бауырһағын киндер ашъяулыҡ менән ябып ултыртты ла, бүтән бер һүҙ ҙә әйтмәй, өҫтөнә ҡыҫҡа көпө кейеп алды.

— Әсәй, мин дә сығам,— тип, һөйөндөк тә һикереп торҙо.— Мин дә ҡорбан салам.

Бибеш уны етәкләп алды.

— Әйҙә, өйрән. Юғиһә, атайың шикелле ҡартайғансы тауыҡ салырға ла ҡурҡып тороpһоң.

Бибеш менән Хисбулла, ялан кәртәлә кәзәләр араһында йөрөгән аҡ һарыҡты көскә тотоп алдылар, һейрәкләп ишек алдына алып сыҡтылар. Аяҡтарын бәйләп, ҡиблаға ҡаратып йығып һалдылар. Ошо ваҡытта Емеш тә ҡапканан йүгереп килеп инде.

— Бәй, һылыу, ҡайттын, дамы ни?— тип аптыраны Бибеш.— Мин һине өйҙән бер ысҡынғанда оҙағыраҡ йөрөр әле тиһәм...

Емеш: «Әй, яңы кейем менән әллә нисек ҡыйын һымаҡ та... Ҡыҙҙар янына барманым да... ҡапҡа төбөндә торҙом да торҙом...»—тип серҙе сисмәксе булғайны ла, апаһы орошор тип, өндәшмәне. Еҙнәһе янына барып баҫты:

— Нимә эшләйһең, еҙнә?!

— Ҡорбан салам,— тине Хисбулла, йыуаш ҡына йыл-

майып. Унан әллә ысынлап, аллә уйнатып:— Йә, балдыҙ, ҡорбанға тотон,— тип бойорҙо.— Ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер сират күперенән ошо һарыҡтың елкәһенә ултырып, ожмахтың түренә бергәләп елдереп үтербеҙ. һин дә бит, балдыҙ, балиғ булдың. һинен, дә яурынында ике фәрештә яҡшылығың менән яманлығыңды яҙып ултыра бит... Быны белеп тор, балдыҙ!..

Еҙнәһенен. бөтә һүҙен ысынға алған Емеш тиҙ генә һарыҡ янына сүгәләне. Күҙҙәрен сырт йомоп, ике ҡуллап, арҡа йөнөнә йәбеште.

...Ожмах?! Емештең хыялында мең терлө матур биҙәккә биҙәлеп, сиктән тыш ҡабартылған мәңгелек бәхет төйәге! Эйе, унын, иң мөҡәддәс хыялы, татлы өмөтө. Донъялағы бәхетте Емеш бер ҡасан да өмөт итмәне. Быға уның һис бер ерлеге юҡ ине. Ә бына үлгәс, бөтә кешегә — ярлыға, байға, хәйерсегә, батшаға бер тигеҙ тейә торған бәхеткә ул үҙен хаҡлы һанай, нисек кенә булмаһын, үҙепең шул бәхеткә лайыҡ булырлыҡ итеп йәшәйәсәгенә ышана ине. Ожмахҡа һис шикһеҙ инер өсөн ул быгаса хоҙайҙан үҙен балиғ булмаҫ элек үлтереүҙе һораны: гонаһһыҙ саҡта үлергә лә, ожмах ҡошо гына булып, мәңгелек баҡсала һайрап йәшәргә!.. Ләкин, күрәһең, хоҙай уның был теләген ҡабул итмәне. Сабый саҡ үттс. Емеш балиг булды. Уга ун өс йәш тулды хәҙер. Инде ул, ошо ҡорбанга тотоном булһа ла, сират күперен уҙырға, ожмахта иң ябай бер йән эйәһе булыш ҡына йәшәргә лә риза. Шуға ул үҙенең ваҡытлы ҡайтып инеүенә бик шат булды.

— Емеш апай, мин до тотонам,— тип һөйөндөк тә һарыҡ янына барып сүгәләне.

— Бибеш, һин ницә тотонмайһың?— тип ҡатынына ҡараны Хисбулла.— Тексәйеп тик тораһынсы...

— Йәһәтерәк сала һал!— тине Бибеш, ҡоро гына итеп.— Миңә тиҙерәк эсәк-ҡарын йыуырға ла аш бешерергә кәрәк.

«Бынауы апайымдың ожмахҡа ингеһе килмәйме икән ни?— тип аптыраны Емеш.— Сират күперен уҙғанда тамуҡҡа ҡолап төшөрмөн тип ҡурҡмаймы икән ни?!»

— Тәүәккәлләнек,— тине Хисбулла, үҙенә ҡеүәт бирергә тырышып. Унан күҙҙәрен йома биреп, «бисмилла-а!..» тип, ничер уҡынып, бысаҡты ҡапыл ышҡып ебәрҙе.

— Иҫәүән. һарыҡтың муйынын өҙөп сығара яҙҙың да баһа!—тине Бибеш, әллә көлөп, әллә асыуланып.— Килбәтһеҙ... Улай салаларҙыр шул?!

Хисбулла, ҡыҫығыраҡ йыуаш күҙҙәрен мөмкин тиклем киң асып, эре генә тамаҡ ҡырып ҡуйҙы.

— Үәт, салғас шулай салалар уны!

— Килбәтһеҙ,— тип ҡабатланы Бибеш, эсе бошоп. Бәпес!..



Емеш тамам донъянан ваз кисеп, һарыҡҡа сат йәбешеп, тын да алмай ултыра бирҙе. Уның ғәҙәттән тыш ҙур асылған күҙҙәрендә иҫ киткес ышаныу, өмөтләнеү йәки өмөтһеҙ саяланыу кисерештәре сағыла ине. Бибештең уға ҡарап та эсе бошто.

— Емеш!— тип өндәште ул, тағы ла ҡырҡыу итеп.— Емеш, һылыу, тор!.. Бар лутсы өҫтөнә иҫке күлдәгенде кейеп сыҡ. Оло Эйеккә эсәк-ҡарын йыуырға барырбыҙ.

Емеш ғәйәт уйсан һәм бошонҡо төҫ менән тороп баҫты. Үҙенең ҡайҙа булыуын, нимә эшләргә тейешлеген дә онотҡан һымаҡ, бер аҙ иҫәңгерәп торҙо. Унан ашыҡмай ғына өйгә табан атланы. Уны: «Үҫеп етеү — ожмах ҡошо булыуҙан мәхрүм ҡалыу була икән, тигән кисереш менән бергә, ҡорбан минеке түгел бит. Кеше ҡорбанына килеп тотоноу — оятһыҙлыҡ булманымы икән?!» — тигән ауыр шик тә аптырата ине был минутта.

— Тиҙерәк бул, һылыу,— тип ҡыҫҡырып ҡалды Бибеш.— Эсәк-ҡарын һалырга күнәк тә апсыҡ!

II

Ҡатындар ауыҙға-ауыҙ терәп шым ғына һөйләшеп ултыралар. Уларҙын. ҡайһыһы йөҙҙәренә, йәш тулы күҙҙәренә ҡарап ҡына ла һүҙҙек кем, нимә хаҡында барғанын төшөнөргә мөмкин ине. Улар, әлбиттә, үҙҙәренен һөйгән йәрҙәре хаҡында һөйләшәләр, бойомға ашмаған хыялдары, ваҡытһыҙ өҙөлгән мехәббәттәре өсөн үкснеп ҡайгырышалар. Өммөгөлсөм Ха.мматын, Гелйыһан Закирҙы һагына. Был ике ҡатынды — йәп-йәш кенә Гөлйыһан менән быуынға ултырган, әсә ҡорона ингән Өммөғөлсөмдө — хәҙер бер үк һагыпл, ҡанмаған мөхәббәт берләштерә. Ҡатындарҙыц был берғәләп ҡайғырыу, бергәләп һағыныу ҡылығктары Байраҫҡа аңлашылмай ҙа, ят та күренә. Шуға күрә ул үҙҙәренә Гөлйыһан килеп инеү менән өйҙән атылып сығып та китә. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ғөмүмән, был илаҡ ҡыҙҙы унын. йәне һөймәй. Закир ағаһының башын әйләндереүсе, умы яуыз төлкө Хөснөлхаҡҡа эйәреп ҡайҙалыр сығып китергә мәжбүр итеүсе, тип иҫәплэп яратмай ул уны: «Йә, кем өсөн башын һалды бит ир-егет?!.» тип йәне көйә.

Бына әле лә, Гөлйыһан килеп инеү менән, ул ҡул һелтәп, өйҙән сығып һыҙҙы: «Бына, алйот, Закир ағай!.. Башын кемгә бәйләгән бит,'ә?! Әсәйемде лә әйтер инем... Фу, тапҡан бит серҙәште, ә?!.»

Байрас ҡапҡаға һөйәлеп оҙаҡ көйөнөп торҙо: ҡайҙа барырға, нимә эшләргә икән?! Әһә, бында, Шәүрәләр өйө артында, ике охирәт һөйләшепме, һаҡташ уйнапмы ултыра икән..

Моғайын, әле генә һыу инеп ҡайтҡандарҙыр... Емеш ҡалын-ҡара сәстәрен таратып ебәргән... Кипһен тигәндер... Кес-кәй генә ҡулдары һаҡташ артынан күҙ эйәргеһеҙ тиҙ йүгереп тора... Бахыр, бахыр, Емеш!.. Бына Шәүрә Байрас яғына хәйләкәр күҙ ташлап алды, Емешкә бышылдап ниҙер әйтте. Емештең ҡыйыуһыҙ, оялсан ҡарашы ла саҡ ҡына уға һир-пелеп үтте, оҙон керпектәре ҡалтырап киткәндәй булды... Бәлки, Байрастың берәй йылы һүҙ әйтеүен йәки элекке кеүек:

Бибеш, Йәнеш, Гөлйемеш.
Гөлйемеш илаҡ имеш,—

тип мәрәкәләүен көтәлер?..

< Эйе, Байрас уны элек гел шулай үсекләй торғайны шул... Бәлки, шулай таҡмаҡ ҡыҙығыраҡ сыҡҡанғалыр... Бәлки, Емеш үҙен бик үк матур икәнмен тип уйламаһын өсөндөр... Матур булған есөн генә яҡын күрәме ни уны Байрас? Юҡ. Ә нисектер ул үҙенә бер башҡа булғаны өсөн... Башҡа ҡыҙ-ҙарға оҡшамағаны өсөн... Кем белә, бәлки һинә оҡшаған ҡыҙҙар гелән шулай үҙенә бер башҡа һымаҡ тойолалыр... Аиа бит, Закир ағай ҙа бынауы аҡылһыҙ Гөлйыһанды...

Байрас, үҙенең баҡырҙан юныл яһалған шикелле матур йөҙөн бошонҡо сырып, күҙен икенсе яҡҡа борҙо.

«Эйе, ҡыҙҙар менән уйнау-шаярыу түгел, һөйләшкеһе килмәй хәҙер унын... Заманы ул түгел... Байрас ғәмһеҙ малай түгел шул инде... Эс тә боша, күкел дә төшмәй хәҙер...»

Байрас шулай уйланып ҡапҡа төбөндә тағы бер аҙ тапан-ды ла ҡапыл боролоп ишек алдына инде: «Ниңә әле мин ҡыҙ-ҙар шикелле илаҡланып торам? Бесән осоро етеп килә. Әҙер-ләнергә ваҡыт. Бәләкәс малай түгел. Ун биш йәш булды!..»

Ул ылаш ҡолғаһында элеүле торған салғыны үрелеп алды. Аласыҡтан түш, сүкеш, яныуыс тапты. Унан ситән буйына барып, аяҡ бөкләп, йәтешләнеп ултырҙы: күрәһең, быйыл да уға бесәнде яңғыҙ үҙенә эшләргә тура килә. Былтыр ҙа тап ошондай бесән мәлендә атаһы ла, Закир ағаһы ла китеп барғайны. Ҡайҙа, нимә эшләп йөрөйҙәр, тереме-үлеме, тигән-дәй, асыҡ ҡына белгән кеше юҡ шикелле. Һыуға батҡан кеүек юҡ булдылар. Унан бире нимәләр генә булып бөтмәне был тирәлә? Кемдәр генә килеп алманы ла, кемдәр генә, нисек кенә өҙөп йолҡманы беҙҙең, унһыҙ ҙа йолҡошланып бөткән Илсеғолдо. Дутовсылар, аҡ чехтар, колчаксылар... Барыһына ла, ни өсөндөр, Илсеғол кәрәк? Таларға, туҡмарға, аҫырға-киҫергә кеше булһын өсөнмө икән ни? Ә бына илсеғолсыларға уларҙың кәрәге бармы-юҡмы, уны бер кем дә белергә теләмәй...

Һуғыш, һуғыш, һуғыш... Илсеғол ошо бер йыл эсендә генә



биш-алты тапҡыр ҡулдан ҡулға күсте лә баһа?! Йәшәүме ни был?!

Байрас, саяланып, сүкеш менән салғыға һуҡты.

Салғы ҡырҡыу, хафалы тауыш менән яуапланы:

— Саңҡ!..

«Эйе, улай ярамай... Аңлайым... тип, күңеленән ғәфү үтенгәндәй итте малай,— былай һине бер-ике һуғыуҙа китеп төшөрөргә була... Унан мин ҡайҙан салғы табырмын?..» Бынан ары ул, өй түбәһенән тастағы һыуға төшкән яҙғы эре тамсылар тауышына оҡшатып, бер көйгә тигеҙ таҡмаҡлатып сүкеп китте.

Ҡыҙҙар, уйнауҙан туҡтап, тынып торҙолар.

— Ҡалай өлкәндәр кеүек тигеҙ сыңҡылдатыптырып сүкей бит әле,— тине Шәүрә, һоҡланып.— Атаһы юҡ булғаны бир-ле, өлкән кеше һымаҡ булды ла ҡуйҙы. Эйе бит, әхирәт?

— Ниңә атаһы юҡ булған?—тине Емеш, әхирәтенә ғә-жәпһенеп ҡарап.— Ул бит ҡыҙылдар яғына киткән.

— Китмәгән, ти, шул. Китеп өлгөрмәгән, үәт,— тип бүл-дерҙе уны Шәүрә.— Партизан булған, ти, ул. Урманда йөрөй, ти...

— Ни тигән һүҙ икән ул партизан?— тип, тағы ла ныҡы-раҡ аптыраны Емеш. Үҙ алдына ҡат-ҡат әйтеп ҡараны.— Партизан... Ундай һүҙҙе бер ҡасан да ишеткәнем юҡсы... Бер кемдән дә... Урман ене. Урман эйәһе йәки шүрәле тигәнде шулай әйтәләрме икән әллә хәҙер?

— Мин дә белмәйем шул,— тип бер аҙ һуҙып торҙо Шәү-рә лә күҫелһеҙ генә. Әммә шунда уҡ, ғәҙәтенсә, бик белдекле кеше булып, әкиәт һөйләгәндәй еңел, бошмаҫ, аптырамаҫ тауыш менән һөйләп алып китте:— Был партизан тигән кеше-кәйҙәр менән Урал эсе туп-тулы, ти. Беләһеңме, теге Хәбир батыр кеүек йәшәйҙәр, ти. Көндөҙ урманда йәшенеп яталар, кисен байҙарға, аҡтарға, буржуйҙарға ҡаршы һуғышып бөтә тирә-яҡты айҡап сығалар, ти. Аҡтар уларҙы табып үлтерер өсөн Уралға каратель тигән ғождарын ебәреп, бөтә булған урман-тауҙы һөҙөп сығалар, ти, үәт...

— Каратель тигәне тағы нимәкәй икән?

Бөтә нәмәне алдан белеүсе Шәүрә лә:

— Белмәйем,— тип баш сайҡарға мәжбүр була. Әммә был белмәү уға партизандар хаҡындағы әкиәтен дауам итергә ҡамасауламай.— Беләһеңме?!— тип, тағы ла йәнлә-неберәк һөйләп китә ул.— Бер саҡ, былтыр йәй, карателдәр урманды энә эҙләгәндәй ентекләп һөҙөп сыҡҡандар, ти... Соҡор-саҡыр, тау-йырын, шырлыҡ-үҙәнлек — барыһы ла улар ҡулынан үткән, ти. Тик партизандарҙы таба алма-ғандар, ти.

Ә төндә улар үҙҙәре ер аҫтынан сыҡҡан кеүек мыжғып

ҡалҡып сыҡҡандар ҙа, теге карателдәрҙең береһен ҡалдырмай ҡырған да һалғандар, ти, үәт!— Шәүрә, үҙ әкиәтенән үҙе кинәнеп, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.— Бына шулай мәрәкә иткәндәр, ти, улар аҡтарҙы!..

Емеш, аптырауын йәшерә алмай, әхирәтенә төбәлеп ҡарай:

— Ҡайҙан белдең. һин быны? Бәлки, һин уны үҙең. уйлап сығарып һөйләйһеңдер, ә?

— Ундайҙы уйлап сығара аламдыр шул мин, үәт бигәләш!— тип тағы ихлас ҡына көлөп ала Шәүрә.— Белгең килһә, мин быны атайымдан ишеттем, үәт. Йоҡлаған булып яттым да, атайымдын. әсәйемә һөйләгәнен тыңланым...

— Кит, оятһыҙ!— ти Емеш, уңайһыҙланып.— Улай ярайҙыр шул?! Шәүрә уның был иҫкәртеүенә иғтибар ҙа итмәй. Шулай ҙа, әкренерәк тауышҡа күсеп, һөйләүен дауам итә:— Атайым әйтә, Хаммат ағай шул партизандарҙың башлығы булып алған, ти. Тап теге Хәбир батыр шикелле, ти... Беләһеңме, минең атайым улар янына тендәрҙә барып йөрөй торған булған, үәт... Уларга аҙыҡ-түлек ташып торган... Юҡһа, урманда улар нимә ашаһын?!

— Шунан, әхирәт?!— тип түҙемһеҙләнә Емеш.— Шунан, артабан нимә булған?

Шәүрә бошоноп хәбәр итә:

— Шунан ни улар әллә ҡайҙа булғандар ҙа ҡуйгандар, ти, шул... Шул, былтыр йәйҙә булган инде был хәл... Атайым, ғәҙәтенсә, аҙыҡ-түлек алып, аҡ чех тигәндәрҙе ҡыуып, Чапай етеп килә икән тигән ҡыуанысլы хәбәрҙе еткерәйем тип барһа... Урман һип-һил булып ҡалған, ти. Партизандарҙыч ҡыуыштары ғына туҙғып ята, ти...

— Эй-й...— тип бошоноп китте Емеш.— Нн генә булды икән һун уларға?!

Шәүрә лә ауыр ғына көрһөнөп алды:

— Күрәһен, аҡтар уларҙы төндә аңғармаҫтан кырып һалғандарҙыр, ти, атайым...

Ҡыҙҙар оҙаҡ тынып ултыралар. Тирә-якты ауыр, томра эҫелек солғап ала.

— Бахыр, Хаммат ағай бигерәк тә әрәм булды инде... Эйе бит, әхирәт,— тип, бер аҙҙан Шәүрә тағы һүҙ башлай.— Ярай әле быны Байрас белмәй... Уға ла, Өммөкәй енгәгә лә белдертергә ярамай, тип һөйләштеләр атайымдар... Ауыр ҡайғыны алдан ала белмәй тороуҙары якшы булыр, тинеләр...

Әхирәте әле һөйләгәндәрҙе тағы бик ҡаты кисереп тыңлаһа ла, Емеш өсөн көтөлмәгән яңылыҡ түгел ине, әлбиттә. Унын үҙенен ҡолаҡтары ла, бигерәк тә һүҙ һуғыш хаҡыида, кешеләрҙең яҙмышы, ҡайғы-хәсрәте хаҡында барған саҡта



бик һаҡ ине. Уға ла төндә, «йоҡлағанда», еҙнәһе менән ҡоҙағыйының да шулай, ҡурка-ҡурка ғына, «партизандар... карателдәр...» тип шым-шым ғына һөйләшеп алыуҙарын тыңлап ятырға, был һөйләшеүҙәрҙән үҙенең бер ни ҙә йүнләп аңламауы есөн көйөнергә тура килгәне бар. Күрәһең, унын еҙнәһе Хисбулла ла урманға, партизандар янына барғылап йөрөгәндер... Хаммат ағаһы менән осрашҡандыр... Әммә партизандар хаҡында еҙнәһе һөйләгән хәбәрҙең ахыры, былай, Шәүрә һөйләгәнсә, емөтһөҙ ҙә, ҡайғылы ла түгел ине һымаҡ... Бәлки, Емеш, тыцлап ята торғас йоҡлап китеп, хәбәрҙең аҙағын үҙе шулай өмөтлө итеп уйлап сығарғандыр?! Бындай хәл унын менән йыш ҡына була торған... Эйе шул, еҙнәһе бит бер төндә, ҡайҙандыр ҡайтып ингәс, әсәһенә:

— Партизандар аҡтарҙын, каратель отрядын ҡырып ташлап, үҙҙәре ҡыҙылдар яғына йырып сығып киткәндәр!— тип һөйләгәйне һымаҡ та баһа!..

Емеш шулай уйланып Шәүрәгә оҙаҡ ҡына һынаулы ҡарап торҙо ла иплэп кенә һорап ҡуйҙы:

— һин был хаҡта тағы берәйһенә һөйләиеңме, әхирәт?

— Юҡсы!..— тип ҡурҡып китте Шәүрә.— Бер кемгә ләммим әйткәнем юҡсы!..

— Әйтмә лә,— тип, йомшаҡ ҡына әйтеп, ҡаты итеп иҫкәртте Емеш.— Был хаҡта бер кем дә белмәһен, йәме. Байрас ишетеп ҡалыуы бар...

.— Әйтмәйем дә,— тине Шәүрә гәмһеҙ генә.

Емеш еҙнәһенең:

— Хаммат ағайым үҙенең урманда, партизандар араһында икәнен Байрасҡа белдермәҫкә ҡушты, юҡһа, Байрас донъяһын, әсәһен ташлар ҙа килеп етер...— тип әйтте... Әгәр минең партизандар отрядында командир икәнлегемде аҡтар белеп калһалар, һеҙгә якшылыҡ булмаҫ. Улар бөтә баласағаны, туған-ырыуҙы ҡоротор, тип тә ҡурка Хаммат ағай. Шуға бер тапҡыр ҙа ауылға ҡайтып күренмәй ул...—тип һөйләгән һүҙҙәрсн дә ишетеп ҡалғайны йоҡо аралаш. Әле шуларҙы Шәүрәгә һөйләп бирергәме икән, тип уйлағайны ла, тукталды. Бер ни ҙә әйтмәне. Тик әхирәтенә тағы бер тапҡыр төбәлеп ҡараны ла:

— Улай әйтеү генә етмәй. Ант итәйек, әхирәт. Был хаҡта ауыҙ асып бер кемгә, бер ҡасан да бер һүҙ әйтмәҫкә ант итәйек,— тине. һәм үҙе шунда ук, бик етди төҫ менән, ант итте.— Ант итәм, ант! Икмәктер, тоҙҙор, был хаҡта бер кемгә, бер ауыҙ һүҙ һөйләмәҫкә ант итәм. Әгәр ошо антымды боҙһам, баҫҡан ерсмдә ер йотһон! Йәшен һуҡһын!..

Шәүрә лә әхирәте артынан һис тә уйлап тормай шул уҡ һүҙҙәр менән ант итте. Был улар өсөн тәбиғи хәл ине. Бында, балалар ғына түгел, хатта өлкәндәр ҙә, үҙенең ысынды ғына

һөйләүен, йәки серҙе һаҡлаясағын раҫлар өсөн, йыш ҡына шулай ант итә. һәм был ант иң ҙур ышаныс билдәһе булып иҫәпләнә ине.

Ант иткәндән һуң Шәүрәнең күңеле күтәрелеп китте. Сөнки ул үҙенең теленә ныҡлы көрмәү һалды. Ул ҡыуанысынан хатта Емешкә таныш булмаған моңло бер көйгә йырлап та ебәрҙе.

Аҡбуҙ атта, егет, елдеңме?
Мәхмүзәңде һағынып килдеңме?
Аждаһаның аран ауыҙынан
Имен ҡалырмын, тип белдеңме?
Һай-й...
Илама ла, ҡурай, һай, илама.
һандуғасҡай, тымсы, йырлама.
Эй-й-й!
Арыҫландай егет үлеп ҡалғас,
Бәхет тере тиеп уйлама!..

Шәүрә әллә тыны бөтөп, әллә күңеле тулып, туктальш ҡалды. Йәшле күҙҙәрен мелдөрәтеп, әхирәтенә ҡарап торҙо. Ахыр, көлемһөрәргә тырышып:

— Йә, нисек? Оҡшаймы был йыр һиңә?— тип һораны.

— Бик тә матур көй. Үҙәктәргә үтеп китерлек көй,— тип, өлкәндәрсә күтәреп алды Емеш.— Тагы йырла әле!... Ҡайҙан, ҡасан отоп алдың әле һин уны?!— тип яныпярһып һорашырға кереште. Сөнки ул бында, үҙҙәренец Оло Эйек буйында, һәр көн тип әйтерлек яңынан-яңы йыр тыуып тороуын, һәр йырҙың үҙенә генә хас ҡайғылы йәки ҡыуанкслы, бик булмаһа, көлдөргөс тарихы булыуын яҡшы белә. һәм тәү тапҡыр йырлап ишеттереүсе кеше ул йырҙың тарихын да һөйләп бирергә тейешле, шул саҡта ғына йыр ысын мәғәнәһендә тыңлаусы йөрәгенә барып етә, һәм ауыҙҙан ауыҙға күсеп, һәр кемден, үҙ йыры, үҙ моңо булып йәшәп китә икәнлеге лә уға билдәле ине.— Йә, һөйлә индс, әхирәт!..

— Был йыр йәш бер партизанға арнап сығарылған. Яңыраҡ ҡына сыҡҡан йыр...— тип, үҙенә хас булмаған ҡайғылы тауыш менән хәбәр итте Шәүрә.— Егетте аҡтар үлтергән... Уның һөйгән ҡыҙы Мәхмүзә сығарған был көйҙө. Йырлай ҙа илай... Йырлай ҙа илай, ти... Уҙған аҙнала әсәйем Иҫәнбәттә ҡунаҡта булғайны... Шул саҡта ишетеп, отоп алып ҡайтҡан... Ишетеү менән йөрәгемә һеңеп ҡалды, ҡолағымда бер өҙлөкһөҙ сыңлап ҡына торҙо... Үҙебеҙҙен. ауылға хәтле булған егерме саҡрым ерҙе ошо йырҙы көйләй-моңғорлай ҡалай уҙғанымды ла toймай ҡалғанмын, ти, әсәйем. Гел-гел генә шуны йырлап, монланып ҡайттым, ти, үәт!..



Өйгә ҡайтҡас та әсәйем был йырҙы беҙгә йырлап ишеттерҙе. Тарихын да һөйләне, үәт...

— Йә, тағы йырла әле, әхирәт. Аҙағына хәтле йырла,— тип ялынды хәҙер Емеш.— Тағы бер генә тапҡыр...

— Мин көйөн отоп алдым да ул... һүҙҙәрен тотош отоп ҡала алманым шул,— тине Шәүрә, бошоноп.— Әсәйем ни мине илатҡансы йырланы ла... Унан һүҙҙәре бик оҙон да шул... Бер тыңлауҙа отоп ҡына алырлыҡ та түгел. Ул йырҙа бөтәһе лә әйтелгән. Партизан егет Сәғит хаҡында ла, Мәхмүзәнен, уға булған ғишығы хаҡында ла... Сәғитте нисек язалап үлтереүҙәре хаҡында ла... Эй-й... Аҙағына хәтле тыңлаһаң, һин дә илаясаҡһың, әхирәт!..

Шәүрә, ниҙер хәтерләп, тын ғына йылмайып торҙо. Унан үҙенә хас булмаған уйсанлыҡ менән моңланып һөйләп китте:

— Әсәйем әйтә, шул Сәғит, ти, әле малай ғына булған, ти... Ә бит партизан булырға ла, һалдат булырға ла өлгөргән... Етмәһә, ҡыҙҙы ғашик итергә лә ҡулынан килгән... Бына бит ҡандай егеттәр була! Эйе бит, әхирәт?.. Ә беҙҙең ауылда беҙ ғашиҡ булырҙай егет тә юҡ бит, исмаһам... Эй-й, шул Мәхмүзә шикелле өҙөлөп-өҙөлөп һөйһәң, һөйөлһәң, янһаң-көйһән, ине... Уның шикелле йырҙар сығарһан. ине... Юҡ шул, юҡ, беҙҙә улай ғашиҡ итерҙәй егеттәр!.. Шулай бит, әхирәт?!. Беҙҙә эс бошорғос күңелһеҙлек кенә!.. Үәй-й, ҡарсығалай егеттәр бөттө шул инде беҙҙә...

— Әгәр шундай, Сәғиттәй, егет булһа, әхирәт, һин дә ғашиҡ булыр инеңме икән, ә?— тип, Емеш тә уйсан ғына һорап ҡуйҙы.— Йырҙар ҙа сығарыр инеңме икән?..

— Әйтерең генә бармы?!. Эй-й, ниндәй генә матур йырҙар сығармаҫ инем мин уға?!.

Ҡыҙҙар тағы оҙаҡ тынып ултырҙылар. Ә Байрас, әйтерһең, бөтә донъяһын онотоп, салғы сүкене лә сүкене. Тора-бара уға тағы бер нисә ишек алдынан ишетелгән салғы сүкеү тауышы да ҡушылды. Әңерге ауыл оҙаҡ ваҡыт салғы сыңы аҫтында тирбәлеп торҙо.

Ахыр бына Байрастың салғыһы әҙер булды. Ул уны инде яныуыс менән бер-ике сыйпылдатып янып алды ла урынына алып барып элде. Аласыҡҡа инеп бер сүмес шишмә һыуы эсте, унан тағы урамға, ҡапҡа төбөнә сығып баҫты. Ҡайғырышып-һыҡташып ултырған ҡатындар бар ергә, өйгә ингеһе килмәй ине уның.

Урам буп-буш тип әйтерлек. Тик мәсет ҡапҡаһы төбөндә генә, ҡаҙандай аҡ сәллә, йәшел сапан кейеп, йәшел таяҡтарға таянып, йәшел кәбеҫтә ҡарышлауығы шикелле килбәтһеҙ бөгөлөшөп, Ғаббас мулла менән Шымбай каштан,

ауыҙға-ауыҙ терәп, бик татыу серләшеп тора. Күрше ишек алдында Сәрби тутай менән Әхмәтша ҡараҡ, гәҙәттәренсә ниҙер бүлешә алмай, ҡысҡырыша.

Байрас, йәне һөймәҫ был кешеләрҙе күрмәҫ, ишетмәҫ өсөн, ҡарашын алыҫ офоҡҡа, зәңгәр күккә, сағыу ҡояшҡа йүнәлтте. Унан йәшел хәтфә үлән баҫҡан урам буйлап татыу ғына ҡаңҡылдай-ҡыйҡылдай йылғаға китеп барған ҡаҙ көтөүен күҙәтеп торҙо: «Их, минә лә һыу инеп алырға ине. Тирләтеп ташланы бит әле...»— тип уйлап алды. Ләкин үҙе һаман урынынан ҡуҙғалманы. Ә көн, энер етеп килеүгә ҡарамаҫтан, үтә бөркөү, ҡояш аяуһыҙ ҡыҙҙыра ине.

«Былтыр йәй ҙә шулай эҫе булғайны... Эйе, эйе, ҡоро килгәйне ул йәй ҙә... Хатта төндәрҙә лә тын алғыһыҙ бөркөү була торғайны...— тип, үткәндәрҙе хәтерләп, төрлөсә хыялға бирелсп торҙо Байрас.— Ҡыҙыҡ, тәбиғәттә бәтәһе лә ҡабатланып тора... һалҡын ҡыштар ҙа, эҫе йәйҙәр ҙә, муйылдарҙың сәскә атыуы ла, бал ҡорттарының выжылдап осоуы ла... Эйе, йылдан-йыл бөтәһе лә ҡайталап килеп ксnә тора... Ә бына кешеләр, уларҙың яҙмышы?.. Моғайын, ҡабатланмайҙыр... Быиа бит, былтыр тап опю ваҡытта атайым бар ине... Мин уны үҙем оҙатып ебәргәйнем... Ә быйыл ул юҡ... Бәлки, бер ҡасан да булмаҫ та. Оло Эйек кисеүендә атайым менән хушлашҡан ммнут бер ҡасан да ҡабатланмаҫ та... Бәлки, инде беҙ уның менән мәңгегә айырылышҡанбыҙҙыр... Аһ, ҡалай ауыр һун әле был хәл?!.»

Байрас аңғармаҫтап ҡаты көрһөнөп ебәрҙе лә, уцайһыҙланып, бая ҡыҙҙар ултырған яҡҡа күҙ ташланы: «Ишстеп ҡалһалар... Мине илай икән, тип уйлап ҡуйыуҙары бар... Йәлләй башлаған булырҙар...». Әммә, уиың бәхстенә ҡаршы, ҡыҙҙар юҡ ине: «Өйҙәренә ҡайтҡандарҙыр... Ҡыҙҙарга рәхәт, моңһоҙҙар бит улар... Бигерәк тә бынауы Шәүрә... Бына бит, шундай саҡта эһ тә тимән, һаҡташ уйнай алалар... Ә мпн...»

Ошо минутта ул бөтөнләй-бөтөнлой онотоpға теләгән бер ваҡиға ҡапыл хәтеренә килеп, Байрас хатта тертлэп китте. Шулай уҡ былтыр булғайны был ваҡиға. Әле инде тап хәҙер генә булған кеүек ап-асыҡ уның күҙ алдына килеп баҫты. Нисек ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, саяланып, мылтыҡҡа тотондо, нисек атып ебәрҙе, нисек кеше эйәр өҫтөнән тәкмәсеп төште... Бөтәһе лә йәшен тиҙлеге менән уның күҙ алдынан үтте. Бынан һун ул нисек бик оҙаҡ һаташып, ауырып ятты, нисек был күренеш уның башынан сыҡмай йөҙәтте... Барыһы ла хәтергә килде:

— Эй-й, ҡалай ҙа аҙаплы бит әле был хәлде ҡат-ҡат кнсереүе!..— тип һыҙланып ҡуйҙы Байрас.— Нисек уны онотоpға икән?! Ә үҙе һаман уны ентекләп уйлауын дауам итте:

«Ғәжәп, нинә шулай ҡапыл ауырып йығылдым һуң мин? Тифме, тапма булдымы? Әллә ҡурҡыуҙан мейегә берәй зәхмәт ҡағылдымы? Булыр ҙа шул... Кеше — ҡуян түгел дә баһа!.. Кеше һынлы кешене атып йыҡ та!.. Хатта ул кешенең дошман икәнен, буржуй икәнен белһән, дә, уның кеше бәхетенә кәртә булып тороуына тешөнһән, дә... Барыбер атып йығыуы еңел түгел икән».

Эйе, ауыр кисерҙе шул Байрас быны. Тап шул ваҡыттан алып малайлыҡтан сыҡты ла шикелле ул... Ә бит Емеш менән Шәүрә был хаҡта бер нәмә лә белмәне лә белмәй ҙә... Байрас үҙе лә ул ваҡиғанан һун, ауылда нимәләр булып бөтөүен ишетмеш аша ғына белә лә баһа!.. Сөнки аҙна-ун көн буйы, бер ни белмәй, һаташып ауырып ятҡан... Шулай ҙа иҫенә килеү менән, бөтәһенән элек, тирәк башында элеүле тороп ҡалған мылтыҡты хәтерләне бит әле ул... Ҡыҙыҡ... Хәтерләне лә тынысһыҙланып та китте... «Көҙ етеп килә лә баһа!.. Япраҡтар тиҙҙән ҡойолор, яланғасланған тирәк ботағында элеүле тороп ҡалға мылтыҡ әллә ҡайҙан уҡ күренеп торор... Ни хәл итергә икән ул мылтыҡ менән?!»— тип бошондо. Алеша ла шул хаҡта уйлаған икән. Мылтыҡты һис кисекмәҫтән алып йыйып ҡуйырға кәрәк тәһә!.. Ләкин нисек? Ҡасан?!.

Шулай итеп улар бик оҙаҡ бер ҡарарға килә алмай ыҙаландылар. Шунан көҙ етте. Тирәк япраҡтары һарғая башланы. Тиҙҙән улар ҡойолор, мылтыҡ тирәк ботағында һерәйеп ҡалыр... Ул саҡта...— Малайҙар был хаҡта тағы ҡат-ҡат һөйләштеләр.— Улай ярамай. Бер байҙы атып йығыу менән ергә ғәҙеллек, тыныслыҡ килгәнме ни? Мылтыҡтың кәрәк сағы беткәнме ни?!— тинеләр. Әммә тирәк янына барырға, был юлы, ни өсөндөр, ҡыйыулыҡ еткерә алмай ыҙаландылар. Ахыр килеп, ҡараңғы көҙгө бер кистә Алеша ҡыҫҡа һаплы һалдат көрәге, Байрас алама кейеҙ киҫәге тотоп, улар тирәк яғына ҡарай юлға сыҡтылар. Мылтыҡты тирәк башынан алып тағы ергә күмеп ҡуймаҡсылар ине улар. Байрас кемдәндер ишетеп, тимерҙе кейеҙгә күмһәң, оҙаҡ ваҡыт тутыҡмай һаҡлана икән, тип белә ине. Ә бит мылтыҡты тутыҡтырырга ярамай. Уның әле кәрәк сағы булыр...

Малайҙарҙың юлы был ыңғайҙа ла унды: һибәләп торған ямғырлы, ҡараңғы төн уларҙың ышаныслы һаҡсыһы булды...

Бына шул төндән бирле, бер йыл инде, мылтыҡ, малайҙарҙы көтөп, тирәк тебөндә күмеүле ята. «Тутығып бөтмәнеме икән ул? Атырға яраҡлымы, юҡмы икән?..»

Көн тамам кисләне. Мәсет ҡапҡаһы төбөндә, кәбеҫтә япрағында йөрөгән ҡарышлауыҡтарға оҡшап, бөгөләһығыла һөйләшеп торған ҡарттар ҙа өйҙәренә таралышты. Сәрби тутай менән Әхмәтша ла, күрәһең, сыр-сыу килеп әрләшеп арыны. Улар яғы ла һил булып ҡалды. Байрас ҡына һаман ҡапҡа төбөндә торҙо ла торҙо. Унын, уйҙары ла, ниңәлер, һаман күңелһеҙерәк, ҡайғылыраҡ' була барҙы.

«Былтыр йәй, исмаһам, һугыштын. бөтерөнә, атайымдарҙын, ҡайтырына емөт ҙурыраҡ ине әле... Ҡайҙалыр партизандар килеп сыҡҡанын, һәр көн ҡайҙа ла булһа берәй ауылда аҡтарҙы пыр туҙҙырып киткәнен ишеткеләп торола ине... Тегендә аҡтарҙың ҡорал складын баҫып алғандар, ҡайҙалыр аҡ гарнизонды туҙҙырғандар, тип ауыл гөжләп ала ине. Хатта бер саҡ Өфө лә, Стәрле лә ҡайтанан ҡыҙылдар ҡулына күскән икән, тигән ҡыуаныслы хәбәр ҙә йөрөгәйне... Ә хәҙер был колчаксылар, күрәһең, беҙҙең яҡтарҙан китмәҫкә урынлашып алды. Ҡыҙылдар хаҡында инде бер ни ҙә ишетелмәй башланы... Былай булһа, атайымдың өйгә ҡайта алыуына өмет тә ҡалмай ҙа баһа!.. Шулай ук был килмешәк аҡтар беҙҙен, яҡта ғүмергә тороп ҡалырҙармы икән ни? Нимә бар икән уларға бында?!»

Байрас, уйынын, ошо ерендә ҡапыл тертләп, артына боролоп ҡараны: «Кемдер әкрен генә һыҙғырҙы түгелме?! Эйе шул, ана бит, кәртәлә Алеша тора! Арт ҡапҡанан ингәндер шул... Йылмайып та тора һымаҡ?.. Ниндәй ҡыуанысы бар икән?!.

Байрас йүгерә-атлай дуҫы янына барҙы.

— Берәй яңылыҡ бармы?— тип шыбырланы ул, сабырһыҙланып.— Йә инде, һөйләй һал!..

— Киттек,— тине Алеша, тыныс ҡына.— Үҙебеҙҙең яраткан тирәк башында ултырырбыҙ, ял итербеҙ. Унан һыу инербеҙ...

— Киттек...

Малайҙар Алеша ингән яҡтан, арт ҡапҡанан уҡ, сығып та киттеләр. Яраткан ғәҙәттәре буйынса, Үле Эйек буйындағы ин. мөһәбәт тирәктәрҙен береһенә, тейен шикелле етеҙ үрмәләп менеп, ҡуйы япраҡ араһына йәшенеп ултырҙылар.

— Йә, нимә бар?— тип дуҫына төбәлде Байрас.— һөйләй һал. Хәтәр һүҙме? Шәп һүҙме?

Алеша, яҙғы күк шикелле зәңгәр күҙҙәрен яҡтыртып, дуҫына йылмайып ҡарап тора бирҙе лә, ярһыу ҡыуаныс менән:

— Беләһеңме, мин нимә ишеттем?— тип һораны.



— Нимә ишеттең?

— Чапай отряды Өфөнө алған, тиҙәр!.. Хәҙер аҡтарҙы был яҡка ҡыуып килә икән, ти! Тиҙҙән колчаксыларҙы бөтә Уралдан ҡыуып сығарасаҡ, ти! Белдеңме?!

— Ур-ра!— тип ҡысҡырып, Байрас ағас ботағынан йығылып төшә яҙҙы. Алеша уның елкәһенән тотоп ҡалды ла, асыуланып:

— Сеү, ахмаҡ!—тип орошоп ултыртып ҡуйҙы.— Ишетеп ҡалһалар, «ур-ра» ны бирерҙәр!

— Бөттө, бөттө. Үҙем дә аңламай ҡалдым, дуҫ!— тине Байрас, ғәфү үтенгән тауыш менән.— Йә, йә, һөйлә, тағы һөйлә!.. Ҡасан килеп етерҙәр икән?!.

Алеша тыныс булырға, Байрастын, ғына түгел, үҙенең дә ҡыуаныслы ярһыуын баҫырға тырышып, әкрен генә дауам итте:

— Был аҡтарҙын. аҙаҡҡы көнө етеүе булыр,— тип һөйләйҙәр... Тиҙҙән бөтәһе лә ҡасып бөтөрҙәр, тиҙәр... Беләһеңме, Байрас, Колчакты ҡасырмаҫҡа, ошонда бөтөнләй дөмөктөрөргә кәрәк ине бит, ә?

— Нисек?— тип аптыраны Байрас.— Ҡалай итеп?

— Беләһеңме, ул бит был яҡка сигенеп килә, ти... Тимәк, беҙҙең Оло Эйектән аша сығып, Ырымбур яғына ҡасасаҡ бит ул. Ә был тирәлә беҙҙен Яҡуп күперенән башҡа күпер ҙә юҡ. Шулай булғас...

— Шулай булғас?— ти Байрас та, түҙемһеҙләнеп. — Нимә әйтмәксеһең? Аңламайым.

— Шул күпер булмаһа, Колчак анһат ҡына ҡасып китә алмаҫ, ҡыҙылдар уларҙы Оло Эйеккә ҡыҫырыҡлап бөтөрөр, тимәксе инем дә... Быйыл Оло Эйек бик ташҡан да... Йылдағы кисеү урындарҙан да сығып йөрөрлөк түгел...

— Шунан һун, ни була?— тип, һаман төшөнмәй ыҙаланды Байрас.— һуғыш өсөн ул күпер нимә ул?

Алеша үҙ алдына ҡысҡырып уйланғандай итеп:

— Шул күперҙе берәйһе бөтөреп кенә ҡуйһасы инде...— тип әсенеп ҡуйҙы.— Яндырып тим дә...

— Ни есөн?— тип ҡурҡып китте Байрас.— һин, Алеша, аҡылдан яҙҙыңмы әллә?— Шундай кәрәкле әйберҙе әрәм итергә яраймы ни?!

— Ярай!— тип ҡаты итеп иҫкәртте хәҙер Алеша.— Ҡыҙылдар Колчак ғәскәрҙәрен Оло Эйеккә ҡыҫырыҡлап ҡырып ташлаһын өсөн күперҙе яндырырға ярай, белдеңме?! Щул саҡта һуғыш та тиҙ бөтөр, беҙҙен, атай ҙа өйгә ҡайтыр ине, белдеңме?

— Шулай булырмы икән һун?— тип, һаман икеләнде Байрас.— Ә улар бынан түгел, ҡайҙандыр икенсе яҡтаи

ситләтеп үтһәләр? Әгәр уларға күпер төптө лә кәрәк булмаһа?!

Күрәһең, дуҫын былай үҙ һүҙҙәре менән генә ышандырыуҙан тамам өмөт өҙгәс, Алеша сәмләнеп:

— Кәрәк була тип һөйләйҙәр тим бит! Мин быны өлкәндәрҙән ишеттем!— тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.— Беләһеңме, ғәрипләнеп ҡайткан һалдаттарҙың һөйләшеүен тыңланым... Кисә кис улар беҙҙең өй артында ултырғанда һөйләштеләр... Мин дә улар янында ултыра инем... Ҡултыҡ таяҡлы бер ағай әйтә, и-их, ти, әгәр аяҡтарым һау булһа, шул күпергә кәрәсин һибер инем дә ут төртөр инем... Шулай Колчактың сигенеү юлын быуыр инем, ти. Бүтәндәр ҙә шуны хуплай...

Байрастың теремек күҙҙәрендә ҡапыл сая ут баҙлап китте:

— Ысын шулай тинеме?!

— Улай булғас, ниңә әле быны һинең менән мин эшләй алмайбыҙ, ә?!

— Теге ағай ҙа, бәлки, ситләтеп шуны әйткәндер миңә?..

— Шулай булғас?!

— Әгәр тотоп алһалар?.. Беҙҙең баштар бөтә лә инде...

Байрас инде дуҫының, бәлки, һынау өсөн генәлер әйтелгән иҫкәртеүенә нгтибар ҙа итмәй, хәрәкәт пландары ҡора ла башланы.

— Әйтәйек, һин, Алеша, үҙебеҙҙең. мылтыҡ менән ҡарауылда торор инең, әйе бит?.. Бер кемде лә күпергә ебәрмәҫ инең... Ә мин... Тукта, ҡара әле, был эшкә күпме кәрәсин кәрәк булыр икән, ә? Ҡайҙан табырға икән ул кәрәсинде?.. Әжәл дарыуы кеүек бит ул хәҙер... Лампаға ла табып булмай...

Был һөйләшеүҙән һуң, тағы бер нисә көн үтте. Ҡайҙандыр, бик алыҫтан, ер аҫтынан килгән кеүек гөрһөлдәп-уһылдап торған һуғыш тауыштары яҡынайғандан-яҡынайҙы. Өлкәндәрҙең йөҙҙәренә, һүҙҙәренә ҡарап, ҡайҙалыр, ниндәйҙер мөһим ваҡиғалар булып ятыуын, күптән көтөлгән еңеү кенәнөн. яҡынлашыуын ап-асыҡ аңларға мемкин ине. Байрас был көндәрҙә, хатта бесәнгә төшөр мал яҡынлашыуы хаҡында ла онотоп, бик йыш ҡайҙалыр юғалып йөрер булып китте. Унын,, ғәҙәттә, тынс, асыҡ йөҙө хәҙер һәр саҡ борсоулы, хафалы һымаҡ ине.

«Ни булды малайға? Ҡыуаныр саҡта көйөнгән һымаҡ йөрөйсә... Әллә атаһы тураһында берәй ҡайғылы хәбәр ишеттеме икән?»— тип хафаланды Өммөгелсем дә. Әммә улынан йүнле һүҙ ала алманы. Байрас әсәһенен был хаҡта ситләтеп кенә белергә тырышыуына ла һалҡын һәм иғтибарһыҙ ғына яуап ҡайтарҙы. Малайҙын. күнелендә ниндәйҙер тынғыһыҙ уй барлығы асыҡ ине. Ләкин ниндәй?!

Ахыр килеп, бер көндө ул бөтөнләй өйгә ҡайтманы. Ә төн уртаһында шым ғына Алеша менән килеп инде. Улы өсен янып-көйөп, уны тамам юғалтып беткән Өммөгөлсөм, ҡыуаныстан ни эшләгәнен белмәй һикереп торҙо. Лампа яндырырға, самауыр ҡайнатырға, улын тәрбиәләргә теләне. Ләкин Байрас өлкәндәрсә үтә тыныс, тоноҡ тауыш менән әсәһен туктатып ҡуйҙы:

— Әсәй, урынында ятып ҡына тор. Тауышланма. Йерөмә. Шәм дә ҡабыҙма!..

— Бәй-й... Улым, ни тигән һүҙен, был?!— тип аптырап торҙо Өммөгөлсем.— Асыҡҡанһындыр ҙа баһа!..

Байрас бүтән һүҙ өндәшмәне. Ҡабаланып өҫтөндәге күлдәк-ыштанын сисеп төрнәп мейес аҫтына тыҡты. Алешаға ла үҙенен, бер ҡат киндер күлдәк-ыштанын кейҙерҙе,

— Хәҙер беҙҙән кәрәсин еҫе сыҡмай, әйе бит?!.— тип, әкрен генә шаярған булып алды. Унан Алеша менән икеһе берой туҫтаҡ һалҡын һөт эстеләр. Күкрәктәренән атылып сығырҙай булып тулаған йөрәктәре бер аҙ баҫылғандай булғас, Алеша өнһөҙ-һүҙһеҙ генә дуҫы менән хушлашып, арт ҡапканан сығып китте. Ул тан. атҡансы өйөнә ҡайтып етергә, ҡурҡынып үҙен көтвп ултырған әсәһен йәһәтерәк тынысландырырға теләй ине.

Был төндөц иртәһендә, бөтә яҡын-тирә ауылдарға көтөлмәгән хәбәр таралды:

— Күперҙе яндырғандар! Яҡуп күперенә- үрт һалғандар! Был, һис һүҙһеҙ, ҡыҙылдарҙың ғына эше! Тимәк, бында уларҙын. разведкаһы булып киткән!.. Күрәһең, ҡыҙылдар сәпсим килеп еткән!..— тип, борсолоп һөйләнде берәүҙәре.

— ТаЛҡын Оло Эйекте колчаксылар хәҙер ннсек аша сығырҙар инде, бахырҙар...— тип, мыҫҡыллы көлөүен йәшерә алманы икенселәре.— Ғәйепһеҙҙәрҙе ҡотороноп эҙәрләү, атыу-киҫеү менән күпер урынына ҡайтып ултырмаҫ шул... Ах, ни эшләргә икән һуң, ни эшләргә?!.

Бер аҙҙан, яҡынайып килгән һуғыштың ҡаты гөрһөлдәүенән, Йылсеғолда ла тәҙрәләр зыңлап торҙо. Таиба әбей, туп тауышына башы ауыртыуға сыҙамай, ҡолағып мендәр менән ҡаплап, түшәккә ятты. Был атыш ике тәүлек буйыығ дауам итте. Ахыр, әкренләп алыҫлаша барып, бетөнләй үк туктап та ҡалды. Таиба әбей башын күтәреп

урындан тороуға, ҡыуанысы эсенә һыймай, шаулап Байрас килеп инде:

— Өләсәй, ҡыҙылдар колчактарҙы Оло Эйеккә ҡыҫырыҡлап тар-мар итеп ташлағандар! Яҡуп ауылы ҡыҙылдар ҡулында!—тип ҡысҡырып хәбәр итте лә:—Мин шунда барам әле, өләсәй!—тип йүгереп сығып та китте.

Был яңы хәбәр ауылды бөтөнләй ҡайнатып ебәрҙе. Быға са урамға һыймай эс ҡапайтып йөрөгән байҙар шунда уҡ шым булды. Күкрәк тултырып тын алырға ла ҡурҡҡандай ҡасып-боҫоп ятҡан ярлы-ялпы ҡайнашып урамға сыҡты. Байрас менән Алеша ла ялан аяҡ булһалар ҙа, үҙҙәрен итекленән ҡатыраҡ баҫҡандай, ер билен бөгөлдөрә атлағандай тойоп, башты ғорур күтәреп йөрөнөләр. Нисек шулай булмаһын. Был енеүҙә бит уларҙын, да кескәй генә булһа ла өлөшө бар!

Ысынлап та, ҡыуаныстар был көндәрҙә күкрәктәрҙән Оло Эйек ташҡыны шикелле урғылып аҡты. Батша генералдары итеге аҫтында иңрәүҙең ни хәтле ауыр икәнен был һуңғы йылда тағы бер тапҡыр елкәһендә татып белгән халыҡ Ҡыҙыл Армияны сикһеҙ ҙур ҡыуаныс менән ҡаршы алды. Күптәр Чапай отрядына ирекле булып яҙылды. Улар араһында беҙҙең Алеша ла бар ине. Ул хәҙер теге үҙҙәре тирәк төбөндә һаҡлаған мылтыҡты тағып, эйәрле атҡа атланып, бөтөнләй килештереп һалдат булып алды. Унын. көнбағыш сәскәһе шикелле тулҡынлы һары сәстәренең һалдат фуражкаһы аҫтынан кәзә мөгөҙө шикелле бөтөркәләнеп сығып тороуы Байрасҡа айырата оҡшаны. Ул бөтә йөрәктән яратып та, көнләшеп тә дуҫынан күҙен ала алмай ыҙаланды. «Их, мин дә Алеша шикелле ун алты йәштә булһамсы... Ун биштә генәһең, тип алмаған булдылар...— тип, көйөнөп уйланды ул. Шул уҡ ваҡытта, алһалар ҙа үҙенен, китә алмаҫын белел, йәнә эсе бошоп китте.— Атым да, эйәрем дә юҡ. Йәйәү мин ниндәй һалдат булыр инем?!. Етмәһә, атайымдыц: «Әсәйеңде ҡара,— тигән бойороғо ла бар.— Әсәйеңде һиңә ышанып тапшырам. Уны һаҡла!»— тине бит атаһы киткән саҡта. Атайҙың бит унын үҙе лә, һүҙе лә — мөҡәддәс. Уны үтәмәҫкә Байрастың хаҡы юҡ... Бәлки, был унын һуңғы васыяты булғандыр?!.— Байрас көтмәгәндә күҙенә эркелгән эҫе йәш тамсыһын еңе менән һөртөп алды.— Кем белә, бәлки, ул... атайым хәҙер был донъяла юҡтыр ҙа?!»

## III

Таиба әбей башҡа йылдарҙа ҡорбан ашына ин, тәүҙә Ғаббас мулланы абыстайы менән саҡырып ала, бер һарыҡ



цтен тотош тип әйтерлек уға ашата торғейны. Быйыл тәү тапҡыр ул үҙенең был ғәҙәтен үҙгәртте.

«Хамматымды, коммун тип, курә алмайҙар. Закирымды, үҙенә-үҙе ҡул һалды, донъянан кафыр китте тип, ҡәберендә тыныс ятҡырмайҙар. Шуларҙы ни тип саҡырып ултырайым?»— тип уйланы ул. Ә килене менән улына үҙенең был яңы ҡылығын:

— Аллаға шөкөр, тере улдарымдың һаулығы, тере булмағандарының рухы өсөн, аҡ ҡорбан салырмын, тигән эйтеүемде үтәнем. Инде янымдағы бөтә бала-сағамды йыйып, үҙебеҙ генә байрам итеп, ҡыуанышып ултырайыҡ, балалар. Шулай һәйбәт булыр,— тип аңлатты.

Хисбулла менән Бибешкә әсәнен. был яңы ҡылығы, әлбиттә, бер аҙ сәйер тойолдо. Сөнки быға са бер кем дә ҡорбан итен үҙ ғаиләһе менән генә ашамай ине. Шулай ҙа улар, ғәҙәттәренсә, әсәнең һүҙенә бер ни тип тә ҡаршы килмәнеләр. Киреһенсә, тағы ла ихласыраҡ эшкә тотонған һымаҡ булдылар. Бына ҡаҙан тултырып ит һалынды, биш-алты йәймә һалма йәйелде, тултырма, йыуаса, ләүәш, күмәс — береһе лә ҡалмай бешерелде. Бынан һуң улар кискелеккә мал тәрбиәләргә сыҡтылар. Таиба әбей һаман баяғыса түрҙә ейәысәре менән булашып ултырҙы. Кескәй Йәнеш, ғәҙәтенсә, «гүгү-гү... үә-үә-үә...» тип, үҙенә генә аңлайышлы, күцелле бер телдә һөйләшә, йондоҙ кеүек балҡып, яҡты йылмая. Таиба әбейҙең ҡайғылары таралып китә. Улар һәр саҡ шулай бала менән ҡәртсәйгә генә хас рәүештә татыу йәшәй ине.

«Күңел йыуатҡыс» тип атай Таиба әбей ейәнсәрен. Ысынлап та, кескәй Йәнеш унын өсөн ин. шифалы йөрәк дарыуы, ин, кәрәкле күңел йыуатҡыс булды хәҙер. Йәнеш булмаһа, Таиба әбейгә Закирын юғалтыу ҡайғыһын кисереү тағы ла ауырыраҡ булыр ине. Закир ҡайгыһы... Эй-й, уны йыуатыр дауа табыу мөмкинме һуң?! Ул бит инде йөрәк түрендә ҡыҙған таш булып көйҙөрөп ята. Унын, ни хәтле ауырлығын да, әселеген дә Таиба әбей бер үҙе генә белә.

Дөрөҫ Таиба әбей Закирын бер ҡасан да телгә алып һөйләмәй. Берәйһе уны иҫкә ала башлаһа ла:

— Ҡалай итәһең... «Яҙмыштан уҙмыш юҡ» тигәндәр бит боронғолар...— тип кенә һүҙҙе бөтөрә. Улы өсөн йәне ҡайышыуын бер кемгә лә белдермәй. Әйтерһең, унын Закир тигән улы бер ҡасан да булмаған. Эйе, ул, Таиба әбей үҙе, өнһөҙ тыйыу һалған был исемгә. Ғәиләлә бөтәһе лә быны шулай аңлай. Шуға һәр ҡайһыһы был исемде бер ҡасан да тауышланып әйтмәҫкә тырыша.

«Исмаһам, һуғышта, батыр үлеме менән үлһә лә, ҡайғым был тиклем ауыр булмаҫ ине,— тип көйенә Таиба әбей эстән генә,— арыҫлан кеүек егет ине бит!.. Йә, ысын булһа,

кешеләрҙең күҙҙәренә туп-тура ҡарап, Закирым, тип телгә алырлыҡ дан да ҡалдырманы бит ҡолонсағым әсәһенә...»

Эйе, үтә ҡатмарлы, һикәлтәле йылдарға тура килде шул Закирҙың ғүмер юлы. Эй-й, кемдәрҙе генә аҙаштырманы ла ниндәй ирҙәрҙе генә һаташтырманы был йылдар?!

Таиба әбей был хаҡта уйлай башлаһа, Закирҙын, һәләкәтенә үҙенең дә бер тиклем сәбәпсе булыуын тойоп, ҡайғыһы икеләтә артып китә. «Әгәр ул Хаммат ағаһы менән бергә китһә, бәлки, был хәлгә төшмәгән дә булыр ине. Ул бит мине йәлләп ағаһынан айырылып тороп ҡалды...»— тип үкенде. Ысынлап та, Закир артыҡ төплө уйлай торған кеше түгел ине бит инде. «Аҡылға ҡарағанда, ярһыу йөрәк тауышына күберәк ҡолаҡ һала ине. Ҡыҙыу ҙа, ҡыйыу ҙа ине. Бер ҡыҙып, йәне көйеп китһә, атаға ла, батшаға ла баш бирмәҫ ярһыу ҡылығы бар ине мәрхүмдең... Ни әйтәһең, холҡо енелдән түгел ине шул балаҡайҙың... Ундай саҡта янында берәй аҡыллы дуҫы, кәңәшсеһе булһа икән дә бит... Булмағандыр шул ундай дуҫы... Ағаһы ла алыҫта булғас ни... Бына шулай, юғалмаҫ еренән юғалған да ҡалған шул балаҡай... Нисек итмәк кәрәк?!. Шулай итеп бына хәҙер әсә йөрәгендә мәңгелек ҡара һағыш ҡына тороп ҡалды...»

Таиба әбей шулай уйлаһа ла, уның үлеүенә барыбер ышанырға ла, бирешергә лә теләмәй ине. «Юҡ, был дөрөҫ булмаҫ!— тип ҡырт киҫеп ҡуя ул күп ваҡыт.— Күңелем һис тә генә ышана алмай. Кем күргән? Кем күмгән? Юҡ бит ундай кеше. Тик бер шул яуыз телдәр генә имеш-мимеш һүҙ йөрөтә бит. Йәнәһе, Закир үҙ-үҙенә ҡул һалған, имеш. Иманһыҙ киткән, имеш!.. Ә ысынлап белгән кеше юҡ. Бушты бытылдайҙар... ышанмайым!..— Әллә ул үҙен шулай йыуатырға тырышып, хатта ыңғырашып ҡуйҙы.— Ышанмайым шул... ышанғым килмәй бит, яраббым!..»

Көҙгә ҡыҫҡа көн кискә һарҡты. Был йылды ҡорбан байрамы октябрь айына тура килгәйне. Бына томһаланып әнер ҡараңғыһы төштө. Усаҡ тирәһендә һауыт-һаба йыуып-йышып йөрөгән Емеш, ҡатып өлгөргән йәймәләрҙән тигеҙ эре шаҡмаҡтар яһап, һалма ҡырҡырға керешге. Юлбарыҫ төҫлө аласа йөнлө үтә һимеҙ, килбәтһеҙ ата бесәй менән һейөндөк сыр-сыу килеп иҙәндә ҡыуышты. Бөгөн, байрам көндө, ҡыуаныс көнөндә, айырата баҫымсаҡлаған өнһеҙ һағышынан үҙен тамам йолорға теләп, күрәһең, Таиба әбей уйын Закирынан Хамматына күсерергә тырышты. «Бына, исмаһам, арыҫлан ир... Ҡуш йөрәкле баһадир...» Ул, эйелеп төшкән башын юғары күтәреп, тирә-яғына яҡты ҡараш ташлап алды. «Ҡуш йөрәкле шул. Юғиһә, анауы хәтле үлемесле Ярман һуғышынан имен-иҫән ҡайта алыр инеме н'и?.. Аллаға шөкөр, иҫән-һау ҡайтты... Нисә ҡабат боғаҙынан алған үлем тырнағынан ысҡынып ҡотолдо. Алланың биргәненә шөкөр, әле булһа дыулатып һуғышып йөрөй. һатыбал менән Федька Рябой бандаһына ҡаршы ла һуғышты, партизандар әфисәре лә булды. Әле инде Ленин үҙе уны Петербурға саҡырып алған, ти. һин батыр башҡорт балаһы, Петербурҙы был яуыз аҡтарҙан таҙартыуҙа беҙгә булыш, тип әйткән, ти... Үәт бит! Унда, Петербур янында, аҡтарҙын, ин. яманы пәйҙә булған, ти шул. Ун ике башлы аждаһа шикелле, ҡаланы йоторға тамшанып ята, ти. Бына шунда инде, шул аждаһанын. ун ике башын да өҙөп төшөрөргә ҡуш йөрәкле егеттәр кәрәк булған, ти шул... Бына шуның өсөн дә минең бөркөтөмдө, Хамматымды, Ленин үҙе саҡыртып алған да инде... Бына ул оҙаҡламай шул Петербурҙы йоторға ятҡан аждаһаны юҡ итер ҙә, ҡайтып та килер әле әсәһенә... Ҡуш йөрәкле баһадир ир бит ул минен. Хамматым!.. Шулай булғас, нимәгә мин, боҙоҡ йәндәрҙең сәйнәнеүенә ҡарап, кәмһенеп, үҙ-үҙемде бөтөрөп ултырам әле? Ошо Хаммат бөркөттө лә мин үҫтергәнмен дә баһа!»

Ошондай ғорур уйҙаи Таиба әбейҙең күңеле ап-арыу тынысланды, күрәһең, ул итәгендә ятҡан ейәнсәренә ихлас йылмайып ҡараны.

— Бына шулай, ҡыҙым, һпнең Хаммат олатайын ҡуш йөрәкле баһадир ул. һин быны бел, йәме! Уны ярат. Уға ғүмер телә. Гонаһһыҙ сабый бит һин. Сабыйҙың теләге һәр саҡ ҡабул була, ти. Ана, теге шәфҡәт фәрештәһе лә һинсц кеүек сабый ғына, ти, бит ул! Шулай ҙа һуғышта баһадирҙарҙы һаҡлап ҡына йөрөй, ти. Ҡылыстан да, уктан да ҡанаты менән ҡаплап алып ҡала, ти. Бына Хаммат олатайыцды ла ул шулай һаҡлап, ҡурсалап, иҫән-һау йөрөтә. Бына һин дә уны шулай һаҡла! һин бит минең кескәй ҡолонсағым, ҡанатлы фәрештәм дәһә!

Кескәй Йәнеш, ҡәртсәһенен һүҙенә өшөнгәнен аңлатырға тырышҡан һымаҡ, сиҡаҡлап келөп, талпынып ҡуйҙы, «гү-гү-гү»,— тип, күнелле итеп, ниҙер һөйләп алды. Хатта Емеш тә, һалма ҡырҡыуҙан туҡтап, ҡоҙағыйына һоҡланып ҡарап торҙо. «Ғорурлана... Бәхетле!..»

Йөрәгендә ҡайнаған ҡайғылы-ҡыуаныслы уйҙарын шулай ҡыҫҡырып ук әйтеп ебәргәс, Таиба әбей, бер ни ҙә абайламай, башын юғары күтәреп, оҙаҡ тынып ултырҙы.

Бына кескәй Йәнеш, геүелдәй торғас, күрәһең, арып, ҡәртсәһенең итәгендә йоҡлап китте. Емеш һалмаларҙы күптән ҡырҡып бөттө, ҡаҙандағы итте ҡараны. Таиба әбей унын:

— Ит иҙелеп бара шикелле, ҡоҙағый,— тигән тауышына һиҫкәнеп китте.

— Эй-й. Иҙелер шул. Күптән һоҫ тип әйтмәксе инем...— тип ҡабаланып, ейәнсәрен сәңгелдәгенә һалды ла иҙәнгә

төштө. Мейес соҡалтаһында һыуы эҫеп ултырған ҡомғанды алып, ашығып ҡул йыуҙы. Унан Емеш ҙур ағас табаҡҡа алып биргән иттәрҙе өлөшләп бүлергә, һалма өсөн турарға кереште. һөйөндөк менән ала бесәй ҙә, ит еҫен һиҙеп, шунда уҡ уның янына барып ултырҙы.

— Ҡәртсәй, мин дә ит аҫайым,— тине һөйендөк, һаҡауыраҡ итеп.

— Мыяу-у...— тип, ала бесәй ҙә шул уҡ теләкте белдерҙе. Таиба әбей тураған иттәрҙән уларға ла өлөш сығара ултырҙы. Оҙаҡламай уның иң өлкән ейәне Байрас та йүгереп килеп инде.

— Ашарға тигәс ни, ҡәртсәй, мин иң, алдан йүгерҙем,— тип мәрәкәләп иҫәнләште лә үҙе урындыҡҡа салҡан һуҙылып төшөп ятты. Бик ҡаты арып киттем әле, ҡәртсәй. Ҡышлыҡҡа утын әҙерләнем.

— Арыһаң, кил, ит һоғона тор — тине Таиба әбей, ҡыуанып. һарыҡтың шау май ҡабырғаһын һондо.— Мә, һөйәк мөнйө.

— Ҡуйсәле, ҡәртсәй, ул хәтле ҙур һейәк тотторма!— тип көлдө Байрас.— Бер ашағанда бер һарыҡ бото ашарға, мин баһадир түгел бит әле!

— Батыр түгел икәнһең, бул!— тине Таиба әбей ҙә, ярым шаярып.— Малайҙар — баһадир булыр өсөн үҫәләр.— Унан, әҙерәк тынып ултырғас, уйсан ғына өҫтәп ҡуйҙы:— Малай, тим... Ниндәй малай ти һин?! һинең йәшеңдә атайың. өйләнгән кеше ине инде... Ғаилә башы ине...

— Уның өсен баһадир булыу кәрәкмәй,— тип, оялсан ғына ҡарыулашты Байрас. Үҙ алдына: «Әгәр уларҙы, ҡәртсәй, һин көсләп өйләндермәһәң... Улар — атайым менән әсәйем, бәхетлерәк булырҙар ине...— тип уйлап ҡуйҙы.— һәр ҡайһы үҙ тиңен, үҙ һөйгәнен табыр ине...»

Байрастың уйын ишеткәндәй:

— Ҡара һин уны!— тип көлөп ҡуйҙы ҡәртсәһе.— Бына һине лә тукмап өйләндереп ҡуяйым әле мин! Ул саҡта ҡәртсәй менән нисек һөйләшергә белерһең!

— Ул заман уҙған..

— Нимә тинең?!

Байрас ҡәртсәһенә инде ҡыйыу йылмайып ҡараны:

— Ҡәртсәй, мин үҙем ҡасан теләйем — шунда, кемде яратам — шуға ғына өйләнәсәкмен. Хәҙер.ҡәртсәй, икенсе заман...

Емеш Байрастын. ҡыйыулығына һоҡланып та, оялып та, керпектәрен түбән төшөрҙө: «Нисек ул шулай ҡыйыу һөйләшә ала икән өлкәндәр менән?!»

Ит ашап туйғас, һөйендөк, уйнай-шаяра, Байрастың тубығына килеп менде:



— Ағай, Байрас ағай, «Сапты, ти!» уйнат әл! Йә, ағай!

Байрас мырҙаһын үҙенең аяҡ өҫтәренә баҫтырҙы ла, башта яй ғына, унан һаман көсәйтә барып, малайҙы һикертергә, түбәгә сейөргә кереште:

Атлап бара, атлап бара!
Юртып бара, юртып бара!
Сапты, ти, сапты, ти, сапты!..

Улар арығансы шулай уйнанылар. Унан һөйөндөк тағы ит ашамаҡсы булып ҡәртсәһе янына барып ултырҙы. Ләкин Таиба әбей табаҡты күтәреп ишеккә йүнәлде:

— Ҡунаҡ өйөнә сығайыҡ... Өммөкәй килен дә килеп етер инде. Беҙҙекеләр ҙә кәртәләгә эште бөтөргәндәрҙер. Әйҙәгеҙ, ҡолонсаҡтарым!

Байрас менән һөйөндөк уның артынан эйәрҙе. Ә Емеш, йөрәгененң сәбәпһеҙ елкенеүенә түҙмәгәндәй, йүгереп тышҡа сыҡты. Янып барған биттәрен семеткес елгә ҡуйып, тупһала баҫып торҙо. Тышта дөм һуҡыр һалҡын төн ине. Шаян, сағыу йондоҙҙар араһында ҡобараһы осҡан ай етемһерәп бер ситтә тора. Ниңәлер ергә бөгөн бөтенләй нур һибелмәй. Бәлки, күҙгө суҡыраҡ ерҙең шул хәтле ҡаралығын, нисек кенә тырышһа ла, ҡышҡы йәки йәйге ер шикелле итеп көмөшләй алмпҫын уйлап шулай бошоноп торалыр ул...

Бына төньяҡтан тағы ла көслөрәк ел өрөп ебәрҙе. Емештең еңел ситса ғына күлдәгенен, киң итәктәрен ҡаҡҡылапһуҡҡылап уйнарға кереште, һалҡын энәле бармаҡтары менән арҡаһын ҡапшап ҡараны, сәс толомдарын йолҡҡоланы.

«Уй, ҡалай эҫе!..— тип шаярҙы Емеш.— Яндыра!..» Болдорҙа һикергеләп, бейеп алды. Унан тағы йүгереп өйгә инде. Аш өйөндә шундай йылы, рәхәт. Тәмле аш еҫтәре танауҙы ҡытыҡлай. Ул усаҡ алдына сүкәйеп, ҡулдарын йылыта-йылыта, уйланып ултырҙы. Башта ул тағы шул бая, иртәнсәк һуйған ҡорбан һарыҡ хаҡында, ожмах, тамуҡ тураһында уйланы, шунда уҡ, ниңәлер, үҙенең үлгән апаһы Йәнеште иҫкә алды.

«Ошолай усаҡ алдында илай-илай туңған ҡулдарын йылыта торғайны. Хәҙер Йәнеш урынында ҡәберлектә кескәй бер түбәләс кенә ҡалды... Тиҙҙән ул да ер менән тигеҙләнер. Йә, ниңә тыуҙы ла нинә йәшәне инде ул, бахыр? Исмаһам, теге донъяла ожмах ҡошо ғына була алһа ярар ине. Исмаһам, унда бәхетле булһын ине...»

Йәнеш артынса Емештең күҙ алдына Иштуған ағаһы, уның менән булған күптәнге бер күренеш килеп баҫты.

Сәрбиямалдың өйө. Өйҙә Емеш, Иштуған, Айһылыу ғына. Сәрбиямал менән Бибисара абыстай мунсаға киткән. Айһылыу, ин, оҫта ҡулдар эшләгән мәрмәр һын шикелле матур

кәүҙәһен һылап ағартылған иҫке стенаға терәп, бешеп тулышҡан сейә шикелле һутлы ирендәрен ныҡ ҡымтып, көслө ихтыярҙы аңлатҡан аҡыллы баҙыҡ ҡараштарын алыҫҡа төбәп, тын ғына шәл бәйләп ултыра. Уның ғәжәп нәфис нәҙек оҙон бармаҡтарынын, йөрөшөнә күҙ эйәрмәй. Ялтыр ҡорос энәләрҙен. наҙлы сыңынан дебет йомғаҡҡа йән инә. Ул, әленән-әле тәгәрләп, ағас туҫтаҡ эсендә бейеп йөрөй. Ул ни хәтле етеҙерәк бейеһә, шул хәтле кәмей, кесерәйә, ә шәл арта, уға төшкән гүзәл биҙәктәр бөтөнәйә, асыҡлана бара. Иштуған оҙон буйлы, ҡалын бөҙөркә ҡашлы, көмрө танаулы, ҡаҡса егет, сихырланған кеүек, Айһылыуҙан күҙен ала алмай, текләп, урындыҡ янында баҫып тора. Уның матур йөҙөнә берсә иҫ киткес һоҡланыу, ҡыуаныу, берсә әсе бошоноу тойғолары йүгерә... Айһылыу ҙа ваҡыт-ваҡыт онотолол ҡала. Йәки Иштуғанға күтәрелеп ҡарай ҙа күцелле, серле генә йылмайып ҡуя. Был ваҡытта уның ике битендә лә, эйәк осонда ла кескәй генә соҡорҙар барлыҡҡа килә. Ҡар тәңкәләрендәй аҡ тығыҙ тештәренән һылыу битенә яҡты нур һибелә. Иштуған теҙләнеү, табыныу дәрәжәһенә етеп югалып китә...

Был бик күптәнге — Иштуган менән Айһылыуҙың үҙ мөхәббәттәрен ҡайһылай итеп һаҡлап ҡалыу хаҡында баш ватып аҙапланган саҡтарындағы бер күренеш. Емештең күҙ алдында ул нисек күргән, нисек тойган — шул көйө баҫып ҡалған.

Был хыял шикелле яҡты күренеш артынса, Емештен хәтерен йөрәк түренә ағыулы уҡ булып ҡаҙалып ҡалған дәһшәтле бер күренеш биләп алды: атаһы үлтерелгән. Йәнеш менән Емеште Сәрбиямал урамға ҡыуып сығарған. һу-. ғыш Илсеғолға ла килеп еткән. Аҡтар... Ҡыҙылдар... Атыш... Үлтсреш... Бөтә кеше яр аҫтына йәки баҙға ҡаса. Пулянан һаҡлана. Тик Емеш менән Шәүрә генә урам уртаһында баҫып тора. Атаһы үлтерелеү ҡайғыһынан Емеш үҙ-үҙен онотҡан.

Бер саҡ урамға һыбайлы ғәскәр килеп тула. Кемдәрҙер күрешә, илаша, һөйләшә. Шәүрә лә ҡапыл ҡулдарын сәбәкәйләп ыргып-һикереп йүгереп китә:

— Аһа, анауы һалдат минең ағайымдыр, Әхәт ағайымдыр ул. Әсәйем менән күрешә бит! Емеш ҡуҙғалмай, Емеш бер ни ҙә күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Уға барыбер, унын, атаһы юҡ, унын. атаһын үлтергәндәр!..

Бына һыбайлы ике һалдат уларҙын. ҡапҡаһына килеп туҡтаны. Аттан еңел һикереп төштө. Нәҙекәй билен яҫы ҡайыш менән быуып ҡуйған йәш кенә һалдат аттарҙы ҡойма ҡаҙығына бәйләп ҡалды. Икенсе береһе — өҫтөнә ҡара күн тужурка кейгән, биленә наган таҡҡан, фуражка аҫтынан ҡуйы



ҡара сәсе бөҙөркәләнеп сығып торған, төптө урыҫҡа оҡшаған һалдат Емеш янына йүгереп килде.

— Емеш, һылыу!— тип өндәште. Ергә текләп енһеҙ торған Емештең күҙҙәрен күрергә теләп, янына сүгәләне. Был Иштуған ине... Эй-й, ҡандай ҡыуаныслы, көтөлмәгәнсә бәхетле минут булды был!.. Шул көндән бирле ҡайҙалыр һуғышып йөрөгән хәҙерге Иштуғанды ла Емеш шулай ап-асыҡ итеп күҙ алдына килтерергә теләне. Ләкин, нисек кенә тырышһа ла, булдыра алманы. Нисектер, һуғыштың үҙе кеүек үк, бик алыҫ та, үтә сит тә һымаҡ ине уға хәҙерге Иштуған. «Төптө ҡайтмаҫмы икән ни? Мин гел ошолай еҙнә ҡулында торормонмо ни?! Бер ҙә үҙгәрмәҫме икән ни минең көнөм?— тип әсенеп уйлап алды ул.— Бер ҡараһаң, ҡалай үҙгәрһен һуң ул? Бынан да яҡшыны өмөт итер ере бармы ни минец көнөмдөн.?!»

Үҙгәреш... ысынлап та, ниндәй үҙгәреш көтә? Нимә аң,-лай һун, ул Емеш был «үҙгәреш» һүҙенән?

Әлбиттә, Емеш был һорауға яуап бирә алмай. Шулай ҙа уның күңеленең иң тәрән төпкөлөндә ниндәйҙер үҙгәреш көтеү теләге ята һәм был үҙгәреш мотлаҡ ағаһы Иштуған ярҙамында булырға тейеш һымаҡ тойола уға. Бәлки, бөтә донъяла, әйләнә-тирәлә яңынан-яңы үҙгәрештәр, көтөлмәгән ваҡиғалар булып ятҡанға, шундай өмөт тоялыр ул? Әйтәйек, элек Илсеғолда Собхан старшиналар, Шымбай ҡарттар иң хөрмәтле кешеләр ине. Уларҙың һүҙе алдан йөрөй ине. Хәҙер иң хөрмәтле кешеләр балта оҫтаһы Хәлим ағай, ҡарт һалдат Иҙрис олатай... Собхан старшинаның ҡатыны Алтынбикә лә төптө икенсе. Хәҙер ул бөтә кеше менән иҫәнләшеп йөрөй. Хатта Иҙрис ҡартты үҙ өйөндә тота... Бына нисек!

Кешеләрҙец көнө шулай үҙгәреп торғас, ниңә һуң унын, Емештең, көнө генә бер төрлө торһон икән?

Емеш, шулай балаға хас булмаған уйҙарға бирелеп, усаҡ аҫтындағы утты һүрелтеп ебәрә яҙҙы.

— Ҡана, һылыу, йәһәтерәк ут яғып ебәр. һурпа һыуынғандыр. һалма ҡайната һалырға кәрәк тә баһа,— тине Бибеш, ашығып. Ул әле генә тышҡы эштәрҙе бөтөрөп ингәйне.— Иркә еҙнәң менән эште йәһәт кенә бөтөрөп буламы ни?— тип асыуһыҙ ғына көләмһерәп, ашығып ҡул йыуҙы, алъяпҡыс кейҙе.— Мин һалма ҡайнатайым, һин, һылыу, тоҙ, борос, һуған әҙерлә. Ҡорот иҙергә онотма.

Оҙаҡламай аш әҙер булды. һәр кем үҙенен, йәшенә, ғаиләлә тотҡан урынына ҡарап тейешле урынға ултырҙы. Яурынына сигелгән һөлгө һалып, йышып ағартылған еҙ тас, еҙ ҡомған тотоп Байрас эҫе һыу менән ҡунаҡтарҙын, ҡулдарыш йыуҙырып сыҡты. Емеш шаҡмаҡлап төрлө ептән һуғыл-

ған ҙур ашъяулыҡты уртаға түшәне. Ҡалаҡ-тәрилкәләр алып килде. Таиба әбей һәр кемдең тәрилкәһенә ҙур-ҙур киҫәктәрҙән торған ит өлөштәре бүдеп һалды. Бибеш ашъяулыҡ уртаһына бик ҙур ағас табаҡ менән һалма алып килеп ҡуйҙы. Һимеҙ һарыҡ итенән бешерелгән тәмле аш еҫе бөтә өйгә таралды.

— Йә, рәхим итегеҙ, ашай башлағыҙ, балалар,— тип, Таиба әбей үҙе башлап ашҡа үрелде. Башҡалар ҙа ашыҡмай, һоғаланмай ғына унын, артынан эйәрҙе.

Табында кеше ыңғайына ашап өйрәнмәгән Емеш өсөн былдай ултырыштар, ғәҙәттә, аҙапка әйләнә. Ул ояла, тирләй, бешә. Шуға күрә ул арлы-бирле генә ҡабыштыра ла аш янынан тороп китә торғайны. Ләкин аш янында барған бөгөнгө әңгәмә, әйтерһең, уны урынына ҡаҙаҡлап ҡуйҙы. Ул һөйләшеүҙе иғтибар менән тыңларға, әйләнә-тирәлә ниҙәр булып ятыуына төшөнөргә тырышты. Әңгәмә тип, дөрөҫөн әйткәндә, бында һүҙ, нигеҙҙә, ике кеше араһында — ҡәртсәй менән ейән араһында барҙы. Бәлки, шуға ла Емеш өсөн ирмәк тойолғандыр. Сөнки ул үҙе бер ҡасан да улай Байрас кеүек һөйләшә алмаҫ ине. Шулай уҡ Таиба әбей ҙә бүтән бер малайға ла, моғайын, үҙе менән шулай иркен, тиң ултырып һөйләшергә юл ҡуймаҫ ине. Бәлки, Байрас кескәйҙән үк ғаиләлә өлкән бала булғанға шулай күнеккәндәрҙер. Атаһы Сәлимә еңгәгә сығып киткән көндән ғаиләлә ул баш кеше булып ҡалды ла баһа.

Бөгөн аш янында һүҙ күберәк Алешанын, атаһы Никита ойоштороп яткан коммуна хаҡында барҙы. Ул фронттан ҡайтҡаны бирле шул эш менән янып-көйөп йөрөй ине. «Коммуна...— тип, эстән генә әйтеп ҡарай Емеш тә үҙе өсөн төптө өр-яңы был ят һүҙҙе.— Коммуна нимә икән ул? Ҡалай мәҙәк һүҙ!»

— Коммуна ул — берҙәм тормош. Унда бай ҙа, ярлы ла, урыҫ та, башҡорт та юҡ. Ә бөтәһе лә туғандар, иптәштәр генә,— тип һөйләне миңә Никита ағай,— тип ярһып дауам итте Байрас, Емештен башында тыуған һорауҙы күҙенә ҡарап аңлағандай итеп.— Коммуна ул — иреклелек, тиңлек, тигеҙлек, бөтә кеше есөн берҙәй бәхетлелек.

«Бәхетлелек?!— тип, тулкынланып, тағы үҙ алдына ҡабатлап ҡуя Емеш.— Бөтә кеше өсөн дә берҙәй?! Уй-й?!.»

— Бөтә иҙелгән, кәмһетелгән өсөн берҙәй бәхет!— тип ғорур дауам итә Байрас.— Унда һинеке, минеке тигән һүҙ булмаясаҡ. Бөтәһе лә — беҙҙеке буласаҡ. «Беҙ, беҙҙеке»,— тип кенә һөйләшәсәк коммуна кешеләре. Әйтәйек, беҙҙең ат, беҙҙең йорт. Беҙҙең тирмән... Ә минен түгел! Аңлайһығыҙмы?!



«Беҙҙеке, үҙебеҙҙеке,— тип күнелдән ҡабатлап ҡарай тағы Емеш.— Ҡалай мәҙәк. Һинеке-минеке юҡ, имеш. Кем быға ышана тип уйлай икән бынауы Байрас?!—тип, күңеленән унын менән еңешә.— Бына һин, әйтәйек, беҙҙең үгәй әсәйгә өйҙәге берәй нәмәне беҙҙеке тип әйтеп ҡара ине әле! Тешенде емерер, емермәҫме ни?»

— Ул коммуна тигәнендә кешеләр бер эш тә эшләмәй, ашап ҡына ятасаҡтар, тип тә һөйләгәйнең түгелме һуң?— тип һорай Таиба әбей, мут йылмайып.— Улай булһа, мин әйтәм, бөтә ялҡауға ял була икән унда, коммунала.

— Киреһенсә, бетә кеше лә эшсән, егәрле буласаҡ унда, ҡәртсәй. Сөнки ул бит инде бороңғо кеүек байға эшләмәй. Үҙе өсөн, үҙе өсөн кем тырышмай? Йә, әйтеп ҡара әле, ҡәртсәй. Бының өҫтәүенә хөкүмәт коммунарҙарға бушлай аттар, машиналар бирәсәк.

— Йә, шул машиналар ғына эшләмәһә... Юҡһа, йөҙ атаның балаһын бер юлдан йөретеп ҡара әле! Кеше бит ул, ат түгел. Ул бит «на» тигәнгә генә елә һалып китмәҫ.

— Әлбиттә, бик тиҙ генә еңел булмаҫ, ҡәртсәй,— тип килешә Байрас та, бер аҙ һүрелеп. Ләкин шунда уҡ ҡайтанан ҡалкынып, тағы ла ҡыҙыуыраҡ һүҙ көрәштерергә керешә.— Ысын кешеләр бер ҡасан да еңел юлды эҙләмәй, ҡәртсәй. Коммунистар, коммунаны теҙәүселәрҙе әйтәм, улар бетәһе лә ысын кешеләр, фронтовиктар... Мин күрҙем инде, улар нисек берҙәм тотонғандар... Элек Никита ағай грузчик булып эшләгән тимерсе Метрей имениеһында хәҙер уларҙың, -коммунаның, үҙәге... Никита ағай әйтә, коммунистар, ти, еңел юл артынан ҡыумайҙар. Ауырҙы еңеп үтеү ҙә, ти, ҡыҙыҡ! Үҙең беләһең, тәү башлап көрт ярып уҙған кешегә һәр саҡ ауыр була. Уның ҡарауы, арттан килеүселәр әҙер эҙҙән уҙалар, ти.— Ҡәртсәй, беҙҙең һалдаттар ҙа йәһәтерәк ҡайтһындар ине лә, Илсеғолда коммуна төҙөһөндәр ине, эйе бит! Ҡалай ҡыҙыҡ булыр ине, ә, ҡәртсәй!

Таиба әбей ейәненә ҡыҙғанғандай итеп ҡарап алды:

— Эй хыялбайым!..- Ә мин һине, Байрас, аҡыллы егет булырһың, тип ышана инем...

— Һәр яҡшы эш иң элек татлы хыялда тыуа, тиҙәр, ҡәртсәй!

— Һауалағы торнанан, ҡулдағы сәпсек яҡшы, тигәндәр түгелме боронғолар, балаҡай?

Байрас ғорур ҡалкынып ҡуйҙы:

— Сәпсек тә, торна ла түгел, ә иң шәп, иң бейек оса торған бөркөт тарта хәҙер, ҡәртсәй, беҙҙең күцелде!

— Боронғолар әйткәндәй, ҡалай ғына уйлама, нисек кенә тырышма, үҙеңдең ҡара һаҡалың барыбер үҙең менән бергә йөрөр инде ул!..— тип, ниңәлер ауыр көрһөиөп ҡуй-

ҙы Таиба әбей.— Йәш саҡта хыял татлы була ла бит ул... Ә йәшәй-йәшәй, әсегә әйләнә шул...

Байрас ҡәртсәһенә текләй биреп алды ла бүтәнсә һүҙ көрәштермәне.

Сәй янында иң күп һөйләүселәр Өммөгөлсөм менән тағы шул Таиба әбей булды. Ҡатындарҙың һүҙҙәре, әлбиттә, күберәк аш-һыу тирәһендә йөрөнө. Башта бөгөнгө ашты маҡтанылар. Бибеш киленден аш-һыу бешерергә оҫталығын, унын ҡулында аштың тәмле булып бешеүен һөйләп алдылар. Ниндәй генә ашы ла тәмһеҙ булып сыға торған өмөтһөҙ ҡулдарҙы иҫкә алып китергә лә онотманылар.

Хисбулла менән Бибеш, аш янында барған әңгәмәнән бик ҡәнәғәт булып, өндәшмәй генә ултырҙылар. Сөнки улар, аңғармаҫтан һүҙ Закирға күсеп, әсәнен. йөрәк яраһын асмаһа ярар ине, тип ҡурҡҡайнылар. Аллаға шөкөр, улай булманы. Бөтәһе лә, хатта Байрас та, ҡәртсәһенең иғтибарын" ул ауыр тойғонан ситкә алып китергә булышлыҡ иттеләр.

Артабан һүҙ балаларга күсте. Бында, тәбиғи, маҡтауҙың иң тәүге өлөшө үҙенә төшәһен һиҙеп, Байрас тиҙ генә сәй янынан шылды. Ҡатындар һүҙҙе дауам иттеләр:

— Күҙҙәре төптө атаһына оҡшаған да ҡуйған,— тине ҡәртсәһе.— Теремектәр ҙә, аҡыллылар ҙа...

— Буйы-һыны менән дә...— тип өҫтәне әсәһе.— Баһадир кәүҙәле булыуы күренеп тора...

— Ә холҡо һун? Хамматым да шулай кескәй сағынан уҡ елкәндәр менән һүҙ көрәштерергә яратыр ине... Күрҙегеҙ бит, бөгөн теге коммуна хаҡында минен. менән нисек еңеште!— тип, йомшаҡ ҡына көлөп алды Таиба әбей.— Коммуна, тип текәште лә ҡалды бит. һис тә, һис тә үҙ һүҙен бирә торған' түгел. Дөрөҫмө, яңылышмы, унынса булһын. Бына бит! Атаһы ла шулай бит уның!

— Ул — ир кеше бит. Ир кеше үҙ һүҙле булырға тейәштер инде ул, бейем!

Байрастан һун һүҙ Хисбулланың ғорурлығына — һөйөндөккә барып текәлде. Теләп, көтөп алған тәүге һөйөнөс! Кескәй Йәнеш тә ситтә ҡалманы. Нисек ул шәп үҫә, нисек отҡор, нисек отҡор...

Йәнеш хаҡында һүҙ барғанда, Өммөкәй, Бибеш сәй яңыртырға киткәндән файҙаланып:

— Ҡыҙ бик шаян, көләкәс булмаҡсы. Әсәһе кеүек томһа булмаҫ был,— тип, әҙ генә сәнскеле һүҙ әйтеп алырға ла онотманы. Әммә Таиба әбей шунда уҡ йәш киленен химайәгә алды.

— Ауырлыҡта, ҡаҡҡыла үҫкән балала әҙерәк ҡырыҫлыҡ, томһалыҡ була инде ул. Аллаға шөкөр, беҙҙең Йәнеш ҡәҙерҙә, иркәлектә үҫә,— тип, ул үҙенен. итәгендә геүелдәп,



унын, сәскәле яулыҡ осон тоторға тырышып ҡулдарын уйнатып ятҡан ейәнсәренә ҡыуанып ҡарап алды.— Шулай бит, ҡолонсағым?

— Шулай ҙа, бигерәк томһа шул беҙҙең Бибеш. һөйләшеп өйрәнергә ваҡыттыр инде,— тине Өммөкәй, һаман ризаһыҙлыҡ белдереп.— Ике бала әсәһе бит инде! Был юлы Таиба әбей ҙә өлкән килене менән килешеп ҡуйҙы.

— Өндәшмәҫерәк шул беҙҙең Бибеш...— тип, яратып ҡына йылмайып алды.— Унын ҡылығы шул инде. Күп ваҡыт күҙе менән, ҡарашы менән генә һейләй ҙә ҡуя шул. Тик ни уйлағанын, ни һөйләгәнен генә белмәҫһең... Шулай ҙа холҡо асыҡлана төштө уның хәҙер. Бигерәк тә ошо ҡыҙыҡай тыуғандан бирле. һин шуға иғтибар ит, килен, балаларын ул ҡайһылай ярата! Уларға нисек матур итеп йылмайып ҡарай, хатта йөрәгендә өҙөп алғандай була. Әйтерһең, йөҙөндә ҡояш балҡып китә. Ошо яҡты йылмайыуҙан беҙгә лә йән инә... Әйткәндәй, шул аҙ һүҙлелегенән башҡа килешмәгән яғы юҡ бит уның... Унынына ла беҙ инде күнеп бөткәнбеҙ... Яратабыҙ беҙ уны, Бибеш киленде,— тип, тағы йомшаҡ ҡына көлөп алды. Унан Емешкә күрһәтеп:

— Яраткан әсән дә бына тағы бер өндәшмәҫ артты бит әле беҙҙә,— тип, Өммөкәй, эскерһеҙ генә көлөп, һүҙҙе, көтмәгәндә, өйҙән, ҡараңғы мөйөшөнә ҡасып ултырған Емешкә бороп ебәрҙе.— Уларҙың, моғайын, тоҡомо шулдыр. Өндәшмәҫтәр!

— Унын. ҡарауы, ҡулдарынан килмәгән эш юҡ!— тип, ҡәнәғәт йылмайып, тағы һүҙгә ҡатышты Таиба әбей.— Тик бынынының ярамаған бер ҡылығы бар: бәләкәс балаларҙы яратмай,— тип, көлә-көлә, һөйләп китте.— Бына ышанырһыңмы, ошоғаса апаһының ҡыҙын алып та ҡарағаны юҡ ҡулына. Бына ғибрәт! Тауҙай эш башҡарырға риза. Тик бала ғына ҡаратма!..

«Яратмайыммы икән? Әллә йәлләйемме икән?..— тип уйланып алды.— Ысынлап та, бала — ватылырға торған быяла һауыт һымаҡ бит. Төштө — сайраны. Шундай нәфис, шундай ҡыҙғаныс. Үҙе төптө кеше көнлө йән эйәһе. Ҡурҡмай, йәлләмәй нисек тотаһын, уны!»

Дерөҫ, Емештен, башына: «Нимәгә кәрәк икән был имгәктәр? Кешегә уларҙан башҡа ыҙа аҙмы ни?»— тигән уй ҙа йыш килә килеүен. Шулай ҙа Емеш үҙенең баланы ҡарауҙан ҡасыуын, Таиба әбей әйткәнсә, яратмау тип атағыһы килмәй ине.

Унан һуң балаға өндәшер өсөн иркә, наҙлы һүҙҙәр белергә лә кәрәк бит әле. Емеш уны ҡайҙан белһен?! Ҡасан, кемдән ишеткән ул ундай һүҙҙәрҙе? Етмәһә, өлкәндәрҙең бала менән һөйләшкән бөтә һүҙҙәре, бала янында үҙҙәренең дә

хатта сабыйға әйләнеп китеүҙәре уға бик мәғәнәһеҙ, хатта көлкө лә гойола. Емеш тә шундай мәҙәк төҫкә инһенме? Юҡ инде, ул быны, нисек кенәтеләһә лә, булдыра алмаҫ. Ә Бибеш Емешкә бынын, өсөн һис тә асыуланмай. Хатта күп эшен ҡулынан алып, үҙенә балалары менән гөрләшеп ултырырға мөмкинлек биргәне өсөн, Емеште нығыраҡ ярата ла һымаҡ...

— Эйе, баланы яратмау ғына түгел, тота ла белмәй ул хатта!— тип, Таиба әбей тағы көләмһерәп ҡабатланы.— Бына шулай мәҙәк ул беҙҙең ҡоҙаса.

Ул арала борҡоп ҡайнап торған ҙур еҙ самауырҙы епеңел күтәреп, аш өйөнән Бибеш килеп инде. Сәйгүнде ҡағып яңы сәй һалды. Үҙенең нурлы ҡарашы менән ҡунаҡтарҙы наҙлы иркәләй-иркәләй, кеекәй генә сын-сынаяҡтарға хуш еҫле сәй яһап сыҡты.

— Сәй. Яны һалынған сәй!—тип ҡыуанды ҡәйнәһе..һимеҙ аштан һун, ҡайһылай һәйбәт. Йәгеҙ, эсәйек әле...

Ҡунаҡтар тағы сәй эсергә керештеләр.

## IV

Икенсе көндө Таиба әбей байрам сәйенә ҡарсыҡтар саҡырҙы. Иң элек, тәцкә-еләндәрен сыңғырлатып, әғүҙе-бисмиллаһын укый-укый, өҙә баҫып Бибисара абыстай кнлеп етте.

— Әйҙүк, ҡоҙағый, ҡунаҡ өйөнә уҙ, ҡоҙағый,— тип ҡаршыланы Таиба әбей уны. Мендәргә ятып ял итә тор. Бына хәҙер киленгә әҙ генә булышам да яныца сығырмын. Тиҙҙән бүтән ҡунаҡтарым да килеп етер,— тине.

— Ярар, ярар, ҡоҙағый, борсолма. Ошонда ғына ултырып торормон,— тип яуап бирҙе Бибисара абыстай. Ҡунаҡ өйөнә сыҡманы. Ошонда, аш өйөндә, аяҡ бөклөп түргә менәп ултырҙы. Уға, өҙлөкһөҙ тәтелдәп торорға яратҡан кешегә, ҡунаҡ өйөндә япа-яңғыҙ ни эшләп ултырмаҡ кәрәк. Бында, исмаһам, ул эш менән мәшғүл кешеләрҙе лә һүҙгә тарта ала.

Бына ул үҙенә ҡорбан тапты ла инде: үҙенсә ғәйәт мөләйем йылмайып, Емешкә күҙ ташланы. Ҡыҙыҡай нимәлер бәйләп тәҙрә янында ултыра ине.

— Ҡоҙасаҡайым, нихәл?— тине ул, ғәҙәттән тыш нәҙек, татлы тауыш менән.— Нимә генә бәйләйһең?

Емеш уға ҡыйыуһыҙ ғына бер ҡараш ташланы ла өндәшмәне. Унын өсөн Таиба әбей яуап бирҙе.

— һөйөндөккә буфайка бәйләй. Бөтөрә һалайым тип ашығып ултыра. һалҡын төштө бит.

Бибисара абыстай Емештең ҡул эшен тартып-һүҙып, әйләндереп-тулғандырып ентекләп ҡараны. Үтә һоҡланыуын белдереү өсөн бер нисә ҡат телен тасылдатып алды.



— Бик тә йомшаҡ, бик тә йылыҡай ғына була бит инде был. Дөйә йөнөнән генә икән! Бик тә оҫта бәйләй бит ҡоҙасаҡайым!— тип тәтелдәне. Унан, ҡайғылы көрһенөп, иғтибарын Таиба әбейгә күсерҙе.

— Минең Айһылыуым да бәйләргә ярата торғайны бит. Тап ошо Емеш ҡоҙаса шикелле, күҙгенәһен әллә ҡайҙа төбәр ине лә өнһөҙ-һүҙһеҙ бәйләп тик ултырыр ине. Бармаҡтарына күҙ эйәрмәҫ ине. Эй алла, хәҙер башҡынайы ҡайҙарҙа ғына аҙашып йөрөйҙөр инде балаҡайҙың...— Абыстай уйланып, аҙ ғына бошоноп ултырҙы ла тағы йәнләнеп һүҙгә керешті.— Ҡоҙағый, шуны әйтәм әле, ахыр заман еткәс, ҡиәмәт ҡупҡас, ергә йәьжүж-мәьжүждәр сығыр, ти. Урамдарҙан сырсыу килеп музыка уйнап уҙыр, ти. Кешеләр, алланы-мулланы онотоп, шулар артынан эйәреп китер, ти.'Оло ла, кесе лә, ир ҙә, ҡатын да — ҡыҫҡаһы — бөтә гонаһлылар ҙа эйәрер, ти, уларға. Бөтәһе бер булып күңелле йәшәй алыр, ти. Унан билдәле инде, бөтәһе лә тамуҡка төшөр, ти... Аңлайһыңмы, бына шул заман етте бит инде. Ана, теге һинең Хамматың төҙөйем тип йөрөгән коммун тигән нәмәкәй ана шул була инде ул... Коммунға ингәс тә, бына мәйтәм, һинең килененде, Өммөкәйенде, анауы сатан Хәлимгә хәтле ҡосаҡлап ята ала бит инде, ә? һинеке-минеке булмағас, шулай булмай ҡалай булһын?! Эй алла, ярабби, ер йотор әле беҙҙе, ер йотор, ҡоҙағый!

һүҙенең ошо ерендә ул, ҡапыл, былай ҙа һыйыр күҙендәй ҙур ҡуңыр күҙҙәреп тағы ла кицерәк асып, Таиба әбейгә теклэп ҡалды.

— Шул ахыр заман килеп еткәндер, тип уйламайһыцмы һин, ҡоҙағый? Бынауы бальшәүник тигәндәре шулар икән улар?

— Нисек шулар?— тип, ҡапыл-гара аңламай торҙо Таиба әбей.— Ни һөйләйһен. һин, ҡоҙағый?

— Йәьжүж-мәьжүж тигәндәре шул балыиәүниктәрме икән әллә, тим дә... Уларҙың да бит анауы тирмәнсе Метрей Никитаһы ойоштороп яткан коммун тигән нәмәһендә шулай ир ҙә, ҡатын да бер, имеш, ти бит. Кем менән тура килһә, шунын, менән йоҡлап йәшәйәсәктәр, ти. Слабуда, ти, бөтәһенә лә...

— Үҙендец ҡыҙың, кейәүен, большевик булғанда, ҡоҙағый, нисек һин шулай уйлай алаһыц?— тип бүлдерҙе уны Таиба әбей.— Ә мин, ҡоҙағый, үҙем, Хамматым шул юлды һайлаған икән, моғайын, шул юл һәйбәттер, тип уйлайым. Мин бит инде ҡарт кеше. Күп нәмәгә төшөнөп етмәйемдер, тим...

Бибисара абыстай уға тишерҙәй булып бер аҙ текләй би[реп торҙо ла тағы хәүефле яңылыҡтарын теҙергә тотондо:

— Ишеттеңме, ҡоҙағый, теге тирмәнсе Метрей кире ҡайт-

ҡан, имеш, тигән һүҙ йөрөй. Батша-байҙар яҡлылар көс йыйып яталар, ти. Тиҙҙән баш ҡалҡытып сыҡмаҡсылар, ти. Алла һаҡлаһын, алла һаҡлаһын... Тағы ҡан ҡойош китә икән, тип хафаланып торам әле был арала... үҙең әйтмешләй, хәҙер үҙебеҙҙең кейәүебеҙ менән ҡыҙыбыҙ бальшәүник булғас, теләһәң-теләмәһәң дә, шул яҡлы булып китәһен. инде. Алла һаҡлаһын, үҙен, дә белмәҫтән, улар өсөн ҡыйыша башлайһың. Сөнки шул бальшәүниктәр еңмәһә, беҙ бит балаларыбыҙҙы күрә алмаясаҡбыҙ, ҡоҙағый!

Ул инде артабан, ҡоҙағыйының ни әйтеүен көтөп тә тормай, эсендә ҡайнағанын таҡмаҡлап теҙә генә бирҙе:

— Эй, заманалар, заманалар... Болара ла болғана. Әйләнә лә тулғана... Ауа ла түнә... Ҡайҙа бара, бер алла үҙе генә белә... Ата — улды, әсә — ҡыҙҙы танымаҫ хәлгә килде... Ә боларыуының иге-сиге күренмәй. Сәүит тигәненә күнеккәйнек һымаҡ инде, хәҙер тағы бынауы коммун тигәне килеп сығып башты ҡатыра башланы. Ярай ҙа уныһы шул Никита тигәнендә туҡтап ҡалһа... Әгәр бында ла килеп етһә, нимә эшләрһең?! Уй, хәтәр эштәр. Хәтәр!..

Емеш ҡоҙағыйының һөйләүенә иғтибар итмәҫкә, ишетмәҫкә, ул хаҡта уйламаҫҡа теләне. Ләкин ниндәйҙер йәшерен, серле тауыш менән туҡталмай ағылып торған был шомло һүҙҙәр бәйләнсекләнеп унын, ҡолағына һарылды. Йөрәген әллә ниндәй аңлайышһыҙ, шикле уйҙар мснән ҡыҫылырга, йышыраҡ, сабырһыҙыраҡ тибергә мәжбүр иттеләр. Ахыр ул түҙмәне. Бәйләп бөтөрәһе эшен ташлап, урындыҡтан төштө.

— Көн кисләп килә. һыуға барып ҡайтайым әле,— тине ул Таиба әбейгә шыбырлап ҡына.— Фуфайканы кис бәйләп бөтөрөрмөн.

Ул ашығып тышҡа сыҡты. Аласыҡтан көйәнтә-күнәк алып, Оло Эйәк яғына китте. Ләкин Бибисара абыстайҙың шыҡһыҙ хәбәрҙәре күңелгә һалған хафа тышта ла унан тороп ҡалырға ашыҡманы. Емеш, көйәнтәһенә ике ҡулын һалып, күнәктәрен атлау ыңғайына яй ғына тирбәлтә-тирбәлтә уйланып барҙы: «Бергә йоҡлайҙар... Кемде теләһәләр — шуны ҡосаҡлайҙар...» Емештең тәне ытырғанып китте. «Ысынмы икән?! Булмаҫ. Буштыр. Шундай нәмәгә Байрас ҡыуаныр инеме ни?! Иҫәүән түгел дә баһа ул! Кисә бит ҡәртсәһенә коммуна хаҡында ҡалай ҡыуанып һөйләп ултырҙы!»

Бөгөн кен, тап кисә кистәге шикелле үк, аяҙ, һалҡын ине. Көҙгөләнеп туңған йоҡа боҙ ситтәрендә ҡояш нурҙары йәйғор яһап уйнай. Яр буйында ҡырпаҡ ҡар аҫтынан баш ҡалҡытып ҡараған сал сәсле тилбеүлән, алабута баштарында боҙ тамсылары утлы ынйы булып емелдәшә. Арғы яҡтағы яланғас тирәктәр тып-тып ойоп ултыра. Йылға буйы ҡырыҫ, моңһоу булып ҡалған. Емеш, көйәнтәһенә таянып әле ҡасан ғына һандуғас, кәкүк тауыштары менән ярышып сылтыраған, инде боҙ аҫтына йәшенергә өлгөргән ташҡын йылғаны, күгелйем йәйге кистәрҙе һағынып уйланып торҙо.

Эйек кеиә яры киртләс-киртләс,
Киртләстәре бөтөр ҙо яҙ еткәс.
Ир балалар ҡайта хеҙмәт иткәс,
Ҡыҙ балалар ҡайтмай ҙа бер киткәс,—

тип мөңгөрләп кенә йырлап алды. Ләкин йырҙың аҙағы был юлы Емешкә оҡшаманы. Сөнки унын. күңелендә кейәүгә китеп ауылға кире ҡайта алмау зары түгел ине бөгөн. Заман ағышына ҡарап, алыҫлашырға өлгөргәйне был зар. Емеш, шуға ахыры, йырының аҙағын ҡырт киҫеп туҡтатта ла көйәнтә башы менән йоҡа ғына боҙҙо сайрата һуғып мәке асты. Боҙ саткылары, ҡыуанышып, тирә-яҡҡа сәсрәне. Улар урынына ҡара алтын һымаҡ теремек һыу тулҡыны урғылып сыҡты. Ҡыҙ күнәктәрен мөлдөрәмә тултырып ҡайтырға йыйынған ғына сакта мәке янына, һыбай елдереп, Моратша килеп туҡтаны. Егеттәрсә йылдам һикереп ергә төштө. Шул ыңғайга Емештең көйәнтәһен эләктереп тә алды.

— Емеш, ҡараҡай, мәкеңдән ат эсерәйем әле. Рөхсәтме?

Емеш Моратшаны бәйләнсек, тыйнаҡһыҙ холҡо өсөн элек-электән яратмай, ғүмер буйы күцелдәргә шомло ҡурҡыу һалып, бөтә кешене үҙ тирәһенән өркөтөп йәшәгән Шымбай каштан ҡарттын ейәне булган өсөн дә, ҡасандыр Сәрбиямал менән берголәп атаһының башын ашарга йыйынған Әхмәтша ҡараҡтың улы булганы есвн дә уны күрә алмай ине. Әле инде унын, мәрәкәләп өндәшеүе, етмәһә, көйәнтәгә тотоноуы Емештең асыуын тагы ла ныгыраҡ ҡабартты. Сыбыртҡы һабы шикелле һығылып-бөгөлөп торган арыҡ оҙон кәүҙәһе, баш эймәкле ҡиәфәт менән татлы йылмайып тороуы, тиреләре ҡамыр кеүек йыйырылып торған арыҡ оҙонса бите лә Емешкә үтә һөмһөҙ күренде. Шуға, ахыры, Емеш бер ни тип тә ендәшә алмай ҡатып торҙо.

Моратша, ҡыйыуланып, уға яҡын уҡ килеп баҫты.

— һөйләшһәң, көйәнтәнде бирәм.

Емеш тагы ендәшмәне. Моратшанын. атаһыиа оҡшап аҫтан һөҙөп ҡараған йәшел күҙҙәрендә мәкерле ут баҙлап китте.

— Емеш, ысынмы, һеҙҙе Никитаның коммуиаһына яҙыла тиҙәр?

«Эй хоҙай, тағы шул коммуна?! — тип екһенеп уйлап алды Емсш.— Бер һүҙҙе белгәне лә, белмәгәне лә тыл"кып йәнде биҙҙерергә керештеләрсе...»

Моратша, тағы ла татлыраҡ йылмайып, Емештен. күҙҙәренә төбәп ҡарарға тырышты.

— Коммунала кемде теләһәң,. шуны ҡосаҡлап ятаһың, ти. һине ҡосаҡлар өсөн мин дә шунда яҙылам әле, Емеш!

Емеш, үҙе лә һиҙмәҫтән, күҙ асып йомған арала мөлдөрәмә тулы күнәгеен күтәреп алып боҙло һыуҙы Моратшаның өҫтөнә ауҙарҙы.

— Мә һинә, ҡарағорһаҡ! Яман телең өсөн!..

— Ах-х, ҡараҡай!

Моратша тейен шикелле ситкә һикерҙе. Ҡулындағы көйәнтә ситкә ырғып китте. Үҙ ҡылығына үҙе ғәжәпләнгән Емеш, ҡаушауын тегегә һиҙҙермәҫ есөн, тиҙ генә көйәнтәһен алды ла мәке яғына боролдо. Тағы мөлдөрәмә тултырып һыу алды. Унан, күҙгә әтәс кеүек күшеккән малайға әйләнеп тә ҡарамай, ынғай атлап ҡашлаҡтан күтәрелә башланы.

Тотош һыу булған оҙон алама бишмәтенән семберләп ағып торған һыуҙы ҡулы менән һыпырып ҡороторға маташҡан Моратша:

— Йә, ҡараҡай, бер эләгерһең әле! — тип янап ҡалды.— Онотма, йәме!..— тине.

— Ярай, онотмам,— тине Емеш тә, ҡырт киҫеп.— Онотмам!..

Шулай ҙа ул үҙенең был көтөлмәгән ҡылығынан риза түгел ине. «Ҡарасы, нимә эшләнем бит, ә? Нисек баҙнат иттем, үҙем дә белмәйем. Ҡалай уҫал икәнмен дә баһа мин,— тип аптырап та, үкенеп тә уйланды Емеш.— Өйгә ҡайтҡансы туңып бөтә бит инде, бахыр... Үәт, мин йәнһеҙ, ә? Бер ҡараһаң, Моратша ла бит етем. Әсәһе үлде, атаһы ташланы. Йә инде, етемде шулай рәнйетергә яраймы ни?!»

Емеш, үҙенең ҡылығынан үҙе риза булмаған һайын, бошона ғына барҙы. Үҙен аҡларға ла тырышып ҡараны: «Ул бит үҙе ғәйепле! Был оҙон шайтан балаһы, нинә һуң үҙенең шул хәтле мөхәббәтһеҙ, килбәтһеҙ икәнен белмән бәйләнә лә бәйләнә?! Мин уны йәберләргә уйлағаным да юҡ ине лә баһа!»

Ахыр, тамам эсе бошоп, хатта илағыһы ла килә башланы. Шунда инде ул үҙенә тамам асыуланып, йүгерә-атлай ҡайтып китте. Боҙло һыу тултырылған кескәй күк биҙрәләре, уның тынғыһыҙ уйҙарына эйәреп, сайпыла-түгелә, тирбәлеп барҙылар.

Ғаббас мулланың **бер** мөйөшө сереп ергә һеңгән мәҙрәсәһе яңы мәктәп өсөн яраҡһыҙ булып сыҡты. Собхан



старшинаның элек Емештәр ҡойма аша ғына ҡарап һоҡлана торған яңы ейөн мәктәп иттеләр. Ауыл йәштәре уға хәҙер ташландыҡ хәлдә ятҡан Ташһарайҙан парталар алып килеп ултырттылар. Ҡара таҡтаны ла шунан алып ҡайттылар. Оҙаҡламай Илсеғолға мөғәллимә килде. Башҡортостанда Совет власынын. нығып урынлашыуының тәүге йылы ғына булыуға ла, әле ҡайҙалыр алыҫта, Башҡортостандан ситтә ҡаты һуғыштар дауам итеүгә лә, күптәрҙең әле фронттан ҡайтмағанлығына ла ҡарамаҫтан, яңы йәш Совет власы хатта Илсеғол шикелле кескәй генә ауылда ла мәктәп асыу хәстәрен күрҙе. Малайҙар, **ҡыҙҙар** тәү башлап мәктәпкә бергә йөрер булдылар.

— Емеш тә уҡырға тейеш,— тине бер көн Байрас, бик етди итеп.— Ҡәртсәй, хәҙер бөтә балалар ҙа уҡыясаҡ. Ҡаранғылыҡта етерлек инрәнек. Етәр. Никита ағай әйтте, минен, дуҫымдыҫ, Байгилденең, кескәй ҡыҙын беҙ онотмаҫҡа тейешбеҙ... Уны мәктәпкә бирергә кәрәк, тине.

— Етем кешегә уҡыу нимәгә ул? — тип ғәжәпләнде Таиба әбей.— Етемде аҫра ла, уҡыт та... Коммун Никита һинең ҡәртсәйеңдең өйөн төпһеҙ әндрәй ҡаҙнаһы тип беләлер, ахыры!

— Ҡәртсәй, хәҙер тап шул етемдәр, ярлылар уҡый торган заман килде бит!_— тип, тыныс ҡына анлатырга кереште Байрас.— Үҙен уйлап ҡара, Емеш бит ул мәңһинен, ҡулда йәшәмәҫ. Уҡыр ҙа китер. Үҙ юлын, үҙ бә|етен табыр,— тип тә өҫтәне.

Байрас инде кескәй, аңһыҙ малай түгел: ул күптән |үгел волость үҙәгендә ойошторолған йәштәр союзына ғза итеп алынған егет. Етмәһә, үҙҙәренән ес саҡрым "ғына булған Ивановкала коммуна ойоштороп ятҡан большевик Никита уның иң яҡын тәрбиәсеһе, идея етәксеһе ине хәҙер. Шуға ахыры, ирҙәрсә ҡаты, ҡыйыу холоҡло Таиба әбейгә лә уның һүҙен йығыуы, һүҙ көрәштергәндә өҫтөнлөк алыуы еңел түгел ине. Ә бит Таиба әбей үҙе лә, былай изгелексән, киң күңелле ҡарсыҡ булһа ла, ҡорораҡ, ҡатыраҡ һөйләшеүсән. Күптәр уны шул һөйләшеүенә, талапсанлығына ҡарап, ҡаты бәғерле, асыусан кеше тип уйлайҙар. Был юлы ла ул, шул ҡылығына хас рәүештә, ейәне менән ҡоро ғына һөйләште.

— Харап икән. Уҡытырға ла кәрәк икән. Белмәгәйнем.

— Кәрәк шул, ҡәртсәй. Бына аҫлаштыҡ та,— тине Байрас, тап атаһына оҡшап, мут йылмайып.— Емеш мәктәпкә йөрөй башлаясаҡ.

— Бер ҙә аҫлашманыҡ. Ашыҡма! — тип ҡырт киҫте

Таиба әбей.— «Ҡыҙ бала — уҡып мулла булырмы ла, суҡып ҡарға булырмы?» — тип белмәй әйтмәйҙәрҙер...

— Ҡәртсәй, йә, башта беҙ уны мәктәпкә биреп, уҡытып ҡарайыҡ,— тип һаман шулай мут ҡына йылмайып ныҡышты Байрас.— Аҙаҡ күҙ күрер. Һин бит, ҡәртсәй, беләһең, «себеште көҙ һанайҙар» тигән мәҡәл дә бар шикелле?! Ниңә беҙгә алдан хөкөм сығарып ыҙаланырға? Был ни һинең, минең ҡылыҡҡа хас нәмә түгел бит, ҡәртсәй?!

— Еңешеп һинән алдын сығып булырмы?! — тип көләмһерәп, үҙенен еңелеүен танырға мәжбүр булды Таиба әбей.— Һиңә, ейәнкәйем, ун биш түгел, ә теүәл илле йәш? Һай, йүнһеҙ, яңы тыумыш аҡыл эйәһе! Ун биш йәшлек — ил ағаһы!

Был һөйләшеүҙән һун. күп тә үтмәй, Бибеш, Таиба әбейҙең ҡушыуы буйынса, Һмешкә иҫке-моҫконан ғына булһа ла көпө текте. Таиба әбей биргән яҙғы бәрәс йенөнән Емещ үҙенә вәл һымаҡ итеп аҡ шәл бәйләп алды. Аяғында итеге, һәйбәт күлдәге бар ине бит инде уның. Шулай итеп, эҙерәк һуңлап булһа ла, Емеш тә мәктәпкә китте.

Илсеғолда ҡыҙҙар, малайҙар быҒаса ла ул хәтле ныҡ айырып, сикләп тәрбиәләнмәгәнгәме икән, башҡа урындарҙа иң ҙур ҡаршылыҡ булып торған бергә уҡытыу мәсьәләһе һиҙелерлек ҡаршылыҡҡа осраманы. Нисектер, бик тәбиғи, ябай нәмә һымаҡ ҡына итеп ҡабул ителде. Улай ғына ла түгел, күптәр үҙ балаһына уҡырға мөмкинлек тыуғаны өсен шат һәм бик риза булдылар. Бәлки, быға Илсеғол халҡының элек-электән яңылыҡҡа, яҡтылыҡҡа ынтылып торган ғәҙәте лә ярҙам иткәндер. Һәр хәлдә, ни булһа булды, яҡын-ти-рә ауылдар араһында иң беренсе булып, Илсеғолда совет мәктәбе нормаль эшләй башланы.

Емеш, мәктәпкә барып ингәс, ниндәйҙер, таныш булмаған сабырһыҙ тойғолар, «мәктәп», «уҡыу» кеүек үҙе өсөн бөтенләй ят яңғырашлы һүҙҙәр тыуҙырған аңлап еткергеһеҙ яңы тәьҫораттар баҫымынан күҙен дә күтәреп ҡарай алмай юғалып, ишек төбөндә ҡатып торҙо. Хатта, ни өсөндөр, тамам бошоноп, илағыһы килгәндәй ҙә булып алды. Мөғәллимәнең:

— Уҙып ултыр. Уҡырға килдеңме? Һин кем ҡыҙы? — тигән һорауҙарыиа бер ни тип тә яуап бирмәй, ҡыҙарынып-бүртенеп тора бирҙе. Ысынлап та, бында уға бөтәһе



лә ят һәм яңы ине. Шулай оҙаҡ ҡына торғас, ахыр әҙерәк тынысланды, тирә-яҡҡа күҙ йөрөтөп сығырға хәле етте: «Эй-й! Ул бында яңғыҙ түгел икән дәһә! Ана бит, Шәүрә, Сабира, Сәмиғә, Зәһирә. Алтынбикә — бөтәһе лә бында!» Емешкә хәл ингәндәй булды. Ул, ҡыйыуланып, Шәүрә янында ҡалған буш урынға барып ултырҙы.

— Эй-й, әхирәт тә килде! — тип, ҡыуанып, һикергеләп төште Шәүрә.— Эй мәҙәк, бергә уҡыйбыҙ!..

Емеш әхирәтенең, һүҙен ишетмәне лә. Уның иғтибары үҙенән түрҙә, тәҙрә янында ултырған Алтынбикәгә йүнәлгәйне. Алтынбикә уға һаман элеккесә үтә ҡупшы ла, тәкәббер ҙә күренде.

«Атаһы үлгән, ә уның буш күҙҙәре һаман элеккесә ҡылансыҡ баҙлап, таҫрайып тора»,— тип екһенеп уйланы Емеш.— Күренеп тора, аҡылһыҙ: ҡайғыра ла белмәй.

Ул Алтынбикәне әле ҡасан ғына үҙенең байлыгы, уҫаллығы менән тирә-яҡты дер һелкетеп тотҡан Собхан старшинаның ҡыҙы булғаны өсөн дә, Иштуған ағаһының бәхетенә ҡул һала яҙған ҡупшы һатыбалдың һеңлеһе булғамы өсен дә, аҙаҡ килеп, ҡыҙҙың үҙенен маҡтансыҡ, ҡылансыҡ ҡылығы өсөн дә йәне һөймәй, элек үҙҙәрен «етемәк быҙау», «килмешәк», «ерһеҙ» тип кәмһетеүҙәрен һис тә онота алмай ине. Дөрөҫ, хәҙер Собхан старшипа ла, һатыбал да, унын, үҙ атаһы Байгилде лә юҡ. Бөтәһе лә үткән эштәр инде хәҙер. Ләкин Емештең хәтере үтә элгер шул. Бер тапҡыр күргән-кисергәнде ғүмергә һаҡлай ҙа ҡала. Бына әле лә, һис кәрәкмәгәндә, уның күҙ алдына, йәшен сатҡыһындай елт итеп, үтә ҡайғылы бер йәй килеп баҫты.

Ҡоро, эҫе, ас көндәр ине... Улар Шәүрәләр яғында тегәнәк, кесерткән, алабута япраҡтары араһына күмелеп ултырғандар ҙа бейек таҡта ҡойманың ботаҡ урыны төшкән күҙҙәй тишектән алмаш-тилмәш Алмабикәләрҙең ишек алдына ҡарайҙар. Ундағы байрамса, хатта әкиәттәге кеүек бай, моңһоҙ тормош ҡыҙҙарҙын. күңелен үҙенә тарта. Бына Собхан старшина менән ҡатыны Алмабикә күтәрмәлә тора. Старшинанын. ҡаҙан кеүек түп-түнәрәк ҡорһағына жилет кеҫәһенән көмөш сәғәт сылбыры һалынған. Ул ҙур итләс ҡулдарын салбар кеҫәһенә тыҡҡан, ҡыҫҡа йыуан боттарын үтә киреп, тарбайып баҫҡан. Көҙөрәйгән елкәһе, төрһәйгән ерән мыйығы, тәкәббер ҡарашлы ҡыҙыл керпекле күҙҙәре менәы ул нәҫел үгеҙен хәтерләтә. Уның янында, эйәгенә еткән ҙур күкрәкле, үтә ҡалын кәүҙәһенә һис тә хас булмаған бәләкәс башына татар ҡатындарының ынйылы ҡалпағын кейеп, уның өҫтөнән оҙон суклы аҡ ебәк вәл ябынып, матур бисә — Ал-

мабикә тора. Унын торошо тағы ла һауалыраҡ, мөһәбәтерәк.

Емештең иғтибарын бигерәк тә күтәрмәнең түбәнге баҫҡысында иҫ киткес матур ташҡурсаҡты ебәк юрғанға төрөп, бәпес итеп уйнатып ултырған Алтынбикә үҙенә ылыҡтыра. Тәңкә-мәрйенгә сумдырып, сикһеҙ төҙөү итеп кейенгән Алтынбикә йәнле һымаҡ күҙен асып-йомоп торған ташҡурсағы менән бергә Емешкә әкиәт донъяһынан осоп килеп бында ҡунған һылыу ен ҡыҙы кеүек күренә. Емеш унын үҙенән дә, ҡурсағынан да күҙен ала алмай ыҙалана. Шул саҡ Собхан старшинаның:

— һай, иблес, йәһәт бул, ат ек! — тип ҡысҡырған тауышы ғына уны әкиәт донъяһынан тартып ала. Эйе, ул ҡарт һалдат Иҙристе, үҙенен. ҡайнағаһын, йәнәһе, шаяртҡан булып, шулай, иблес, тип йөрөтә бит!

Бына кәртә-ҡура янындағы мал өйөнән, алпан-толпан баҫып, төмөрәнләп, Иҙрис ҡарт килеп сыға. Ҡышын-йәйен өҫтөнән төшмәгән һоро сәкмәне, көмрө арҡаһы, кәүҙәһенә ҡарағанда артыҡ оҙон тотолған кәкре ҡулдары, ҡара күк йөн баҫҡан ялбыр бите менән һоро айыуҙы хәтерләткән был ҡарт, нисектер, бик йәһәт тройка егеп, күсергә һеңеп ултырып, күтәрмә янына килеп туҡтай. Собхан старшина менән Алмабикә кырандасҡа менеп ултырыу менән, тройка елеп ишек алдынан сығып китә...

— Ҡунаҡҡа киттеләр...— тип шыбырлай Шәүрә. Ләкин Емеш быны ишетмәй. Унын иғтибарын хәҙер Собхан старшинанын, Ташһарайҙа укып йөрөгән берҙән-бер улы һатыбал биләп ала. Бына ул, йып-йылтыр еҙ төймәле ҡара китель кейеп, ике ҡулды кеҫәгә тығып, осло башлы ҡара шиблитен сәйер шығырлатып, ишек алдында арыбире йөрөй йәки әле генә атаһы торған күтәрмәгә менеп ҡуҡырайып баҫып тора. Йөрөш-торошо, майлап ҡырын һыйпап ҡуйған алтын сәсе, ҡыйғасланып, һыҙылып торған шундай уҡ алтын мыйығы менән дә ауылдың бүтән егеттәренә һис тә оҡшамаған был һатыбал кескәй Емешкә матурлыҡтың да, бәхетлелектең дә ин, юғары нөктәһе булып күренә. Тик һатыбалдын, артыҡ һалкын тәкәббер ҡарашлы күҙҙәре генә Емешкә оҡшап етмәй, унын һиҙгер йөрәгенә ниндәйҙер билдәһеҙ ҡурҡыу һалғандай була...

Бының артынса, Емештең күҙ алдына ҡапыл ҡот осҡос икенсе бер күренеш килеп баҫа: урамда сыр-сыу ҡупҡан... Ҡарасәс әбейҙәр өйө тәңгәлендә, урамда, һатыбал, Хөснөлхаҡ, Әхмәтша ҡараҡ, Собхан старшиналар Тимербайҙы тукмайҙар. Илаш, ҡысҡырыш, ғәрәсәт!

— Аттар ҡайҙа, ҡараҡ! Фетнәсе!

Тимербай, тегеләр һуғып йыҡкан һайын, тукмаусыларҙын, салғыйҙарына йәбешеп, аяҡтарына тотоноп булһа ла, торорға тырыша... Яҡлар кеше юҡ. һуғыштан сатан йә сулаҡ булып ҡайтҡан бер нисә һалдат та ҡатынҡыҙ, бала-саға... Тукмаусылар уртаһында улын яҡлап таяҡ аҫтына ташланған Ҡарасәс әбейҙен. кәнгер арыҡ кәүҙәһе ялп-йолп килә. Тимербайҙын. ҡатыны Баҙыян еңгә, һуштан яҙып, ҡар еҫтөндә аунап ята. Ә былар һаман тукмайҙар ҙа тукмайҙар...

Кескәй Емеш тә, үҙ-үҙен онотоп, тукмаусылар тирәһендә йүгерә:

— Уй, үлтермәгеҙ! Тукмамағыҙ, олатайҙар!..

Шымбай каштан унын сәс толомонан тартып ситкә ырғыта. Собхан старшина таяғы менән арҡа буйына һуғып ебәрә.

— Гонаһһыҙға кеше үлтерәләр бит! — тип ҡысҡыра Емеш. Әммә күҙенә ҡан тулған бүре өйөрө өсөн ул тауыш нимә?!

Иштуған менән Айһылыу ҡасҡандан һуң, Тимербайҙар ғаиләһенә төшкән ҡот осҡос был ҡырағайлыҡти оноторға мөмкинме һун? Юҡ, Емеш быны онота алмаясаҡ. Унын өҙөлөп яраткан Ҡарасәс инәһен, кешегә изгелек һәм яҡшылыҡ теләүҙән башҡа бер ғәйебе булмаған саф һәм ғорур йөрәкле, иҫ киткес матур әкиәттәр, йырҙар оҫтаһы Ҡарасәс әбейҙе тукмап үлтергән, бинахаҡҡа Тимербайҙы Себергә ебәргән кешеләр бит улар — Собхан старшиналар.

II

Ә һуң бер саҡ урамда, бүрәнә өҫтөндә, сход барған сакта булған йән өшөткөс күренеште онотоп буламы? Ул кендө Шәүрә менән Емеш тә, бүтән балалар ҙа, мәрәкә күреп, ситтән генә ҡарап торалар ине, сөнки бик мәҙәк һымаҡ ине. Өлкәндәр боғаҙға-боғаҙ килеп тартышалар. Берәүҙәре: «Долой, буржуй!» — тип, икенселәре: «Большевик, долой!» — тип ҡысҡыра. Былай ҡысҡырыусылар-ҙың иң яманы һатыбал. Ул хәҙер һалдатса кейенеп ебәргән. Ҡулында наган, билендә ҡылыс... Бер саҡ Ғмештең атаһы Байгилде, Хаммат, Тимербайҙар уны тотоп алмаҡсы булдылар, ахыры, ҡыуа башланылар. Ә ул нагандан ата-ата ҡасты. Шул саҡ, бүрәнә өҫтөнә баҫып, башҡалар ьщғайына, аңлапмы-аңламаймы: «Долой, буржуйҙар, муллалар, купецтар!» — тип ҡысҡырып, ҡулдарын болғап торған диуана Ульябай шәкерт ялт итеп ҡар өҫтөнә ауҙы. Пуля унын ҡарынын ярып киткәйне. Ҡан, ҡан, аҡ ҡар өҫтөндә ҡып-ҡыҙыл ҡан! Йә, ниңә, ни есөн?

Сабый кеүек бер ҡатлы, моңһоу күҙле, һәләмә кейемле йырсы Ульябайҙы ла шулай атып йыҡты бит ул һатыбал!..



7 Заказ 761

Эйе, бик күп ауыр иҫтәлектәр ҡалдырҙы был кешеләр кескәй Емештең күңелендә. Ә башҡаларҙын?!

Үлгәнде яманлыҡ менән иҫкә алыу ярамай, тиҙәр. Һатыбал үлгән инде ул. Дружинасылар менән һуғышта, Емештең атаһы ла һәләк булған һуғышта... Эйе, эйе, Емештен, атаһын үлтерәм тип барған, үҙе лә дөмөккән. Эйе, дөмеккән. Эйе, дөмөккән. Үлгәнде ундай яман һүҙ менән иҫкә алмаҫҡа, тиҙәр ҡарттар, ләкин Емеш үҙенең атаһын үлтерергә ниәтләп барып үлеп ҡалған кешене нисек яҡшы һүҙ менән иҫкә ала алһын икән?! Бик мәҙәк кеше был ҡарттар.

Собхан старшина ла тейешле язаһын алған... Ә бына унын, ҡыҙы... Алтынбикә бына һис тә ҡайғырғанға оҡшамай... Ҡатыны ла шулай һымаҡ... Ҡасып киткән ерҙәренән бик тиҙ боролоп ҡайтҡандар... Ҡыҙылдар етеп килгәс ҡасҡайнылар... Хәҙер, етмәһә, беҙҙең менәи бергә укып та йөрөмәксе был Алтыибикә?!

Емеш ҡапыл үҙ уйынан үҙе оялып, ҡыҙарынып китте: «Ата-аҡ, ниң,ә әле мин гел уларҙын. яман ягын ғына эҙләп ултырам икән? Үәт, бирәләш!» Ҡарасәс инәй мәрхүм: «Кешенец яҡшы яғын иҫтә тоторға тырышырга корәк. Яман яғы униц былай ҙа онотолмай ыҙалай»,— ти торғайны ла баһа! «Алтынбикәнен. дә һәйбәт яҡтары юкмы ни? Ана, ул ҡалай матур... Уға ҡараһан, йымылдап торған сәскәне күргән кеүек булаһың...» —Емсш был уйҙан һун Алтынбикәне лә күцеленән тамам гәфү итте һәм уга ҡапыл еңел-еңел булып китте. Күнеле тыҡһыҙ уйҙарҙан тамам арынды. Ошо ваҡыт ул артҡы партаман Байрастың тынысһыҙ тауышын ишетте.

— Емеш, ниңә мөғәллимә менән һөйләшмәйһен?!

Ҡыҙ, тертләп, ҡапыл Байрасҡа боролоп ҡараны ла, ҡыҙарынып, тагы ла нығыраҡ томһайып, тынып ҡалды. Мөғәллимәне ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға Емеш өсөн Байрасҡа яуап бирергә тура килде.

Емештен. тәүге укыу көнө шулай башланды.

## VI

Иштуған менән Айһылыу йүгерешеп митинг башланыр алда ғына килеп еттеләр. Күмәк ғәскәрҙең һөйләшеү, көләшеү, көрмәкләшеү тауышынан ҡаланын. ҙур майҙаны, умартаһынан әле генә айырылып сыккан күс кеүек, ҡайнап-геүләп тора. Арыған, йонсоган йөҙҙәрҙә сикһеҙ ҡыуаныс, тантана балҡый. Ауыр ҡорбандар хаҡына ирешелгән оло енеү тантанаһы күп айҙарға һуҙылған ҡанлы һуғыштар — юденичсыларҙы тамам тар-мар итеү менән тамамланды. Башҡорт ҡыҙыл ғәскәрҙәре бөгөн ошо уңай менән митингыға йыйылған. Ашығыс ҡына һупалап ҡоролған ағас трибунаға бер-бер артлы ораторҙар менеп тора. Майҙанды ярһыу телмәрҙәр, янғырауыҡлы «ур-ра» тауыштары тетрәтә. Бына яҫы яурынлы, урта буйлы тағы бер хәрби еңел йүгереп трибунаға менеп баҫты. Унын сығыңкыраҡ яцаҡлы үтә аҡ йөҙө, кирелеберәк торған ҙур ҡара күҙҙәре, кеслө ихтыярлы кешегә хас тығыҙ аҡ тешле, ҡалынырак иренле ҙур ауыҙы — быидагы һәр һалдатҡа бик таныш булып бөткән. Ул — башҡорт ғәскәри бригадаһыныц военкомы — Ғимранов. Ҡыҙылармеецтарҙың яраткан дуҫы, оҫта агитатор, ойоштороусы һәм оратор кеше. Бына ул бөркөт ҡарашы менән майҙанды байҡап алды, баҙык, көслө тауыш менән:

— Башҡорт туғандар! Данлыҡлы башҡорт һуғышсылары! —тип ярһыу оран һалды. Гөж килеп торған майҙан ҡапыл тынып, дәррәү алға ынтылыш яһап ҡуйҙы. Оратор дауам итте.— Иптәштәр, башҡорт халкынын, батыр, һуғышсан уландары! һеҙ бында, данлы Петроград ҡалаһына, иптәш Лениндың саҡырыуы буйынса башҡорт ерenең бөтә төпкөлдәренән, революциянын, алтын бишеген — Петроградты илбаҫарҙарҙан яҡлар, һаҡлар өсөн үҙ ирке менән йыйылып килгән уҙаман башҡорт улдары! һеҙ был фронтта ла үҙегеҙҙең революцион бурысығыҙҙы намыҫ менән үтәнегеҙ. Баһадир рус ҡыҙылармеецтары, Петроград пролетарийҙары менән яурынға-яурын терәп, арыҫлаидай ғәйәр һуғыштығыҙ. Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, Тыуган илгә бирелгәнлектең, революция дошмандарына ҡарата әсе нәфрәттең иң гүзәл өлгөләрен күрһәттегеҙ.

Иң ҙур рәхмәт, оло хөрмәт яуһын һеҙгә бының өсөн!

Иптәштәр, башҡорт ҡыҙыл боецтары, һеҙ Петроград есен һуғыштарҙа, башҡорт халҡының борон-борондан килгән һуғышсанлыҡ данын тагы ла юғары күтәрҙегеҙ. Беҙҙең бығаса ла Көнсығыш фронтта дутовсыларға, аҡ чехтарға, Колчакка ҡаршы арыҫландай һуғышып дан ҡаҙанған «тимер батальондар» бар ине. Бында ла, үҙебеҙ килеп еткәнсе үк, «кырағай» башҡорт тимер дивизияһы килә тигән дәһшәтле оран таралып юденичсылар араһында ҡурҡыу, паника тыуҙырып өлгөргәйне. Беҙ уларға Үҙебеҙҙен. тимер тип бушҡа ғына аталмауыбыҙҙы яҡшы төшөндөрҙөк. Эйе, һуғышта ил яҙмышы хәл ителгән иң ауыр участкаларҙа тимер ихтыярлы арыҫландарға әйләнә торған халыҡ беҙ. Эйе, Урал булатындай ҡорос ихтыярлы халыҡ беҙ. Әммә, юденичсылар уйлағанса, «кырағай» түгел. Әгәр «кырағай» булһа, бынан нисәмә йөҙ йыл элек Үк бөйөк рус дәүләтенә ирекле рәүештә ҡушылмаҫ ине

башҡорт халҡы. Наполеон яуын ҡыуып-ҡырып, иң беренселәрҙең беренсеһе булып Парижға барып инмәҫ ине башҡорт ғәскәре! Емельян Пугачев менән бергәләп халыҡтар азатлығы өсөн яу сапҡан, батша тәхетен дер һелкеткән Салауат батыры булмаҫ ине унын, ҡырағай булһа! Аҙаҡ килеп, даһи Ленин революция яҙмышы хәл ителгән ин, ауыр мәлдәрҙә мөрәжәғәт итмәҫ ине башҡорт халҡына!

Беҙ ҡырағай түгел, ә боевой! Шулай бит, иптәштәр?!

Оло еңеү менән ҡотлайым һеҙҙе, боевой башҡорт егеттәре!

Ғимрановтың телмәре көслө алҡыштар, боевой лозунг ҡысҡырыуҙар менән күмелеп торҙо.

— Йәшәһен иптәш Ленин!

— Йәшәһен революция!

— Йәшәһен Советтар!..

Ғимранов тағы ла ярһыбыраҡ дауам итте:

— Ҡәҙерле башҡорт ҡыҙыл боецтары!

Һеҙ бөтә фронтта ла батырлыҡ һәм илгә бирелгәнлек менән дан тоттоғоҙ. Көньяҡ фронтта тар-мар ителгән генерал Деникин бандалары ла, Уралда дутовсылар, колчаксылар ҙа, хәҙер килеп бында Петроградҡа нисә айҙар буйы һөжүм итеп, бер ғәйепһеҙ тыныс халыҡты бомбаға тотоп яткан Юденич бандалары ла илен һаҡларға күтәрелгән башҡорт хеҙмәтсән халҡының дошманға ҡарата нисек ҡаты ҡуллы булыуын елкәләрендә татып беләләр. Артабан да дошманға шулай аяуһыҙ булығыҙ, туғандар!

Кем совет Россияһына дошман — ул башҡорт халҡына дошман. Совет Россияһын яҡлау, һаҡлау өсөн алда ла таш стена булып дошман юлын быуайыҡ, иптәштәр! Башҡорт ҡыҙыл ғәскәрҙәренә сәләм һәм дан!..

Майҙан тағы күп меңле тауыш менән күтәреп алды:

— Ур-ра! Дан, дан!

— Ҡайһылай ялҡынланып һөйләй бит әле! — тип һоҡланды Айһылыу.— Ҡалай теремек! Теле телгә йоҡмай!

— Шуға ул комиссар ҙа,— тип ғорурлыҡ менән яуапланы Иштуған.— Беләһенме, ул Ленинды үҙ күҙе менән күргән, тиҙәр! Съезда... Ленин иптәш үҙе унын менән һөйләшкән, ти. Ярлы башҡорт балалары ни хәлдә йәшәй, нимә теләй? — тип һорашып торған, ти, унан...

— Сеү! — тип туктатты Айһылыу ирен.— Тағы яңы оратор.

— Петроград Советы депутаттары вәкиленә һүҙ бирелә! — тигәнде ишетеп, ҡыҙыкһынып тынып ҡалдылар.

Петроград Советы вәкиленең сығышын ҡыҙылармеецтар тағы ла ҙурыраҡ иғтибар, ихтирам менән тыңланылар. Ул башҡорт ҡыҙылармеецтарын тарихи ҙур еңеу менән ҡотланы, Петроград хеҙмәтсәндәре башҡорт милли частарының батырлығын, һуғышсанлығын бик юғары баһалауын әйтте, башҡорт ғәскәрҙәренен, данлы боевой эштәре хаҡында үҙәк газеталарҙа һоҡланып яҙылған мәҡәләләрҙән ҡайһы бер өҙөктәр килтерҙе. Боецтарға Константин Фединдың «Петроградская правда» газетаһында баҫылған мәҡәләһенән килтерелгән өҙөк айырата оҡшаны: «Совет реепубликаларына иң ҙур ҡуркыныс тыуған бер мәлдә башҡорт ғәскәрҙәре иҫ киткес ҙур ныҡлыҡ, батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ күрһәттеләр һәм шул арҡала мөшкөл хәлдән сығып ҡына ҡалынманы, ә еңелеүҙе еңеүгә әйләндерелде»,— тип яҙылғайны.

Һүҙенен, аҙағында вәкил башҡорт, ғәскәрҙәренә ошо юғары баһаның билдәһе итеп, Петроград Советының ҡыҙыл байрағын тапшырҙы.

Башҡорт ҡыҙылармеецтары уға ҡеүәтле «ур-ра!» менән яуап бирҙеләр.

Унын артынса трибунаға Урал ҡарағасы шикелле мөһәбәт, ҙур кәүҙәле, ҡара мыйыҡлы, ҡарсыға ҡарашлы бәһлеүән сығып баҫты.

— Башҡорт бригадаһының командиры ошо! — тип бышылданы Иштуған ғорур тауыш менән.— Айһылыу, күрәһенме, күкрәгендә Ҡыҙыл Байраҡ ордены! Беләһеңме, иң тәүге ордендарҙың береһе уға бирелгән, тиҙәр!.

«Ҡайһылай матур кеше!..» — тип һоҡланып уйлап алды Айһылыу унан.

— Үҙе йәп-йәш кенә икән дә! — тип өҫтәне.

— Эйе... Мин дә исемен күп ишетһәм дә, былай яҡындан күргәнем юҡ ине әле. Йәш, әммә граждандар һуғышының иң данлыҡлы командирҙарының береһе бит ул^ Бәлки, бик үк йәш тә,түгелдер. Ул бит батша армияһында һалдат сағында ла күп батырлыҡтар күрһәткән, бер нисә Ётапкыр тимер тәре ордендары менән наградланған Ә үҙе |ярлы балаһы, ти. Атаһы ошо көндә лә байҙа батрак ти

«һин унығ хаҡында ҡайҙан был хәтле күп белеп бөтгөң?»— тип һорамаҡсы булды Айһылыу, ләкин өлгөрмәче Командирҙын, сағыу, көслө тауышы майҙан өҫтөндә Чңғырап китте, һәм ул, тын да алмай, уға текләп, тынып ҡалды.

— Иптәштәр, ҡыҙылармеецтар, ҡыҙыл командирҙар, _ аҡ финдарҙың, юденичсыларҙың айбарланып килгән аж-ˈдаһа яуына ҡорос ауыҙлыҡ кейҙергән Урал батырҙары! — тип образлы ярһыу сағыштырыу менән башланы ул тағы һүҙен Күрәһен, ҡаты һуғыш мәле, һуғышсыларҙы артабанғы ҙур һынауҙарға дәртләндереү бурыстары шундай

илһамлы, ярһыу һөйләүҙе талап итә ине. Командирҙын, ҡеүәтле ҡалын күкрәк тауышы меһәбәт кәүҙәһенә бик хас ине. Майҙап, ярға бәргән диңгеҙ кеүек, тулҡына биреп ҡуйҙы ла тынып ҡалды. Командир ашыҡмай, ябай, асыҡ, ҡыҫҡа һөйләне. Башта ул ҡыҙылармеецтарҙы оло еңеү менән ҡотланы. Петроград есөн өс ай буйы барған ҡан ҡойошло ҡаты һуғыштарҙа башҡорт ҡыҙылармеецтарының тиңһеҙ батырлыҡтарына, ҡаһарман рус частары менән яурынға-яурын терап, дошмандың күпме үлемесле атакаларын кире ҡағыуҙарына туҡталды. Ил өсөн, революция есен баш һалған батырҙарҙы тәрән хөрмәт менән иҫкә алды. Башҡорт удар группаһынын, Пулково, Царское Село һәм башҡа шундай хәл иткес урындарҙағы ҡаты Һуғыштарҙа бигерәк тә ҙур ныҡлык, батырлыҡ күрһәтеүе хаҡында һөйләгәндә, айырым боецтарҙың үтә ҙур ҡаһарманлыгын билдәләп, исем-фамнлиялары менән әйтсп киттс. Шул батырҙар теҙмәһендэ полк командиры Хамматтын да псеме бар ине.

— Хаммат Батыров үҙе арыҫлан кеүек һуғышып ҡына ҡалманы, ә ку|)кыу белмәҫ ҡаһарманлыҡ өлгөләро күрһәтеп, полкындағы боецтарҙы тинһсҙ 'батырлыҡтар эшлэргә рухландырҙы, көс яғынан бик күп әҫтөн торган дошманды ҡыйратыуға нреште,— тине командир.— Пулково янында һугыппты упыц полкы. Беҙҙең һугышсылар бөтә ерҙә лә шулай һугыштылар. Бөтә босцтыц йөрәгеи берҙәй биләп алған шундай эскерһеҙ батырлыҡ, революция эшенә башкөллө бирелгәнлек кенә һуғышта ошондан оло еңеүгә килтерергә һәләтле була,— тип ул тәрән ышаныс һәм хаҡлы горурлыҡ меиән билдәләнс.

— Ишеттеңме, Айһылыу, беҙҙен Хаммат ағай хаҡында нпсек әйтеп китте, ә? — тип шыбырланы Иштуған, ҡыуанып.— Тик нмцә һуи әле ул Хаммат агай үҙе күренмәй?

— һин миңә ҡамасаулама әле,— тип иплэп кснә бүлдорҙе уны ҡатыны.— Тыцлап бөтөргә бир.

Иштуғандың күнеле ҡапыл тынысһыҙланып китте: «Ысынлап та ҡайҙа һуң ул? Иинәлер бер ҡайҙа ла күренмәй? һәләк булманымы икән? Был шатлыҡлы минутта Иштуған бит бөтәһенән элек Хаммат ағаһы янында булырға, унын, батыр һуғышсының, ҡулын ҡыҫырға, күкрәгенә һыймаған ғорурлыҡ тойгоһон унын, менән уртаҡлашырға теләй пне лә баһа! Ләкин ул, ни эшләптер, командирҙар араһында ла, һалдаттар араһында ла юҡ һымаҡ бөгөн...»

Иштуған тамам аптыранып тирә-яҡҡа ҡаранды. Унын бит бегөн, хәҙер үк, Хаммат аға!1ын осраҡкыһы, һөйләшеп,



ҡыуанышып ултырғыһы килә лә баһа! Быға хәтле улар Һирәк-һаяҡ ҡына осраштылар. Унда ла ҡабалан гына иҫәнлск-һаулыҡ һорашыуҙан ары уҙып булмаиы, һугыш бит, һуғыш...

Иштуған инде командирҙың телмәрен дә тыңлай алмай башлаиы. Күп мекле гәскәрзең майҙан янғыратып ур-ра ҡыскырыуы ла, көлөшөү, шаулашыу, йәнле әкгәмәләшеү тауыштары ла унын ҡолағына килеп етмәне һымаҡ. Хатта ул митингынын. нисек шаулы, тантаналы тамамланыуына ла иғтибар итә алмай ҡалды. Уның мейеһендә һаман бер уй ғына ҡабатланды: «Ҡайҙа ул? Нисек уны табырға?!»

Эйе, эштәр үтә ҡыҙыу булды шул. Башта бөтә ваҡыт-ты хәрбн һәм политик әҙерлек эштәре алды. Етмәһә, Иштуған, әҙ генә буш ваҡыты булһа, Петроградты һаҡлаусы башҡорт ғәскәрҙәре өсөн сығарылған «Салауат» газетаһына хәбәрҙәр, мәҡәләләр яҙғылап бирҙе. Унан һуғыш... һуғыш ваҡытында осрашып һөйләшеү ҡайҙа ти инде ул. Бына хәҙер осрашаһы, һөйләшәһе ине лә бит. Кем белә, бынан һуң беҙ тағы ҡасан, ҡайҙа осрашырбыҙ, һуғыш осоро беҙҙе тағы ниндәй һынауҙар алдына ҡуйыр?..

Айһылыу иренә яратып, келөмһөрәп ҡараны:

— Йә, балтаң һыуға төштөмө әллә? Ницә шулай бошоноп киттең әле?

— Ни өсөн икәнен үҙең беләһең бит,— тип бошоноп яуапланы Иштуған.— Хаммат ағай күренмәй...

Айһылыу, әйтерһен,, әле генә иҫенә төшөргәндәй итеп, иренә ғәжәпһенеп ҡарап алды:

Мин һиңә әйтмәнемме ни әле?! Ә, эйе, әйтмәгәйнем шул... Белмәй торһон әле, тигәйнем.

Иштуған, үтә сабырһыҙланып, ҡатынының шинель еценән тотоп тартты.

— Нимә тиһең? Нимәне әйтмәнең? Ниңә әйтмәнен, йәһәтерәк һөйлә!

— Иple, биғәләш, еңемде өҙөп алаһың да баһа,— тип, уйынға борорға тырышты һаман Айһылыу.— Былай ҙа 'иинелем бик янынан түгел.

Иштуған, бер ни ацламай, ҡатынына баштан-аяҡ ҡаэап сыҡты.

«Эйе, шинель бик яңынан түгел. Ләкин, Айһылыуҙың 1омро күкрәкле, нескә билле һылыу кәүҙәһенә ул бары->ҫр килешеп тора. Тулҡынлы сөм-ҡара сәс толомдары өҫөнә саҡ һыйып ултырған ялбыр бурыл папаха ла, биле-(ә таҡкан наган да, тиҙ ярҙам сумкаһы ла, хатта аяғына ;ейгән һалдат итеге лә шул хәтле килешле кеүек. Ә инде был ап-аҡ һылыу йөҙ, йондоҙ кеүек балҡып торған аҡыл-

лы ҙур ҡара күҙҙәр, ҡуйы бөгөл керпектәр, ҡыйылып киткән ҡыйғас ҡаштар, көслө ихтыярҙы, тәрән аҡылды һвйләп торған ныҡ ҡымтылған алһыу ирендәр... Улар бер ҡасан да һулымаҫ-һүнмәҫ өсөн бирелгәндер уға. Ниндәй йылдар, ниндәй һынауҙар! Ә ул бөтә ауырлыҡҡа үс иткән шикелле, һаман һылыулана, алланып бешә генә бара... Нисек шулай булмаһын, уға бит әле бары ун туғыҙ йәш. Ә ауылдан ҡасып сығып киткәндә, уға бары ун ете, миңә ун һигеҙ ине... Ә хәҙер?... Эй үткән ғүмер...

Туҡта әле, Айһылыуҙын, күҙ ҡарашында ниндәйҙер тыныcһыҙлыҡ бар түгелме һуң? Эйе, тап шулай... Уға нимә булды? Бәлки, ул берәй ҡайғылы хәбәр беләлер?!»

Ул ипләп кенә ҡатынын биленән ҡосаҡлап үҙенә тартты.

— Йә, әйт инде, зинһар, үтенәм!

Айһылыу тағы иркә, хатта шаян төҫ алырға тырышты.

— Ҡурҡыныслы бер ни ҙә юҡ. Хаммат ағай яраланды ғына... Лазаретҡа мин уны үҙем оҙаттым... Бына шул ғына...

Иштуған ҡатынының ҡылығына төшөнә алмай, оҙаҡ баш сайҡап торҙо.

— Шул ғына тиһең, ә? Иҫ китерҙәй бер ни ҙә юҡ тиһен, ә?!

— Әлбиттә, ғәжәпләнер урын юҡ,— тине Айһылыу, һаман да тыныс булырға тырышып.— һин үҙен, һуғышта һәр төрлө хәл булырға мөмкин, Айһылыу, һин быға тыныс ҡарарға ейрән, ти торғайның бит!..

«Эйе, бында һис тә аптырар урын юҡ. һуғышта, кеше һәр көн, һәр сәғәт үлем ҡаҙанында ҡайнаған бер саҡта, уны ғәжәпкә ҡалдырырҙай бер ни ҙә юҡ һәм булмаҫ һымаҡ... Шулай ҙа был хәбәр ни есөндөр унын, йәнен ҡыйып үткән һымаҡ булды ла баһа! Ни өсөн һун былай унын, йөрәге тотош тетрәп китте! Бәлки, ул бала сағынан уҡ был Хаммат ағайҙы еңелмәҫ көрәшсе, үлемһеҙ батыр итеп күрергә өйрәнгәнгәлер? Эйе, Иштуған (хәйер ул янғыҙы ғына ла түгел, ә ауылдын. барлыҡ йәше, ҡарты) Хаммат батыр менән ғорурланырға, тәрән ихтирам итергә, унын, йөҙөндә бөтә булған кешелеклелек, дөреҫлөк, намыҫлылыҡтың ҡаҡшамаҫ яҡлаусыһын күрергә өйрәнгән бит. Хәҙер бына шул кеше, етмәһә, шундай оло ецеү көнөндә, яраланып йығылһынсы инде!.. Ғәҙелһеҙлек тә баһа был! Нисек быға тыныс ҡына ҡарап булһын?!»

Айһылыу иренә тағы бер тапҡыр иркә генә ҡарап торҙо:

— Йә, һин ниңә шул хәтле телһеҙ ҡалдын. әле!.. Әйҙә



инде, улай булғас, мин һине лазаретҡа алып барайым... Киттек! — тип шаяра-көлә ҡултыҡлап алды,— йүгерҙек!..

Улар лазаретҡа барып еткәндә, көн кисләп килә ине. Төньяҡтан ҡырыҫ ел иҫә. Былай ҙа еүеш һалҡын һауа кискә табан тағы ла ныҒыраҡ ауырайып, сирҡандырғыс булып елкәгә баҫа. Гүйә, тәбиғәт тә Иштуған менән бергә ауыр уйҙарҙан өшөп, ҡорошоп, ҡалтырап бара ине.

— Был ҡалала нисәмә ай тороп, тәү тапҡыр шундай йәмһеҙ һалҡынлыҡ тоям,— тине Иштуған, яурындарын һикертеп.— Ғәжәп, просто өшөтә!

— Быға са өшөү ҡайғыһы булдымы ни? — тине Айһылыу уйсан ғына. Бөгөн үҙенден, өшөүендә тойорға ла, яҡының өсөн көйөргә лә мөмкинлек бар шул...

Лазаретҡа ингәс тә, был ҡырыҫ, еүеш һалҡынлыҡтың кәмеүе һиҙелмәне. Күрәһең, бында ла йылы етерлек түгел. Айҙар буйы барған үлемесле һуғыштын, ҡанлы ш'аңдағы ҡағылмаған берәй мөйөш бармы ни ҡалала?!

Лазаретта уларға, иҫке, ямаулы ғына булһа ла, таҙа йыуылған аҡ халат бирҙеләр. Ин, төпкө палаталарҙын, береһенә күрһәттеләр.

— Беҙҙә ҡаты яралылар ята... Ныҡ баҫып атламағыҙ,— тип иҫкәрттеләр.

— Ныҡ баҫмағыҙ, тип әйтеүе анһат! Был ауыр һалдат итеге менән, етмәһә, үксәһенә боҙ туңған итек менән, ҡалай итеп йомшаҡ баҫырһың!..— тип, Айһылыу әкрен генә көрһөнеп ҡуйҙы. Ә Иштуғандын, күнеленә халат биреүсенен, бер генә һүҙе эленеп ҡалды:

— Беҙҙә ҡаты яралылар...

«Тимәк, Хаммат ағай ҡаты яралы?! Йә инде, был нисек була инде, ә?!»

Ул туң ауыр итегенең аяуһыҙ шаҡылдауына ла, йомшаҡ баҫырға тырышып ыҙаланған Айһылыуҙың үҙенән ныҡ ҡына артта ҡалыуына ла иғтибар итмәй, ашығып, ҡан, йод еҫтәре аңҡыған оҙон коридор буйлап алға атланы.

## VII

Мөғәллимә ҙур күкрәкле, елкәһе көмрәйеберәк торған йыуан кәүҙәле, ҡалын ҡыҙыл иренле, әллә кершәнде ҡып яҡҡанға, ҡанһыҙ аҡ йөҙлө бала һымаҡ йыуаш ҡарашлы, ул үҙен эре генә торорға, ауыл нешеләренә алыҫ булған ҡабарынҡы, татлы китап теле менән генә һейлә-

шергә тырыша. Мәҫәлән, ул үҙен «Сәхибә туташ» тип атап йөрөтөргә ҡуша. Ә был ундай һүҙгә күнекмәгән илсеғоллоларка мәҙәк кенә тойола. «Туташ» һүҙенең мәғәнәһен аңлаған һәр кеше: «Ул ниндәй туташ булһын икән? Уға бит кәмендә егерме биш йәштер» тип, эсенән көлә генә, ә аңламағандарға, бигерәк тә балаларға, был буш, мәҙәк һүҙ булып ҡына тойола.

Сәхибә туташ тышҡы күренеше, кейем-һалымы менән дә Илсеғол ҡатындарынан ныҡ айырылып тора. Унын, аяғында бау менән сырмап бәйләнгән оҙон ҡуңыслы, бейек күтәрмәле ҡара ботинка, еҫтөндә — биленән алып тамаҡ аҫтына хәтле ваҡ ҡына ҡара һиҙәптәр менән ҡаптырылған керән күлдәк, сигелгән аҡ яға, ҡара сатин алъяпҡыс. Ҡыҫҡаһы, гимназисткалар кейеме. Ул ҡалын һары сәстәрен, ҡуй мегөҙө шикелле тәгәрмәсләндереп, елкә тәңгәлендә урап ҡыҫтырып ҡуйған. Ә маңлай сәстәрен ҡырҡып алға тарап төшөрөүе, унын. бик үк һылыу булмаған йөҙөнә ҡатындарға хас һөйкөмлөлөк биреп тора һымаҡ.

Ул Илсеғолдан алыҫ түгел һаҡмар буйындағы ауылдан, атаҡлы бер хәҙрәт ҡыҙы ине. Атаһы уны революцияға хәтле үк Бағбостан ханымдың мөғәллимәләр курсында уҡыткан. Унан, революция булғас, Сәхибә туташ мөғәллимәлеккә тотонған. Унын, атаһы ла, хәҙрәтлеген ташлап, хәҙерге көндә волоста, мәғариф эшендә эшләп йөрөй. Унын, хаҡында, был йылдарҙа бик нык таралған дингә ҡаршы диспуттарҙа йыш ҡатнаша, һөйләй башлаһа, теле телгә йоҡмай, һүҙҙә кешене алдына сығармай, ҡара халыҡты ғына түгел, муллаларҙы ла аптырата ла ҡуя икән, тип һөйләйҙәр. Унын, зирәклегенә, үткерлегенә иҫе китмәгән кеше юҡ.

— Был хәтле лә телдәр, сәсән кеше була икән,— тип хайран ҡала бөтә кеше. Тик алыҫтан күрә белгән ҡайһы бер кешеләр генә быға аптырамай ҙа, ышанмай ҙа. Әгәр берәйһе был хаҡта һүҙ асып:

— Ахыр заман етеүе ошолор. Юҡһа хәҙрәт хәтле хәҙрәт тә бынаулайтып аҙып, коммун булып китмәҫ ине,— тип зарлана башлаһа:

— Йә, юҡҡа кейөнмәгеҙ. Күпме йөрер тиһең? Күкеле булғансы хөрриәт уйыны уйнап алыр ҙа асылыңа ҡайтыр әле,— тип кенә һүҙҙе туҡтаталар.— Бәлеш төбө ашап өйрәнгән кеше һый-хөрмәтһеҙ оҙаҡ йәшәй алмай ул,— тиҙәр.

Юҡ, Сәхибә туташ атаһына оҡшамаған. Бынын, өсөн унын, аҡылы ла, хәйләкәрлеге лә етерлек түгел. Унын бөтә йөреш-торошонда, ҡыланышында иркәлек, наҙлылыҡ сағылып тора. Ул һәр һүҙҙе ауыҙында һүҙып, нескәләп, ыҙалап сығарырға ярата. Етмәһә, һәр кемгә «аҡыллым» тип, сөсәләнеп өндәшә. Унын. тап ошо ҡылығы Емештең эсен бошора. Ул йыш ҡына: «Эй, татлы тел! Оло башы менән бала булып мыйылдап тик торасы, оялмай,— тип уйлап ала.— Бесәй балаһы шикелле мәмелдәп торғансы, ололарса ғына һөйләш! — тип эстән генә өйрәтеп ҡуя.— Мөғәллимәң көлкө тойолғас, унан уҡыған киләлер шул?!» — тип үпкәләп тә ала. Үҙе уға бер кем тип тә өндәшмәҫкә тырыша.

» Мөғәллимәнең Емешкә ин. оҡшаған урыны — маңлайына ҡырҡып төшөрөлгән һары сәсе булды.

«Эй, әгәр мин дә сәсемде шулай ҡырҡып т.өшөрһәм, исмаһам, бынауы ай ҙурлыҡ маңлайымды әҙерәк ҡаплар ине,— тип ҡыҙығып уйлай ул.— Ҡалай килешер ине».

Сәхибә туташ әгәр унын был уйын белһә, һис шикһеҙ, Емештен маңлай сәстәрен ҡырҡыр. Шунын менән үҙен бик ҙур революцион эш башҡарған иҫәпләп, ғорурланып йөрөр пне, әлбиттә. Тпк Емештең уйын белеи буламы ни?

Ләкин мөғәллимәне лә, мәктәпте лә яратыр өсөн матур сәстәр генә аҙ ине шул. Бына инде Емеш ике-өс ай уҡып йөрөй. Нисектер, бик тиҙ арала уҡырға, яҙырға ла өйрәнеп алды. Ә бына мөғәллимәгә һаман ылыкманы. Хатта һабакты бөтөнлэй тип әйтерлек тыңламаны ла. Хәҙер уга мөғәллимәнсң күҙҙәре айырата оҡшамай ине. Улар түп-түнәрәк кенәләр ҙә аҡһыл күктәр. Үҙҙәре иицәлер йәшкоҙәгән дә, иламһыраған да һымаҡ. Кортәлә мал ялап ташлаган кмҫәкле тоҙҙоң тоноҡ ялтырауым хәтерләткән һымаҡ. «Эй, тоҙ күҙ! — тип уҫалланып уйлана Емеш.— Күҙендә бер ҙә нур юҡсы».

Үҙе шунда ук унайһыҙланып, үкенеп, башым түбән эйҙе.

«Йә инде, мөоллимәне шулай әрләү ярайҙыр шул?! Был тиклем дә килешмәгәнде уйлармын икән, эй хоҙайым!..»

Ә мөғәллимә тап шул ваҡыт, Емештең кәйефен тағы *ла* ныҒыраҡ боҙорға теләгән һымаҡ, сит-ситтәре еүешләнеберәк торган ҡалын ҡыҙыл ирендәрен айырата иркә борғолап:

— Гөл-йе-меш! — тип, иркә һуҙып өндәште...— Гөлй-е-меш аҡыллым, йә әле, ук-ып ҡара әле, был нин-дәй ауа-уаз була?

«Йә хоҙай, йәнә «аҡыллым»!? Р1ә, ни тип инде минә шундай ҡырҡ мөйөшлө исем ҡуштылар икән? Яратмайым хәҙер исемемде! Аптырарһын, Ҡарасәс инәй ҙә шу-

лай минен, исемемде тултырып әйтә ине. Ул саҡта мин үҙемде бер сиреккә үҫеп киткән һымаҡ тоя инем. Ниңә хәҙер исемем миңә был хәтле ямаҡ тойола икән?!»

Таҡталағы яҙмаға күҙ ҙә һалмай уйланып ултырған Емешкә мөғәллимә, яҡын уҡ килеп, текләп ҡараны.

— Гөл-йе-меш, мин кемгә әйтәм, аҡыллым!

Емеш, ҡуйы керпектәре менән күҙен тотош ҡаплап, башын түбән эйҙе.

— Гөл-й-е-меш, тим, ниңә вндәшмәйһең? Белмәйһеңме ни? Тырышырға кәрәк, аҡыллым. Хәҙер бит хөрриәт заманы. Уҡый торған замана...— тип, ашыҡмай, борсолмай ғына өгөт-нәсихәткә тотондо Сәхибә түтәш. Ул, ысынлап та, бик сабыр холоҡло, йыуаш, иркә ғәҙәтле кеше ине. Кескәйҙән үк тормош типкеһендә үҫеп, ҡолағы йылы һүҙгә күнекмәгән, хатта үҙенә хас тормош фәлсәфәһе булған Емеш кеүек ҡырыҫ балаларҙың йоҙаҡлы йөрәгенә йәтешле асҡыс табыу, әлбиттә, унын, хәленән килә торған эш түгел ине. Шуға ла ул йыш ҡына «херриәт» тип, өгөт һөйләү менән генә сикләнә ине шикелле. Был юлы ла унын, өгөтө оҙаҡ ҡына барҙы. Ә Емеш һаман үҙ уйы менән генә һейләште.

Хөрриәт... Был һүҙҙе Емеш атаһынан, Тимербай, Иштуған ағаларынан ишетеп күптән белә. Илсеғолға һуңғы йылдарҙа килеп ингән яңы һүҙҙәр араһында Емеш өсөн ин, яғымлыһы, иң яҡыны ул. Хөрриәт — ул Емеш өсен, бөтәһенән элек, килмешәклектән, ерһеҙлектән ҡотолоу. Ул — быға саҡлы таныш булмаған, аңлашылмаған, ләкин йөрәкте үҙенә тартып, өмөтләндереп торған өр-яңы донъя. Хөрриәт ул — наҙлау һүҙе түгел. Ул — ҡурғаш кеүек тос, ҡояш кеүек яҡты, йыр кеүек яҡын оло һүҙ. Эйе, был бөйөк һүҙ. Ә бына Сәхибә түтәш аңлатҡанса: сәс ҡырҡтырыу — хөрриәт, аяҡҡа ботинка кейеү — хөрриәт, хатта мөхәббәт хаты яҙыу ҙа — хөрриәт...

Сәхибә түтәш, ысынлап та, әллә үҙенсә балаларҙа уҡырға-яҙырға өйрәнеү дәрте тыуҙырам тип, йыш ҡына хөрриәттән хат яҙышыу мәсьәләһенә күсеп китеүсән. Бына әле лә өгөт-нәсихәттең аҙағы тап шуға барып төкәлде.

— Элек, ҡәһәр һуккан яуыз батша заманында, ҡыҙҙарға херриәт юҡ ине. Ҡыҙҙар, меҫкендәр, һөйгән йәрҙәренә хат та яҙа алмайҙар ине,— тип, ауыҙҙарын дүрт мөйөшләндереп, ҡыҙғаныслы тауыш менән һөйләп китте ул.— һөйгән йәренән килгән хатты ла уҡый алмайҙар ине. Ә хәҙер, аллаға шөкөр, хөрриәт. Кемгә теләһәң, шуға хат яҙа алаһың... Тик уҡырға, яҙырға ейрәнеп кенә алырға кәрәк.



Ул, аҡһыл күк күҙҙәрен мөлдөрәтеп, оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Унан папкаһынан ҡағыҙы һарғайып, биттәре төшкөләп бөткән кескәй генә бер китап табып алды.

— Хатты һәр кемдең дә яҙа белмәүе мөмкин хәл,— тип, бик мөһим сер сискән ҡиәфәт менән, класҡа күҙ йөрөтеп сыҡты.— Ә бына был китапта өйрәткән... Нисек хат яҙырға ейрәткән. Йәгеҙ әле, балалар, ҡәләм-дәфтәрҙәрегеҙҙе алығыҙ. Мин һеҙгә хат яҙышыр өсөн бер нисә үрнәк яҙҙырам.

Сәхибә түтәш ҡуҙғалмай, ҡәләм-ҡағыҙға тотонмай ултырған Емеш яғына күҙ ҡойроғо менән генә ҡарап алды ла һүҙҙәрҙе ҡат-ҡат әйтеп яҙҙыра башланы.

— ...Йәндән артыҡ күргән йәнәшем, ғәзиз йәрем, күҙ нурым, ожмах хурым,— тип, ләззәтләнеп, теҙеп уҡыны ул.— Күк күгәрсенем, аҡ күбәләгем, хәләл ефетем...

— Быныһы, мөғәллимә апай, ирҙәр өсөндөр? — тип бүлдерҙе уны Байрас.— Беҙгә бит ҡыҙҙарға яҙырға өйрәнергә кәрәк...

Сәхибә түтәш, ҡапыл-ғара төшөнмәй, Байрастың мут йылмайған яҡты ҡара күҙҙәренә текләп торҙо.

— Ефетем тип ҡатынға әйтәләр түгелме һуң? — тип ҡабатлап һораны Байрас.

— Ә, дөрөҫ...— тип төшөнөп алды Сәхибә түтәш. Унан бик етди тауыш менән: — Ҡыҙҙарға бына ошондайыраҡ яҙһан, һәйбәт була,— тип, икенсе хат үрнәген алды.

Емеш һис бер ҡыҙыҡһыныу билдәһе күрһәтмәне. Байрас та инде, эсе бошоп, урамға һалмаҡ ҡына ябырылған ҡар күбәләктәренә ҡарап тынып ҡалды. Моратша ҡәләмен төкөрөкләй-төкөрөкләй, яҙып өлгөрөргә тырышты. Шәүрә унын, ҡолағына бышылданы:

— Кит, бигәләш, һинә, һорнайғанға, ундай хаттар нимәгә кәрәк?

— һиңә хат яҙыр өсөн,— тип яуаплашты Моратша. Шәүрә, ғәҙәтенсә, эскерһеҙ кинәнеп көлдө.

— һиңә, килбәтһеҙ ҡылйыуғыска ғына, шундай хаттар яҙырға өйрәнергә кәрәк ти!

Әхирәтенең һәр нәмәнән тик ирмәк яҡты ғына күрә торған ғәжәп ҡылығы Емеште тағы ла һоҡландырҙы.

«Ҡалай рәхәт кеше был Шәүрә. Ниңә мин дә шулай түгел икән?» — тип бошоноп ҡуйҙы. Ысынлап та, был хаттар уға һис тә ирмәк күренмәнеләр. Киреһенсә, ҡасандыр, ирекһеҙҙән ишетелгән, Сәрбиямал менән Әхмәтшаның һөйләшеү-һөйөшөү телен хәтерләтеп, унын күңелендә ерәнеү ҡатыш екһенеү генә уяттылар.

Сәхибә туташ Емешкә тағы аптырабыраҡ ҡараны.

— Гөл-йе-меш, ницә һаман кәйефһеҙ ултыраһың? Әлләсырхап тораһынмы, аҡыллым?..

Емештең артыҡ сыҙар хәле ҡалманы. Уға был «аҡыллым» һүҙендә бөгөн айырата йән биҙҙергес ялған өн яңғыраған һымаҡ тойолдо. Ул көскә генә тауышын сығарып:

— Башым ауырта башланысы...— тине.— Күңелем болғанып торасы...

— Ауырыйһыңдыр, аҡыллым. Улайһа, ҡайтырға рөхсәт итәм,— тине Сәхибә туташ, ысын күңелдән ҡайғыртып.

Емешкә ят, ялған өн булып яңғыраған был «аҡыллым» һүҙен ул, әлбиттә, юрый ғына, сөсөләнеү өсөн генә әйтмәй ине. Уның һөйләшеү ҡылығына ингән ябай бер һүҙ ине был.

Ҡайтырға рөхсәт булғас, Емеш, ҡыуаныстан йөҙө балҡып, аяғы ергә теймәй тышҡа ташланды. Әйтерһең, ауыр сынйырҙан ысҡынды.

## VIII

Хаммат палатаның иң төпкө мөйөшөндә, иҫкереп, төҫһөҙләнеп бөткән аҡ ҡорма ҡоролған кескәйерәк тәҙрә янында ята. Уның йөҙө әллә күп ҡан юғалтыуҙан, әллә ошо төҫһөҙ ҡорманан төшкән күләгәнән, үтә лә һарғылт аҡһыл, йәнһеҙ күренә.

Иштуғандың йөрәге өмөтлө-өмөтһөҙ борсоулы уйҙарҙан күкрәген ярып сыға яҙып дөпөлдәп китте. «Үлдеме икән әллә?! Терелтергә әле һун, түгелдер, бәлки!.. Аһ, нп ярҙамдар ғына итергә һуц?!.»

Хаммат тере ине. Хатта уларҙы үҙенең ғәҙәттәге аталарса изге күңелле, хәстәрле йылмайыуы менән ҡаршыларға тырышып, ҡарап та ята ине.

Иштугандын бөтә йәне-йөрәген аҙаплы тетрәү һаман тәрәнерәк солғап ала барҙы: «Эй хоҙайым, танымаҫлыҡ хәлгә килгән дәһә! Аһ, был ләғнәт төшкөрө һуғыш! Ниндәй ирҙәрҙе ни хәлгә ҡалдырмай бит!..»

Хамматтын, күкрәге яурынынан алып тотош аҡ марля менән сырмалған. Ҡеүәтле баһадир көүҙәһе, нисектер, йоҡарып, кесерәйеп, карауатка һеңеп киткән.

Берсә күңелле оскон сәсрәтеп, берсә бөркөт ҡыйыулығы менән тоҡанып йәнде иретә торған үтә һөйкөмлө, мәғәнәле күҙҙәр ҙә нык ҡына һүнгән, һүрелгән...

«Эй хоҙай, был ни эш?!—тип һаман өнһөҙ һыҡтай Иштуған.— Инде ни эшләргә һуң?!»



Айһылыу, шәфҡәт туташтарына хас тыныс, иркә тауыш менән:

— Нихәл, Хаммат ағай? — тип әкрен генә иҫәнләште, янына ултырҙы, унын, ҙур, ҡайнар ҡулын үҙенең кескәй устарына алып, әсәләрсә йомшаҡ, иркәләп һыйпзны, әле булһа ауыҙынан бер һүҙ ҙә сығара алмай, телһеҙ ҡатып торған иренә, ауырыуға һиҙҙермәй генә, шелтәле ҡараштырып алды: «Ҡарасы, ебенең дә төштөң дә баһа! Үҙенә төптө оҡшамай ҡалдынсы?!» — тип аптырай ине был ҡараш.

— Ултыр, Иштуған...— тине Хаммат уға, әкрен генә.— Йә, нихәл, һөйләп ебәр?..

Иштуған, тынлаусан бала шикелле, ҡатыны ултырған табуретканың бер мөйөшөнә һыйынды. Үҙе һаман шул тауыш-тынһыҙ көйө яралыға текләп ҡалды. Сенки ул үҙен кемдер боғаҙынан быуып алған, күҙ йәш менән бергә күҙҙәре лә атылып сығыр хәлгә килгән һымаҡ тоя ине. Уның йөҙөнә ҡарап, Хаммат та күрәһен быға төшөндө һәм ҡарашын Айһылыуға йүнәлтте.

— Йә, һылыу, эштәр нисек?.. һин һейләп ебәр...

Уның ирендәре ҡанап, ярылып тора, танау осондағы бер нисә бөртөк ваҡ ҡына шаҙра урынында ысыҡ тамсылары кеүек ялтырап көс тирҙәре йымылдай, ябығып, ҡаҡсаланып өлгөргән яңаҡтарында тимгел-тимгел ҡыҙыл таптар уйнай, тын алыуы үтә йыш, өҙөк-өҙөк...

«Хаммат ағайҙың шаҙраһы барын һис тә күргәнем юҡ ине... Күрәһең, ябыҡканға беленәләр улар?..» — тии уйлай Иштуған. Ошо минут өсөн һис тә хас булмаган был мәғәнәһеҙ уйҙан унайһыҙланып, тирләп-бешеп китә. Ҡарашын икенсе яҡҡа алырға тырыша. Ләкин Хаммат ағаһыныц көс-тире сығып яткан аҡһыл йөҙө, магнит кеүек, уны үҙенә тарта. һәм уның башына был ваҡыт өсөн тағы ла мәғәнәһеҙерәк уйҙар килә башлай...

«Ҡыҙыҡ, ҡандай һаҡалтай икән дә ул!.. Белһән ине... Сәлимә еңгәм, мәрхүм, уның бынауы үтә аҡыллы, тәрән ҡарашлы күҙҙәренме, әллә бынауы ҡеүәтле беләктәренме нығыраҡ яратты икән? Беләм бит, хәтерләйем бит... Их, ҡалай ярата ине бит уны Сәлимә еңгә! Ҡандай тиң, бәхетле мөхәббәт ине улар араһында... һирәк осрай торған... Бик һирәк кешеләргә тәтей торған бәхетле мөхәббәт... Ғүмерһеҙ, үкенесле мөхәббәт...»

Хаммат йомолоп барған керпектәрен көскә күтәреп, хәлһеҙ генә тауыш менән тағы баяғы һүҙен ҡабатланы:

— Йә, һөйләп ебәрегеҙ. Тынлап була... һөйләргә генә ауьфыраҡ... Үпкә бит... Ниндәйҙер бер мина ярсығының

күкрәкте тишеп сығырға хәле етмәгән, имеш...— тип ул хатта уйнап һөйләшергә лә ынтылып ҡараны.— Әле инде шунда ҡайҙалыр аҙашып йөрөй, имеш...

Айһылыу кеҫәһенән сигелгән аҡ батист яулыҡ алып Хамматтың тирле маңлайын, биттәрен һөртөп алды. Унан яулыҡты, тәңкләп, карауат янында торған тумбочка өҫтөнә һалды.

— Ағай, һинең өсөн сиктем. Минән иҫтәлек булыр...

— Ҡана, бир әле... һылыу...

Хаммат, күҙҙәрен йомоп, яулыҡты оҙаҡ еҫкәп ятты.

— Рәхмәт... һылыу... үҙебеҙҙен. Оло Эйек буйының сәскәләрен хәтерләттең...— тине ул, тәрән рәхмәт тойғоһо кисереп.— Алтын ҡул... һине кескәй саҡтан шулай маҡтайҙар ине шикелле?.. Бында, ут эсендә лә, шундай булып ҡала беләһең... Бик рәхмәт...— Унан, тағы бер аҙ күҙҙәрен йомоп тынып ятҡас, ишетелер-ишетелмәҫ кенә тауыш менән: — Минең Сәлимәм дә шундай була торғайны...— тип өҫтәне...

Уның тын алышы үтә йышайып китте, шешенмәкләнеп торған күҙ ҡабаҡтары, ҡурғаш кеүек ауырайып, йомолдолар.

— Бик арытып ташлайбыҙ, ахыры. Китергә кәрәк,— тип шыбырланы Айһылыу.— Иштуған, ишетәһекме? Иртәгә тағы килербеҙ, көн дә килербеҙ, йәме...

Иштуған, гүйә, был һүҙҙәрҙе ишетмәне лә, аңламаны ла.

«Нисек китергә?! Ниңә китергә? Шулай уҡ китергәме ни?! Уның бит Хаммат ағаһыиа һөйләргә теләгән бик күп һүҙҙәре бар ине лә баһа?! Ә ул бүкән кеүек ҡатты ла ултырҙы ла баһа!.. Тел ҡыбырлатып бер һүҙ ҙә әйтә алманы... Бына инде шул көйө китеп тә барырға кәрәк!.. Ницә һуң ул .элегерәк унын, менән осрашырға, һөйләшергә тырышманы... Иркен, тыныс ваҡыт килеүен көтмәҫкә кәрәк ине лә баһа! Әйтәйек, Тимербай ағаһы хаҡында... Уның еҙ ҡурайы, кескәй ағас ҡумтаһы эсенән табылған Ленин портреты хаҡында һөйләмәксе ине бит ул. Эйе, төрлө-•төрлө тары бөртөктәренән теҙеп яһалған ғәжәп үҙенсәлекле портрет... Биттен, яҡтылыҡ төшкән яғын һары тары бөртөктәренән, күләгә төшкән яғын ҡыҙғылт тары, ҡараңғы яғын ҡара тары бөртөктәренән, һаҡал, сәс ерән тарынан... Төҫтәрҙе иҫ киткес тура килтереп эшләгән уны Тимербай ағай. Ҡумтала ниндәйҙер газетанан ҡырҡып алынған Ленин һүрәте лә бар ине. Ленин ҡайҙалыр алыҫҡа, күрәһең, ҡояшҡа күҙ ташлап ултырған... Иҫ киткес оҡшашлыҡ! Йә, әйтегеҙ, бығаса кем, ниндәй ху-



дожник, ябай тары бөртөктәрен теҙеп, шундай теп-тере, иҫ киткес оҡшаш портрет тыуҙыра алған?! Ошоларҙың бөтәһе хаҡында ла Хаммат ағаһына һөйләргә йыйынып йөрөй ине лә баһа ул!

Ә һуң шул ҡумтанан ағасты көйҙөрөп эшләнгән автопортрет та табылыу, унда Тимербай ағайҙың тап үҙенә хас һыҙаттар бик оҫта сағылыуы хаҡында кинәнеп, ҡыуанып һөйләгеһе килмәй инеме ни уның?! Бына бит ваштһыҙ һәләк булған шундай ғәжәп талант эйәһе хаҡын\а бергәләп иҫкә алып һөйләшеп тә булманы...

Ә һуң Закир хаҡында үҙе белгән дөрөҫләктө уға әллә ҡасан әйтергә тейеш түгел инеме ни Иштуған? Хаммат бит мырҙаһы өсөн нисек ҡайыша ине... Петроградҡа килеп тәү осрашҡан көндө тик Закир хаҡында ғына һөйләгәйне кеүек...

— Партизан отряды ойошторop, Урал төпкөлөндә ятҡан төндәрҙә аҙыҡ-түлек алып Хисбулла менән Хәлим ағай килгеләп китә ине. Ә ул, Закир, бер ҙә килмәне. Әсәйҙе ташлап китә алмай, тинеләр. Әллә ысынды, *әллә* бушты... Үҙем, Хәбир батыр кененә ҡалып ҡуймайым тип тә, ғаиләнен. ҡайғыһын яңыртмайым тип тә, ҡайтып йөрөй алманым... Унан ҡыҙыл армия сафына ҡушылып киттек...— тип һөйләгәйне, шикелле...

Эйе-эйе, Закирҙы үҙе менән бергә алып китмәүе өсөн бик ҡаты үкенеп һөйләгәйне:

— Әгәр мин уны күҙ уңымдан ебәрмәһәм, унан бынамын тигән һуғышсы, ҡыҙыл командир сығыр ине... Ә кәҙер белмәйем инде... Беҙҙен. Башҡортостанда был йыл1арҙа ваҡиғалар бик ҡуйырҙы, ҡатмарланды... Әсәйем1ең был йәше еткән сабыйы ҡаушап, юғалып ҡалмаһа, ^нылыш юлға инеп китмәһә ярар ине, тип ҡурҡам,— тигәйне... Ә ул, Иштуған, уны, Закирҙы, һуңғы тапҡыр ҡай}а, ниндәй шартта осратыуын, нисек атып йығыуын тупгура әйтеп бирергә үҙендә күрәһең көс тапманы... һаман <исектерҙе, унай ваҡытты көттө... Аһ, ҡурҡаҡ, ҡурҡаҡ!.. ">ына, ҡыуан инде, уңай ваҡыты килеп етте!.. Ә бит ул, Саммат ағай, ҡурҡаҡтарҙы күрә алмай... Шулай булғас, кәҙер ҡалай итеп был хаҡта телең барып һүҙ ҡуҙғатыр-

Иштуған, өнһөҙ, аҙаплы кисерештән тамағына килеп ғығылған баяғы ҡаты төйөндө йота алмай, ирекһеҙҙән сәсәп ебәрҙе. Аҙаплы ауыр йоҡоға сумған Хаммат, һиҫкәнеп, күҙен асты. Янында Айһылыу менән Иштуғанды күргәс, нисектәр, танымаған, аңламаған һымаҡ булып Ҡарап ятты. Унан, ғәҙәтенсә, яғымлы итеп йылмайырға

тырышты. Ләкип йөҙөнә йылмайыу түгел, аҙаплы сирылыу ғына сыкты. Ул бик хәлһеҙ генә итеп:

— Шунан, мырҙа... һылыу, һөйләшеп бөттөкмө инде? — тип һораны.

Ахыр Иштуған да бер һүҙ тапты:

— Бөттөк шикелле, ағай...

— Килеп йөрөгөҙ...— тип шыбырланы Хаммат һәм шунда ук тағы ойоп, онотолоп китте.

Айһылыу менән Ишгуған аяҡ ослаи ҡына баҫырға тырышып, арттарына әйләнеп ҡарай-ҡарай, палатанан сыҡтылар. Дауалаусы врачтан унын. хәлен ҡат-ҡат һораштылар:

— Нисек, һауыгырмы? — тип, өмөт һәм өмөт^төҙлек араһында ҡалтырап, унан яуап квттеләр. Врач өсөн, күренеп тора, үлем дә, йәшәү ҙә янылыҡ түгел.

— Мина ярсыһы үпкәне тишеп сыҡкан, икенсе ярсыҡ күкрәк эсеыдә ҡалған. Ҡыҙыулығы бик көслө... Бик күп ҡан юғалтҡан... Әгәр тере ҡала икән, был мөғжизә булаcаҡ. Фәкәт унын баһадир һаулығына таянып ҡына өмөтлө һүҙ әйтеп була,— тип тыныс ҡына яуап бирҙе ул.

Йәштәр, врач алдыида үкһеп илап ебәреүҙән ҡуркып, ашыға-йүгерә лазареттан сыҡтылар. Ә ҡапка тышы яғында уларҙы таныш түгел ҡыҙыл армеец туктатты.

«Ай-һай, Петроградта беҙ ҡайһылай күбәйеп ' киттек әле!.. Хатта илап эс бушатып алыр аулаҡ урыи да табып булмай башланы!..»— тип әллә көнөнөп, әллә һөйөнөи уйлап алды Иштуған. һалдаттын, сәләменә хатта йүнләп яуап та ҡайтара алмаҒны. Ә унын, күрәһең, быңдай һалҡынлыкка иғтибар итер хәле юҡ ине. Тәрән ҡайғылы, бошонҡо тауыш менән:

— һеҙ, моғайын, Хаммат агай янында булғанһығыҙҙыр?.. Унын. хәле нисек? — тип ҡабаланып һорай һалды.— Бик үк ҡурҡыныслы түгелме яраһы, тип белешмәкее инем дә...

Иштуған һаман, был кешегә унан нәмә кәрәк булыуына төшөнә алмағандай, аптырап текләп торҙо. Унын. ҡаршыһында ғәжәп киң яурынлы, дәү, мыкты кәүҙәле, ҙур ҡара мыйыҡлы, ҡушылып үҫкән киц ҡара ҡашлы, оялсан, хатта балаларса ҡыйыуһыҙ түңәрәк күҙле ят һалдат баҫып тора ине.

— һин, ағай, Хаммат ағайҙын, берәй туған тейеш кешеһеме әллә? — тип, көләмһөрәп ҡуйҙы хәҙер Иштуған.— Шундай ук бәһлеүән... Хатта яурынга еллерәк тәһең шикелле...

— Юҡ. Туғаны түгел. Яҡташы,— тине һалдат.— Бына, яраланғанын ишеткәс, командирҙан рөхсәт алып, хәл



элешергә килгәйнем дә... Индермәнеләр... Янында кешетәр бар... Бегөнгә етәр, бик арып китер... Хәле ауыр, гинеләр... Әле күрәм, һеҙ сығып киләһегеҙ. Моғайын, ^ның янында булғанһығыҙҙыр? Хәле нисек һуң, һауығырчыҡмы?..

һалдаттыц йөҙөндә лә, һүҙендә лә ҡаты бошоноу һи^елә ине. Улар йәнәш атлап киттеләр. һалдат, ауыр ғына көрһөнөп, тағы хафаланып һүҙ башланы:

— Тере ҡалһа ярар ине... Юҡһа, Таиба инәйгә бик ауыр булыр... Бер юлы бөркөттәй ике улды ерләүе, ай1ай... Алла яҙмаһын... Ул яңғыҙ үҙе үҫтерҙе бит уларҙы... \.тайҙан улар бик кескәй ҡалғандар... Эйе, шундай ҡеүәт-

өс бөркөттө үҫтереп, ҡанатландырып осороп ебәреүе <атын кешегә еңел булмағандыр ул... Уға, янғыҙына, яҡш күңелле, изгелекле әсәй ҙә, талапсан атай ҙа булырға, иң мөһиме — оло бөркөт йөрәкле кеше булырға ла кәрәк булғандыр бит...— тип дауам итте һалдат.— Эйе, гап шулай, бөркет йөрәкле әсә генә тәрбиәләп үҫтерә ала [тдай уландарҙы!..

Иштуған һалдаттың һәр һүҙен үҙ баҡсаһына атылған [•аш итеп ҡабул итте: «Күрәһең, Закирҙы мин атып йыксанды бепәлер... Шул хаҡта Хаммат ағайға әйтергә булһандыр... Ә мин... Их-х... Ошоғаса шуны әйтмәй йөрөнөм рит... Хәҙер мин Хаммат ағай ҡаршыһында кем булып <алам инде?! Их ҡуркаҡ, ҡуркаҡ!..» — тип эстән тағы Ь-үҙен өҙгөләргә кереште. Ә һалдат баяғыса, унын, хәренә һис тә иғтибар итмәй, ҡайғылы тауыш менән үҙ һу|ен һөйләй бирҙе.— Ә бит унын ҡустыһы, Закирҙы әйгәм, ерле-юкка һәләк булды бит... һай-й, ҡандай егет ^еше ине бит, ә?.. Арыҫлан ине. Ысын арыҫлан ир ине... 1уғыштыц иң ҡыҙыу урынында ҡайнар, ин. тәү утка үҙ 1үкрәгеп ҡуйыр... Белмәйем, нисек иҫән-һау сығыр ине...

1уля уны ситләп үтер, ҡылыс кәйелеп китер ине унан...

быңа ерле-юкка һәләк булды... Үҙ-үҙен һәләк итте лә |суйҙы... Бар, һөйләш һин унын менән...

— Нисек үҙ-үҙен? — тип хатта ҡысҡырып уҡ ебәрҙе хәҙер Иштуған.— Ҡасан, ҡайҙа? Ағай, һин ысынды һөйләйһеңме, буштымы?..— тип сабырһыҙланып китте.

һалдат Иштуғандың был сабырһыҙлығын, кешенек үҙ-үҙен үлтереүгә барып етеүенә ышанмауы, йәки аптырауы тип аңланы, күрәһең. һаман баяғыса бошонҡо, уйсан тауыш менән хикәйәһен дауам итте.

— Әлбиттә, ул ахмаҡлыҡ эшләне... Аңламайым, йә, бынын. менән нимәгә ирешге инде ул?.. Кемгә насарлыҡ эшләне... Тураһын ғына әйткәндә, ниндәйҙер бер Илсеғол ауылынан сыҡкан зимак ғүмеренең кемгә кәрәге •

бар? Шулай уҡ уның үлеме кемде ҡайғыртыр?.. Шундай аҡыллы, уҡымышлы егет, шундай аҡылһыҙлыҡ эшләүенә һис тә төшөнә алмайым мин...

Был яңы хәбәрҙән бөтөнләй аптырап ҡалған Иштуғанға, көтмәгәндә, Айһылыу үҙ һорауы менән ярҙамға килде.

— Закир ағайҙы теге ваҡытта блюхерсылар Ҡариҙелде аша сыҡкан саҡтағы һуғышта үлеп ҡалған тинеләр, шикелле? Ул аҡтар яғында булған тиҙәр...

— Буш һүҙ. Ул саҡта уның, атын ғына үлтерҙеләр,— тип ҡуйҙы һалдат, ҡәнәғәт тауыш менән.— Әйттем бит, уға пуля теймәй ине... Ул бит герман һуғышынан да бер генә ере лә сыйылмай ҡайтып килгәйне... Күкрәгенә ике тимер тәре ордены тағып бит әле...— һалдат тағы ҡәнәғәт йылмайып алды — Әйтәм бит, арыҫлан егет ине... Ҡаһарман...

Иштуған һалдаттың, елгә елһенгән ҡеүәтле йөҙөнә иғтибар менән оҙаҡ итеп ҡарап алды:

— Йә, ағай, һөйләп бөт әле,— тип түҙемһеҙләнеп киткәндәй булды.— Артабан нисек булды?

Иштуғандың тауышында ниндәйҙер күңел күтәренкелеге. ҡыуаныс һымаҡ өндәр ишетелә ине хәҙер:

«Тимәк, Закирҙы ул үлтермәгән!.. Ул ҡурҡаҡ йән түгел!.. Хаммат ағай менән Таиба инәй ҡаршыһында ул ғәйепле түгел!.. Шулай ҙа нисек булып барып сыҡты һуң был?..»

— Ул саҡта Закирҙың аты ғына үлде,— тип, тағы ҡабаланмай ғына артабан һөйләп китте һалдат.— Әммә егет башы һау булһа, ат табылмаймы ни?! Табылды. Ул шунда уҡ тағы ла шәберәк атты эйәрләп алды. Уйнаҡлап торған ҡара юрғаны ауыҙлыҡланы! — тип, хатта һоҡланып ҡуйҙы һалдат.

— Аты, ысынлап та, бәлки шәп булғандыр ҙа бит...— тип, хәҙер инде тамам тыныс тауыш менән уны бүлдерҙе Иштуған.— Бына ул аҡтар яғында тороп һуғышҡан... Быныһы инде шәп түгел. Тимәк, ул беҙгә ҡаршы һуғышҡан... Совет власына ҡаршы... Үҙ ағаһына, большевик Хамматҡа ҡаршы... Батша генералдарына хеҙмәт иткән... Бына бит нимәһе насар, ағай. һин быны аңлайһыңмы, ағай?!.

Иштуған туҡтап, бер аҙ уйланып алғас:

— Мин ышанам, ундай улы өсөн Таиба инәй ҙә бик уҡ ҡайғырмаҫ,— тип ҡуйҙы.

һалдат ғәжәпһенеүҙән хатта барыр еренән туҡтап ҡалды. Сөнки ул үлгән кеше хаҡында, уның кем, ниндәй кеше булыуына ҡарамаҫтан, ихтирамһыҙ һөйләшеүгә күнекмәгәйне. «Үлем кешенең бөтә ғәйебен юя. Бер кем дә уның хаҡында насарлыҡ менән иҫкә алырға тейеш түгел», тип тәрбиәләнгәйне ул. Шуға күрә, уның фекеренсә, батыр һалдат, яҡшы кеше булған Закир хаҡында Иштуғандың ихтирамһыҙ һөйләшеүе уға түҙеп тормаҫлыҡ ауыр тойолдо. һәм ул һөйләшеү темаһын йәһәтерәк үҙгәртергә ашыҡты:

— һеҙ, туғандар, миңә Хаммат ағайҙын. хәле хаҡын да һөйләйһегеҙме, юҡмы? Нисек әле уның хәле? һауығырлыҡмы?

Айһылыу лазаретта үҙҙәре күргән, ишеткәнде уға ҡыҫҡаса һөйләп бирҙе. һалдат тауыш-тынһыҙ тыңланы ла оҙаҡ уйланып барҙы. Унан, әҙерәк үпкәләгән дә, аптыраған да һымаҡ итеп, Иштуғанға ҡарап алды Ахырҙа ауыр ғына көрһөнөп:

— Ҡарап торам да, һин, мырҙа, бик бер яҡлыраҡ ҡарай торған кеше икәнһең,— тип ҡуйҙы.— Ундай улы өсөн әсәһе лә көйөнмәҫ, тип ебәрәһең бит, ә? Нисек шулай әйтергә телең бара? Аңламайым,— тип аптыранып, баш сайҡап барҙы, ахыры үҙе лә анғармаҫтан, тағы Закирға күсеп китте.— Кеше хаталанмай булырмы?! Хаҡ юлды тапҡансы ниндәй ауыр һынауҙар, эҙләнеүҙәр үтмәй кеше! Бигерәк тә ошондай ауыр, ҡатмарлы заманда, ә?! Ә һин уны, ыҙаланып, эҙләнеп, әлегә хаҡ юлды таба алмай аптыранып йөрөгән кешене, яңылыш юлда йөрөйһөң тиген дә ат та үлтер, имеш. Ошомо кешелеклелек, һинеңсә?! Юҡ, мырҙа, ғәҙел ҡараш түгел икәнһең һин..

Иштуған кеше һәм уның тормошо хаҡында уй йөрөтөргә яратҡанға оҡшаған был ят һалдатҡа оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ҡарап барғас:

— һинеңсә, ағай, бынауы юденичсыларҙы ла ғәйепләмәҫкә, үлтермәҫкә кәрәк булғандыр, ә? Улар ҙа, бәлки, яңылышып ҡына, аңламау арҡаһында Петроградҡа һөжүм иткәндәрҙер, ә? — тип һорап ҡуйҙы.— Улар беҙҙең өҫкә ут яуҙырып торғанда, беҙгә һөйләп, аңлатып торорға ғына кәрәктер, бәлки; ә?— Иштуған күңелле ҡыскырып келөп ебәрҙе.— Был, һинеңсә ғәҙеллек, кешелеклелек булыр ине, ә, ағай!

һалдат та йылмаймай булдыра алманы. Ләкин шунда уҡ ҡырҡа баш сайҡап ҡуйҙы:

— Юҡ, мырҙа, һин улаи, тура һорауҙы ҡырынға һаплама әле. Мин бит бай балалары йәки аҡ офицерҙар хаҡында һүҙ алып бармайым даһа! Уларҙы мин үҙем дә етерлек туҡманым... Беләбеҙ уларҙы... Мин Закир кеүектәр хаҡында әйтәм. Закир кеүек ярлы балаларының да, дөрөҫ юл таба алмай интегеп, тегеләй-былай ҡағылып

йөрөгәндәре етерлек... Революциянан һуң, яҙғы ләйсән-дән аҙаҡ күтәрелгән күк үлән шикелле, халыҡ өсөн, хаҡлыҡ, азатлыҡ өсөн көрәшкә тип, гөрләп күтәрелеп сыҡтылар бит улар. Әммә, тормош бит ул. Тормошта бөтәһе лә шып-шыма ғына бармай ҙа ул. Быларҙын да алдында таҫма шнкелле таҡыр юл ятмай нне шул... Киреһенсә, ел, дауыл, буран ҡотора ине. Әкиәттәге кеүек, ете юл сатында, «һулға китһәң, уңырһын, унга китһән, туныһын» тигән яҙыу ҙа тормай ине... Бар, һин анһат ҡына табып ҡара тура юлды!.. Шулай түгелмс, йә?

һалдат Иштуғанга тағы бер һынап карап алды ла, һаман баяғыса, ҡысҡырып уйлаган һымаҡ итеп, ашыҡмай ғына һөйләп китте.

— Уйлап ҡара, туған, эйтэйек, кеше ғүмер-ғүмер күсмә тормошта йәшәгән, ҡышын арлы-бнрле геиә һупалап ҡоролған кескәй өйҙәрҙән торған ыҙмала, йәйен йойләүҙә... Малы ҡайҙа туҡлана, ул үҙе лә шунда туҡ. Малы ла, үҙе лә үлән, еләк, емеш ашай, тау шишмәһенән һыу эсә... Бер ерҙә үлон бөтһә, икенсе урынға күсә... Икмок хаҡында күп уйлап тормай... Уны туйғансы ашарга өйрәнмогән. Йте, һөтө, ҡатығы, ҡорото бар икән — ҡәнәгәт. Хәйер, быны ниңә һөйләп торорга, үҙең дә беләһсң. Шуныһы асыҡ: быга хәтле беҙ бер нәмә хакында ла артыҡ баш ватып, уйлап, ацлап торорга күнекмәгәнбеҙ. Дөрөҫөрәге, ҡасандыр, борон замандарҙа уйлаганбыҙ ҙа, көрәшкәнбеҙ ҙә... Аҙаҡ онотканбыҙ... Онотторғандар...

Бына шулай ғүмере буйы бурһыҡ шикелле урман төбөндо яткан бер кешене өнөнән тартып сығар ҙа:

— һин, ҡустым, ҡайһы яҡлы, кем якль? — тии һора инде. Ул ни ойтә алһын?! Нимә белгән, ннмә ишеткән ул быгаса? Кем уны аңга-тунға тарткан? Кем уны ҡатмарлы тормош мәсьоләләре хаҡында уйларға өйрәткән?! Бигерәк тә был заманда, тормоштон, ваҡигаларҙың артынан кеше түгел, йүгереп болан.да ҡыуып етерлек түгел саҡта... :

Мин шулай уйлайым: аҙашҡан ярлы-ялтшны гәйепләүҙән алда, уларҙың хәленә төшөнөргә тырышыу, кәрәк икән ярҙам ҡулы һуҙыу яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән?!. Ә һин Закир өсөн әсәһе лә хатта иламаҫ тиһеһ.-.-

һалдат оҙаҡ тынып ҡалды. Иштуган да бүтән һүҙ әйтмәне. Тик Айһылыу ғына был гәҙәти булмаған әнгәмәсегә шаян йылмайып ҡараштырып алды:

— Ҡара һин уны!.. Беҙҙең ағай һәләк тә уйлаусан • кеше икән дәһә!

— Уйлаусаи шул,— тип, тыйнаҡ ҡына йылмайып алды һалдат.— Форсат булганда, бик күп уйлайым мин хә-



ҙер. Етәр, быға са, уйһыҙ-моңһоҙ йәшәп, ғүмерҙе елгә елгәргәнбеҙ. Байҙар, муллалар, старшиналар беҙҙе бер -нәмә хаҡында ла баш ватмаҫҡа, үҙҙәренә һүҙһеҙ баш эйергә, тыңлаулы булырға өйрәтеп бөткәндәр инде... Үткәнде һағынып уйланырға йәки теге донъя хаҡында ғына ҡайғыртырға хаҡлы инек беҙ... Алла һаҡлаһын, бөгөнгә йәки киләсәк тормош хаҡында уй йөретергә ҡыйыулыҡ итергә мөмкин инеме һуң?!

Хәҙер революция. Хәҙер беҙҙә лә, элекке күсмә халыктарҙа ла, уйларға, фекер йөрөтергә, әйләнәлә булып яткан хәлдәргә төшөнергә тырышыу теләге уяна башланы... Әммә был, аңлайһыңмы, ҡарындаш, бик үк еңел бирелмәй беҙгә...

Шулай ҙа беҙҙең халыҡ, элек-электән ирек яулап батша-байҙарға ҡаршы көрәшеп йәшәгән халыҡ булғанғамы, революцияны ин ҡыуанып ҡаршылаусыларҙың береһе булды бит. Батшалыктың ҡолатылыуы — уның быуаттар буйы йәшәп килгән изге теләгенен үтәлеше ине бит! Фронтта ла, ауылдарҙа ла был көн — оло байрам булды беҙгә лә... Шунан, ҡәһәр һуғып, әллә ҡайҙан бынауы аҡтары килеп сыкты... Байҙары... күтәрелеп торҙо.

— Шунан, һеҙҙен дә ҡайһы берҙәрегеҙ, уларға эйәреп, күҫәк күтәреп сығып киттегеҙ, ә,— тип көләмһөрәп ҡуйҙы Иштуған.— Тик Совет власы ғына азатлыҡтыц ысын һаҡсыһы, иҙелгән, кәмһетелгәндәрҙең яҡсыһы икәнен оноттоғоҙ. Милләтселәр ҡармағына ҡаптығыҙ, эйе?..

— Ул хатаны хәҙер мин үҙем дә анлайым... Ул саҡта был эштен, ҡалай килеп сығыуын тим дә...— һалдат оҙаҡ ҡына уйланып барҙы. Унан тагы йәнләнеп һөйләп китте.— Мин үҙем Ирмән ауылыныҡы. Бәлки, беләһен,-дер ҙә... Тау-урман төпкөлөндә яткан бәләкәс кенә бер ауыл шунда... Тауыҡ кетәгендәй егермеләгән өйҙән тора. Сәсәйем тиһә — сиҙәме юҡ, сабайым тиһә — туғайы юҡ, мал йөрөтәйем тиһә — далаһы юҡ... Хатта ҡыш көндәрендә инеп-сығыр юлы ла юҡ. Салауат болаһынан һун,, еренһыуын ташлап, ҡасып ҡотолған бер ырыу ҡалдығы йәшәй шунда... Әйтәм бит, тау ҡыҫығына ҡыҫылып, үлеп бөтөп барған бер ауыл шунда... Урман ҡыркып, күмер үртәп, арба-сана яһап көн иткән була халы"к. Унын. өйөндә ботлап түгел, ҡаҙаҡлап та он булмаған саҡ күп була... Хәйер, ниməһен һөйләп торорға? Һеҙҙең Оло Эйек буйындағы башҡорт ауылдары шулай түгелме ни...

Батша-баярҙар власы бөтә ярлы-ялпыны шул хәлгә ҡалдырған бит инде... Шулай булғас, революцияны башҡорт хеҙмәтсәне нисек ҡыуанып ҡаршыламаһын да, нисек азатлыҡ есен яуға күтәрелеп китмәһен?!.

Иштуған халыкта һөйләшеү барышында өлкән кешенен, һүҙен кесе кешенен. бүлдереүе әҙәпһеҙлек иҫәпләнеүен белһә лә:

— һин, ағай, һүҙҙе бик алыҫтан уралтып алып киттец түгелме? — тип йомшаҡ ҡына иҫкәртте. Беҙҙең увольнение сроктары ул хәтле түгел бит әле...

— Закир ағай хаҡында йәһәтерәк белге килә ине шул...— тип Айһылыу ҙа түҙемһеҙләнде,— ҡайҙа, ҡасан үлеп ҡалды икән һуң ул? — һалдат, уларҙын, иҫкәртеүен • ишетмәгән һымаҡ, һаман үҙенең ашыҡмай, яҙлыҡмай ҡысҡырып уйлауын дауам итте:

— Шунан һис тә көтөлмәгән бик ауыр хәл килеп тыуҙы... Ер мәсьәләһендә, тим, ысын, әлеге шул үлергә* йөҙ тотҡан башҡорт ғәйепле булды ла ҡуйҙы ла баһа! Башҡорт быҒаса ер хужаһы булған. Ә Совет власы ерҙе хужанан тартып алырға ҡушҡан, тип ацланы урындағы күптәр. Бына ҡыҫыу, атыу, үлтереү башланды. Ат менеп сапһаң — бандит! (Үҙең беләһец, беҙҙең, халыкта ирҙәр алтмыш йәшкәсә арбаға ултырыуҙы ғәрлек һанай. һыбай йөрөргә тырыша...) Өйҙә ултырһан,, йәшенеп ята — контр. Мал ҡыуып ҡырҙа йөрөһән, — ҡасаҡ... Ат та йыҡ, ат та йыҡ. Бер кем дә яуап бирмәй... Аптыраш, илаш-һыҡташ китте...

Нимә эшләргә? Ҡайҙа барырға? Кемгә ышанырға?! Беҙҙең азатлыҡ шатлығын шулай аяуһыҙ тартып алыу һәйбәт булдымы ни... Эй туған, һин белһән, ине.. Нисек тә ауыр булды был хәл... Был минең фронттан ғына ҡайтып төшкән саҡ ине. Батша ҡолатылғанға, революция булғанға сабый шикелле яҡты ҡыуаныс менән ҡанатланып ҡайтҡан саҡ...

— Был бит урындағы кудактарҙын, эше булған. Кулак балалары башҡорт хеҙмәтсән халҡынын. ерен талаптартып алыр өсөн алдашып ҡыҙыл гвардия сафына яҙылып ҡорал алғандар ҙа, әйҙә халыкты ата-киҫә башлағандар... Уларҙын. күбеһен Совет власы хөкем итте... Атылды ул бандиттар! Юлбашсыбыҙ Ленин үҙе уларҙы ҡаты ғәйепләне... Был хаҡта Хаммат ағай асыҡлап һөйләп биргәйне миңә.. Ул саҡта мин ауылдан алыҫта булғас, был хәлдәрҙе белмәгәйнем... Бәлки, был ҡанһыҙлыҡты эшләүселәр араһында Лениндың ер тураһындағы декретын хата аңлап эш иткән крәҫтиәндәр ҙә булғандыр. Шундай оло, яңы эштә хаталар булыуы бик ихтимал инде ул... Әммә революцияны ундай хаталарға ҡарап баһалайҙармы ни?! Их һин, ағай?..— Иштуған ауыр ғына керһенеп ҡуйҙы.— Күләгә төшкән яҡты ғына күрергә ярамай ҙа баһа!..



— Мин быны хәҙер үҙем дә авдайым,— тип ҡабатланы һалдат.— Тик мин һиңә, бына нилектән бигерәк тә беҙҙен. ҡайһы бер егеттәребеҙ тура юлдан тайпылып китгеләр, тип тағы бер аңлатыу өсөн генә һөйләй инем быларҙы...

Етмәһә, тап шундай мәлдә, беҙҙең яҡҡа Ырымбурҙан аҡ казактар отряды килеп сыҡты.

— Башҡорттар, ер-һыуығыҙҙан ҡолаҡ ҡаҡҡығыҙ килмәһә, беҙгә ҡушылығыҙ! — тигән оран ташланылар.— Шунан үҙебеҙҙен байҙар, муллалар, уларҙың оранын күтәреп алып, ҡатнашып китте.

— Казактар беҙҙең ут күршеләр. Улар беҙҙе үлтермәй, таламай... Улар беҙҙең менән туғанлашырға, беҙҙен, ер-һыуҙы һаҡларға, азатлығыбыҙҙы яҡларға теләйҙәр! — тип бөтә ерҙә һөрән һалырға керештеләр.

Етмәһә, шул саҡ дутовсылар мобилизация иғлан итеп тә ебәрҙеләр. Мин дә шул мобилизацияға эләктем. Ярай, тим, ҡайҙа үлһәң дә бер түгелме ни? Бында әсәң күҙ алдында атып йығырҙар. Ә унда, исмаһам, ул күрмәҫ... Шулай итеп былай ҙа ас-яланғас ғаиләмде, күп һыҡтаған әсәмде тағы әсе яҙмыш ҡосағына ырғытып, мылтыҡ күтәреп сығып киттем мин дә...

— Шунан ни булды?

— Ни булһын — аҡтар башҡорттарҙан бер полк төҙөнөләр. һалдаттарҙын, күбеһе мобилизация менән йыйылған булыуға ҡарамаҫтан, уны «Ирекле полк» тип атанылар... Бына шул полкта мин Закир менән тәү тапҡыр осраштым... Ул полк командиры итеп тәғәйенләнгәйне...

— Шунан, ағай? — тип сабырһыҙ ҡыҙыҡһынып китте Иштуған.— Артабан ни булды?

— Артабан ни булды, тиһеңме? — тип бошоноп ҡына ҡабатлап һорап ҡуйҙы һалдат.— Нимә булһын — үкенеү, бошоноу, өмөтһөҙләнеү... Хатта үҙ ирке менән полкка яҙылған әҙ-мәҙ ярһыу баштар ҙа аҡтарға беҙҙең ни өсөн кәрәк булғаныбыҙҙы бик тиҙ төшөнөп алдылар... Быны һөйләп тороуҙың да кәрәге юҡ инде... Ысынлап та, батша офицерҙарынан, батша генералдарынан иҙелгән халыҡтарҙын, зарын анлауҙы, уларҙан ниндәйҙер яҡлау табыуҙы өмөт итеү — үҙе бер ҙур ахмаҡлыҡ түгелме ни?!

— Шунан?

— Шунан ни, беҙ бер аҙ ваҡыт аҡтар яғында ҡағылып-һуғылып йөрөнөк...— тип бошоноп хәбәр итте ул.— Блюхер отряды күпер һалып Ҡариҙелде сыҡҡан мәлде, беҙҙең полк йылғаны йөҙөп сығып, уларҙын сигенеү юлын быуырға бойороҡ алды. Әгәр был эш уңышлы сыҡһа,

аҡтарҙың бөтә армияһы йылға аша сығып, партизандарҙы артабан эҙәрләмәксе ине...

— Һеҙҙе удар көс итеп файҙаландылар, ә? — тип көйөнөп китте Иштуған.— Закир ағай шул этлеккә барҙы тиген, ә?!.

— Ә беҙ йылғаны аша сыҡтыҡ та Өфө янында ҡыҙылдарға барып ҡушылдыҡ,— тип инде тамам ҡәнәғәт тауыш менән хәбәр итте һалдат. Киң яурындары күтәрелеп, еңел һулап алды.— Өфөнө аҡ чехтарҙан ҡотҡарыуҙа ҡатнаштыҡ.

— Закир нисек?

— Нисек булһын? Полкты бит ул үҙе алып сыҡты. Сөнкп был ваҡытка күпселек һалдаттар ғына түгел, Закир үҙе лә, күрәһең, ғәҙеллекте тик ҡыҙылдар яғында ғына табырға мөмкин икәнлегенә тамам төшөнөп еткәйне шикелле инде...

— Бына нисек... Ҡыҙыҡ... Бик ҡыҙыҡ...— тип уйланып барҙы Иштуған Шулай ҙа быньң ғәмәлдә ҡалай барып сығыуын асығыраҡ белгеһе килә ине...

— Эйе...— тип һуҙып һалдат һүҙенең осон юғалтҡандай оҙаҡ ҡына тынып барҙы. Унан ҡапыл, ҡыуаныслы яҡтырып, Иштуғандың күҙенә төбәп ҡараны: — Бынауы Ғимрановты, военкомды әйтәм әле... Ну шәп тә егет һуң... Лй-һай, һәйбәт кеше лә үҙе!.. Бая трибунала нисегерәк һөйләп ебәрҙе, күрҙеңме?!

һалдат сикһеҙ ҡәнәғәт йылмайып алды.

— Бына ундай кеше менән югалмаҫҡа була!..

— һин, ағай, уны яҡындан беләһеңме ни? — тип ғәжәпләнде хәҙер Иштуған.— Ҡайҙан беләһең?!.

— Беҙҙең күҙҙе тәүләп асыусы, мырҙам, шул ул... Теге полкта...

— Юҡ, булмаҫ, ул да аҡтар яғында йөрөмәҫ...— тип ҡырт киҫте Иштуған.— һин, ағай, кем менәндер бутайһың уны!

— Нимәһе булмаһын ти?!—тине һалдат һис тә ап тырамай гына.— Тиф менән ауырып, ҡыҙылдар сигенгәндә иҫһеҙ ятып ҡалған. Шунан аҡтар мобилизацияһына эләккән. Ғәжәпме ни? Әммә ул аҡтарға хеҙмәт итмәне. Полкка килгән көндән беҙҙең. менән, йәғни һалдаттар менән дуҫлашып алды. Саҡ ҡына бушыраҡ саҡ булһа, беҙҙен менән һөйләшергә, аңлатырға керешер ине...

Иштуған үтә ҡыҙыҡһынып китте:

— Нимәләр хаҡында һөйләшә ине һуң ул һеҙҙең менән?

— Нимәләр хаҡында булһын? Хәҙерге заман кеше-



һен, бигерәк тә һалдатты ҡыҙыҡһындырған нәмәләр ха--кында инде...

— Шулай ҙа...

— Әйтәйек Ленин хаҡында... Революция хаҡында, азатлыҡ, халыҡтар дуҫлығы, эшсе синыфтың көрәше хакында мәғәнәле, аҡыллы, ышандырырлыҡ һүҙҙе беҙ иң тәү башлап унан ишеттек... Эйе, ул беҙҙең, иң һәйбәт остазыбыҙ булды... Беҙ, һалдаттар, уны ғүмер баҡый бергә торға,н, белгән-күргән кешебеҙ кеүек итеп яраттыҡ, хөрмәт иттек. Йылы ҡанат эҙләгән ҡаҙ бәпкәләре шикелле, унын янына укмаштыҡ... Әгәр уга осрамаһаҡ, кем белә, хәҙер беҙ ниндәй юлда булыр инек... Бына шулай әҙерләп, ҡыҙылдар яғыний алып сыҡты ул беҙҙе. Ҡариҙелде сыҡкас, парламентер булып үҙе китте...

— Быиа нисек... Ул да аҡтар яғында б.улғандыр тигэн уй башыма һис тә һыймай,— тине Иштуғаи, һаман ;птырап.— Ышаныуы ҡыйын.

— Ә ул ул яҡта булманы ла,— тип Иштуганды бүлсрҙе һалдат.— Ул беҙҙең өсөн, беҙҙә булды. Бәлки, ул еҙҙе аҡтар тырнагынан ҡотҡарыр өсөн, аҙашып йөрөгәндәргә юл күрһәтер өсөн дә баргандыр әле... Ә бының өсөп бары бер ай вакыты кнтте униц... Сөнки беҙ үҙебеҙ ҙә инде был ваҡытта аңды-тунды төшөнә, аҡтарҙың «изгелсҒен» елкәбеҙҙә татып аңлай башлаҒайныҡ бит инде...

һалдат ҡыуанысльт йылмайып ҡуйҙы.

— Гед-гел униц хаҡында, Ғимранов хаҡында ғына һөйләгем килеп тора. Белоһеңме, ул бит шул саҡта уҡ болыпевик булгаң икоп дәһә! Герман һуғышында, фронтта саҡта \к партияга ингән, белдецме?.. Унда ла һалдаттар араһында революиион эш алып баргап... Быиы минә униц бер фронтташ ипташе, унан өйрәнеп күҙен аскаи бер һалдат һөйләне. Улар унда ла бер полкта хеҙмәт иткәндәр.

— Ул, ти, беҙҙен кеүек ябай һалдат ине. Шулай ҙа офпцерҙар хатта унан ҡурҡалар ҙа, иҫәпләшәләр ҙә ине, ти. Сөнки һалдаттар араһында Ғимрановтың абруйы ҙур ине, ти.

— Унынын мин ишеткәйнем. Батыр һалдат булған. Ун дүртенсе йылда ук ҡыйыу большевик булған, тип...

һалдат уйсан ғына йылмайып ҡуйҙы:

— Ә үҙен хәҙрәт улы икән, тип һөйләйҙәр! Бына, аңла һин уны! Хәҙрәт улы, ә үҙе революцияға хәтле үк большевик булған!.. Ә һин әйтәһец... Бына, күрәһеңме, кешене кемдән тыуыуына ҡарап ҡына ла, йәки тормошта иинәйҙер бер хата эш эшләүенә ҡарап ҡына ла, яҡшыга, ямалға бүлеүе ҡыйын... Аңлайһыңмы, туған?!.

һалдат һүҙенең ошо ерендә ҡапыл туктап, башнялағы сәғәткә ҡараны ла йүгереп китеп тә барҙы.

Минең ваҡыт бөткән! Китәйем.

— Тукта әле, ағай, һин беҙгә Закирҙың ҡасан, ҡайҙа үлеп ҡалыуын һөйләмәнең бит әле! — тип ҡысҡырып ҡалды Иштуған.— һөйлә әле!

— Ағай, исемеңде әйтеп кит! — тип ҡысҡырҙы Айһылыу ҙа.— Исемең кем?

— Икенсе ваҡытта! — тип алыҫтан яуап бирҙе һалдат Икенсе осрашҡанға хәтле!

— Хуш, һау бул! — тип икеһе бергә ҡабатланылар йәштәр

Был көндөң иртәгеһенә башҡорт бригадаһын ял итте реү һәм ҡайтанан тулыландырыу өсөн Новгород губерна. һына, элекке Муравьевский казармаларына оҙаттылар.

Петроградтан китер алда Иштуған менән Айһылыу Хаммат янында тағы булдылар. Уның хәле һаман ауыр ине һаман шулай йөҙөндә аҡлы-ҡыҙыллы таптар уйнай, танау осондағы шаҙра бөртөктәрендә ҡайнар тир тамсылары йымылдай, тын алыуҙары йыш һәм ауыр.. Был юлы ла һөйләшеү бик ҡыҫҡа ғына булды.

^çгКитәһегеҙ икән,— тине Хаммат, уларға алмаш» тилмәш оҙаҡ ҡына ҡарап яткандан һуң.— Китәһегеҙ... Хәйерле юл...

Иштуған менән Айһылыу, үкһеп илап ебәреүҙән ҡурҡып, карауат янында һүҙһеҙ тапанып торҙолар.

— Мин дә өмет итәм әле,— тип өҫтәне хәҙер Хаммат "• Эйе, өмөт итәм...

Айһылыу, ҡыуанып, күтәреп алды:

— Беҙ ҙә өмөт итәбеҙ, ағай! һин һис шикһеҙ һауығасаҡһың, ағай!

— һис шикһеҙ,— тип раҫланы хәҙер Иштуған да, ҡанатланып.— Ағай, һин элеккесә һау, көслө булырһың!

һеҙ мине аңлап еткермәнегеҙ,— тип хәлһеҙ генә йылмайып ҡуйҙы Хаммат.— Аңлап еткермәнегеҙ.. Мин бит әле һеҙҙе ҡыуып етермен Беҙ әле бергәләп тағы һуғышырбыҙ.. тимәксе инем.. Бына шулай.. Йә, хуш һау булығыҙ, туғандар!..

Хаммат быға ысын ышана, өмвт итә инеме әллә йәштәрҙен, күңелен күтәрер өсөн генә әйттеме, уныһы билдәһеҙ, әммә был һүҙ Иштуғандарҙы ҡанатландырып ебәрҙе. Улар лазареттан аҡбуҙ атҡа атланған кеүек ҡыуанып сыҡтылар:



— Өмөт итә! — тине Айһылыу, ҡыуаныстан тыны бөтөп.— һауығыуҙы ғына түгел, тағы сафҡа ҡайтырға өмөт итә Хаммат ағайым... Аңлайһыңмы, Иштуған!?

— Эйе, өмөт итә,— тип ғорурлыҡ менән раҫланы Иштуған да.— Ғәжәп нәмә был өмөт тигән тойғо...— тип тәрән уйланып барҙы.— Кеше баҡтиһәң ин ауыр хәлдә лә яҡшыны, яҡтыны, изгене өмөт итә... Яҡты өмөт — кешенең йәшәү юлын алыҫтағы йондоҙ кеүек һәр саҡ алдан яҡтыртып бара икән... Мин әле ошонда, Хаммат ағай янында, уға ҡарап, ошоға төшөндөм...

Иштуған уйсан ғына көлөп алды: «Ысынлап та, һуғышҡа ингән саҡта кеше, үләм, тип барамы ни? Юҡ. Ул бит дошманды һис шикһеҙ ен,әм, бөтөрәм тигән яҡты өмөт һәм ышаныс менән инә!

Эйе, кеше бөтәһенән элек яҡшыға, яҡтыға булған тәрән өмөт, ышаныс менән йәшәй икән... һәр саҡ тормошҡа ашып ҡына тормаған яҡты өмөт...»

Айһылыу мут ҡына йылмайып алды:

— һәр саҡ тормошҡа ашып торған, тиген! — Хәтерендәме, беҙ ҡалай ауылдан ҡасып киткәйнек... Әхәт менән һин мине туйҙан уҡ «урлап» алып киткәйнегеҙ... Бөтә нәмәне алдан күреп торған ата-әсә күҙе алдынан, бөтә нәмә ҡулынан килә торған Собхан старшина, уның данлыҡлы, һылыу, ҡупшы улы һатыбалдын. ҡулы аҫтынан... Хәтерендәме, беҙ ул саҡта нимәгә өмөт итә инек? Ғәзеллек еңер, беҙ мөхәббәтебеҙҙе һаҡлап ҡалырбыҙ, тип өмөт итә инек бит! Беҙҙен был яҡты өмөт тормошҡа ашманымы ни? Хәҙер беҙ бәхетле түгелме ни?!

Иштуған ҡатынын биленән ҡыҫып ҡосаҡлап алды.

— һин аҡыллы кеше, бисәкәй. Еңелдем. һинең миҫалын, кире ҡаҡҡыһыҙ.

Айһылыу, уйсанлыҡҡа бирелеп, әкрен генә дауам итте:

— Эй-й, ул көндәргә күпме ваҡыт үтеп китте... Ниндәй йылдар... Революция башланған ғына йылдар ине бит... Ә беҙ һаман юлда... Бәхеткә, тулы бәхеткә барыу юлында... Ул юлдың йондоҙло түбәһенә бер саҡ менеп етә алырбыҙмы, юҡмы?.. Билдәһеҙ... Шулай... фәҡәт шул яҡты өмөт кенә кешегә тормоштоң бөтә булған ауырлыҡтарына түҙергә, мәкерле ҡанһыҙлыҡтарын еңергә көс бирә икән... Әйтәйек, хәҙер мин, бына тиҙҙән был ләғнәтле һуғыш туктар, беҙ ауылыбыҙға ҡайтырбыҙ, тигән өмөт менән йәшәйем... Хәҙер, революция булғас, унда бер кем дә ғәйепләй алмаҫ, ата-әсә хөкөмөнә ҡаршы килеүебеҙ, ҡасып китеүебеҙ өсен беҙҙән бер кем дә үс алмаҫ... Ғәзеллек кенә тантана итер... һинең менән беҙ икәү ҙә бәхетле,

яны тормошта йәшәрбеҙ... тим... Аңлайһыңмы һин мине, һөйөклөм?!

— Аңлайым, һылыуым. Мин дә был бәхетле көндөң тиҙҙән килеүенә ышанам!

Айһылыу ниндәйҙер моңһоу ғына йылмайыу менән иренә иркәләп ҡараны:

— Кем ышана, шул ирешә!

Иштуған да ҡатынына ғәжәп яратыу һәм тәрән хөрмәт менән оҙаҡ төбәлеп ҡараны. Әйтерһең, уны танымай ыҙаланды: үҙе урлап ҡасҡанда ул бөтөнләй былдай түгел ине лә баһа!.. Ысынлап та, тора-бара ул әле ҡалай ҙа үҙгәрер!.. Айһылыу бит бөтөнләй өр-яңынан тыуған кеүек тәһә хәҙер...

Һәм улар һәр ҡанһыһы үҙ алдына уйын дауам итеп, әкрен генә ары киттеләр.

## IX

Әле һаман мәктәпкә лә, мөғәллимәгә лә ылыға алмаған Емеш был көндө айырата ситһенеп, яҙ тыны һиҙелә башлаған ҡояшлы тышҡы тәҙрә үтә күҙ ташлап, моңайып ултырҙы, мөғәлимәнең күп һүҙен ишетмәне. Тик иң һуңғы дәрес кенә унын иғтибарын үҙенә ылыҡтыра алды. Сөнкм был ваҡытта Емеш яратҡан дорес, Сәхибә туташ әйткәнсә, матур яҙыу дәресе башланды. Был дәрестә мөғәллимә балаларға дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен генә түгел, ә матур яҙыу ҡағиҙәләрен дә өйрәтә ине. Әйтергә кәрәк, ул үҙе былай ҙа бик нәфис, семәркәй ғәрәп хәрефтәрен сиккән кеүек матур итеп яҙып ҡуя. Емеш күп ваҡыт уның таҡтаға яҙған һүҙҙәренең, мәғәнәһенә түгел, ә хәрефтәренең матурлығына иҫе китеп ҡарап ултыра ине.

«Матур яҙыу семәрләп-биҙәкләп шәл бәйләүҙән дә ауыр икән. Үҙе шәл бәйләү шикелле үк күңелле лә икән. Тик калай өйрәнергә инде уга? Бер ҙә генә ҡулым килешмәй ҙә ҡуя ла баһа!» — тип уйлана-уйлана, Емеш бөгөн дә мөгәллимәнең таҡтаға яҙыуын тын да алмай күҙәтеп ултырҙы.

Сәхибә туташ матур яҙыу өсөн кәрәкле һөйләмдәрҙе һәр саҡ үҙенең ҡасандыр Бағбостан ханым мәктәбендә уҡыған сағында яҙған дәфтәренән һайлап ала. Улар Емеш өсөи ят, аңлайышһыҙ һымаҡ тойолһалар ҙа, Сәхибә туташ есөн иң ҡәҙерле һәм иң дөрөҫ тормош фәлсәфәһе булып хеҙмәт итәләр ине. Бөгөн дә ул шундай һөйләмдәрҙең береһен асыҡ һәм һәйбәт итеп ҡара таҡтага яҙып ҡуйҙы:

«Надан халыҡ — ҡара сарыҡ!»

Һөйләмде балаларҙан ҡат-ҡат уҡытып сыҡты. Унан ашыкмай, матурлап, бер бит тулғансы күсереп яҙырға ҡушты. Балалар дәррәү эшкә кереште. Матур яҙыу дәресе Емешкә генә түгел, башҡа уҡыусыларға ла оҡшаи ине. Балалар танау тарта-тарта яҙыу яҙған арала, Сәхибә туташ, күрәһен, әҙерәк ял итеп алырға теләп, ҡара таҡта артына сығып, тәҙрә үтә тышҡа ҡарап торҙо. Бына бик ауыр йөк тартҡандай мышнай-мышнай, ҡәләм осона төкөрә-төкөрә, Емеш бөтәһенән алда дәфтәр битен тултырып яҙып бөттө. Унан, үҙенең кәкре-бөкрө хәреф тәренә ҡарап, эсе бошоп ултырҙы. Етмәһә, был тырышып-тырмашып яҙған һөйләм дә оҡшамай ине уға. Тап Емештең күҙенә төртөп: «Надан халыҡ — ҡара сарыҡ»,— тип мыҫҡыл итеп торған һымаҡ ине.

«Башҡа матурыраҡ һейләмдәре юҡмы икән ни?» — тип уйланы Емеш. Шул саҡ уның күҙе үҙенен. алдында ғына — өҫтәлдә ятҡан дәфтәргә төштө. «Мөгәллимәнең дәфтәре! Тукта, алып ҡарайым әле. Матур һөйләм булһа, бәлки мин матурыраҡ та яҙыр инем әле...»

Емеш башта тәҙрә яғына күҙ ташлап алды. Уҡытыусынын. иғтибары был яҡта түгеллеген күргәс, тиҙ генә дәфтәргә һонолдо. Тәүге битте асыу менән, үтә матурлап, ҡат-ҡат яҙылган: «Мөғәллимә — тел бистәсе»,— тигән һөйләмгә осраны. Унан, аптырап, янында ултырган Шәүрәнән шыбырлап ҡына:

— Ҡара әле, әхирәт, «Мөғәллимә — тел бистәсе» нимәкәй тигән һүҙ була икән ул? — тип һораны.

Шәүрә лә мөғәллимәнен. дәфтәрсн алып һөйләмде ҡат-ҡат уҡып ҡараны. Бер аҙ уйлап алды. Унан бик белдекле булып:

— «Бистәсе» тигән һүҙ булмай. «Мискәселер»,— тине.— «Мөғәллимә — тел мискәсе» тигәнде яңылыш яҙғандыр ул, биғәләш!

Емеш пырхылдап көлөп ебәрҙе:

— Мискәсе! Һин үҙең бигәләш!

Сәхибә туташ, ҡыҙҙарҙын, ниҙер бышылдашыуын ишетеп, тиҙ ген.ә парта янына килде.

— Нимә һейләшәһегеҙ, аҡыллыҡайҙар?

Дәфтәрҙе урынына һалырға өлгөрә алмай ҡалған Емеш, оялыштан нимә тип әйтергә белмәй, ҡыҙарынып, тынып ҡалды. Тик Шәүрәнең генә, гәҙәтенсә, бер ҙә иҫе китмәне:

— «Мөғәллимә — тел бистәсе» нммәкәй тигән һүҙ була, тип һорайсы бынауы әхирәт. Ә мин уға, бистәсе түгелдер, мискәселер тиһәм, ышанмаған була,— тип шаян йылмайып яуап бирҙе.— Шулай биғәләш ул, Емеш әхирәт. Үҙе белмәй, үҙ һүҙен бирмәй,—- тип тә өҫтәп ҡуйҙы.

Мөғәллимәнең һутлы ҡалын ирендәре ҡалтырап китте. Шулай ҙа, тауышын күтәрмәй генә, өҙөп-өҙөп:

— Гөл-йе-меш,— тип өндәште.— Гөл-йе-меш аҡыллым, һин.. шулай... рехсәтһеҙ минең дәфтәремә моронондө тыҡтыңмы?! — тип һораны.— Оят түгелме һиңә, Гөлйемеш?! — тип, ғәйәт аптырап, күҙҙәрен шар асып, текләп торҙо.

Емешкә, ысынлап та, бик оят ине. Ул ғүмерендә тәү тапҡыр кешенен. әйберенә һорауһыҙ тотонғайны. Ул бер ни ҙә өндәшә алманы. Ғәйепле башын түбән эйҙе лә ҡыҙарынып-бүртенеп тик ултырҙы. Шул саҡ артҡы партанан Байрастың шаян тауышы ишетелде.

— Емеш, һин «тел бистәсе» тигән һүҙҙе белмәйһеңме ни? — • тип, бик бер ҡатлы тауыш менән өндәште ул.— «Мөғәллимә — ләпелдәк була» тигән һүҙ була бит ул! Шулай бит, Сәхибә апай?

Сәхибә туташ, инде бындай ҡыйыулыҡҡа ни тип әйтергә белмәй, күҙҙәрен тағы ла ныҒыраҡ түңәрәкләндереп:

— Эй-й-й! — тип, бөтөнләй шаҡ ҡатып торҙо. Унан ғәжәп йәберһенгән тауыш менән: — Былай тәрбиәһеҙ ҡыланһағыҙ, мин һеҙҙе уҡыта алмайым! — тине лә, үсеккән һарыҡ бәрәсе шикелле, тып-тып баҫып мәктәптән сығып уҡ китте. Балалар көлөшә-ҡыуаныша һикерешеп торҙолар. Шәүрә, хатта ҡулдарын сәбәкәйләп:

— Малайҡайҙар, ҡыҙыҡайҙар, ҡайтабыҙ! Дәрес бөттө! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

Тамам юғалып, ни эшләргә белмәй урынында ҡатып ҡалған Емеш янына Байрас килде. Уның ҡалын сәс толомонан әҙ генә тотоп тартып, үҙенә ҡаратты.

— Гөл-йе-меш, аҡыллым, йә инде, мөғәллимәне ләпелдәк тип атау яраймы ни инде? — тип, хас Сәхибә туташтың үҙе булып һөйләшеп, шаяртырга кереште.— Ниңә шулай ҡыландың инде, тәрбиоһеҙ ҡыҙ бала?! Гөл-йемеш, һицә әйтәм, ярамай... ки-леш-мәй...

Шәүрә, һыны ҡатып, рәхәтләнеп көлдө.

— Ҡарағыҙ әле, ҡайһылай килештереп, мөғәллимә булып тәтелдәй, кәмит!

— Эй, тел мискәсе! — тип Байрас уны ла шаяртты.— һай, белдекле кеше! Тел мискәсе икән, ә?! «Мичкәсе» тип тә әйтә белмәгән башы менән кемде өйрәтә бит!..

Байрастың шаян ҡыланышы башҡаларға ла ирмәк тойолдо. Бетәһе лә көлдөләр. Әкренләп Емештең дә күңеле күтәрелде.

Урамда уларҙы үтә сағыу ҡояш, зәп-зәңгәр күк ҡаршыланы.



— Яҙ! — тине Байрас, ярһып.— Яҙ етә!..

— Көтөп тор. Февралдә яҙ тәтене ти һиңә!— тип ҡаршы төштө Шәүрә.— Туңаһы көнөң алдалыр әле.

— Кит, бушты һейләмә. Күрмәйһеңме, күҙ ҡалай сағыла! Ана, һинең уңһыҙ ҙа бәләкәс кенә күҙҙәрен хәҙер турғай күҙе хәтле генә булып йомтайып ҡалды! — тип шаяртты һаман Байрас.

— Яҙ етә шул,— тип Емеш тә һүҙгә ҡатышты.— Өс көндән март башы була, үәт!

Улар ҡыуана-көлә өйҙәренә таралдылар.

* * *

Иртәгеһенә Сәхибә туташ, һаман үпкәләгән бала шикелле, ҡалын ирендәрен турһайтып йөрөнө. Аҙ һөйләште. «Аҡыллым» тигән һүҙен дә йыш әйтмәне. Етмәһә, дәрес аҙағында үс иткән шикелле:

— Бөгөн һеҙгә дин дәресе инә. Ғаббас мулла, һеҙҙең ата-әсәләрегеҙҙен, һорауы буйынса, сәүиттән рөхсәт алған,— тип белдерҙе.

Был бөтәһе өсөн дә көтөлмәгән һәм теләнмәгән яңы хәбәр ине. Балалар ҡапыл тынып,- ни әйтергә, ни уйларға белмәй аптырап ҡалдылар. Хатта иң вайымһыҙ Шәүрә лә уйланып ултырҙы. Емеш, хәҙер йүгереп сығып китергә йыйынғандай, ҡалҡына биреп ҡуйҙы. Ләкин ниңәлер аяҡтар уны тыңламаны. Аптырау, ҡурҡыу, күрә алмау, тағы әллә ниндәй ят тойғолар ҡапыл ябырылып, уның быуынын алды. Бүтән балалар ҙа, күрәһең, шундай уҡ кисерештән шымып ултырҙылар. Сөнки уларҙың күбеһе «мулла» тигән һүҙҙән кескәйҙән үк ҡурҡып, ситһенеп тәрбиәләнгән, айырата Ғаббас мулла хаҡында, Хәбир батыр, Тимербай ваҡиғаларына бәйләнешле ҡурҡыныслы хикәйәттәр ишетеп үҫкән балалар ине.

Арала тик бер Байрас ҡына был юлы ла ҡаушап ҡалманы.

— Беҙҙең атай-әсәй һорауы менән булмаҫ, апай,— тине ул, өҙөп.— Мулла олатай үҙе күптән бирле рөхсәт һорап йөрей икән тип һөйләйҙәр ине. Күрәһең, беҙҙән үҙ Урынына мулла әҙерләмәкселер?..

Балалар әкрен генә көлөштөләр. Әммә ошо ваҡыт Сәхибә туташ әллә нисек үҙгәреп, ҡыҙарынып китеп һикереп торҙо, тәҙрә үтә урамға ымланы:

— Ана, мулла абзый үҙе лә килә.

— Әссәләмәғәләйкү-ү-м! — тип, көйләп һуҙып килеп

инде мулла мәктәпкә.— Дин дәресен башларға мөмкинме миңә?!

— Рәхим генә итегеҙ, мулла абзый,— тип яҡшатланып тәтелдәне мөғәллимә.— Рәхим итегеҙ, үтенәбеҙ...

Ҡара еләненең оҙон салғыйҙарын елпелдәтеп, мулла түргә уҙҙы, ҙур сәлләле бәләкәс башын килбәтһеҙ эйгеләп, мөғәллимә менән исәнләште:

— Сәләм, сә-ләм, хөрмәтле Сәхибә туташ...— тип ҡулын үпте. Унан, кәзә һаҡалын тырпайтып, балаларға ҡараны: — Йә, ху-уш... Хәйерле сәғәттә...

— Хәйерле сәғәттә...— тине Сәхибә туташ та, иркг) йылмайып. Үҙе, бейек күтәрмәһе менән тып-тып баҫып, ишеккә табан атланы.— Йүнле генә ҡыланығыҙ, балалар. Мулла абзыйҙы тыңлағыҙ! — Шул булды унын һуң,-ғы һүҙе.

— Йә, ху-ш,— тип тағы һуҙып торҙо Ғаббас мулла. Шәүрәгә уның был ҡыланышы артыҡ мәҙәк тойолдо. Ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, пырхылдап көләп ебәрҙе. Байрас үҙ янында ултырған Моратшага бышылдап нимәлер һөйләргә кереште.

— Йә, ху-ш-ш,— тип йәнә кабатланы Ғаббас мулла. Шәүрә тағы тыйыла алмай көлдө.

Ғаббас мулланың осло күҙҙәре ҡапыл манлайына һикереп менде. Ул секерәйсп арлы-бирле ҡарапды. Ул арала булмай, өс аяҡлы ватыҡ өҫтәлдә яткан оҙон линейканы һелкетә тартып алды ла Емеш менән Шәүрә ултырган партаға шапылдата һуғып та ебәрҙе.

— Сеүегеҙ!

Шәүрә шып тынды. Емеш, ҡото осоп, парта аҫтына төшөп йәшенде. Байрас:

— Мулла олатай, Совет власы балаларҙы ҡурҡытып уҡытырға рөхсәт итмәй тип ишеткәйнем мин...— тип ты ныс ҡына иҫкәртте.

Ҡаушап ҡалған балаларға йән инде. Улар тағы бышылдап көлөшә-һөйләшә башланы, Ғаббас мулла Бай расҡа секерәйеп текләне:

— Нимә тиһен. һин, хәсис?!

— Ҡурҡытып уҡытыу ярамай, тим,— тип ҡабатланы Байрас һаман шул тыныс тауыш менән.

Ғаббас мулла ғәҙәттә өлкәндәр араһында үҙен бик тыйнаҡ тота, күберәк хәйлә-мәкергә таянып эш итә торған шыма кеше булһа ла, әллә ҡулындағы ҡағыҙға таянып, әллә асыуына баш була алмай, был юлы үҙен үтә сабырһыҙ тотто. Күрәһең, балаларҙың һүҙһеҙ баш эйеүенә иҫәп тотоуы барып сыҡманы. Шуға ул тәү дәрестә



ук уларҙың ҡотон алыу юлына баҫырға булды. Иң тәү башлап Байрастын, партаһына шапылдата һуғып алды.

— Сеү! Тауышыңды сығарма, дуңғыҙ!

Унан үҙенсә бик ҡәнәғәт булып өҫтәл янына барып ултырҙы. Балаларға берәм-берәм күҙ йөрөтөп сыҡты. Ахыр, ҡарашын тағы Байрасҡа туҡтатып, оҙаҡ текләп торғас:

— Әй, кем, дуңғыҙ балаһы, тор! — тип бойорҙо.

Байрас ҡабаланмай ғына тороп баҫты.

— Бындараҡ, минен. янғараҡ кил! — тип екерҙе мулла. Байрас тағы ҡарышманы. Килде. Емеш уның ҡыйыулыгына аптырауҙан, хатта, үҙен онотоп, парта аҫтынан сығып ултырҙы.

«Уй, ниңә бара икән?! Ниңә ҡасып сығып ҡына китмәй икән? Үлтерә һуға бит инде үҙен мулла олатай!»— тип, ҡото осоп, ни булыр тип, берсә муллаға, берсә Байраска текләп ҡатып ҡалды.

— Усынды яҙып, ҡулыңды өҫтәлгә һал! — тип бойорҙо мулла. Байрас тағы ҡарышманы. Яҫы усын өҫтәлгә һалды. Ул, элек тә Ғаббас мулланан уҡығаны булғанға, был бойороҡтоң нимә аңлатыуын белә ине. Ғаббас мулла, ҡолас ташлап, баяғы линейка менән унын. усына һуҡты. Линейка шап итеп өҫтәлгә ҡа1<лыҡты. Байрас ҡулын тартып алып өлгөргәйне.— Ҡулынды ҡуҙғатма, дуңғыҙ! — • тип сыйылданы мулла.— Мин һинә өлкәндәрҙе ҡалай өйрәтергә кәрәклекте төшөндөрәйем әле. һал, тим, ҡулынды?

Байрас тағы усын яҙып, ҡулын өҫтәлгә һалды. Линейка тағы шапылдап еҫтәлгә һуғылды. Шәүрә түҙмәй тағы көлөргә кереште. Ҡоттары осоп бер аҙ тынып ҡалған бүтән балалар ҙа йәнләнде. Мәктәп эсе тонсоғоп барған умарта күсен хәтерләткән тоноҡ бер геүләү менән тулды. Байрас, линейканы шулай бер нисә тапҡыр өҫтәлгә һуҡтырып, ҡыҙыҡ яһап, балаларҙың күңелен асып алғас, был бесәй менән сысҡан уйынынан арыпмы әллә башҡа берәй мут уй менәнме, ҡулын тартып алманы. Ҡәһәрләнеп һуғылған линейканың эҙе уның усында башта ағарып, ҡаны ҡасып торҙо ла аҙаҡ ҡып-ҡыҙыл булып ялланып сыҡты.

— Бар, ултыр, хәсис. Аңланыңмы инде Сәүит власы Үҙе мицә һеҙҙе өйрдтергә рөхсәт итеүен? — тип ҡәнәғәт мығырлап ҡалды Ғаббас мулла.

— Ҡарағыҙ! — Байрас, һуғылған ҡулын байраҡ шиКелле юғары күтәреп, ашыҡмай ғына артҡы партаға УҘҙы.

Уҡыусылар уның ҡара янып, ялланып сыҡкан усын күреп берҙәм уфылдап ҡуйҙылар. Ҡурҡыуҙан да, йәлләү-

8*

ҙән дә Емештең хатта башы әйләнеп китте. «Уй, беҙҙең мулла олатай ҡалай уҫал һуң ул! — тип бышылданы Шәүрә.— Ундай ҡурҡыныс укытыу кемгә кәрәк ти икән?!»

Хатта Моратша ла ситтә өндәшмәй ҡала алманы.

— Аңламайым, ни өсөн ҡулды зәғифләргә бирергә икән? — тип аптыраны ул.— Бик булмаһа, мин мәктәпкә йөрөмәҫ тә ҡуйыр инем...

Ғаббас мулла, ирәбеләнеп, ҡулдарын артҡа ҡуйып, парталар араһында йөрөй-йөрөй, «дин, шәриғәт, мәҙәниәт...» тип, нимәләрҙер һөйләргә кереште. Ләкин уға оҙаҡ кинәнергә тура килмәне, сөнки мулла һөйләй-һөйләй парталарҙы артта ҡалдырып, түргә, ҡара таҡта яғына, уҙған арала тағы:

— Ҡарағыҙ! — тигән баяғы талапсан бышылдау тағы яңғыраны. Балалар тағы дәррәү артҡа боролдо. Мулла ла ялт итеп ҡайырылып ҡараны. Ләкин был ваҡытта Байрастың ҡулы төшөп өлгөргәйне. Балаларҙың күҙҙәрендә ҡәнәғәт, шаян мутлыҡ ҡына баҙлап ҡалды.

Мулла, хас дошмандарын ҡыра һуккандай ҡәһәрләнеп, йәнә парталарға шапылдата һуғып сыҡты.

— Сеүегеҙ, тим, хәсистәр! Шауламағыҙ, дуңғыҙ балалары!

— Эй мәрәкә, эйе бит, әхирәт? — тип кинәнеп бышылдай Шәүрә Емештен. ҡолағына.— Эй ирмәк!

Был юлы Емеш әхирәтенә һоҡланып түгел, ә асыуланып ҡараны:

— һиңә бөтә нәмә лә мәрәкә!

' Был ваҡиғанан һуң Емеш мәктәптән бөтөнләй биҙҙе.

— Уҡығым килмәй,— тине ул Бибеш апаһына.— Бүтәнсә унда бармайым.

— Килмәһә — уҡыма,— тине апаһы. Шуның менән һүҙ ҙә бөттө. Емеш мәктәпкә йөрөмәҫ булды.

Бүтән балаларҙын, да ахыры мулла менән осрашҡыһы килеп тормай ине. Ахыр мөғәллимә лә, «надан халыҡ — ҡара сарыҡ»лыҡтың ҡара һарыҡ булмауына тамам ышанып, бер ялда өйөнә ҡайтты ла ҡабат килмәне.

— Абыстай булып, ҡәҙер-хөрмәттә йәшәйһе урынға укытыусы булырға тырышып ыҙа сигә ине, бахыр,— тип көлдө Байрас. Ул да Сәхибә туташтың китеүенә үкенмәне. Сөнки Ғаббас мулла мәктәпкә аяҡ баҫыу менән, бы лай ҙа бик самалы укытыуҙың тамам йәме киткәйне. Тик был юлы уның ҡыуанысын ҡәртәсәһе хупламаны:



— Улай тимә Үҙенде шулай тиҙ үк уҡырға-яҙырға өйрәткән кеше хаҡында хөрмәтһеҙ һөйләмә,— ти.не.— Ғаббас мулла мәҙрәсәһендә күптәр йыл буйы укып бер хәреф белмәй ыҙаланырҙар ине...

Иртә яҙҙың ҡырыҫ бер көнө ине. Аслыҡ, бөлгөнлөктән тамам йонсоғ-ан ҡыҙҙар иртәнсәктән алып Оҙонғол ҡабағы буйында ҡуянтубыҡ ҡаҙып йөрөнөләр. Төньяҡтан килке-килке һалҡын ел иҫте. Күктә аҡһыл һоро болот күбәләре өйөрөлдө. Ҡояш, әйтерһең, ҡыҙҙар менән йәшенмәк уйнаны: берсә баҙырайып күсмә аҡ болот аҫтынан ҡалҡып сыҡты, берсә, әйтерһен, упҡынға батып юҡ булды. Ҡуянтубыҡ соҡоп йөрөгән ҡыҙҙарҙың бөксәйгән арыҡ арҡаларын әле сағыу ҡояш ҡыҙҙырҙы, әле еүеш, һалҡын ел ҡапшаны. Әммә ҡыҙҙар бер нигә иғтибар итмәй һаман бөксәнләп ҡуянтубыҡ эҙләйҙәр, күренгән береһен кескәй генә осло таяҡ менән әле генә ҡарҙан әрселгән йылы ерҙән соҡоп алалар ҙа шунда уҡ арлыбирле һөрткөләп ашап та ебәрәләр. Әле генә сағыу һалҡын, еүеш ер еҫе килеп торған ҡуянтубыҡ харап тәмле тойола. Илсеғол балаларының йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, ҡаҡы кеүек үк яратып ашай торған йәшелсәләре бит ул ҡуянтубыҡ. Оҙон ҡыш буйы йәшелсә-емеш күрмәй талсыҡкан йәш тән уны бик күпләп талап итә. Ә Оло Эйек буйында йыуаһы ла, ҡуҙғалағы ла, ҡуянтубығы ла етерлек. Теләһәң күпме ҡаҙып ал да аша.

Шулай ҙа Емеш ул көндө бик оҙаҡ йөрөй алманы. Ғәҙәттә һалҡынға ла, эҫегә лә тиҙ генә бирешмәй торған ҡыҙ бөгөн үтә нык ҡурылды, ҡалтыранды, кемдер ҡайнар усы менән уның текә, киң манлайын маҡкып ҡыҫа һымаҡ тойолдо. Йоҡо баҫты, өҙләкһеҙ иҫнәтте. Ахыры Емеш тупраҡҡа ҡатҡан осло таяғын ырғытып бәрҙе.

— Етер. Ҡайтам.

Итәгенә күп итеп йыйып алған ҡуянтубыҡтарҙы усы менән һыпырып таҙарта-таҙарта, бер-бер артлы ауыҙына оҙатып ултырған Шәүрә лә, бысранған ирендәрен еңе менән һөртөп, һикереп торҙо.

— Улай булғас, әхирәт, мин дә...

— Әйҙә, ҡыҙҙар, беҙ ҡайтабыҙ!

— Йөрөй бирәйек,— тип ҡыскырҙы Сәмиғә.— «Кейәүең балға саҡыра»ны уйнарбыҙ!

— Уйнағым килмәй,— тип Емеш ауыл яғына китте.

Емештең йүгереп уйнарға әүәҫ булыуын, Оҙонғол буйына сыҡкан саҡта яҙғы бөтә уйындарҙы уйнап бөтмәйенсә ҡайтмауын белгән Сәмиғә:

— Эй ҡылансыҡ! — тип үпкәләп ҡалды.— Эреләнгән булған. Харап!

Емеш уға бүтән һүҙ әйтә алманы. Унын. теше тешкә теймәй ҡалтыраны, ирендәре күгәрҙе. Ул көс-хәл менән өйгә ҡайтып етте.

— Әллә ниңә бик өшөйөмсө,— тип әкрен генә шыбырлап апаһына әйттс лә аш өйөнөн түрбаш ягына барып ауҙы.

Юрған аҫтында Емеш тагы ла ныгыраҡ ҡалтырай башланы. Апа!1ы уның өҫтөнә көпө лә, иренең бүре толобон да өҫтәп япты. Ләкин ҡыҙ йылынманы. Боҙ юрғанга төрөнгәндәй туңып, дер ҡалтырап ята бирҙе.

— Тапма эләктергәнсе йөрөгәнһен, йүнһеҙ! — тип һукранды Бибеш.— Белмәйем, унан ҡалай ҡотолорһон инде? Кискә табан ешөү үтеп, ҡыҙҙыра башлағас, Емешкә тағы ла ауырыраҡ булды. Башы сатнаны. Тыны быуылды. Күҙҙәре атылып сыга яҙып һыҙланы. Ул ҡороға ырғытылған балыҡ кеүек тонсоҡто. Шулай төн үтте. Тац атыуға, ул, манма һыуға төшөп тирләп, айнып китте. Хәлһеҙлектс, ҡаты һыуһауҙы иҫкә алмаганда, ул инде бетөнләй һау кеше ине. Әммә, бер тәүлек үтер-үтмәҫтон, ауырыу уны кисәгенән дә ҡатыраҡ бөгөп һалды...

Емештец ул яҙы менәи йәйе шулай үтто. Бибисара абыстайҙың кәцәте менәи. Бибеш бик матур ҡурсаҡ яһап, өйсөкләп, сте юл сатлығына сығарып ташлап та ҡараны. Был ырым буйынса, йәнәһе, ҡурсаҡты табып алган ксшегә ауырыу эйәреп китергә лә Емеш һауығырға тейеш ине. Булманы. Йәнәһе, ауырыуҙы ҡурҡытып ҡасырыу өсөн, тапма тота башлаған саҡта аңғармаҫтаи уның өҫтөыә ауҙарылған бер күнәк һыу ҙа ярҙам итмәне. Ауырыу китмәне. Күк әремде ҡайнатып, сүмесләп эсеү ҙә файҙа бирмәне. Емеш ауырыны ла ауырыны. Ә йәй, тап Емештен әсәһе Сәгүрә енгә үлгән йылдағы кеүек, сикһеҙ эҫе, ҡоро килде. Кешеләр һәр көн зарығып, аҙарынып ямгыр көттө. Тап шул йылдағы шикелле, ямғыр теләп урамдарға сыҡтылар, аҡ ҡорбандар салдылар, Ғаббас мулланан өшкөртөп, Оло Эйеккә һуйырташтар ырғыттылар. Ә ямгыр яуманы. Игендәр тамырҙа ҡатып ҡалды. Ғәҙәттә, ат инһә, күренмәй торған һыубаҫар сабынлыҡтар юкка сыкты. Донъя һуғышынан һуң ике-өс йылга якын һуҙылған граждандар һуғышы мәлендә тамам бөлгән, ғаилә баштарын юғалткан, тиф, биҙгәк, ваба ауырыуҙары арҡаһында хәлдән тайған ярлы-етем халыҡ өҫтенә дәһиютле аслыҡ ҡомһоҙ ҡосағын йәйҙе.

Эйе, Емеш инде хәтерләмәгән, ләкин бөгөн күргән кеүек итеп белгән аслыҡ, унын. әсәһен алып киткән йылдан да аяуһыҙыраҡ, ҡомһоҙораҡ аслыҡ, ябырылды Илсеғол өҫтөнә. Кешеләр, бигерәк тә бала-сағa, ҡарт-ҡоро, ярты ҡыш етмәй, күпләп үлә башланы. Эйе, күптәр, ғәҙәттәгесә, яҙмышка өнһөҙ баш эйеп, зарланмай-һөйләнмәй, хәйер-саҙаҡа һоранмай, шешенеп-күбенеп, ©йҙәрендә күләгә шикелле тауыш-тынһыҙ шыуышып йөрөй-йөрөй үлделәр ҙә үлделәр...



Емеш өсөн ауырыу — аш булды. Унын һис тә ашағыһы килмәй. Биҙгәк өйәнәгенән һуң ул сарсап ҡына тора ине.

Был ҡыш аяуһыҙ һалкын да булды. Аслыҡ менән тифтән хәлһеҙләнгән кешеләр утынға, бесәнгә барған арала 1а бик йыш туңып үлде. Ә Емеште туцдырған биҙгәк Йалкыны ҡыш һалкынынан ла аяуһыҙыраҡ ине. Шулай !$а ҡыш уртаһы ауа килә ауырыу тәүге ҡырҡыулығын >ғалтты. Өшетөү ҙә, яндырыу ҙа уртасаланды. Уның ҡа->ауы, Емеш хәҙер, тәүге мәлдәге шикелле, ауырыу ебәр-|~ән арала ла үҙен һау һиҙмәй. Киреһенсә, туктауһыҙ һыҙтанып, йоҡоһо килеп кенә тора. Ул хатта күп ваҡыт бәйләп йәки тегеп ултырған эше нисек ҡулынан төшкәнен, үҙенең нисек ауып йоҡлап киткәнен белмәй ҙә ҡала. Уның рҙер өй эшен эшләргә, йомош-юлға йөрөргә лә хәле етмәй, урында ғына ултырып йәки ятып тора ине.

Бер көндө, кискә табан, Емеш еҙнәһенә башалтай бәйләп ултыра ине. Ғәҙәтенсә, үҙе лә һиҙмәҫтән, йоҡлап китте. Күпмелер йоҡлағас, уянып күҙен асһа, ҡараңғы төшкән. Мейес соҡалтаһында һөрөмләнеп бишле лампа яна. һөйөндөк, киндер иләп ултырған ҡәртсәһенең тубығына башын һалып, йоҡлап ята. Бибеш менән Хисбулла ла, кескәй Йәнеш тә ейҙә күренмәй.

— Апайымдар ҡайҙа, ҡоҙағый? — тип хәүефләнеп һораны Емеш.— Төндә ҡайҙа киттеләр улар?!

— Төн түгел. Эңер генә әле,—тине Таиба әбей.— Яңы ғына шәм ҡабыҙҙыҡ. Килендәр күршеләргә инделәр... Ярҙамлашырға... Уларҙың тағы ҡыҙҙары тыуған... Етенсе ҡыҙ... Әсә кеше хәл өҫтөндә, ти...— тип өҙөп-еҙөп хәбәр итте Таиба әбей бошонҡо тауыш менән. Ауыр ғына көрһенөп, баш сайҡап ултырҙы.— Нисек хәле ауыр булмаһын... Аслыҡ та... Ауырлы булыу ҙа... Ауыр тыуҙырыу ҙа... Барыһы ла бергә килгән бит... Мандый алмаҫ инде бахыр, мандый алмаҫ...

Унан үҙ-үҙен йыуаткан шикелле:

— Нисек итәһең! — тип ҡуйҙы.— Был донъя шулай ҡоролған инде ул.. Берәүҙәр үлә, икенселәре тыуа.. Уларҙың ҡайһыһы бәхетле икәнен бер алла үҙе генә белә..

Емеш, арыҡ, хәлһеҙ ҡулдарына таяна-таяна, көскә тороп ултырҙы. Көсәнеүҙән күҙ алдында баҙлап киткән осҡондар һүнеп ҡара нөктәләр таралғас, янында аунап яткан ҡул эшенә тотондо.

«Ҡасандан бирле ошо бер башалтайҙы бәйләп бөтә алмайым да ҡуямсы... Элек шәл хәтле шәлде һә тигәнсе бәйләп ташлай торғайным»,— тип бошоноп уйлап алды.

Өй эсе тын һәм үтә моңһоу ине. Емеш тә, Таиба әбей ҙә, һәр ҡайһыһы үҙ эшенә, үҙ уйына бирелеп, оҙаҡ ва-' ҡытка тынып ҡалдылар. Әсе ел тәҙрә ҡапҡастарын ҡаҡҡылай-һуҡҡылай бер өҙлөкһөҙ өй уратып һыҙғырып йөрөнө Мөрйәгә инеп, йөрәк еҙгәс тауыш менән үкһеп иланы Мейес артында, йән биҙҙереп, туктауһыҙ сиңерткә-•ыр сырылдашты. Бына бер саҡ сысҡандар кем уҙарҙан кайҙалыр таҡта кимерергә кереште. Таиба әбей һағайып китте.

— Әллә һандыҡ эсенә ингәндәр инде был ҡороғорҙар? Ҡәҙерле ҡомарткыларымды ҡауҙап бөтөрҙәр әле улар! Ошо аслыҡ йылда уғата ла ишәйеп китте бит был ҡороғорҙар.

«Ҡомарткы» һүҙе Емеште лә йоҡоһонан уятып ебәргән һымаҡ булды.

— Ниндәй ҡомарткы ул, ҡоҙағый? Ксмдең ҡомартҡыһы? — тип һораганын тоймай ҡалды. «Әй-й, күҙҙән. осо менән генә булһа ла уға бер ҡарарға, күрергә ине!..» — тип уйлап алды.

— Сеү, тынла! Ҡайҙа кимерәләр?———тип Таиба әбей уның һүҙен бүлде. Улар тағы тынып ҡалдылар. Мөрйәләге ел һыҙғырыуы йөрәккә тағы ла хәүефлерәк моң өҫтәне, сиңерткә, сысҡандарҙың шыҡһыҙ эше айырата йән биҙҙергес була башланы, бишле лампа уғата һөрөмләнеп, тирә-яҡты һуҡыр тынлыҡ баҫып китте. Таиба әбей һвйөндөктө мендәр өҫтөнә һалды ла иплэп кенә иҙәнгә шыуып төште.— Төптө шунда, һандыкта был ҡороғорҙар,— тине ул, ниңәлер бик һаҡ бышылдап.— Ҡолонсағымдың ҡомарткыларын ҡауҙайҙар, яуыздар!

Ул, түрьяҡта, урындыҡ өҫтөндә, ултырған ҙур ағас һандыҡ янына барып, тағы бер аҙ тынлап торҙо. Унан сәс үрмесенә тағылған күмәк асҡыстар араһынан берәһен һайлап һандыктың ҙур ҡара йоҙағына тотондо.

— Ҡоҙаса, лампаны яҡын алып кил әле. Бер ҙә генә асҡысты йоҙағына тура килтерә алмайым да баһа!

Үтә ҡыҙыҡһыныуҙан тағы ла хәлһеҙләнеп киткән ҡыҙ, мейес соҡалтаһынан лампаны көскә алып, әкрен генә ҡоҙағыйы янына барҙы. «Ул һандыкта нимә бар икән? Ниндәй ҡомарткы? Кемдең ҡомарткыһы?..» — тип сабырһыҙланып дөпөлдәне йөрәге. Таиба әбей асҡыс ярата алмай оҙаҡ ыҙаланды. Тутыҡкан йоҙаҡ, гүйә, Емешкә үҙ эсендәге ҡомарткыны күрһәтмәҫ өсен, оҙаҡ асылмай яфаланы. Ахыр килеп йоҙаҡты асып, һандыктың ҡапҡасын артка ҡайырып ҡуйғас, Емеш аптырауҙан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Ҡоҙағый, бында китаптар ғына ла баһа!..

— Ә һин унда хазина яталыр тип белгәйнеңме ни? — тип көлөмһөрәп ҡуйҙы Таиба әбей.— Китаптар шул. Закирымдың, ҡолонсағымдың китаптары. Эй-й алла, баламдан бына шул китаптар ғына ҡалды ла инде. Малай сағында, минән әрләнә-туҡмала, йоморткаларымды биреп, ҡырктартмасынан һатып алып йыйған китаптары... Хәҙер үкенәм, йә, йоморткa ла булғанмы бер нәмә? Ниңә шуны йәлләнем икән ҡолонсағымдан. Тауыҡ бөтмәһә, йоморткa бетәрмә? Ә бына кеше юк инде... Булмаҫ та... Кешене бит йоморткаға алмаштырып алып булмай... Бына шулай инде, хәҙер бына, үҙем һаман әлепте таяҡ тип белмәһәм дә, уның китаптарын һаҡлап ултырған булам. Донъялағы ин. ҙур хазинанан да артыҡ улар миңә. Закирымдың төҫө... Закирымдын, ҡомарткыһы... Баламдын, күҙ нурҙары түгелеп ҡалған берҙән-бер ҡәҙерле нәмәләр...

Таиба әбей китаптарҙы, һаҡлыҡ менән берәм-берәм ҡулына алып, һылап-һыйпап ҡарай-ҡарай, урындыкка теҙә барҙы. Унан:

— Әлдә сысҡандар бында инә алмаған икән әле. Әлдә ҡолонсағымдың китаптарын ҡауҙамағандар икән әле, ҡороғорҙар...— тип, ҡыуана-һөйләнә, ашыҡмай ғына һандыкка кире һала башланы. Шул саҡ нисектер уның ҡарашы Емештә туктаиды. Ҡыҙҙын, лампа тотҡан ҡулы дер-дер ҡалтырай, арыҡланыуҙың сигенә етеүҙән самадан тыш ҙур, яҡты булып киткән һөрмәле күҙҙәре ниндәйҙер ят балҡыу менән осҡонланып яна ине.

— Аһа,— тип ғәжәпләнеп ҡуйҙы Таиба әбей.— Әллә тағы тапман, тота башланы инде, ҡоҙаса? Әле генә сираттан уҙғайның да баһа!

— Юҡсы, тотмайсы...— тине Емеш, тыны бөтөп.

:— Әллә берәй нәмәнән ҡурҡтыңмы? Нимәгә улай дер ҡалтыранаһың? Төҫөң ҡасып киткән.

— Минең бер ҡасан да был хәтле күп китап күргәнем юк ине...— тине Емеш, тағы ла нығыраҡ тыны ҡыҫылып.— Бер ҡасан да...

— Шунан, китаптарҙан ҡурҡтыңмы ни?

— Юҡ та... Уҡығым килеп киттесе...— тип шыбырла-

ны Емеш ишетелер-ишетелмәç тауыш менән.— Шул китаптарҙы уҡып ҡарағым киләсе, ҡоҙағый...

Емештен, һуцғы һүҙҙәре бөтөнләй үкһеү аша сыкты. Күрәһең, ул артыҡ тәьçирләнә һәм шул тәьçирләнеү уға мөмкин булмағанды һорарға кес тә бирә ине. Таиба әбей, ҡапыл-ғара ни әйтергә белмәй, уға оҙаҡ ҡына текләп торҙо. Унан:

— һинең... ошо китаптарҙы уҡығың киләме?—тип үтә ғәжәпләнеп һораны.— Белгең килһә, мин бит уларҙы хатта Байрасҡа ла тоттороп ҡарағаным юҡ! — тлп өçтәп тә ҡуйҙы.

Емештең күнелендә ҡабынған өмөт осҡоно һүнә яҙып ҡуйҙы. «Береһен генә лә уҡытмаçмы икән ни?!.»

Шулай ҙа артыҡ ҙур ҡыҙыҡһыныу унын, ҡыйыуһыҙлығын һаман еңә барҙы. Ул, Таиба әбейгә тағы ла яҡынараҡ килеп, текләп ҡараны.

— Ҡоҙағый, нимә яҙылған икән ул китаптарҙа, ә?

— Ҡайҙан беләйем мин уны? Мин бит тома һуҡыр.

— Закир ҡоҙанын, нимә уҡығанын бер ҙә белген килмәйме ни һинең, ҡоҙағый?

— Килеү менән... ҡалай итәйем?

— Мин һинә уҡып ишеттерер инем бит, ҡоҙағый...

Таиба әбей көтмәгәндә шундай ҡыйыу һәм ныҡымыш булып киткән Емешкә тағы ла аптырабыраҡ ҡараны.

— Уй, эс ауырыуы! һин ошо китаптарҙы уҡый алыр инем тип уйлайһыңмы?!

Емеш, шөбһәләнеп, артҡараҡ сигенде. Шулай ҙа уйлаған уйынан сигенергә теләмәне.

— Нинә... Мин шул... уҡый беләм дә мин, ҡоҙағый...

— Закирымдың китаптарын уҡый алыр инем тип әйтергә баҙнат итәһеңме һин, ҡоҙаса?!

— Уҡып ҡараһаң ине, тип кенә уйлайым да...

Таиба әбей асыуланырға ла, аптырарға ла белмәне. Емешкә тағы бер аҙ ҡарап торҙо, сөнки быҒаса унын, йәндән артыҡ күргән ҡомартҡыларын тотоп ҡарарға баҙнат иткән кеше юҡ ине әле. Ахыр ул һандыҡтан иң алама; бер китапты алып ҡыҙға һондо.

— Мә, улай бик шәп булғас, уҡып ҡара!

Емеш ниндәйҙер сая ҡыҙыҡһыныу менән китапты ҡосаҡлап алды. Алыçтан насар күрә торған күҙҙәренә яҡын уҡ килтереп, тышындағы яҙыуҙы уҡыны.

— «Әльфө ләйләтен үә ләйлә...»

— Кит, улай тигән ҺУҘ була тиме ни? Әлеп-бей менән әфтиәк тип яҙылғандыр,— тине Таиба әбей, көләп.— Ә үҙең уҡый беләм тигән булаһың...— тип алдан тантана итте. Ләкин Емеш инДе ҡаушаманы. Асыҡ итеп артабан уҡыны:



— «Мең дә бер кисә...»

— Аһа, әлеп-бей түгелдер шул,— тип килеште хәҙер Таиба әбей. Китапты, ҡыҙҙың ҡулынан алып, әйләндерегт-тулғандырып ҡараны. Унан тағы уға бирҙе.

— Мә, бынаһын алып ҡалайыҡ. Мен. дә бер кисә нимә икән ул? Уҡый алғас, уҡып ҡарарһың...

Ҡыуаныстан Емештең хатта башы ойләнеп китте.

— Аһа, ҡоҙаса, ҡалай сайҡалып киттец. Лампаны төшөрәһең дә баһа! — тип хафаланып ҡуйҙы Таиба әбей.— Бар, ултыра һал. Хәҙер янына барырмын. Минә ҡолонсағымдын. күҙ нурҙары түгелеи ҡалған китапты уҡып ишеттерерһең.

Емеш лампаны тәҙрә төбөнә ҡуйҙы ла аяҡ бөкләп урындыҡҡа ултырҙы. Таиба әбей ҙә, тиҙ генә һандығын йоҙаҡлап, унын янына килде.

— Йә, ҡоҙаса, уҡый башла!..

Емеш иç киткес һаҡлыҡ менән китаптың тәүге битсн асты. Ә бер аҙҙан инде Шәһризадаиың тылсымлы хикәйәттәре уларҙыщ икеһен дә, үҙ артынан эйәртеп, тылсымлы әкиәт донъяһына алып инеп китте.

Емеш мәктәпкә үтә йәше степ, донья нужаһы арҡаһында бик кескәйҙән өлкән кеше булып тәрбиоләнеп барғангамы әллә Ҡарасәс әбей кеүек һүҙ оçталары аша халыҡтын, тел ижады менән бик ныҡ таныш булып, үҙе лә әкиәтсе, йырсы булып үçкәнгәме, уҡырға-яҙырга бик тиҙ өйрәндс. Улай ғына ла түгел, ап-арыу еңел, тасуири итсп уҡый белеүҙә үҙ тиндәштәренән байтаҡ айырылып тора ине. Шуға ахыры, Шәһризаданын. ғибрәтле һәм хикмәтле әкиәттәрен уҡыу уға бик үк ят та, хатта ауыр ҙа тойолманы.

Улар оҙаҡ уҡынылар. Мен аҙаптар аша ҡауышыу бәхетенә ирешкән йәш йөрәктәргә ҡыуанып, хаҡлыҡ-тоғролоҡ есөн мен вә мен ауырлыҡтарҙы үтеп, сикһеҙ батырлыҡтар эшләүгә лә, үлемгә лә икеләнмәй барған ҡаһарман ирҙәргә һоҡланып, башҡаларҙын, бәхетһеҙлеге иçәбенә үҙ бәхеттәрен ҡорған, дуçтарын, яҡындарын һатҡан, ялганды, намыçһыҙлыҡты яҡлаған хандарға, вәзирҙәргә һәм уларҙың мәкерле ҡатындарына бөтә йөрәктән нәфрәтләнеп, ваҡыттын. уҙғанын, бишле лампанын ҡыуығын бөтөнләй һерөм баçҡанын тоймай онотолоп ултырҙылар. Таиба әбей, күрәһең, китапты артабан уҡытырға теләп, Емеште үҙ яғында, ҡунаҡ өйөндә йоҡларға саҡырҙы. БыҒаса Емеш апаһы, еҙнәһе менән бер өйҙә, аш өйөнөн, түрбаш яғында, йоҡлай ине.

Тик Емеш, нисек кенә теләһә лә, бөгөн китапты артабан уҡый алманы. Мендәргә башы тейер-теймәҫтән, иҫһеҙ-оҫһоҙ йоҡлап китте. Ә Таиба әбей төндө йоҡоһоҙ уҙғарҙы. Закирының, үҙе әйтмешләй, күҙ нуры түгелеп ҡалған был китап, гүйә, уның уяныр-уянмаҫтан тормоштон. ҡаты ҡағыҙәләре менән дә, үҙенең көслө ихтыяры менән дә мәңге баш ҡалҡытмаҫлыҡ итеп ҡалын баҫрау аҫтына баҫырып тыйып ҡуйылған нескә тойғоларын ҡуҙғатып ебәрҙе. Уйға, фекергә юл асты.

Йәштән үк күп уҡырға, күп белергә тырышып, һәр нәмәне нисектер үҙенсә, башҡасараҡ итеп күрергә ынтылып торған теремек, шаян улын — Закирын һағыныу, йәлләү ҙә, уның ваҡытһыҙ өҙөлгән йәш ғүмере өсөн әсе һыҙланыу ҙа, улының ынтылышын һис тә аңларға, уның хәленә инергә теләмәүе, күкрәк һөтөн имеҙеп үҫтерһә лә, унын, күкрәгендә нимә ятҡанын белмәүе, уның уҡыуына, китап яратыуына гел ҡаршы килеп тороуы өсөн ҡаты үкенеү ҙә — бөтәһе лә бергә буталды, исмаһам, хәҙер, ул яратҡан китаптарҙы уҡып булһа ла, эйе, һуңлап булһа ла, улының күңелен аңларға тырышыу теләге дөрләп ҡабынды унын күңелендә. Әгәр үҙе уҡый белһә, ул, бөгөндән башлап, һандыҡта ниндәй китап бар, шуларҙың бөтәһен дә уҡып бөтмәй, улы белгән нәмәләрҙе ҡарап сыҡмай тороп керпек тә ҡаҡмаҫ ине. Әммә ҡайҙа һуң?! Ярай әле Емеш уҡый белә. «Тапма тотмаған көндәрҙе кис һайын уҡырбыҙ әле. Бына бәлә, иртәгә уның биҙгәге һуғыла торған көнө бит әле... Уҡып булмаҫ ахыры, эсен. көйгөрө!..» — тип бошондо Таиба әбей. һәм, бәлки, тәү тапҡырҙыр, Емештең сырхау булыуына ысын күңелдән сабырһыҙланып, ҡайғырып ҡуйҙы: «Нисек кенә һауыҡтырып ебәрергә һун, был ҡыҙҙы? Берәй сараһын табырға ине лә баһа? Йәһәтерәк табырға кәрәк ине!..»

## XI

Йылдар уҙып ҡына тора. Бына Айһылыуға ла егерменсе йәш китте. Шунын. дүртенсе йылы инде ат өҫтөндә, һуғыш, көрәш майҙанында уҙып бара. Ә бит ул үҙенен, йән һейгәне Иштуған, уның дуҫы Әхәт менән өсәүләп, ҡасҡын булып Орск ҡалаһына килгән саҡта уға бары ун етенсе йәш кенә ине. Шул саҡта улар һис уйламағанда, көтмәгәндә тип әйтерлек, яңы ғына ойошоп ятҡан ҡыҙыл гвардия сафына инеп киткәйнеләр... Был ҡатмарлы оло донъя хаҡында бер ни белмәгән, бер ни уйламаған йәш кенә бер ҡыҙ ине Айһылыу ул саҡта. Эйе, йәш



кенә... Әммә үҙ һүҙле, текә ҡарашлы, ҡыйыу холоҡло кескәй ҡыҙ... Етмәһә, йөрәгендә ярһыу мөхәббәт уянған... Тау шишмәһендәй ярһыу, саф мөхәббәт... Мең алтынға ла табылмаҫ, юғалтһаң, бер ҡасан да ҡабатлаимаҫ ысын мөхәббәт... Бала саҡтан уҡ башланған тәүге, ялҡынлы мөхәббәт... Ә яуыз йәндәр уға ҡул һуҙалар... Уны тәү бөрөләнгән сағында уҡ өҙөп-йолҡоп ырғытырға, тапапиҙеп ташларға теләйҙәр... һатыбал — старшина улы — бай ҙа, уғымышлы ла, мәкерле лә... Мөхәббәтте һатып алырға ла, быуып һалырға ла ҡулынан килә унын... Ул ауылда ғына түгел, бөтә был яҡта үҙен беренсе егет итеп иҫәпләргә күнеккән. Уға мөхәббәттә лә шул абруйҙы һаҡлап ҡалырға кәрәк. Был донъяла унын, өсөн бөтә нәмә, хатта мөхәббәт тә, һатыла, һатып алына. Байлыҡ алдында намыҫ та, әхләҡ тә баш эйә. Ул — үҙ һүҙле, тәкәббер. Әй тәйек, ауылда беренсе һылыуҙы — Айһылыуҙы алырға теләй икән, ала. Ә ҡыҙҙын быға нисек ҡарауы, уны яратыуы-яратмауы уны ҡыҙыҡһындырмай. Уның уйлауы буйынса, мөхәббәттең баһаһы — йылҡы ейөрҙәренең иҫәбе-һаны менән үлсәнә. Ә был яҡта уларҙан бай кем бар? Кем биш-алты йылҡы өйөрө тота?! Эйе, шундай ҡеүәтле ҡара көс торҙо ул саҡта Айһылыуҙың керһеҙ мөхәббәте юлында. Айһылыу менән Иштуған быңдай көскә ҡаршы нимә ҡуя ала? Эйе, мөхәббәт уты ҡабынған ярһыу йөрәктәренән башҡа бер ниндәй көскә лә эйә булмаған ике йәш кешегә, ай-һай, ауыр булды ул көндәрҙә: нисек, ниндәй юлдар менән һаҡлап ҡалырға һун уларға мехәббәттәрен? Ниндәй саралар күрергә? һунғы ҡарарға килгәнгә хәтле күпме аҙаплы кисерештәр үтте уларҙын, башынан... Әле уйлаһаң, аптырарһың. Нисек ҡыйыулыҡтары еткән ул балаларҙың? Күрәһең, мөхәббәт үҙе көс тә, аҡыл да биргәндер уларға... Шундай тирә-яҡты дер һелкетеп торған данлы старшинаның ҡулы аҫтынан, етмәһә, уның үҙе генә егеп йөрөр иң яҡшы юртаҡтарына атланып ҡасып китергә йөрьәт итсе әле...

һәйбәт, тоғро дуҫтар ҙа булды шул: Иҙрис олатай, Шәмсиә еңгә, Әхәт... Рәхмәт, мең рәхмәт төшһөн инде уларға...

Бына шулай, революция өсен көрәшергә тип, аңлап түгел, ә мөхәббәтен яҡлап килеп инеп китте Айһылыу башта был юлға. һәм яңылышманы. Мөхәббәтенә яҡлау ҙа, һаҡлау ҙа тапты ул ошо юлда. Тора-бара ул тик ошо революция еңгән хәлдә генә кеше ысын мәғәнәһендә азат һәм бәхетле буласаҡ икәненә яҡшылап төшөндө. Әкренләп революциянын. аңлы һалдаты булып китте. Дөрөҫ, башта ул санитарка ғына булды. Аҙаҡ уны өйрәттеләр,

уҡыттылар, төркисәләп әйткәндә, «шәфҡәт туташы» һанылар...

Шулай итеп бына дүртенсе йыл инде ул ат өҫтөндә, дүртенсе йыл ҡан, үлем эсендә... Еңел түгел. Әммә Айһылыу үкенмәй, зарланмай. Хатта күп ваҡыт арыу-талыуҙы ла тоймай. Киреһенсә, үҙендә көс, ҡеүәт арта, дәрт, ҡыйыу сәм көсәйә барғанын тоя ул хәҙер. Бәлки, йөрәгендә ҡайнаған шәхси мөхәббәт тойғоһона революция ярһыуы, дөйөм кешелек бәхете өсөн көрәш дәрте өҫтәлгәнгә ул шулайҙыр?! Ул үҙе лә бит хәҙер бәләкәй генә эштә булһа ла ошо юлда тырышып эшләп, көрәшеп йәшәй, яралыларҙын. аҙабын еңеләйтеп, ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн бөтә йәнен, йөрәген бирә... Эй-й, шулай ҙа йәһәтерәк бөтһөн ине был үлеш-ҡырылыш...

— Ҡарындаш...

Айһылыу, тәрән йоҡонан уянғандай, ҡапыл тертләп китте: «Аһ, иҫәүән, тапҡанһың уйға бирелер саҡты!» — тип үҙен эстән генә ороша-ороша тауыш килгән яҡҡа боролоп ҡараны. Ә унда үҙе баянан бирле башына һалҡын сепрәк ябып ултырған яралы күҙҙәрен көскә асып уға ҡарап ята ине. Айһылыу ҡабаланып ҡулындағы сепрәкте һалҡын һыулы биҙрәгә мансып алып, яралынын. битенән, муйындарына эркелеп ағып торған тирҙәрҙе һөрттө. Унан сепрәкте ҡабат һыулап маңлайына япты. Йөрәгенә хәл бирерҙәй, яра һыҙлауын баҫырҙай укол ҡаҙаны. Әсәләрсә иркә, хәстәрле тауыш менән:

— Бына шулай...— тип уға матур итеп йылмайҙы.— Сәй бирәйемме әллә, ағай? — тип һораны. -^

«Бир» тигәнде аңлатып, эйәк кенә ҡаҡты яралы. Айһылыу унын ут кеүек ҡыҙыу елкәһен беләгенә һалып ипләп кенә күтәрҙе лә ауыҙына һетлө ҡуйы сәй һалынған стаканды яҡынайтты.

— Мә, ағай, сәй йот...

Яралы ҙур-ҙур итеп бер-ике тапҡыр йотто ла:

— Етте, ҡарындаш,— тине.

Хәле бөтөп, күҙен йомоп ятты. Айһылыу инде унын. хәлен еңеләйтер сара юҡлығын белһә лә, һалҡын һыулы сепрәкте әленән-әле алыштырып, унын янында һаман ултыра бирҙе. Был кин күкрәкле, ерән мыйыҡлы, тыныс, аҡыллы ҡарашлы, күк күҙле ағай, нисектер, уға бик таныш та, яҡын да һымаҡ тойолдо. Өмөтһөҙ ҡаты яралы булыуға ҡарамаҫтан, ҡаһармандарса сабырлы түҙемлелеге менән һоҡландырҙы.

«Ниндәй кеше бит!.. Кемдеңдер һейөклө ире, кемдәрҙеңдер ҡәҙерле атаһы бит инде ул... Ҡайҙан ҡайҙа килеп ятып ҡала бит инде. Ә өйҙә уны көтәләр... һағынып-һарғайып көтәләр...— тип әсенеп уйланды Айһылыу.— Эй хоҙайым, күпме бына тигән кешеләрҙе юғалтабыҙ бит был һуғышта... Кешеләрҙен иң аҫылын... иң батыр, иң гүзәл, тоғро, батыр егеттәрҙе...»

— Ҡарындаш...— тип, әкрен генә тағы унын уйын өҙә яралы.— Бына бында ҡара әле...

Ул, ҙур, тирле ҡулдары менән үҙенең күкрәген асып, муйынына тағылған бетеүҙе күрһәтте. Быуаттар буйы йыйылған тир-кер менән ҡара йылтыр төҫкә ингән бәләкәс кенә күн бетеү. Шундай уҡ ҡарайып, йышылып бөткән нәҙек кенә тарамыш епкә өс мөйөшләп тағылған ул.

— Ошоно минең муйындан ал әле, ҡарындаш,— ти яралы.

«Ни өсөн алырға икән?..» — тип уйлай Айһылыу. Ләкин бер һүҙһеҙ унын ҡушыуын үтәй.

— Бына шулай... Алдыҡ...— ти ул балаға өндәшкәндәй иркә тауыш менән.— Хәҙер уны нимә эшләтәбеҙ?

— һин уны Иштуғанға бир, ҡарындаш... Хәҙер ул тағып йөрөһөн,— ти яралы шыбырлап ҡына,— минә хәҙер кәрәкмәй ииде... Файҙаһыҙ... Минән Иштуғанга аманат итеп тапшыр...

«Иштуғанды белә икән дәһә... Былай булгас, миме лә белә?! — тип уйлай Айһылыу.— Ниңә һуң мин уны һис кеиә лә иҫләй алмайым?» — тип өҙгөләмә. Яралы һалдат унын уйын уҡығандай:

— Мин Иҫәнбәттән...— тип бышылдай.— Шаһиморат агайың аманат итеп бетеү ҡалдырҙы, тиген... һаклаһын. Ә ҡайтҡас, Иҫәнбәткә, мииен әсәйемә алып барыи тапшырһын. Әсәйем, ваҡыты еткәс, ейәненә... Минен, улыма тапшырыр... Ҡасандыр минә тапшырған кеүек...

Яралы, тотлоғоп, оҙаҡ тынып ятты. Унын йомоҡ керпектәре аҫтынан яҙҙы тамсылар шикелле теремек, саф күҙ йәштәре йүгерешеп сыҡты... Бер аҙҙан ул тағы күҙен асты, тағы хәлһеҙ генә:

— Ҡарымдаш...— тип өндәште.— Ҡарыидаш, был бетеү беҙҙен. ырыуҙың һуғышсылар аманаты... Быуындан быуынға күсеп килгән изге аманат. Уны таҡҡан кеше ил алдындағы, халыҡ алдындағы бурысын аҡтыҡ тамсы ҡанына... һуңғы һулышына хәтле... намыҫ менән үтәй. Ниндәй генә ауыр хәлдә лә, емөтһөҙ шартта ла ҡыйыу, тоғро, гүзәл ҡаһарман булып ҡала...

Яралының тын алышы үтә ауырайып, тағы бер аҙ тынып ятты. Унщ йәйге аяҙ күк шикелле тыныс, яҡты күҙҙәре Айһылыуҙан аша ҡайҙалыр тебәлделәр, ә уттай янып, ҡыҙара бүртенеп ятҡан ҡаҡса йөҙөнд» ниндәйҙер

үтә кешелекле, якты йылмайыу балҡый ине. Ул әкрен, моңһоу ғына тауыш менән өҙә-өҙә тағы һүҙ башланы:

— Ул бетеүҙең эсендә ниндәйҙер бер изге аят бар икән... Шул аят һуғышсыны үлемдән һаҡлай икән... тиҙәр...— тип тағы яҡтырып, йылмайып алды.— Ул бетеүҙе минә әсәйем герман һуғышына киткән сағымда таҡҡайны... Беҙҙен, ырыу һуғышсыларынын. был аманаты быҒаса иң бәхетле аманат булды... Сөнки беҙҙең ырыуҙа ҡурҡаҡтар, талаусылар, һатлыҡтар бер ҡасан да булманы... «һинең атайын, был аманатты төрөк һуғышында, япон һуғышында намыҫ менән йөрөтөп алып ҡайтты... Хәҙер һинен сират етте... Ышанам, һин дә уға кер төшөрмәй алып ҡайтырһын, улым, ата-бабан, йолаһына тоғро бул, улым»,— тигәйне...

һалдат, әҙ генә туҡтап, хәл алғандай итте. Унан, һөйләйһе һүҙен һөйләп өлгөрмәүҙән ҡурҡкан һымаҡ, быуыла-ҡабалана артабан һөйләп китте.

— «Был тылсымлы аманат»,—тине әсәйем...—Тик унын тылсым көсө бөтмәһен өсөн мөҡәддәс ес шарты бар. Ул изге шарттарҙы аманат йөрөтөүсе һис кенә лә хәтеренән сығарырға тейеш түгел... һин дә... ҡарындаш... яҡшы хәтерләп ҡал... Әсәйем минә ҡалай һөйләгән, шулай... теп-теүәл көйө Иштуганға һөйләп бирерһек--. Беренсе — иң мөһим шарты — һалдат һәр саҡ ҡыйыу булырға, ҡурҡыу, икеләнеү, сигенеү кеүек түбән тойғоларҙан азат ҡаһарман булырға тейеш. Икенсе изге шарт — үлгән^ дуҫтың түгел, үлгән дошмандың да ебе-энәһенә лә теймәҫкә — талаусы булмаҫҡа... Еңелгәнде талап байырға маташыусы йылғыр байҙар ҙа була һуғышта... Әгәр ҡулыч ундай бысраҡ эшкә ҡағылһа, бел — һуғышсы тигән иң мөҡәддәс исемгә тап төшөрҙөң, ата-бабанан ҡалған изге йоланы хурланын,.-. Ундай һалдат иң хурлыҡлы ҡурҡаҡ үлеменә дусар буласаҡ... Өсенсө шарты,— тине әсәйем,— иленә, ғаиләнә һәр саҡ тоғро булып ҡал... Хатта күңелдән генә лә уға хыянат итмә... Ошо шарттарҙы теүәл үтәһән, инша алла, дошманды еңеп, иҫән-һау ҡайтырһын, улым,—тине әсәйем...—Әгәр инде ҡорбан булырға яҙған булһа, илен, уландарын аҙаҡ ғорурланып иҫкә алырлыҡ итеп, яу ҡырында ҡалырһың... Еңелеп түгел, енеп үлерһең, улым!..

Яралы, тағы ниҙер әйтергә уйлап, тәрән уйланып ятты. Унан тағы шул әкрен, өҙөк-өҙөк тауыш менән артабан һөйләне.

— Әлбиттә, был бетеүҙең ҡиммәте — унда ысынлап уҡ һалдатты үлемдән, ҡурҡаҡлыҡтан, түбәнлектән һаҡлай торған ниндәйҙер хикмәтле, тылсымлы кес булыуында тормай инде ул, ҡарындаш... Ә ышаныуҙа — әгәр ҡыйыу, батыр йөрәкле, тоғро, саф күңелле, изге теләкле һалдат булһам — хикмәтле бетеү мине уттан-һыуҙан һаҡлаясаҡ тип ышаныуҙалыр... Беҙҙең һуғышсан халыҡтың шәп һалдаттар тәрбиәләп етештереүҙәге үҙенсә бер аҡыллы хәйләһе инде был...

Яралы тыныс, моңһоу ғына йылмайып алды:

— Әйтергә кәрәк, «тылсымлы бетеү» мине лә бик оҙаҡ һаҡланы... Герман һуғышынан бер яраһыҙ ҡайтылды... Пехотала... һәр саҡ тип әйтерлек, алғы һыҙыҡта булһам да... Хәҙер бына граждандар һуғышында өс йыл буйына тип әйтерлек һәр саҡ пуля аҫтында...

Ахыр килеп бына... тәүге һәм һунғы яра... Их ҡарындаш... Батшаһыҙ, байҙарһыҙ төҙөләсәк яңы тормошто бик күрге килә ине лә бит... Шул тормошто яулашырға ла, төҙөшөргә лә теләп йән аямай һуғышып йәшәлгәйне лә бит... Ни хәл итәһен,...

һалдат ҡапыл тыны быуылып тынып ҡалды. Унын, аҡһыл йөҙө буҙарып китте. Бер аҙҙан ул, ауыр итеп тын алып, күҙен асты. Айһылыуҙын. аптыранып, ҡурҡынып ҡалған күҙҙәренә иҫ киткес айныҡ, тыныслыҡ менән иғтибарлап ҡарап алды.

— Ҡарындаш, һин ҡурҡма... Ҡайғырма... Үлеү бер ҙә ҡурҡыныс нәмә түгел икән ул... Үкенер урыным да юҡ... һалдатлыҡ бурысымды ла, уллыҡ бурысымды ла аҙағына хәтле үтәнем... Полкты дуҫыма, Хамматҡа, тапшырып өлгерҙөм... Мин бит ярты йылға яҡын унын. урынында... Полк командиры булдым... Хәҙер ул үҙе яранан һауығып ҡайтты... Эштәр хәҙер һәйбәт китер...

һалдат ауыр көрһөнөп алды:

— Эйе... Кисә генә кинәнә-ҡыуана полкты Хамматтың үҙеиәтапшырғайным...

Айһылыу һалдаттын, койкаһы янында таш һын кеүек ҡатып торҙо: ниндәй ҙә булһа берәй һүҙ ҡатырға теле әйләнмәне, үкһеп илап ебәрергә тауышы сыҡманы, күҙенә йәш килмәне. Әйтерһең, унын, тауышы ла, күҙ йәштәре лә ҡороп, ҡатып ҡалғайны был ваҡытта. Бигерәк тә ғәҙәти түгел һымаҡ ине шул был үлем унын, өсөн. Буйһын, төҫ-баш, аҡыл яғынан да, изге күнелле, ҡаһарман йөрәкле кеше булыу яғынан да тәбиғәттен, иң камил өлгөһө булып һаналырҙай ошо ғәжәп кешене һалҡын үлем бына-бына үҙ ҡосағына аласаҡ... Мәңгегә... Мәңгегә яҡты донъя менән хушлашасаҡ ул... Үҙе еҙөлөп яратҡан, унын өсөн йәш ғүмерен йәлләмәй биргән матур донъя менән... Әй, ниңә шул хәтле ғәҙелһеҙлек хөкөм итә кеше еҫтөнән?!.

Шуның бөтәһен белә, аңлай, тоя тороп, нисек ул шул хәтле сабыр кисерә ала икәк үлем алды аҙабын? Улай ғына ла түгел, шундай аңлы, аҡыллы, сабыр итеп, ырыуының тоғро, батыр, ҡыйыу һуғышсылар әҙерләү юлындағы быуындан быуынға күсеп килгән йолаһы — аманат хаҡында ҡайғыртырға ла онотмай бит әле. Юҡ-юҡ, былар береһе лә Айһылыуҙың аңына барып етерлек, ул төшөнөрлөк кенә хәлдәр түгел ахыры...

Айһылыуҙың күҙ алдары ҡараңғыланып китте. Аяҡ быуындары тотмай башлағандай итеп, елдә сайҡалган тал сыбыҡ шикелле бәүелеп торҙо. Яралы һалдат, күрәһең, уның хәлен аңлап та алды һәм йәһәтерәк үҙ янынан ебәрергә тырышты...

— Ҡарындаш...

Уның тауышы баяғынан да әкренерәк, яғымлыраҡ ине.

— Ҡарындаш, бар әле... Врачты саҡыр әле... Миңә унын. менән дә әҙерәк һөйләшеп алырға кәрәк ине... Йәһәт кенә килһен әле...

Айһылыу, үкһеүен көскө тыйып, операцмя палатаһына йүгерҙе. Ләкин инә алманы. Унда шундай ук ҡаты яралыға ашыгыс операция бара ине. Ул ҡайтанан Шаһиморат яныиа йүгереп килде.

— Агай, врач хәҙер килеп етә...— тип йыуатып торорга тсләп ауыҙын асты, ләкин һүҙсн әйтә алманы, ашығыи һалдаттың ҡул тамырына тотондо. Әммә һун. ине индс. Батыр, тоғро һалдат донъя менән хушлашҡайны. һирәк осрай торған батырлыҡ һәм сафлыҡ төйәге ҡыйыу рух мәңгелеккә осҡайны...

Айһылыу үҙ-үҙен белмәй палатанан атылып сыҡты, урман эсеиә йүгереп инеп китеп, ҡайҙа барғанын, ни эшләгәнен хәтерләмәй, ары-бире йүгереп йөрөнө, ахыр, бер төптән өс олон ебәреп, кескәй аҡлан уртаһында мөһәбәт ҡапырайып үҫкән ҡеүәтле имән төбөнә барып ауҙы. Үтә эсе бошҡан ауыр минуттарҙа уйланып, терлө хыялдарға бирелеп ошонда ултырырға ярата ине ул.

Имәнден. бер олонон ҡасандыр осонан төбөнә хәтле йәшен уты йыртып үткән. Ул урындың ҡабығы йоҡа, ҡыҙғылт йөй булып уналған... Айһылыу имәнде ҡыҫып ҡосаҡлап, ҡыҙғылт йөйе буйлап һыйпап -ҡуйҙы.

«Исмаһам, кеше лә ошо имән шикелле үҙ яраһын үҙе ямап-уңалтып, бөтә булған ауырлыҡтарға үс итеп йәшәй алһасы!.. Йә, ниңә үлде инде ул? Нинә, ни өсөн шундай матур, һөйкемлө, һәйбәт кеше донъянан китте?! Эй-й, яманға үлем юк, яҡшыға йөрөм юҡ, тигәндәре ошо булалыр шул инде!..»

Айһылыу йөрәгенен әсенеүенә түҙә алмай һыҡтай-ынғыраша шулай үҙ алдына үҙе һейләнеп ултырҙы. Ләкин илай алманы. Үкһеп-ҡысҡырып илағыһы килһә лә бер көн эсендә, хатта бер нисә сәғәт эсендә күпме үлем күрә бит ул. Кемгә, нимәгә еткерһен ул күҙ йәштәрен?! Ысынлап та, ул һәр саҡ ошолай илап-һыҡтап, өҙгөләнеп ултырһа, бүтән яралыларға ҡалай ярҙам «тер?.. Унда, палаталарҙа, әлегә тере яралылар көтә лә баһа уны!.. Терeләргә ярҙам итергә кәрәк тәһә.

Айһылыу, ҡапыл һикереп тороп, кирегә йүгерҙе: «Йәһәтерәк бул, иҫәркәй!..»

Бөҙрә аҡ ҡайын аҫтындағы операция палатаһы янында хирург Иванов менән уның ҡатышы елкән медсестра Фаина ниндәйҙер мыҡты кәүҙәле һалдат менән һөйләшеп тора. һалдаттың көнгә янған баҙыҡ йөҙөн яҡтыртып әленән-әле ап-аҡ тештәре ялтырап китә: «Нимәгә көлә икән? Ни ҡыҙыҡ тапты икән? — тип уйлап ала Айһылыу, аҙымын әкренәйтеп.— Кем икән был? Таныш та һымаҡ... Әллә Иштуған янынанмы икән? Ул ебәрҙеме икән әллә?..»

Ул шулай уйлана-уйлана палата янына килде, йерәгенен, тағы ҡаты тулап китеүен һиҙҙермәҫкә тырышып, тыйнаҡ ҡына иҫәмләште.

— һаумы, ағай...

«Эйе, был теге һалдат... Петроградта, Иштуған менән уға лазарет ҡапҡаһы төбөндә осраған бәһлеүән ине... Исемен белергә өлгөрмәй ҡалғайнылар улар...» — Айһылыу, үкһеп илап ебәреүҙән ҡурҡып, керпектәрен түбән төшөрҙө, бүтән һүҙ өндәшә алманы. һалдат уға күңелле йылмайып, көр тауыш менән:

— Ҡарындаш!—тип өндәште.— Ниңәлер бик бойоғоп киткән кеүек күренәһең түгелме? — тип иғтибар менән ҡарап алды. Унан шаян йылмайып, тағы ла көрөрәк тауыш менән,— дүртенсе эскадрон командиры Арыҫлан Байғужин тигән ағайын. булам. Таныш булайыҡ,— тип, шпорлы үксәләрен шалтырата һуғып, честь бирҙе. Унын, киң, асыҡ йылмайыуынан, шаян ҡарашынан бетәһенең дә күңеле асылып, йөҙө яҡтырып киткәндәй булды. Ләкин һалдат ашыға ине. Етди һүҙгә күсте:

— Килеп сығып һәйбәт иттең әле, ҡарындаш,— тип тағы Айһылыуға ентекләп ҡараны. Унан гимнастерка кеҫәһенән бер конверт алып уға һондо:

— Мә, ҡарындаш, ошоно Иштуған ҡустыға тапш-ыр..

Конверт, кеҫәлә оҙаҡ йөрөтелгәнгә, ахыры, бетәрләнеп, һарғайып бөткәйне. Айһылыу өнһөҙ-һүҙһеҙ генә уны

алды, ни аңларға, ни әйтергә белмәгәндәй, ҡулында әйләндереп-тулғандырып ҡарап торҙо, ул арала һалдат ашығып хушлаша ла башланы:

— Ҡабаланам. Мин бит ике кеше өсөн һуғышам . Өлгөрөргә кәрәк! Бер пуляны үҙем өсөн атһам, икенсеһен Закир дуҫ өсөн атам бит мин. Аңланыңмы, ҡарындаш?! — тип өҫтәне, үксәһендә зыр әйләнеп, тағы честь бирҙе лә, атына һикереп менеп, елеп сығып та китте.

Һалдат туп, пулемет тауыштары яңғырап ишетелеп торған урман артына инеп юғалғас, врач, ҡәнәғәт йылмайып, баш сайҡап ҡуйҙы:

— Бына һиңә тағы бар бөтмөшө менән арыҫлан ир — ысын һуғышсы! — тип ҡуйҙы.— Бер үҙе дошмандыц стройҙа барған ротаһына пулеметтан ут һиптереп, ҡурҡытып тараҡкан да, бөтә медикаменттары менән санлетучкаһын, фельдшерын әсир итеп беҙгә алып килгән. Шуныһы ғәжәп — батырлыҡ эшләгәнмен икән тип уйламай ҙа бит ул. Уның өсөн, күренеп тора, был бер ябай эш. Хатта мәҙәк хәл!.. Ә бындай эште эшләр өсөн, бик ҙур ҡыйыулыҡ та, таҫыллыҡ та кәрәк бит, ә?

Ул һаман шул яҡшы күңелле, ҡәнәғәт йылмайыуы менән ҡатындарға алмаш-тилмәш ҡарап алды:

— Һеҙ, Айһылыу, Фаина нисек уйлайһығыҙ? Дөрөҫтө әйтәмме мин?

Был көтөлмәгән хәлдәрҙән үтә ҡаушап, аптырап ҡалған Айһылыу уға бер ни тип тә яуап ҡайтара алманы.

— Медикаменттар хаҡында ғына әйтә алам,— тип йылмайҙы Фаина.— Медикаменттарға мохтаж саҡта, ул бит беҙгә хазина бүләк итте! Ҡандай бай аптека! Был бит мөғжизә! Беҙҙец мохтажлыҡты ҡайҙан белгән тиген әле! Вот шаянды һин УНЫ! Беҙҙен, дошмандарҙы әйтәм әле, медикаментҡа ҡалай байҙар икән!.. Бер мохтажлыҡ та күрмәйҙәр икән!..

— Шулай булмайынса... Уларға бит бөтә нәмәне Антанта бүлеп тора,— тип әсенеп ҡуйҙы хирург.— Әгәр шулай булмаһа, беҙ инде был бөтә төр батша ялсыларын әллә ҡасан тарих сүплегенә һепереп түккән булыр инек. Ҡалаларыбыҙҙа, ауылдарыбыҙҙа һуғыш емереп бөткән хужалыҡты юлға һалырға керешер инек...

Фаина, иренә ҡушылып, бошонҡо ғына көрһөнеп ҡуйҙы:

— Һинең менән беҙ икәү ҙә улдарыбыҙ янына ҡайтыр инек.— Аһ, ҡалай һағындым мин уларҙы...

— Ә Шаһиморат ағай үлде лә китте...— тип көтмәгәндә һүҙгә ҡатышты Айһылыу, үҙе шунда уҡ үкһеп илап ергә һығылып тештө.



— Беләм... Мин янына барғанда, һыуынып та етмәгәйне... Әммә нимә эшләп була?!

— Ул беҙҙен, яҡтыҡы ине... Әгәр һеҙ белһәгеҙ ине.. Ниндәй кеше ине бит ул!..

— Беләм, ҡәҙерлем, беләм, тип ҡабатланы врач әкрен генә.— Беләм... кисә бит мин уға үҙем операция яһағайным...

Эйе, ул уны яҡшы белә ине Врач үҙе лә Оло Эйек буйынан ине. Оло Эйек буйында уны ла бөтә кеше белә, рустар ҙа, башҡорттар ҙа берҙәй уны тәрән хөрмәт итәләр ине. «Шәп хирург, һиҙгер йөрәкле яҡшы кеше» тигән дан ҡаҙанған врач ине ул унда. Сәлимә еңгәнең бысаҡ яраһынан һуң Хамматты ла һауыҡтырған хирург Иванов ине ул. Быларҙың бөтәһен Айһылыу ҙа яҡшы белә Ләкин уға барыбер ауыр ине — шундай шәп врач та Шаһиморатты һаҡлап алып ҡала алмаған өсөн икеләтә ауыр, үкенесле ине шикелле уға.

— Доктор, шулай уҡ һис тә ярҙам итеп булмаҫ инеме ни уға? Ул шундай һау, көслө кеше... Бәлки, яраны еңер ине... Әгәр берәй...— тип бала кеүек һығылып иланы Айһылыу.— Бигерәк тә әрәм булды шул... Әллә ниңә..

Хирург иплэп кенә унын, янына, ергә ултырҙы. Арыҡ яурынынан аталарса иркә генә ҡағып:

— Их, ҡәҙерлем...— тип көрһөнөп ҡуйҙы.— Яра ҡарында ине шул... Эске ағзалары зарарланғайны... Әгәр алып ҡалырлыҡ булһа ине...

— Ул шул хәтле тын, тыныс... Хатта һис тә үкенмәйәрнешмәй үлде лә китте һымаҡ...— тип һаман үкһене Айһылыу,— шул хәтле ябай, ғәҙәти хәл һымаҡ итеп... һуңғы минутына хәтле ап-асыҡ, яҡты аңында көйө бит әле...

— Эс-ҡарынында ҡот осҡос ҡаты ауыртыу барған саҡта...— тип ҡуйҙы врач та, әсенеп.— Тик, ҡәҙерлем, ул быны һиңә белдермәгән генә. Ул бит ысын батыр ирҙәргә генә хас ҡаты ҡыйыулыҡ, түҙемлек, бирелгәнлек менән һуғышты... Үлгәндә лә шулай булып ҡалған икән..

— Йә, шунан ни мәғәнә?! Кеше юҡ бит инде! — тип һаман баяғы үпкәле тауышы менән ҡарыулашты Айһылыу.— Беҙгә бер-бер артлы нисек үҙебеҙҙен батыр һуғышсы була, сабыр, түҙем үлә белеүебеҙҙе раҫларға ғына ҡаламы ни инде?! Ирҙәр шуның өсен генә тыуалармы ни донъяға?!

— Һуғыш бит кешене шулай ит кеүек тураҡлай.. Беҙ, ҡәҙерлем, нимә эшләй алабыҙ? Беҙ бит медиктар ғына, алла түгел... Үлемде булдырмаҫ кес беҙҙә юҡ.. — тип һаман баҫалҡы уйсан ғына ҡарыулашты врач та.

Унан ҡатынын, беләгенән тотоп, янына ултыртты.— Ҡәҙерлем, ултырсы... Нинә баҫып тораһың... Ял ит... Ҡоштар һайрауын тыңлайыҡ... Ишетәһеңме, улар бит яҙға, йәшәүгә дан йырлайҙар... Шулай ҙа донъяла йәшәүе бик тә һәйбәт бит!.. һин нисек уйлайһың, ҡәҙерлем?!

Айһылыуға врачтың яралыларға ла, медицинский персоналга ла һәр саҡ шулай йомшаҡ ҡына итеп «кәҙерлем», «һөйөклөм» тип өндәшеү ғәҙәте башҡа ваҡытта мәҙәк, йәки сәйер генә тойола ине. Ләкин бөгөн унын, ошо бер ҡатлы иркәлек һүҙҙәрендә лә уға ниндәйҙер бошонҡолоҡ, моцһоулыҡ янғыраған һымаҡ тойолдо. Унын ваҡытһыҙ ағара башлаған етен сәсе, ҡабарынҡы, ҡупшы мыйығы бөгөн бөтөнләй ағарып, бурыл ат ялына оҡшап киткәндәй күренде. Асыҡ зәңгәр күҙҙәрендә лә арыганлыҡ, көсһеҙлөк саткылары сағылып китә һымаҡ ине.

— Эй-й, ҡасан ғына бөтөр икән был һуғыш?! — тип тагы ауырыраҡ уфтанып ҡуйҙы Айһылыу. һәм ҡапыл тороп, йәш тулы күҙҙәрен һөртә-һертә, палаталар ягына китеп барҙы.

— Беҙҙен һәр сак сабыр, баҫалҡы ҡыҙыбыҙга бөгөн ни булган? — тип аптырап ҡалды врач.— Күпме вакыт бергә эшләйбеҙ, әммә унын, бындай сагын тәү тапҡыр күрәм...

— Ире күптән күренгәне юҡ... һәр бер яңы килгәп яралыны Иштуған түгелме, тип ҡалтырап каршы ала бит ул...— тип анлатты Фаина.— Бына шул өпһөҙ борсолоутүҙемдән сыгаралыр уны...

— Етмәһә, Шаһимораттын унын күҙ алдында үлеүе лә...— тип, врач үҙе лә ҡайғылы өҫтәп куйҙы.— Шаһиморатты юғалтыу минен. үҙемә лә еңел түгел... Мин уны малай сағынан уҡ беләм бит... Шәһит ҡарттың — ғәжәп һәйбәт кешенең улы ине бит ул... Иң югары кешеләр принцибы менән йәшәй торған кеше ине атаһы... Улы ла шул беркөт тоҡомонан ине... Эйе, бар ине кешеләр... ысын кешеләр... Хеҙмәт һәм яу батырҙары...

— һәйбәт кешеләр иң тәүге утты үҙҙәренә алалар ҙа шул...— тине Фаина, моңһоу ғына көрһөнөп.— Ут эсенә ин беренсе булып ташланалар... Шуға, бәлки, беренсе булып үләләрҙер ҙә...

— Эйе... һин хаҡлы, ҡәҙерлем, дөрөҫтө әйтәһең — ундай кешеләр яуызлыҡтын. юлын быуыр өсөн һис тә ике уйлап тормай, үҙ күкрәктәрен ҡалкан итеп ҡуялар... Кеше йәшәһен өсөн, көрәшә лә, кәрәк икән, ғүмерҙәрен ҡорбан итә лә беләләр... һоҡланам шундайҙарға... көнләшәм хатта...



Фаина, иренең маҡтауҙы яратмауын белһә лә, арыған башын уның яурынына һалып, битенән һөйөп алды:

— һин бит үҙең дә шундайҙарҙан, йәнем... Нинә көнләшергә?!. һин бит үҙең дә, тап шул кеше йәшәһен өсөн тип, граждандар һуғышы башланған көндән алып фронтҡа үҙ теләгең менән китеп барҙың... Етмәһә, мине лә алып кнттең... Кескәй генә улдарыбыҙҙы әсә ҡулына ғына ташлап ҡалдырҙын--. Былар бөтәһе лә шул революция өсөн эшләнгән ҡаһарманлыҡ түгелме ни, йәнем?! Бында, ялан госпиталендә, һин бер янғыҙ врач... Ял да, алмашсы ла юҡ... төнөн һаҡта!.. Кеше өсөн, ил өсен, революция өсөн эшләнгән ҡаһарманлыҡ түгелме ни был?!

Доктор үҙенен, ҙур ап-аҡ ҡулдарын ашығып һелкеп ҡуйҙы.

— Йә, ҡәҙерлем, һөйәклөм, улай һөйләмә..

— Ярар, һөйләмәйем, йәнем, һейләмәйем...— тип Фаина ла шунда уҡ килеште.— Ярар, һинеңсә булһын, әйҙә, ҡоштар һайрауын тынлайыҡ.

— Бынынһы дөрөҫ булыр.

Улар бер-береһенә һыйынып тынып ҡалдылар. Алыҫта һаман туптар дөһөрләне, пулеметтар бытылданы, батып барған ҡояштың ҡып-ҡыҙыл нурҙарына ерҙән ҡыҙыл ут телдәре үрелде. Палаталарҙан яралыларҙың ың,-ғырашыуҙары, ауыр йоҡо аралаш һаташыуҙары ишетелеп торҙо. Ә түбәндә, туғайлыкта, һандуғастар сутылданы. Кәкүктәр саҡырҙы. Яҙ бит! Мөхәббәт һәм бәхет осоро. һуғыш тип мөхәббәт тә, бәхет тә йоҡлап ятмай.. Көтөп тә тормай ул яҙ... Шуны ҡоштар ҙа аңлай... Ә кешеләр?!

Ҡатыны менән тик ошо хаҡта һөйләшкеһе килде врачтың. Бөтәһен онотоп, йәшәү хаҡында, бәхет хаҡында, һөйөү хаҡында ғына уй йөрөтөргә теләне ул... Әммә теле әйләнмәне, күңеле тартманы. Атыш тауышы ҡолаҡты ярып торғанда, күрәһен,, йәшәү хаҡында һөйләшеүе еңел түгелдер... Етмәһә, ҡатыны тағы шул һуғыш хаҡында һүҙ башланы.

— Әйткәндәй, ҡасан быныц аҙағы булыр? Ҡасан беҙ улкайҙарыбыҙҙы күрербеҙ? һин, йәнем, ошо аҡ поляктарҙы еңгәндән һуң һуғышты бөтөр тип иҫәпләйһенме?

Хирург ендәшмәне: «Ысынлап та, ҡасан һун,?!. Беҙҙең малайҙар был йылдар эсендә үҫеп, ҙурайып бөткәндәрҙер... Әсәйем, бахыр, бик ҡартайғандыр... Балалар ҡарауы бер үҙенә еңелме ни...» — тип уйлап алды. Ә ҡатыны менән бөтенләй икенсе хаҡта һөйләште:

— һуғыш ул, һөйөклөм, күптән бетөр ине. Тик, үҙен, күрәһең бит, бер дошманды еңһәк, икенсеһе баш ҡалкы-

тып сығып ҡына тора... Береһен тукмап йығып һалһаң — икенсеһе күҫәк күтәреп тороп баҫа. Бына бит былтыр бөтәһен дә еңеп бөткән һымаҡ булғайнык: колчаксылар, аҡ казактар, деникинсылар, юденичсылар... Барыһы ла тармар ителгәйне. Ил иркен һулап ҡалған һымаҡ булғайны... Ә, бәхетиһәң, был «Антанталағы әфәнделәр», бында аҡ поляктарҙы әҙерләп өлгөртөп тә торғандар икән... Уйлап ҡара, теше-тырнағына хәтле ҡоралланған алты армия ташланылар бит беҙҙең өҫкә. Беҙгә ни эшләргә ҡала шулай булғас? Мөҡәддәс рус ерен ете-ят илбаҫарҙарҙан тапатып, тыныс ҡарап ята алмайбыҙ ҙа беҙ... Ундай хәл булманы, булмаҫ та... Бына бит, ҡәҙерлем, кемдәр беҙгә һуғышты бөтөрөргә ирек бирмәй ыҙалай!..

— Эйе шул... Баҫып киләләр ҙә инәләр шул...— тип, күңелһеҙ генә ризалашты Фаина ла.

— Килделәр. Тәү көндәрҙә аҡ поляктар ҙа бик шәп килделәр. Овруч, Коростень, Житомир, Киев... бер-бер артлы улар ҡулына эләкте. Ҡорал яғынан да, ғәскәр яғынан да бик күп өҫтөн торалар ине улар... Беҙҙең, ғәскәргә аҡ поляктарҙы ҡыйратыу ғына түгел, петлюрасылар, махносылар тигән төрлө бандаларға ҡаршы ла һуғыш алып барырға кәрәк булды бит...

Эйе, һәр бер яҡшы башланғыс, изге эш мен, төрлө ҡаршылыҡ та тыуҙыра шул... Был инде быуаттан быуатҡа шулай килгән... Ә бит беҙҙә хәҙер яҡшы башланғыс ҡына түгел, донъяла тәү тапҡыр эшсе-крәҫтиән власы төҙелгән, монархия ҡолатылған. Бөтә булған милләттәр, расаларҙың хеҙмәтсәндәре өсөн берҙәй тигеҙлек, туғанлыҡ, азатлыҡ талап итеп дау һалынған!.. Антанталағы әфәнделәр быға нисек сыҙап торһон? Халыҡты «һөйөүсе» буржуаз интеллигенция вәкилдәренә лә хатта быуаттар буйы йәшәп килгән иҫке ҡараштарҙан айырылыуы енел түгел... Ә бында беҙ азатлыҡ, тигеҙлек урынлаштырабыҙ... Эйе, һөйөклөм, капиталист әфәнделәргә тыныслыҙланырға урын бар шул хәҙер. Уларҙын, бөтә донъяла иң ышаныслы терәге булған батшалыҡ емерелде. Халыҡтар төрмәһе юҡ ителде бит!.. Бына шуға инде улар нисек тә батшалыҡты кире торғоҙмаҡсылар... Шуның өсөн беҙҙең өҫкә һуғыш менән ябырылып киләләр... Шулай булғас, беҙгә һуғышырға, еңергә генә ҡала, ҡәҙерлем... Шулай бит, ә?

Врач ҡатынының ҡайғылы күҙҙәренә төбәп ҡарап, арҡаһынан һөйөп ҡаҡты ла күцелле итеп өҫтәп ҡуйҙы: — Әммә шуныһы хаҡ — нисек кенә көсәнмәһендәр, иҫкелек сигенә, яңылыҡ еңеп килә. Тормоштоң ҡануны шундай. Бына бит беҙҙең йәш Совет Россияһы был юлы ла үҙенен.



ин, яҡшы частарын был фронтҡа ла бик йәһәт туплап өлгөрҙө. Дошмандың томшоғо емерә һуғылды ла. Бындағы ғәскәргә ярҙамға Буденныйҙың атлы бригадаһы, башҡорт атлы бригадаһы, шулай уҡ егерме бишенсе Чапаев дивизияһы килеп етеү менән фронттағы хәлдәр беҙҙең файҙаға үҙгәреп тә китте бит, ҡәҙерлем. Аңланыңмы?!

Хирургтың яҡты зәңгәр күҙҙәре ғорурлыҡ менән балҡып китте: — Беҙҙец башҡорт бригадаһы бында һөжүмде ҡасан, май аҙағында башлап ебәргәйнеме әле, Фаина?.. һай, шәп булғайны, ә! Килеп төшкән ыңғайға, марштан уҡ, ә?!

— Ҡуйсы, йәнем, хәтерләтмә шуны!..— тип ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы Фаина.— Аһ, ҡандай ҡот осорғос һуғыш булды бит ул! Днепр өсөн булған һуғышты, беҙҙең ғәскәрҙең йылғаны нисек аша сығыуын, ниндәй ҡан ҡойошло һуғыш кисереүен хәтерләһәм, мин ошоғаса ҡыуаныу, уйнау-көлөү һәләтлегемде юғалтам һымаҡ... Ни хәтле ғазап, күпме ҡан... Аһ, аллаҡайым...

— Ә һин, һөйөклөм, һәр саҡ һәйбәт, ҡыуаныслы яғын ғына хәтерлә ул һуғыштың, һин бит беләһең, беҙҙең. башҡорт егеттәре тәүгеләрҙең тәүгеһе булып Днепрҙы йөҙөп сыҡтылар... Шул хәтле тәрән, киң йылғанын. ҡаршылығын еңделәр... Унан шул ыңғайға дошман өҫтөнә арыҫлан кеүек ташландылар. Дошман түҙмәне, ҡурҡты, паникаға бирелеп ҡаса башланы... Ниндәй һәйбәт, ҡыуаныслы хәл булды бит был!..

һин, ҡәҙерлем, ғәҙәттә аҙ һүҙле, хатта оялсан, ябай егеттәрҙен. үлем ҡаҙанында ҡайнағанда нисек ҡурҡыу белмәҫ баһадирҙарға әйләнеүен, үлем ҡурҡынысын уларҙын. нисек икеләнмәй еңеүен, дошманды ҡалай ҡыйратыуын, ецеү артынан еңеү яулай-яулай кешелек матурлығынын, иң юғары нөктәһенә күтәрелеүен хәтерләргә тырыш!.. Эйе-эйе, һейөклем, йылмайма, мин быны һинә бик етди ышаныс менән әйтәм. Аңла, һөйөклөм, кешенең һуғышта, үлем эсендә күрһәткән батырлығы — иц юғары матурлыҡ бит ул. Бының шулай икәнен мин үҙ күҙем менән күрҙем... Үҙ йөрәгем менән тойҙом.. ышан, һөйөклөм... Ә һәр бер ысын матурлыҡ — йәнгә аҙыҡ бирә... Ҡайғы түгел.

Фаина һөйкемлө йылмайып иренә ғәжәпләнеп ҡарап алды:

— һине анлай алмайым... Төшенмәйем... һуғышүлештән ниндәй матурлыҡ табыу мөмкин? . Хәйер, һинен, менән беҙ икәү тормошта был юлды үҙ иркебеҙ менән

һайланыҡ... Ул юлда татлы хыял, матур теләктәрҙән башҡа бер ни ҙә, бәлки, юҡтыр ҙа... Шулай ҙа...

— Ниңә хыял ғына булһын, ҡәҙерлекәйем?! Был бит тап шул ысынбарлыҡ та баһа, ҡәҙерлем! — тип, ҡатынына аңлата алмауына бошоноп китә врач.— Йәшәү шул тап шундай батырлыҡтан, матурлыҡтан, үҙ-үҙеңде аямай көрәшеүҙән тора ла бит ул! Һәр хәлдә һуғышта ул шулай. Бына бит, үҙең күреп тораһың, беҙҙекеләр хәҙер аҡ поляктарҙы ҡалай ҡыҫып алдылар! Аҡ поляктар ни өсөн бынауы Горностайполь тигән бер ҡәһәрле урынға сат йәбешеп ята тиһең? Унан да ҡыуылып сыҡһаң, Киевты ла ҡалдырырға тура килер, тип ҡурҡа бит ул! Беҙҙекеләр ҙә быны яҡшы аңлай. Шуның өсөн ҡан ҡойошло һуғыштар бара. Беҙҙең ғәскәрҙәр был һуғышта ла батырлыҡтың, матурлыҡтың иң мөғжизәле өлгөләрен күрһәтәләр был көндәрҙә... Һоҡланғыс ҡыйыулыҡ, бирелгәнлек өлгөләрен... Аңланыңмы, һөйөклөкәйем?!.

— Һиңә, йәнем, ятып әҙерәк ял итеп алырға кәрәк ине...— ти Фаина, иренә хәстәрле ҡараш ташлап.— Киске обходтан һуң һиңә мотлаҡ ял итеү кәрәк... Ишетәһеңме, ҡандай канонада бара!.. Һин ғашиҡ булған ҡыҙыл батырҙарың тиҙҙән тағы арбаларға тейәлеп килеп етерҙәр... Яралылар килер тим...

Иванов, һаман көсәйә барған һуғыш тауышына ҡолаҡ һалып, бер аҙ тынып ултырҙы. Унан тағы:

— Эйе, был Горностайполь үтә ҡаты һөйәкле емеш булып сыҡты бит әле. Ике яҡтан да унын, өсөн күпме ҡан түгелә бит, ә,— тип бошоноп китте. Ул бөгөн, ниңәлер, ғәҙәттәгенән уйсанырак та, һөйләнсегерәк тә ине.— Башта уны разинсылар дошмандан таҙарттылар. Аҙаҡ поляктар уны тағы баҫып алдылар. Шунан һуң, уларҙы чапаевсылар ҡыуып сығарҙы. Аҡ поляктар тағы ла күберәк йәйәүле ғәскәр, кавалерия, хатта авиациянан торған өҫтәлмә көс алып йәнә атакаға ташландылар. Антанталағы әфәнделәр бай ҙа, йомарт та булып сыҡты улар есен... Ҡорал да, кеше көсө лә йәлләмәнеләр... Шулай итеп Горностайполь тағы дошман ҡулына күсте. Был юлы аҡ поляктарҙы унан беҙҙең. башҡорт кавалерия бригадаһы алып ырғытты. Аҡ поляктар бик күп ҡорал һәм әсирҙәр ҡалдырып ҡастылар... Ә бер аҙҙан улар тағы ла күберәк өҫтәлмә көс алып һөжүмгә күстеләр. Беҙҙең ҡыҙыл һыбайлыларҙы ла ҡыҫырыҡлап сығарҙылар.

Хәҙер бына етмеш бишенсе дивизия менән башҡорт бригадаһына юғары командование Горностайполде таҙартырға, дошманды артабан ҡыуып алып китергә бойороҡ биргән. Бына шул оло маҡсат өсөн ҡаты һуғыштар бара унда... Бәлки, иң аҙаҡкы һуғыштарҙыр ҙа...

— Ана, әйттем бит... Яралыларҙы алып киләләр ҙә...— тип, хафаланып, Фаина һикереп торҙо.— Ҡайһылай күмәк!

Урман яғынан яралылар тейәлгән ылауҙар килеүен күреп, Айһылыу ҙа палатанан йүгереп сыҡты.

— Эй алла, тағы кемдәр генә икән инде?!.

— Етте, һөйөклөләрем... кәрәкһеҙ һүҙҙәргә урын бөттө,— тип, хирург инде етди тауыш менән туҡтатты уларҙы.— Яралыларҙы ҡаршы алырға әҙерләнәйек. Һөйләнмәй, сәбәләнмәй... Үҙебеҙгә... Аңланығыҙмы, ҡәҙерләләрем?..

Һәр кем үҙ урынына баҫты.

* *

Был көндө лә, унын. иртәгеһено лә һугыш гөрһөлдәүе тукталманы ла, алыҫлашмаиы ла. Яралылар килеүе лә кәмемәне. Ялан госпиталенен ғәжәп кешелекле татыу коллективы, үҙ-үҙен онотоп, һәр бер гүмер өсөн көрәште, яралының ауыр хәлен еңеләйтсргә, үлемгә дусар булгандың гүмерен аҙ булһа ла оҙайтырға тырышып, йәнен-йө* рәген биреп эшләне. Фаина менән Айһылыуға күп ҡан юғалткан яралыны үлеүҙән ҡогкарыу өсөн бер нисә тапҡыр ҡан бирергә лә тура килде. Шулай ҙа Айһылыу өсөн был көндәрҙә ин ауыры Иштуған хаҡындагы тынгыһыҙ уй булды: «Тереме икән? Ни хәлдә икән?» — тигән уй һис кенә лә башынан сыҡманы. Иштуғанға Шаһиморат ағай ҡалдырган аманатты тапшырыр көндө, Арыҫлан агайҙың хатын бергәләп укыр саҡты күреп булырмы, тип бик йыш сабырһыҙланды. Ул хатта нимә яҙылғанын белгеһс килеү ҙә уға тынғы бирмәне. «Конвертты асһам... Хатты уҡыһам, Иштуған асыуланырмы икән?» — тигән тынғыһыҙ һорау ҙа башына бик йыш килде. Ахыр бер саҡ, киске обходтан һуң, үҙе яраткан теге имән янына йүгерҙе. Уның йәшен атҡан яралы олонона арҡа терәп, улән өҫтөнә ултырҙы. Халат кеҫәһенән конвертты алғас, асырға баҙнат итмәй, оҙон-оҙаҡ уны ҡулында әйләндергеләп ултырҙы. Ахыр башына ҡапыл ҡот оҫкос бер шик килеп тертләп китте:

«Эй-й, был хат, бәлки, Иштуғанға түгелдер... Иштуған хаҡындалыр, бәлки... Арыҫлан ағай, бәлки, Иштуғандын, ауыр хәлен... үлемен шулай белдертергә булғандыр минә?!.»

Ул шундай уй менән үҙенең тамам ҡотон алып, үкһей-үкһей тороп йүгерҙе Унан тағы кире килеп имәнгә арҡа терәп ултырҙы Баштан төшөп ҡабаттан уйларға кереште Был юлы башына тынысыраҡ, аҡыллыраҡ уйҙар килде: «Был хатты биргәндә Арыҫлан ағайҙың йөҙө бик шат, шаян ине лә баһа!. Иштуғанға берәй хәл булһа, ул шулай күңелле итеп көлә алыр инеме ни?!» — тип, ул үҙен тынысландырып ук ҡуйҙы Ахыр килеп: «Йә, Иштуған ни хәлдә тип көйөнөүем етмәгән, был хатта нимә яҙылған икән тип тә баш ват, имеш! Хатты асырға ла уҡырға, тынысланырға!» — тигән ҡырҡа ҡарарға килде. Йөрәгенең атылып сыға яҙып дөпөлдәүенә ҡолаҡ һалмаҫҡа тырышып, ҡабалана-ҡабалана хатты асты. Был, ысынлап та, Арыҫландың Иштуғанға яҙылған хаты булып сыҡты Ул тотош бер дәфтәр ҡағыҙына, ваҡ ҡына ғәрәп хәрефтәре менән үтә йыш, асыҡ итеп башҡортса яҙылғайны

Закирҙың һуңғы көндәре хаҡындағы хикәйәт ине был.

## XII

Был кис Емеш өсөн дә эҙһеҙ үтмәне Хатта унын тормошонда киҫкен боролош яһаны. Сөнки бынан һуң, һәр бер мөмкин булған саҡта, быға са бер кемдең ҡулы теймәгән ҡомартҡылы һандыҡ: «Сезам, асыл!» — тигән һайын асылып ҡына торҙо.

Шулай итеп, Закирҙың һандығындағы китаптар быйыл ҡышты Емешкә аслыҡ-яланғаслыҡты ла, ауырыуһыҙланыуҙы ла оноттора торған дауа булды. Таиба әбей был уҡыу өсөн бер ҡасан да кәрәсин йәлләмәне. Емеште тапма биҙгәге тотмаған һәр кисте улар шулай арығансы уҡынылар. «Мен. дә бер кисә»нән һуц улар ҡулына Фәтих Әмирхандын. «Фәтхулла хәҙрәт» хикәйәһе эләкте. Ғәлимйән Ибраһимовтын, «Йәш йөрәктәр» романын уҡыған саҡта, бигерәк тә унын, һәр нәмәне үтә ентекләп, осһоҙ-ҡырыйһыҙ тасуирға инеп киткән урындарында, Емеш йыш ҡына ауып, йоҡлап та киткеләне. Етмәһә, хикәйә һәм романдар уға, кескәй генә саҡтан әкиәттәр, легендалар яратып өйрәнгән кешегә, «Мең дә бер кисә» хәтле үк яҡын да, еңел аңлайышлы ла түгел, шуға күрә был китаптарҙы ул бик үк шыма, һәйбәт итеп уҡый ҙа белмәй ине әле. Ләкин был хәл уларҙы уҡыуҙан биҙҙермәне. Улар бынан ары ҡыштың һәр кисен тип әйтерлек, Таиба әбей ниндәй ҙә булһа берәй ҡул эше эшләп, Емеш ҡыҫҡырып китап уҡып, бергәләп уҙғарҙылар. Мәжит Ғафури, Дәрдмәнд, Ғабдулла Тукай, Шәйхзада Бабич, тағы башҡа күп кенә шағирҙарҙын, кескәй-кескәй генә шиғри китаптары ла бар ине был һандыҡта. Былары инде Емеш өсөн айырата ҡыуанyслы табыш булды. Сөнки Емеш шиғырйыр ярата, шиғри юлдарҙың гүзәл моцо, тәрән, тейөрөм фекере уны һәр саҡ таң ҡалдырып, табындырып ҡуя ине. Бигерәк тә Ғабдулла Тукайҙың һәр һүҙе, һәр юлы, үҙ йөрәгенән ҡайнап сыҡҡан юлдар кеүек, яҡын һәм ҡәҙерле ине уға. Емеш унын, шиғырын уҡыған ыңғайға ятлап та ала ине. Дөрөҫ, шиғырҙарҙа Емешкә аңлауы ауыр булған һәм тап ана шул аңлайышһыҙлығы менән күңелде айырата үҙенә тартҡан юлдар ҙа, һүҙҙәр ҙә осрай. Ундай юлдарҙы Емеш ҡат-ҡат уҡып, нисек тә айышына төшөнөргә тырыша, ҡайһы саҡта көтмәгәндә Таиба әбей ярҙамға килеп ҡуя.

Бер көндө шулай, киске тамаҡҡа ашағас та, улар ҡунаҡ ейөнә сығып ултырҙы. «Дәрес» Тукайҙын. «Өҙөлгән өмөт» тигән шиғырын уҡыуҙан башланды. Йөрәк тетрәтерлек тормош хәҡиҡәте, ғали рухтың әсе һағышы һалынған был шиғыр, тотошлай уҡ Емешкә аңлашылып етмәһә лә, уны ары ебәрмәй, бик оҙаҡ үҙенә бәйләп тотто.

> «...Әй, мөҡәддәс монло сазым!
> Уйнаның һин ник бик аҙ?..»

«Мөҡәддәс нимә тигән һүҙ икән?» — тип уйлана-ҡабатлай уҡыны Емеш. Мөҡәддәс һүҙенен мәғәнәһенә Таиба әбей ҙә төшөнөп етә алмай ине. Унын, ҡарауы, «Тормош» тигән шиғырҙы «Ауырлыҡ төшһә түҙ, сер бирмәй-нитмәй...»— тигән тәүге юлдарынан алып аҙағынаса аиба әбей тап үҙенә төбәп яҙылған һүҙҙәр итеп, хатта был шиғыр юлдарын уға улы, Закиры, әйтеп ҡалдырған кәнәштәр итеп үк ҡабул итте.

— Түҙ, ти бит, балаҡай, сер бирмә, ти... Түҙәм, балам, түҙәм... Кеше бит ул һине бар булһаң — күрә алмай, юҡ булһаң — бирә алмай. Кешегә сер биреүҙән ни файҙа? — тип, тәьҫирләнеп һөйләнә-һөйләнә тыңланы. Ә Емешкә был шиғырҙың:

> «Сәғәҙәт тауына менһән, үҙен, мен,
> Ни ярҙам килһә лә, килһен үҙендин, ;
> Тимәҫ һис кем: «Минең арҡамда менде,
> Хәҙер йүнләп сәләм дә бирмәй инде!» —

тигән юлдары айырата оҡшаны. Хатта юғары тормош дөрөҫлөгө, йәшәү принцибы булып ғүмерлеккә күңеленә һеңеп ҡалды.

Бер көн шулай улар Шәйхзада Бабичтың «Халҡым өсөн» тигән шиғырын уҡып ултырған саҡта, көтмәгәндә Байрас килеп ингәс, Емеш, оялып:

..Саф көмөштәй йырҙарымды йырламайым
алтын өсөн...—

тигән юлдарҙа туктап ҡалды.

— Уҡы, ҡоҙаса, уҡы. Мин дә тынлайым. Ҡалай һәйбәт укыйһын, да баһа,— тип ҡыуанып өндәште Байрас.— Мин дә шигыр тыңларға яратам.

Емеш ҡыйыуһыҙ ғына йылмайҙы ла китапты ябып уҡ ҡуйҙы.

— Эй ҡоҙаса, ҡоҙаса,— тине Байрас, баш сайҡап,— Улай булғас, тыңла, ҡалған яғын үҙем укып ҡуям.

һәм ул:

Йырлайым тик саф көмөштәй саф йөрәк халкым өсөн,—

тип, Емеш туктап ҡалған ерҙән шиғырҙы артабан укып китте.

Таиба әбей ейәненә иҫе китеп текләп ҡалды:

— Аһа!.. Байрас!.. һин дә укығаның бармы ни был китапты? Ҡасан алып укының? Ҡасан ятлап алдың? Асҡыс миндә генә лә баһа!

— Ул китап, ҡәртсәй, бер һиндә генә түгел дә баһа! — тип яуап бирҙе Байрас, күңелле йылмайып: — һинең һандығың төбөндә ойоп ҡына ятырға яраймы ни ул китапҡа!..

— Шулаймы ни?! — тине Таиба әбей, бер аҙ күнелһеҙләнеп.— Бүтән бер кемдә лә юҡтыр, тиһәм...

Уға быңдай һәйбәт китаптарҙын, униң Закирынан башҡа кешеләрҙә лә булыу, уларҙы кем дә булһа бүтән берәүҙен, дә укыу мөмкинлеге һис тә аҡылға һыймаҫтай нәмә һымаҡ тойолдо.

— һай, йүнһеҙ! — тип, асыуһыҙ ғына бармаҡ янап алды Таиба әбей.— Ниңә мин һинен, шундай китаптар укыуынды ошоғаса белмәнем, ә?! Ә бына һин ҡөрьәндән бер сүрә лә укый белмэйһеңдер әле, йүнһеҙ!

— Дереҫ, ҡәртсәй, белмәйем,— тип килеште Байрас.— Уҡығаным юҡ. Уҡыһам да бер ни ҙә анламаҫ инем. Ә шиғырҙарҙы, хикәйәттәрҙе укыуы ла, анлауы ла еңел... Шулай бит, ҡәртсәй?!

— Униһы шулай ҙа... Йә, ярай... Ниңә шулай төндә, бик һуң йөрөйһөң? — тип Таиба әбей һүҙҙе икенсегә борорға ашыкты.— Йоҡо алмаймы әллә һине лә?..

— Хәл белешергә килдем, ҡәртсәй...

— Ярай улай булғас, рәхмәт. Уҙып ултыр, балаҡай. Хәҙер мин сәй ҡайнатам...

Таиба әбей йәһәтләп аш ейөнә сығып китте. Өйҙөн. түрбаш мөйөшөнә күсеп ултырырға өлгөргән Емеш соҡалтанан көсһөҙ генә төшкән лампа яҡтыһында тағы бер аҙ китапҡа текләп ултырҙы ла, ғәҙәтенсә, китабы бер яҡҡа, үҙе бер яҡҡа ауып, ойоп та китте. Байрас та, ҡуйы ҡаштарын ҡаты. төйнәп, бошоноп тынып ҡалды. Емеште үтә ҡыҙғанып та, уға үҙенен. бер ярҙам да итә алмауы өсөн көйөнөп тә һыҙланды унын. йөрәге.

Емеш ойоуы уҙып, күҙен еаҡ ҡына асып ҡараһа, Таиба әбей менән Байрас тын гына һейләшә-һөйләшә сәй эсәләр ине. Ҡыҙ, тамағы кипһә лә, уянғанын белдереп кешеләрҙе борсоуҙан ҡурҡып, тик кенә ятты.

«Ҡорот менән генә эсәләр, әллә нисә йыл ҡатып ятҡан ҡорот... Икмәк һаман юҡ,— тип бошоноп уйланды Емеш.— Апайым менән еҙнәм сыкмаған да... Йоҡлайҙарҙыр... Ҡорот менән генә сәй эсер өсөн кемден, торғоһо килһен? Ә мин торор инем... Тапманан һун бигерәк тә нык сарсата шул...»

Байрас менән Таиба әбей әкрен, һалма-ҡ ҡына һөйләшеп сәй янында ултырҙылар. һүҙ ғәҙәттәгесә, күберәк шул аслыҡ, ауырлыҡ хаҡында барҙы. Байрас ҡәртсәһенә тиҙҙән ауылда ашхана асыласағы, бөтә астар ҙа, бигерәк тә бала-саға бушлай ашатыласағы хаҡында һөйлоне.

— Бушты һөйләйһендср ҙа, балаҡай? Кем аетар:ш бушҡа ашатып торһон? — тип икеләнде Таиба әбей.— Ҡәртсәйемде йыуатайым, тип һөйләйһсндср, балаҡай!..

— Хөкүмәт. Совет власы ашатасаҡ, —• тине Байрас, етди итеп.— Бына, күрерһен, ысынды әйтәм... һөйләп кенә лә ҡалмайым... Быны йәһәтерәк булдырыу өсен бөтә сараны күрергә тырышам. Мин бит, ҡәртсәй, хәҙер йәштәр союзы ағзаһы. Бөтә кеше хаҡында ҡайгыртырға, хәстәрлек күрергә тейешмен!..

— Бер ни ҙә анламайым. Әммә һинә ышанмай булдыра алмайым, ейәнкәйем,—тип килеште Таиба әбей хәҙер.— һин төптө атайыңа оҡшағанһын бит... Бушты, булмаҫты һөйләмәҫһең. Ышанам.

— һинә лә оҡшағанмын, ҡәртсәй...— тип өҫтәне Байрас, һаман етди итеп.— һин дә шундай бит...

— Яҡшы һүҙен. өсөн рәхмәт, ейәнкәйем. Тик үҙ туранда ла бик үк онотоп ташлама... Үтә ябығып киттен. был арала...

Байрас, күнелле йылмайып, көр тауыш менән:

— Ничего, ҡәртсәй,— тип ҡуйҙы.— Мин бит көслө. һин үҙен әйтмешләй — баһадир! Бирешмәм.

— Бирешмәҫкә тей€ш,— тип ҡаты раҫлап ҡуйҙы Таиба әбей ҙә.— Тейеш!

Байрас, ҡәртсәһененң кәйефе яҡшырыуҙан файҙала-

нып, һүҙҙе үҙе күптән уйлап йөрөгән темаға күсерергә ашыҡты.

— Ҡәртсәй, хәтерендәме, былтыр һин минә, ҡыҙ кешене уҡытып ни файҙа? — тигәйнең. Ә хәҙер күрәһеңме, Емеш һиҫә китаптар уҡып ишеттерә!..

— Әйтмә лә,— тип ҡуйҙы Таиба әбей килешмәкле тауыш менән.— Әлеге, ни әйтһәң дә, шул наҙанлыҡ әйттерә инде ундай һүҙҙәрҙе, балам. Һау булһа, Емеш ҡоҙасаны мин быйыл да уҡырға йөрөтөр инем. Уҡыһын ине, зирәк бит.

— Уҡытыуҙың, ҡәртсәй, быйыл йүне юҡ та...— тип бошоноп ҡуйҙы Байрас.— Беҙ көткәнсә түгел...

— Ни өсөн улай тиһең?

— Берҙән, аслыҡ. Һәр кемдең ауыҙын асһа — үпкәһе күренергә тора бит. Уҡыу, уҡытыу ҡайғыһымы. Етмәһә, уҡытыусының да йүне юҡ. Аҡылға бер төрлө кеше кеүек...

Байрас йәне көйөп тынып ултырғас: — Бейек күтәрмәле ҡатындар ботинкаһы кейеп йөрөй... Муйынына ла ҡатындар яулығына оҡшаған шарф бәйләгән,— тип кәләмһөрәп ҡуйҙы.— Әгәр кем дә булһа уға был хаҡта иҫкәртһә: «Хәҙер модаһы шул унын,— тип ебәрә бит әле.— Хөрриәт заманы, нимә теләйем — шуны кейәм»,— ти.

— Ҡайҙан килгән һун, үҙе?

— Иҫәнбәттән. Әлеге Әхмәҙулла мулланың улы инде. Гөлйыһандын, ире шул бит... Ғаббас мулланың кейәүе...

— Аһа, Сәрүәретдин мәғзүм икән дә! — тип төшөнөп алды Таиба әбей.— Уны ни, атаһы урынына указный мулла булып ҡала, имеш, тип Һөйләйҙәр ине лә баһа?

— Хәҙер Совет власында мөғәллим булыуҙы уңайлыраҡ һанағандыр, күрәһең...— тип ҡуйҙы Байрас. Бынан һун, улар оҙаҡ тынып ултырҙылар.

Ә Емеш Әхмәҙулла мулла тигән һүҙҙе ишетеү менән, үҙенен, мәрхүмә әсәһен хәтерләне. Уның фажиғәле үлемен тағы күҙ алдынан кисерҙе... Был хаҡта ул өлкәндәрҙән ишетеп кенә белһә лә, күреп, кисереп белгәндән дә асығыраҡ, аҙаплыраҡ булып, йөрәк өҙгөс, ҡайғылы төш йәки ҡот осорғос ҡурҡыныс әкиәт һымаҡ булып һаҡлана ине был күренеш уның хәтерендә.

«...Бына ул, ҡорҡолдайы йоҙроҡ хәтле булып сығып торған оҙон тарамыш муйынлы, салыш күҙле ҡурҡыныс бер ҡарт, һәнәк йәптәре шикелле бармаҡтарын хәтәр тырпайтып, бәке янып ултыра... Им-томға, өшкөрөү-төкөрөүгә йәне-тәне менән мөкиббән киткән Сыуаҡай әбей йүгергеләп ей эсендә елпелдәп йөрөй. Үҙе еҙләкһеҙ ниҙер бышылдай. Күрәһең, үҙе уйлап сығарған был им-томдон.



файҙалы буласағына бүтәндәрҙе лә ышандырырға, үҙе лә тамам ышанып тынысланырға теләп аҙаплана. Әленән-әле Сәғүрәнең арыҡ яурынынан ҡағып, шул бер үк һүҙҙе ҡабатлай:

— һинең боҙоҡ ҡанын күп. Бына, алла бирһә, мулла боҙоҡ ҡанынды алыр ҙа һауығып та китерһең,— ти. Емештен. әсәһенең күп һыҙланыуҙан һарғайып кипкән йөҙө бөгөн, бетөнләй ҡаны ҡасып, һөт кеүек ап-аҡ булған. Аҡ йөҙҙә сөм-ҡара ҡуйы ҡаштар, сөм-ҡара түңәрәк ҙур күҙҙәр айырата асыҡ булып күҙгә ташлана. Уның тал сыбыҡтай арыҡ кәүҙәһе бөгөлөп-һығылып киткәндәй була. Ҡанһыҙ ирендәре берсә ҡуркышып, аптырашып тынып ҡалған балаларына, берсә Сыуаҡай әбейгә аҙарынып ниҙер әйтә:

— Күңелем тартмай ҙа... Әллә ҡан алдырмайыммы икән? Атаһы ла ҡушмай ине бит әле,— ти шикелле ул. Ләкин уның һүҙенә иғтибар итеүсе юҡ. Бына мулла уның балаларҙыҡы шикелле нәфис беләгенән ауһыҙ тартып тотоп ала. Бәке менән ниндәйҙер тамырына сәнсә... Беләкте еҙ тастағы йылы һыуға батыра... Ҡан... ҡан... ҡан...

Бына Емештең әсәһе, төҫө тағы ла ныҡыраҡ ҡасып, ағарынып, хәлдән тая барып урынға ауа. Мулла, Емештәрҙен. урындығындағы иң матур нәмәһе — Сәғүрә еңгә ҡыҙ саҡта төрлө-төрлө ептәрҙән теҙеп үҙе һуғып алған, Бибеш ҡыҙыма булыр тип, ошоғаса кер төшөрмәй һаҡлаған ҙур яңы балаҫты ҡултығына ҡыҫтыра ла сығып та китә. Балалар, әсәләре янына йыйылышып, үкһеп илайҙар. Ләкин әсә ошо минуттан тәненең бер генә урынын да ҡуҙғата алмай. Тик күҙҙәр, сөм-ҡара ҡайғылы ҡара күҙҙәр генә тере...

Ошо йығылыуҙан Емештең әсәһе бик оҙаҡ түшәктә хәрәкәтһеҙ ятып, ыҙаланып барып үлде. Ә бына Әхмәҙулла мулла һаман йәшәй... Уның улы балалар уҡыта... Белһәң ине, нимә өйрәтә икән ул... Шул уҡытыусыны... барып күрергә ине... Ҡатындар ботинкаһы кейгән уҡытыусыны...— тип уйланып ятты Емеш. Унан, һау кешеләй итеп: «Барайым әле... мәктәпкә... иртәгә үк... Күрәйем әле...» тигән ҡарарға килде. һәм тамам хәлдән тайып, тағы тәрән, ауырыу йоҡо эсенә инеп сумды.

XII

Хат үтә ябай, асыҡ һөйләш телендә яҙылғайны. Ғәҙәттәге хаттарға хас оҙон-оҙон инеш һүҙҙәр ҙә, ағай-эне, туған-тыумаса, таныш-белештәргә теҙеп сәләм әйтеп сығыу ҙа, мең төрлө изге теләктәр теләү ҙә юҡ ине унда.

Күрәһең, һуғыш мәле, фажиғәле тормош дөрөҫлөгө быны яҙған кешене үҙенең ҡаты, аныҡ ысынбарлығына буйһондорорға, иң ауыр хәлдә лә аныҡ аҡыллы, ябай телле һуғышсы булып ҡалырға тамам өйрәткәйне.

«Иштуған, ҡустым!—тип, күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшкәндәге кеүек, йылы бер өндәш менән башланып киткәйне был хат.— Теге ваҡытта, Петроградта осрашҡанда, Закир хаҡында һинең, яҡшы уйҙа булмауыңды белгәне бирле эсем бошоп йөрөй. Тағы бер осратып һөйләшергә тигән ниәтем бар ҙа бит, әммә кем белә? һалдат яҙмышы — алла ҡулында. Бөгөн барһың,, иртәгә юҡһың. Шуға күрә, һинең менән бәхәсләшәһе һүҙемде форсат барҙа аҡ ҡағыҙ битенә һалып ҡуйырға булдым. Ҡағыҙ ^есенән ғүмерлерәк була бит ул ҡайһы саҡта... Беҙҙең кеүек ябай кеше мәңге лә аяҡ баҫа алмаҫ урындарға барып инә, барып етә алмаҫ ерҙәргә барып етә ала бит ул ҡағыҙ!..

Блюхерсылар менән бер үк ваҡытта беҙҙең полк та Ҡариҙелдә киҫеп сығыуын әйткәйнем шикелле мин һиңә шул осрашыуҙа? Партизандарҙы ҡыуыр өсөн түгел, әлбиттә, ә ҡыҙылдарға ҡушылырға ниәтләп сыҡҡайны. Шул теләккә полк ирешә: Ҡыҙыл Армиянын Өфө янында ҡаты һуғыштар алып барған частары беҙҙе һәйбәт ҡаршыланы: ниәтебеҙҙе һуғышта аҡларға рөхсәт итте. Был саҡта V армия Өфө тирәһендә бик ҡаты һуғыштар алып бара ине. Беҙҙең полк та хәҙер шул һуғыштарға ҡатнашып китте. Бөгөлмә, Боғорослан, Өфө ҡалаларын аҡ чехтарҙан таҙартыуҙа ҙур батырлыҡтар күрһәтте.

Башҡортостанды, Уралды колчаксыларҙан таҙартыуҙа ла сигенеүҙе, еңелеүҙе белмәй һуғышты. Ә Закир инде ул һуғышта арыуҙы ла, ааныуҙы ла белмәҫ ине. Ҡыҙыл Армия яғына Ааҡҡас, бигерәк тә ҡанатланып һуғышырға кереште ул. Күп ваҡыт полктың көсө, ҡоралы етерлек булған өсөн түгел, ҡыйыулыҡ менән алдырыр ине. Бер саҡ шулай Өфө янында беҙҙең, полк урынлашҡан ауылға колчаксылар анғармаҫтан һөжүм итте. Уларҙа көс тә, ҡорал да күп ине. Ҡапыл һөжүмдән ҡаушап ҡалған ҡайһы бер эскадрондар һуғыша-һуғыша сигенеп, ауылды ҡалдырып сыҡты. Ә Закир үҙ тирәһендәге бәләкәс бер төркөм менән ҡамалған хәлдә аяуһыҙ һуғыш алып барҙы. Ахыр, төркөмдө атакаға күтәрҙе. Үҙе дошман ғәскәре араһына йырып инеп китеп, офицерҙы үлтерҙе. Был хәл дошманды ҡаушатты, ҡаҡшатты, улар ҡаса башланы. Беҙҙең сигенергә мәжбүр булған эскадрондар ҙа хәҙер кире әйләнеп килеп беҙгә ҡушылдылар. Беҙ тағы ла ярһыбыраҡ атакаға ташландыҡ. һәм дошманды ҡыуып барып алдағы ҙур бер хуторға нисек барып ингәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Ә унда аҡтарҙың ҙур көсө тупланған булып сыҡты. Шулай итеп, беҙ үҙебеҙ ҙә белмәҫтән, әкиәттәге кеүек, аждаһаның боғаҙына барып индек. Аҡтар ҡотороноп беҙҙең өҫкә ябырылды. Ләкин беҙҙең командир был осраҡта ла юғалып ҡалманы. Полкты атака артынан атакаға күтәрҙе. Үҙе ин. алдан дошманға ҡаршы ташланды. Әле бер яҡ, әле икенсе яҡ ҡыҫып алды. Шулай көн буйы дауам итте һуғыш. Ахыр килеп дошман енелде, ҡасты. Уларҙын, бына тигән ике орудиеһы, алты пулеметы, иллеләгән аты беҙҙең ҡулға эләкте: Етмәһә, йөҙҙән ашыу әсир ҙә алдыҡ.

Юғары командование беҙҙең был операцияны — Өфө өсөн ҡаты һуғыш алып барған башҡа частарға ҡырҡа һөжүмгә күсергә юл асты, тип юғары баһаланы.

һуғыш ҡыҙған мәлдә Закирҙың, үҙ-үҙен онотоп, командирлыҡтан ябай һалҡатҡа күсеп киткән, уттың ин, көслө еренә тәүләп үҙе барып ингән саҡтары йыш була ине.

Бер саҡ, Ижевск янындағы һуғышта шулай аҡтарҙың бер рота пехотаһы цепка таралып беҙгә ҡаршы атакаға килә башланы. Ә бер пулеметчик беҙгә баш ҡалҡытырға ла бирмәй ут һиптерә... Шул саҡ Закир дошман пехотаһы алдынан йән-фарман сабып үтте лә теге пулеметчикты сапҡылап та ташланы. Шулай күҙ асып йомған арала пулеметты яулап алып, һөжүм итеп килеүсе дошман пехотаһы өҫтөнә ут яуҙыра башланы. Ике ут уртаһында ҡалған аҡтарға пленға бирелеүҙән башҡа сара ҡалманы.

Ижевскиға яҡын, бик ҙур бср ауыл өсөн барған бер һуғыш бигерәк тә ныҡ хәтерҙә һаҡлана. Беҙҙең полк аҡтарҙы ҙур бер ауылдан ҡыуып сығарырға бойороҡ алды. (Ауылдың исемен хәтерләмәйем. Беҙҙеңсә булмағас, исемдәрҙе хәтерләүе еңел булмай.) Разведканың мәғлүмәтенә ҡарағанда, унда дошмандың көсө ҙур. Аңғармаҫтан һөжүм итеү һәм ҡыйыулыҡ ҡына беҙгә уңыш килтерәсәк ине. Был хәрби бурысты үтәү есөн полк таң алдында юлға сыҡты. Ауылға яҡын беҙҙең, алды ҡуйы урман кәртәләнә. Закир аптырап ҡалманы, бер нисә эскадронды йәйәүлегә күсереп, һөжүмгә ебәрҙе. Дошман һиҙеп ҡалып, беҙҙең, пехотаға ҡаршы туптан, пулеметтан ут яуҙыра башланы. Шул саҡ Закир бер эскадрон менән һиҙҙермәй генә ауылды урап уҙҙы ла дошмандын, артынан йырып-ҡырып барып инеп китте. Аҡтар ҡурҡышып ауылды ташлап ҡастылар. Беҙҙең полк уларҙы эҙәрләп китте. Ләкин аҡтар бер-ике километр сигенгәс, уңайлы урын һайлап яттылар ҙа беҙгә

ҡаршы тағы пулеметтан, мылтыҡтан ут астылар. Һуғыш ҡайтанан ҡыҙып китте. Ошо һуғышта Закир тәү тапҡыр яраланды. Ләкин ул боевой бурысты тулыһынса үтәгәнсә сафта ҡалды...

Хәйер, ниңә мин быларҙың бөтәһен тиреп һин,ә яҙырға маташам әле? Беҙҙең полк үҙ ирке менән ҡыҙылдар яғына сыҡҡан көндән алып, Закирҙың үлеүенә хәтле йылға яҡын ваҡыт уҙҙы ла баһа!.. Етмәһә, ниндәй ваҡыттар бит!.. Бер өҙлөкһөҙ һуғышта, походта уҙған ваҡыт... Ил өсөн иң ауыр ваҡыттар... Эйе, бер көнө үҙенең әһәмиәтлелеге, хәл иткеслелеге менән бер йылға торош итерҙәй был ауыр, данлы осорҙа, беҙҙең ҡыйыу батырыбыҙ Закир әҙме ҡаһарманлыҡтар күрһәтте! Уларҙы хатҡа теҙеп яҙып бөтөрлөкмө ни?! Тик шуны ғына әйтәм: Ҡыҙыл Армиянын, юғары командованиеһы Көнсығыш фронтта күрһәткән хәрби хеҙмәттәре өсен уны атама алтын сәғәт менән бүләкләне, Ҡыҙыл Байраҡ орденына тәҡдим итте. Үкенескә ҡаршы, Закир был данлы орденды алырға өлгөрмәне...

Былтыр йәй беҙҙең полкты Өфө яғынан Ырымбурға оҙаттылар. Ырымбурға табан беҙҙең юл үҙебеҙҙен, тыуған ерҙәр аша, Ағиҙел, йәмле Оло Эйек буйҙарынан уҙа ине. Үҙебеҙҙең яҡтарға яҡынлашҡан һайын таныш-тоноштар ҙа осрай, ундағы күңелле-күңелһеҙ хәбәрҙәр ҙә килеп еткеләй башланы. Шулар араһында Закирҙы бик нык уйға ҡалдырған бер хәбәр әле булһа хәтеремдә һаҡлана. Ул мине яҡташы итепме, тиндәше итепме яҡын күрә, ҡайһы саҡта серҙәрен дә һөйләштерә ине.

— Бабич үлтерелгән! Шәйхзада Бабич үлтерелгән! — тип, ҡара янып, көйөнөп һөйләне ул миңә.— Ниндәй шағирҙы һәләк иткәндәр! Ул бит, беләһеңме, революция үҙ телендә яҙырға ирек биргән есөн ҡанатланып, ярһып, тау йылғаһы шикелле урғылып килеп тыуған шағир ине. Туған башҡорт телендә яҙған тәүге шағир!..

Мин ни әйтә алайым унын был янып-көйөүенә? Шиғриәттән нимә беләм мин! Мин бит мәҙрәсәгә арлы-бирле генә йөрөп, арлы-бирле генә уҡырға, яҙырға өйрәнгән кеше. Унда ла үҙ телемдә түгел — төрки телендә. Миңә шиғыры түгел, хатта, ғөмүмән, нимәне генә булһа ла башҡорт телендә яҙыу мемкинлеге лә аңлашылмай ине. Беҙҙең мулла-мәзиндәр мине үҙ телемден. яҙма өсөн яраҡһыҙлығына шул хәтле ышандырып бөткәндәр ҙә баһа! Әле бына хәҙер ҙә, шул хәтле тырыша-тырмаша яҙып ултырған ошо хатым да, миңә нисектер етлекмәгән бала һымаҡтыр кеүек тойолоп китә. Ә бит мин хәҙер инде үҙ телецдә уҡый-яҙа белеүҙең ни хәтле ҙур бәхет икәнен дә,



үҙ телемдең яҙғы, Оло Эйек туғайы шикелле сәскәгә, һутҡа, хуш еҫкә бай булыуын, шул туғайҙың һандуғасы шикелле йырсан, моңсан булыуын бөтә йәнем-йөрәгем менән тойоп белгән кеше бит әле... Шуға ҡарамаҫтан, теге кәмһенеү тойғоһо һаман үҙенекен итергә маташа... Ә ул саҡта... Закир минен, алда, революцион аңы бик самалы булған һалдат алдында, шағир хаҡында һөйләгән була. «Бабич үҙ телендә яҙа ине бит... Башҡортса яҙа име!..» тип ынғыраша хатта.

Ап-аҡ алтын йырҙарымды
Йырламайым данлыҡ өсөн;
Йырлаймын алтын илем есөн,
Үҙ туған халҡым өсөн,—

тип унын. бер шиғырын яттан уҡып та ебәрә. Миңә, бигерәк тә ул саҡта, Закирҙың зары ла, ҡайғыһы ла, әлбиттә, ул хәтле килеп тә етмәй. Әммә мин уны, батыр һалдат, ғәҙел, ҡыйыу командир итеп хөрмәт иткәнлектән, иғтибар менән тыңлайым... Аңларға тырышам. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Закир шул хәтле яратып, ярһып уҡыған был шиғырҙың изге теләген бөтөнләй тоймау мөмкин түгел ине.

Закир бит батыр, ҡыйыу һалдат булыу еҫтөно, ҡайһы саҡта бик ҡапыл янып-көйөп, ҡыҙып китә торған ярһыу кеше ине. Бабичтың үлеме хаҡындағы хәбәр уны бик ҡаты бошондорҙо: ул хатта йыш ҡына ауыр уйҙарға, өмөтһөҙлөктәргә бирелеп тә киткеләне.

Уға хәҙер инде аҡтар түгел, хатта ҡыҙылдар ҙа башҡорт халҡына автономия бирергә лә, милли азатлыҡ тәьмин итергә лә уйламайҙар, һәр ҡайһыһы уларҙы билдәле ваҡытҡаса үҙ мәнфәғәттәре өсөн файҙаланырға ғына тырышалар һымаҡ тойола башланы. «Беҙҙен, халыҡ бығаса ҡалай иҙелеп килгән, шулай ҡалыр. Үлергә йөҙ тотҡан — үлер...» тигән өмөтһөҙ фекерҙе ҡабатлай ине ул миңә йыш ҡына. Миненсә, тап бына шул емөтһеҙ ҡараш уны һәләкәткә алып барҙы ла инде. Әмәлгә ҡаршы, унын шул яңылыш фекерен раҫларға тырышҡандай, ваҡиғалары ла тура килеп кенә торҙо бит әле...

Шулай беҙ әкренләп Өфөнән Стәрлегә, Стәрленән Ағиҙел, Оло Эйек буйҙарына килеп еттек.

— Ҡыҙыл Мәсет ауылында туҡтап китербеҙ. Мин Илсеғолға ла инеп, әсәйемдең хәлен белеп тә сығырмын,— тине Закир.

Мин дә унын был фекерен хупланым: — Таиба инәйҙе ҡыуандырыуы тейеш кенә түгел, ә фарыз,— тинем.

Ауылына яҡынайған һайын Закирҙың күңеле күтәрелде, ул элеккесә һөйләнсәкләнеп, теремекләпеп китте. Ми-

нец дә кәйеф яҡшырҙы. Сөнки уныц өмөтһөҙлөккә биреләүе беҙгә — һалдаттарға ла кире йоғонто яһай башлағанын тойоп борсола инем. Бына бер саҡ беҙ көр боевой саф менән, «Ҡыҙыл Байраҡ» йырын йырлай-йырлай, Мраковканың оҙон, кәкре-бөкрө урамын уҙып, Йлсеғол яғына барып сыҡтыҡ. Әмәлгә ҡаршы, Илсеғолға барып инер алда ғына беҙгә ҡыҙ оҙатыу йыйыны тап булды. Йыйындың ин, алдында, кырандасҡа ҡырын ятып, күрәһең, кейәү булган кеше килә. Үҙе бик шыҡһыҙ, оҙон үңәсле, ҡарпыш ҡолаҡлы, майлы күҙле бер нәмә. Кырандас янынан һыбайлы биш-алты кейәү егете эйәргән. Улар артынан баш остарына төрлө биҙәкле бик ҙур шаршау күтәреп, шунын, аҫтына йыйылған бер төркем ҡыҙҙар атлай. Шаршауҙан уларҙың ҡаралы, ҡыҙыллы итек кейгән аяҡтары ла, аллыгеллө күлдәк итәктәре генә күренә, йөрәк өҙгөс монло сенләүҙәре, сулпы, сәстәңкә шыңгырауҙары ғына ишетело. һин бит беләһең: беҙҙә ҡыҙҙар әхирәттәрен кейәүгә киткәндә шулай сенләп-илап ауылдан бик алыҫка хәтле оҙатып ҡалалар. Бында бер ҙә аптырар урын юҡ. Ғәҙәти бер ҡыҙ оҙатыу йолаһы шунда. Ә быиа беҙҙен. Закир ниңәлер, ҡобараһы осои, атын ҡапыл ҡыҙҙар янына борҙо, ҡалтыранған тауыш менән ҡабаланып:

— Кемдс оҙатаһығыҙ, һылыуҙар? — тпп һораны.

— Гөлйыһанды,— тиештеләр ҡыҙҙар.

Аранан нимдәйҙер бер шаяны:

— Гөлйыһанды, Иҫәнбәттен. Әхмәҙулла мулла улына, анауы ҡарпыш ҡолаҡ Сәрүәретдин еҙнәйгә бирҙеләр! — тип шырҡылдап көлөп ебәрҙе.

— Көсләп һаттылар! — тип өҫтәие иксһсеһе.

— Гөлйыһанды... Гөлйыһапды һаттылармы? — Үҙәк өҙгөс кыҙганыс тауыш менән ҡысҡырып һораны Закир.— Нисск улай? Кем ризалыгы менән?!.

Шул саҡ шаршау аҫтынан ҡапыл бер һылыу, селтәрҡашмауҙарын сыңғырлатып, айҙай балҡып йүгереп сыҡты ла Закирға табан бер-ике аҙым атланы. Бик әкрен, ишетелер-ишетелмәҫ кенә тауыш менән:

— Закир ағай!.. Был һинме?.. Никә ҡайтманын,?!.— тине лә ергә һығылып төштө...

Оҙатып килеүсе әхирәттәре ҡурҡышып ҡысҡыра-илай ҡасып бөттөләр:

— Уй, Гөлйыһан үлде! Үлде!..

Ҡырын ятып килгән теге ҡарпыш ҡолаҡ һикереп төшеп ҡыҙҙы, он тоғо шикелле күтәреп, кырандасына ырғытты ла, атын ҡыуа туҡмай, ары сапты. Ниндәй генә ауыр һуғыштарҙа ла ҡурҡыу, юғалып аптырап ҡалыу белмәҫ беҙҙең Закирыбыҙ көл кеүек ағарынып, бер һүҙ



әйтә, бер ни эшләй алмай ҡатып торҙо ла ҡалды. Был минутта унын, йөҙөндә бик ҙур ҡайғы-хәсрәт, үтә өмөтһөҙлөк сағыла ине. Күрәһең, шул ҡыҙҙы бик тә яратҡандыр ул... Ҡыҙ ҙа шулай ук... Бәлки, ул ошо ҡыҙ өсөн дә ауылына һуғылып китергә булғандыр... һөйгән ҡыҙын күрергә теләгәндер... Хәйер, ҡайҙан беләһең инде... Кеше күңеле диңгеҙ бит ул... Унын, тулҡыны ҡасан, ҡайһы ярға ҡағылаһын алдан әйтеп буламы ни... Тик шуныһы асыҡ: ул инде Илсеғолда туҡтарға теләмәне. Полкты ағымдағы ял пунктына, Ҡыҙыл Мәсеткә алып китте. Ә унда, ҡарышҡандай, беҙҙе тағы бер көтөлмәгән күңелһеҙ хәл ҡаршыланы.

Унда беҙ Совет власының милли сәйәсәтен аңламаған, йәки аңларға теләмәгән бер полк менән осраштыҡ.

Ни әйтәһең, һис тә ҡыҙыл ғәскәргә оҡшамаған бер отряд шунда. Был тирәләге тыныс халыҡты талап, үлтереп, ҡотон алып яталар икән. Беҙҙең яҡта улар Совет хөкүмәтенен. изге маҡсатына ҡаршы халыҡты аякландырыу өсөн бик күп яуыз эштәр эшләгәндәр. Шулай итеп беҙ ҙә улар ҡулына барып ҡаптыҡ.

— Әһә, башҡорттар, контрҙар! —тип ҡаршыланылар улар беҙҙе. Ҡоралһыҙландыра башланылар. Аттарҙы, эйәрҙәрҙе, хатта аяҡтағы итектәргә хәтле систереп алдылар. Беҙҙең. полк комиссары Ғимранов уларға хаталыт^, ғәҙелһеҙлек эшләүҙәрен аңлатырға, Ленин иптәштек үҙ саҡырыуы буйынса,- Көньяҡ фронтҡа оҙатылыр өсөи Ырымбурға китеп барган ҡыҙыл полк икәнлегебеҙҙе төшөндөрөргә тырышты:

— Көньяҡта деникинсылар ҡайтанан һөжүмгә күскәндәр. Уларға ашығыс отпор бирергә кәрәк. Ә һеҙ бында был эшегеҙ менән теләпме, теләмәйме, дошман тирмәненә һыу ҡояһығыҙ,— тип тә әйтеп ҡараны. Ә улар быға иғтибар ҙа итмәнеләр. Тик келдөләр, мыҫҡылланылар ғына.

— Ниңә ул ямандарға яҡшы һүҙ әрәм итергә?! — тип ярһыны Закир.— Күрмәйһеңме ни, уларҙың кеше телен аңларға иҫәптәре юҡ. Рөхсәт ит, мин полкты уларға ҡаршы һуғышҡа күтәрәм! — ти.

— Ярамай. Бөрсәгә асыуланып, тунды утҡа яҡмайҙар,— ти Ғимранов.— Мин Куйбышев иптәш менән телефонда һөйләшәсәкмен. Был ваҡытлы анлашылмау ғына. Бөтәһе лә тиҙҙән хәл ителер, ти. Ҡоралды ыҙғышты булдырмау өсөн, үҙе башлап ҡоралын бирҙе. Закирға ла шуны эшләргә ҡушты.

Ә Закир:

— Мин, иҙелгән халҡыма ирек яуларға тип күтәргән ҡоралымды үҙ иркем менән биргәнсе, йәнемде бирәм,— тине лә үҙ-үҙен атып йыҡты...

Бына шулай уйламағанда һәләк булды беҙҙең Закир. Әлбиттә, был хата шунда уҡ төҙәтелде. Башҡорт ҡыҙылармеецтарына ҡоралдарын да, аттарын да, шунын, менән бергә һәр кем өсөн иң меҡәддәс булған ил ышанысын да кире ҡайтарып бирҙеләр.

Аҙаҡ Закирҙың полкы башҡорт кавалерия бригадаһы составында Көньяҡ фронтта ла үҙенең хәрби бурысын намыҫ менән үтәне. Әгәр Закир шулай үҙ-үҙен һәләк итмәһә, Көньяҡ фронтта деникинсыларға ҡаршы көрәштә үк үҙенен, Хаммат ағаһы менән дә осрашҡан булыр ине. Петроград өсөн һуғышта ла, моғайын, Хаммат ағаһы менән бер сафта булыр ине... Хәҙер ҙә беҙҙен, менән ошонда аҡ поляктарға ҡаршы һуғышып йөрөр ине. Полкынын ҡаһарманлығына ҡыуаныр, ғорурланыр ине... Көньяҡ фронтта, «Тимер полк» тигән хөрмәтле хәрби исемде тәүләп алыусыларҙан булды бит беҙҙең полк, Петроград есөн һуғышта ла, үҙең беләһен, Хаммат ағай полкы шикелле үк, ударный группала булды, иң яуаплы урындарҙа һугышты... Әммә нимә эшләйһең бит... Яҙмыш.

Иштуған ҡустым, минең дуҫым Закирға ҡарата һин ул хәтле ҡаты бәғерле булма... Хаталанған, аҙашҡан яҡташыҡа ҡарата кешелеклерәк бул... Аҡтар яғында бер ай булыу хатаһын, ҡыҙылдар яғындағы бер йыллыҡ батыр көрәше менән аҡланы бит ул. һин шуны онотма, туған! Үҙенен. хатаһын — мәжбуриәт тыуҙырган хатаһын, изге ҡаны менән йыуҙы ул... Халыҡ әйтмешләй, батырҙы үлгәпдән һуц гэйеплэмэйҙор... һин дә, Иштуған, гәфү итергә өйрән!

Минең һицә үтенесем ошо.

Ҡыҙылармееҫ: А р ы ҫ л а н Б а й г у ж и н».

Айһылыу үҙе өсен бик алыҫ, ҡатмарлы тормош, көрәш мәсьәләләре хаҡында һүҙ алып барған был оҙон хатты уҡый-уҡый тамам арығанға ахыры:

— Бына тағы бер ҡорбан...— тип артыҡ көйөнөсһөҙ генә көрһөнөп алды.— Шунан һуң ни?..— тип, кемгәлер һорау менән өндәшеп, яуап көткәндәй итеп торҙо. Унан ҡабаланып тороп баҫты.— Әй-й, унда мине яралылар көтә лә баһа! — тип палаталар яғына йүгерҙе. Ә унда, ни күҙе менән күрһен, Иштуған эйәрҙән яңы ғына төшеп, атын бәйләп тора ине.

— Уй, Иштуған! — тине Айһылыу ишетелер-ишетелмәҫ кенә тауыш менән.— Иштуған килгән!..



Ҡапыл быуындарының хәле бөтөп, яйлап ҡына иренен, янына килде, ҡара янған ҡаҡса йөҙөнә, бәхетле балҡыған күҙҙәренә, сатнап кипкән ирендәренә төбәлеп ҡараны. Шатлыҡ йәшен тыя алмай, күҙен иренен, күкрәгенә йәшерҙе.

— Йәнем!..

— Айһылыу, ҡыуанырға кәрәк. Ә һин!..— тип көлдө Иштуған, кер, шат тауышлы булырға тырышып, ҡатынын ҡыйыуһыҙ ғына ҡосаҡланы, ярылып, шырауланып бөткән устары менән унын йыуан толомдарынан һыйпаны.— Йә, һин бында ни хәлдә йәшәйһен,? Йә, тыныслан инде... Беләһеңме, беҙ бит уида аҡтарҙы яман туҡмайбыҙ! Еңәбеҙ, һылыу!..

Оҙаҡ көттөрөп килгән «ҡунаҡты» күрергә ашығып кнлеп сыҡҡаи врач менән унын ҡатыны Фаинаның да тәүге һорауы шул һуғыш хаҡында булды:

— Йә, унда, фронтта, эштәр нисек тора?

— Горностайполь тигән теге ҡәһәрле урынды беҙҙекеләр төп күтәрә алып ҡуйҙылармы, әллә ул, аҙғын ҡатын кеүек, һаман ҡулдан ҡулға күсеп торамы?

— Яҙғы ташҡын башланды,— тине Иштуған ғорур тауыш менән:—Тиҙҙән ул был тирәләге бөтә сүп-сарҙы йыуып алып китеп, дингеҙгә илтеп түгәсәк! һәм был ерҙәргә лә ысын яҙ килер!

— Ысынмы? Енеп бөттөк, тип әйтеп буламы ннде? — тнп, ҡыуанып та, икеләнеп тә һорап ҡуйҙы Ф а и н а.—Йә, һөйләп бир әле. Нисек булды?

— Нимәһеп һөйләп тораһың ннде унын? Эш эшлонде: Горностайполде бөтөнләйгә азат итеү хаҡыида юғары команда биргәи бойороҡ үтәлде. Тетерев, Ирша станциялары беҙҙен. ҡулда,— тип һаман баяғыса ғорур, көр тауыш менән һөйләп китте Иштуған.— Беҙҙең ғәскәрҙәр хәҙер дошманды бөтә яҡлап артабан ҡыуып алып бара. Богдан районында ҡаты һуғыштар бара хәҙер... Аҡ поляктар, ҡамауҙа ҡалыуҙан ҡурҡып, Киевты ҡалдырып сыҡҡан, тигән хәбәр алынды. Бына һеҙгә фронттан ин, һуңғы, иң ҡыуаныслы хәбәрҙәр ошолар. Мин уйлайым, һеҙ барығыҙ ҙа ҡәнәғәт булырға тейешһегеҙ беҙҙен. эштән?!.— тип мәрәкәләп һүҙен йомғаҡлап ҡуйҙы Иштуған.— Йә, шундай ҡыуаныслы яңылыҡтар алып килгән егеткә берәр самауыр сәй булмаҫмы һеҙҙә? — тип тә өҫтәне.— Бер самауыр сәй эсерлек кенә ваҡыт бирелгән миңә бында булырға!..

Иренең һуңғы һүҙе Айһылыуҙы бик тиҙ аңына килтерҙе. Ул ҡабаланып:

— Уй, мин ни эшләп аңшайып тик торам икән? Үәт,

иҫәркәй!.. һин арығанһың, сарсағанһың да баһа, Иштуған!..— тип илай-көлә ашхана хеҙмәтен үтәгән палата яғына йүгерҙе. Ләкин уны Фаина ҡыуып етте:

— Айһылыу, бар, һин ирен, янында бул. Сәйҙе мин дә һинән кәм әҙерләмәм. Шулай бит?!

Айһылыу өлкән сестраға рәхмәтле йылмайып, ҡапыл ҡыҫып ҡосаҡланы ла бер һүҙ ҙә әйтмәй кире йүгерҙе.

— Һеҙҙең менән сәй эсергә мин дә килермен, хәҙергә миңә яралылар янында булырға кәрәк,— тип врач та палаталар яғына йүнәлде.

Йәштәр, етәкләшеп, әкрен генә ҡайындар араһына инеп киттеләр. Шунда уҡ алыҫ түгел, ҡайын араһына, ергә ҡағып эшләнгән өҫтәл, эскәмйәләр бар ине.

— Бына шунда сәй эсербеҙ,— тине Айһылыу.— Йөрөй башлаған яралылар шунда ултырып ашайҙар...

Ләкин, һиҙҙермәҫкә тырышһа ла, арыуҙан аяғына көскә баҫып торған Иштуған:

— Ергә ултырайыҡ, һылыу! — тине,— бына шулай,— тип, башын ҡатынының тубығына һалып, салҡан төшеп ятты. Йәш ҡайындарҙың, ваҡ, тәңкә япраҡтары үтә зәңгәр күккә ҡыуанып, һоҡланып ҡараны:

— Һай, хозур... Ниндәй рәхәт!.. Ниндәй тынлыҡ!.. Мин бик-бик күптән бирле быдай асыҡ зәңгәр күкте күргәнем юҡ шикелле, һылыу...

Айһылыу ирен ҡыуандырырға тырышып:

— Бсләһецме, Хаммат ағай, һауығып, полкына ҡайтҡан,— тип хәбәр итте.— Күрҙеңме, унын, яҡты өмөтө тормошҡа ашҡан!

— Беләм,— тине Иштуған әкрен генә.— Уның полкы Горностайполгә ниндәй ҙур батырлыҡтар, ауырлыҡтар аша барып ингәнен дә беләм... Аһ, әгәр һин уның, Хаммат ағайҙың, полкты нисек әллә нисә тапҡырҙар штык һуғышына күтәргәнен күрһәң ине!..

Иштуған ауыр тын алып ойоп китте. Айһылыу тауышһыҙ ғына йылмайып, иренен, күптән ҡырыуы еткән ҡаҡса сикәләренән, тир һәм туҙандан һоро төҫкә ингән тулҡынлы ҡара сәстәренән, сатнап ярылған ирендәренән йомшаҡ ҡына һыйпап ултырҙы. Иренең матур, аҡыллы күҙҙәренә оҙаҡ-оҙаҡ йотлоғоп ҡарап торғоһо килде унын. Ләкин уларҙы ҡуйы керпектәр ҡаплағайны. Аһ, ошо һейкөмлө күҙҙәрҙе, нык ҡымтылған, үҙ һүҙле был ирендәрҙе нисек һурып-һурып үпкеһе килде унын. Ләкин тәбиғи оялсанлығы унын, бөтә ярһыуын бәйләп тотто. Ул өндәшмәй, теймәй-ҡағылмай ғына һейҙе, һөйөнде... Бына Иштуған да уянып китте. Ҡатынынын, нәфис, йомшаҡ ҡулын үҙ ус-



тарына алып ҡаты итеп ҡыҫты ла үҙенең кипкән эҫе ирендәренә баҫты. Һәм тағы баяғыса тәрән кинәнес менән:

— Һай, ҡалай ҙур ҡыуаныс! Донъя ҡалай ҙа матур бит, Айһылыу!.. Һин аңлайһыцмы быны, һылыуым?! — тип шыбырланы ла тагы күҙҙәрен йомдо. Йәш ҡайын өҫтөнән еләҫ ел өйөрөлөп үтте, йылға буйында һандуғастар тын ғына сутылдашты, ҡайҙалыр тирәк башында яңғыҙ кәкүк саҡырҙы, һуғыш тыны бик алыҫтан, ер аҫтынан, килгән кеүек кенә ишетелә башланы, эңерге һүренке ҡояш йәш ҡайын япраҡтары үтә уларға әленән-әле оялсан ғына ҡараштырып алды. Бөтә әйләнә-тирәлә шундай тын, еләҫ, иркә матурлыҡ хөкөм һөрҙө. Әйтерһен, бар тәбиғәт арыған һуғышсының ял бәхетенә һоҡланып, уны нисек тә оҙайтырға, тағы ла татлырак итергә тырышып тынып ҡалғайны. Бәхетле иҙрәп йоҡлаған иренә берсә йылмайып, берсә моңайып ҡарай-ҡарай, уға бик-бик һөйләгеһе килгән, күцеләндә мең ҡат ҡабатланып ташып сыҡҡан хәбәрҙәре хаҡында уйлана-уйлана тын гына ултырҙы ла ултырҙы... Эйе, был арала бигерәк тә күбәйеп китте шул унын, иренә һөйләр һүҙҙәре: Шаһиморат ағай хаҡындағы ҡайғылы хәбәрҙе лә, унын. аманаты, Арыҫландың хаты, үҙенең үтә лә яныпкөйөүе хаҡында ла һөйләргә кәрәк бит уға! Ләкин хәҙер генә түгел. Йоҡлаһын, ял итһен, уянғас, сәй эсһен, сарсауын баҫһын әле ул... Эйе, йоҡлаһын, әҙерәк хәл йыйһын... Шунан һуң, шунан һун--- Сабыр итәйем, сабыр...

## XIV

Бер көндө Емеш, нисектер, еңеләйеберәк, аяҡ-ҡулына хәл ингән һымағыраҡ булып торҙо. Сәстәрен матурлап тарап, өҫ-башына кейенеп, әҙерәк тамаҡ ялғап алғас, апаһының ҡолағына ғына шыбырлап серен әйтте:

— Мин мәктәпкә барып ҡайтам әле, апай!

Бибеш башта уга, һаташамы әллә был, тигән шикелле итеп, аптырап ҡараны. Унан ҡырт киҫеп:

— Нимә бар унда? — тине.— Бынауы кибеп ҡатҡан көйөнә әҙәм көлдөрөп... Ҡайғыһын йәшереп, тсшләнеп йөрөгән кеше һарыға һабыша, ти торғайны Ҡарасәс инәй. Һин бына шулай булып бөттөң бит инде... Етмәһә, шул көйөнә кеше араһына сыҡмаҡсы.— Үәт, биғәләш!..

— Ярар инде, барам тигәс, барам, апай,— тине Емеш, үҙенә хас булмаған ҡырҡыулыҡ менән.— Исмаһам, бер тапҡыр барып ҡайтам.

— Атаҡ, улай булғас, ниңә минән һорап тораһың? — тип үпкәләп тә ҡуйҙы Бибеш.— Миңә тиһә, мәктәптән ары уҙып китһәңсе!..

Емештең был хаҡта уйлап, апаһы менән һис сәбәпһеҙгә шулай сабырһыҙ, иғтибарһыҙ һөйләшеүе өсөн үкенеп торорға ла ваҡыты юҡ ине. Унының бөтә уйын хәҙер тик бер генә теләк — тапма тота башламаҫ элек мәктәпте, үҙенең йөрәгендә нәфрәтле урын алған Әхмәҙулла мулланың, улын, һылыу ҡыҙ Гөлйыһандың ирен күреп ҡайтырға тигән теләк кенә биләп алғайны. Шуға ул ашыҡ-бошоҡ кейенеп, бар хәленсә йәһәтләп, өйҙән сығып китте.

Тышта йылы, епшек ине. «Декабрҙә мартҡа оҡшаған көн»,— тип уйлап алды Емеш. Былдай көндә элекке һау сағы булһа, ул мәктәпкә күбәләк шикелле осоп-йүгереп йылдам барып етер ине, ә хәҙер аяҡтарын көскә ҡуҙғатып, оңғорло-соңғорло һуҡмаҡ менән яй ғына атлап барҙы. Башы әйләнде, ҡолағы шауланы, етмәһә, бынауы ҡар баҫҡан буш урам, эсте бошороп, айыу өн.ө шикелле хәүефле шымып ята, бөтә ерҙә үтә ҡайғылы-шомло тынлыҡ хөкөм һөрә ине. Емешкә барған һайын мәктәп алыҫлаша ғына һымаҡ тойола. Ул, йыш-йыш туҡтап, артҡа боролоп ҡарай: «Әллә кире ҡайтырғамы?..» Ләкин өй ҙә бик алыҫта ҡалған кеүек. Ул бар көсөн йыйып алға атланы. « Нисек тә барып етергә, мәктәпте быйыл һис юғы бер генә тапҡыр булһа ла күрергә...»

Мәктәп ишеген асып инеү менән Емештен. танауына һаҫыҡ, әсе еҫ килеп бәрелде: «Уй, тонсоғоп үлермен!..— тип уйлап алды ул, хафаланып.— Бер ҡасан да өйҙә шундай һаҫыҡ һауа булыр тип уйлағаным юҡ ине... Ни өсөн былай икән? Бәлки, үҙем ауырыу булғанға шулай тойолалыр...»

Емеш, таяныс эҙләгәндәй, аптырап тирә-яҡҡа ҡаранды. Ишек янындағы буш партаны абайлап, йәһәт кенә ултырып алды. Күҙ алды томаланыуы бер аҙ уҙғас, тағы әйләнә-тирәгә күҙ ташланы. Ҡайҙа ҡарама, алама бишмәттәр, өҙгөләнгән тундар, эсе аҡтарылған бүректәр, аслыҡ арҡаһында мунсаны, йыуыныуҙы оноткан керле, шешенгән йөҙҙәр, һарғайып кипкән кескәй тарамыш ҡулдар... Был кескәй мәйеттәргә укыу нимәгә кәрәклеген, уларҙың баштарына укыу уйы инерен күҙ алдына килтереүе лә ауыр ине.

Был йөрәк өҙгөс күренештән Емештең башы тағы ла ҡатыраҡ әйләнеп китте. Ул, күҙҙәрен йомоп, күпмелер онотолоп ултырҙы.

— Һин кем ҡыҙы? Исемең нисек? Уҡырға килденме?

Емеш үҙ янында ғына ниндәйҙер таныш та, йән өшөткөс биҙҙергес тә һымаҡ бер тауыш ишетеп, тертләп күҙен асҡанда, унын янында бөтөнләй ят та, бик таныш та сәрелдәк нәҙек тауышлы бер кеше баҫып тора ине. Сикәнән тар



ғына башланып, ауыҙ яғына табан киңәйеп киткән бит, өсмөйөшләнеп, ғәҙәттән тыш ҙур шамбы ауыҙына барып тоташҡан. Бәләкәс кенә төҫһөҙ күҙҙәр сәйер кепесләп тора. Артыҡ оҙон, тарамыш үңәсле бәләкәс кенә башы сукмарҙы хәтерләтә. Ә сәстәр, Мраковка побының сәсенә оҡшап, яурындарға төшөп яткан. Буйлы иҫке костюм, муйында һары ебәк шарф, аяҡта тап Сәхибә туташ кейгән һымаҡ бейек күтәрмәле, оҙон ҡуныслы ҡара ботинка. Ботинка өҫтөнә шундай уҡ бейек күтәрмәле резина галош та кейеп ҡуйған...

«Байрас һөйләгән яңы мөғәллим ошо икән,— тип төшөнөп алды Емеш.— Ҡалай һөмһөҙ нәмәкәй!.. Эй Гөлйыһан бахыр... Кемгә әрәм булған...»

Мөғәллим, Емешге ҡурҡытырға теләгән һымаҡ, үтә ҙур ҡорҡолдайын үрле-ҡырлы һикертеп, уға тағы өндәште:

— Нинә яуап бирмәйһең? Кем ҡыҙы һин? Исемен кем? Күрәһен,, был ҡыҙыҡай телһеҙ, ҡолаҡһыҙҙыр?

Мөғәллим, өмөтһөҙ ҡул һелтәп, кире түргә уҙҙы. Емеш ауа-түнә тышҡа сыҡты. Үҙҙәренә ҡайтып еткәнсе унын башын үтә борсоулы бер уй быраураны:

«Ҡайҙа күрҙем мин был ағайҙы?! Ҡайҙа ишеттем мин был тауышты? Таныш йөҙ... Таныш тауыш... Төшөмдә күреп ҡурҡтыммы икән ни берәй саҡ? Эйе, ҡасандыр күргән,. бик яҡындан күргән һымаҡмын мин был кешене. Тик ҡасан? Ҡайҙа?..»

Был көндө Емеште тапма ваҡытынан алда йығып һалды. Өшөү-калтыратыуҙын. да, яндырыуҙың да көсө, әйтерһен. дә, бишләтә артты. Ул тәүлек буйына бер ни белмәй һаташып ятты. Ҡаты уйланған, ҡайғырған саҡта һәр саҡ шулай, әсәһенең фажиғәле үлеме менән бәйле ауыр кисерештәр, ҡат-ҡат төшөнә инеп, уны ғазаплаусан ине. Бөгөн дә ул әленән-әле:

— Ҡан... Ҡан... Ҡан... Сәлләләр!..— тип, ҡото осоп һаташып ятты. Ә тапма киҙеүе уҙып, күҙен асҡанда, унын, янында бойоғоп ҡына Бибеш апаһы ултыра ине...

— Апай, һин нинә илайһың? — тип шыбырланы ул, хәүефләнеп.— Ни өсөн илайһың?!

— Китсе, ни эшләп илайым ти...— тип йылмайырға тырышты Бибеш.— Бына һинең, үҙендең хәлең нисек? Ни~ нәлер бигерәк ҡаты тотто был юлы! Әйттем, сығып йөрөмә, тинем, тыңламаның... һин минен. яңғыҙымды ҡалдырырға ныҡышаһындыр инде...

— Апай,— тип өндәште Емеш хәлһеҙ генә тауыш менән.— Апай, теге мөғәллим әсәйемден. ҡанын алған мулла үҙе түгелме икән?!

Бибеш, һаман уны һаташа тип уйлап булһа кәрәк, тағы шул бер һүҙен ҡабатланы:

— Әйттем, йөрөмә, тинем. Сығып йөрөрлөк хәлен, бармы ни инде һинең? Ҡоро һөйәккә ҡалдың да баһа хәҙер...

Емеш тирле эҫе усы менән апаһының беләгенә тотондо:

— Апай, тим, ышан, был мулла үҙе! Унын. улы түгел...

— Ҡуйсы, бушты һөйләмә! — тине Бибеш, инде бөтөнләй ҙә йәне кейөп.— Әгәр бик тә белген, килһә, әйтәм, был унының улы Сәрүәретдин мәғзүм. Йә, унщ нимәгә кәрәге булды һиңә? Унын. ҡайғыһымы ни һиндә хәҙер?

Емештең бүтән өндәшер хәле ҡалманы. Унщ күҙҙәре үҙлегенән-үҙе йомолдо. Тапма үткәндән һуң була торған аҙаплы ҡаты йоҡо, әйтерһең, уны бөтөнләй убып алды.

Ә Бибеш, ҡайғылы күҙҙәрен һеңлеһенә төбәп, һаман шул бер өмөтһөҙ уйҙы уйлай-уйлай, шым ғына илап ултырҙы: «Булмаҫ инде, әҙәм була алмаҫ... Ҡарасәс инәй мәрхүмдең, шундай оҙон керпекле, моңһоу ҡара күҙле бала йә ғүмерһеҙ, йә бәхетһеҙ була, тигән күрәҙәлеге тап килә күрәһең инде...»

Бер аҙҙан, йәштәрсә еңел елпелдәп, Таиба әбей ҡайтып керҙе. Ул бая, Емеш бик ҡаты һаташып ятҡан саҡта, йәһәт кенә кейенеп, ҡайҙалыр сығып киткәйне.

— Үәт, дауа! Хинин тигән дауа! — тип, ниндәйҙер тантаналы тауыш менән килененә бер пакет порошок тоттырҙо.— Никита белеш ҡайҙандыр тапҡан. Байгилде дуҫымдың ҡыҙы өсөн, Емеш өсөн таптым, тип әйтә, ти. Байрасҡа биреп ебәргән.

Был хинин тигән дауа беҙҙең теге әрсм һыуы кеүск кспә түгел, ә төптө әжәл дауаһы кеүек нәмә, ти. Бер эстенме, тапма тигәнен, һылап алған кеүек юҡ та була, ти,— тип, һаман шул күтәренке, шат ҡыуаныс менән артабан һөйләп китте.— Тик уны көн һайын өс тапҡыр: иртән, төш, кис ҡабул итергә, ти. Никита үҙе шулай тип әйтте, ти... һии, килен, беләһеңдер ул Никитаны? Атайындың дуҫын, тим дә?.. Ахыры ул бик яҡшы кешелер... Урыҫ булһа ла, үлгән дуҫын да, унын бәләкәс ҡыҙын да онотмай бит әле... Шәп дауа эҙләп тапҡан... һауыҡтырып ебәрергә тырыша... Ҡара һин уны, ә?.. Үәт бит, донъяла ниндәй һәйбәт кешеләр ҙә була бит, ә?!.

— һундыр инде, бейем...— ти Бибеш, һаман иламһырап.— Хәлдән тайҙы бит инде ул... Бөтөнләй аяҡтан йығылды... Ашатып, хәл индерер ҙә әмәл юҡ бит, исмаһам...

— Улай тимә, килен. Насарға юрап торма! — тип унын, һүҙен бүлде бейеме.— Хәҙер бөтәһе лә яҡшыға табан бара. Беҙҙең Емеш тә, алла яҙған булһа, һауығып китер...

— Белмәйем шул инде... Белмәйем...

— Ә бына бел! — тип, тағы ла ышаныслыраҡ итеп иҫкәртте Таиба әбей.— Шул уҡ Никита белеш, алла тәғәлә уға һаулыҡ ҡына бирһен, халыҡ тип, ас-яланғасҡа ярҙам итәм тип, янып-көйөп йөрөй, ти бит әле. Бына хәҙер сәүиттен, үҙенән ярҙам һорап алған, ти. Үҙҙәренең Ивановкаһында ла, беҙҙең Илсеғолда ла ашхана асмаҡсы, ти, хәҙер. Ышанһаң — ышан, ышанмаһан, — юҡ, бына иртәгәнән башлап асыҡҡандарҙың барыһын да шул ашханала туйындыра башлаясаҡтар, ти. Бушлай, ти... Үәт нисек, аңланыңмы?!. Ә һин әйтәһең... Байрас бер йөк провиант алып ҡайтҡан бөгөн... Нимә генә юҡ унда?!. Он!.. Ап-аҡ, көрпәсәткә он!.. Эй, ниндәй тәмле икмәк бешәсәк бит ул ондан!.. Хатта ышаныуы ла ҡыйын был күктән төшкән бәхеткә!.. Шулай бит, килен?!.

Бибеш, йәшле күҙҙәрен киң асып, бейеменә аптырап, текләп торҙо. Ул бер ҡасан да унын, шул хәтле ихлас, ярһыу итеп һөйләшкәнен ишеткәне юҡ ине.

— Бейем, бейемкәйем!..— тип, Бибеш тә, ахыры ҡапыл ҡыуаныстан енө быуылып, ҡысҡырып өндәшкәнен тоймай ҡалды.— Ысынды һөйләйһеңме икән?.. Әллә мин берәй татлы әкиәт кенә ишетәмме?!.

— Ысын. Дөп-дөрөҫтө генә һөйләйем, килен,— тип, һаман баяғыса ышанып, теремекләнеп раҫланы Таиба әбей.— Әгәр һин унда бығаса беҙ бер ҡасан да ишетмәгән-белмәгән аҙыҡ-түлектең ни хәтле икәнен белһәц ине!.. Иҫең дә китер ине... Бына тыңла: какау тигән, көл һымаҡ онтаҡ, тик һары төҫлө бер нәмә. Унан бик туклыҡлы сәй була, ти... Сәйгә матур-матур тимер банкаларҙан ҡаймаҡлы һөт һаласаҡтар, ти. Ул һөтлө банкалары ла бик күп... Дөгө, кукуруз ярмалары ла етерлек. Шулай булғас, бутка ла туя ашарлыҡ була инде!..

Бына шулай итеп, икмәккә, буткаға туя башлаһа, беҙҙен, Емеш тә һә тигәнсе аяҡҡа баҫыр, быша күр ҙә тор!..

Бибеш ҡапыл шулай ғәҙәттән тыш йәнләнеп, алсаҡланып киткән бейеменә ғәжәпләнеп тә, ышанырға-ышанмаҫҡа ла белмәй, һаман шулай текләп торҙо. Ә Таиба әбей оҙаҡ ҡына баш сайҡап торҙо ла бик ҡәнәғәт төҫ менән артабан һөйләне:

— Ҡара һин унд, үҙе кафыр, ә шундай изге күңелле... Никитаны әйтәм әле... Байрас әйтә, бальшәүниктәр, ҡәртсәй, барыһы ла шулай улар, ти. Улар, ти, элекке байҙар шикелле үҙҙәре хаҡында ғына ҡайғыртмайҙар. Ә иң элек халыҡты ҡайғырталар, ти... Шулай булғас, быға инде, бү--

тәнсә нимә әйтеп була?!. Дөрөҫтөң ауыҙын ҡаплап буламы ни?! Аллаһы тәғәлә уға, бындай изге эше өсөн, үҙенең күрсөйөнән урын бирһен, тип теләргә генә ҡала беҙгә. Шулай бнт, килен?!

— Шулай булһын, бейем...— тине Бибеш тә йөрәгенән атылып сыҡҡан шат тауыш менән.— Етемдәр... Астан интеккән кешеләр тураһында уйлаған изге күңелле был кешегә алланың оло рәхмәте яуһын!..

Емеш йоҡо аралаш тын ғына йылмайып ҡуйҙы. Күрәһең, ул һәйбәт төш күреп ята ине.

* *
*

Икенсе көндө кис менән уларға Байрас йүгереп килеп инде. Тупһанан уҙыуға, ҡулындағы конвертын баш осонда болғап, үтә шатлыҡлы ғорур тауыш менән ҡысҡырып хәбәр итте:

— Мин Иштуған ағайҙан хат алдым!

— Хат? Иштуғандан хат, тиһеңме? — тип ҡабатлап һораны ҡәртсәһе.— Ни өсөн һиңә яҙҙы икән, беҙгә түгел?!

— Ул һеҙгә лә яҙа ла баһа! — тине Байрас, инде үпкәле тауышҡа күсеп.— • Минә яҙмаҫҡа тейешме ни? һиненсә, ҡәртсәй, мин һаман әле малай ғыналыр? Бәлки, атайым да миңә хат яҙмаҫҡа тейештер әле, ә?

— Юҡ-юҡ, балаҡай, мин янылышыраҡ әйттем. Улай әйтергә теләмәгәйнем мин,— тип аңлатырға ашыҡты Таиба әбей.— Нинә беҙгә лә яҙманы икән? — тип кенә һорамаҡсы инем... Улай үпкәсел булма, ейәнкәйем, укып ебәр хатты.

Байрас, әҙерәк һүрелеп, баҫалҡы тауыш менән:

— Улар бит хатты миңә адреслаһалар ҙа һеҙгә укып ишеттерһен, тип яҙалар,— тип ҡуйҙы.— Тимәк, адресы ғына миңә, ә хаты һеҙҙеи өсөн була!.. Аңланынмы, ҡәртсәй?

— Йә, ярар, аңланым, ейәнкәйем, укып ебәрсе! — тип, ҡәртсәһе уға яратып иркәләп ҡараны. Уның тауышында шундай укымышлы ейәне булғаны өсөн оло ҡыуаныс та, ғорурлыҡ та яңғырай ине был юлы.— Нимәләр яҙа икән, йәһәтерәк беләйек!..

Хат тигән һүҙҙе ишеткәс, Емештең йөрәге ҡыуаныстан тарһылдап китте, хәлһеҙ ҡулдары ҡалтырап, ҡулындағы һоҫоһон шалтыратып төшөрөп ебәрҙе. Ул усаҡ янында самауырға ҡуҙ һалып тора ине.

— Ипле, ҡоҙаса. Баланы уятырһың бит! — тине Таиба әбей асыуһыҙ ғына.— Әле генә көскә йоҡлаттыҡ бит Йәнеште!



Был иҫкәртеүҙән, ни өсөндөр, ҡыҙҙың йөрәге тағы ла дерелдәп, иҙәнгә сәселгән ҡуҙҙарҙы һоҫоға йыйып ала алмай ыҙаланды. Байрас унын, хәленә төшөнә ине. Емеш тынысланып, эшен башҡарып бөтмәй тороп, ул хатты укырға керешмәне.

Хат бик оҙон, ҙур ине. Күрәһең, Иштуған күрше-күлән, туған-ырыуҙың хәтерен ҡалдырмаҫ өсөн, хатты һәр кемгә айырым-айырым сәләм тапшырып, иҫәнлек-һаулыҡ теләп, быҒаса булған йоланы тулыһынса һаҡларға тырышып яҙғайны. Байрас хаттың бик оҙон, бер төрлө яҙылған был күңелһеҙ өлешенә ҡабалан ғына, күҙ йөрөтөп сыҡты ла һуңғы өлөшөн кинәнеп, яйлап укырға кереште. Сөнки тап ошо өлөштә уны иң ҡыҙыҡһындырған һуғыш хәлдәре хаҡында, атаһының үҙе бер ҡасан да яҙмаған ҡаһарманлыҡтары хаҡында һүҙ бара ине.

«...Хаммат ағайҙы лазаретта барып күргәндең иртәгеһенә үк беҙҙең башҡорт кавалерия бригадаһын, башта ялға, унан Кенбайыш фронтҡа оҙаттылар,— тип ашыҡмай ғына укыны Байрас. Таиба әбей генә түгел, Бибеш менән Емеш тә, уның шулай һәйбәт, асыҡ итеп укыуына тамам тан, ҡалып та, һуғыш хәлдәренец хәтәрлектәренән йөндәре ҡурылып та тып-тын ҡалып ултырҙылар. Хатта ах та ух килеп мендәр еҫтәндә түкмәсеп уйнап маташҡан һөйөндек тә, ағаһына текләп, уйнауҙан туктап ҡалды. Юлбарыҫ кеүек аласа ҙур ата бесәй ҙә, тәпәйҙәрен ҡойроғо менән иркә ҡосаҡлап, һөйөндөк янына килеп ятты.

— Йыл башында булды был хәл. Ә майҙа беҙ тағы һуғышҡа индек. Был юлы аҡ поляктарға ҡаршы һуғышырға тура килде,— тип укыуын дауам итте Байрас.— Ә июндә инде Хаммат ағай ҙа, һауығып, сафҡа ҡайтты. Шулай итеп, беҙ тағы бер үк фронтта булып сыҡтыҡ. Шул көндән алып бер өҙлөкһөҙ ҡаты һуғыштар китте. Майҙан алып октябрь уртаһына хәтле беҙҙең башҡорт кавалерия бригадаһы, етенсе армиянын. удар группаһы составында, ҡан ҡойошло үтә ҡаты, йонсоткос һуғыштар менән Днепрҙан Буг йылғаһына, Киевтан Львовҡа хәтле биш йөҙ саҡрымдан ашыу юл үтте. Ахыр килеп, һуғышты Варшау янында тамамлап ҡуйҙыҡ. Дошманды шундай ҡаты тар-мар иттек, инде ул бер ҡасан да ҡабат баш ҡалҡыта алмаҫ. Тыныс булырға мөмкин хәҙер. Был хәл иткес ауыр һуғыштарҙа беҙҙең башҡорт ҡыҙыл ғәскәрҙәре ҙур ҡаһарманлыҡтар күрһәтте. Дошманды ҡыуғанда иң алда, сигенгәндә иң арттағыларҙан булды... Бына тигән бик күп батыр егеттәр һуғыш яланында ятып ҡалды...

Беҙ бында, Ҡыҙыл Армияның буденовсылар, чапаевсылар һәм башҡа бик күп данлы частары менән бер фронт-

та һуғыштыҡ. Беҙҙен. бригаданың биш йөҙгә яҡын һалдаты, командирҙары Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды. Шулар араһында һинең атайың менән миу дә бар, Байрас...»

— Бына ишеттегеҙме, беҙҙекеләр ҡалайыраҡ һуғышалар, ә? Беҙҙең данлы бөркөттәр ҡалайыраҡ, ә? — тнп, шатланып, һоҡланып, Таиба әбей хатта телен таҫылдатып ҡуйҙы.— һай-һай-һай!.. Арыҫландар инде, төптө арыҫландар!.. Бүтәнсә ни тип әйтәһен.?!-

Унан бер аҙ тынып ултырғас, уйсан ғына баш сайҡап ҡуйҙы.

— Шулай ҙа тенкәгә тейҙе инде был һуғыш. Тенкәгә бик тейҙе... Бына бит хаттар ҙа тик шул һуғыш хаҡында ғына! Ҡасан һуң тыныс тормош хаҡында һөйләшербеҙ икән, ә?!.

Байрас уға ғәжәпһенеп ҡараны.

— Оҡшамаймы ни, ҡәртсәй?

— Юҡ. Оҡшамай. Туйҙырҙы,— тип ҡырт киҫте хәҙер Таиба әбей.— Исмаһам, ҡасан ҡайтырҙарын яҙһа ине! Юҡһа ни, былай ни... һуғыш та һуғыш... Әйтерһен, бөтә тормош, хатта бөтә донъя тик шул һуғыштан ғына тора... Бөтә кешене екһендереп бөттө лә баһа инде был һуғыш! Эй аллам, ҡасан һун. һин был ҡәһәр һуккан һуғышынды үҙенә саҡырып алырһын икән?! Унда күгендә йәшәгән фәрештәләрен, шайтандарын. татып ҡараһындар ине, исмаһам, ләғнәтле һуғыш тигән нәмәне! Әҙәм балаларының үлтереш-ҡырылышын югарынан, ете ҡат күктән, ҡарап ултырыу енелдер ҙә бит ул... Ә миңә еткән инде... Алкымыма етеп туйганмын инде мин ул һуғыштан...

Емеш, ҡото осоп, ҡурҡынып, ҡоҙағыйынан күҙен ала алмай ултырҙы: «Уй нисек ул шулай аллаһы тәғәлә менән асыулы һөйләшергә ҡыя икән? Улай яраймы икән ни?Ь

Ә Байрас, йылы ғына йылмайып, ҡәртсәһенен. һүҙен бүлде:

— Ҡәртсәй, йә, хатты артабан укыйыҡ. Бәлки, унда тыныс тормош хаҡында ла һүҙҙәр барҙыр...

— Уҡы, балам, укы,— тине Таиба әбей, инде арыу ук һүрелеп.— Уҡып бөтмәҫкә яраймы һуң? һис һүҙһеҙ укып сығырға кәрәк хатты... Мин ни былай ғына -бит... Шундай хатты ла укып бөтмәй була тиме?.. Ана бит ҡайҙан, ер сигенән килгән ҡәҙерле хат бит ул!.. Әлдә кешеләр был хат тигән нәмәне уйлап сығарғандар әле. Рәхмәт яуғырҙары... Юҡһа беҙ уландарҙың хәлен ҡайҙан, нисек белер инек?!. Хат яҙыуҙы уйлап сығарған кешегә лә, яҙған кешегә лә алланың мең рәхмәте яуһын инде... Уҡы, ейәнкәйем, укы...



Байрас бик ваҡытһыҙ һәм үҙенен, холҡона хас булмагапса таркау уйҙарға бирелеп киткән ҡәртсәһенә тағы бер тапҡыр оҙаҡ ҡына ғәжәпһенеп ҡарап алды. Уныц был һунғы йылдарҙа төҫ-баш яғынан да, холоҡ ягынан да нык ҡына үҙгәреп. ҡартайып китеүе хаҡында уйлап, бошоноп ҡуйҙы. Шулай ҙа хатты баяғыса асыҡ, теремек тауыш менәи укыуыи дауам итте. Ә Иштуған һаман шул Һуғыи1 хаҡында, дамлы башҡорт частарынын. аҡ поляктарҙы енгәндән һуң да Петлюра, Махно тигән бандаларға ҡаршы һуғышып йөрөүе, бында ла батырлыҡ менән дан алыуы хаҡында, хәҙер, пеглюрасыларҙы ла тар-мар иткәс, башҡорт кавалерин бригадаһыиа илден. көнбайыш сиктәрен һаҡлау бурысы йөкләтелеүе хаҡында яҙҙы. Хатынын. аҙағында гына быйыл һәҙгә илгә ҡайтырға емөт итеүҙәрен бслдергәи. Унап уйынлы-ысынлы һымаҡ ҡына итеп:

— Ай-һай. ҡалай минец укытыусы булгым килә!.. Балаларҙы өр-яныса йәшәргә өйрәтеү... Тимерсе шикелле һандалға 1lалып. кешелоргә бәхет сүкеп биреү — бына минең иц изге ниәтем!..— тип ҡуйған. Иң һуңғы һүҙен яныпярһып тамамлаган.

«Быиа шулап. аслыҡҡа ла. ялангаслыҡҡа ла бирешмәгсҙ! Тиҙҙон һеҙҙең уландарыгыҙ, атайҙарыгыҙ — революцпяныц батыр ҡаһармап һалдаттары ҡайтып етер... Илгә бәхет килер!..»

«Бәхет килер!..— тип шыбырлаиы Емеш эсенон генә.— Улар ҡайтыр^ар!.. Улар менән бергә бәхет ҡайтыр!..»

Ул бөгөн, бәлки, башҡалар менэн бер рәттән, уга ла сәй яиына бсрәр һыныҡ аҡ арыш икмәгс, берәр туҫтаҡ дөгө бутkаһы тсйгонгәлер, теремегерәк тә, һауыраҡ та күренә ине.

— Бәхет кнлср. Килср оле бәхет! — тип ышаныслы итеп раҫлап ҡуйҙы Таиба әбей ҙә. Был юлы унщ тауышы тағы ла уяуыраҡ янғыраны.— Бер бәхет үҙе артынан эйәртеп тағы күп бәхеттәр алып килер, ти, халыҡ. һис юғында ес тапҡырға хәтле шулай булыр, ти...

— Ә ҡайғы?..— тип тынысһыҙланып һорап ҡуйҙы Емеш.— Ул дамы, ҡоҙағый?!.

— Моғайын, шулайҙыр... Ул хаҡта хатта бер ни ҙә әйтелмәй,— тип ялтартып яуап ҡайтарҙы Таиба әбей. Унан бер аҙ уйлап алғас: — Ҡайғы хаҡында уйларға ла, уға юрарға ла ярамай,— тип ҡырт киҫеп ҡуйҙы.— Кешене бәхеткә, шатлыҡҡа булған емөт йәшәтә. Бәхеткә, шатлыҡҡа инанып көн итә кеше...

«Бәхет хаҡында уйлап... Бәхет, шатлыҡҡа өмөт итеп йәшәй кеше!..— тип ҡабатлай Емеш был һүҙҙе үҙ алдына.— Дөрөҫ тә шул... Әйтәйек, бына мин нисек йәшәйем

һун? Әлбиттә, бәхет, шатлыҡҡа өмөт итеп... Әгәр шулай булмаһа, шул өмөт йөрәк түрендә йылытып тормаһа, кем белә, бәлки, был донъяла мин күптән-күптән булмаҫ инем инде...»

— Ҡәртсәйем һәйбәт әйтте. «Кеше бәхеткә булған өмөт менән йәшәй», тине,— тип, өлкәндәрсә етди итеп, Байрас һығымта яһап ҡуйҙы.— Улай ғына ла түгел, кеше бөтә көсө менән шуға ирешергә тырыша. Сөнки көрәшмәй, тырышмай тороп, бәхет үҙлегенән-үҙе килмәҫен кеше белә. Шулай бит, ҡәртсәй?

— Шулай, ейәнкәйем, шулай...

Бибеш бер һүҙ ҡыҫтырмай тыңлап, ниндәйҙер ғәжәп бер яҡты ҡараш менән әйләнәһендәге бөтә кешегә алмаш-тилмәш ҡарап, шым ғына тик ултырҙы. Ләкин ул да бәхет тураһындағы һүҙҙәргә иғтибарһыҙ ҡала алманы. Ул да эсенән генә ҡайһы саҡта кешегә бәхетле булыр өсөн бик аҙ ғына нәмә лә етеүе хаҡында, бөгөн үҙҙәренең ғаиләһенә килгән ғәжәп ҙур шатлыҡтар тураһында ҡыуанып уйланды. «Бына бит, ашхана астылар, ашаттылар, аслыҡтан ҡотҡарҙылар... Емеш бөгөн ул хәтле ауырыу күренмәй... Никита белеш биргән дарыу ҙа, ашхананын, ашы ла, күрәһең, уны үлемдән ҡотҡарып ҡалырға ярҙам итерлектер... Ахыр килеп, бынауы Иштуғандың һаулығын белдергән хаты... Хаммат ҡайнаға ла, Айһылыу килен дә иҫән икән... Эй-й, ҡайһылай ҙа оло шатлыҡтар яуҙы ла баһа бөгөн беҙҙең өҫкә!.. Алла бирһә, тиҙҙән улар гөрләшеп ҡайтып та килерҙәр... Бына шулай итеп, бейем әйтмешләй, беҙгә бәхет артынан бәхет, шатлыҡ артынан шатлыҡ эйәреп килеп кенә торор!.. Ҡайһылай ҙа ҡыуаныслы булыр ул көндәр!.. Шунын. өҫтәүенә, алдағы йәй игендәр ҙә уңып китһә... Эй-й...»

Бибеш уйының ошо иң ярһыу нөктәһенә килеп еткәндә, күрәһең, өндәшмәй артыҡ түҙә алыуҙан уҙып, итәгендә ятҡан бәпесен күтәреп алып, ҡыҫып һөйҙө лә, ҡояштай балҡып:

— Ишетәһеңме, Йәнеш!? — тип өндәште.— Ишетәһеңме, ҡәртсәй нимә тине?!. Бәхет, шатлыҡҡа өмөт менән йәшәргә тейеш кеше,— тине.— Хәтереңдә тот быны! Бәхеткә булған яҡты өмөт менән янып йәшәргә тейеш кешё!

*1965–1966*
*Өфө, Малеевка.*

## МӨХӘББӘТ

Сәлимә йоҡоһонан тертләп уянып китте лә, йүгереп хәле бөткән кеше һымаҡ, аһылдап тороп ултырҙы. Өҫтөнә ябынған аҡ простыняһы карауаттан әкрен генә иҙәнгә шыуып төштө. Ә уны уятҡан тауыш ҡайҙалыр бик алыҫта тағы бер нисә тапҡыр тоноҡ ҡына ҡабатланды ла тынды.

— Туҡ... Туҡ...ту-ҡ!..

«Әллә йөрәгем шулай тибәме минен?»

Ул ҡулын ашығып йөрәгенә баҫты. «Юҡ! Йөрәгем туҡылдамай. Борсоулы, ләкин хәлһеҙ генә тибә ул. Нимәнән риза түгел һин, минең моңһоу йөрәгем?..»

Тауыш ҡайҙалыр әкрен генә тағы ҡабатланды.

— Туҡ... Ту-ҡ!..

Сәлимә йүгереп барып тәҙрәне шар асып ебәрҙе. Түҙемһеҙләнеп, тирә-яғына ҡараны. Тын да алмай бик оҙаҡ тыңлап торҙо. Ләкин бер ҡайҙа ла, бер кем дә юҡ ине. Тирәяҡ тып-тын. Ҡала әле йоҡонан уянмаған. Офоҡта саҡ-саҡ ҡына ағарып йәйге тан. һыҙылып килә. Таң нуры менән тоноҡлана төшкән ярты ай түбә өҫтөндә моңһоу ғына ҡырын баҫып тора. Тәҙрә янында үҫкән йәш сирень, муйыл ағастарынан, клумбалағы сәскәләрҙән таралған хуш еҫтәр, тан. еленә ҡушылып, бүлмәгә инеп тула. Япраҡтар араһында, бер өҙлөкһөҙ сипылдашып, турғайҙар һикерешә.

«Ә унда, ул йөрөгән ерҙә, был ваҡытта һандуғастар һайрай...» тип уйлай Сәлимә. һәм уға тағы ла ауырыраҡ, күңелһеҙерәк булып китә. Йәйге таңдын, бөтә был матурлығы буш, ҡырыҫ, һалҡын, мәғәнәһеҙ булып тойола башлай.

«...Эйе, был ул... ул! Уның аяҡ тауышы!.. Ҡайҙа ғына бармайым, ни генә эшләмәйем, ул һаман минең ҡолағымда. Инде йоҡомда ла уны ишетеп уяна башланым. Ни хәл итергә һуң инде миңә?!»

Сәлимә тәҙрә төбөнә менеп ултырҙы. Ай нурҙары япраҡтар араһынан унын ҡаҡса, нәҙекәй һынына һыланып торған алһыу ебәк эске күлдәгенең итәктәренә, тәҙрә тупһаһына һуҙып һалынған яланғас аяҡтарына төшөп, көмөш тәңкәләр булып, һибелеп яттылар. Таң елдәре унын, аҡ ҡар тауы артынан ҡалҡып килгән ҡара болот шикелле булып яурындарын ҡаплап торған туҡынлы ҡалын сәстәрен һыйпап уйнанылар. Ә ул быларҙын, береһен дә тойманы. Уйҙары уны алыҫ үткәндәргә, бала саҡтарына алып инеп китте. Ул, бик күп йәшәгән кеше шикелле, моңайып, үткәндәрен һағынып уйланды. Эйе, уға егерме ете йәш ине шул

инде. Уңышһыҙ мөхәббәт менән зарығып үткән йәшлекте ҡыҙғанып иҫкә алмаҫлыҡ та түгел шул!..

...Бына гәмһеҙ, шат, шаян бала саҡ, яҙғы ҡояшлы көн кеүек булып, йөрәк түрендә мәңге яҡтырып тора. Уны бер ҡасан да онотороға түгел. Шулай ҙа мәктәптен. Һуңғы кластарында уҡыған сағы Сәлимәнең хәтерендә айырата ныҡ һаҡланып ҡалғайны. Эйе, был ваҡытта ул шаян, көләс бер ҡыҙ ине. Ун биш йәштәр самаһы ине шикелле. Ә ул — Хәмит ун алтыларҙа булғандыр. Ул Сәлимәнән бер класс алда уҡый ине. Уларҙың араһындағы сәйер дуҫлыҡ ошо саҡтан уҡ башланды. Хәмитте шәп уҡыуы, пионер, комсомол эшендә актив эшләүе, мәктәптә йәш флотсылар түҫәрәге ойоштороп, йәй көндәрендә шлюпкала Ағиҙелде, Ҡариҙслде айҡап сығыусы ҡыйыу егет булыуы өсөн мәктәптә бөтәһе лә ярата ине. Ә Сәлимә уны айырата сәйср бер тойго менән ярата: уға башҡаларҙан бер ни менән дә тип әйтерлек айырылмаган, йыуантығыраҡ урта буйлы, ҡалын ҡара ҡашлы, киц, текә маңлайлы, аҡыллы ҡарашлы был ябай егет донъяла тиңе булмаған матур булып күренә. Ул уға һоҡланып бөтә алмай. Ни генә ҡыланһа ла, ни генә һөйләһә лә, Хәмит уға ғәжәп һөйкөмлө булып күренә. Уның һәр ваҡыт Хәмиткә ҡарап, уны күреп кенә торғоһо, ул булган урында булгыһы, ул һулаган һауаны һулағыһы килә. Ә инде әллә ниҙә бер униц менән бер-ике ауыҙ һүҙ һөйләшергә тура килһә лә, унын шатлыгының иге-сиге булмай.

Тора-бара Сәлимә, үҙе лә һиҙмәҫтән, ниидойҙер билдәһеҙ бер көс менән унын, янына тартыла, нисек тә осрашырға, һөйләшергә тырышып ҡына тора башланы. Һис юғында ҡәләменең осон партаға төртөп һындырып булһа ла, тәнәфес ваҡытында Хәмит янына барып инә ул.

— Хәмит, бәкен, бармы? Ҡәләмемде генә ослап алайым әле. Хәҙер беҙҙә черчение,— ти.

Хәмит, ниҙер һиҙенгән кеүек, йомшаҡ ҡына йылмайып уға ҡарап ала ла кеҫәһенән кескәй генә бәке сығара.

— Ҡайҙа, үҙем оелап бирәйем.

Ашыҡмай ғына ҡәләмде ослай. Сәлимә, үҙенен. кыйыулыгынан, Хәмиттен нимәлер анлауынан оялып, унайһыҙланып ҡына баҫып тора. Аҡылы менән бынан ары минут тормай йүгереп сығып китергә, ҡабат был класҡа бер ҡасан да инмәҫкә, осрашмаҫка уйлай, ләкин аяҡтары урынынан ҡуҙғалмай. Күҙҙәре Хәмиттен. кин, маңлайына төшөп ятҡан ҡара сәстәренә, ҡәләмгә теклəп ҡуйы керпектәр менән ябылған аҡыллы күҙҙәренә, мускуллы, һылыу кәүҙәһенә килешеп торған шаҡмаҡлы күк күлдәгенә һоҡланып туймай. Ә йөрәге билдәһеҙ шатлыҡ менән осар ҡош кеүек



ярһып, талпынып, ашҡынып тибә. Шулай тәнәфес үткәне һиҙелмәй ҙә ҡала. Звонок була. Сәлимә, ҡәләмен алып, рәхмәт әйтергә лә онотоп, үҙ класына йүгерә, һәм аяҡтарының ҡайҙа баҫҡанын тоймай, ҡүҙ алдында кемдәр барын, кемдәр юғын да күрмәй, партаһына барып ултыра.

Тора-бара Сәлимә мәктәптән ҡайтҡан саҡта ла гел генә Хәмит менән бер ваҡытҡа тура килә башланы. Улар класс хәлдәрен һөйләшеп, йәки бөтөнләй бер һүҙ ҙә һөйләшмәй генә, һәр ҡайһыһы үҙ өйө яғына боролғансы, бер-ике кварталды бергә үтәләр.

Ошолай бер-ике йыл үтте. Улар тағы үҫә төштөләр. Был ваҡытта инде Сәлимәгә, Хәмитте күрер есөн, ниндәйҙер һылтау табып уның класына инергә лә, оялышынан ҡыҙарынып-бүртенеп уның ҡайтырға сығыуын ҡайҙалыр кетөп торорға ла тура килмәй башланы. Хәҙер инде Хәмит үҙе мөмкин булған һәр урында уға осрап ҡына торҙо. Ҡәләмен дә, Сәлимәнең янына үҙе үк килеп, ослап китә. Дәрестән һуң ҡалып, Сәлимә есен ауырыраҡ булған алгебра, физика дәрестәрен дә әҙерләшеп бирә. Ҡайтҡанда, элекке кеүек, Сәлимәнән алда үҙ өйҙәре яғына боролоп китмәй, һәр ваҡыт Сәлимәләрҙән арыраҡ берәй кешелә йомошо булып сыга. Йәки бөгөн дәрестә башы ауыртыңҡыраған шуға һауала оҙағыраҡ булғыһы килә. Сәлимәне ейенә, ҡапҡа төптәренә хәтле оҙатып ҡуя. Катокта ла, кинола ла улар һис тә уйламағанда осрашып ҡына торалар, һәм был балаларса ябай, эскерһеҙ, саф күңелле осрашыуҙар уларҙын. йөрәктәрендә бөткөһөҙ шатлыҡ, көс, дәрт уята. Улар арыуҙы, талыуҙы, ялҡауланыуҙы, күңелһеҙлекте белмәйҙәр. Быгаса уртасараҡ уҡып килгән Сәлимә бишкә генә уҡыуға күсеп китә. Ул үҙендә иҫ киткес егәрлелек, көс, зирәклек артҡанын тоя. Был дуҫлыҡ уларға илдә барған ҡаты, көсөргәнешле һуғыш арҡаһында килеп тыуған бетә ауырлыҡтарҙы, юҡлыҡтарҙы еңел кисерергә мөмкинлек бирә. Улар ҡышын тырышып уҡыйҙар, өйҙә, ғаиләлә бөтә эште йөкләп баралар, йәйен колхозға, совхозға барып иген эшләшәләр. Уларҙын, көндәре эш, тырышлыҡ, киләсәккә ҙур ышаныс менән шаулап үтә.

Бына һуғыш менән уҙған өсөнсө яҙ килеп етте. Был йылды Хәмит ауыл хужалығы институтынын, беренсе курсын тамамланы. Ул хәҙер элеккенән дә кин, яурынлы, мускулдары ишелеп торған мыҡты кәүҙәле, ҡушылып үҫкән ҡалын ҡара ҡашлы егет ине. Ун алты йәшенән үк ҡуйы булып үҫеп сыҡҡан һаҡал-мыйығы хәҙер бөтә битен тип әйтерлек ҡаплап алған. Был уға айырата күркәмлек, олпатлыҡ өҫтәй. Һәр көн тип әйтерлек бик тырышып ҡырыныу ҙа уның артыҡ һаҡалтай икәнен йәшерә алмай.

Был йылды Сәлимә үҙе лә, унынсы класты отличноға тамамлап, институтка инергә дәртләнеп йөрөй ине инде. Ул үҙе лә нәҙек оҙон буйлы, уйсан ғына ҡарашлы, баҫалҡы холоҡло, һөйкөмлө бер ҡыҙ булып үҫеп еткәйне.

Ошолай улар үҫеп етеп, бер-береһенә һоҡланып, ҡыуанып бетә алмай торған бер саҡта, Хәмитте лә Ватан ил һаҡларға саҡырҙы. Тыуған ил, бөтә көстө йыйып, дошманға аҙаҡҡы ударҙы бирергә әҙерләнә ине был йылда.

Хәмит иртәгә военкоматҡа китер кисте улар таңға хәтле бергә булдылар. Башта паркта, парк ябылғас, үҙ урамдарында әкрен генә йөренөләр ҙә йөрөнөләр. Ошо кисте Хәмит уны беренсе тапҡыр ҡултыҡлап алды. Хәмиттен. ҡулы тәүге тапҡыр үҙенен. беләгенә тейгәс, Сәлимәнен. бөтә тәненә ниндәйҙер көслө ялҡын таралды. БыҒаса бер ҡасан да татылмаған иҫ киткес татлы бер хистән башы әйләнеп, сайҡалып китте. Хәмит тә, күрәһең, ошондай уҡ тойғоно кисергәндер. Улар бик оҙаҡ бер һүҙ ҙә һейләшә алмай йөрөнөләр. Шулай ҙа тиҙҙән айырылышыу ҡурҡынысы уларҙын. ҡыйыуһыҙлығын енде. Хәмит уға ошо кисте беренсе тапҡыр үҙенен һөйөүен әйтте. Сәлимәнең ҡыуанысынын, иге-сиге булманы. Был минутта донъяла унан да бәхетле кеше юҡ ине. Ә төн шундай ҡыҫҡа булды. Улар бер ни ҙә һөмләшергә өлгөрмәй ҡалдылар. һөйләшер һүҙ ҙә тапманылар. Хәйер, был минутта уларҙың йөрәгендә урғылған ҡайнар хистәргә торош итерлек һүҙҙәр бар инеме ни?!

Ул кистә лә тап бына ошондай, бөгөнгөл^й тан. һыҙылып килгән саҡ ине. Ошонда Хәмит уны тәүге һәм аҙаҡҡы тапҡыр үпте... Сәлимәнен, йөрәге, юҡ, йөрәге генә түгел, бөтә тәне мөхәббәт утында янды. Ул бер минутка ғына иҫен югалткандай булды, аяҡ быуындары хәлһеҙләнеп, йығылып китә яҙҙы. Хәмит уны бала кеүек итеп күтәреп алып өй тупһаларына илтеп баҫтырҙы ла:

— Йә, хуш. Көт, күбәләгем. Мин ҡайтырмын! — тип йүгереп ҡапканан сығып та китте.

Күҙ асып йомған арала гына булып үткән был ҡабатланмаҫ бәхетле минуттар Сәлимәнен күңелендә болотло күктә балҡыған йәшен сатҡылары кеүек кенә яҡтырып ҡалдылар. Ә унан һунғылары бөтәһе лә йән әсеткес күнелһеҙлектәр генә ине.

Сәлимә, ғәҙәтенсә, бынан һуңғы яғын уйла.маҫка, иҫкә төшөрмәҫкә, урынына барып ятырға ла ҡаты итеп йоҡлап китергә теләне, ләкин ниндәйҙер көстәр уны ҡуҙғатманылар, уйҙар эсенә һаман тәрәнерәк тартып алып инә барҙылар. Ул уйсан күҙҙәрен әкренләп яҡтыра барған алһыу офоҡҡа текәп ултырҙы ла ултырҙы. Тан. еленец дымлы, һалҡынса тулҡындары арҡа буйҙарын өшөтөп, сымырлатып үтеүен дә, кешеләрҙең, уяныл, ара-тирә йөрештөрә башлауын да тойманы ул.

...Хәмит шулай китте. Башта ул Свердловск ҡалаһында ниндәйҙер бер курс үтте. Лейтенант булып сыҡты. Унан һуғышҡа китте. Сәлимәгә ябай, ҡыҫҡа, ләкин һөйөү, һағыныу хистәре менән тулы хаттар килеп кенә торҙо. Сәлимә лә яҙҙы. Унын бер хатына ҡаршы икене, өстө яҙҙы. Хәмит уға һөйгән егете булған есен генә түгел, унын һөйекле Тыуған илен, бәхетен, киләсәген яҡлаусы батыр боец булыуы менән дә яҡын ине хәҙер.

Ә енеүле, дауыллы һуғыш дауам итте. Хәмиттәр дошманды Карпат тауҙарында туҡмайҙар ине инде. Радио һәр көн береһенән-береһе шатлыҡлыраҡ, данлыраҡ енеүҙәр тураһында хәбәр итеп тора. Ер өҫтөндә шатлыҡ менән ҡайғы тойғолары бергә ҡушылып урғыла, ажғыра, ҡайнай, сөнки һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. һәр көн почта кемгә лә булһа яҡынынын. яраланыуы йәки һәләк булыуы тураһында хәбәр килтерә. Еҫеү шатлығына ҡайғынын ҡара таҫмаһын килтереп урай. Бына күрше Хәсән ағай һыңар аяғын бот төбөнән үк ҡалдырып ҡайтты. Шинель салгыйҙарын ялбырлатып, ҡултыҡ таяҡтарына таяныл атлап килгән саҡта, был ҙур кәүҙәле, ерән мыйыҡлы, шаян һүҙле алсаҡ кеше Сәлимәгә бик ҡыҙғаныс тойола. Ул Хәсән ағайҙың һаман элеккесә шат, келәс булыуына, ҡайтыу менән үк тагы яныл-көйөп, тырышып партия эшенә тотоноп китә алыуына һис тә төшөнә алмай.

«Юҡ, юҡ, Хәмит улай аяҡһыҙ ҡалмаһын...» — Үҙ уйынан үҙе ҡурҡып, тертләп китә:

«Нисек мии ошолай уйлай алам? Юҡ, юҡ! Хәмит һаплау ҡайтыр... Бөтә кеше лә үлеп йәки яраланып бөтәме ни? Иҫән-һау йөрөгән кешеләр әҙме ни? Ана, әсәйемдең ҡустыһы, артиллерист Талип, һуғыштын, башынан' бирле фронтта, бер ҙә яраланғаны юҡ...» Хәмиттең һуңғы хаты Берлиндан килә.

«...Ике көн инде Берлин урамында һуғышабыҙ. Енеү, енеү, енеү көнө етте, күбәләгем!.. Шатлан! Тиҙҙән күрешербеҙ...»

Бына өс-дүрт йыл буйы миллион ҡорбандар хаҡына яулап алған бәхетле көн килеп етте. Тик Хәмит кенә ҡайтманы. һыуға батҡан кеүек өнһөҙ, эҙһеҙ юғалды ул. Их, ниндәй ауыр булды был ҡайғыны кисереүе! Кейәүгә сығырға ла өлгөрмәҫтән, «тол» ҡалыуҙан да ауыр ҡайғы бармы икән?! Ире үлгән ҡатын, исмаһам, ҡайғыһын башҡаларға һөйләп уртаҡлаша. Ә ул кемгә һөйләһен? Егете үлеүҙе ҙур ҡайғыға һанаусылар бармы ни? Унын, һөйгән, һөйелгән

бәхетле минуттарын белгән кеше булмаған кеүек, көйгәнен дә аңлар кеше юҡ бит! Ә әсәһе һуңғы ваҡытта уға йыш ҡына асыулана, үпкәләй:

— Һуғыш туктап, кешеләр ҡайта башлағас, ҡайғым яныр ҙы. Атайың мәрхүмде һағынам... нык иҫемә төшә, һин, исмаһам, ҡайғымды уртаҡлаша ла белмәйһең бит,— ти. Сәлимә ни әйтә алһын? Унын. үҙенең йөрәгендә төҙәлмәҫ ике ҡайғы бит: атаһы өсөн дә, Хәмите өсөн дә һыҙлана бит унын, йерәге. Шуға күрә ул хәҙер күләгә кеүек тын булып ҡалды ла. Хатта укыуын да дауам итә алмаҫ кеүек тоя ул үҙен. Уҡыуҙы ташлап берәй эшкә китергә теләне. (Ул медицина институтында укый.) Ләкин әсәһе быға якын да килмәне.

— Уҡыуынды тамамла. Унан теләгән ереиә китеп эшләрһең,— тине.

Шәмсиә апай үҙе тегеү фабрикаһының директоры булып эшләй. Ябай эшсенән етәксе эшкә үрләгән кеше.

Сәлимәгә укыуын дауам иттереүҙән башҡа сара ҡалманы. Ошо көҙҙә унын йөрәген дер һелкеткән бер ваҡиға булды: һул аяғын тубығынан юғалтып, Хәмит ҡайтып төште. Ул һуғыш туктарҙан бер көн алда гына яраланған. Башта, хәле ауыр булғанлыҡтан, хат яҙа алмаған. Ә аҙаҡтан үҙенен был хәле Сәлимәгә нисек тәьҫир итеүен, Сәлимәнең быга нисек ҡарауын үҙ күҙе менән күрергә теләп яҙмаған.

Хәмит менән был осрашыу ваҡиғаһын Сәлимә бер ҡасан да тыныс ҡына иҫкә ала алмай. Әллә ниндәй мәғәнәһеҙ, үкенесле осрашыу булды был. Хәҙер уны ғүмер буйы әсенеп иҫкә алырға ғына ҡалды.

...Бына, ҡултыҡ таяҡтарына таянып, Хәмит баҫып тора. Үҙе, ниңәлер, ғәйепле кеше шикелле, йомшаҡ ҡына йылмая. Ун йылдарға торош итерлек дауыллы бер йыл уны ла, Сәлимәне лә танымаҫлыҡ итеп үҙгәрткән, күрәһең. Улар хәҙер икеһе лә бынан йыл ярым элекке, Хәмитте оҙаткан кистәге, балалар түгел. Улар хәҙер, ошондай ҡаты һуғыш мәленә генә хас рәүештә, әҙ ваҡыт эсендә күпте кисергән, бер йыл эсендә күп йылға олоғайған кешеләр ине. Быңдай кешеләргә аңлашыу, һөйләшеү, йерәктә ҡайнаганды асып һалыу еңел түгелдер, күрәһең... Шуға күрә лә был осрашыу шулай һис тә көтмәгәнсә, теләмәгәнсә килеп сыҡты ла инде. Әллә ни булды ул көндө Сәлимәгә: әллә ҡаты һағыныуҙанмы, әллә үлде тип ҡайғырыуҙан һуң ҡапыл ҡыуаныуҙанмы, әллә Хәмит ул теләмәгәнсә, ул көтмәгәнсә яралангангамы, әллә инде шундай мыкты, һылыу кәүҙәле егетте зәғифләп ҡайтарған шәфкәтһеҙ һуғышҡа ҡаты рәнйеүҙәнме, ул ни әйтергә, ни эшләргә лә белмәй ҡатты ла ҡалды. Хәмиткә бер генә йылы һүҙ ҙә әйтә, шатлығын да, ҡайғыһын да белдерә алманы. Йөрәгендә тулышҡан һөйөү, һағыныу, көйөнөү тойғоларын да һөйләмәне ул. Унын һүҙҙәре көтөлмәгәнсә ҡоро, һалҡын, мәғәнәһеҙ булып сыҡты.

«Күрәһең, был хәлемдә мин һиңә оҡшамайым...» тип уйланы Хәмит. Ул үҙе лә Сәлимәгә йөрәген асманы. Улар дөйөм хәлдәр тураһында ғына һөйләштеләр.

Бынан һуң улар һирәк осраштылар. Осрашҡанда ла һүҙҙәр бер ҙә йәбешмәне. Һәр ҡайһыһы эсендә янғанды йәшерергә, тыныс, ябай булырға тырышыуҙан, ялган тышҡы һалҡын ҡабыктан ҡыҫылып йөҙәне. Ә үткәндәрҙе ҡуҙғатырға, йәшлек мөхәббәте хаҡында иҫкә алырға береһенең дә батырлығы етмәне, йәки ғорурлығы ирек бирмәне. Шулай көндәр, айҙар үттеләр ҙә үттеләр. Хәмит институтта укыуын дауам итте. Тағы өс-дүрт йыл үтеп китте. Сәлимә врач булып, Хәмит агроном булып сыкты. Сәлимәне ҡалала, болышцала, эшкә алып ҡалдылар. Хәмит аспирантураға инде.

«Баи]лы-күҙле булыр сағы етте бит имде. Ницә һун егеттор менән бәйләнеш тотканы һис тә күренмәй? Йәмһсэ ҙә, белемһеҙ ҙә ҡыҙ түгел дә баһа!» тип бошондо Шәмсиә апай ҙа. Институтта ла, эшкә тотонғас та уиың артынан йөрөп ҡараусылар булды. Эшсон, тырыш, баҫалҡы холоҡло, тулкынланып торған оҙон ҡара сәсле, бөтә йөҙөмо ниндәйҙер ғәжәп ҙур һөйкөмлөлөк, яктылыҡ биреп торған уйсан ҡара күҙле был ҡыҙҙы яратмаҫлыҡ түгел ине. Ләкин уны йөрәгендә Хәмиттән башҡа бер кемгә лә урын юҡ ине. Умы ярата, унын өсөн йән ата ине һаман. Тик был хисен белдерергә һаман унын ғорурлығы ирек бирмәне. Әгәр Хәмит үҙе был турала һүҙ башламаһа, ул үҙенең һаргайып үлгәндә лә быны әйтмәйәсәгенә, бслдермәйәсәгснә төшөнә ине. Сикһеҙ ауыр ҙа, ғазаплы ла нне унын. был йәшереп мөхәббәте.

Шулай йылдар үтте. Хәмит аспирантураны бөтөрөп сығыуға, белгестәрҙе партия ауылга, ауыл хужалығын ҡайтанан аяҡка баҫтырыу өсөн көрәшкә саҡырҙы. Был саҡырыу буйынса үҙе теләп районға китеүселәрҙен береһе Хәмит булды.

Хәмит китер кисте улар, нисектер, аңғармаҫтан ғына урамда осраштылар. Хәмит уны ҡапка төптәренә хәтле оҙатып килде. Һүҙҙәр, ғәҙәттәгесә, һис тә генә йәбешмәнеләр. Икеһененң дә йөрәктәрендә ҡайнаған мөхәббәт хистәрен, үпкәләү, һағыныу, зарығыу тойғоларын асып һалырға, анлашырға көстәре етмәне. Ҡапҡа төбөнә килеп еткәс, Хәмит бер аҙ ендәшмәй торҙо ла, һүҙ ыңғайы сыҡҡан өсөн генә һымаҡ итеп:




П
н

— Мин ауылға кнтәм. МТС-ҡа. Сәлимә, һин партияның, был саҡырыуына нисек ҡарайһың? — тип һораны.

Хәмиттең киң, текә маңлайына яткан тәрән ике һыҙатка ҡарап, йөрәге һыҙлап китте Сәлимәнең.

«Йәшлек үтә бит!.. Ни уйлай икән был? Теге ваҡытта, яратам тип, юрый ғына әйттеме икән ни? Йәшлек хатаһы ғына булдымы икән ни унда?..» — тигән уй гүйә тамағына килеп төйөлдө. Ул өндәшә алманы. Хәмиттең күрәһең хәтере ҡалды:

— Йә, ярар. Хуш, Сәлимә! — тине лә китеп тә барҙы. Унын, таяҡ тауышы бик оҙаҡка ишетелеп торҙо.

— Туҡ!.. Туҡ!.. Ту-ҡ!..

«Хәмит йәнем, китмә! Кире борол! Мин һине бик, бик яратам бит! Элеккенән дә нығыраҡ яратам!» тип ҡысҡырғыһы, үкһеп-үкһеп илағыһы килде Сәлимәнең. Ләкин өнө быуылды, өндәшә алманы. Ҡаты ауырыуҙан торған кеше кеүек хәлһеҙләнеп, ҡойма таҡталарына тотона-тотона өйгә инеп китте...

Ул кискә лә бер йыл үтеп китте инде. Ләкин Хәмиттен, был һуңғы ҡарашы, һуңғы аяҡ тауышы Сәлимәнең хәтёренән бер ҡасан да сыҡманы. Ул ятһа ла, торһа ла, укыһа ла, эшләһә лә, Хәмит унын. ҡүҙ алдында тирләп-бешеп баҫып тора. Тротуарға туҡылдап бәрелгән таяҡ тауышы ҡолағында янғыраны. Бара-тора был тауыш уны йоҡоһонан да тертләтеп уята башланы.

«Инде ни эшләргә? Исмаһам, хат та яҙмайһың бит! Ҡайҙа һин, Хәмит?.. Мин һинһеҙ йәшәй алмайым, Хәмит!..»

Уйының ошо урынына еткәс, Сәлимә, йерәгенә түҙмәй, тәҙрә төбөнән төшөп китте. Ашығып өҫтөнә кейенде.

«Етте, етте, китәм. Бында башҡаса ҡала алмайым. Сиҙәм ерҙәргә. Алтайға китәм. Бөтә көсөмдө, белемемде, кәрәк булһа, ғүмеремде халыҡ өсөн, ил өсөн ин кәрәк булған урынға бирәм. Бына шул саҡта, бәлки, мине аңларһын, яратырһың һин, Хәмит!..»

Ул, өҫтәлдән «Правда» газетаһын алып, сиҙәм ерҙәрҙә эшләп йөрөүсе алдынғы ҡатын-ҡыҙҙарҙын, хатын тағы бер ҡат укып сыҡты, һәм, өтәләнеп, райкомға ғариза яҙырға ултырҙы.

«...Мине Алтайға ебәрегеҙ. Мин врачтарҙын. нығырак кәрәк булған урынында эшләргә теләйем...» — тип яҙҙы ул. Сәлимә ғаризаһын яҙып бөтерөүгә, бүлмәгә әсәһе килеп инде.

Шәмсиә апай, күптән йоҡоһонан тороп, иртәнге сәй әҙерләп йөрей ине инде. Ул иртә үк ҡайҙалыр китергә йыйынған ҡыҙына борсолоп ҡараны.



— Ҡыҙым, һиңә ни булды? Бөгөн төндә йоҡламанын, да түгелме һуң?

Сәлимә, йоҡоһоҙлоҡтан талған күҙҙәрен әсәһенән йәшереү өсөн, көҙгөгә ҡараған булып, арты менән әйләнде һәм тәбиғи булмаған шат тауыш менән ҡысҡырып көлдө:

— Бына һиңә кәрәкһә! Ни эшләп йоҡламайым ти мин!.

Шәмсиә апай башын ғына сайҡап ҡуйҙы ла халат кеҫәһенән бер хат сығарып бирҙе.

— Мә, ҡыҙым. Кисә, һуңлап ҡайтҡас, бирергә онотҡанмын.

Сәлимә нисек әйләнгәнен, әсәһенең ҡулынан хатты нисек ҡапыл тартып алғанын белмәй ҡалды.

— Хат?! Кемдән, әсәй?

Һуңғы ваҡыттарҙа ул һәр бер хатты шулай ашҡынып, йәшерен бер өмөт менән ҡаршы ала. Хәмиттән түгеллеген белгәс, унын. секунд эсендә балҡып киткән бөтә был шатлығы юғала, ул тағы күңелһеҙ, һүҙһеҙ кешегә әйләнә. Әле лә унын. күҙҙәрендә тан. сулпанындай балҡып, яҡтырып киткән шатлыҡ осҡоно шунда уҡ һүрелде. Ләкин хаттын, аҙағына етә килә уның йөҙө тағы яҡтыра, күҙҙәре өмөт осҡоно бөркөп балҡый башланы. Ахыр ул бөтөнләй йәнләнеп, бәләкәй сағындағы кеүек көлөп, һикереп, бейеп әйләнеп китте. Үҙе лә һиҙмәҫтән әсәһен ҡосаҡлап ҡат-ҡат үбеп алды.

— Әсәкәйем, мин ауылға китәм!.. МТС-ҡа! Эшкә!

— Бына алйот! Ҡартайған әсәйеңден янғыҙын ташлап китәһен генә ҡалғайны. Башҡаһы бөткәйне,— тип һукранды Шәмсиә апай. Күҙлеген кейеп, хатты алып карауатҡа барып ултырҙы. Сәлимә, шатлыҡтан атылып сығып барған йөрәген көскә тыйып, бәхетле ҡараштарын әсәһенә төбәп, уның ҡаршыһында баҫып торҙо.

Хат Сәлимәләрҙең элекке күршеһе, уҙған йыл ире — инженер Хафиз ағай һәм балалары менән МТС-ҡа эшкә киткән укытыусы Фатима апайҙан ине. Фатима апай үҙҙәренең МТС-та бик яҡшы урынлашыуҙарын, иренен баш инженер булып эшләүен, эштен. бик күп һәм күңелле булыуын, үҙенең укытыу эшен дауам итеүен белдергәндән һуң, МТС-та врач етешмәүен әйтеп, Сәлимәне шунда эшкә килергә саҡырып яҙғайны.

*«...Ҡалала унһыҙ ҙа врачтар күп. Бында кил. Яңы больница һалынып ята. һиңә бында эшләргә, үҫергә лә мөмкинлек ҙур буласаҡ. Үҙ алдыңа эшләп, етди эшкә өйрәнерһең»,*— тип яҙғайны ул. Хаттың аҙағына былай ғына, һүҙ ыңғайында ғына әйткән һымаҡ итеп, Сәлимәнен, күңелен бөткөһөҙ шатлыҡ, ярһыу өмөт менән тултырған бер хәбәр ҙә яҙып ҡуйғайны.

*«Беҙҙең МТС-та баш агроном булып Хәмит эшләй. Уҙған йыл беҙҙең менән бер ваҡытта бында килгәйне. Халыҡ үҙен бик ярата. Эш өсөн генә тыуған кеше, тип йөрөтәләр, сөнки ул бөтә донъяһын онотоп эшкә бирелгән дә ҡуйған. Хатта үҙенең шәхси тормошо, ғаилә рәхәте тураһында ла уйлай белмәй. Йәш түгел бит инде. Утыҙҙы ҡыуалай. Ә ҡатын-ҡыҙҙан йәш малай ишкелле ҡаса. Бында ҡыҙҙар үҙен бик күҙләргә тырышып ҡарайҙар ҙа — һис тә эштәре барып сыҡмай. Үҙе беҙҙең ғаиләгә бала кеүек эйәләшеп алды. Бушаған ваҡытта килеп, балалар менән уйнап, сәй эсеп китә. Улым кеүек ул миңә. Әле бер көн икебеҙ генә ҡалғас, уға быға хәтле бер нисә тапҡыр башлап та яуапһыҙ ҡалған һорауымды тағы ҡабатланым.*

*— Ниңә һин, Хәмит, өйләнмәйһең? Былай ҡыйын бит,— тим. Ул йәш егеттәр шикелле ҡыҙарынып-бүртенеп бик оҙаҡ өндәшмәй ултырҙы ла:*

*— Өйләнер өсөн яратырға кәрәк бит. Ә мин уҙ ғүмеремдә малай ғына сағымдан бер ҡыҙҙы яраттым. Һаман да уны ғына яратам, тик ул мине, аяҡһыҙ ҡалғас, яратманы,— тине лә башын баҫты. Ул ҡыҙҙың кем, ҡайҙа икәнен белергә тырышып биргән башҡа һорауҙарым бөтәһе лә бушҡа ғына булды. Унан бүтән һүҙ ала алманым.*

*Сәлимә, яңылышмаһам, һин мәктәптә Хәмит менән берге уҡығайның шикелле. Ошо хәтле һәйбәт кешенең мөхәббәтенә баһа бирмәй йөрөгән ҡыҙ кем икән ул? Белмәйһеңме? Мин ул ҡыҙҙы эрләп хат яҙыр инем...»*

Бына ошо һүҙҙәр Сәлимәнең йөрәгенә рух, йән өрҙөләр. Күҙ асып йомғансы ул ҡайтанан тыуҙы. Үҙен элекке, Хәмитте фронтҡа оҙаткан кистәге, кеүек йәш, шат, бәхетле тойҙо. Бала шикелле осоноп:

— Китәм шунда, Фатима апайҙар янына врач булып китәм, әсәй! — тип ҡабатланы.

Шәмсиә апай, әсәләргә генә хас һиҙгерлек менән, ҡыҙының, йөрәгендә нимә ятҡанын, ни өсөн ҡыҙының быға са бер кемде лә яратмауын шунда уҡ аңлап алды. Ҡыҙын янына тартып ултыртты ла йомшаҡ ҡына итеп сәстәренән һыйпаны.

— Бар, балам, бәхетле бул!

Сәлимә Алтайға китергә теләп яҙған ғаризаһын йыртты ла «Эн» МТС-ына ебәреүҙе һорап ҡайтанан яҙҙы. Унан әсәһен тағы бер ҡосаҡлап үпте лә йүгереп сығып китте.

— Әсәкәйем, матурым, мин районға китәм!..— Шатланып йылмайып ҡуйҙы.

Әсә йәшләнгән күҙҙәрен халат еңе менән һөртйя--ал11.ы..

— Хәйерле, юл, балам, хәйерле юл!..^ """"

*1954, август.*

БИБЛ... 24011

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

БЕРЕНСЕ БҮЛЕК . . . . . . . . 3
ИКЕНСЕ БҮЛЕК . . . . . . . . 150
МӨХӘББӘТ *(ХИКӘЙӘ)* . . . . . . . . 277

Литературно-художественное
издание

БИИШЕВА Зайнаб Абдулловпа

# У БОЛЬШОГО ИКА

РОМАН

***(на башкирском языке)***

Редакторы *М. С. Игебаева*
Рәссамы *И. С. Фапрушин*
Художество редакторы *В. П. Ковалев*
Техник редакторы *Н. Я. Зарипова*
Корректоры *Ә. Н. Әсәҙуллина*

ИБ № 4293

Ңаборға бирёдде 18,12.89. Баçырға ҡул ҡуйылды 22.10.90. Ҡағы? форматы 84Х10*'/32. Ҡадаыу ысуд нёнән баçылды. Тип ҡағыҙы № 2. Әҙәби гарннтура. Шартлы баçма таб. 15,12. Шяртлы буяу йтт. 16,38, Учет.изд. таб. 16.98. Тиражы 30 000 экз. Заказ 761. Хаҡы I hуи 20 тия.

Башҡортостан кнтап нәшрнәте, 450000, Өфө-үҙөк,
Совет ураыы, 18.
Башкнрское книжное издательство, 450000, Уфа-центр,
ул. Советская. 18.

Башҡорт АССР-ы Нэшриэттәр, полиграфи» һәм китал сауҙаhы
эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты.
450001. Өфө, Октябрь проспекты, 2.

**1 һум 20 тин**

Өфө
Башҡортостан китап нәшриәте

